Ағиҙел

Өфө,
июль
2010

7(1047)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

Баш мөхәррир

Әмир ӘМИНЕВ

Мөхәрририәт:

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

Редакция хеҙмәткәрҙәре:

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды • һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.07. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 706 экз. Һатыуҙа хаҡы иректе. Заказ № 2.0091.10.

Беҙҙең адрес: 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
Наш адрес: 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2010 (7, 1047)

БЫЛ ҺАНДА:

Бөтә донъя башҡорттарының III ҡоролтайынан

Мортаза Рәхимов. Маҡсатыбыҙ – милләтте туплау, яңыртыу
һәм төрлө яҡлап үҫтереү. 6
Мәхмүт Хужин. Башҡорттоң көсө – тамырҙарында. 13

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

Лира Яҡшыбаева. Бөтәбеҙгә бер Ер шары. Повесть. 18
Мәхмүт Хужин. Яңғыҙ сағыл. Эссе. *Башы.* 62

ШИҒРИӘТ

Марис Нәзиров. Йәнем асыҡ яңы йырға. Шиғырҙар. 134
Рамай Ҡаһир. Аҙашҡан ел. Шиғырҙар. 139
Риф Дауыт. "Йөрәктән үтә һымаҡ..." Шиғырҙар. 146

"Ағиҙел"дә ҡунаҡта – Яңауыл яҙыусылар ойошмаһы

Фәрит Суфияров. Ижад дәрте менән. **Әхнәф Мазһаров,**
Фәрит Суфияров,Ҡаһим Әүхәтов, Фәүәзит Әхмәтшин,
Венера Ҡаһирова. Шиғырҙар. 153

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

Рим Исхаҡов. Шағирҙың ижад артылыштары. 157

ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

Гөлкәй Сәмерханова. Башҡорт мәҫәлдәре. 166

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

Ғайса Хөсәйенов. Шағирҙың ҡулъяҙма әҙәби
мираҫына ҡарата *(Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 130 йыл)*.
Мәжит Ғафури. Күңел. Шиғырҙар. 173
Земфира Таһирова. Иҫтәлектәрендә – кәрәкле мәғлүмәт
(Сәләх Кулибайҙың тыуыуына 100 йыл). 177

БАШҠОРТ ХӘТЕРЕ

Марат Ҡолшәрипов, Әмир Юлдашбаев. Дан-абруйы
халҡы күңелендә. 179

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

В НАШЕМ НОМЕРЕ:

Материалы III Всемирного курултая башкир

М. Рахимов. Цель – сплотить, возродить и всесторонне развивать нацию.
М. Хужин. Сила башкира – в его родословной.

ПРОЗА

Л. Якшибаева. Для всех один Земной шар. *Повесть.*
М. Хужин. Заветный косогор. *Эссе.* Начало.

ПОЭЗИЯ

М. Назиров, Рамай Кагир, Риф Даут *(стихи)*.

В гостях у «Агидел»и – Янаульская писательская организация

Ф. Суфияров. С творческим вдохновением. **А. Мазгаров, Ф. Суфияров, К. Аухатов, Ф. Ахметшин, В. Кагирова** *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

Р. Исхаков. Взлетные перевалы поэта.

ТЕОРИЯ ЛИТЕРАТУРЫ

Г. Самерханова. Башкирские притчи.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

Г. Хусаинов. Находки из литературного наследия *(130 лет со дня рождения Мажита Гафури)*.
Мажит Гафури. Душа *(стихи)*.
З. Тагирова В его воспоминаниях – ценная информация *(100 лет со дня рождения Саляха Кулибая)*.

ПАМЯТЬ БАШКИРА

М. Кульшарипов, А. Юлдашбаев. В благодарной памяти народной.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

Телефондар:
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Бөтә донъя башҡорттарының III ҡоролтайынан

10–11 июндә Өфө ҡалаһының Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Бөтә донъя башҡорттарының III ҡоролтайы эшләне. Башҡорт халҡының оло йыйыны мәшһүр «Урал» – милли гимны менән асылды.

Ҡоролтайға Рәсәй Федерацияһының 34 төбәгенән, Белоруссия, Украина, Балтик буйы илдәре, Мысыр, Израиль, Италия, Ҡытай, Япония, АҠШ-тан 823 делегат килгәйне. Юғары ҡунаҡтар: Рәсәй Федерацияһы Федерация Советының Федерация эштәре һәм төбәктәр сәйәсәте комитеты рәйесе Рәфҡәт Алтынбаев, Дәүләт Думаһының Федерация эштәре һәм төбәктәр сәйәсәте комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Галина Изотова, Төркиәнән Әхмәтзәки Вәлидиҙең улы, профессор Субидәй Туған, Татарстан Дәүләт Советы Рәйесе Фәрит Мөхәмәтшин һәм башҡалар ҙа Ҡоролтай эшендә ҡатнашты.

Ҡоролтай ултырышын башҡорт телендә Башҡортостан Республикаһы премьер-министры Раил Сарбаев алып барҙы.

Йыйында ҡатнашыусылар тәүҙә халҡыбыҙҙың II һәм III ҡоролтайҙар араһында вафат булған шөһрәтле һәм аҫыл ул-ҡыҙҙарын: Мостай Кәрим, Раил Кузеев, Әхмәт Лотфуллин, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Ғәли Хәмзин, Нәжибә Мәксүтова, Зиннур Ураҡсин, Рим Янғужин, Ғәзим Шафиҡов, Ғөбәйҙулла Илешев, Ибраһим Абдуллин, Харис Йосопов, Роберт Байымовты бер минут тын ҡалып иҫкә алды.

Ҡоролтайҙы асыу хоҡуғы Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы –Ҡоролтай депутаты Рауил Бикбаевҡа бирелде.

– Башҡортостанда күп быуатлы тарихы, үҙенсәлекле мәҙәниәте һәм көслө ихтыяры булған халыҡ йәшәй,– тине ул. – Башҡорт халҡы милли үҙаңды, мәҙәниәтен һәм үҙаллылығын нығытыу өсөн күп көс һалған. Ата-бабаларыбыҙға изге ер, туған тел һәм тиңдәшһеҙ моң-көй өсөн сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

Йыйындың 10 июндә үткән пленар ултырышында төп доклад менән Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Азамат Ғәлин сығыш яһаны. Артабан һүҙҙе Федерация Советы исеменән Рәфҡәт Алтынбаев, Дәүләт Думаһынан – Галина Изотова, Татарстандан – Фәрит Мөхәмәтшин, Рәсәй Мосолмандары диниә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин, Төркиәнән – Субидәй Туған, Өфө дәүләт нефть-техник университеты профессоры Айрат Зарипов, «Киске Өфө» гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева һ.б. алды.

11 июндә Ҡоролтай делегаттары 11 секцияға бүленеп эшләне. 1000-дән ашыу компетентлы белгес ерҙән файҙаланыу, демократия, Рәсәй федерализмы, милли матбуғат, милли мәғариф, башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, эшҡыуарлыҡ һ.б. мәсьәләләр буйынса фекер алышып, йыйын ҡарауына резолюциялар әҙерләне. Секциялар эшмәкәрлеге тураһында дөйөм мәғлүмәтте Ҡоролтай иғтибарына БДУ профессоры Марат Ҡолшәрипов еткерҙе.

12 июндә Ҡоролтай делегаттары Ишембай районына барҙы. «Салауат йыйыны» башҡорт халҡы өсөн изге ҡомартҡы – Торатау янында уҙғарылды. Байрамдағы сығышында БР Президенты Мортаза Рәхимов III ҡоролтайға йомғаҡ яһаны, республиканың Рәсәйҙә үҫешкән һәм тотороҡло төбәк буласағына, милләт-ара татыулыҡ һаҡланасағына ышаныс белдерҙе.

МАҠСАТЫБЫҘ – *МИЛЛӘТТЕ ТУПЛАУ, ЯҢЫРТЫУ ҺӘМ ТӨРЛӨ ЯҠЛАП ҮҪТЕРЕҮ*

*Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовтың Бөтә донъя башҡорттарының III ҡоролтайындағы сығышы**

Тыуған Башҡортостаныбыҙ, сал Урал тауҙары йырҙарында данланған, шаулап урмандар үҫкән, икһеҙ-сикһеҙ далалары йәйрәп ятҡан, саф һыулы йылғалары сылтырап аҡҡан боронғо төбәгебеҙ һеҙҙе шатланып ҡаршылай. Шәйехзада Бабич әйтмешләй, «шунда тыуған, шунда үҫкән башҡорт атлы арыҫлан».

Тарих юлдары ҡатмарлы, ул тигеҙ генә булмай. Башҡорт халҡы быуаттар буйы үҫешендә күпте күреп, күпте кисергән, бик күп нәмәгә өлгәшкән. Быуаттар дауамында ул иң мөһим мәсьәләләрҙе ҡоролтайҙа тикшергән. Ата-олатайҙар васыят итеп ҡалдырған ҡоролтайҙар милләтте берләштереүҙең мөһим формаһы булып, килешеп, ҡарарҙар ҡабул итеү өсөн үҙенең иң абруйлы вәкилдәрен йыйған.

Тап дүрт быуат ярым элек халыҡтың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуы тураһында ихтыяры белдерелгән. Тап ҡоролтайҙарҙа кешеләр ғәҙелһеҙлеккә һәм милли иҙеүгә ҡаршы бергәләп сығыш яһау өсөн һөйләшеп килешкән. Тап ошондай йыйылыш ҡарарҙары менән XX быуат башында республикабыҙ – федератив Рәсәйҙең беренсе автономияһы барлыҡҡа килгән.

Беҙ башҡорт халҡының был күркәм традицияһын уңышлы тергеҙеүебеҙ менән ғорурланабыҙ. Һуңғы 15 йылда беҙҙә Бөтә донъя башҡорттарының III ҡоролтайы үткәрелә. Ысын мәғәнәһендә тарихи ваҡиға менән һеҙҙе ихлас ҡотлайым! Бөгөн элекке ҡоролтайҙарҙа ҡатнашҡан иҫке дуҫтар һәм үҙ халҡының вәкиле булыу кеүек юғары бурысты тәүге тапҡыр үтәүселәр осрашты. Бында беҙ башҡарылған эштәрҙе баһалай, фекер һәм тәжрибә уртаҡлаша, борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып тикшереп, иң мөһиме – артабанғы үҫеш юлдарын билдәләй, киләсәккә яңы бурыстар ҡуя алабыҙ.

Уҙған йылдарҙа Башҡортостан бик күп үҙгәрештәр кисерҙе. Беҙгә башҡа төбәктәрҙән һәм сит илдәрҙән килгән делегаттар ыңғай үҙгәрештәрҙе асыҡ күрәлер, тип уйлайым. Тамырынан ижтимағи үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда республикабыҙ үҙ иҡтисади һәм рухи ҡеүәтен һаҡлап ҡалыу ғына түгел, уны күпкә арттырыуға өлгәште. Ә иң мөһиме – халыҡтың тормошон һиҙелерлек яҡшырта алды. Үҙ ваҡытында башҡорттар рус халҡы һәм Урал-Волга буйының башҡа халыҡтары менән Рәсәй дәүләтселеген бергәләп ойоштороҙо. Рәсәй менән бергәлек – башҡорт халҡының яҙмышында артабанғы тупланыу һәм үҫеш өсөн нигеҙ булып хеҙмәт иткән мөһим боролош. Ошондай аңлы ҡарар ҡабул итеүе арҡаһында халҡыбыҙ үҙ-үҙен, үҙ телен һәм мәҙәниәтен һаҡлап ҡалған. Рәсәйҙә беҙ берҙәмлек һәм яңы ысын ватандаштар таптыҡ. Эйе, XVII һәм XVIII быуаттарҙа башҡорттар күп тапҡыр үҙҙәренең законлы хоҡуҡтарын яҡлап ихтилалға күтәрелә. Ләкин был хәрәкәттәр, нигеҙҙә, Рәсәйгә ҡаршы түгел, ә ул йылдарҙағы төрлө намыҫһыҙ әҙәмдәрҙең башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрен баҫып алыуына ҡаршы йүнәлтелгән була.

Беҙ һәр ваҡыт башҡорттарҙың һәм Башҡортостандың башҡа халыҡтарының Рәсәй дәүләтен һәм уның үҫешен яҡлауға индергән өлөшө менән ғорурланабыҙ,

---

*Ҡыҫҡартып алынды.

элекке һәм бөгөнгө Ватанға намыҫлы хеҙмәт итеү өлгөләрен күрәбеҙ. Был юбилей йылында беҙ ҡан ҡойошло алыштарҙа үҙенең батырлығы һәм ҡаһарманлығы, тылда фиҙакәр хеҙмәте менән Тыуған илебеҙҙең азатлығын яҡлап алып ҡалған, бөтә донъяға 1945 йылғы Бөйөк Еңеүҙе яулаған быуындар иҫтәлегенә хөрмәт күрһәтәбеҙ!

Рәсәй армияһында күп алыштарҙа ҡатнашҡан башҡорт атлыларының хәрби батырлығы – Рәсәй тарихының бер өлөшө. Илдә 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығы менән бәйле тантаналарға әҙерлек башланды. Ә бит башҡорт батырҙарының был һуғыштағы ҡаһарманлыҡтары хаҡында тарихсылар ғына яҡшы белә. Шуға күрә йәмәғәт берекмәләренә, киң мәғлүмәт сараларына яңы быуындарҙы ватансылыҡ рухында тәрбиәләү өсөн был факттарҙы киңерәк файҙаланырға кәрәк.

Үҙ тарихыңды, халыҡ тәжрибәһен ата-олатайҙарыбыҙ ҡалдырған бөйөк рухи-әхлаҡи ҡиммәт тип баһаларға кәрәк! Рәсәйҙең намыҫын һәм данын тәшкил иткән башҡорт халҡының ҡайһы бер ул һәм ҡыҙҙарының исемдәрен атап үтәм. Халҡыбыҙҙың символы – легендар Урал батыр артынса беҙ ысынбарлыҡтағы тарихи эшмәкәрҙәрҙе – боронғо Әйле ырыуынан сыҡҡан XII-XIII быуаттарҙағы данлыҡлы төрки шағиры Ҡол Ғәлиҙе, берләшкән 12 башҡорт ырыуы менән етәкселек иткән Мәсем хан һәм аяуһыҙ Сыңғыҙ хан алдында башҡорт хоҡуҡтарын яҡлаған Мөйтән бей кеүек хакимдарҙы иҫкә алабыҙ. Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыу тураһында халыҡ яҙмышы өсөн хәл иткес ҡарар ҡабул иткән ырыу башлыҡтары Ҡәнзәфәр бей, Тәтегәс бей һәм башҡалар; Рәсәй армияһы сафында яуҙарҙа ҡатнашҡан герой-яугирҙар – Петр I походтарында дан алған Алдар Иҫәнгилдин, Наполеонды еңеүселәр – Ҡаһым түрә, Йәнтүрә, Абдрахман, Аҡъегет; халыҡ азатлығы һәм хоҡуҡтары өсөн көрәшкән Сәйет, Күсем, Батырша, Кинйә Арыҫланов, һоҡланғыс яугир һәм шағир Салауат Юлаев; XVII быуат Рәсәйенең тәүге нефть сәнәғәтселәренең береһе Надир Уразмәтов һәм Санкт-Петербургтағы Тау институтына нигеҙ һалған Исмәғил Тасимов; тәрән аҡыл эйәләре, дини эшмәкәрҙәр шәйех Зәйнулла Рәсүлев һәм мөфтөй Ризаитдин Фәхретдинов; шағирҙар һәм мәғрифәтселәр Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәм Мифтахетдин Аҡмулла ла – улар рәтендә.

Уҙған XX быуат та тарихи шәхестәргә бай булды. Рәсәй федерализмын яҡлап көрәшеүсе, Башҡорт йөмһүриәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, бар донъяға билдәле ғалим-төркиәтсе Зәки Вәлиди, бөйөк шағирҙар һәм яҙыусылар Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Мостай Кәрим, Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары Муса Гәрәев, генерал Миңлеғәли Шайморатов, Шакирйән Мөхәмәтйәнов һәм Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин; рәссамдар Ҡасим Дәүләткилдиев һәм Әхмәт Лотфуллин; композиторҙар Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов; тәүге башҡорт балеринаһы Зәйтүнә Насретдинова һәм бар донъяға билдәле балет артисы Рудольф Нуриев. Һәм башҡа бик күп әҙәбиәт һәм сәнғәт, фән һәм техника эшмәкәрҙәре, сәйәсмәндәр һәм етәкселәр, спортсылар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, данлыҡлы хеҙмәтсәндәр һәм яугирҙар.

Рәсәй һәм Башҡортостан тарихына рус, татар, сыуаш, мари һәм башҡа күренекле мәҙәниәт вәкилдәренең исемдәре лә яҙылған. Быларҙың барыһы ла – беҙҙең дөйөм мираҫыбыҙ, уртаҡ байлығыбыҙ! Шуның менән бергә, ниндәйҙер сәйәси маҡсаттарҙа эшләнгән төрлө тарихи уйҙырмаларға башҡорт халҡы ҡәтғи «юҡ!» тип әйтә. Мәҫәлән, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы эшмәкәрҙәре Салауат Юлаев, Әхмәтзәки Вәлиди Туған, Муллайән Халиҡовы, Шәһит Хоҙайбирҙин һәм башҡаларҙың яҡты иҫтәлеген бысратырға тырышыу осраҡтары булды. Бындай әҙәпһеҙлек менән килешеү мөмкин түгел, үткәндәребеҙҙе артабан да ҡәҙерләргә кәрәк!

XX быуат үҙе менән хәүеф һәм ғәрәсәттәрҙе лә аҙ алып килмәне. Башҡорт халҡының ябай булмаған тарихында 70 йыллыҡ совет осоро ла бар. Үкенескә ҡаршы, ҡайһы бер эшмәкәрҙәр өсөн был ваҡытҡа тарихтың «ҡара упҡыны»на ҡараған кеүек мөнәсәбәт күрһәтеү ыңғай күренешкә әйләнеп бара. Минеңсә, быңдай ҡараш – хәҡиҡәтте тупаҫ боҙоу. Унан бигерәк, был халыҡты кәмһетә. Башҡорт халҡының йөҙҙәрсә мең ул һәм ҡыҙы тап ошо осорҙа матур белем алды. Улар юғары мәҙәниәтле уҡытыусылар, табиптар, сәнәғәт предприятиелары директорҙары һәм механизаторҙар, юғары уҡыу йорттары профессорҙары, ҙур сәйәсмәндәр, хәрби начальниктар, әҙәбиәт һәм сәнғәт оҫталары булып китте. Унар, йөҙәр мең кешенең матур тормош юлы формалашты!

Башҡортостан халҡы үҙенең ҡаһарман хеҙмәте менән башлыса аграр булған төбәкте ҡеүәтле индустриялы республикаға әйләндерҙе. Революцияға тиклем беҙҙә юғары технологиялы машиналар эшләү һәм нефть химияһы, эре төҙөлөш һәм транспорт комплекстары юҡ ине. Юғары белем һәм академия фәне, күп һанлы милли зыялылар ҙа булманы. Хәҙер беҙҙә быларҙың бөтәһе лә бар!

1917 йылға тиклем Рәсәйҙең сәйәси картаһында «Башҡортостан» төшөнсәһе бөтөнләй осраманы. Ул халҡыбыҙ йөрәгендә генә яна ине. Ә хәҙер Рәсәй Федерацияһының сәйәси картаһынан Башҡортостан Республикаһын бер ниндәй кризис һәм «һынылыш» та һыҙып ташлай алмаясаҡ. Шуға күрә бөгөн милләтте тергеҙеү тураһында һөйләргә кәрәкмәй. Алдыбыҙға III мең йыллыҡта башҡорт халҡының артабанғы үҫеше тураһында мәсьәләне ҡуйырға кәрәк! Һәр яңы дәүер халыҡ алдына яңы бурыстар ҡуя. Бөгөн яңы шарттар тыуҙы, беҙҙең республика, башҡорт милләте үҫешенең, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы эшмәкәрлегенең яңы проблемалары алға сыға. Тап шуға күрә XXI быуатта башҡорт халҡының үҫешен нисек күҙаллауымды билдәләп үтергә теләйем.

Бөгөн беҙгә йәнә шуны аңлау һәм иҫәптә тотоу мөһим: хәҙерге башҡорттар – ул милләт кенә түгел, юғарыраҡ кимәлдәге берлектең – күп милләтле Башҡортостан халҡының органик өлөшө лә. Үткән йылдар эсендә беҙҙең төбәктәге бар этнос һәм халыҡтар вәкилдәренән торған республика халҡының берҙәм төбәк берлеге формалашты. Ошондай процестар Рәсәй буйынса ла әүҙем барһын ине, тигән теләктәбеҙ!

Беҙҙә ул республика дәүләт власы органдарының маҡсатлы һәм фиҙакәр сәйәсәтенең һөҙөмтәһе булды. Бар милләттәрҙе лә тиң хоҡуҡтар менән тәьмин итергә тырыштыҡ. Беҙ Башҡортостандың төп халыҡтары телдәрендәге матбуғат баҫмаларына ярҙам иттек, күп һанлы милли-мәҙәни берекмәләрҙе үҫтерҙек, ҡайһы бер традицион дини байрамдарҙы дөйөм байрамға әйләндерҙек. Ҡарағыҙ, беҙҙә күпме халыҡ-ара фестивалдәр, конкурстар үткәрелә, йыл һайын «Салауат Юлаев көндәре», «Аксаков көндәре», һабантуйҙар, шәжәрә һәм башҡа матур байрамдар ойошторола. Милләт-ара татыулыҡ һәм хеҙмәттәшлек ижтимағи аңдың нигеҙенә әйләнде. Халҡыбыҙҙың күп быуатлыҡ тарихы, ғазап сигеп яуланған дәүләтселегебеҙ ошо турала һөйләй.

Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туғандаш ғаиләһендә сәскә атыусы хәҙерге Башҡортостан – бына нимәнән ғибәрәт бар башҡорт халҡының ғорурлығы, бына нимә тураһында уның уй-ғәме, хәстәрлеге. Был беҙҙең асылыбыҙ, һәм икенсе, ниндәйҙер үҙенсәлекле идеялар эҙләү кәрәкме икән? Башҡортостан дәүләтселеге республикалағы бар халыҡтарҙың тормошон яҡшыртыу, уның ресурстарын мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу, башҡорт милләтенең үҙ аллы үҫеше кеүек фундаменталь, үҙ-ара бәйле мәсьәләләрҙе хәл итергә мөмкинлек бирә. Шул уҡ мәлдә беҙ яңы ысынбарлыҡты – милләт-ара никахтарҙың артыуын, йылдам миграция ағымын,

Башҡортостандың дөйөм Рәсәй иҡтисади, ижтимағи һәм сәйәси процестарына ылыҡтырыла барыуын иҫтә тоторға бурыслыбыҙ.

Булған ҡаҙаныштарыбыҙҙы анализлағанда «уңыштан баш әйләнеп» китмәһен ине. Һәр халыҡ яулап алған ҡаҙаныштарын һаҡлай белергә лә бурыслы! Һәм уларҙы яҡлау ғына түгел, артабан үҫтерергә лә кәрәк. Һәр саҡырыуға тиң, иң мөһиме – аҡыллы яуап табырға өйрәнеү мөһим. Башҡорт халҡы алдында торған бындай саҡырыуҙар бөгөн аҙ түгел! Ошоноң менән бәйле, башҡорттарҙың артабанғы этник тупланышын тәьмин итеүҙең зарурлығын иң тәүге маҡсаттарҙың береһе, тип иҫәпләйем.

Ҡайһы бер эшмәкәрҙәрҙең «ысын» һәм «яһалма» башҡорттар, кемдеңдер йоғонтоһона эләккән башҡорттар һ.б. нәмә тураһында фекер йөрөтөүен ишетеү оялдыра. Бындай фекер әйтеү – тәрбиәһеҙлек, аңлап етмәү һөҙөмтәһе. Аңлашылып тора, бер ниндәй тел үҙенсәлеге, айырымлығына ҡарамаҫтан, күңелең менән башҡорт икәнеңде тояһың, аңлайһың икән, тимәк, һин – башҡорт. Эш шунда: тәбиғәттә бер төрлө генә милләт юҡ, ә тулы оҡшашлыҡ башҡаларҙан айырымланған ваҡ халыҡтарҙа ғына булыуы мөмкин!

Төньяҡ һәм көньяҡ француздар менән сағыштырғанда, мәҫәлән, көнбайыш һәм көнсығыш башҡорттарында тел, мәҙәниәт һәм көнкүреш буйынса айырмалар күпкә кәмерәк. Әммә донъяла берәү ҙә француз милләтенең берҙәмлегенә шикләнмәй! Германияла Бавария халҡы саксондарҙан ҡырҡа айырыла, ләкин унда ла «ысын» һәм «яһалма» немецтар тураһында һүҙ ҡуйыртмайҙар! Бер этноста тел һәм мәҙәниәт төрлөлөгө – уның юғары кимәлдәге үҫешенә дәлил, һәм уға ғәҙәти хәл тип ҡарарға кәрәк. Был бит ыңғай процесс! Үҫешеүҙән туҡтаған этнос юғала – быны хәтерҙә тоторға кәрәк. Был хәрәкәт милли интеллигенция үҫеше, һәр төрлө мәҙәни йәшәйеш формалары, йәшәүгә һәләтле йолалар һәм традициялар аша бара.

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү – мөһим мәсьәлә. Башҡорт халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә, «Теле юҡтың – иле юҡ, иле юҡтың – көнө юҡ». Республикабыҙҙа титуллы милләт телен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн күп эшләнә. «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» закон, дөйөм алғанда, теүәл үтәлә. Беҙҙә үҫешкән милли матбуғат селтәре бар, «Юлдаш» телевидениеһы популярлыҡ яулай. «Ҡурай» һәм «Туған тел» милли музыка каналдары, «Юлдаш», «Шәреҡ», «Ашҡаҙар» радиолары һәм башҡалар ойошторолған. Башҡорт интернаттары, лицейҙар, мәктәптәр һәм балалар баҡсалары асыла.

Статистика йәһәтенән барыһы ла яҡшы һымаҡ. Шулай ҙа үҙебеҙ алдында ғәҙелерәк булайыҡ. Күрелгән сараларға ҡарамаҫтан, башҡорт теленең ҡулланылыу даирәһе тар. Башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙы яҙҙырыусылар һиҙелерлек кәмей, һәм был өлкәлә уйланылған, комплекслы саралар кәрәк. Федераль мәғариф стандартында төбәк компонентын бөтөрөү ҙә милли мәғарифтың бәкәленә һуҡты. Әммә хикмәт бында ғына түгел!

Милли телде, традицион халыҡ мәҙәниәтен көсләп, үрҙән «күрһәтмә буйынса» биреп булмай! Әгәр ҡала йәки ауылдағы башҡорт ғаиләһе туған телендәге гәзит-журналды яҙҙырырға, балаларын милли мәҙәниәт рухында тәрбиәләргә, башҡорт теленә өйрәтергә теләмәй икән, бында дәүләт нисек ярҙам итә алһын? Шуны беләм: бында йәмғиәт үҙе, бигерәк тә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, башҡорт йәмәғәт ойошмалары, милли-мәҙәни үҙәктәр әүҙемлек күрһәтергә бурыслы. Дәүләт менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләргә кәрәк, тәнҡитләргә, һөйләнергә түгел. Әйҙәгеҙ, яңы мәғлүмәт технологияларын, электрон сараларҙың мөмкинлектәрен киңерәк ҡулланайыҡ.

Икенсе яҡтан, арттырып ебәрергә лә ярамай. Туған телде лә онотмай, әүҙемерәк рус телен, шулай уҡ сит телдәрҙе – Европа һәм Көнсығыш телдәрен

үҙләштерергә кәрәк. Халыҡ әйткәнсә, «Бер ҡул менән төйөн бәйләнмәй!» Беҙҙең республика өсөн, кәм тигәндә, өс телде, йәғни туған телде, рус һәм сит ил телен белеү бик ҡулай буласаҡ. Күп тел белеү – артыҡ түгел, ә ҙур байлыҡ, башҡорт халҡының XXI быуаттағы ҙур өҫтөнлөгө!

Бөгөн башҡорт халҡының үткәнен тарихи тикшереүгә дәүләт кимәлендә ярҙам күрһәтелә. Күптән түгел «Башҡортостандың тарихи-мәҙәни атласы», «Башҡорт энциклопедияһы» күп томлығының биш томы, фундаменталь «История сёл и деревень Башкортостана» китабы, «Башҡорт халҡы тарихы»ның I томы әҙерләнде. Беҙҙә тыуған яҡты өйрәнеү буйынса баҫмалар бер ҡасан да былай күпләп сығарылманы!

Башҡорт мәҙәниәте, әҙәбиәте һәм сәнғәтенә, ижади интеллигенцияға ярҙам итеү – беҙҙә дәүләт сәйәсәте кимәлендә. Ижади коллективтарыбыҙ Европа, Азия һәм Американың иң яҡшы сәхнәләрендә уңышлы сығыш яһай. Улар күп илдәрҙә тамашасылар күңелен яулаған. Республикабыҙҙың мәҙәни сәйәсәте глобалләштереүҙе артабан да бер төрлөлөк итеп түгел, ә «мәҙәниәттәрҙең глобаль симфонияһы» тип ҡараясаҡ.

Илебеҙҙең башҡа төбәктәрендә йәшәгән башҡорттарға иғтибарыбыҙ артты. Уларҙың мәнфәғәте республиканың иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештәрен киңәйткәндә, килешеүҙәр төҙөгәндә иҫәпкә алынды. Бәйләнештәр, берлектәге саралар күбәйҙе. Әммә үҙебеҙгә тәнҡит күҙлегенән ҡарайыҡ, ҡайһы бер кире күренештәрҙе һаман да еңеп сыға алманыҡ. Башҡа төбәктәрҙәге башҡорттарҙың тел, рухи-мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә бәйле ҡыйынлыҡтар бик йыш осрай. Йәштәрҙең бер өлөшө мәҙәни үҙенсәлеген юғалтҡан. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы был мәсьәләләр менән ныҡышмалыраҡ шөғөлләнергә бурыслы, тип иҫәпләйем!

Борсолорлоҡ башҡа мәсьәләләр ҙә бар. Донъяның башҡорт халҡы тураһында халыҡ ансамблдәре һәм музей күргәҙмәләре аша ғына белеүе менән килешә алабыҙмы? Башҡорт халҡы заман менән йәшәүсе, даими үҫешеүсе милләт булырға тейеш. Беҙ үткәндәр хаҡындағы иҫтәлектәр менән генә йәшәй алмайбыҙ. Иң мөһим ваҡиғалар – алда, тип ышанам. Маҡсатыбыҙ – бар милләтте яңыртыу!

Үкенескә ҡаршы, рухи-мәҙәни тормошта һуңғы арала үҙ-үҙебеҙҙе тынысландырыу билдәләре күҙәтелә. Беҙҙә бик шәп мәҙәниәт, фән һәм мәғариф учреждениелары бар, әммә талантлы драматургтар, режиссерҙар, актерҙар, композиторҙар, йырсылар һәм ғалимдар аҙ. Ысынлап та, фән докторҙары, Рәсәй һәм бар донъя күләмендә тикшеренеүселәре булмаған тиҫтәләгән фән йүнәлешен атарға мөмкин. Ижади бәхәстәр, аналитик тәнҡит, ғилми һүҙ көрәштереү, шиғыр кисәләре, музыкаль лекторийҙар, сәнғәт әһелдәренең халыҡ менән осрашыуҙары һирәгәйҙе.

Әйтергә кәрәк, киләсәк – юғары рухи-мәҙәни ҡиммәттәр булдырған, компьютерҙар етештергән, Ер юлдашын Йыһанға сығарған, генетика серҙәренә төшөнгән, атом серен асҡан милләттәр ҡулында. Халыҡты сәнәғәт, фән һәм кәсептәргә өйрәтеү менән шөғөлләнеү фарыз. Йәштәр араһында һәләтлеләрҙе һәм гений осҡоно булғандарҙы табыу мөһим.

Ҡәҙерле иптәштәр!

Бер нисә йыл рәттән үҙәк киң матбуғат саралары үлемдең тыуымдан юғарылығы менән бәйле борсоулы демографик хәл хаҡында фекер йөрөтә. Быуаттар араһындағы статистика ил халҡының йылына уртаса миллионға тиклем кәмеүен сағылдырғайны! Үкенескә ҡаршы, бөгөн милли йөкмәтке буйынса беҙҙә рәсми иҫәп алып барылмай. ЗАГС органдарында 30 процентҡа яҡын яңы тыуған сабыйҙың ата-әсәһе тыуыу тураһында таныҡлыҡтарҙа балаһының

милләтен күрһәтмәй. Әммә ғалим-демографтарҙың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, беҙҙең халыҡта тыуым үлемдән күберәк. Ғүмер оҙонлоғо ла арта. Рәсәй һәм Волга буйы федераль округы буйынса демография күрһәткестәре Башҡортостанда – иң яҡшыларҙан. Әммә был ыңғай күренештәрҙе нығытырға ла кәрәк!

Башҡорттарҙа тыуым уларҙың башҡорт булыуына түгел, ә күбеһенең ауыл халҡы булыуына бәйле. Ә ауылдарҙа беҙҙең көндәрҙә лә күп балалы ғаиләләр – һирәк күренеш түгел. Ләкин урбанизация күренештәре бик күп йүнәлеш буйынса етеҙ алға бара, ҡалала йәшәүсе башҡорттарҙа ла тыуым ҡотолғоһоҙ кәмей. Ҡайһы берәүҙәр демографик мәсьәләне күскенселәр иҫәбенә хәл итергә тәҡдим итә. Әммә быны алым төп сара була алмай! Рус, татар, сыуаш һ.б. халыҡтар кеүек үк, башҡорттар ҙа үҙебеҙҙең ерҙә, беҙҙең йорттарҙа ейәндәребеҙ, бүләләребеҙ йәшәүен теләй. Юғиһә, тормоштоң мәғәнәһе юғала. Халҡыбыҙҙа әйтелгәнсә, «Балаһыҙ ғүмер – һүнгән күмер».

Демографик сәйәсәтте яҡшыртыу өсөн нимә эшләй алабыҙ һуң? Әлеге ҡаҙнаара мөнәсәбәттәрҙе төбәк кимәлендә хәл итеүе ауыр, әлбиттә. Шулай ҙа нимәлер эшләргә мөмкин. Өс төп нәмәне билдәләйем:

– беренсенән, киң мәғлүмәт саралары, мәҙәниәт, мәғариф һәм фән учреждениелары ярҙамында йәштәрҙе ғаилә ҡиммәттәре рухында тәрбиәләү мөһим. Ғаилә, бигерәк тә күп балалы ғаилә культын булдырырға кәрәк. Ҡыҙҙар һәм егеттәргә йәш саҡтағы вайымһыҙ, ғәмһеҙ тормоштоң мотлаҡ яңғыҙ ҡартлыҡҡа килтерәсәген аңлатырға;

– икенсенән, ауылға комплекслы ярҙам сәйәсәтен дауам итеү, унда ҡала тормошонан кәм булмаған йәшәү шарттары тыуҙырыу. Ауыл – халыҡ традицияларын һаҡлаусы һәм милләттең демографик резервы;

– өсөнсөнән, беҙҙең РФ Дәүләт Думаһындағы, Йәмәғәт палатаһындағы вәкилдәребеҙҙән кәрәкле федераль закондарҙы ҡабул итеү буйынса тәҡдим индереүҙәрен талап итергә. Һөҙөмтәле демографик сәйәсәттең ил кимәлендә булыуы мотлаҡ. Бында ҡоро һүҙ һәм саҡырыуҙар ғына аҙ! Йәш ғаиләләргә аҡса менән дә, торлаҡ менән дә ярҙам итергә кәрәк.

Ошоноң менән бәйле йәнә бер мөһим фекеремде еткерергә теләйем. Беҙҙең халыҡ дәүләткә һалышыуҙан ни тиклем тиҙерәк арынһа, шул тиклем яҡшыраҡ буласаҡ! Балаларҙа бәләкәйҙән үк үҙаллылыҡ, йүнселлек, белем алырға ынтылыш һәм камиллашыу тойғоһо тәрбиәләгеҙ. Ғаиләлә һәм уҡыу йорттарында тәрбиә системаһы талапсанлыҡ, уҡыуға һәм буласаҡ һөнәреңде һайлауға етди ҡараш булдырыуға нигеҙләнергә тейеш. Тормоштан рухһыҙлыҡ, ялҡаулыҡ һәм үҙ ихтыяжын ғына ҡәнәғәтләндерергә ынтылыуҙы эҙмә-эҙлекле бөтөрөргә кәрәк!

Хөрмәтле делегаттар һәм ҡунаҡтар!

Башҡорт халҡы хәҙер күтәрелеш осоро кисерә. Башҡортостанды инновацион үҫеш нөктәһенә, бөтә Рәсәйҙе яңыртыу усаҡтарының береһенә әүерелдереү үҙебеҙҙән тора. Рухи элита милләттең ижади көсөн ижад итеүгә йүнәлтергә бурыслы. Ошо залда ултырыусыларҙың һәр береһенең бурысы! Беҙгә үҙ технополистарыбыҙ һәм фән ҡаласыҡтарыбыҙ кәрәк. Бының өсөн дәүләткә ҡарамаған биш йыллыҡ милли үҫеш пландары талап ителәсәк. Беҙҙең яҡындағы стратегик маҡсат – Башҡортостанды алдынғы төбәккә әйләндереү, Рәсәй Федерацияһын яңырыу лидерҙары иҫәбенә индереү. Иманым камил, был – республикабыҙ өсөн хәлдән килерлек бурыс!

Беҙ һеҙҙең менән ҡасандыр бөтә илгә яңғыраған «Рус түгелмен, ләкин россиянмын!» тигән һүҙҙәрҙе яҡшы хәтерләйбеҙ. Үтелгән йылдар был ысын мәғәнәһендә тапҡыр әйтелгән хәҡиҡәтте ҡабатларға тулы хоҡуҡ бирә, сөнки хәҙер үҙгәргән республика һәм ил, федератив Рәсәй дәүләтселегенә ысынбарлыҡҡа әйләнде. Беҙ Рәсәйҙең социаль-сәйәси тотороҡлолоҡҡа өлгәшеүен, иҡтисади үҫеш темптарын,

донъя кимәлендә абруйы һәм йоғонтоһо күтәрелеүен юғары баһалайбыҙ. Әммә төбәктәргә ҡарата хәҙерге сәйәсәттең етди ҡаршылыҡтарын да күрмәй булмай. Әгәр Федерация субъекттарының киң үҙаллығы шарттарында уларҙың күптәре ярайһы уҡ уңыштарға өлгәшһә, бөгөн иһә кәрәгенән артыҡ үҙәкләштереү, федерализмдың төп ҡанундарын һанға һуҡмау күренештәре лә үҙен һиҙҙерә.

Быға миҫал булып түбәндәгеләр тора:

– төбәктәр менән килешмәйенсә, телдәр тураһында федераль законға Рәсәйҙә инде ныҡығынып өлгөргән, йәш быуынды үҙ халҡы теленә һәм мәҙәниәтенә ылыҡтырыу буйынса хоҡуҡи нигеҙҙәрҙе юҡҡа сығарыусы өҫтәмәләр ҡабул итеү;

– федераль үҙәк менән төбәктәр берлектә алып барған өлкәләрҙә, федераль нормаларҙа төбәктәргә закон сығарыу өсөн урын ҡалдырмаған закондар сығарыу ғәмәлен индереү;

– федерация субъекттарының закондар сығарыу башланғысын даими һанға һуҡмау һ.б.

Беҙ бөгөн донъя финанс-иҡтисади кризис эҙемтәләрен бөтөрөү һәм тиҙләтелгән, комплекслы яңырыу сәйәсәтенә күсеү юлында, ил социаль-сәйәси үҙгәрештәрҙең сираттағы этабына аяҡ баҫыуын аңлайбыҙ. Үҫештең яңы йүнәлештәре һәм маҡсаттары, уларға ирешеүҙең яңы механизмдары билдәләнә. Бындай шарттарҙа илдең берҙәмлеген ныҡытыуҙа, үҙәк һәм төбәктәр мәнфәғәттәренең тигеҙлеген тәьмин итеүҙә үҙ һөҙөмтәлелеген күрһәткән конституцион федерализм ҡанундарынан ситкә тайпылмау айырыуса мөһим. Ғалимдар, сәйәсмәндәр бөгөн дәүләтселек, уның формалары һәм федерация шарттарында үҫеш юлдары тураһында күп яҙа. Рәсәй үҫешенең хәҙерге этабында башҡорттар һәм республиканың башҡа халыҡтары өсөн дәүләтселек – ул ил Конституцияһы статьяларындағы вәкәләттәр һәм статус ҡына түгел. Был иң элек – дөйөм ҡағиҙәләр шарттарында тағы ла юғарыраҡ һөҙөмтәләргә өлгәшеү мөмкинлеге. Был – республиканың федераль ҡаҙна алдында түләү һәләтлелеге, эске социаль-иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн реаль ресурстар. Хәҙерге производствоны, эшҡыуарлыҡты, инвестициялар баҙарын үҫтереүҙе, ҡаҙна хеҙмәткәрҙәренең, ветерандарҙың, аҙ тәьмин ителгән граждандарҙың инфраструктура һәм финанс тәьмин ителешен күҙ уңында тотам.

Әлбиттә, дөйөм Ватаныбыҙҙың бөтөнлөгөн ныҡытыуҙы кире унитаризмға төшөү иҫәбенә эшләргә ярамай. Был – үтелгән юл. Ил өсөн көслө үҙәк тә, үҙ аллы ныҡлы төбәктәр ҙә, федератив мөнәсәбәттәрҙе артабан камиллаштырыу ҙа мөһим. Беҙ Рәсәйҙең киләсәге федерализмда булыуҙы иҫбатлауҙан туҡтамаясаҡбыҙ. Артабан да күп милләтле Рәсәйгә илдең милли-дәүләт берәмектәрен өҫтөн ҡуйған көслө дәүләт сәйәсәте кәрәк!

Башҡорттарға хас маҡсатҡа ынтылышлылыҡ, белемгә, изгелек һәм ғәҙеллек идеалдарына ынтылыу арҡаһында Башҡортостан киләсәктә лә бөйөк Евразия державаһы сифатында аяҡҡа баҫҡан Рәсәй Федерацияһында лайыҡлы урын биләр, тип ышанам! Беҙҙең өҫтөнлөк – милләт-ара хеҙмәттәшлек! Беҙҙең маҡсат – республиканы һәм милләтте яңыртыу! Бына ни өсөн беҙ иртәгәһе көнгә ышаныс менән барабыҙ!

Мөхтәрәм туғандар!

Беҙ өлгәшкән ҡаҙаныштарыбыҙға, милләт-ара татыулыҡҡа таянып, ышаныслы алға барабыҙ. Шуға күрә лә Башҡортостаныбыҙҙың именлегенә, сәскә атыуына ныҡлы ышанабыҙ. Башҡорт халҡы башҡа милләттәр менән быуаттар буйына бер туғандай матур ғүмер итә. Дуҫлыҡ – уртаҡ хазинабыҙ. Өсөнсө йыйын халыҡ хәтерендә оло байрам булып ҡаласаҡ. Делегаттар дәүләт һәм милләт мәнфәғәттәрен сағылдырған ҡарарҙар ҡабул итер, тип ышанам.

Башҡорттоң көсө – тамырҙарында

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты тарафынан 2002 – 2010 йылдарҙа атҡарылған эштәр һәм алдағы бурыстар тураһында отчет яһау өсөн һүҙ комитет рәйесе вазифаһын башҡарыусы Азамат Ғәлинға бирелде. Ярты сәғәтлек телмәрендә ул башҡорт халҡының Рәсәй тарихындағы роле һәм урыны, бөгөнгө проблемаларға айырыуса туҡталып үтте. Яңы быуат башында Мәскәү сәйәси даирәләре тарафынан үткәрелгән «власть вертикален нығытыу»ға ҡағылып, оратор, милли республикаларҙың Советтар хакимлыҡ иткән йылдарҙа тартып алынған матди һәм рухи ҡиммәттәрен суверенитет тураһында декларациялар ҡайтарып бирергә тейеш ине, тип билдәләне. Суверенитет – сәйәси сепаратизмға ауаздаш түгел, ул дуҫтар араһында бер-береңә ышаныу. Бөгөнгө глобалләшеү шарттарында Рәсәй Федерацияһы үҙен халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таныған федерализм шарттарында ғына һаҡлап ҡала ала. Беҙгә халыҡтарҙың үҙенсәлеген һәм ҡиммәтен баһалай белгән, уларҙың берҙәм федератив ҡоролошта үҙ дәүләтселеген кире ҡаҡмаған Рәсәй кәрәк. Рәсәйҙең башҡаса булыуы мөмкин түгел! Федерализм – сәйәси уйын, көсһөҙлөк билдәһе түгел. Беҙ АҠШ та түгел. Шуға күрә Рәсәй өсөн милли-территориаль федератив дәүләт – берҙән-бер юл. Халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғын бер кем дә тыйып тота алмай.

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, – тип дауам итте Ғәлин,– республикаларҙың конституцион хоҡуҡтарын юҡҡа сығарырға тырышыу күренештәре йышая. Ундай көстәр республикала ла үҙен һиҙҙерә. Ләкин милли дәүләтселеге һаҡланмай икән, башҡорт халҡын да һаҡлап ҡалыу мөмкин булмаясаҡ. Рәсәй Федерацияһының хәҙерге президенты Дмитрий Медведевтың федерация субъекттары башлыҡтарын һайлаусылар тарафынан һайлатып ҡуйҙырыу кеүек конституцион хоҡуҡты тергеҙергә йыйыныуы шатлыҡлы күренеш, әлбиттә, – тине артабан сығыш яһаусы. – Шул уҡ ваҡытта Федерация Советында ла төбәк башлыҡтары эшләү ғәмәлен кире ҡайтарыуҙы хәстәрләү мөһим.

А. Ғәлиндың, 450 йыл буйы башҡорт халҡы Рәсәй мәнфәғәттәре өсөн хеҙмәт итте, ҡорбандар бирҙе, Ватанға ихтирамды иҫбатлау өсөн тағы ниндәй дәлилдәр кәрәк, тигән һүҙҙәренә Федерация Советы вәкиле Рәфҡәт Алтынбаевтың сығышы ла ауаздаш, хатта көсәйтә төшә. «Башҡорт халҡы Рәсәй үҫешенә ҙур өлөш индерҙе, – тип билдәләне депутат. – Был илдең донъя дәүләттәре алдындағы абруйын үҫтерҙе. Башҡорттарға ғорурланыр урын бар: бында бар халыҡтар тыныс йәшәһен өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған. «Рәсәй менән – мәңгегә!» тигән саҡырыуҙы һәр ерҙә лә күрергә тура килгәне юҡ әле».

Ошо уҡ фекерҙәрҙе Дәүләт Думаһы вәкиле Галина Изотова ла ҡеүәтләне. «Мортаза Рәхимовҡа аҡыллы сәйәсәт алып барған өсөн түбәнселек менән баш эйәм,– тип хатта тойғоларға ла бирелеп китте. – Үкенескә ҡаршы, бөгөн Рәсәйҙә быңдай сәйәсмәндәр аҙ». Артабан депутат киләсәктә төбәктәрҙе үҫтереү сәйәсәтенә, стратегик планлаштырыу, финанс ағымдарын үҙгәртеү буйынса эш алып барылыуы, хоҡуҡтарҙы ҡайтанан ҡарау тураһында ла үҙ фекерҙәрен еткерҙе. «Бөгөн төп ауырлыҡ муниципаль өлкәлә,– тине Изотова. – Уларҙың финанс мөмкинлектәре тар булыу күп мәсьәләләрҙе хәл итергә ҡамасаулай».

– Рәхәтләнеп тыңлап ултырам,– тип башланы сығышын Татарстан ҡунағы Фәрит Мөхәмәтшин. – Телебеҙ һәм динебеҙ генә түгел, проблемаларыбыҙ ҙа уртаҡ икән.

Беҙ быйыл Татарстан Республикаһының ойошторолоуына 90 йыл тулыуҙы билдәләнек,– тип дауам итте оратор. «Ниңә кәрәк инде ул?» – тип шик белдереүселәр ҙә булды. Кәрәк, сөнки был – тарих, хоҡуҡтар алған ваҡиға һәм уны республикала йәшәүселәрҙең белеүе мотлаҡ.

Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар, аҙ ҙа етә, күп тә бөтә,

туғанлыҡҡа ни етә, тигән мәҡәлдәрҙе лә иҫкә төшөрөп, Мөхәмәтшин ике республикаға бер төптән эш итеү кәрәклеген белдерҙе.

Рәсәй Мосолмандары диниә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдиндың сығышы ил өсөн уртаҡ һәм әһәмиәтле проблема – ғаиләнең абруйын тергеҙеүгә бағышланды. Был айырыуса ғаилә башлығы булараҡ атайҙың ролен күтәреүгә ҡағылды. «Рәсәйҙә бөгөн 1 миллион ҡарауһыҙ бала бар,– тине мөфтөй. Улар Башҡортостанда ла аҙ түгел – 20 мең. Мосолман руханиҙары әхлаҡ, әҙәп мәсьәләләре буйынса лайыҡлы эш алып бара, әммә уларҙың ғына көсө етеңкерәмәй».

Быйыл күренекле сәйәсмән һәм Көнсығыш тарихы буйынса абруйлы белгес Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыу уңайы менән Ҡоролтайға уның улы Субидәй Туған да саҡырылғайны. Уның сығышы атаһы һәм уның хеҙмәттәштәре, бөгөнгө Төркиә менән Башҡортостан араһындағы дуҫлыҡ ептәре хаҡында һөйләүгә арналды.

«Республикабыҙҙың хоҡуҡтары элекке автономия хәлендәгенән дә нығыраҡ тарайҙы,– тип белдерҙе Өфө дәүләт нефть-техник университетынан философия фәндәре докторы Айрат Зарипов. – Республикала федераль кимәлдәге чиновниктар армияһы артты, уларҙың беренсе етәкселәрен Мәскәү сит төбәктәрҙән килтереп ҡуя. Яңы етәксе артынан бихисап «үҙ кешеләр» эйәреп килә. Был, әлбиттә, беҙҙе, башҡорттарҙы кәмһетә». Артабан оратор һуңғы йылдарҙа тәғәйенләнгән «Мәскәү кадрҙары»н һанап үтте: БР Юғары суды рәйесе, БР прокуроры, эске эштәр министры, Һалым инспекцияһы начальнигы, Федераль именлек хеҙмәте етәксеһе, Арбитраж суд рәйесе... Был, әлбиттә, осраҡлы күренеш түгел, ә алдан уйланылған сәйәсәт. Һайлаусыларҙың ғәмәлдә федераль парламентты һайлап ҡуйыуҙан ситләштерелеүе, төбәк башлыҡтарын тәғәйенләп ҡуйыу, мәғарифты төбәк компонентынан мәхрүм итеү кеүек күренештәр был хаҡта шикләнергә урын ҡалдырмай, тип йомғаҡланы ғалим.

Учалы районы башҡорттары делегаты Спартак Ильясовтың да фекерҙәре тулыһынса ошо юҫыҡта ине. «Бөгөн Рәсәйҙә федератив мөнәсәбәттәрҙең юҡҡа сығыуы күҙәтелә,– тине ул. – Үҙәктең төбәктәрҙе талауына халыҡ тәрән асыу белдерә. Беҙ «Берҙәм Рәсәй» фирҡәһенең үҙ халҡына ҡарата алып барған сәйәсәтен аңламайбыҙ». Делегаттың сығышы конституцион нормаларға мөрәжәғәт итеп, дәлилдәр менән нығытылды. Мәҫәлән, РФ Конституцияһының 9-сы статьяһында әйтелеүенсә, ер аҫты байлыҡтары урындағы халыҡҡа файҙа килтерергә тейеш. Ғәмәлдә байлыҡтан тар даирәләр генә файҙалана.

– Республиканың нигеҙе булып башҡорт халҡы тора,– тип тамамланы Ильясов сығышын. – Президент та башҡорттарҙан булырға тейеш!

Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге проблемалар буйынса Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаеваның сығышы фәһемле булды. «Тәмәке тартыу буйынса, – тине депутат, – Рәсәй донъяла беренсе урынды биләй. Был проблема хәҙер үсмерҙәр араһында киң таралған күренешкә әүерелеп бара. Беҙгә сәләмәтлектең юғары культураһын тәрбиәләү менән шөғөлләнеү етмәй».

Ҡаҙағстан Республикаһынан «Ағиҙел» башҡорт үҙәге рәйесе Азамат Ырыҫкилдин фекеренсә, Башҡортостан ерендәге байлыҡ менән башҡорттар донъяла иң бай халыҡ булырға тейеш ине. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитетында абруйлы, ихтыярлы һәм теләһә ҡайһы власть шарттарында ла үҙ юлынан тайпылмай эшләрлек кешеләр булыуы кәрәк. Кемдәр беҙҙең тарихты боҙоп күрһәтергә маташа, улар өҫтөнән енәйәт эше ҡуҙғатырға. Делегат фекеренсә, Ҡоролтай башҡорттарҙың иң юғары органы булыуы мотлаҡ, ә Башҡортостан Республикаһы түгел, сөнки һуңғыһы үҙе яҡлауға мохтаж. Шуға күрә һәр башҡорттоң, республика минең өсөн нимә эшләне, тип түгел, ә, мин республика өсөн ни эшләнем, тип уйланыуы кәрәк. Фирҡәләр ни тиклем генә демократик булмаһын, башҡорт халҡына ни кәрәклеген белмәй. Уны беҙ үҙебеҙ генә беләбеҙ.

– Тиҫтәләрсә йылдар буйы татарса уҡытыу башҡорттарҙың кәмеүенә килтерә,– тип Пермь крайы, ғөмүмән, республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең проблемаһын ошо төбәк башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рәсил Мөхәмәтшин ике ауыҙ һүҙ менән асып һалды. – Беҙгә милли рухты уятырға, туған телдә уҡытыуҙы ныҡлы яйға һалырға кәрәк.

Ҡоролтайҙың секциялар советы рәйесе, БДУ профессоры Марат Ҡолшәриповтың сығышы ҡыҫҡа, әммә тос булды.

– 11 секция документтарын әҙерләүҙә,– тине ул,– 1247 кеше ҡатнашып, 76-һы, шул иҫәптән 58 делегат, фекер алышыуҙарҙа сығыш яһаны.

Артабан резолюцияларҙа сағылыш тапҡан мөһим пункттарға туҡталып, оратор, федератив мөнәсәбәттәр урынлаштырмай тороп, күп милләтле Рәсәй халыҡтар проблемаларын хәл итә алмаясаҡ, тип билдерҙе. Башҡортостанда федераль чиновниктар бер нисә тапҡырға артты. Был хәлгә сик ҡуйырға тырышыу әлегә күренмәй. Унитарлаштырыу сәйәсәте социаль-иҡтисади, сәйәси-мәҙәни өлкәләрҙә кире күренештәргә килтерәсәк. Артабан да ошондай процесс дауам итә икән, беҙгә, башҡорт халҡының үҙбилдәләнеше хоҡуғына таянып, БР Конституцияһының 1993 йылғы редакцияһын тергеҙергә кәрәк буласаҡ. Берҙәм Рәсәй милләте әүәләүгә ынтылыш иң элек мәғарифта сағылыш тапты. Төбәк компонентын (милли телдәрҙе уҡытыу – **М. Х.**) алып ташлау телдәрҙең тиң хоҡуҡлылығы ҡанунын боҙа.

Һаулыҡ һаҡлауға ҡағылып, сығыш яһаусы, был тармаҡ өҫтөнлөклө булып ҡалырға тейеш, тип билдәләне һәм төп иғтибарҙы сәләмәт тормош өлгөһөн пропагандалауға йүнәлдерергә саҡырҙы. Артабан М. Ҡолшәрипов, ҡала мөхитендә башҡорттарҙың ассимиляцияға бирелеүенә туҡталып, был өлкәлә ниндәй проблемалар барлығын 14 – 25 октябрҙә үтәсәк Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре күрһәтәсәген әйтте.

Финанс-иҡтисади кризис шарттарында милли баҫмаларҙы уҡыусылар һиҙелерлек кәмене, тип билдәләнде, мәҫәлән, «Яңы тарихи шарттарҙа милли матбуғат: үҫеше һәм перспективалар» секцияһында. Берәүҙәр матбуғатҡа яҙылыуҙың яңы өлгөләрен ҡулланырға, конкурстар, призлар уйнатырға кәрәклеге хаҡында фекер йөрөтһә, икенселәр милли рухты уятыу, өсөнсөләр Интернет селтәрен һөҙөмтәлерәк файҙаланырға саҡырҙы. Рәсәй почтаһының баҫмаларҙы таратыуға хаҡты ҡайырып алыуын да билдәләнеләр. Сит өлкәләрҙә башҡорт телендә нәшер ителгән гәзиттәргә ярҙам итеү кәрәклеге хаҡында ла фекер алышыу булды.

Ҡоролтай делегаттары Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведевҡа мөрәжәғәт ҡабул итте. «Башҡорттар борон-борондан донъяуи мәсьәләләрҙе йыйындарҙа тикшергән, – тиелә унда. – Бынан 450 йылдан ашыу элек Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылып, улар ил мәнфәғәте менән йәшәгән, Ватанын яҡлап ҡан ҡойған, уға намыҫлы хеҙмәт иткән. Беҙ шуны яҡшы беләбеҙ: Рәсәй ышаныслы алға барһын өсөн ижтимағи дуҫлыҡ, халыҡтарҙың бергәләп ижад итеүе мотлаҡ. Ҡыҙғаныསҡа ҡаршы, федераль кимәлдәге милли сәйәсәт һүҙҙә генә бар, ә матбуғат саралары иһә Рәсәйҙең милли күп төрлөлөгөн бөтөнләй инҡар итә. Беҙ ҡайһы бер даирәләрҙә алып барылған «губерналаштырыу» сәйәсәтенә ҡырҡа ҡаршы, сөнки ул XVI быуатта уҡ беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың Рус дәүләтенә эске идаралыҡты үҙ ҡулында тотоу, ергә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлау кеүек шарттарға ҡаршы килә. Федераль законға үҙгәреш индереү һылтауы менән уҡытыуҙың төбәк компонентын мәғариф стандартынан алып ташлау менән федератив дәүләттә бер нисек тә килешеп булмай».

Мөрәжәғәттә шулай уҡ федераль үҙәктең кадрҙар сәйәсәте менән дә ҡырҡа килешмәү хаҡында әйтелә. Етәкселәрҙе халыҡ ышанысын аҡларҙай, республиканы яҡшы белгән кешеләр араһынан ҡуйырға кәрәк. Башҡортостан һалым түләүселәренән йыйылған килеменең 60 проценттан ашыуының федераль ҡаҙнаға оҙатылыуы менән бәйле мөрәжәғәттә, был федератив ҡанундарға ҡаршы килә һәм кисекмәҫтән төҙәтелергә тейеш, тигән фекер үткәрелә.

Ҡоролтай шулай уҡ Башҡорт халҡына ла мөрәжәғәт ҡабул итте. «Беҙҙең уртаҡ уйҙарыбыҙ, хыял-маҡсаттарыбыҙ башҡорт халҡы менән бәйле. Иң изге теләктәребеҙ, өмөттәребеҙ киләсәгебеҙҙең төп нигеҙе һәм көсө – туған халҡыбыҙға бағышлана,– тиелә Мөрәжәғәттә. – Ҡоролтайҙа яңғыраған ҡарарҙар, теләктәр башҡортмон тигән һәр башҡортҡа, дуҫлыҡ һәм татыулыҡты хуп күргән башҡа милләт вәкилдәренә, ил башлыҡтарына барып етһә ине. Хәҙерге шарттарҙа милләттең үҙен һаҡлай һәм яҡлай алырлыҡ көс-һәләте барлығын иҫкә төшөрөү фарыз. Ул һәр башҡорт кешеһе мотлаҡ үтәргә бурыслы ҡағиҙә-ғәмәлдәрҙән, ҡанундарҙан тора. Шуны үтәй алһаҡ, халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты һәм өмөтлө буласаҡ.

Беренсе бурыс – тарихыңды өйрәнеү аша милли үҙаңды уятыу. Бөгөн һәр халыҡ үҙен боронғораҡ итеп күрһәтергә ынтыла, сөнки боронғоһо менән ғорурланған халыҡты берәү ҙә еңә алмай. Оҙон ғүмерле булыуыбыҙ башҡорттоң Уралда формалашып, уны бер ҡасан да ташлап китмәүенә, шулай уҡ тарихи хәтерҙең быуындан-быуынға һаҡланып килеүенә бәйле. Беҙҙең көс – тамырҙарыбыҙҙа, сөнки ата-бабаларыбыҙҙың киләсәк быуындар ҙа һоҡланырлыҡ тарихи ғәмәлдәре етерлек.

Башҡортостандың сағыштырмаса һил йәшәүе иң элек титуллы милләттең башҡаларҙы аңлап, кисереп, түҙеп йәшәй алыуынан килә. Республиканың нигеҙен тәшкил иткән милләткә иғтибар һис шикһеҙ күберәк булырға тейеш, сөнки донъяла башҡорттарҙың үҙ-үҙен һаҡлай һәм үҫтерә торған бүтән иле, ере юҡ. Ҡасандыр бүтән ҡәүемдәр үҙ төйәген ошонда тапҡан һәм ошо ерҙең төп халҡы уларҙың милли һәм социаль ихтыяжына аңлы ҡараш менән йәшәй икән, башҡалар ҙа төп халыҡҡа шундай уҡ мөнәсәбәттә торорға бурыслы.

Аҫабалыҡ – быуаттар дауамында башҡорттоң ергә хужа булыу хоҡуғы – милләтебеҙҙе һаҡлап, туплап тороусы мөһим фактор булған. Аҫабалыҡтан яҙҙырыу башҡортҡа иң ҙур байлығыбыҙ ер икәнен онотторҙо. Тарихи мөмкинлектән файҙаланып, һәр беребеҙ тыуған еребеҙҙә нимәлер эшләп өлгөрөргә, ергә нығынып ҡалырға бурыслыбыҙ. Кемдер ерҙе һата икән, тимәк, ул башҡорт ерен һата. Ундай кешеләргә түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт булдырғанда ғына был хәлде туҡтатып буласаҡ.

Һәр башҡорттан туған телле башҡорт үҫһен. Туған тел – ул күңел нуры. Ул – беҙҙең ҡан теле, һәр күҙәнәгебеҙ, ҡан тамырҙарыбыҙ, булмышыбыҙ теле. Туған телһеҙ кеше зәғиф. Балаларығыҙ һәм ейәндәрегеҙ ниндәй телдә һөйләшә – шул милләткә хеҙмәт итә. "Урал батыр" кеүек эпосыбыҙ, башҡорт фәлсәфәһе халҡыбыҙҙы мең йәшәр халыҡтар рәтенә ҡуя. Шуға ла бөгөн "Урал батыр" эпосын фәнни яҡтан өйрәнеү үҙе үк башҡорт милли фәлсәфәһенең нигеҙен яҙыу буласаҡ. Беҙгә халҡыбыҙ менталитетына хас иң гүзәл сифаттарыбыҙҙы һаҡлап, нимә менән ғорурланырға, нимәнән ҡотолорға кәрәк икәнде лә билдәләргә кәрәк. Милләттәштәргә үҙ туғаның итеп ҡарарға өйрәнәйек. Был һәр беребеҙгә ҡағыла. Әгәр ҙә һин ниндәйҙер баҫҡысҡа күтәрелгәнһең, дәрәжәле кеше икәнһең, әйләнә-тирәңә күҙ һалырға ла онотма: эргәңдә милләттәш туғандарың бармы, уларҙың һиңә мохтаж булыуҙарын уйлайһыңмы, юғарылыҡҡа уларҙы ла әйҙәйһеңме? Билдәле тәбиғәт ҡанунын иҫеңдә тот: туғанын ҡәҙерләмәгән үҙе лә ҡәҙерһеҙ булыр.

Шәхесен күтәргән халыҡ, үҙен дә күтәрә икәнен онотмайыҡ. Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең остазы итеп Зәйнулла Рәсүлевты атай. Зәйнулла ишан Аллаһы Тәғәлә асылын белеүҙең иң юғары рухи бейеклегенә етеп, “Ҡотоп Заман” титулына лайыҡ булған. Был исем шәхестең Хоҙай тарафынан һайлап алынғанлығын, унның Хоҙайға яҡын вәли зат булыуын аңлатҡан.

Шәжәрә байрамдары – ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең үҙ милли тамырҙарын табыуы, тормошобоҙҙағы ҡапма-ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға бирешмәүе, теленә, диненә һәм еренә тоғро ҡалыуы халҡыбыҙҙың милли үҙаңы үҫешенең асыҡ сағылышы. Әммә әле шәжәрәне башлыса айырым ғаиләләр эшләтә. Тыуған ауыл, ырыу шәжәрәләрен эшләйек. Ауылды берләштереүҙең ошондай шәжәрә төҙөү формаһын бигерәк тә республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайышы төбәгендә файҙаланыу фарыз.

Иң сетереклеләрҙән һаналған төп проблемаларыбыҙҙың береһе – милли кадрҙарҙың аҙлығы. Милли кадрҙар сәйәсәтен дәүләт органдары һәм учреждениелары ғәмәлгә ашырырға бурыслы, һәм беҙгә быны уларҙың иҫенә төшөрөп торорға кәрәк. Был эшмәкәрлек иң элек һөнәри белем алыу өлкәһенә бәйле. 1000 кешегә юғары белемлеләр йәһәтенән йәһүдтәр беренсе булып, яҡут һәм буряттарҙа ул 20 проценттан ашһа, башҡорттарҙа иһә – икеләтә кәмерәк. Халҡыбыҙҙың белем кимәлен күтәреү өлкәһендә беҙгә бөгөн ең һыҙғанып эшләргә кәрәк. Ислам тәғлимәте “Уҡы!” тигән саҡырыуҙан башлана. Һәр башҡорт үҙ туған телендә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырырға, уҡырға, улай ғына түгел, шул баҫмаларҙың уның ихтыяжына яуап бирерлек, һорауҙарына яуап табырлыҡ рух сығанағы булыуына өлгәшеү өсөн уларҙың нәшер ителеүендә ҡатнашырға бурыслы.

Меҫкенлек психологияһын күңелебеҙҙән йолҡоп ташлау мотлаҡ. Бахырланыусылар һәр милләттә бар. Беҙҙекеләр халыҡ исеменән бахырланырға яратыусан булыуы менән хәүефле. Күңелдә китә торған һүҙ – йоғошло сирҙән дә алама. Ялҡаулыҡ, меҫкенлек – кешенең үҙ-үҙен юҡ итеү программаһы ул. Йәштәребеҙ аңына „Һеҙ – республика хужалары, республика, милләт киләсәге һеҙҙең ҡулда” тигән инаныуҙы һалырға кәрәк. Ошо илдең хужаһы икәнһең, тимәк, һин уның яҙмышы өсөн яуаплылыҡты ла үҙ иңеңә алырға тейешһең.

Сығышы менән аҫаба башҡорт вариҫтары булған милләттәштәребеҙҙең 20 проценты тиерлек көнбайыш диалектында һөйләшә. Беҙҙең менән бер төптән сығыуҙарын иҫтә тотоп, көнбайыш башҡорттар менән мөнәсәбәттәребеҙҙе айырым бер программаға нигеҙләп ҡороу зарур.

Халыҡ иҫәбен алыуға һәр башҡорт яуаплы ҡарарға бурыслы. Беҙ күпмегә артыуыбыҙҙы ғына түгел, ә Рәсәй Федерацияһы составында үҙ республикабыҙҙың дәүләтселек идеяһын нығытыу мөмкинлеген дә күҙҙә тоторға тейешбеҙ.

Башҡорттоң көсө – тамырҙарында. Бөгөн Башҡортостан Республикаһы бар икән, ул башҡорт халҡы булған өсөн генә бар. Аллаһы Тәғәлә беҙгә еребеҙҙе һаҡларға, халҡыбыҙҙы яҡларға бурыс йөкмәткән, беҙҙең өҫтән әле лә был яуаплылыҡ төшмәгән. Халҡыбыҙҙың тарихи үҙаңын тергеҙеү, уның милли үҙбилдәләнешкә хоҡуғының тейелгеһеҙ булыуын аңлатыу, ошо нигеҙҙә милләтте уның үтәлешен федераль властарҙан талап итә алыу кимәленә еткереү Ҡоролтай эшмәкәрлегенең төп һөҙөмтәһе булыр, тип ышанғы килә».

Мөрәжәғәттә шулай уҡ динде тергеҙеү, тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт, милләтте биҙәмәгән холоҡтарҙан арыныу, ҡатнаш никахтар, күрше өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттарға туған тел уҡытыу, ауылдарҙағы эшһеҙлек, эшкыуарлыҡ, милли мәғариф һ.б. мәсьәләләр ҙә күтәрелеп, уларҙы хәл итеүҙә дәүләт органдарына йәмәғәтселеккә ышаныс белдерелде.

Мәхмүт ХУЖИН.

Лира
ЯҠШЫБАЕВА

БӨТӘБЕҘГӘ БЕР ЕР ШАРЫ

ПОВЕСТЬ

Кешелек донъяһы үҙенең үҫеше өсөн генә түгел, тотош Ер планетаһының хәле һәм киләсәге өсөн дә яуаплы.

В.И. Вернадский.

Беренсе бүлек

Геология фәндәре кандидаты, Силәбе политехник институты доценты Мөғинов Рафиҡ Камалетдинович Екатеринбургка иртәнге самолет менән килеп төштө. Сәғәтенә күҙ һалды: туғыҙ тула. Симпозиум башланыуға ике сәғәтләп ваҡыт бар әле. Ул кесә телефонынан бер-ике танышына шылтыратты ла, шунда торған эскәмйәгә терәлеп, “Егерме беренсе быуат һәм кешелек донъяһының глобаль тормошҡа күсеүе” тип аталған форумдың план-программаһына тағы бер күҙ һалып алырға булды. Немец ғалимы Эрнест Фейхтвангер телмәренең темаһы тапҡырына еткәс, сарказмлы көлөмһөрәп ҡуйҙы. “Һы-ммм... Башы йомро был әфәнденең: “Глобализация эпохаһында Рур бассейнының тәбиғи ресурстарын рациональ файҙаланыу”. Әллә ҡасан бөткән сеймалды нисек рациональ файҙаланырға итә икән? Әйтерһең, Гитлер бабаһының ошонан ҡаҙып алынған металл менән Рәсәй, Европа халҡын ҡырҙырыуын белмәй. Моғайын, һоранырға әҙерләнеүелер. Беҙҙең бына тигән ҡорамаллы заводтар буш тора, ә һеҙҙә сеймал бар, әйҙә, бергәләп хеҙмәттәшлек итәйек, беҙ инвестор булырбыҙ, тиергә самалай, хәйләкәр”. Рафиҡ Камалетдинович инвесторлыҡты экономик эгоизм тип ҡарай һәм илдә уға юл ҡуйылмаһын өсөн көрәшә. Үҙенең ғалимлыҡ бурысын ул, иң беренсе сиратта, иленә, халҡына, милләтенә янаған хәүефте алдан күреп, уны ваҡытында туҡтатырҙай саралар табыуҙа күрә.

Эйе, Уралға мәңге күҙе ҡыҙҙы немецтың. Арҡайымға ынтылды. Әммә Рәсәй халҡының тыуған еренә булған ҡайнар мөхәббәте яуыз көстәрҙе еңеп сыҡты.

Лира Әхмәт ҡыҙы Яҡшыбаева (1947) – педагогик хеҙмәт ветераны, РФ һәм БР Яҙыусылар союзы ағзаһы, дүрт проза китабы авторы. Өфөлә йәшәй.

Беҙҙең Уралтауҙай хазиналы, бай тау ҡайҙа бар тағы? Борон ата-бабалар һынсыл булған шул, белгәндәр улар ниндәй ерҙәрҙе төйәк итергә! “Ерҙең кендеге лә Уралда” тигән фараз йәшәй ҙәһә ғалимдар араһында. Тимәк, әсә менән бала нисек кендек аша бер-береһенә тоташһа, Галактика Ер планетаһы менән беҙҙең Уралда тоташа булып сыға. Ғәләмәт бит был... Беҙҙең башҡорт халҡы төйәк иткән ерҙең нәҡ кендеккә тура килеүе ғәжәп. Был төбәк Аллаһы Тәғәләнең үҙ ҡурсыулығында, айырым иҫәптә тора тиһәләр, икеләнмәй ышанырға булыр. Тимәк, башҡорттар йәшәгән ерҙәренең ниндәй урын икәнен белгәндәр, шуға күрә ерен, илен баҫҡынсыларҙан ныҡ һаҡлағандар, һәр аҙымы шаһиттар ҡаны менән һуғарылған, ата-бабаларыбыҙҙан аманат булып ҡалған биләмәләребеҙҙе мәңге шулай күҙ ҡараһындай һаҡларға ине лә. Әммә глобализация аҙ һанлы халыҡтар өсөн бик хәүефле. Ә ул бара, бара...

Ғалим, уйҙарынан арынып, сәғәтенә йәнә күҙ һалды ла үтеп барған таксиға ҡул күтәрҙе:

– Урал Фәндәр академияһына!

Еңел машина уны ҡупшы колонналар менән биҙәлгән мөһабәт бина янына килтереп туҡтатты. Мыҡты кәүҙәле, урта буйлы, ҡырҡ йәштәр тирәһендәге ир салондан етеҙ генә төшөп, дәртле аҙымдар менән шунда йүнәлде. Бейек ишектең еҙ тотҡаһына үрелер алдынан ғына Рафиҡтың әлегә тиклем тыныс йөрәге ҡапыл тертләп ҡуйҙы ла ашҡынып тибә башланы. Нимә булды уға? Симпозиумдағы сығышы өсөн борсоламы? Эйе, ул бик сетерекле проблемаларға ҡағылырға йыйына. Халҡы өсөн мөһим хәлдәрҙе ул ошонда сығармаһа, башҡа ҡайҙа һөйләһен? Йәнә ул Урта һәм Көньяҡ Уралда, Көнбайыш Себер тигеҙлегендә күп йылдар геофизик тикшеренеүҙәр алып барҙы. Ғалимдың әйтер фекере байтаҡ. Уның төп маҡсаты – тәбиғәтте вәхшиҙәрсә талауға сик ҡуйыу. Экологик этиканы һаҡлағанда, Ер планетаһының миллиард йылдар дауамына етерҙәй көс-кеүәте, шулай уҡ, аҡыл менән файҙаланғанда, миллиардлаған кешегә етерҙәй ҡулланыу сеймалы, ризыҡландырыу мөмкинселегеге барлығын иҫбатларға йыйына ул. “Тиҙҙән ахырзаман. Ерҙә тормош бөтәсәк”, – тип әҙәм аңын томаларға тырышҡан шарлатан аферистарҙың, дәлилдәр менән раҫланмаған хәбәр һөйләгән скептиктарҙың, урынһыҙ сәбәләнеүсе буш ҡыуыҡтарҙың өнөн тығырға теләй ул. Уларса, йәнәһе, йәһәннәмгә әйләнәсәк Ер шарын ниңә һаҡлап ыҙаланырға? Форсат барҙа типтереп йәшәп ҡалырға! Беҙҙән һуң, әйҙә, ерҙең аҫты өҫкә әйләнеп, зил-зибәр ҡупһын, туфан баҫһын. Рафиҡтың ене һөймәй шундайҙарҙы. Әҙме ни беҙҙең арала демагогтар?

Әлбиттә, әлеге һөмһөҙлөгөн ҡуймай, кешеләр һаман тәбиғәткә аяуһыҙ зыян килтереүҙән туҡтамаһа, бер нисә быуаттан Ер йөҙөндә былай ҙа тереклек ҡалмауы ла, планетаның кибеп ҡорошҡан ҡауынға оҡшап ҡалыуы ла бик ихтимал. Эсер һыуҙар ҡороп, ағастар ҡырҡылып бөтһә, сеймалдары алынып, ер буш көршәк шикелле ҡорғаҡһып ҡалһа, икһеҙ-сикһеҙ сүллеккә әүерелмәҫ тимә ожмахтай планета. Ана, ғалимдарҙың иҫбатлауы буйынса, Сахара сүллеге йылына бер миль (7,464 метр) тиҙлек менән көньяҡҡа күсә бара. Бөгөн кешелек донъяһы ҡорбанына ҡаҙалған ҡан эскес ас талпанды хәтерләтә. “Ҡайҙа ҡарама – вышкалар, шахталар, карьерҙар. Бер килкеһе Ер-әсәнең елек майын һура, икенселәре һөйәген кимерә, өсөнсөләре тереләй тиреһен тунай. Тәбиғәт байлығының исраф ителеүе самаһыҙ. Шул сәбәпле һыуҙар эсеүгә яраҡһыҙ булып бысрана, һауа хаяһыҙ ағыулана, урмандар аяуһыҙ ҡырҡыла. Әллә, юғиһә, Йыһан хужаһы Юғары Көс әҙәми затты артыҡ яратып, самаһыҙ иркәләп шашындырҙымы? Үҙе иһә иркә тинтәктән игелек күрә алмаған ата-әсә хәлендә ҡалдымы? Ергә цивилизация килде. Кешелек донъяһы рәхәтлеккә күсте: ут яҡмай, көйәнтәләп һыуға

бармай, йәйәү йөрөмәй. Хатта икмәктең ҡайҙа үҫкәнен белмәүселәр бар. Тик, ниңәлер, әҙәм балаһы һаман ҡәнәғәт түгел. Пушкин әкиәтендәге балыҡсы ҡарттың әбейеләй булып, нәфсеһе артҡандан-арта ғына бара. Ҡайһы бер шашынған, тәкәббер әҙәмдәр Йыһан хужаһы – Илаһи Заттың алдына килеп тубыкланыуын талап итә башламаҫ тимә. Ә бит бөйөк философтар, аҡыл эйәләре, мәҫәлән, боронғо грек философы, Сократтың уҡыусыһы Антисфен, Антисфендың уҡыусыһы Диоген цивилизацияны бөтөнләй ҡабул итмәгән. Ерҙәге бөтә ғәҙелһеҙлек, кешеләрҙең төрлө сословиеларға бүленеүе цивилизациянан килә, тип уны нык тәнҡитләгәндәр. Шулай уҡ дин әһелдәре лә борон һәр төрлө яңылыкты индереүгә ҡаршы торған. Цивилизация – иблистән, тигән улар.

Әлбиттә, Рафиҡ мистикаға бирелеүсән кешеләрҙән түгел, һәр нәмәгә фәнни ҡарашы, үҙ фекере бар. Бөгөнгө сығышы ла ентекле тикшерелгән мәғлүмәттәргә нигеҙләнә. Әле ҡулындағы папкаһында шуны сағылдырған һандар, таблицалар тупланған. Ғалим ҡиммәтле яҙмаларын, береһе тартып алып ҡуймаһын тигәндәй, ҡуйынына нығыраҡ ҡымтыны. Ул, әлбиттә, бөгөн асыш яһамаҫ, һәр кемгә көндәй асыҡ нәмәләр тураһында һөйләйәсәк.

Фойела таныштары менән осрашып, хәл-әхүәл һораштырғылағансы, конференцзалға саҡырып ҡыңғырау шылтыраны. Ҙур форум эшен башлап ебәрҙе.

– Ер шары – бөтә кешелек донъяһы өсөн уртаҡ йорт ул. Сеймал, тәбиғи ресурстар ҙа – Ер халҡы өсөн уртаҡ байлыҡ, – тип башланы немец ғалимы телмәрен. Уның тел төбөнән Рафиҡҡа барыһы ла аңлашылды. Тимәк, баяғы фаразлауы дөрөҫкә сыға.

Ҡапыл Рафиҡтың ҡолағына иҫ киткес таныш тауыш килеп салынды. Туҡта, туҡта... Кем тәржемә итә уны? Бәй, был Линараның тауышы түгелме? Рафиҡ һағайҙы. Ул ҡәҙерле кешеһенең яғымлы тауышын меңдәр араһынан айырыр ине. Тик бында, халыҡ-ара форумға, Линара нисек килеп сыҡһын, ти. Шунда уҡ тағы икеләнде: ул, бер мәлгә онотолоп, тын да алмай, тағы күңеленә яҡын, танһыҡ тауыштың моңон тыңланы. Йә, Хоҙай, был мөмкинме икән ни? Юҡ, булмаҫ! Ә таныш тауыш һаман Фейхтвангерҙы тәржемә итеүен дауам итте.

Рафиҡ күҙҙәре менән тәржемәсене эҙләне. Ниңә күренмәй? Ниңә, ғәҙәттәгесә, сығыш яһаусы менән йәнәшә тороп тәржемә итмәй? Бая Фейхтвангерҙың темаһы ҡыҙыҡтырғайны, ә хәҙер тәржемәсеһенең тауышы арбаны.

Бер аҙҙан Мөғиновҡа ла сығыш яһарға сират етте. Трибунаға күтәрелгәнсе ул үҙен ҡулға алып өлгөргәйне. Күңелендә бер теләк: халыҡ-ара симпозиум трибунаһын файҙаланып, бер нисә йыллыҡ хеҙмәте һалынған “Егерме беренсе быуатҡа глобаль мөрәжәғәт” тигән сығышын һәр кем күңеленә еткерерлек итеп һөйләргә тейеш ул. Энә күҙәүенән үткәреп тикшерелгән, аргументланған факттарға таянған ғилми хеҙмәтен дәлиллерәк, нигеҙлерәк итер өсөн техник саралар ҡулланды: ҙурайтылған экран аша таблицалар, кәрәкле һандар, тезистар, төрлө фотоһүрәттәр күрһәтте.

– Биосфераны, ноосфераны бысратыуы дауам итә, – тип башланы ул сығышын. – БМО саң ҡаҡҡан, яҡынлап килгән глобаль экологик катастрофа проблемаһы бөтә илдәрҙең тип әйтерлек хөкүмәт етәкселәрен, тәбиғәт ресурстарын үҙ мәнфәғәтенә файҙаланып, байырға тырышыусы айырым индивидуумдарҙы һаман битараф ҡалдыра килә. Глобаль мәсьәләләр БМО-ла ғына түгел, һәр илдә, һәр регион һәм төбәктә ҡаралып, уртаға һалып тикшерелһә генә, беҙ бергәләп маҡсатҡа өлгәшә алырбыҙ. – Ул күп ерҙә глобализацияға мөһим булмаған икенсе дәрәжәләге эш һымаҡ итеп ҡарауҙарын әйтте.

– Беренсенән, Башҡортостан, Татарстан республикалары, Силәбе өлкәһе, уларға яҡын башҡа өлкәләр, шулай уҡ Урта һәм Көньяҡ Урал, Көнбайыш Себер

тигеҙлегенең флораһы һәм фаунаһы нык үҙгәреш кисерә, – тине. Фекерен раҫлаған миҫалдар килтерҙе. – Икенсенән, сеймалға һаҡһыҙ ҡараш, уны мәңге бөтмәҫтәй күреп әрһеҙләү, үҙебеҙҙең технологияны камиллаштырмау, эш урындары булдырмау илде экономик кризисҡа алып киләсәк. Беҙҙең ил өсөн осһоҙ хаҡҡа сеймал һатыу йә алмаштырыу, әҙер тауарҙы ҡиммәт хаҡҡа ситтән һатып алыу – ғәфү ителмәҫлек хата. Үҙебеҙҙә сеймал булған көйө илебеҙҙә миллионлаған халыҡ эшһеҙлектән деградацияға бирелә. Ер аҫты хазинаһын әрһеҙ тәләфләүгә юл ҡуйыла. Көндәлек кәрәк-яраҡтан алып иң юғары технология ҡаҙаныштарына тиклем барыһын ситтән һатып алабыҙ. Үҙебеҙҙең әҙмәүерҙәй ирегеттәр эш эҙләп ситтә байғош ише йөрөй. Бай тәбиғәтле ерҙә йәшәйбеҙ, үҙебеҙ ярлылыҡ сигендә көн күрәбеҙ. Меҫкенлектән сығыу юлы — иҡтисади үҙаллылыҡ...

Ғалимдың халҡы өсөн ысын күңелдән янып-көйөүе телмәренең һәр һүҙендә сағылды. Ул сәғәтенә күҙ һалды ла, бирелгән ваҡыттың әҙ ҡалғанын күреп, иң мөһим тип һанаған фекерен әйтеп ҡалырға ашыҡты:

– Ҡайһы бер ғалимдар глобализацияға тар мәғәнә һалырға тырыша: берәүҙәр уны экологик мәсьәләләр менән генә мәшғүл булырға, икенселәре финанс-иҡтисади проблемаларҙы хәл итергә тейеш, тип ҡарай. Минеңсә, глобализация йәнә һәр халыҡ һәм милләттең мәнфәғәтен, милли телен, рухи үҫешен, йәшәү кимәлен күҙ уңында тоторға тейеш. Милләттәр бөтөү, телдәр ҡороу – глобализация проблемаһы. Тел тамыры ҡороуы – даръялар ҡороуҙан аяныслыраҡ. Ҡайһы бер илдәр тарафынан икенсе илдәргә, уның халҡына ҡарата геноцид пландар, программалар ҡабул ителеүе билдәле, – тине. – Мәҫәлән, Аллен Даллес доктринаһы, “Гарвард проекты” беҙҙең илгә күпме зыян килтерҙе?

Ул аталған программаларҙың йөкмәткеһе буйынса тәрәнгә төшөп торманы, сөнки күптәр был турала хәбәрҙар ине. Оратор конкрет миҫалдар аша аҙ һанлы халыҡтарҙың мәнфәғәтен яҡлап та тос ҡына фекерҙәр әйтеп үтте.

– Иҡтисади эгоизм – геноцидтың бер төрө. Уларҙы һәм колониаль практиканы бөтөрөү – кешелек донъяһының бурысы,– тине. Йомғаҡлау һүҙендә Рафиҡ Камалетдинович тәбиғәт экологияһы менән кеше күңеле экологияһы араһында үҙенсәлекле параллель үткәрҙе. – Бөгөн тәбиғәт ҡырыҫланды, Ер шары ярһый, иламһырай. Балаһынан мәрхәмәт көткән әсәләй аҙарына Ер планетаһы, быны һәр кем тоя, – тине ул, тулҡынланып.– Бәлки, шуғалыр ҙа әле бер, әле икенсе урында ҡурҡыныс ғәрәсәттәр ҡуба. Боронғо дин әһелдәренән, аҡыл эйәләренән килгән инаныу бар: ҡайҙа боҙоҡлоҡ, аҙғынлыҡ – шунда экологик катастрофа. Содом һәм Гоморра ҡалалары фажиғәһе, Везувий вулканынан һәләк булған Помпей һәм Геркуланум ҡалалары зил-зибәре – беҙгә һабаҡ. Тәбиғәткә вәхшиҙәрсә, ҡомһоҙ ҡараш, геноцид, артыҡ нәфсе – шулай уҡ кешелек донъяһын һәләкәткә илтеүсе факторҙар. Шуны белә тороп, беҙҙән миһырбанлыҡ, шәфҡәт көткән планетабыҙҙы һаҡларға ашыҡмайбыҙ. Профессор Хантингтон фекере менән килешәм, бөгөн Ер шарын һаҡлап ҡалыуҙа дин төп көс булып тора. Һыу ҡәҙере шишмә ҡороғас беленә, ти. Әлегә һуң түгел, шөкөр, планетабыҙ имен. Ер-әсәбеҙҙе фажиғәләрҙән һаҡлар өсөн, бөтә донъя халҡы, берләшәйек. Глобализация беҙгә, иң беренсе, планетабыҙҙы һаҡлау өсөн кәрәк. Һәр кем шуны аңлаһын ине. Ер шары бөтәбеҙ өсөн берәү – уны һаҡлайыҡ. Әҙәм балаһы өсөн Ерҙәге тормош бер мәл генә. Планетабыҙ мәңгелек булһын! Шуны хәстәрләйек, дуҫтар!

“Һуңғы әйтелгән һүҙҙәрем, үҙҙәрен ер кендеге һымаҡ һиҙгән ҡайһы бер тәкәббер ғалимдар өсөн тәү ҡарашҡа артыҡ ябай һымаҡ тойолғандыр,– тип уйланы Рафиҡ Камалетдинович, – әммә минең сығыштың тоҙо нәҡ шунда”.

Ә зал ғалимдың сығышын оҡшатты – телмәрендә, бөтә Рәсәй һәм Ер шары проблемаларын күтәреү менән бергә, үҙ милләтен, тыуған ерен, халҡының яҙмышын глобализация кимәлендә күрһәтеүгә өлгәшкән профессорҙы алҡышлап оҙатты.

***

Линара, тулҡынланып, ҡәҙерле кешеһенең трибунаға сығыуын көткәйне... Уны күреп, тауышын ишеткәс, түҙә алманы, күҙҙәренә йәш эркелде. Рафиҡ... Бына һин хәҙер ниндәй икәнһең. Бала сағыңдан Мейәсем тип йән аттың, хәҙер барлыҡ Ер шарын хәстәрләп оран һалаһың.

Балалыҡ дуҫы, мәңгелек мөхәббәте... Күңеле болоҡһоған йәш ҡатындың һағыштан йөрәге әрнене. Рафиҡты күреү, тауышын ишетеү бынан ун ете йыл элек яҙмышында ҡырҡа боролош яһатҡан аяныслы хәлдәрҙе иҫенә төшөрҙө.

...Егет бына-бына һалдат хеҙмәтен тултырып ҡайтырға тейеш ине. Осрашыу көндәрен сәғәтләп һанап йөрөп ятҡанда, көтмәгәндә Линараға Рафиҡтың әсәһе Миңъямал апайҙан хат килеп төштө.

“...Улымды детдом етемәге итер өсөн үҫтермәнем... Яратам тиеүең ысын булһа, унан баш тарт, күҙ нурымдай күреп, ҡәҙерләп үҫтергән баламдың бәхетенә тышау булма. Аңла, һин уға тиң түгел, барыбер бергә була алмаясаҡһығыҙ...” Рафиҡ менән икеһен айырған был хат, нисәмә йылдар үтеп китһә лә, һаман йөрәгендә. Әйтерһең, утлы ҡәләм менән экранға яҙылған яҙыу: һәр һүҙе, һәр хәрефе айырым-асыҡ күҙ алдында. Аяуһыҙ һүҙҙәр бөгөн дә “Һеҙ тиң түгел” тип мейеһен быраулап торғандай.

“Һеҙ тиң түгел...” Ни бары өс кенә һүҙ. Бәлки, ошо өс һүҙ арҡаһында уның йөрәгендә бөтә ауырлыҡтарҙы, юлындағы барлыҡ кәртәләрҙе алып ырғытырлыҡ сәм уянғандыр. Эйе, Линара хәҙер элекке һәр кем рәнйетә алған меҫкен етем түгел инде. Уға бер кем тел тейгеҙергә баҙнат итмәҫ. Үгәй әсәһе Мәйсәрә лә, Рафиҡтың әсәһе Миңъямал да, башҡалар ҙа. Белемгә ынтылды, тырышлығы, фиҙакәр хеҙмәте, әҙәпле холҡо, саялығы арҡаһында үҙе менән бергә эшләгән хеҙмәткәрҙәр араһында абруй яуланы. Берәй яуаплы форумға, йә иһә делегация менән сит илгә барырға кәрәк булһа, хәҙер академияға күберәк ошо булдыҡлы, үҙ эшенә яуаплы ҡараған ғалимәгә мөрәжәғәт итәләр:

– Линара Зәйнулловна барһын, немец, инглиз телдәрен яҡшы белә. Сәнәғәт буйынса ғилемле.

Ни саҡлы тулҡынланған булһа ла, Линара әле үҙен ҡулға алды һәм Рафиҡтың сығышын иғтибар менән тыңланы. Йәш сағында ул бик зирәк, тәбиғәткә иғтибарлы, уйсан, һәләтле, хискә бай егет ине. Уҙған йылдар уның был сифаттарын, ахырыһы, тағы баҙығайтҡан. Рафиҡты яһаған сығышы йәһәтенән үҙ фәне буйынса ныҡ үҫешкән, киң эрудициялы ғалимдар рәтенә индерҙе. Бындай кешенең дошмандары юҡ түгелдер. Ана, Көнбайыш Европа, Төньяҡ Американан килгән глобалистар нимә һөйләй. Имеш, Ер шары бөтәбеҙ өсөн уртаҡ булғас, уның ер аҫты, ер өҫтө хазиналары ла уртаҡ булырға тейеш. Сығыштарҙан күренеүенсә, һәр кем үҙ ҡарашынан сығып аңлата, фекерҙәр айырыла. Ә фекерҙәр айырылһа, ғәҙәттә, фән кешеләре араһында конфликт башлана. Шуға Линара фәндең был яңы тармағына, унан яҡшылыҡ та, яманлыҡ та көтөргә мөмкин тигәндәй, һағайып ҡарай. Төплө фекер йөрөтөргә һәләтле профессор Рафиҡ Камалетдиновичтың донъя кимәлендәге ғалимдар даирәһенә инеүе беҙҙең ил өсөн бик мөһим. Бөгөнгө симпозиумда һөйләгән телмәре менән дә ул киләсәктә үҙ ҡарашын юғары трибуналарҙан тороп әйтеү хоҡуғын алды.

Профессор Эрнест Фейхтвангер һәм уның ҡарашын яҡлаусылар теорияһына ҡарата Рафиҡ урынлы ғына итеп бер-ике һүҙ менән отпор биреп китте. Ҡыйыу

ғалим, тип уйланы Линара. Ҡатындың күңелен һөйгәне өсөн ғорурланыу хисе солғап алды. Үҙендә нисәмә йылдар бысҡып ятҡан хис-тойғоларҙың ҡабат яңырыуын, һағыныуҙары, яратыуҙары тыйып торғоһоҙ ярһыу ташҡынға әйләнеп, таш диуарҙарҙы емерерҙәй ҡөҙрәтле көскә әүерелеүен тойҙо. Әммә тойғоларын теҙгендә тоторға өйрәнгән сабыр ҡатын үҙен ҡулға алырға ашыҡты: хискә бирелер саҡ түгел. Ә күҙгә күренмәҫ хәтирәләр ауы уны үҙ ҡулынан ысҡындырырға теләмәне. Ер экологияһы менән кеше күңеле экологияһы айырылғыһыҙ икәнлекте иҫбатларға теләгәндәй, үткәндәргә әйҙәне лә әйҙәне. Дөрөҫөрәге, ҡолағы менән трибуналағы сығыштарҙы тыңланы, ә уйҙары менән үткәндәргә йүнәлде. Етмәһә, бөгөн ниҙер булырын һиҙенгәндәй, йөрәге ярһып типте.

...Хәтирәләр, хәтирәләр... Симпозиумда сығыш яһаусыларҙы нисек кенә иғтибарлы тыңларға тырышмаһын, ирекһеҙҙән, уйҙары йәнә Рафиҡҡа барып тоташты.

Линара ул саҡта Башҡорт дәүләт университетының сит телдәр факультетында өсөнсө курста уҡып йөрөй ине, ә Рафик – армияла. Һәр һүҙендә кәмһетеү ярылып ятҡан хатты уҡып сыҡҡас, ҡыҙыулыҡ менән башта үҙен мәңге берәү эҙләп тапмаҫтай ергә, Ҡаф тауы аръяғына, ҡасҡыһы килде. Бер ни тиклем тынысланып уйланғас, бәлки, егеттең әсәһе хаҡлылыр, тигән фекер төйнәне. Ысынлап та, һәр кем ғүмер юлдашын үҙ тиңенән, үҙ ҡоронан һайларға тейештер. Борон-борондан матурҙар – матурҙы, байҙар байҙы иш иткән. Донъяға бәхетһеҙ бала булып тыуғас, моғайын, Линара ла үҙе һымаҡ етемәкте иш итергә тейештер. Ни тиһәң дә, даланлы бала булһа, атаһы, әсәһе иҫән көйө тере етем булып, балалар йортонда үҫмәҫ ине лә баһа. Сабый сағынан кәрәкмәгән береһенә лә. Ә Рафиҡ, бөркөттәй талпынып, юғарыға, бик бейеккә осор. Әйҙә, күтәрелһен, әйҙә, ҙур ғалим булһын. Линара уға тышау булмаҫ. Эйе, һөйгәненең әсәһе Миңъямал апай әйткәндәргә ҡаршы килмәҫкә кәрәктер. Әсә фатихаһынан башҡа никахтары, көсләп асҡан күҙ кеүек, файҙаһыҙ булыр. Рәнйетергә ярамаҫ әсә күңелен. Дөрөҫтөр, бәхет өсөн тыуған кешегә тышау булырға ярамаҫ. Шулай уйланы Линара ул саҡ, һәм һөйгәненең яҡты киләсәге хаҡына йәшлек мөхәббәтенән ваз кисергә ныҡлап ҡарар итте. Шул саҡтан алып әлегә тиклем ул үҙен күкрәгенән йөрәге һурып алынған кешеләй хис итә. Ғүмере үтеп бара, ә башҡа берәүҙе ярата, яҡын итә алманы.

Иҫтәлектәр Линараны һаман үҙ ауынан ысҡындырырға теләмәне, Рафиҡҡа бәйле ваҡиғалар, ирекһеҙҙән, хәтеренә төштө лә төштө.

...Бына Рафиҡтың һуңғы хаттарының береһе: “Беҙҙе демобилизацияға әҙерләйҙәр. Ҡайтышлай Өфөгә инермен, көт”. Бер аҙҙан тағы хаты килде. Бында ул Силәбегә Линараны үҙе менән бергә алып ҡайтырға һәм уға өйләнергә теләүен яҙған. Күпме егеттәр дуҫлыҡ тәҡдим итеп тә, береһенә лә күҙ һалмаған, һөйгән егетенә тоғролоҡ һаҡлаған, баш баҫып уҡыуын, китапханаларҙа, лабораторияларҙа ултырыуын, немец, инглиз телдәрен ентекле өйрәнеүен генә белгән ҡыҙ тәҡдимгә ҡаршы түгеллеген аңғартып яуап яҙып өлгөрҙө. Миңъямал апайҙың хатын алмаҫ элек булды был. Ә хәҙер ул Рафиҡҡа ҡамасауламаҫҡа тип үҙ-үҙенә һүҙ бирҙе. Инде һағынып көткән йәре менән осрашмай нисек түҙер, күрәләтә ҡайһылай итеп ҡасып ҡалыр? Шулай ни эшләргә белмәй өҙгөләнеп йөрөгәндә, осраҡлы хәл яҙмышында ҡырҡа боролош яһаны ла ҡуйҙы. Көтмәгәндә ҡыҙға уҡыуын Екатеринбург ҡалаһында дауам итеү мөмкинселеге сыҡты. Яҡшы уҡыуы, немец телен һәйбәт белеүе арҡаһында барып эләкте ул әлеге ҡалаға.

Хәл былай булды. Екатеринбург педагогия институтының сит тел факультеты студенттары менән БДУ студенттары араһында КВН буласағы хаҡында

әйттеләр. Немец телендә таҙа һөйләшкән, йыр-бейеүгә лә маһирлығы булған сибәр ҡыҙҙы командаға алдылар. Бына Екатеринбургка барыу өсөн әҙерлек башланды. Шул саҡ балалар йортонда үҫеп, үҙ яҙмышын үҙе хәстәрләргә өйрәнгән үҙ аллы Линараның башына: "Ә уҡырға Екатеринбург институтына күсеп булмаҫмы?" – тигән уй килде. Линараның бәхетенән, ахырыһы, ярышта БДУ командаһы еңеп сыҡты. Командала үҙен иң әүҙем итеп танытҡан ҡыҙҙың үтенесен – ошо институтта артабан уҡырға ҡалдырыуҙарын һорап яҙған ғаризаһын кире ҡаҡманылар.

Аҙаҡ әхирәттәре Рафиҡтың университетҡа килеүен, уны көнө буйы эҙләүен, бик күңелһеҙләнеп ҡайтып китеүен яҙҙы.

Эй иланы ҡыҙ был хатты алғас. Күңеле менән әллә нисә рәт Рафиҡ йәшәгән ҡасабаға барып ҡайтты, уның йырҙарын тыңлап, Мейәс буйҙарында йөрөнө. Тик ни эшләһен, үҙ кендеген үҙе ҡырҡырға ҡалған ҡыҙ бит ул. Бала сағында уҡ хис-тойғо, теләк менән түгел, аҡыл ҡушыуы буйынса йәшәргә үҙ-үҙенә һүҙ биргән.

Ҡайҙа киткәнен әйтмәҫкә ҡушып нығытылған әхирәт ҡыҙҙары вәғәҙәләрендә торҙо. Егет һорашып күпме хат яҙһа ла, тағы килеп белешеп ҡараһа ла, улар асығын әйтмәне. Рафиҡ иһә ҡыҙҙың Екатеринбургта уҡып йөрөүен мәңге башына килтермәй ине.

Юҡ, Линара эгоист була алмай. Ул бары өҙөлөп һөйгән кешеһенең бәхетле, уңышлы булыуын теләне. Йәш кенә сағынан кешенән өлөш ашатмаҫҡа өйрәнгән «детдом етемәге», ни бары һөйгәненә ҡамасау булмаҫ өсөн, күҙ йәшендәй саф тәүге мөхәббәтен ҡорбан итте. Ҡанһыраған йөрәген усына алып, Рафиғы мәңге эҙләп тапмаҫтай яҡҡа китеп олаҡты. Ошоно белһә, Миңъямал апай ни эшләр ине икән?! Моғайын, улының кемде юғалтыуын аңлар һәм күңелен үкенеү тойғоһо биләр ине.

Яратҡан ҡыҙы тураһында бер мәғлүмәт тә ала алмаған һалдат тыуған ҡасабаһы Мейәскә ҡанаты ҡайырылған ҡош кеүек талсығып ҡайтып инде.

Дөрөҫөн әйткәндә, егет Линараның ҡылығын башына һыйҙыра алманы. Һәр хатында тиерлек "Һағындым, көтәм" тип яҙа торғайны. Ниңә һуң ул осрашыу сәғәттәре еткәс кенә ҡасып ҡалды? Әллә һалдаты ҡайтып еткәнсе икенсе берәүҙе осраттымы? Ҡыҙҙарға ышаныс бармы ни? Улай тиһәң, Линара бик етди күренгәйне.

...Улының балтаһы һыуға төшкәндәй ҡайтып инеүенән Миңъямал апай барыһын да аңланы. Тимәк, етемәк хатты алған, ҡушҡанын тыңлаған, шуға ла Рафиҡ менән осрашыуҙан ҡасҡан. Ҡыҙҙың белекле булыуы әсәгә оҡшаны. Хатта күңелендә үҙенең хаҡлығына икеләнеү тойғоһо ла уянып ҡуйҙы. Кем белә, бәлки, ҡыҙҙың үгәй әсәһе Мәйсәрә һүҙенә төшөп, яңылышҡандыр. Улының үҙенә урын таба алмай өҙгөләнеүен күреп, ул яҙған хаты тураһында ләм-мим белдермәҫкә булды. Юғиһә, мәңге ғәфү итмәҫ.

Рафиҡ, бойоғоп, һаман Линараһынан ҡош телендәй генә булһа ла хәбәр көттө, һөйгәненең эҙһеҙ юғалыу сәбәбен аңлай алмай көнө-төнө баш ватты. Тик ҡыҙҙы эҙләү тураһындағы уй ул саҡта башына килмәне. Бер аҙҙан Силәбе тау институтына уҡырға инде.

...Екатеринбург дәүләт педагогия институтын тамамлап, сит тел уҡытыусыһы булып эшләп йөрөгәндә, Линараны осраҡлы ғына бер ҙур форумға тәржемәсе итеп саҡырҙылар. (Немец телен тәржемә итеүсе ҡатын ҡапыл ауырып китә. Урынына ашығыс рәүештә белгес талап итела.) Фәндәр академияһы ярҙам һорап ҡаланың мәғариф бүлегенә мөрәжәғәт иткәс, унда:

– Беҙҙә немец телен һәйбәт белгән уҡытыусылар бар, – тиҙәр. – Мәҫәлән, Мәлихова Линара Зәйнулловна.

Шулай башлана унын тәржемәсе һөнәренә юлы.

Йәш уҡытыусының тәржемә итеүе сит ил вәкиленә оҡшай. Уны үҙе менән металлургия заводына һәм башҡа осрашыуҙарға алып бара. Тырыш уҡытыусы тапшырылған эште уңышлы башҡара.

Сәнәғәте ныҡ үҫешкән ҙур ҡалала йыш ҡына юғары кимәлдәге кәңәшмәләр үтеп тора. Бер белеп алғас, аҙаҡ та уны ошондай сараларға саҡыра башлайҙар. Тәржемәсе һөнәре үҙенә лә оҡшай бара. Ситтән тороп махсус курстарҙы тамамлағас, яңы һөнәренә үҙләшеп, эшләп алып китә. Урал Фәндәр академияһы һәләтле ҡыҙҙы Германияның Бохум ҡалаһындағы Рур университетына, иҡтисад бүлегенә, уҡырға ебәрә. Ике йөҙләп факультеты булған билдәле юғары уҡыу йортоноң һәр ерҙә баһаһы юғары. Линара иҡтисад бүлегендә төплө белем алыуға өлгәшә. Немецтарҙың тәртип яратыуы ла унын күңеленә хуш килә. Тырышлыҡты ла ғәҙел баһалайҙар бында. Иң яҡшы студенттар рәтендә йөрөнө. Бигерәк тә университеттың иҡтисад фәндәре докторы, данлыҡлы эколог Эрнест Фейхтвангер менән дуҫлығы уны шатландырҙы.

– Һин – талантлы студентка, аспирантурала уҡырға, профессор булырға тейешһең, – ти торғайны ғалим. Экологияға ҡағылышлы, етди фәнни тикшеренеү талап иткән эштәрҙе тапшыра. Университетты тамамлағанда Линара унын етәкселегендә экологик проблемаларға бәйле диплом эше яҙҙы һәм уңышлы яҡланы. Хеҙмәттәшлектәре бөгөн дә дауам итә. Ғалим хәҙер Линараны Бохумға аспирантураға саҡыра, диплом эшен дауам иттереп, үҙенең етәкселегендә кандидатлыҡ диссертацияһы яҙырға өгөтләй. Ошо юлы ныҡлап һөйләшеп ҡалырға тейештәр инде. Ул телмәрен рус, инглиз телдәренә тәржемә итеү өсөн һәр саҡ Линараға мөрәжәғәт итә. Фейхтвангер әле лә үҙенең дипломантына ышанды, бында үҙҙәренән тәржемәсе алып килеп торманы. Унан башҡа, күп йылдар үҙе белгән, ихтирам иткән был һөйкөмлө йәш ҡатынға ҡарата уйлап йөрөгән үҙенә генә мәғлүм уй-пландары ла бар: йәш айырмаһына ҡарамай риза булһа, үҙе менән Германияға алып китмәксе, бергә-бергә ғаилә ҡормаҡсы.

Икенсе бүлек

Сығышын ослап, урынына табан атлаған Рафиҡҡа ҡатын һағынып та, һынап та текләне. Үҙгәргән дә, үҙгәрмәгән дә кеүек. Сәстәренә сал төшкән, шулай ҙа улар элеккесә ҡуйы булып, бөҙрәләнеп тора. Кәүҙәгә лә олпатланған. Һорғолтйәшел күҙҙәре йәш саҡтағы матурлығын юғалтмаған, элеккесә иркәләп ҡарай, тик хәҙер нур сәсеп, балҡып тормағандай. Ҡарашы әллә талсыҡҡан, әллә һағышлы – ҡапылда Линара быны айыра алманы. Ә бына тауышы көрәйгән. Үҙенекен иҫбатлап һөйләргә өйрәнгән, күрәһең.

...Йылдар хистәрҙе һүндерә алмаған икән. Рафиҡты ныҡ һағынған саҡтарында унын Мейәс буйында йөрөгәндә йырлаған бер йырын иҫенә төшөрә торғайны. Тауышы зерә лә моңло ине. Әле лә Линараның ҡолағында шул йыр сыңлап китте.:

Мейәс буйҡайҙары ҡыҙырым ҡырсын,
Ҡыҙырым ҡырсындарын буйланым.
Ҡара ла ғына ҡашым, зифа буйым,
Йән һөйгәнем, һине лә уйланым.

Әгәр эргәһенә барып, күрешергә ҡулын бирһә, ул быны нисек ҡабул итер икән? Теге саҡтағы үпкәһен оноттомо? Әллә тәүге мөхәббәтен, балалыҡ хисенә һанап, күптән иҫенә лә алмаймы? Бындай мәртәбәле симпозиумда сығыш яһарға саҡырылғас, тимәк, ул – күренекле ғалим. Ғаиләһе, балалары барҙыр. Тәнәфес иғлан ителеп, ял итергә сыҡҡас, эргәһенә барырғамы, юҡмы тип һаман

икеләнде Линара. Эрнест әфәндене яңғыҙ ҡалдырыу ҙа килешеп етмәй: Фәндәр академияһынан тәржемәсегә симпозиумдың эше тамамланғансы немец ғалимын оҙатып йөрөү бурысы йөкмәтелгән. Етмәһә, фәнни етәксеһе, уҡытыусыһы. Линара уны үҙенә битараф ҡарай алмаған һымаҡ һиҙә. Германияла уҡығанда ярҙамы ла тейҙе. Хәҙер аспиранты итмәксе. Әле лә кискелеккә ресторанға саҡырып өлгөрҙө.

Ҡатын тәнәфесте берсә тулҡынланып, берсә түҙемһеҙләнеп көттө. Нисек, бер конференцзалда ултырып, күрешмәй китергә? Ял иғлан ителгәс, булдыра алманы, етәксеһенә әйтте.

– Бында минең класташым – Рафиҡ Камалетдинович. Хәтерләйһегеҙме, ул һеҙҙән һуң сығыш яһағайны? Күрешеп килергә иткәйнем, – тине.

– Битте, фрау Линара, – немец нәзәкәтле, сибәр ҡатынды эргәһенән ебәргеһе килмәүен һиҙҙермәне.

Рафиҡ бер төркөм иптәштәре менән ни тураһындалыр ҡыҙып-ҡыҙып фекер алыша ине. Нисек янына барырға? Нимә тип һүҙ башларға? Линара уны бер килке ситтәнерәк күҙәтте. Наҙлап ҡына:

– Һаумы, Мейәс егете?! – тип өндәшкеһе, ипләп кенә барып иңенә башын терәгеһе килде уның. Аяҡтары ирекһеҙҙән Рафиҡ торған яҡҡа атланы. Күңеле бая уҡ ниндәйҙер мөғжизә булырын иҫкәрткәндәй елкенеп ҡуйған ир, һуңғы мода буйынса кейенгән һомғол кәүҙәле һылыу ҡатындың үҙҙәре яғына килеүен күреп, ҡойолоп төштө:

– Линара?! – Ул, иптәштәренән айырылып, бер нисә аҙым алға атланы. – Линара, был һинме? — Рафиҡ ҡаушаны, ҡапыл телһеҙ ҡалды. Бая немец ғалимын тәржемә... Тауышын һинеке иткәйнем шул, – тине.

Икеһе лә, телдәрен йотҡандай, бер-берсһенә ҡарашып өнһөҙ ҡалды. Ниһайәт, ир кеше һүҙ ҡатырға йөрьәт итте:

– Тәржемәсе булып эшләйһең икән. Нисек был яҡтарға килеп сыҡтың? Әсәйемдең һиңә хат яҙғанын беләм, вафаты алдынан, гонаһлы китмәйем тип, үҙе һөйләне.

– Миңъямал апай донъя ҡуйҙымы ни? Ҡайғыңды уртаҡлашам.

– Бер йыл тула. Олоғайғас, бик дингә бирелде. Ейәнсәренең фажиғәле үлеүенән һуң үҙен беҙҙең алда гонаһлы һананы. Һеҙҙе бәхетһеҙ иттем, тип үкенде. Үлер алдынан да бер үк һүҙҙе ҡабатланы: «Үгәй әсәһе Мәйсәрә ҡотҡоһона бирелеп яңылыштым. Аяуһыҙ хурланы шул. Һине бәхетһеҙ итер, тип ҡыҙғандым»,– тине, үкенде. Шулай итеп һуңғы йылдарҙа ғына һинең хәбәрһеҙ юғалыуыңдың сәбәбе асыҡланды. Ни эшләргә белмәй аптырандым, һине эҙләп бер нисә ҡат Стәрлетамаҡҡа, һеҙ уҡыған балалар йортона, барҙым. Башҡаларҙың адрестары бар, һинеке генә юҡ. Мәстүрә әхирәтеңде лә күрҙем. Ул да бер ни әйтә алманы. Мейәскә ҡайтҡан һайын һеҙгә инеп сыҡтым, адресыңды һораным. Атайың «белмәйем» тине, ә Мәйсәрә апайың бик ҡырыҫ һөйләште. Элеккесә яһил. Атайың да йөрәктән китеп барҙы. Тыуған ауылыңа ла барып ҡараным. Унда ла һинең ҡайҙалыҡты әйтергә теләмәнеләр. Инде ни эшләргә, һине ҡайҙан эҙләргә, тип аптырап йөрөй инем…

– Ҡаршыңа үҙе тып итеп килде лә баҫтымы? – Линара шаяртырға маташты. Әммә күҙҙәрендә йәш ялтырап китте. Ул үҙе лә бит бөтә ошо йылдар буйы, һөйгәне менән осрашырға тура килмәһә лә, уның ғилми эштәрен даими өйрәнде. Төп һөнәре иҡтисадсы булыуға ҡарамаҫтан, Рафиҡ һымаҡ эколог булғыһы килде. Артабан ошо йүнәлештә аспирантураға уҡырға инергә ниәтләне.

Үҙҙәренә табан килеүсе Фейхтвангер әфәндене күреп, икеһе лә һөйләшеүҙән туҡтап ҡалды.

– Профессор әфәнде, ғәфү итегеҙ, Линараһыҙ рус дуҫтар менән аралаша алмай хитланам, – тине йылмайып һәм, тәржемәсеһен ипле генә ҡултыҡлап, бер төркөм кешеләр торған яҡҡа әйҙәне.

Рафиҡ үҙен-үҙе әрләне: Линараның йә телефонын, йә визитҡаһын һорап алып ҡалырға башы етмәгән. Осрашыуҙары төш кеүек кенә булды. Линараны күреү бәхетенән, әйтерһең, иҫерҙе. Шулай ҙа иң мөһимен – уны нисә йылдар буйы эҙләүен әйтеп өлгөрҙө. Үҙе килеп күреште бит әле, тимәк, онотмаған. Бөгөн осраша алырҙармы? Шундай сибәр ҡатын яңғыҙ булмаҫ, моғайын, ире, балалары барҙыр. Сәсенә теймәгән, һаман оҙон көйө икән... Элеккесә толомлап үреп һалмаһа ла, прическаһы килешле. Буй-һыны ла ҡыҙ сағынан әллә ни үҙгәрмәгән. Шулай ҙа арала йылдар ята. Ун ете йыл әҙ ғүмер түгел. Күҙҙәре лә һағышлы һымаҡ.

...Оҙаҡ йылдар ул һөйгәненән хәбәр көттө. Ахыры ата-әсәһе, көсләп тигәндәй, бер ҙур ғына түрәнең яңғыҙ ҡыҙына өйләндерҙе. Бер нисә йыл түҙеп йәшәнеләр. Бала тыуҙы. Ҡатыны һөйөүҙе ситтән эҙләй башланы. Көсләп аҫҡан күҙҙең нуры булмағандай, мөхәббәтһеҙ никахты бала ғына һаҡлап алып ҡала алмай шул. Утын өҫтәлмәһә, усаҡ та һүрелә. Мөхәббәт булмағас, тора-бара ғаилә тарҡалды. Ҡатыны шунда уҡ икенсегә тормошҡа сыҡты. Бала башта Рафиҡтың ата-әсәһе ҡулында булды. Бары дүрт йәше тулғас, ҡатыны ҡыҙҙарын үҙенә алып ҡайтты. Күпмелер ваҡыт үткәс, әллә әсәһе һүҙенә төшөп, бала атаһынан ситләште. Саҡырһа, килмәй, биргән бүләген алмай башланы. Беренсе класҡа бара тигәндә генә машина тәгәрмәсе аҫтына ҡалып ҡуйҙы. Ғәрипләнгән ҡыҙыҡайҙы ҡатыны үҙенә алып ҡайтып ҡарарға теләмәне, тағы атаһына, Рафиҡҡа, килтереп ҡалдырҙы... Ауырыу баланы ҡарау, башлыса, өләсәһе елкәһенә төштө. Ярты йылдай яфаланып ятҡас, бала үлеп китте. Рафиғы ғаиләһендәге уңышһыҙлыҡтар Миңъямалдың үҙәгенә генә үтте. Теге саҡ ҡылған гонаһтарым өсөн язамы әллә был, тип уйлай торғайны.

Ҡыҙы үлгәндән алып, Рафиҡ башы-аяғы менән фәнгә бирелде. Ер есеме тарихы, ер ҡатламдарының структураһы, йәғни ерҙең геологик төҙөлөшөн тәшкил иткән, ҡат-ҡат булып ятҡан өлөштәре, ер аҫты һыуҙары, ҡаҙылма байлыҡтар ятҡылығы менән етди ҡыҙыҡһынды, улар тураһында мәғлүмәттәр тупланы. Мысыр цивилизацияһын, Атлантида катастрофаһын өйрәнде. Аңлатып булмай торған, серле, оккульт көстәр тураһында ла күп уҡыны. Мысыр цивилизацияһының нигеҙендә дингә, Юғары Көстөң барлығына ышаныу ятыуын белде. Былар бөтәһе уны уйландырҙы, дингә лә ыңғай ҡараш уятты. Теософия, антропософия фәндәрен өйрәнеү ҙә күп нәмәләргә күҙен асты. Ерҙә бер ни ҙә юҡтан бар булмай, шулай уҡ булған нәмә юҡҡа әйләнмәй, йәғни эҙһеҙ юғалмай. Халыҡ йыйған аҡылды, шулай уҡ әкиәт, мифтарҙа тупланған хәҡиҡәтте лә инҡар итеү дөрөҫ түгел. Тимәк, ниҙер булған. Юғалған материктарҙан – утрауҙар, үлгән телдәрҙән – һүҙ, бөткән халыҡтарҙан тупланған аҡыл ҡала. Бына шуларҙың барыһын төптән уйлап, Рафиҡ фәнни һығымталар яһаны.

***

Улының килене менән килешә алмауын, аҙаҡ килеп ғаиләләре тарҡалыуын иң ауыр кисергән кеше Рафиҡтың әсәһе булды. Аталы-әсәле көйө бала тере етем үҫә, тип аҙарынды ул. Әллә теге етемәктең рәнйеше ебәрмәйме, тигән уйҙар ҙа килде башына; һуңлап булһа ла Рафиғы менән Линара араһында ысын мөхәббәт барлығына инанғайны инде ул.

Рафиҡтың атаһы Камалетдин ағай улының тормошо барып сыҡмауына үҙенсә көйөндө: "шахтаның почетлы хеҙмәткәре" тип ҡәҙерләп алып йөрөтә торғайны "профсоюз ҡоҙаһы", хәҙер уға былдай хөрмәт тәтемәй. Килендең нимәһен

оҡшатмағандыр, белмәҫһең. Шулай ҙа Камалетдин ағай, ҡатыны Миңъямал апайҙан айырмалы рәүештә, улының шәхси тормошона ҡыҫылып барыуҙы кәрәк тапманы. Әйҙә, ир ирлеген итһен, үҙе теләгәнсә йәшәһен, бисә-сәсәнән өлөш ашатып йөрөмәһен, тине.

Ҡатыны менән айырылышҡас, Рафиҡ Камалетдинович яңы ғаилә ҡороу тураһында уйларға ла теләмәне. Институтта уҡытыу, фәнни эш күп ваҡытын алды. Унан тыш, ҡышын-йәйен геологтар менән тауҙар, далалар гиҙеүҙән күңеленә толҡа тапты. Ата-әсәһе шәхси тормошо тураһында һүҙ сығарһа, йә өндәшмәй, йә һүҙҙе икенсегә бора, ялҡыта башлаһалар, икенсе бүлмәгә сығып китә. Инде ныҡ ҡына ҡартайып, кәре ҡайтҡан әсә үҙенең теге саҡтағы ғәйебен аңлап, аптырағандың көнөнән тегенеһен-быныһын димләштереп тә ҡараны. Ах, улын бәхетле итергә теләгәйне, киреһенсә килеп сыҡты. Анау етемәгән тай типтереүе лә улына бәхет теләүҙән ине бит. Ул уйлағанса булманы. Хәҙер Линараның фотоһын стенаға элеп ҡуйған да шуға табынып йәшәй Рафиғы.

Бер көн әсә улының ҡылын тартып ҡарарға булды.

– Яңғыҙ йөрөгәнсе, шул Линараңа ғына өйләнеп ҡуйманың, – тигән булды.

– Беҙҙең аранан ҡара йылан үтте, әсәй.

– Нисек? – тип аптыраған булды Миңъямал. Үҙенең ни ҡылғанын әллә улы белеп ҡалдымы, тигән уй үтте башынан, ҡото осто.

– Кемдер уға беҙҙе мәңгелеккә айырырлыҡ итеп хат яҙған.

Әсә тағы ныҡыраҡ хафаға төштө. Үҙенең ашығып:

– Ҡайҙан белдең? – тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Бер нисә йыл үткәс, бер әхирәтен осратҡайным, шул әйтте.

– Йә Хоҙай, – әсә телен тешләне. – Үгәй әсәһе, Мәйсәрәне әйтәм, зерә лә яманлағайны. Йүнле булмағандыр ул ҡыҙ.

– Әсәй, етәр, Линараға тел тейгеҙмә!

Улының бер ваҡытта ла тауышын күтәргәне, былай тупаҫ өндәшкәне юҡ ине. Ҡәтғи тауыш уны һиҫкәндерҙе. Әсе үкенес солғап алды әсә күңелен. Әммә, Мәйсәрәнең нимә тип яманлағандарын иҫенә төшөрөп, тағы эсенән үҙен аҡлап ҡуйҙы.

Тик гүр эйәһе булырға ярты йылдай ҡалғас ҡына, ҡаты ауырып киткәс, үлеп ҡуйһам, Хоҙай Тәғәлә ҡаршыһына гонаһлы булып бармайым, тип ҡурҡып, әсә улына дөрөҫөн һөйләп биреп, ярлыҡау һорағандай итте: Линараға теге күңел төңөлдөрөр хатты үҙе яҙыуы хаҡында сиселде. Әсәһенең ҡаш төҙәтәм тигәнсе күҙ сығарыуын күптән белә ине Рафиҡ. Тик ни эшләтә алһын? Үткән ғүмер – ҡалған хәтер... Һыуҙар кире аҡһа ла, үткәндәр әйләнеп ҡайтмай шул.

– Һине бәхетле итергә теләнем, ғәфү ит, улым, – тине әсәһе бәхилләшкәндә... Төпкә батҡан ғазаплы күҙҙәренән ике бөртөк йәше бите буйлап тәгәрәп төштө. Саҡ тын алып ятҡан ауырыу әсәһен йәлләүҙән Рафиҡ үпкә һүҙҙәрен эскә йотто. – Бер кәңәшем бар ине, тыңлар булһаң. Эҙләп ҡара һин уны. Күрешеп һөйләшһәң, бәлки, төңөлөрһөң. – Үҙе эстән, моғайын, йәшлек матурлығын юғалтҡан ҡатын күрмәлекһеҙ бер һәпрәгә әйләнгәндер, тип өмөтләнде. Күҙе ҡупшы кейенгән, матур ҡатын-ҡыҙға өйрәнгән вуз профессоры Рафиҡ уны күреү менән бер юлы һыуыныр. Ир-ат бит һәр саҡ матурлыҡҡа ынтыла.

– Бына, исмаһам, дөрөҫ әйттең. Мин уны эҙәрмәндәр берекмәһе аша юллап ҡарайым әле, – тигән булды Рафиҡ сараһыҙҙан. Инде хәҙер әсәһе лә ысын донъяла ята. Үҙе гел кәмһеткән Линараның әлеге хәлен, ҡайҙа эшләп йөрөүен күрһә, ни эшләр ине икән?

Ысынлап та, ошо симпозиум үтеп киткәс, ул Линараны ныҡлап эҙләргә йыйынғайны. Кеше һалам эҫкертендәге энә түгел дәһә, моғайын, табылыр. Ә

яҙмышы уға бүләк әҙерләгән булып сыҡты. Уйламағанда, көтмәгәндә һөйгәне үҙе ҡаршыһына килеп баҫты. Вәт бәхет, исмаһам! Алғы рәттәрҙең береһендә немец ғалимы менән йәнәшә ултырған ҡәҙерлеһенән күҙ яҙлыҡтырманы ул. Ана, теге ерән, башын яҡын уҡ терәп, Линараға ниҙер бышылдай. Бына көлөшөп алдылар. Күренеп тора: әфәнде сибәр ханымға тыныс ҡарай алмай. Шулай булмайсы, ҡасандыр йонсоу өйрәк бәпкәһен хәтерләткән ҡыҙыҡай, әкиәттәге һымаҡ, хәҙер гүзәл аҡҡошҡа әүерелгән дәһә. Юғары даирә кешеләре менән аралашыу ҙа йоғонтоһоҙ ҡалмаған: хәрәкәттәре һығылмалы, үҙ-үҙен тотошо нәзәкәтле, эшлекле. Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә итеп биҙәнеүе йөҙ-һынын тағы ла баҙығайтҡан. Йә, кем уға утыҙ биш йәшлек ҡатын тип әйтер?! Линара әле лә ҡыҙҙар кеүек. Йылдар уға бары күркәмлек өҫтәгән.

***

Симпозиумда күтәрелгән проблемалар Рафиҡ Камалетдинович өсөн бик тә мөһим ине. Ул һәр бер сығышты ентекле тыңларға, аҙаҡ, Екатеринбургтан ҡайтҡас, ҡала күләмендә матбуғат конференцияһы үткәрергә ниәтләгәйне. Көтмәгәндә Линараны осратыу, йөрәкһеп тулҡынланыу, йәшлек хәтирәләре уйҙарын төп эштән әҙерәк ситкә тайшандырҙы. Хәйер, зарар юҡ. Симпозиумдағы сығыштар, ғәҙәттә, йыйынтыҡ булып баҫылып сыға, аҙаҡ ентекләп танышыр әле.

Ниһайәт, алты сәғәткә һуҙылған форумдың беренсе эш көнө тамамланды. Иртәнге сәғәт унға тиклем ял иғлан ителде. Фейхтвангер тәржемәсеһенең ҡулын усына алды:

– Һөйөклөм, беҙҙең делегация ресторанға йыйына. Бая килешкәнсә, мин Һеҙҙе саҡырам.

– Ғәфү итегеҙ, мине көтәләр... Китәйем мин, мөмкин булһа?

– Ә-ә, Рафиҡ Камалетдиновичмы? Ғөмүмән, уның фекерҙәре фәнни яҡтан ҡыҙыҡлы. Беҙ бер үк проблемалар өҫтөндә эшләйбеҙ икән. Беҙгә яҡындан танышыу ҡамасауламаҫ.

– Эйе, – тине Линара, ерән сәсле, аҡһыл йөҙлө ирҙең йәшкелт-зәңгәр майлы күҙҙәренә һағайып ҡарап. "Хәйләкәр, эргәһенән ебәрмәү сараһын тапты... Хәҙер, әллә үҙебеҙ менән бергә алайыҡмы, тип әйтәсәк ул," – тип уйлап та өлгөрмәне, Фейхтвангер нәҡ шул һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

– Фрау Линара, Рафиҡ әфәндене лә ресторанға саҡырайыҡ.

Йәш ҡатын үҙ алдына йылмайып ҡуйҙы ла, риза икәнен белдереп баш һелкте.

Бер яҡ ситтәрәк Линараны күҙәтеп, дөрөҫөрәге, уның бушауын көтөп торған Рафиҡтың күңеле һиҙә: теге бәндәнең уны янынан ебәргеһе килмәй. Ҡайҙалыр алып китергә самалай, ахырыһы. Линара нимә эшләр, бында, уның эргәһенә, килерме, әллә немец менән китерме?

Рафиҡ, сабырһыҙланып, арлы-бирле йөрөштөрҙө. Сәғәтенә ҡарап алды. Йә инде, табыштыҡ тигәндә генә... Юҡ, ана, һөйгәне уға табан килә. Күҙҙәре нурланып балҡый. "Ҡайһылай еңел атлай, әйтерһең, талпынып оса. Европа стилендә тегелгән асыҡ иҙеүле, ҡупшы күлдәк уға ҡайһылай килешә.

Эргәһенә килеп туҡтаған Линара уға яғымлы өндәште:

– Рафиҡ, ваҡытың булһа... теләһәң, Эрнест әфәнде һине үҙҙәренең төркөмө менән бергә ресторанға саҡыра.

– Икәүләп кенә һөйләшеп ултырғы килгәйне. – Рафиҡ Линараның күҙҙәренә мөлдөрәп ҡараны. Ҡатын да тойғоһон йәшермәне:

– Минең дә, – тине. – Тик эштә икәнемде беләһең. Уны ҡунаҡханаға илтеп ҡуймайынса бушай алмайым. Етмәһә, Эрнест Фейхтвангер Германияла уҡыған саҡта минең фәнни етәксем булды.

– Нисек-нисек?
– Аҙаҡ, аҙаҡ... Йә, бараһыңмы?
– Эйе, барам.
– Улайһа, әйҙә!

Башта һүҙ берекмәгәндәй булды. Яңы таныштар, күрәһең, бер-береһен һынап ҡараны. Һәр яҡ үҙ иленең вәкиле икәнен дә күҙ уңынан ысҡындырмай, әлбиттә. Һөйләшеү ҙә шул кимәлдә булырға тейеш, тигән уй аралашыуҙың тәбиғи йүнәлеш алыуына тотҡарлыҡ яһаны. Тәржемәсе булып эшләп, фән кешеләре менән аралашып байтаҡ тәжрибә туплаған Линара баштан уҡ мөнәсәбәттәргә тартыныуһыҙ, иркен ҡиәфәт бирергә тырышты.

– Эрнест әфәнде, класташым Рафиҡ Камалетдиновичтың сығышы Һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы? – тине ул, ике яҡҡа ла яғымлы йылмайып ҡарап.

– Тема бик актуаль. Ер планетаһының киләсәге мине лә ныҡ борсой. Цивилизация кешелек донъяһын һәләкәт юлына этәрер өсөн хеҙмәт итергә тейеш түгел. Киреһенсә, кешелек донъяһы туплаған рухи һәм интеллектуаль культураны, фән ҡаҙаныштарын, матди байлыҡты артабан үҫтереү өсөн ҡулланыу мөмкинлектәрен уйларға тейешбеҙ.

– Һеҙҙең менән фекерҙәш икәнбеҙ, – тине Рафиҡ Камалетдинович немецса. – Быға бик шатмын.

Линараның йөҙө яҡтырып китте. Тимәк, аралашыу еңелләшә. Ғалимдар араһында тел проблемаһы тормаһа, улар көндәр-төндәр буйы дискуссия ҡороп ултыра ала. Былар ҙа уртаҡ тел табырҙар һымаҡ. Әммә Рафиҡтың артабан әйткән һүҙе уны борсоуға һалды.

– Ә бына немец ғалимы Уильям Бектың “Нимә ул глобализация?“ тигән китабында яҙғандар менән килешеүе ауыр, – тине башҡорт ғалимы. Ул быный менән Фейхтвангерҙың сығышындағы ҡайһы бер фекерҙәр оҡшамауына ишараланы. Туранан-тура әйтмәҫ өсөн махсус рәүештә Уильям Бек китабы тураһында һүҙ башланы.

– Эйе, ул глобализацияның уңышына ышанмай. – Фейхтвангерҙың, күрәһең, һүҙ ҡуйыртырға самаһы юҡ ине.

– Аңлашыла, профессор, процесс еңел бармаясаҡ. – Рафиҡ Линараның ымын аңғарҙы. “Бәйләнмә“ тип иҫкәртеүе ине, буғай. Немец ғалимы дөйөм һүҙҙәрҙе тиҙ генә күтәрмәләп алды.

– Проблема кешелектең үҙендә, – тине фән докторы. – Глобализация беҙҙән юғары әхлаҡ талап итә. Байырға тырышыусылар, власты үҙ мәнфәғәтенә файҙаланыусылар, карьеристар уға ҡамасаулаясаҡ.

– Рихьтихь, беҙгә берләшеү кәрәк. Дөрөҫ әйттегеҙ, профессор әфәнде. – Үҙе Линараға ҡараны.

– Я, я, генаузе, – тип ихлас ризалашты немец ғалимы.

Рафиҡ бокалдарға шарап ҡойорға булды.

– Миңә – коньяк, – тине немец.

Линара үҙенә емеш һуты ҡойоп алды.

Тосты Рафиҡ башлап әйтте:

– Фән донъяһында үҙеңә фекерҙәш табыу – тауҙай ҡом-таш араһынан йоҙроҡтай алтын табыуға бәрәбәр, – тине. – Әйҙәгеҙ, бокалдарҙы беҙҙең хеҙмәттәшлек өсөн күтәрәйек!

Фейхтвангер әфәндегә тост оҡшанымы – бөтөргәнсе эсеп ҡуйҙы. Линара, һөйләшеүгә ябайлыҡ бирергә теләп, ахырыһы, тағы һүҙгә ҡушылды.

– Рур ҡалаһы нисек йәшәй? – тип ҡунаҡ яғына бороллдо. – Әйткәндәй, минең Рур университетын тамамлауға ла биш йыл булды.

– Һин Рурҙа уҡыныңмы? – Рафиҡ Линараға һораулы ҡараш ташланы.

– Эйе.

– О-о-о, фрау Линара, беләм, беләм! Һин һәйбәт студентка булдың. – Эрнест тамам йәнләнде. – Рейн йылғаһында парусникта йөрөгәйнек, иҫендәме?

– Эйе, эйе, Рейнды бик яраттым мин. Ял көндәре пляжға барып, рәхәтләнеп йөҙә торғайным. Рафиҡ белә, мин бит – йөҙөүсе.

– Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа беҙҙең Рейндың хәле лә аяныслы ине. Күпме мәҡәләләр яҙҙым. Рейнды һаҡларға кәрәклек тураһында кәңәшмәләрҙә сығыш яһаным. Шул сәбәпле ҙур вазифа биләүсе етәкселәр, коммерсанттар араһында үҙемә әллә күпме дошмандар таптым. Тотороҡло үҫеш концепцияһы тормошҡа ашырыла башлағас ҡына, Рейнға һаҡсыл ҡараш барлыҡҡа килде. Хәҙер, Аллаға шөкөр, беҙҙә экологияға ныҡ иғтибар бирелә.

Рафиҡ коллегаһына ихтирам менән ҡарап ҡуйҙы, үҙе лә һүҙгә ҡушылды:

– Беҙҙә лә проблемалар етерлек. Башҡортостанда төбәктә урмандар ҡырҡылып бөтөп бара. Айырыуса, Йылайыр, Бөрйән, Белорет тирәһендә... Ашҡаҙарынды хәҙер күрһәң, Линара, танымаҫһың да. Һайыҡҡан, һыуы бысраған. Бигерәк тә Стәрлетамаҡ тирәһендә.

– Я, я, ишеткәнем бар. – Фейхтвангер әфәнде һүҙҙе тағы тиҙ генә күтәрмәләп алды. – Быны туҡтатырға мөмкин, профессор. Бөгөнгө симпозиум ҡарарына таянып эш итегеҙ. Ҡыйыу булығыҙ! Беҙҙең тотҡан юлыбыҙ хаҡ. Мәғлүм ки, ваҡытында Рур йылғаһын нисек бысраттылар! Беҙ ныҡ тотондоҡ. Хәҙер, ана, Германияла тәбиғәтте, тәбиғи ресурстарҙы һаҡлау ныҡ ҡуйыла. Көрәш бушҡа сыҡманы.

Рафиҡ сит ил вәкиле алдында бөтә уйлағандарын сисеп һалырға йыйынманы. Етешһеҙлектәрҙе тикшерә башлаһаң, улар беҙҙә аҙым һайын инде. Эйе, проблемалар – быуа быуырлыҡ: ерҙе ашламалар, гербицидтар менән ағыулау, урынһыҙға һөрөү, малдан тапатыу... Дәүләт тарафынан ниндәйҙер саралар планлаштырыла, әммә улар тейешле һөҙөмтә бирмәй. Ябай халыҡ араһында ерҙе хәстәрләргә тырышып ҡараусылар бар ҙа, тик уларҙың фекеренә шулай уҡ ҡолаҡ һалынмай. Беҙгә ныҡлыҡ етмәй. Ысынлап та, немецтар һымаҡ ҡыйыу булырға кәрәк шул.

– Зейер гут, Фейхтвангер әфәнде, – тине Линара, һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа борорға теләп. Илдәге негатив күренештәрҙе уның да асып һалғыһы килмәй, ахырыһы. – Рейнда тағы бер ҡолас ташлап йөҙөргә хыялланам.

Баянан бирле үҙе һалып эсеп ултырған ҡунаҡ апаруҡ ҡыҙмаса булып алғайны. Сибәр ҡатындың иғтибары күңелен күтәрҙе, буғай. Ул хистәрен йәшермәне.

– Ҡәҙерлем, һине үҙем менән алып китәм! Һин үҫергә, карьера яһарға тейеш! Һине Рур аспирантураһы көтә! Беҙ экологик проблема менән бергәләп шөғөлләнәсәкбеҙ.

– Рәхмәт, уйлаширмын. Саҡырыуығыҙҙы онотмам. Германияла уҡыу оҡшағайны.

– Ҡәҙерлем, Линара, үҙеңдең баһаңды белеп етмәйһең. Һин бит – Урал йәшмәһе. Рәсәйҙә йәшмәне ваҡлап юлға һибәләр, ә Германияла беҙҙең мастерҙар унан сәнғәт әҫәре яһай. Һинең БМО күләмендә танылған профессор булырлыҡ һәләтең бар.

Немец Линаранан күҙен алманы. Был Рафиҡтың эсен бошора башланы. Ул Эрнест Фейхтвангерҙың зитына тейерҙәй, һөйләшеү темаһын үҙгәртерҙәй ҡырҡыу яңғыраған яңы һорау бирҙе:

– Әйткәндәй, һеҙҙең Рур менән Липпе йылғалары арауығындағы ташкүмер, тимер рудаһы ятҡылыҡтарының торошо нисек?

– Гитлер самаһыҙ тотондо...

– Эйе, был шулай. Рәсәй менән һуғышта металл самаһыҙ әрһеҙ тотонолған. Шуға ла фюрер Уралға ынтылды.

Эрнест Фейхтвангер уңайһыҙланды, шулай ҙа юғалып ҡалманы.

– Гитлерҙың яуыҙлыҡтары өсөн һәр немец яуап бирә алмай. Уның гегемонлыҡҡа ынтылыуын күптәр, шулай уҡ мин дә, хупламай. Фейхтвангерҙар тоҡомо хәрби хеҙмәттән йыраҡ торған, беҙҙең ата-олатайҙар банкирҙар булған. Атайым антифашистик хәрәкәттә ҡатнашҡан.

– Һеҙҙең Рур бассейнындағы тәбиғи ресурстарҙы рациональ файҙаланыу тураһындағы фекерегеҙ миңә аңлашылманы. Бая, симпозиум барғанда, эргәлә ултырған профессор Ғилманов та һеҙҙең фекер менән килешмәне.

– Һеҙҙә сеймал күп. Ә беҙҙә ҡорамаллы заводтар буш тора. Күп ғалимдар бындай хеҙмәттәшлекте хуплай. Мәҫәлән, Америка профессоры Неклесса “Глобализация һәм донъя иҡтисады кризисы” тигән хеҙмәтендә “Кешелек донъяһы – бер бөтөн күренеш, тәбиғи сеймал – уртаҡ байлыҡ“, – тип яҙа. Мин уның менән ризамын.

– Аңлашыла. – Рафиҡ уны бая уҡ, баштан дөрөҫ аңлаған икән.

– Иҡтисади интеграция, әфәндем. – Немец ҡарашын бер нөктәгә төбәп, һүҙһеҙ ҡалды.

Рафик был бәхәстән йүнле нәмә сыҡмаҫын аңланы. Глобализация тигән булып, көслө илдәр көсө еткән илдәргә үҙҙәренең ихтыярын көсләп тағырға йыйына. Беҙҙеңсә әйткәндә, баҫымсаҡҡа баҡа ла айғыр. Бында Рәсәй иле ныҡ тормаһа, йотолоп ҡалыуы бик ихтимал.

Линара дискуссияның тәрәнгә китеүенән ҡурҡты. Халыҡ-ара этикет итәғәтлелекте талап итә. Ул, өҫтәл артынан сығып, немецты бейергә саҡырҙы. Был, әлбиттә, тегегә оҡшаны. Йәш ҡатындың иғтибарын үҙенә оҡшарға тырышыу тиеберәк тә ҡабул иткән Фейхтвангерҙың күңелендә өмөт уянды: бәлки, Линараны үҙе менән Германияға алып китә алыр. Ғаилә ҡороп ебәрерҙәр. Немецтар араһында башҡорт ҡыҙына өйләнеүселәр байтаҡ, белеүенсә, бик матур йәшәйҙәр. Ә һәләтле тәржемәсеһенән ул киләсәктә бынамын тигән ғалимә әҙерләйәсәк.

Эрнест әфәнде өс йыл инде яңғыҙ йәшәй. Ҡатыны Зильда елбәҙәк булып сыҡты. Уйын-көлкө, күңел асыуҙы яратты. Әйтәгүр, сибәр бисә ине, һөйәрҙәрен йыш алыштырҙы. Һөҙөмтәлә, тормоштарының рәте-сираты булманы. Ниһайәт, законлы айырылыштылар. Линараны буйҙаҡ ғалим ун йылдан ашыу белә: кешеләргә ипле, ыҫпай, етди, эшлекле, Зильда һымаҡ еңел-елпе ҡыланған сағын да күргәне юҡ. Ошондай өмөтлө уйҙарҙан йөрәге дәртлерәк тибә башлаған ир ихлас бейеп йөрөгән ҡатынды ҡосаҡлап үҙенә яҡынайтты, ҡолағына наҙлы бышылданы:

– Һин – фея, фрау Линара! – Уңайлы мәлде файҙаланып, уйын да әйтеп ҡалырға ашыҡты. – Мин һине бик тә бәхетле итә алыр инем, әгәр теләһәң. Беләһең бит, студентка сағыңдан һиңә иғтибарлы булдым. Диплом эшенде минең ярҙам менән уңышлы башҡарҙың. Уның буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҙырлыҡ перспективаң бар ине. Әле лә һуң түгел...

Линара ситкә тартылды.

– Мин дә Һеҙҙе ихтирам итәм.

– Германияға алып китәм, һиңә үҫергә кәрәк. – Профессор тағы баяғы һөйләшеүгә ҡайтты.

– Был мөмкин түгел.

– Ниңә?
– Мин илемде ташлап китә алмайым.
– Ер шары – беҙҙең уртаҡ өйөбөҙ. Кеше ҡайҙа теләй, шунда йәшәргә ирекле.
– Уйлармын әле, – тиеү менән сикләнде Линара.
Немецтың кәйефе ҡырылды, ләкин һиҙҙермәҫкә тырышты. Ул арала, бәхеткә ҡаршы, музыка ла туҡтаны. Кире урындарына килгәндә, быларҙың бейегәндә бер-береһенә ҡарап һөйләшеүен һырпаланыу һымаҡ ҡабул итеп, һыны теймәй ултырған Рафиҡ ҡайтырға йыйынғайны. Ул көсөргәнеп йылмайҙы.
– Хушлашыр өсөн һеҙҙе көтәм, ханым, – тине. – Иртәгәге йыйылышҡа ял итеп барырға кәрәк.
Линара башҡортсаға күсте.
– Һөйләшә лә алманыҡ.
Рафиҡ төрттөрөп алырға булды.
– Һеҙ бит эштә.
Улар үҙ телендә һөйләшеүҙе дауам итте.
– Рафиҡ Камалетдинович, ҡунаҡтарҙы оҙатышып ҡуйырға ярҙам итегеҙ.
– Мин арыным.
– Үҙең бая, һөйләшке килә, тигәйнең.
– Һағындым.
– Аҙаҡ, аҙаҡ.
Шул саҡ Эрнест әфәнде лә һүҙгә ҡушылды.
– Фрау Линара, Рафиҡ Камалетдинович, һеҙ әле башҡорт телендә һөйләштегеҙ, эйе бит?
– Эйе. Ә һеҙ беҙҙең телде беләһегеҙме ни?
– Аҙ-маҙ өйрәнергә тура килгәйне.
– Бына нисек!
– Эйе, эйе, Урал тауҙары, Урта һәм Көньяк Урал проблемалары мине ҡыҙыҡһындыра. Арҡайым темаһын да ентекле өйрәндем, бер нисә рәт барҙым унда.
– Арҡайымда булдығыҙмы? – Рафиҡ ғалимға һынсыл ҡараш ташланы. Уның тап Башҡортостан, Көньяк Урал һәм башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныуы сәйер тойолдо. Хәйер, Урал йәшмәһе тураһында яҙған ғилми хеҙмәте лә бар ине бит әле уның. Ул саҡта Рафиҡ Эрнест Фейхтвангерҙы күреп белмәй ине, шулай ҙа фәнни хеҙмәттәге айырым урындар сәйер тойолдо. “Ваҡлағыс машиналар онтап, Рәсәйҙә йәшмәне юлға түшәйҙәр, ә немец скульпторы ҡулында йәшмә ҡиммәтле сәнғәт әҫәренә әүерелә. Үҙебеҙҙең оҫталарҙы ебәреп инвестициялағанда мул килем алып булыр ине”. Бына иҫенә төштө. Линараны бая Урал йәшмәһенә тиңләүе бына ниңә икән! Туранан-тура әйтмәһә лә, ситләтеп, һаман шул йәшмәле тауҙарға дәғүә итеүе.
– Арҡайым цивилизацияһы менән беҙҙең халыҡ борон-борондан ҡыҙыҡһынған. Уны ерҙең кендеге тип иҫәпләгән. Тәүге тапҡыр бынан өс йыл элек, егерме беренсе июндә, көн менән төн тиңләшкән мәлдә, булдым мин унда. Магик оккульт көстәр менән осрашырға теләгәйнем.
– Осраштығыҙмы? – Рафиҡта ҡыҙыҡһыныу уянды. Үҙенең дә унда барғаны, сер ғилеменә яҡынайырға тырышып ҡарағаны булды.
– Унда ҡыҙыҡлы кешеләр күп. Иллюзия менән ысынбарлыҡты берләштереп ҡарарға тырышыусы медиумдар, спиритизм менән шөғөлләнеүселәр менән таныштым.
Рафиҡ быйыл унда үҙе юлыҡҡан бер мөғжизәне иҫенә төшөрҙө. Күк ап-аяҙ, түпһеҙ зәңгәрлектә йәйғор ҙа, болот әҫәре лә юҡ ине.
Ҡайтҡас, видеоһүрәттәрҙе ҡарап ултыра ине, бер нисә фотола йәйғор һүрәте һәм ғәрәпсә “Алла” тигән яҙыуҙы күреп аптырап ҡалды.

Аллаға ныҡлап ышаныуы асылда ошонан башланды уның. Ниндәй ғиллә булғандыр – был сер көйө ҡалды. Әллә, юғиһә, Линараны осратасағына ишара булдымы? Уларҙы бит әле Алла үҙе осраштырҙы. Ул йәшлек йәре яғына йылы ҡараш ташланы. Ни арала Фейхтвангер, һөйләшеү темаһын үҙгәртеп, әкренләп коньяк йота-йота, уға Лейпциг ҡалаһында башҡорттарҙы белеүҙәре, хатта ҡала-ла башҡорт урамы булыуы, унда башҡорт батырына һәйкәл тороуы хаҡында сурыта ине.

– Минең тарихсы дуҫ Петер Трог башҡорттарҙың Наполеон яуынан ҡайтып килгәндә Лейпциг ҡалаһында туҡтауы тарихын һөйләгәйне. Петер ҙа башҡорт-са апаруҡ һупалай, Өфө тигән башҡорт ҡалаһында таныштары ла бар.

– Улай икән.

Ни тиһәң дә, икенсе ҡитға кешеһенең, европалының, Урал менән яҡындан ҡыҙыҡһыныуы сәйер. Ябай ҡыҙыҡһыныу түгел инде был. Уларҙың һүҙҙәре арта-бан берекмәне. Бына, ниһайәт, ҡунаҡтар официант менән иҫәпләште. Арыраҡ өҫтәлдә күңелле гәпләшеп ултырған немец делегацияһы вәкилдәре менән хуш-лашып, улар урамға сыҡты.

Йәйге йылы Екатеринбург кисе. Ресторан алдында үҫкән сәскәләрҙән бөтә тирә-яҡҡа тәмле хуш еҫ тарала. Коньяктан күңелләнеп алған ҡунаҡ ғалимдың яңы таныштарынан айырылғыһы килмәй инеме, әллә ата-бабалары ҡаны уйнап, сәме уянып киттеме – хәбәрҙе ҡуйыртты. Ер планетаһына ҡағылышлы үҙенең фараздарын, Ерҙең киләсәген нисек күҙаллауын һөйләп китте.

– Ер шары – ерҙә йәшәгән бөтә халыҡтыҡы. Ул – уртаҡ өйөбөҙ. Беҙ уны бергә-ләшеп һаҡларға бурыслы. Бына Уралды ғына алайыҡ. Уртаса бер квадрат кило-метр ергә нисә кеше тура килә? Егерме –егерме биш. Ә Бангладешта – алты йөҙ, Японияла – өс йөҙ ҙә утыҙ бер, Бөйөк Британияла – ике йөҙ ҙә утыҙ алты, Рәсәйҙә – ун кеше. Ә донъя буйынса — ҡырҡ кеше икән. Был ғәҙелме? Глобализацияны мин шулай аңлайым: һәр ерҙә ғәҙеллек булырға тейеш. Ер шарында урын һәр халыҡҡа, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары һәр илгә тигеҙ, һәр милләткә тиң бүленергә тейеш.

Бындай фекер Рафиҡҡа ҡырҡа оҡшаманы. Линараға ла. Әммә эскән кеше менән дискуссия ҡороп тора алмайҙар ҙаһа. Уйҙары нисек тә Эрнест әфәндене тиҙерәк ҡунаҡханаға оҙатыу ине. Немец үҙе Линараның Рафиҡ менән бергә китеүен теләмәй, буғай: һаман ҡунаҡхана ишеге төбөндә тапанып тора бирҙе.

– Һеҙ, Линара ханым, Рур университетының экономика бүлеге аспиранты булырға тейешһегеҙ. Мин һеҙгә ҙур өмөт бағлайым. – Бүлмәһенә инеп барғанда ул тағы тәржемәсеһенә боролдо. – Минең тәҡдим тураһында уйла, Мәлихова. Германияла алынған белем донъя кимәлендә баһалана.

Уны саҡ тигәндә ҡалдырып хушлашып сыҡҡас, икеһе лә иркен тын алды.

– Немец менән дуҫ булһаң, кеҫәңдә пистолетың булһын инде ул.

– Башҡорт телен өйрәнеп алған бит әле. – Линараны бигерәк тә шул аптырат-ты. – Был әллә рус телен беләме икән, тип тә шикләнеп ҡуя торғайным. Башы һалам менән ябылғандыр әфәнденең.

– Һиңә ҡармаҡ һалып маташа түгелме?

– Мин уларҙың бәйләнеүенә өйрәнеп бөткәнмен.

– Германияла уҡыным, тиһеңме?

– Эйе, Рур университетында. Уларҙың да төрлөһө бар. Немецтарҙың холҡон өйрәндем.

– Ҡуйсы әле, Линара, халыҡ юҡҡамы ни “Иле берҙең – ҡәүеме бер” тимәй. Һәр кем дә үҙ илен яҡлай, үҙ көлсәһенә көл тарта. Был әфәнде лә симпозиумға үҙ иле-нең мәнфәғәтен яҡлар өсөн килгән.

– Нимә етмәй икән уларға? Тормоштары беҙҙекенә ҡарағанда күпкә яйлы, рәхәт, уңайлы бит инде.

– Нәфсе... Кешелек донъяһын нәфсе аҙҙыра. Байына тағы ныҒыраҡ байырға кәрәк. Власть кешеһе юғарырак власҡа ынтыла. Һәр береһе хаттин ашырға тырыша. Һине Германияға алып китәм, ти, ни эшләргә итәһең?

– Германияла уҡыу миңә оҡшаны. Аспирантураға инеү насар булмаҫ ине. Был бит үҙ илеңде ташлап китеү түгел.

– Үҙ илең – алтын бишек, тигәндәр.

– Мейәс буйҙарын яратам мин...

Рафиҡ һөйгәненең ҡулынан тотоп алды.

– Мин һине хәҙер эргәмдән бер ҡайҙа ла ебәрмәйем. Айырылышыр өсөн табышманыҡ.

Киске урам бөгөн шундай серле. Төпһөҙ күктә эреле-ваҡлы йондоҙҙар емелдәшә. Йәш саҡтарҙы хәтерләтеп, талғын ел Линараның сәс бөҙрәләре менән уйнай. Ун ете йыл элек Силәбе урамдарынан шулай йөрөй торғайны бит улар. Ун ете йыл буйы икеһе лә, ғажиз булып, осрашыу тураһында хыялланды. Саҡ менән Суҡ кеүек һағынды улар бер-береһен. Әле етәкләшеп тротуарҙан килеүҙәре төш кенә түгелме?

– Белһәң ине, мин һине күпме эҙләнем, Линара?! Тыуған ауылыңа барҙым. Әйләнгән һайын атайыңдан һораштым...

– Бая әйттең.

– Стәрлетамаҡ балалар йортонда ла һине берәү белмәне, берәү күрмәгән. Нисек улай итә алдың? Мине Рафиҡ эҙләр, тип уйламаның мы ни?

– Уйланым, шуға ҡайҙа йөрөгәнемдә берәүгә лә әйтмәнем. Мин тәҡдиргә ныҡ ышанам. Яҙған булғас, бына осраштыҡ таһа. – Линара аҫҡа ҡараны. Рафиҡҡа тормошондағы проблемалар тураһында һөйләй алмаҫ. Нисәмә йылдарҙан һуң тәүләп күрешеп торғанда үҙенең үкһеҙ бала сағын, үҙенең ғәзиз әсәһенән дә, атаһынан да, үгәйҙән дә нисек ныҡ рәнйетелеүен, бер кемгә лә кәрәкмәгән артыҡ бала булыуын бында сурытып тора алмай бит инде.

– Күңелемә һине ҡасан да бер табырмын кеүек ине. Донъяның аҫтын өҫкә әйләндереп эҙләргә, иң көслө детективтарҙы ялларға тип йөрөй инем.

Линара ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

– Бына ҡыҙыҡ булыр ине, йәл, осрашып өлгөрҙөк. Ғаиләң барҙыр?

– Өйләнгәйнем. Ҡыҙыбыҙ ҙа булды. Айырылыштыҡ. Мин күптән буйҙаҡмын. Күберәк ғилми эш менән мәшғүлмен. Ә һинең шәхси тормошоң нисек?

– Минең дә яҙмыш әллә ни маҡтанырлыҡ түгел. Тормошҡа сыҡманым. Эштән баш ҡалҡытҡан юҡ. Яңғыҙмын. – Линараның уфтанғандай әйтеп ҡуйыуы, гүйә, Рафиҡтың йөрәгенә барып ҡаҙалды. Уның да ғүмергенәһе заяға уҙған икән.

– Линара! – Артыҡ тулҡынланыуҙан Рафиҡтың тауышы ҡалтыранды. – Нисек улай? Быға мин генә ғәйепле... Мине көттөң, эйеме?! – Ул үҙенең кәйефен һиҙҙермәҫ өсөн уҫал шаяртмаҡсы булды. Ҡатын уға тулы етдилек менән яуап бирҙе:

– Эйе, көттөм.

Рафиҡ һөйгәненең ҡулын ауырттырғансы ҡыҫты, күкрәгенән бары бер генә һүҙ һығылып сыкты: “Линарам!” Һәр кем үҙ кисерештәренә сумып, тағы бер аҙ өнһөҙ атланылар. Шулай бара торғас, ҡапыл икеһе бер юлы:

– Иҫеңдәме? – тип бер-береһенә ҡараны.

– Иҫеңдәме, Рафиҡ?!

– Иҫеңдәме, Линара?!

– Иҫемдә, иҫемдә!!!

– Күк күкрәп, йәшен йәшнәгән төндө таңға хәтлем урам буйлап йөрөгәйнек.
– Йәшен ялт та йолт итә, дөбөр-шатыр күк күкрәй, бына-бына ямғыр сиәкләп ҡойсаҡ, ә беҙгә, тилеләргә, эй, күңелле. Етмәһә, миңә йыр өйрәтәһең.
– Иҫемдә, өләсәйемдең яратҡан йыры ине ул.
Линара шунда уҡ йырҙың һүҙҙәрен әйтеп бирҙе.

Мейәс буйҡайҙары ҡыҙырым ҡырсын,
Ҡырсындары сәйлән-мәрйендәй.
Ҡара ла ғына ҡашым, ҡарлуғасым,
Йәшәйек тә икәү бер йәндәй.

– Онотмағанһың!!!
– Онотманым! – Линара көрһөнөп ҡуйҙы. Икеһенең дә күңелен йәшлек хәтирәләре ялмап алды. Эй, йәшлек, йәшлек! Хистәрҙең сәскәләргә тиң наҙлы, күҙ йәшендәй саф саҡтары. Шунда егет тәүгә ҡыҙҙың ҡулдарына ҡағылғайны.
– Шәп бит, эй! – тигәйне ул, йәшен ялтлаған күккә ҡарап. Линара, егеткә һыйынып, ҡолағына бышылданы:
– Их, гел бөгөнгә кеүек йәшнәп йәшәһәң ине!
Икеһенең дә тормошонда ошонан да бәхетлерәк мәл булмағандыр. Тәбиғәттең илаһи ҡөҙрәтен тойоп йәнәш атлау, Рафиҡтың аһәңле йырын күңелгә һеңдереү – донъяла ошонан да ҙур шатлыҡ юҡ һымаҡ ине уларға.

Мейәс кенә буйы ҡыҙырым ҡырсын,
Ҡыҙырым ҡырсындарҙан йүгерҙем.
Үткән генә ғүмерем иҫемә төшкәс,
Башҡынамды сайҡап һыҙғырҙым.

Һөйгәненең күңелендә ҡайҙан был саҡлы моң? Ҡайһылай ҙа һағышлы, үҙәк өҙгөс итеп йырлай. Бына Линараға, исмаһам, моңайһа ла ярайҙыр. Үҙен беләбелгәндән бирле күңел йылыһын күрмәне, етемлектең ауыр ғазабын үҙ елкәһендә татыны. Эсе тулы ҡайғы-хәсрәт: үсеп ултырған үләнгә тынын бөркһә, йәшел үлән ҡара көйөп сығыр ине. Ә Рафиҡтың иһә ул күргән-кисергәнде ишеткәне лә булмағандыр. Шулай ҙа күңелгенәһе, һай, нескә. Был донъяла аңлаһа уны бер Рафиҡ ҡына аңлай алыр. Шулай уйлағайны ҡыҙ ул саҡта. Ә аҙаҡ!? Иҫендә, барыһы ла иҫендә...
Йөрәккенәһе күкрәгенән осоп сығырҙай талпынған ҡыҙ, Рафиҡтың йырын тыңлай-тыңлай, мәңге шулай етәкләшеп Мейәс буйҡайҙарын буйлар ине. Ошо юлдың осо-ҡырыйы булмаһын ине лә улар шулай ғүмер буйы йәнәшә барһын да барһын ине. Юҡ шул. Хыялдар әкиәттә генә тормошҡа аша. Ысынбарлыҡтың иһә – үҙ ҡануҙары. Уларҙы күңелһеҙлек ҡапҡа төбөндә үк һағалай ине. Линараның атаһы, асыуы болоттай ҡабарған Зәйнулла ағай, ажарланып ҡаршы алды.
Ой, юҡ-юҡ, кәрәкмәй!!! Линара ул турала хәтерләргә теләмәй. Күңелһеҙ хәтирәләр, ары китегеҙ, ҡалдырығыҙ бөгөнгә. Бөгөн ул шундай бәхетле. Әйтерһең, шул дауыллы кистең һәйбәт дауамы. Яҙмышы уға барыбер миһырбанлы. Ниһайәт, улар осрашты. Ул хәҙер беренсе категориялы тәржемәсе булып эшләп йөрөй. Халыҡ-ара форумдарға ла саҡырып торалар. Эш хаҡы һәйбәт. Ҡала уртаһында бынамын тигән фатиры бар. Бер нәмәгә генә эсе боша: һаман яңғыҙы. Улар шулай бер-береһенән айырыла алмай йөрөгәндә, Рафиҡ Камалетдиновичтың кеҫә телефоны шылтыраны.
– Алло, Һеҙ ҡайҙа? Иртәгәге сығыштар тураһында бергәләшеп фекер төйнәргә кәрәк ине.
– Ә-ә, Таһир Искәндәрович! Фекерҙәр ошондай: беҙ үҙ милләтебеҙ мәнфәғәтен

яҡлап сығыш яһарға тейеш. Глобализация башҡорттарға нимә бирер? Шул турала уйлашайыҡ. Мин оҙаҡламай ҡайтып етермен.

Шылтыратыу әкиәти донъянан икеһен дә ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы, алда яуаплы эш көнө тороуын иҫтәренә төшөрҙө. Шулай ҙа улар хушлашырға ашыҡманы, һөйләшер һүҙҙәре бигерәк күп ине шул.

– Һеҙ Фейхтвангер әфәнде менән бер секцияла булаһығыҙ, ҡайһы бер мәсьәләләрҙә уның менән килешмәһәгеҙ ҙә, ғалимға итәғәтле булырға тырышығыҙ. – Бая Линара уның көнләшеп ҡуйғанын, тиҫкәреләнеп торғанын һиҙенгәйне, шуға быңдай иҫкәртеүҙе кәрәк тапты. – Рио-де-Жанейро кәңәшмәһе ҡарарҙарын үтәү, Европа илдәрендә экологик стабиллек булдырыу йәһәтенән күп көс һалды ул. Быны ғалимдар белә, шуға уға күпселек ихтирам менән ҡарай, фекеренә ҡолаҡ һала. Туплаған тәжрибәһе киләсәктә беҙгә лә ярап ҡалыр. Ҡайһы саҡ ярҙамы ла тейер. Дошманды асыуланып йә үпкәләп еңеп булмай. Алдырһаң, аҡыл менән алдыраһың.

– Рәхмәт. – Рафиҡ һүҙҙе ҡуйыртманы. Ул үҙендә лә хәҙер ер аҫтында йылан көйшәгәнен һиҙерлек һиҙгерлек һәм тәжрибәһе барын тоя. Төрлө илдәрҙәге коллегаларының ғилми хеҙмәттәре менән танышып бара, һәр береһенең тын алышын, ниндәй проблема өҫтөндә эшләгәнен белеп йөрөй. Мөнәсәбәттәрҙә толерантлыҡ һаҡлайбыҙ тип, Башҡортостан йәшмәһен нәфселәре мәңге ҡанмаҫ буржуйҙарға ихтыяр итеп ҡуймаҫтар. Бизнес ике яҡ өсөн дә берҙәй үк файҙалы булырға тейеш.

Линара, хужабикә булараҡ, такси алып, Силәбе ҡунағын Академия арендалаған ҡунаҡханаға оҙатып ҡуйҙы ла үҙе лә ҡайтып ял итергә ашыҡты. Иртәгә – форумдың дауамы, дөйөм өлөштән дә мөһимерәге: “Егерме беренсе быуат һәм кешелек донъяһының глобаль тормошҡа күсеүе” симпозиумында ҡатнашыусылар секцияларға бүленеп эшләйәсәк. Әлбиттә, ике һағынышҡан йөрәк берберенән айырылғыһы килмәй ине. Тик улар шуны аңлай: быңдай саҡта хистәрен аҡылға буйһондорорға тейештәр. Ер планетаһының, илдең, тотош милләттең уртаҡ яҙмышы хәл ителгән саҡта шәхси хистәр икенсел. Йәш саҡтағы кеүек, ни теләйһең шуны эшләп йөрөр заман түгел. Тағы осрашырға һүҙ ҡуйышып, йылы хушлаштылар.

– Иртәгәгә тиклем, ҡәҙерлем.

– Тыныс йоҡо, яҡташ!

Рафиҡ яттҡас та, йоҡлап китә алмай, һаман уйланды. Берсә Линара менән бәхәсләште, берсә халҡының киләсәге өсөн борсолдо. “Мин форумға ел ыңғайына йөрөр өсөн килмәгәнмен. Фәнни ғилемемде файҙаланып, туған халҡым мәнфәғәтен ныҡышмалы яҡлар, һаҡлар өсөн һайлап ебәрелгәнмен”, – тип уйланы ғалим. Иртәгәһе көндөң ауыр буласағын иҫләп, йоҡларға тырышты, күҙҙәрен йомдо. Әммә уйылып китерҙәй тынғыһыҙ уйҙар һаман мейеһен бырауланы. Экологик, иҡтисади мәсьәләләр менән ныҡлап шөғөлләнә башлағаны бирле, уға бер һорау тынғылыҡ бирмәй: ер аҫты, ер өҫтө торғаны тотош хазина булған көйө, ниңә башҡорт халҡы ярлылыҡтың сигендә йәшәй? Ауылдар бөтөп, юҡҡа сыға, ҡайҙа барма – эшһеҙлек, төпкөл ауылдарҙа юлдар насар, һыу, газ менән тәьмин ителеү үтә лә хөрт. Силәбе башҡорттарының яҙмышы ла шатланырлыҡ түгел. Быларға ҡайһылай итеп сик ҡуйырға? Халыҡты нисек меҫкенлек көрсөгөнән сығарырға?

Күҙҙәрен тәҙрәнән йондоҙло күккә төбәп, ғалим шул турала уйланды. Эйе, быуаттар буйы башҡортто әҙ таламанылар, әҙ иҙмәнеләр. Милли холоҡта, әлбиттә, был сағылыш тапмай ҡалманы. Башҡортто тамам баҫымсаҡҡа әйләндерҙеләр. Әҙәм балаһы мәҙәни түбәнлектән, сараһыҙлыҡтан, йырып сыҡҡыһыҙ

ҡаршылыҡтарҙан өмөтһеҙлөккә бирелә һәм түбән тәгәрәй. Барыһын аңлап торған көйө, сәйәсмәндәр мәсьәләне анһат хәл итергә тырыша. Етәкселек бөтә ошо етешһеҙлектәрҙә халыҡтың үҙен генә ғәйепләп, дөрөҫөн әйткәндә, башынан себен осора. Ә сәбәп бит тәрәндәрәк ята. Ер шарын афәткә әйҙәгән наркомания, эскелек, аҙғынлыҡ, садизм, геноцид, терроризм кеүек күренештәрҙе булдырмау – халыҡтың үҙенән генә түгел, иң беренсе, ил етәкселәренән тора. Глобализация кешелек донъяһы өсөн мөһим булған нәҡ ошондай мәсьәләләрҙе өйрәнеп, ғилми яҡтан дөрөҫ һығымта яһап, бөгөнгө кеүек ҙур форумдарҙа уртаға һалып тикшерергә тейеш.

Планета яҙмышын кешеләрҙең әхлаҡлылығы хәл итәсәк, тип ныҡыша дин әһелдәре. Симпозиумда ла бындай фекер әйтелде. Рафиҡ бында хаҡлыҡ барлығын һиҙенә. Ҡапыл ғына фәнни күҙлектән иҫбатлай алмаһа ла, интуицияһы донъяны иман, әхлаҡ ҡотҡарыуын эшкәртә. Бер аҙҙан уның уйҙары халҡы яҙмышынан донъя кимәле сәйәсәтенә барып тоташты. Рәсәйгә “һалҡын һуғыш” иғлан ителеүен иҫенә төшөрҙө. Икенсе донъя һуғышында Рәсәйҙе еңә алмаған, уны эстән тарҡатыу һәм емереү планы төҙөлә. Аллен Даллестың “Рәсәйҙең башына араҡы һәм аҙғынлыҡ етәсәк” тигән доктринаһы, шул программа буйынса планлы эш алып барылыуы, глобализация күҙлегенән ҡарағанда, үҙе үк ҡот осҡос геноцид түгелме ни? Күпселек илдәрҙә секс культы, көсләү, садизм, эскелек, наркомания кеүек аҙғынлыҡ, енәйәт, боҙоҡлоҡ сәскән негатив хәлдәргә күҙ йомоп ҡарала. Йоғошло яман сир кеүек, улар илдән илгә таралып, кешелек донъяһы үҫешенә кире йоғонто яһай. Нәҡ ошондай фетнәләр планетабыҙҙы һәләкәткә алып бара ла инде.

Хәҙер беҙҙең илебеҙ ҙә ошондай түбән тойғолар солғанышында тороп ҡалды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, унан ҡотолоу юлы һаман табылмаған. Был хәс тә сит илдән картуф баҡсаларына килеп эйәләгән колорадо ҡуңыҙы һымаҡ. Уны ла ағыулап та, йыйып та ҡарайҙар, әммә әрһеҙ бөжәк картуф баҡсаһын ташлап китергә һис йыйынмай. Шуның кеүек, сит илдән индерелгән насар ҡылыҡтарҙы ла, холоҡҡа әйләнеп китһә, бөтөрөүе ауыр.

Рафиҡ Камалетдинович фекеренсә, башҡорт халҡы үҙенең социаль проблемаларын халыҡтың генетик хәтерен тергеҙеп кенә еңеп сыға аласаҡ. Генетик хәтер мең йылғы аңды үҙендә һаҡларға һәләтле. Борон бит ата-бабалар ниндәйен дә рухлы, азатлыҡ һөйөүсән, берҙәм, көслө, ғорур ҡәүем булған. Беҙгә ана шул рухты тергеҙеү өсөн көрәшергә кәрәк. Башҡорт эсә, тиҙәр. Шул турала гәзиттәргә тултырып яҙалар. Рафиҡ быны ни бары ҡағыҙ әрәм итеү һәм күҙ буяу тип кенә атай... Йәнәһе, эш барамы-бара, киң мәғлүмәт саралары яҙамы-яҙа, тимәк, көрәш ныҡ йәйелдерелгән. Нисәмә йылдар бара бындай низағ-тартыш. Ҡайҙа уның һөҙөмтәһе?! Күпләп дин юлына баҫыу арҡаһында ғына әкренләп эскелек кәмей башланы. Рафиҡтың иманы камил: кешенең рухи кимәлен күтәреү аша ғына төрлө кәмселектәрҙән, мәҫәлән, шул уҡ эскелек афәтенән ҡотолоп буласаҡ.

Эйе, проблемалар бихисап. Уларҙы хәл итерҙәй төплө, етди ғалимдар ҙа етәрлек. Бергәләшеп тотоноу ғына кәрәк, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырҙар. Фән донъяһы педантлыҡты ярата. Унда кемдәр үҙ фекерен фәнни яҡтан статистик мәғлүмәттәр, цифрҙар килтереп иҫбатлай ала, шулар яҡлау, танылыу таба. Яҙған булһа, Рафиҡ әле уйлаған проблемаларҙы донъя глобализацияһы кимәленә күтәрә алыр. Быға унда теләк тә, дәрт тә, белем дә етерлек.

Рафиҡ Камалетдинович, бына ошоларҙы уйлап ята торғас, таң алдынан ғына ойоп китте.

Өсөнсө бүлек

Фатирына ҡайтҡас, Линара ла бөгөнгө көн тәьҫораттарына тиҙ генә йоҡлап китә алманы.

Төрлө форумдарҙы күргән, төрлө кимәлдәге ғалимдар менән аралашҡан, бөтә Европа илдәрен йөрөп сыҡҡан, немец, инглиз телдәрен үҙ теле кеүек яҡшы белгән тәржемәсе глобализация һәм тотороҡло үҫеш проблемалары менән яҡындан ҡыҙыҡһына. Рафиҡ Камалетдинович кеүек, уны ла тыуған халҡының аяныслы яҙмышы борсой. Глобализация меңәр йылдар буйы йәнтөйәге Уралын биләгән әҙ һанлы башҡорт халҡына нимә бирер? Силәбе, Башҡортостан ғалимдары делегацияһының проблеманы нәҡ ошондай формала ҡуйыуы оҡшаны уға. Ысынлап та, ярлы илдәрҙе баҫып алыу, халҡын дискриминациялау, деонтология – бөгөн дә ғәҙәти хәл. Глобализация иһә ошо күренештәргә ҡаршы көрәшергә тейешле түгелме һуң? Ә ҡайһы бер ғалимдар, шул уҡ Эрнест Фейхтвангер ҙа, уны бары матди килем алыу сығанағы итеп файҙаланырға йыйына.

Линара күберәк Рафиҡ тураһында уйланы. Ниндәй ҡыйыу ғалим булып өлгөргән ул. Фекерҙәре төплө, ныҡлы уйланылған, форумдағы сығышы ла ете ҡат үлсәнгәнгә оҡшай. Халыҡ-ара симпозиумға һәр кемде саҡырып бармайҙар, тимәк, ул – БМО-ла танылған ғалимдар иҫәбендә. «Урал йәшмәһе» хеҙмәте үҙе генә ни тора! Линараның күңелендә һөйгәне өсөн ғорурлыҡ уянды.

Рафиҡ уның тураһында белмәһә лә, Линара ошо йылдар дауамында һөйгәненең ҡайҙа йөрөгәнен, ни эшләгәнен гәзит-журналдар аша уҡып, ишетеп, белешеп йөрөнө. Экология проблемаһы өҫтөндә эшләүе хаҡында ла хәбәрҙар ине. Тик шәхси тормошо тураһында һорашыуҙы кәрәк тапманы. Холоҡ ныҡлығы биргән уға Хоҙай, хәс тә Уралтауҙың йәшмәһе. Ятраҡан кешеһенә мәңгелек тоғролоҡ һаҡлау, рәнйетелеүҙәрҙе кисерә алмау, тәүәккәл һәм үҙ аллы булыу, ҡатмарлы эштәрҙе лә үҙаллы башҡарып сығыу, үҙ аллы етди ҡарарҙар ҡабул итеү – балалар йортонда тәрбиәләнгән сифаттар. Линара уларға даими тоғролоҡ һаҡлай. Ни тиһәң дә, мин үҙ кендегемде үҙем ҡырҡырға тейеш, тип үҫкән ҡыҙ бала бит ул. Рафиҡ менән бәйләнешкә ингеһе, үҙе тураһында хәбәр ебәргеһе килгән саҡтары ла булды. Ҡатыны, балалары барҙыр, тине, ғаиләһен рәнйетеүҙән, араларын болартыуҙан ҡурҡты. Ниңәлер яҙмышы ла әлеге кеүек осраҡлы ғына осраштырырға теләмәне. Бәлки, әсәһе Миңъямал апайҙың теге саҡтағы кәмһетеүен һаман кисерә алмаған өсөндөр? Һис шикһеҙ, үгәй әсәһе Мәйсәрәнең дә шауҡымы, йоғонтоһо тейгәндер Рафиҡтың әсәһенә. Моғайын, ғәҙәтенсә, осраған һайын үгәй ҡыҙын яманлағандыр. Күңеле шулай һиҙә. Йә, ярай, үткән эштән төш яҡшы, Миңъямал апайҙың да, үгәй әсәһе Мәйсәрәнең дә этлектәрен күптән оноҡкан инде. Их, Рафиҡ... Бәхете әле шундай яҡын, эргәлә генә. Фатирына, эй, саҡырғыһы килде. Тик ҡыйманы. Етмәһә, икеһенә лә ял итергә кәрәк ине. Линараның, бөтә эштәрен ҡуйып, Рафиҡтың ҡосағына ташланғыһы килә. Ошо йәшенә етеп, эштән бушап, һөйөү наҙын татып ҡарағаны булманы. Их, һөйөлөп, ир иркәһе булып ҡына йәшәргә ине! Һинең турала кемдер хәстәрлек күрһен, эштән ҡайтыуыңды көтөп алһын. Эйе, Рафиҡ уны һаман ярата шикелле. Ә арала бит йылдар ята. Төшөндә Мейәс буйҙарында йөрөнө. Йылғаны кисеп сығып бара. Һыу тап-таҙа, талғын ғына ағып ята икән, төбөндәге ҡыҙғылт ҡырсындары, ваҡ таштары айырым-асыҡ күренә. Ҡолағына йыр ишетелә. Бәй, әллә Рафиҡ йырлай инде?

Мейәс кенә буйы, ай, ҡырсын таш,
Тулҡын тибеп уны тултырған.
Түҙә лә генә көтә белгәндәргә
Яҙмыш, тиҙәр, бәхет булдырған.

Ҡолағына кемдер бышылдап, шиғыр һөйләгән һымаҡ булғанға уяныл китте Рафиҡ.

Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Яу астырған Уралым,
Ай, Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым,
Илгә дошман килгәндә,
Ышыҡ булған Уралым.

Мәктәптә ятлаған ҡобайыр юлдары ла баһа!.. Башҡорт теле уҡытыусыһы Рузидә апай ныҡып-ныҡып ятлатҡайны. "Тыуған ерҙе данлар өсөн сәсәндәр ниндәйен генә матур һүҙҙәр уйлап тапмаған. Ҡобайырҙың һәр һүҙе сулпы кеүек сыңлап, аҫыл таштай нур сәсеп, моңло йырҙай ҡолаҡҡа яғылып тора, – тип тәмләп-тәмләп һөйләгәне әле лә иҫендә. Уның биология һәм геология фәндәре менән ҡыҙыҡһынып китеүе лә ошо уҡытыусы арҡаһында булды бит. – Кәрәк саҡта донъя кимәлендә башҡорт халҡының мәнфәғәтен яҡларҙай үҙ ғалимдарыбыҙ булһын", – ти торғайны апалары. Уҡыусыларына баһа-кимәлде шулай юғары ҡуйҙы уҡытыусы.

Рафиҡ, тороп, тәҙрәнән тышҡа ҡараны. Таңдың әрә-һәрәһе. Тағы бер-ике сәғәт йоҡлай ала әле. Кире ятты, әммә күҙенә йоҡо инмәне. Кисәге уйҙары, осона сығыуҙы теләгәндәй, уны тағы үҙ солғанышына алды.

– Шулай, глобализацияның әҙ һанлы халыҡтар өсөн ике осло булыуы ихтимал. – Ул фекерен, кемгәлер ишеттерергә теләгәндәй, тауышланып әйтте. – Көслөләр – көсһөҙҙө, байҙар – ярлыны, уҫалдар – йыуаштыы, хәйләкәрҙәр намыҫлыны иҙеп, тапап китергә әҙер заман килде. Хәйер, был борон да шулай булған. Әҙ һанлы халыҡтарға күктәрҙән мәрхәмәт көтөп, иртәгәнде уйламай йәшәү – үҙеңә-үҙең ҡәбер ҡаҙып, шунда төшөп ятыуға бәрәбәр. Халҡыбыҙ ерҙә милләт булып йәшәһен өсөн һәр кемдә яуаплылыҡ тойғоһо булыу мөһим. Беҙҙең заманда бигерәк тә. Фән өлкәһендә лә артта ҡалырға ярамай. Бер-беребеҙгә ярҙамсыл, берҙәм, кәрәк саҡта ҡыйыу һәм тәүәккәл булыу фарыз беҙгә. Бөгөнгө секция эше, унда яһаясаҡ сығышы уйҙарын тағы тәрәнгәрәк сумырҙы. Тәү ҡарашҡа илдә йәш быуынды тәрбиәләүгә әҙ-мәҙ иғтибар бүленгәндәй, әммә ул тоҙһоҙ аш һымағыраҡ. Эш барамы – бара, тип әйтер өсөн генә ойошторолған саралар, беренсенән, йәштәрҙең барыһын йәлеп итеүгә йүнәлтелмәгән. Икенсенән, мәктәп берҙе һөйләй, телевизор – икенсене. Унда төрлө каналдарҙан көнө-төнө үлтереш, атыш, хәйлә, мәкер, секс пропагандалана. Әҙергә – хәҙер, эшһеҙ анһат йәшәгән, ата-әсә елкәһен кимереп шашынған әҙәпһеҙлекте күреү нимәгә өйрәтә алһын? Насарлыҡты күберәк белгән, ишеткән һайын йәштәрҙең әҙәбе ныҡыраҡ асыла, ояты юғала. Ата-бабалар рухында, тыуған еребеҙҙең, илебеҙҙең, телебеҙҙең киләсәге итеп тәрбиәләнергә тейешле балаларыбыҙ, иблис ҡотҡоһона бирелгән ахмаҡтай, аҙына, ваҡлана, енәйәт юлына баҫа, аҡса, матди байлыҡ ҡолона әүерелә.

Киләсәктә әсә булып, милләт бәҫен арттырырға тейешле ҡыҙҙарыбыҙ ҙур ҡалаларға китеп юғала, сит илдәргә сығып китә. Илендә күкрәк киреп йәшәйһе урынға, ундағы кәмһетелеү, хурланыуҙарға түҙә. Бының сәбәбе – мохтажлыҡ. Ярлылыҡ милләтте көсһөҙләндерә, башҡа көслө милләттәрҙән иҙелеүгә дусар итә. Ҡыҙ затын ситкә ебәрмәй һаҡлау — көслө заттың бурысы. Бынау Эрнест Фейхтвангерҙы күрсе, Линараға ҡайһылай йәбешеп ята! Әйтерһең, Германияла булған аспирантура беҙҙә юҡ. Уҡыу уға... һылтау ғына. Уның йәш, һылыу ҡатынды үҙе

менән алып киткеһе килә. Ул кешегә үҙҙәрендә немец ҡыҙҙары бөткәнме? “Линара һиңә тәтемәйәсәк, әфәндем. Ҡуҡыш һиңә! Сибәр, аҡыллы ҡыҙҙар үҙебеҙҙән дә артмай”, – Рафиҡ Линараның тын алышын һиҙҙе кисә. Онотмаған йәшлек мөхәббәтен. Уларҙы хәҙер бер ни ҙә айыра алмаясаҡ.

Бына ошондай төрлө-төрлө уйҙар солғанышында ҡаршылаңы ул иртәне. Көтмәгәндә һөйгәненең осратыу, уның менән рухташ булып сығыуы күңелен күтәрҙе. Форумдың икенсе көнөнә ул, үҙ көсөнә ышанған һалдат һымаҡ, дәртле баҫып сығып китте.

...Симпозиумда секциялар байтаҡ ине: демография, экология, информацион технология, иҡтисад, геополитика һәм социомәҙәниәт. Рафиҡ иһә кешелек донъяһы өсөн мөһим байтаҡ мәсьәләләр ҡарауҙы планлаштырған экология секцияһы эшендә ҡатнашырға булды.

Башлап БМО вәкиле һүҙ алды. Ул сығышында күберәк статистик мәғлүмәттәргә таянды.

– Тәбиғәт ресурстары һуңғы йөҙ йылда кешелек донъяһы әллә нисәмә мең йыл тотонғандан артығыраҡ исрафланған. Былдай ҡомһоҙлоҡтоң ни менән бөтөрөн барыбыҙ ҙа беләбеҙ, әммә экономик эгоизмды туҡтатыу мөмкин түгел, – тине.

Күҙҙәренең ут сәсеп ялтырап китеүенән, тауышындағы әрнеүле ноталарҙан сығыш яһаусының ысынлап хафаға ҡалыуын аңлап була ине. Оратор артабан урмандарҙы һаҡлау мәсьәләһенә туҡталды, конкрет һандар килтерҙе. “Мәҫәлән, – тине, – техник цивилизация килгәне бирле Ер шарындағы ағастың, йәғни урмандың өстән бер өлөшө юҡҡа сыға. 1970 йылдан алып 1995 йылға тиклем кеше Ер шарының 30 процент тәбиғи ресурстарын тотонған. Ҡасандыр Европаның 80 – 90 процент территорияһын урман тәшкил иткән, ә ер йөҙөндәге урман хәҙер ни бары 33 процент майҙанда ҡалған. Бер тонна ҡағыҙ һәм картон яһар өсөн Рәсәйҙә – утыҙ ике, АҠШ-та – ете, Финляндияла – биш, Швецияла алты кубометр ағас ҡырҡыла.

Һандар форумда ҡатнашыусыларға ныҡ тәьҫир итте. Күҙ алдына ҡот осҡос картина килеп баҫты. Һәр кемдең: “Кешеләр, беҙ ҡайҙа барабыҙ? Ниңә был вәхшилеккә юл ҡуябыҙ?” — тип оран һалғыһы килде. Сығыш яһаусыларҙан академик Александр Евгеньевич Соколов БМО вәкиленең фекеренә тағы ут өҫтәне.

– Урмандарҙы күпме ҡырҡһаң да бөтмәҫтәй күрәбеҙ. Ҡағыҙҙы, целлюлозаны кәрәк-кәрәкмәгәнгә әрһеҙ ҡулланабыҙ. Мәҫәлән, тимер юл вокзалдарында бер билетҡа өс бит сифатлы ҡағыҙ ҡушып һатыла. Был, берҙән, билетты ҡиммәтләтә, икенсенән, күпме сеймал тәләф ителә. Күпме кәрәкһеҙ гәзиттәр сығарыла? Һәр өйҙөң подъезы шул гәзиттәр менән тулған. Ә уға күпме ағас әрәм-шәрәм ителә?! Былдай миҫалдар – аҙым һайын.

Төркиә ғалимының сығышы ла бик фәһемле булды. Ул дини күҙлектән сығып һөйләне һәм кешелек донъяһын Аллаһы Тәғәлә ҡанундары буйынса йәшәргә саҡырҙы.

– “Ҡөрьән” – изге китап, ул тәбиғәтте һаҡларға өйрәтә. Һыуҙы, ризыҡты, тәбиғи байлыҡтарҙы самаһыҙ ҡулланыу – иң ҙур гонаһ, – тине. – Нәфсе һәм ҡомһоҙлоҡ кешелек донъяһын һәләкәткә илтәсәк. Әҙәп, иман, тәүфиҡ, һәр нәмәлә сама – Аллаһы Тәғәлә беҙҙән шуны көтә.

Рафиҡ Камалетдинович, симпозиумдың Урал ерлегендәге ҡалала уҙғарылыуын иҫәпкә алып, секция эшендә нигеҙҙә ошо регионға ҡағылышлы проблемаларҙы күтәреп сыҡты.

– Ҡайһы бер сит ил инвесторҙары Башҡортостан, Көнбайыш Себер тигеҙлеге яҡтарында, үҙҙәренең яңы технологияһын, ҡорамалдарын, квалификациялы

кадрҙарын файҙаланып, ҙур килем алырға йыйына. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙҙең тәбиғи ресурстарҙы, сеймалды файҙаланып (металл, ағас, электроэнергия, газ), шул уҡ ваҡытта ҡара эшкә беҙҙең осһоҙ эшсе көсөн ҡулланып, байырға ынтыла. Инвесторҙарҙы беҙҙең экологияның зарар күреүе борсомай, тирә-яҡ мөхит бысраныуы, халыҡтың һаулығы ҡаҡшауы өсөн дә яуап бирмәйҙәр. Ә беҙ үҙебеҙҙең сеймалды әрһеҙләргә ирек ҡуябыҙ. Беҙ, ғалимдар, Башҡортостанға зыянлы контракттар төҙөлөүгә ҡаршы сығырға тейешбеҙ. Үҙҙәренең инвестицияһын һалғас, тауар уларҙыҡы. Ә бындай хеҙмәттәшлектең беҙҙең өсөн ниндәй файҙаһы бар?

Рафиҡ тулҡынланды. Әммә һәр әйткән һүҙе ялҡынлы патриот һүҙе ине. Төрлө илдәрҙән килгән ғалимдар алдында халҡыбыҙ, илебеҙ өсөн глобаль булған был проблеманы асыҡтан-асыҡ әйтеп биреү уға еңел булманы. Әммә кеше тәнендәге тулышҡан шеш хирург тарафынан үҙ ваҡытында ҡырҡып алып ташланмаһа, аҙаҡ ул үлемгә алып килә. Яңылышлыҡ та үҙ ваҡытында иҫкәртелмәһә, һәләкәткә этәреүе ихтимал. Рафиҡ Камалетдинович һиҙҙермәй генә Эрнест Фейхтвангер яғына күҙ ташланы. Әлеге фекер уға ла ҡағыла бит.

– Үҙ сеймалын әрһеҙләп, икенсе илдәр иҫәбенә йәшәргә теләүселәр күбәйҙе. Мәҫәлән, бөгөнгө статистик мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Ер шарының алты проценты йәшәгән Америка Ҡушма Штаттары тәбиғи ресурстарҙың ҡырҡ процентын ҡуллана. Планетаның илле-алтмыш процент бысраныуы ла шулар арҡаһында. Иртәгәһе көнөн, әйтерһең, улар өсөн башҡалар уйларға тейеш. Минеңсә, һәр ил үҙ сеймалын үҙе самалап һаҡсыл тотонһон. Икенсе илдәрҙең хоҡуғын ихтирам итһен...

Ятып ҡалғансы – атып ҡал, тигәндәй яңғыраны был һуңғы һөйләмдәр. Берәүҙәргә ул оҡшаны, ә Рәсәйҙе һауын һыйырға әйләндерергә мәкерле ау ҡороусы ил вәкилдәренең тамағына төйөр булып тығылды.

Күпте күргән, йылан аяғы киҫкән Фейхтвангер Рәсәй ғалимдарының кисә үк үҙ фекерен штыкка алыуын һиҙҙе, үҙе өсөн иң мөһим һаналған мәсьәләләргә хәҙергә ҡағылмай торорға булды. Эт ояһында көслө, ти, йә күмәкләп ябырылырҙар. Тиҙҙән Германияла, Англияла ҙур конференциялар үтәсәк, ниәтләгән темаһын ул шунда күтәреп сығыр.

Сығыш яһарға теләүселәр күп ине. Һәр береһенең телендә “Ер аҫты байлыҡтарын мәңге бөтмәҫтәй күреп, ҡомһоҙланып туҙҙырмаҫҡа!.. Киләһе быуынды уйларға!.. Бер көн менән йәшәмәҫкә!” тигәнерәк фекерҙәр яңғыраны. Симпозиум аҙағында ҡарар ҡабул ителде һәм ул һәр делегатҡа таратып бирелде. Аудиториянан сыҡҡас, Рафиҡ күңелендә ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек хисе барлыҡҡа килде. Күп ғалимдарҙың сығышында юғары идеянан килгән илһам, дәрт юҡ һымаҡ тойолдо. Энтузиазмһыҙ, пафосһыҙ ғына үткәндәй булды. Әлбиттә, бөгөнгө был форум – глобализациялағы тәүге аҙымдар. Тимәк, шеш әле өлгөрөп етмәгән. Ул тулышһа, ҡағылыу менән үҙе һытылыр. Күрәһең, экологик проблема, Ер шарын һаҡлау кәрәклеге кешелек аңына һаман тейешенсә барып етмәй. Ҡайтыу менән ошо симпозиум ҡарарҙары буйынса Силәбе, Ырымбур, Курган өлкәләрендә, Башҡортостанда айырым-айырым конференциялар үткәрергә тура килер.

Ул, уйҙарға сумып, бер мәлгә хатта Линара тураһында ла онотто. Аңғарып ҡараһа, Фейхтвангер әфәнде тәржемәсеһен ситкәрәк алып китеп, ярһып-ярһып ниҙер һөйләп тора:

– Мин һеҙҙе Германияла көтәм, – тине ул, Линараның күҙҙәренә күп мәғәнә һалынған ҡарашын төбәп. – Шунда һөйләшербеҙ. Белегеҙ, минең ниәтем етди – һеҙгә өйләнеү һәм бәхетле булыу. Шылтыратып торормон.

Линара нимәләр әйтеп өлгөргәнсе, эргәләренә Рафиҡ, тағы бер нисә танышы килеп туҡтаны. Фейхтвангер уларға боролдо.

– 2010 йылда Германияла үтәсәк конференцияға рәхим итегеҙ. Айырыуса, Рафиҡ Камалетдинович, Һеҙҙең менән унда фәнни дискуссия ҡорорға ниәт бар.

– Саҡырһағыҙ, барырға тырышырбыҙ. – Рафиҡтың да уға бирешмәҫкә уйы.

Германия делегацияһы ашыҡты: уларҙың самолеты ике сәғәттән Екатеринбургтан осоп китергә тейеш икән.

Линара һаубуллашып, немец делегацияһы йыйылған ерҙән китергә ҡабаланды. Фейхтвангер әфәнденең өйләнергә тәҡдим яһауы уға сәйер тойолдо. Германияла аспирантура үтергә ул, әлбиттә, ҡаршы түгел. Һүҙ юҡ, уларҙың дипломы һәйбәт баһалана. Тик быны өсөн Линара немецҡа тормошҡа сығырға тейеш һуң әле? Уның ятраҡан кешеһе бар. Бына-бына осрашырға торалар. Бәлки, яҙған булһа, сәстәре сәскә лә бәйләнер. Шул саҡ кеҫә телефоны шылтыраны.

– Һине күреп һөйләшмәйенсә Силәбегә оса алмайым. Ҡасан осрашабыҙ? – Рафиҡ икән.

– Бөгөн кис мин бушмын.

– Улайһа, кисәге ресторанда көтәм.

– Риза.

Линара йәшлек дуҫын өйөнә саҡырырға уйлағайны ла, Рафиҡтың тәҡдиме урынлыраҡ тойолдо. Ни тиһәң дә, аңлашыр нәмәләр күп бит әле арала.

Симпозиумға килгән ҡунаҡтарҙы оҙатып ебәргәс, Линара машинаһына табан атланы. Уның тиҙерәк фатирына ҡайтып, бер үҙе генә ҡалғыһы, йылы ваннаға сумғыһы килде. Яңғыҙлыҡҡа өйрәнгән инде: үҙ алдына уйланып йә сәғәттәр буйы уҡып ултыра ала.

Бөгөн уның барлыҡ уйы Рафиҡ тураһында. Күңел – дарья. Берсә әллә ҡасанғыһын, берсә бөгөнгөһөн күҙ алдынан үткәрә. Иҫтәлектәр өйөрмәһе күңелен солғай ҙа ала.

Эй-й-й, иҫләй китһәң бала сағында Линара күргәндәрҙе! Хәтирәләр бер мәлгә мейеһен ярып үтте лә тере һүрәт булып күҙ алдына баҫты.

...Бына атаһы менән әсәһе тағы дыу ҡубып талаша. Эргәләрендә күҙҙәре шәмәргәнсе илаған кескәй ҡыҙ бала торғанын, әйтерһең, улар шәйләмәй ҙә. Шулай ыҙғыша-әрепләшә торғас, бер саҡ дүрт йәшлек сабыйҙы өләсәһенә ташлап, икеһе ике яҡҡа китеп олаҡты. Икеһенә лә кәрәкмәгән Линараны, ахырыһы, өләсәләре юллап, Стәрле балалар йортона илтеп тапшырҙы. Үҙенең мәңгелеккә етемлеккә дусар ителгәнен белмәгән сабый һаман ата-әсәһен көттө. Килерҙәр, алып ҡайтырҙар һымаҡ тойолдо. Хатта кискә тиклем ҡапҡа тышына сығып көтөп торған саҡтары ла булды.

Бер шулай баҫып көтөп торғанда, эргәһенә күҙҙәре бәзрәйеп торған һаҡаллы ир туҡтаны. Кеҫәһенән кәнфит сығарып бирҙе, ата-әсәһеҙ икәнен белгәс, ҡыҙсыҡты ҡармап алды ла, ҡарышып тыпырсыныуына ла ҡарамай, алып ҡаса башланы. Ярай, ҡысҡырған тауышын ишетеп, яҡындағы кешеләр ярҙамға ташланды. Уңарсы тәрбиәселәр ҙә йүгерешеп килеп етте.

– Икенсе ҡапҡа тышына яңғыҙ сыҡма. Ашҡаҙар буйындағы урманға алып китерҙәр ҙә үлтерерҙәр, – тине үҙенең ҡото осҡан оло ғына тәрбиәсе апай, Линараны ҡосаҡлап. – Атайың килһә, һинең эргәңә инмәй китмәҫ.

Шунан һуң ҡыҙыҡай уларҙы көтөүҙән туҡтаны. Яҙмышына күнеү шулай башланды. Балалар йортонда насар түгел: һәйбәт ашаталар, арыу кейендерәләр. Һөнәргә лә өйрәтәләр: тегеү, бәйләү, бешеренеү, баҡсасылыҡ... Төрлө түңәрәктәргә йөрөргә мөмкин. Бында насарлыҡҡа өйрәткән кеше юҡ. Ҡыҫҡаһы, Линара йылдар үткәс тә, әле лә балалар йортон, бергә уҡыған класташтарын, тәрбиәселәрен, уҡытыусыларын һағынып хәтерләй. Әгәр үҙ ваҡытында шунда барып эләкмәһә, әлеге көндә тормошо нисек булыр ине икән? Был турала уйлауы ла ҡурҡыныс!

Иҫендә, бер ни тиклем үҫеп, донъяны аңлай башлағас, етенсе-һигеҙенсе кластарҙа уҡып йөрөгәндә булһа кәрәк, ата-әсәһен табыу теләге уянды. Тәрбиәсе апайҙары менән кәңәшләшеп, был турала ауылдағы туғандарына хат яҙҙы. Улар аша һорап, адрестарын юллап алды. Әсәһе үзбәктәр яғында йәшәй, ғаиләле, бала-сағалы булып киткән, тинеләр. Атаһының Силәбе эргәһендәге Мейәс тигән эшселәр ҡасабаһында тороуы билдәле булды. Икеһе лә тере, иҫән-һау. Бынағайыш, аталы-әсәле була тороп, ниңә әле ул үкһеҙ етемдәр рәтендә йөрөп ята?! Ҡыҙ бер көндө икеһенә лә хат яҙҙы, икеһен дә эҙләп табырға булды. Уҡыуы һәйбәт, ҡулынан эш килә, нимә тотһа, шуны гөлт итеп башҡарып ҡуя, моғайын, йөҙҙәренә оят килтермәҫ. Килеп алһалар, барырға риза ине. Әсәһенән, күпме көтһә лә, яуап хаты килмәне, ә атаһы яҙҙы. “Мәйсәрә апайың менән дүрт ҡыҙ үҫтерәбеҙ. Йәйге каникулға беҙгә кил”, – тигәйне ул. Атаһын күрергә ашҡынған Линара каникулды саҡ көтөп алды. Эй, бала саҡ... Уйлап ҡараһаң, ата-әсә наҙынан башҡа нисек әҙәм балаһы кеше булһын?!. Ниңә күҙен асмаған бесәй балаһындай сағынан уны балалар йортона илтеп быраҡтырғандар? Әллә уларҙың йөрәк урынында ташмы? Ошо тиклем йылдар эсендә, исмаһам, икеһенең береһе уның тураһында уйламаған, килеп күрмәгән, хәлен белмәгән.

Хәтирәләр, экрандағы кино һымаҡ, күҙ алдынан ағылды ла ағылды.

...Бына ҡыҙ, ниһайәт, Силәбенең Мейәс ҡасабаһында. Атаһы ҡырҡ-ҡырҡ биш йәштәр тирәһендәге күрмәлекле генә ир икән. Ул Линараны вокзалда көтөп тора ине. Урта буйлы, һарғылтыраҡ йөҙлө, йәшкелт-көрән күҙле кешенең үҙенең атаһы икәненә ышана ла алмай торҙо, әллә нисек, башта ят бауыр һымаҡ тойолдо. Тик ҡыҙ үҙен тиҙ ҡулға алды. Әллә ҡайҙан эҙләп килдең, сарбайланма, тине ул үҙ-үҙенә. Ҡыҙын күргәс, атаһының күҙҙәренә йәш тығылды. Дүрт йәшенән күрмәгән бала уны үҙе юллап килһенсе?! Етмәһә, ниндәй сибәр! Аҡыллылыр ҙа. Атаһын эҙләп табырға башы еткәс, эйе, аҡыллылыр.

Үгәй әсә, иренән күпкә йәш күренгән татар ҡатыны, Линараны һағайып ҡаршы алды. Иренең әллә ҡасан онотолған ҡыҙын күреп мөкиббән китеүен оҡшатманы. Мәйсәрәнең ҡырыҫлығын һиҙгер күңелле ҡыҙ шәйләмәй ҡалманы. Тик атаһын табыу шатлығынан ҡанатланған бала төрлө ваҡлыҡтарға иғтибар итеп тормаҫҡа булды: маҡсаты нисек тә ошо ғаиләгә ылығыу, ярарға теләү ине. Кескәй туғандарын ҡарашты, улар менән уйнаны, өй йыйыштырҙы, аш-һыу яраштырышты, хәленән килгәнсә үгәй әсәгә ярарға тырышты. Ә Мәйсәрә яһиллығын ҡуйманы. Күрше-күлән инһә, тартыныуһыҙ үгәй ҡыҙын яманланы: “Етем бала аҫрағансы, етем быҙау аҫра”, “Етем ҡорһағы ете ҡат, туйыуҙы ла, ҡуйыуҙы ла белмәй”, “Етем ҡыҙ – ек күремесе”. Ошондай мыҫҡыллауҙарға Линара өнһөҙ түҙҙе. Тәбиғи аҡылы, рәнйетелеүҙәргә ҡарамай, сабыр булырға өндәне. Былай ҙа атаһын саҡ табып алды. Беткә үсегеп, тунды утҡа яҡмаҫ инде. Ана, уны үгәй түгел, хатта үҙ әсәһе күрергә теләмәне. Ни эшләйһең инде. Ҡыҙыҡай, Мәйсәрәнең ҡыйырһытыуына ла, көн дә унан эт ашамаҫ ауыр һүҙҙәр ишетеүенә лә ҡарамай, каникулы бөткәнсе Мейәстә торорға ҡарар итте һәм шулай йәй буйы атаһы ғаиләһендә йөрөнө. Бөтәһен дә белеп, күреп торған күршеләр башта ҡыҙҙы һынаны, аҙаҡ һығымта яһаны. Бер аҙҙан аҡыллы, сабыр ҡыҙыҡайҙы үҙ балаларындай күреп йәлләне. Еңмешләнеп туҙынған Мәйсәрәнең:

– Үҫкәс ғаилә ҡорорға яраҡһыҙ инкубатор себеше булырһың әле, – тип кәмһеткәнен ишетеп, уң яҡ күршеһе әйтте:

– Абайлабыраҡ һөйләш, күрше. Тән яраһы китһә лә, тел яраһы китмәй ул. Һынап-ҡарап йөрөйөм дә, яманлаһаң да... Линара үҙ ҡыҙҙарыңа биргеһеҙ, уңған, – тине. — Алла бирһә, ул даланһыҙ бала булмаҫ. Күҙҙәре аҡыллы. Тәбиғәте баҫалҡы, тәрбиәле. Детдомда үҫкән бала тип әйтмәҫһең.

Икенсе күршеһе лә, дин юлында йөрөгән изге күңелле әбекәй, өйрәтеп әйтте:

– Бала зиһенле күренә, уҡып ҙур кеше булыр. Әҙәм кәмләү менән түгел, Аллаһы Тәғәлә кәмләмәһен. Етем тыуған бала үҙ кендеген үҙе ҡырҡа. Тормошта үҙенә үҙе юл ярыр, иншалла. Асыу – алдан, аҡыл — арттан, ти, туғанҡайым. Мәйсәрә, телеңә хужа бул, ҡаҡма етем баланы.

Күршеләренең иҫкәртеүе “үгәй әнкә”нең бер ҡолағынан инде, икенсеһенән сыҡты. Ана һөтө менән инмәгән тана һөтө менән инмәҫ... Ә аш-һыу бүлмәһендә һауыт-һаба йыуып, иплəп кенә ололарҙың һөйләшеүенә ҡолаҡ һалып йөрөгән зирәк ҡыҙыҡай аҡыллы инәйҙең һүҙҙәрен күңел һандығына һалып ҡуйҙы. Аҙаҡ та был турала йыш уйланды. Нисек инде яңы тыуған сабый... үҙ кендеген үҙе ҡырҡа алһын, ти? Әбекәй әйткән был әйтемдең мәғәнәһенә ҡапылда төшөнә алмай йөрөнө. Шулай ҙа бала аҡылы менән унда тәрән мәғәнә ятҡанлығын һиҙҙе. Тимәк, Линара үҙ кендеген үҙе ҡырҡырға тейешле бала. Кемгәлер ышана, кемдәндер ярҙам өмөт итә алмай. Хатта үҙ атаһынан да. Ҡыҙға ҡыйын булып китте. Тимәк, бәхетһеҙлеккә тарыһа, бер ваҡытта ла йәлләүсеһе, бәләгә ҡалһа, ҡурсалаусыһы булмаясак. Атаһы ҡыҙын яҡлар ине, бисәһенән уҙа алмай. Эйе, Линара үҙ яҙмышына үҙе хужа була алһа ғына әҙәм булыр. Ошоларҙы хәтерләгән һайын ул изге күңелле инәйгә күңеленән рәхмәттәр әйтә. Был аҡыллы фекер күптән инде уның тормош девизына әүерелде. Эйе, ул үҙ кендеген үҙе ҡырҡа. Берәү килеп уға: “Ошолай эшлә, быныһын былай ит, тегенеһен тегеләй ит”, – тимәне. Тик үҙ көсөнә, үҙ йөрәгенә таянып йәшәне. Меҫкенләнмәне, кешенән өлөш тә ашатманы, үҙе лә кеше өлөшөнә ҡул һуҙманы. Ғәҙел, тоғро булырға тырышты.

Хәтирәләр, хәтирәләр... Күрәһең, үткәнһеҙ – бөгөнгө юҡ. Мәйсәрәнең нахаҡтан рәнйетеүҙәре, ғәйепһеҙ көйө ғәйепле итергә тырышыуҙары үҙәгенә үтә торғайны. Балалыҡ менән үпкәләүҙәре лә шунда уҡ онотола барҙы.

Һыу ҡойонорға, йөҙөргә яратҡан ҡыҙыҡай йыш ҡына Мейәс буйына килә. Был ҡасабала уның берҙән-бер ҡыуанысы – ошо йылға. Һыуға инер алдынан тубыҡтан кисеп ҡырсынлы яр буйлап бер аҙыраҡ атлап бара. “Эй, Мейәскәйем, бигерәк матурһың, һыуҙарың шул тиклем дә шифалы!”– ти ҙә, ап-аҡ таҙа һыуҙы усына алып, битен, ҡулын йыуа. Тәрәнгәрәк инеп сирҡаныс алғас, ҡолас ташлап йөҙөп китә. Арыһа, салҡан ятып ала. Һалҡын һыу, әйтерһең, уның бәләкәс кенә йөрәгендәге бөтә юшҡынды йыуып ала ла ағыҙып алып китә. Шул тиклем рәхәт, еңел булып ҡала. Шул саҡтан бирле үҙ итте ул Мейәсте. Хисләнеп китеп хатта шиғыр ҙа сығарып, көйгә һалып, йырлап йөрөнө.

Донъяла башҡа йылға юҡ
Мейәскә тиң булырлыҡ.
Көмөш һыуы шундай шифа,
Йәнгә бирә хозурлыҡ.
Мейәскәйем – минең уйымда,
Мейәскәйем – минен йырымда.

Һыу инергә барырға булһа, бәләкәс һеңлеләре лә артынан эйәрә. Йылға ситендәге селбәрәләр кеүек, һөҙәк яр буйында септерләшеп ятып ҡалалар, ә Линара йылғаның уртаһына тиклем йөҙөп китә. Ҡайтҡас, тегеләр әсәһенә ошаҡлап апайҙарын бер килке әрләтә:

– Беҙҙе ҡарамай, бер үҙе йөҙөп тик йөрөй...

– Ҡыҙҙарыма берәй нәмә булһын әле, ҡара уны, ботарлап ташлармын.

Эй теле ағыулы ла инде! Тейгән ерҙән өтөп алыр. Әйтерһең, ғүмер буйы тик әрләшергә генә өйрәнгән. Атаһы, меҫкен, шуға түҙә бит әле. Балаларым атайһыҙ

үҫмәһен, тиҙер инде. Икәүҙән-икәү ҡалып һөйләшергә теләй, тик форсат теймәй ҙә ҡуя. Шулай ҙа бер яйы сыҡты.

Мәйсәрә Линараны атаһы менән бер гектарҙай баҡсаһына картуф күмергә сығарҙы. Зәйнулла ағай ҙа ҡыҙы менән бер иркенләп һөйләшер өсөн, күрәһең, күптән ошондай мәлде көтөп йөрөгән – тәпкеһенә таянып, берәйһе ишетеп ҡалмаһын тигәндәй, ярым бышылдап һүҙ башланы.

– Ҡыҙым, һин беҙҙең тормошҡа ҡарап, аптырап ҡуяһыңдыр. Мәйсәрә һин килгәне бирле бәйҙән ысҡынған эт кеүек. Элек тә маҡтарлығы юҡ ине, әле тағы ла нығыраҡ холоҡһоҙланды. Һине ситләтеүен күреп торам. Тик ни эшләтәһең инде уны? Иҫәр менән ауырыуға үпкәләмәйҙәр. Сабыр итәйек, ҡыҙым. Балаларҙы тағы етем итә алмайым. – Атаһы, ауыр һулап, башын аҫҡа эйҙе. – Минең тәҡдиргә шулай яҙылғандыр инде.

Линара ни әйтергә, атаһын нисек йыуатырға белмәй баҙап ҡалды. Хәл бына нисек икән дәһә. Ә ул, аңлап етмәй, ҡай саҡ атаһына үпкәләп тә ҡуя торғайны. Зәйнулла тағы ҡыҙы яғына башын борҙо.

– Ҡыҙым, һин бик аҡыллыһың. Миңә рәнйемә. Аллаһы Тәғәлә һиңә бөтмәҫ дәүләт, китмәҫ ырыҫ бирһен. Атайҙарҙың теләге ҡабул була ул, һин үҫкәс, бик бәхетле буласаҡһың. Тормош диңгеҙҙәге тулҡын кеүек бит ул. Бер дауыллоанып ала, бер тына. Һинең барыһы ла алда әле.

Ауыр хистәрҙән бөксәйеп киткән Зәйнулла шулай тине лә, йөрәгенн тотоп, арыраҡ китте. Моғайын, йөрәк серен сискәс, күңеле тулғандыр. Күҙҙәренән атылып сыҡҡан йәш бөртөктәрен ҡыҙына күрһәтмәҫ өсөн, ары атланы. «Атай, мин һине аңлайым, һиңә үпкәләмәйем, үҙеңде ғазаплама»,– тип атаһына барып һыйынғыһы килде ҡыҙыҡайҙың. Тик назлы хистәрен һиҙҙерергә өйрәнмәгән бала тартынды, баҫҡан ерендә ҡатҡан бағана кеүек торҙо ла торҙо. «Атайым меҫкен дә бәхетһеҙ икән»,– тип уйланы, үҙенең күҙҙәренән дә субырлап йәш аҡты. Ул шунда ирҙәр бәхете ҡатын-ҡыҙҙан булыуына мәңгелеккә һабаҡ алды.

Мәйсәрә иренең күңел торошон аңлауҙан алыҫ ине. Өйҙә һаман ыҙғыш талаш хөкөм һөрҙө. Шулай күп ҡарҡылдай торғас, ысынлап та, бер ҡыҙы бәләгә тарый яҙҙы. Линараның унда бер ғәйебе булмаһа ла, әрләргә сәбәп табылыуға ҡыуанғандай, үгәй әсә уны ярыла яҙып ҡарғаны.

...Йәйге йылы көн ине. Һыу баҡаһылай яр ситендә сыпырҙашып ятҡан баласаға, зыҡ ҡубып:

– Бата! Бата! Ҡотҡарығыҙ!!! – тип һөрәнләй башланы. Ысынлап та, Мейәстең бер сөңгөлөндә бата-ҡалҡа берәү ярҙамға саҡыра ине. Башҡалар уны-быны шәйләп өлгөргәнсе, оҫта йөҙөүсе бер егет һыуға ташланды. Бер аҙҙан хәле мөшкөл ҡыҙыҡайҙы өйөрөлтмәктән һөйрәп алып, ярға килтереп һалды.

Эргәһенә кешеләр йыйылып китте. Шундағы берәү ҡыҙыҡайҙы йөҙтүбән һалып, йотолған һыуҙы ҡоҫтора башланы. Кешеләрҙең сыр-сыуын ишетеп, Линара ла ярға ашыҡты. Бата яҙыусы үҙенең һеңлеһе икәнде күреп, ни эшләргә белмәй үрһәләнде. Ниңә ғүмере йылға күрмәгән кешеләй иҫе китте ошо Мейәс һыуына?! Һылыуын ғына ҡарап йөрөтһә ни булған? Ҡыҙ һеңлеһенең ойошҡан сәстәренән һыйпаны, биттәренән үпте. Күтәреп алырға иткәйне, көсө етеңкерәмәне. Ул арала әллә ҡайҙан, ҡыҙының хәлен ишетеп, һыу буйына Мәйсәрә йүгереп килеп етте. „Ҡайҙа минең балам? – тип әллә ҡайҙан уҡ һөрән һалды. Балаһының ярҙа имен-аман икәнен күреп ҡыуанаһы урынға, килеп Линаранын толомона йәбеште. „Ҡыҙымды ҡарамай батырып үлтерә яҙҙың. Юрамал тәрәнгә алып киткәнһең. Үс алырға итәһеңдер, яуыз!" Ҡыҙыҡайҙы ҡотҡарған егет түҙмәне:

– Апай, уны әрләмәгеҙ, ул ғәйепһеҙ, беҙ күреп торҙоҡ, ҡыҙығыҙ үҙе тәрәнгә инде, – тип Линараны яҡланы.

– Иҫән ҡалыуына ҡыуан, алйот, – тине тағы бер оло кеше тауышы.

– Бынау егеткә рәхмәт әйтер инең, һөмһөҙ, батып барғанда ҡыҙыңды сөңгөлдән һөйрәп алып сыҡты.

Кешеләрҙең Линараны яҡлауы Мәйсәрәнең асыуын ғына ҡабартты. Унының һайын ярһыны яһил ҡатын.

– Иртәгә үк Стәрлеңә ҡайтып кит! – тине. – Етем бала аҫрағанса, етем быҙау аҫра, ҡойҡа. Һиңә ышанып, алтындай ҡыҙымды һәләк иттерә яҙҙым. Эш мәлеһе белмәгән ҡоротомшоҡ. Хөкүмәт елкәһендә йәшәп, әҙергә өйрәнгәнһең.

Мәйсәрә һис тартыныуһыҙ, күмәк кеше алдында шулай тип Линараны хурланы. Ҡайһы берәүҙәр: “Был ҡыҙҙың ғәйебе барҙыр, юҡҡа ул тиклем асырғанмаҫ ине үгәй әсәһе,” – тип уйланы. Икенселәре ҡыҫылмауҙы хуп күрҙе. Һыу буйынан Мәйсәрә үгәй ҡыҙын үсе ҡанғанса кәмһетеп, эттән-эткә һалып һүгеп, ҡарғап, үҙ ҡыҙын әпәүләп ҡайтып китте.

Ҡурҡышынанмы, оялышынанмы бөршәйеп, бәләкәсәйеп киткән ҡыҙҙы күптәр йәлләне.

– Ауыҙ асып ҡаршы бер һүҙ әйтмәй бит әле, меҫкенкәй, – тине берәүҙәре. Икенселәре ҡурсаланы:

– Ғәрләнеп үҙ-үҙенә ҡул һалып ҡуймаһын, балаҡай.

Асыуы алҡымына тығылған Рафиҡ, Линараны яҡлап, Мәйсәрәгә һуғып ебәрерҙәй булды. Ниңә ул йәберләй етем ҡыҙҙы? Бала ғәйепләме ни етем ҡалыуында? Йоҙроҡтарын йомарлап ынтылып-ынтылып ҡуйҙы, ләкин үҙен тыйҙы. Ул Линараның яңғыҙын ҡалдырмаҫҡа кәрәклекте аңланы. Яр буйында күңелһеҙләнеп баҫып торған ҡыҙҙы Рафиҡтың әүрәткеһе, ауыр уйҙарынан арындырғыһы килде. Ахырыһы, эргәһенә килде:

– Мин ҡарап торҙом, һин һәйбәт йөҙәһең, – тине Рафиҡ. – Әйҙә, ярышып ҡарайыҡ.

Линараның өйгә ҡайтҡыһы килмәй ине – ялындырып торманы, риза булды. Ул таныш булмаған егет менән Мейәс ҡосағына ташланды.

– Эй, Мейәскәйем, йәнемде ҡоршаған аһ-зарҙан азат ит мине! Саф һыуығынаң йәнемә шифа булһын...

Уҙыша-уҙыша оҙаҡ йөҙҙөләр. Һыуҙан сыҡҡанда яр буйында кешеләр һирәгәйгәйне инде. Улар тулҡын тибеп тултырған ҡырсынлы һөҙәк түбәләскә килеп ултырҙылар:

– Һин әллә йөҙөү түңәрәгендә шөғөлләнәһеңме? – тип ҡыҙыҡһынды егет.

– Юҡ, мин бит Ашҡаҙар ҡыҙы, – тине Линара, башын ғорур ғына бороп егеткә ҡарап ҡуйҙы. — Беҙҙә бөтә ҡыҙҙар ҙа һәйбәт йөҙә.

– Ашҡаҙар, тинең? Һин Стәрлетамаҡтанмы ни?

– Эйе.

– Ә Мейәс оҡшаймы һиңә?

– Шул тиклем! Хатта һыуҙан сыҡҡы килмәй.

– Әйҙә, тағы бер йөҙөп киләйек.

– Туҡта әле, мин һиңә рәхмәт әйтергә тейешмен. Һеңлемде бәләнән ҡотҡарып, һин минең дә ғүмеремде һаҡлап алып ҡалдың бит. Әгәр ул батып үлһә, мин дә йәшәмәҫ инем.

– Әсәйең асыуланғанға шулай тиһеңме?

– Үҙ әсәйем түгел ул, шуға мин уға үпкәләмәйем.

Шулай тине лә Линара, тағы Мейәс ҡосағына ташланды. Тағы арығансы йөҙҙөләр. Иртәгәһен дә ошонда осрашырға һүҙ ҡуйышып, кисләтеп кенә ҡайтып киттеләр.

...Рафиҡ менән осрашыу тәьҫиренән күҙенә йоҡо инмәгән Линара ошоларҙы иҫләп ятты.

Симпозиумдан һуң Рафиҡ Төркиәнән килгән дуҫы Мөхәммәд Джаббарҙы аэропортҡаса оҙатып ҡуйҙы. Дуҫы биш намаҙын ҡалдырмай торған дини кеше. Үҙенең шиген әйтте:

– Глобализация мине ҡурҡыта. Көслөрәк илдәр унан файҙа күрергә тырыша. Төп тәғәйенләнешен – Ер шары планетаһын һаҡлауҙы икенсе планға ҡуя.

– Шулай.– Рафиҡ уны хупланы.– Мәҫәлән, профессор Эрнест Фейхтвангер, Америка профессоры Неклесса, Англиянан Шуманн сығыштарында һиҙелеп ҡалды был тенденция.

– Кешелек донъяһын бер Алла ҡотҡарыр! – тине хушлашҡанда төрөк ғалимы.

Күберәк уйланған һайын Рафиҡтың ислам диненә ихтирамы арта. Донъя кимәлендәге бөйөк аҡылдар, мәҫәлән, Гете, исламиәткә ихлас бирелгән булған. Күпселек шиғырҙары хәҙистәргә нигеҙләнә. “Өҫтөнә атым яҙылмаған уҡ миңә теймәҫ”, “Аллаһтың әмере булмайынса ағастан бер япраҡ та төшмәйҙер” кеүек юлдар быға шаһит.

Ҡунаҡханалағы бүлмәһенә ҡайтҡас, әҙерәк ял итеп алмаҡсы булып, креслоға сумды. Сәғәтенә күҙ һалды: кискә тиклем ваҡыт байтаҡ әле. Ни тиклем арыған булһа ла, күҙенә йоҡо инмәне. Ул йәнә уйы менән яңы үтеп киткән форумды байҡап сыҡты, һәр сығыш яһаусыны яңынан күҙ алдынан үткәрҙе. Төркиә ғалимы Мөхәммәд Джаббарҙың, үҙенең сығышын тағы бер барлап сыҡты. Эйе, ғилем, мул һыулы йылға кеүек, тәрәнлекте ярата. Тәү ҡарашҡа сара һәүетемсә генә, тыныс ҡына үтеп киткән һымаҡ тойолһа ла, уға таяныр ҙур эштәр башҡара аласаҡбыҙ әле, тип уйланы. Башҡортостан ҡалаларында, ундағы юғары уҡыу йорттарында конференциялар үткәреүҙе планлаштырырға кәрәк. Айырыуса Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм уның эргәһендәге тирә-яҡ мөхитте һаҡлау хөрт ҡуйылған. Линараның яратҡан Ашҡаҙары ла хәҙер һайыға бара.

Уның да күңелен, Линараныҡы кеүек, хәтирәләр солғап алды. Ул да тәүге осрашыуҙарын иҫенә төшөрҙө. Июнь айы ине. Эҫе, томра көн. Гүйә, бөтә ҡасаба халҡы Мейәс буйында. Рафиҡ оҙон сәстәрен арҡаһына һибелдереп, һыуҙа балыҡ кеүек йөҙгән бер ҡыҙға иғтибар итеп ҡуйҙы. Ҡыҙыҡай берсә өйрәк кеүек сумып китә, берсә ҡолас ташлап йөҙә. Егет ҡыҙға шулай һоҡланып ҡарап торғанда, ярҙан тауыштар ишетелде.

– Бата, бата!!! Харап була бит ҡыҙыҡай!

Рафиҡ шунда уҡ ярҙамға ташланды. Аҙаҡ асыҡланыуынса, Линараның үгәй һеңлеһе икән. Шул саҡтағы Линараның үҙ-үҙен тотошон иҫләп, бәләкәй сағынан тотанаҡлы, ныҡлы ихтыярлы булған ул, тип һынамсыланы Рафиҡ.

Рафиҡ шунда ғәйепһеҙ көйө үҙен яҡлап бер һүҙ әйтә алмаған, күҙҙәренән йәш аҡҡан ҡыҙҙы эй йәлләгәйне. Күңелһеҙләнеп кенә торған ҡыҙҙың эргәһенә килде... Шулай башланды дуҫлыҡтары.

Хәтирәләр, хәтирәләр... Барыһы ла иҫендә Рафиҡтың. Улар шулай һыу инеп, ситтәнерәк булһа ла бер-береһенә күҙ һалып йөрөй торғас, йәй үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Ҡыҙҙың тормошо ябай түгеллеген һиҙенгәйне инде. Асыҡлап бер ни өндәшмәһә лә, күҙҙәрендә – мөлдөрәмә тулы һағыш. Көн дә йылға буйына килә, оҙаҡ итеп йөҙә, тәнен һыу һурып бөтә, ә ул һаман ярға сыҡмай.

Рафиҡ уның оҫта йөҙөүен күргәс, күңеленән генә ҡыҙҙы хатта Һыуһылыу тип атаны. Көн дә шулай һыу инеп, ҡыҙҙы ситтән күҙәтә-күҙәтә Мейәс буйында йөрөй торғас, егет уға барлыҡ йәшлек хисе менән ғашиҡ булды. Уға бөтә донъяла Линаранан да һылыуыраҡ, унан да һөйкөмлөрәк ҡыҙ юҡтыр кеүек тойолдо. Магнит менән тартылған кеүек, унан ике күҙен айырып ала алмай ҡарап тороуҙары әле лә иҫендә.

Көслө мөхәббәт кешене йә артыҡ тәүәккәл, йә үтә баҙнатһыҙ итә. Ул баҙнатһыҙға әйләнде, ҡыҙҙың эргәһенә яҡын барырға ла ҡыйманы. Рафиҡтың үҙенә тыныс ҡарай алмағанын ҡыҙ ҙа һиҙенде. Ул да һеңлеһен ҡотҡарып, үҙен тауҙай бәләнән аралап ҡалған мәрхәмәтле егетте яҡын күрҙе. Ләкин теге саҡ һөйләшеүҙән башҡа ҡабат осрашырға икеһе лә ҡыйманы, ниҙер тотҡарланы. Тора-бара ҡыҙ ҙа егеттең йәшкелт-һоро күҙҙәренең йомшаҡ нур бөркөүен, дуғаланып торған ҡаштарының сөйөлөп китеүен, ҡуйы сәстәренең бөҙрәләнеп тороуын, хатта һөйләшкәндәге тауышын да яратты. Ике ғашиҡ, бер-береһен ситтән күҙәтеп йөрөй торғас, йәйҙең үтеп киткәнен дә һиҙмәй ҡалды. Бына уларға мәктәпкә барырға ла ваҡыт етте. Линара иртәгә Стәрлегә уҡырға китә тигән көндө генә улар бер аҙға аулаҡта осрашты.

Айырылышыр алдынан Рафиҡ ҡыҙға иҫтәлекле бүләк биргеһе килде. Ул күптән ҡыҙҙың һүрәтен эшләй башлағайны. Ниңәлер уны гел аҡҡош итеп күҙ алдына килтерҙе. Уны нисегерәк эшләргә оҙаҡ ҡына уйланды. Бер көндө ҙур ғына форматлы фотоҡағыҙға үҙенең дә, Линараның да һүрәтен төшөрҙө, ситтәрен семәрләп биҙәне: күл уртаһында ике аҡҡош бер-береһенә ҡаршы йөҙә. Урталыҡҡа шиғыр яҙҙы. Хисләнеп, йөрәгенән әллә ниндәй татлы тойғолар кисереп, Линараны яратыуҙан тыуғайны ул юлдар. Әле лә иҫендә: кисен клубта осрашҡанда егет ҡыҙҙың ҡулына хат тотторҙо.

Күр, аҡҡоштар ниндәй матур
Бергә парлап йөҙгәндә.
Йәшәү матур, донъя йәмле
Икәү бергә булғанда.

Парлы аҡҡоштарҙай булып
Йәшәһәк ине ғүмергә.
Мин теләйем тормош юлын
Һинең менән үтергә.

Урта мәктәпте тамамлағансы, өс йыл буйы, улар шулай хат алышып торҙо. Икәүһе лә түҙемһеҙләнеп каникулдарҙың еткәнен көттө.

Рафиҡ бер һөйләшеүҙе аҙаҡ йыш иҫенә төшөрҙө, һәм ҡыҙыҡайҙың зирәклегенә аптыраны. Унынсыны тамамлаған йәй ине. Линара уға сәйер генә бер һорау бирҙе.

– Ата-әсәң беҙҙең дуҫлыҡҡа нисек ҡарай, детдом ҡыҙы менән йөрөүеңә ризалармы?

Кемдер уларҙың дуҫлашып йөрөүенә ҡаршы булыр, тигән уй башына ла инеп сыҡмаған егет ғәжәпләнде.

– Ниңә һорайһың?

– Мин беләм, ҡайһы берәүҙәр беҙҙең дуҫлашыуҙы өнәмәй.

Рафиҡ, артыҡ әһәмиәт бирмәй генә:

– Туҙға яҙмағанды, – тип көлдө.

– Белгең килһә, етем бала үҙ кендеген үҙе ҡырҡырға тейеш, – тип Линара теге саҡ күрше инәйенән ишеткәнде ҡабатланы. – Мин тормошта бер кемгә лә ауырлығымды һалырға теләмәйем.

– Әсәйем дә, атайым да һәйбәт кешеләр. Улар минең өсөн үлеп тора. Беҙҙең бәхеткә тик шатланырҙар ғына.

Был һүҙҙәр Линараның күңеленә майҙай яғылды. Уның кәйефе күтәрелде, күңеленә килгән тәүге уйын ҡысҡырып әйтте.

– Мин уларҙы атай, әсәй тип йөрөтөрмөн...

Ихлас ҡыуанған ҡыҙ был минутта донъяла мәкер, хәйлә барлығын, уның кеше яҙмыштарын селпәрәмә килтерә алыуын белмәй ине шул әле. Һөйгәненең ата-әсәһен ул үҙе лә яратыр, улар ҙа улдарының буласак кәләшен үҙ ҡыҙҙары кеүек ҡабул итер, тип ышанғайны. Бер ҡатлы балалыҡ инде.

Бер-береһен яратышҡас, аҙаҡ, өйләнешеү үҙенән-үҙе хәл ителер һымаҡ тойола ине икеһенә лә.

Их, йәшлек, тиле йәшлек! Күңелдәрҙең аҡ шишмәләй сафлыҡҡа тулған сағы. Ун етеһе яңы тулған ике йәш йөрәк, ике ғашиҡ уларҙың мөхәббәтенә кемдер аяҡ салыр, бергә булыуҙарына ниндәйҙер ҡаршылыҡтар осрар, тип башына ла килтермәне. Баҡһаң, алдын-артын уйламайынса, һөйөү гөлөн өҙөп ырғытырға, тапап китергә тартынмаған яуыздар ҙа була икән. Рафиҡ менән Линараның Мейәс буйында яралған, Мейәстең аҡ һыуындай саф мөхәббәте, нәҡ шундай таш бәғер әҙәмдәр арҡаһында яҙлыҡты. Икеһенең дә күңеленә мәңге онотолмаç һары һағыш булып һарылды.

Дүртенсе бүлек

Осрашыуға икеһе лә ашҡынып килде. Линара һуңғы мода буйынса тегелгән күк йөҙө төҫлө зәңгәрһыу ебәк күлдәктә, осло башлы туфлиҙа ине. Муйынында – ҡиммәтле, матур семәрле алтын биҙәүес. Машинаһынан төштө лә үҙен көтөп торған Рафиҡ яғына атланы. Шундай ҙа төҫкә һылыу, ғорур һынлы, ҡыйыу ҡарашлы ҡатынды күреп, ир баҙап ҡалды. Линара баяғы симпозиумда күргәндәге лә, элекке бала сағындағы кеүек тә түгел – ул бөтөнләй бүтән ине. Ят та, яҡын да. Йылдар икенсе кеше яһағайны унан. Рафиҡ тотоп килгән сәскәһен ҡатынға ҡыйыуһыҙ ғына һуҙҙы. Әйтәһе, һөйләшәһе нәмәләр шул тиклем күп төҫлө ине – икәү генә ҡалғас, әле ҡапыл икеһе лә юғалып, һүҙһеҙ ҡалдылар.

– Мин һине ресторанға саҡырам. Әйҙә, инеп тамаҡ ялғап алайыҡ,– тине Рафиҡ, һоҡланыулы ҡарашын нисектер йәшерергә тырышып. Ҡатын ихлас ҡына яуап бирҙе:

– Әйҙә һуң.

– Йылдар һине тағы ла һөйкөмлөрәк иткән.

– Һине лә шулай.

– Мейәскә ҡайтҡан һайын атайыңдарға инеп, хәл белешеп йөрөнөм. Һине һағына торғайны. Ҡыҙымды биҙҙерҙе, тип Мәйсәрә апайға ла йәне көйөп алыр ине.

– Хәҙер уйлап ҡарайым да, атайым йәл, бер ҙә уңманы ҡатындан. Шахтала ауыр эш. Ҡайтһа – тәрбиә юҡ. Мәйсәрәһе әрләшеүҙән башҡаны белмәй. Ҡыҙғаныс, иртә китте, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп өлгөрә алманым.

Атаһын иҫкә төшөрөү Линараның күңелен нескәртте. Ул теге саҡта, картуф баҡсаһында, атаһы менән һөйләшкәндәрен иҫләп, күҙҙәренә йәш алды.

– Эйе, атайың һине ярата торғайны. Йәл, ерләгәндә була алманың.

– Германияла инем, ҡайтып етеп булманы.

– Апайың адресыңды белә инеме?

– Эйе, белә ине.

– Күпме һораным, әйтмәне... – Рафиҡ баш сайҡаны.

– Үҙем бирмәҫкә ҡуштым. Һин өйләнгәйнең. Ҡыҙың бар, тинеләр.

– Эйе, бар ине. Тик ул күптән... ожмах ҡошо. – Үҙе тураһында һөйләүҙе уфтаныу менән йомғаҡлап ҡуйҙы Рафиҡ. – Их, был яҙмыш! Йылдар әрәм уҙа...

– Әйтмәҫ инем. Һин ҙур ғалим.

– Шәхси тормошом уңманы.

– Мин дә яңғыҙмын, ғаилә ҡорорға теләк булманы.

Ошо аҙ ғына һөйләшеүҙән улар бер-береһенең хәлен аңланылар.

Ресторанда икеһенең дә оҙаҡлап ултырғыһы килмәй ине, Линара тәҡдим яһаны:

– Әйҙә, мин һиңә киске Екатеринбургты күрһәтәм.

– Ҡушҡуллап риза.

“Калина”ға инеп ултырғас, руль менән идара иткәндәге ғәҙәти хәрәкәттәренә, кәүҙәһен төп-төҙ тотоп, үҙ баһаһын белеп ултырған ғорур ҡатынға ҡарап аптырап ултырҙы ир кеше. Уның алдында бер һүҙ әйтһәң күҙенә йәш алып барған кәмһетелгән ҡыҙыҡай түгел, булдыҡлы, уңышлы, ҡатынҡы холоҡло заманса ҡатын ине. Ҡаланың иҫтәлекле урындарын күрһәтеп сыҡҡас, Линара ҡунаҡты оҙатып ҡуйырға булды. Тик икеһе лә аңлай: иң кәрәкле юҫыҡты улар әлегә һөйләшмәгән.

– Линара, рөхсәт ит, бер юлы һинең тормошоңдо ла күреп китәйем. Ошо осрашыу тураһында күпме йылдар хыялландым.

– Ысынлап та, ҡунаҡхана ҡасмаҫ, әйҙә.

Еңел машина “һә“ тигәнсе уларҙы Линара йәшәгән туғыҙ ҡатлы йорт эргәһенә килтереп тә еткерҙе. Ҡатын яңы архитектура стилендә һалынған бер подъезлы күркәм йорттоң бишенсе ҡатында йәшәй икән.

Линараның фатиры эс яҡтан да матур йыһазландырылған, заманса итеп биҙәлгән булып сыҡты. Бөтә ерҙә тәртип, бөхтәлек, таҙалыҡ. Бында уңған, зауыҡлы ҡатын йәшәгәне күренеп тора. Ысынлап та, бала сағында, студент йылдарында ярлылыҡ, етемлек үҙәгенә үткән Линара торлағына ҙур иғтибар бирә.

– Матур йәшәйһең, – тине Рафиҡ, өй эсен күҙҙән үткәреп. Үҙе эстән уйлап ҡуйҙы: ”Ә минең фатир дөйөм торлаҡ һымаҡ, сөнки донъя көтөргә дәрт төшмәй. Ҡайтып йоҡлар урын булһа, шул еткән...” Уның ни уйлауын, гүйә, белеп торған Линара үҙе һүҙ башланы:

– Һин ҙур ғалим, юғары идеялар менән йәшәйһең. Симпозиумдағы сығышың бик тә фәһемле. Материал туплауға ғына ла бер нисә йыл киткәндер.

Уны аңлап тороуы Рафиҡтың йөрәгенә яғылды. Айырылышҡан ҡатыны уның эшен бер тингә лә ҡуймай, көрәп аҡса тапмағас, һинең ғалим булыуыңдан ни файҙа, ти торғайны.

– Ҡуйсы әле, тормасы әле сит кеше кеүек, – тип Линара ҡунағын етәкләп алды ла уңайлы, йомшаҡ креслоға килтереп ултыртты. Үҙе эргәһенә терәлде.

– Линарам! – Рафиҡ уның ҡулдарына ҡағылды.

Тертләп киткән йәш ҡатын, уңайһыҙланып урынынан, торҙо.

– Аһ-аһ, тик ултырамсы, ҡана, сәй әҙерләй һалайым. Ә һин бынау гәзит-журналдарҙы ҡарай тор.

Хужабикә аш-һыу бүлмәһенә үтте. Яңғыҙы ҡалғас, күҙҙәре йәшкәҙәне. Ул да, Рафиҡ кеүек, алыҫта ҡалған йәшлеген, яңғыҙлыҡта үткән йылдарын йәлләне. Эштән башҡаны белмәй, ир наҙы күрмәй, күкрәгенә ҡыҫып бала һөйә алмай уҙҙы бит уның иң матур йылдары. Юҡ, ир-ат иғтибарынан мәхрүм булманы ул. Киреһенсә, сит илдән килгән вәкилдәр, ғалимдар менән аралаша башлаһа, ғашиҡ булып, мөхәббәтен аңлатып ыҙалата торғайнылар. Һағыҙаҡтай сат йәбешергә әҙер торған әҙәмдәр ҙә осраны. Күп йылдар төрлө кимәлдәге юғары даирә кешеләре менән аралаша торғас, ул бер нәмәне аңланы: кешенең рухи кимәлен, әҙәпле, намыҫлы булыуын уның билгән дәрәжәһе лә, алған белеме лә түгел, ә тыумыштан юғары көс тарафынан бирелгән тәбиғи аҡылы, әҙәбе, иманы

билдәләй икән... Линара эше буйынса гел маҡталды. Немец, инглиз телдәрен һәйбәт белеүе өҫтөнә, иҡтисади проблемаларҙы даими өйрәнеп, үҙе лә ғилми хеҙмәттәр яҙыштырған тәржемәсене һәр саҡ яуаплы урындарға ебәрҙеләр. Тик шәхси тормошо ғына булманы. Берәүҙе лә ярата алманы, тормошҡа ла сыҡманы. Эйе, яңғыҙлыҡтан ялҡты, бәйләнсек ирҙәрҙән биҙрәне. Уның ғаилә бәхете татып йәшәгеһе килә хәҙер. Ниһайәт, яҙмыш уға йөҙө менән борола һымаҡ. Ошоларҙы уйланы өҫтәлгә сәй әҙерләп йөрөгәндә. Инде бик күптән илауҙың нимә икәнен дә белмәгән саҡматаштай ныҡ ҡатындың сикәләре буйлап һаран күҙ йәштәре тәгәрәне.

Рафиҡ өҫтәл әҙерләп йөрөгән һөйөклөһө яғынан күҙҙәрен ала алманы. Эргәһенә барып, булышҡыһы килде, тик тартынды. Линараны күреп ултырыуы уның өсөн хыялындағы матур төш кеүек ине. Мәңгелеккә юғалттым тигәндә, бәхет үҙе ҡаршыһына килеп баҫты лаһа! Хистәренән сәсәрҙәй булған ир ултырған еренән тороп китте. Бүлмә буйлап ары-бире үтте, шунан быяла ишекле шкаф эргәһенә килеп туҡтаны. Бәй, был нимә?! Бынан ун ете йыл элек үҙе бүләк иткән фотоһүрәт түгелме? Ул ҡәҙерләп быялалы рамға ҡуйылған иҫтәлекле әйберҙе ҡулына алды. Ҡасандыр уның үҙ ҡулы менән яҙылған, матур итеп теҙелгән тигеҙ бөхтә хәрефтәр. Ғәжәп... Күпме йылдар үтеп киткән...

...Парлы аҡҡоштарҙай булып
Йәшәһәк ине ғүмергә...

Рафиҡтың бөтә тәне буйлап, әйтерһең, көслө ток үтте. Линараны өҙөлөп һөйгәндә, уның менән мәңге бергә булырға хыялланып йөрөгәндә яҙғайны бит ул был шиғыр юлдарын. Унда йәшлегенең иң саф хистәре сағылған. Үҙе биргән бүләкте рамда күреп таң ҡалыуын һиҙеп йөрөгән Линара шым ғына ҡунағы эргәһенә килде лә наҙлы итеп яурынына башын терәне.

– Иҫеңдәме? Клубҡа уйынға сыҡҡайныҡ, шунда бүләк иткәйнең.

– Һин уны һаҡлағанһың... Көтмәгәйнем... Онотмағанһың...

– Эйе... – Линара әйәк ҡаҡты.

Бөтәһен дә бер юлы аңлап алған Рафиҡтың ҡапыл дөрләп киткән хистәрҙән йөрәге күкрәгенә һыймаҫтай булып типте. Ул әйләнде лә Линараһының биленән ҡосаҡлап алды.

– Тимәк, һин дә беҙҙең мөхәббәтте онотмағанһың!? Рәхмәт, ҡәҙерлем!

Ир кеше һөйгәнен ҡосағына ныҡыраҡ ҡарманы. Яңылыш ҡына ысҡындырһа ла, Линараһы йәнә мәңгелеккә юғалтыр төҫлө ине.

– Һин гел генә минән ваҡытты һорай торғайның.

– Иҫемдә.

– Шул саҡтарҙа, “Эх, Линараға сәғәт бүләк итһәң ине,” – тип хыялланам. Тик ул саҡта мин дә уҡыусы ғына инем шул. Тәүге эш хаҡына һиңә ҡул сәғәте бүләк итермен, тип нәҙер әйтеп ҡуйғайным. – Рафиҡ түш кеҫәһенән ҡумта сығарҙы. – Һуңлап булһа ла, әйтеүемде үтәйем. Сәғәт хәҙер кеҫә телефонында инде. Шулай ҙа ҡабул итеп ал минең һиңә мәңге һүнмәҫ мөхәббәтем билгеһен. Бөтә ошо йылдар буйына һинең һәр һүҙең, һәр хәрәкәтең иҫемдә. Фотоһүрәтең – компьютер ҡаршыһында, исемең күңелем түрендә йәшәне.

Линара ҡумтаны һаҡ ҡына ҡулына алды ла ипләп кенә асып ҡараны. Унда күҙ яуын алырҙай алтын сәғәт ята ине. Күңеле нескәреүҙән йәш ҡатын бер генә һүҙ әйтә алды:

– Рәхмәт, ҡәҙерлем.

Көтә, түҙә, сабыр итә белгәндәргә Аллаһы Тәғәлә бәхетте сумыра бирә, тигәндәре хаҡтыр. Бөгөн таңды улар бергә ҡаршыланы. Уларҙың ҡауышыуы ғәҙеллектең тантана итеүе лә, яҡшылыҡтың яманлыҡты еңеүе лә, мөхәббәттең үлемһеҙ икәненә дан йырлау ҙа ине.

– Беҙҙең мөхәббәт емеше – балабыҙ булһын ине, – тине Рафиҡ.

– Был – минең дә теләгем. Бөгөн үк мәсеткә барып никах уҡытайыҡ.

– Беҙҙең йәштә уңайһыҙ түгелме?

– Никах дин ҡаршыһында ла, закон буйынса ла хәләл булырға тейеш. Баланың хәләл никахтан яралыуы фарыз.

– Муллалар һымаҡ әйтеп ҡуйҙың.

Үҙе шулай тиһә лә, Линараға Рафиҡтың никахтарына етди ҡарауы һәм әйткән тәҡдиме оҡшаны.

Ҡатын һөйгәненә нығырак һыйынды. Йәне наҙҙан ирене. Ул үҙен ғүмерендә беренсе тапҡыр шундай бәхетле хис итте.

Бына улар, ниһайәт, бергә. Эй, яҙмышы һынаны Линараны. Унан ҡояшты ҡапларҙай булып, һөйгәнен айырырға теләп, ҡайһы бер мәкерле әҙәмдәр күпме кәртә ҡорҙо, әммә барыбер бәхетенән ғүмерлеккә айыра алманы. Хәйер, айырылманылар ҙа бит улар. Тәндәре генә айырым булды, йәндәре гел бергә, уйхистәре гел бер-береһе тураһында ине. Күпме рәнйетеүҙәр, кәмһетеүҙәр күргәндә лә, заман менән ҡуша атлар өсөн күпме ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар үткәндә лә һис илағаны юҡ ине Линараның. Бөгөн иһә муйылдай ҡара күҙҙәренән йәш тәгәрәй ҙә тәгәрәй. Бәхеттән нескәргән күңеле шулай йомшарҙы уның. Бөгөн ул үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр ир ҡуйынында йоҡланы. Һөйөклөһөнөң күкрәгенә башын терәп, йөрәге типкәнен тыңлап, уның да үҙен өҙөлөп ятраҡанын аңланы. Беренсегә үҙен ҡатын-ҡыҙ итеп хис итте. Йөрәктәрҙе елкендерер көслө мөхәббәт кенә ирҙәрҙе ысын ир итә, ҡатындарҙы наҙлы ҡатынға әүерелдерә алалыр. Бөгөн улар ир менән ҡатын булды. Бер-береһенең ҡосағында таңды ҡаршыланы. Мәңгелеккә бер-береһенә тоғролоҡ һаҡларға вәғәҙә биргән Рафиҡ менән Линара сикһеҙ бәхетле ине.

Иртәнге сәйҙе эскәндә (улар бер-береһенә “ирем”, “ҡатыным” тип әйтергә һүҙ ҡуйышты) Линара иренә әйтте.

– Рур университеты аспирантураһында уҡыу идеяһы оҡшай ҙа миңә. Унда төплө иҡтисади белем бирелә. Алынған белем донъя кимәлендә эшләрлек мөмкинселек бирергә тейеш. Быға һин нисек ҡарайһың?

– Бер үҙеңде ебәрмәйем.

– Бына нисек. Улайһа, әйҙә, икәүләп китәбеҙ. Һиңә лә ул университетта бер нисә йыл эшләп, тәжрибә туплап алыу ҡамасауламаҫ.

– Уйлашырбыҙ. Фейхтвангер әфәнде менән уртаҡ тел табып булһа... – Икеһенең яҙмышы өсөн яуаплылыҡ хисе тойған ир кеше талапсан ғына өндәште: — Иртәгә эшеңдән отпуск һора, һине үҙебеҙгә, ятраҡан Мейәсеңә, алып ҡайтып китәм.

– Их, Мейәс буйҙары! Был йылға – минең мәңгелек хыялым.

– Бынан һуң, теләһәң, ятраҡан йылғаңды көн дә барып күрерһең. Хәҙер, ҡәҙерлем, беҙ мәңгегә бергә. Бер көнгә лә эргәмдән ебәрмәйем.

– Бына һин ниндәй?! – Линара иренә шаян ҡараш ташланы. – Улайһа, һин дә минән башҡа яңғыҙ бер ҡайҙа бармаясаҡһың.

Улар көлөшөп алды. Шулай күңелле генә әңгәмәләшеп ултырғанда, Рафиҡ Камалетдиновичтың кеҫә телефоны шылтыраны.

– Һеҙҙе, Мөғинов, Силәбе һорай, – тиниләр теге остан. – Симпозиумда

һөйләгән сығышығыҙҙа ниндәй дәлилдәргә таяндығыҙ? Бөтә донъя форумында сеймал, инвесторҙар тураһында әйтелгән һүҙҙәрегеҙгә отчет бирә алаһығыҙмы? Мәскәүҙән шуны белешәләр. – Шылтыратыусы Силәбе политехник институтының иҡтисад кафедраһы мөдире Ҡашҡаров Сәйғәфәр Ғиндуллович ине. Уның ҡәтғи тауышында шелтәле ноталар ишетелеп ҡалды. – Һеҙ артыҡ ҡыйыу ҡыланғанһығыҙ. Улай ярамаҫ ине. Ҡайтығыҙ, һеҙгә моғайын, Мәскәүгә юлланырға тура килер.

Үҙенән юғарыла торғандарға юлын табып нисек тә ярай белгән, ҡул аҫтындағыларға бойороҡ бирергә оҫтарып алған, ғилми эшкә барымы булмаған ярайһы уҡ хәйләкәр, тупаҫ әҙәм уға нисегерәк екерә? Ғилми эш ғалимдан тәүәккәллек талап итә. Үҙенең күләгәһенән үҙе ҡурҡып йөрөһә, Рафиҡ Камалетдиновичты донъя кимәлендәге симпозиумға саҡырып та тормаған булырҙар ине. Ул үҙе һөйләгәндәр өсөн һәр саҡ яуап бирергә әҙер. Статистик мәғлүмәттәр ғилми-тикшеренеү институтынан алынды. Үҙе туплағандары ла аныҡ факттарға нигеҙләнгән. Уның ҡурҡырлыҡ урыны юҡ. Тик бына Линараһы менән яңы табышып, ҡауышып, артабан бергәләп ғаилә ҡороу, йәшәү тураһында уйлашырға торғанда уның әле икенсе нәмәләрҙе уйлағыһы килмәгәйне.

Бер аҙҙан йәнә телефон шылтыраны. Был юлы Рафиҡты Мәскәү Фәндәр академияһы саҡыртыуы хаҡында хәбәр иттеләр – ике көндән ул баш ҡалаға осорға тейеш.

Бер көнгә лә бер-береһенән айырылырға теләмәгән Рафиҡ менән Линара юлға бергәләп йыйынды. Баҡһаң, Мәскәүгә Рафиҡты Сәйғәфәр Ғиндуллович уйлағанса тәнҡитләр өсөн түгел, ә тиҙҙән Рио-де-Жанейрола БМО үткәрәсәк конференцияла сығыш яһар өсөн саҡырғандар булып сыҡты. Екатеринбургта булып үткән симпозиумдағы сығышын, статистик мәғлүмәттәрҙе БМО вәкиле донъя кимәленә сығарыуҙы кәрәк һанаған. Был ҡарар билдәле ғалимдар тарафынан да ыңғай ҡараш тапҡан. Рафиҡ Камалетдиновичтың өйләнеүе тураһында белгәс, Мәскәүҙәге ғилми үҙәктең ойоштороу буйынса яуаплы секретары:

– Улайһа, Линара Зәйнулловнаға ла саҡырыу ебәрәбеҙ, – тине. – Ул – беҙҙең иң һәйбәт тәржемәсе.

Уңышлы тәҡдимдән ҡанатланған йәш ғалимдар, Мәскәүҙә эштәре бөткәс, тура Силәбе ҡалаһына осто. Линара мөхәббәттәренә ҡанат ҡуйған Мейәс йылғаһын күрергә ашҡынды. Улар никахты теркәү, туй үткәреү өсөн дә ошо ҡаланы һайлағайны.

Рафиҡ Камалетдиновичтың туғандары, дуҫтары, туйҙан һуң Линараның Германияға аспирантураға уҡырға китергә тейешлеген ишеткәс:

– Килен беҙгә танһыҡ, бер ҡайҙа ла ебәрмәйбеҙ, – тип дыу ҡупты. – Бында ла университет, аспирантура бар. Теләгән кеше ситтән тороп уҡый, соискатель була ала.

Айырылышыуҙарын үҙҙәре лә күҙ алдына килтерә алмай торғанда туғандар, дуҫ-иштәренең кәңәше икеһенең дә күңеленә хуш килде. Бер-береһен күреп күҙҙәре туймай, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй торған саҡта, ысынлап та, нисек сит илгә сығып китергә? Туйҙан һуң Рафиҡ Линараны Екатеринбургтан үҙе эргәһенә, Силәбегә, күсереп алып ҡайтты. Мөхәббәткә, наҙға һыуһаған ике ғажиз йән бер-береһен хатта иҫкән елдәрҙән дә көнләшерҙәй булып, бер ай буйы икәүһе генә ял итмәк булды.

– Мин һине Мейәстең ағып сыҡҡан еренә алып барам, – тине Рафиҡ.

– Бындай уй нисек башыңа килде? – Линара тәҡдимгә ихлас ҡыуанды. – Учалы районынан башланамы әле?

– Эйе.

Мейәс башын барып күреү уйы менән дәртләнгән Линара сәфәргә йыйынды. Видеокамера, фотоаппараттар барланды. “Калина”ға палатка, йоҡлар өсөн ҡаралты, аҙыҡ-түлек, башҡа кәрәк-яраҡ тейәп алдылар. Йәйҙең матур бер көнөндә елдерҙе улар Учалы тарафтарына.

Рафиҡтың күргәне бар: Мейәс Уралтау һыртының көнсығыш битләүе буйлап теҙелеп киткән сусаҡ тауҙар эргәһенән, ваҡ түбәсектәр менән ҡапланған Урал аръяғы тигеҙлеге йәнәшәһенән баш ала. Инеш кенә булып сылтырап ағып сыға ла, үҙ-үҙенә үҙән ярып, бормаланып ағып китә.

Бишенсе бүлек

Бөгөн шишмә башы уларҙы бойоҡ ҡаршыланы. Баҡһаң, уның тирә-яғын кипкән япраҡ, сыбыҡ-сабыҡ, ҡый-ғыпыр баҫып киткән. Арыраҡ консерва һауыттары, буш шешәләр тәгәрәп ята. Бер нисә ерҙә усаҡ йәмрәйә. Бында килгән кешеләр һыу башын һис аямаған. Ә бит кескенә инешкә ер аҫтынан ағып сығыр өсөн генә лә күпме ҡаршылыҡтарҙы еңергә тура килә. Мейәс бирешмәгән, торабара, ана, ниндәйен ҡөҙрәтле, мул һыулы йылғаға әүерелгән. Линара сыбыҡ-сабыҡ араһынан дәртле урғылған инешкә һоҡланып ҡарап торҙо. Ниңәлер үкһеҙ бала сағы килде күҙ алдына. Бераү ҡурсаламаған, берәүгә кәрәкмәгән ҡыҙ бала ине, бирешмәне, хәҙер бәхете уны үҙе килеп тапты. Әрһеҙ инеште ҡатын үҙенең бала сағына оҡшатты, инеш яҙмышы менән үҙ яҙмышы араһында уртаҡлыҡ күргәндәй булды. Уның һымаҡ ул да үҙ көнөн үҙе күрә, үҙенә-үҙе юл яра бит. Уның күңеле нескәрҙе. Инешкә ярҙам итергә, тиҙерәк хәлен еңеләйтергә ашыҡты. Ул, еңен һыҙғанып, эшкә кереште. Башта бөтә ҡый-ғыпырҙы йыйып алып яҡты, шунан инештең сыҡҡан ерен ләмдән, ваҡ сүп-сарҙан таҙартты. Шишмә сылтырап китте, – әйтерһең, рәхмәт әйтте. Ул һыу урғылған ергә сүгәләне лә, сабыйын ҡосорға иткән әсәләй эйелеп, саф һыуҙы ипләп кенә усына алды, шунан ирендәренә тейгеҙҙе, әйтерһең, үбергә теләне. Бына һин ниндәй икәнһең, бәләкәсем, сабыйым, Мейәскәйем. Бына ни өсөн мин һиңә ашҡынғанмын, һин ярҙамға мохтаж булған икәнһең, Уралтау һылыуы!? Линара сүгәләгән еренән тороп, тирә-яғына күҙ һалды. Их, ниндәй матур Учалы яҡтары! Туғайҙары аллы-гөллө сәскәләргә тулған. Ана, ап-аҡ һомғол ҡайын ҡул болғай, әйтерһең, уның үҫкән ерен хөрмәтләп килеүселәрҙе эргәһенә саҡыра. Күккә олғашҡан мөһаббәт ҡарағайҙары нисегерәк ғорур тора! Ирәмәл тауҙарын мөғжизәле, тиҙәр. Шул тауҙарға үрләргә ине. Йәнә Урал, Уй кеүек ҙур йылғалар баш алған ерҙәрҙе лә барып күрергә хыялдары.

Линара инеш менән мәж килгән, хыялдарға бирелеп йөрөгән арала, Рафиҡ шундағы бер тигеҙлеккә палатка ҡорҙо. Ҡаҙан аҫып, аш-һыу әҙерләй башланы. Туй сәйәхәтенең тәүге таңын улар Уралтау һыртының Мейәс сыҡҡан ерендә ҡаршыланы.

Иртән торғас, ир менән ҡатын бынан утыҙ-ҡырҡ саҡрымда ятҡан хикмәтле Әүеш тауына юл алды. Хәтфә йәшел бер туғайға машинаһын ҡуйып, тиҙерәк изге шишмә сығып ятҡан яҡҡа йүнәлделәр. Юлда барғанда Рафиҡ Линараға был яҡтарҙа мең йылдар буйы телдән телгә күсеп һөйләнелеп килгән Әүлиә тураһында әкиәткә тартым бер легенда һөйләне.

...Борон замандарҙа был төбәктә ислам динен таратыр өсөн ғәрәп иленән Рамаҙан Әлъюши исемле дин әһеле ебәрелә. Ул донъя көтмәй, мал аҫрамай, бар шөғөлө дингә өндәү була. Әжәле еткәс, ҡатын-ҡыҙ күкрәгенә оҡшап ҡалҡып торған бер түбәләскә менә лә шунда йән бирә. Уны шул урынға ерләйҙәр. Аҙаҡ

тауҙың итәгенән изге шишмә урғыла. Һыу яҙын бер айҙай ғына сығып ята ла юғала икән. Әүлиә шишмәһенән һыу алып ҡалырға ашығып, яҡын-тирә халҡы шунда ағыла. Шишмә һыуы зәм-зәм һыуына бәрәбәр икән.

– Хәҙер июль айы... Шишмә күптән ҡороно инде. Уның һыуы майҙың ун етеһенән июндең ун етеһенә тиклем генә була.

– Шулай ҙа барайыҡ әле, бәхетебеҙҙе һынап ҡарайыҡ. – Ниҙәлер, Линараның күңеленә Әүештау әүлиәһе мөғжизәһен күрһәтер, уның ҡөҙрәте менән шишмәнең һыуы булыр төҫлө тойолдо. Бына хикмәт, ысынлап та, улар килгәндә улаҡтан сөбөрләп кенә терегөмөштәй ялтыр һыу аға ине. Рафиҡ был хәлгә ныҡ аптыраны. Ғилми хеҙмәттәрен яҙғанда был тирәнең һәр һуҡмағын ентекле өйрәнгән, шишмәләренең йөрәк тибешен ишетеп, тауҙарының тын алышын һиҙгән кеше булараҡ, йылдың-йылы Әүеш шишмәһе июнь уртаһынан ҡалмай ҡороуын асыҡ белә. Бөгөн – июль аҙағы, ә изге шишмә ағып ята.

– Күрсе, шишмә шәберәк аға башланы!

– Эйе, ана, улағы тулды.

– Был хикмәт Аллаһы Тәғәләнәндер. – Дин, Алла тураһында быға тиклем уйланмаған Линараның тәне сымырҙап китте. Үҙе лә һиҙмәҫтән күҙҙәрен күккә төбәне лә бышылдап өндәште:

– Эй, Раббым, Аллам, Рафиҡ менән беҙгә бәхетле ғүмер бир! Ғаиләле булып, балалар үҫтереп, тиң, тигеҙ ғүмер итергә насип ит!

Улар изге шишмәнән һыу алып бит-күҙҙәрен йыуҙы, шифалы һыуҙы һауыттарына тултырып алды. Шунан һуң шишмәгә рәхмәттәр әйтеп, Әүлиә ерләнгән ҡәбергә, тау башына, табан үрләнеләр. Эргәлә генә түңәрәкләнеп ятҡан күлгә иғтибар итеп ҡуйҙылар. Диаметры саҡрым тирәһеләй күл өҫтөнән бер дәрүиш кейемендәге кеше атлап китеп бара. Нисек батмай ул?! Юлсы барҙы ла күҙҙән юғалды. Гәрсә һыуға һеңде. Башта был хәлгә икеһе лә аптырап ҡалды.

– Ниндәй хикмәт был?

– Беҙгә әүлиә рухы күренде. Ул шулай күл өҫтөнән йөрөй ала, оҡшаған кешеләренә күренеп китә, тигәнде ишеткәнем бар ине.

Ысын икән. Ул беҙгә бик ризалыр, ахырыһы, – тине Рафиҡ. – Тау, урман эйәләренең рухы ла ҡайсаҡ кешеләрҙең күҙенә күренеп йөрөй, ти торғайны Зөбәйлә апай.

– Һин, ғалим кеше, шундай хөрәфәттәргә ышанаһыңмы?

– Донъяла беҙ аңлап бөтмәгән серле күренештәр бихисап. Урал аръяғы тигеҙлеге был йәһәттән айырыуса хикмәтле.

Улар икенсе төндө Әүештау итәгендә хикмәтле урында ҡунырға булды. Палатка ҡороп, инеп урынлашҡас, йоҡлап китә алмайынса, оҙаҡ һөйләшеп яттылар, киләсәккә пландар ҡорҙолар. Рафиҡтың БМО-ла яһаясаҡ сығышын уйлаштылар. Аллен Даллес доктринаһы тураһында ла һөйләшеп алдылар. Йоҡлап киткәс, икеһе лә төшөндә Әүештау хужаһын күрҙе. Ап-аҡ кейемле ҡарт уларҙы тау башына алып менде лә әйтә, имеш:

– Ғәҙеллек һеҙҙең яҡта, ҡыйыу булығыҙ! Ер шарын һаҡлау – һеҙҙең юғарынан тәғәйенләнеш. Бынан ары изге эшкә икәүләп тотонорһоғоҙ, Һеҙҙе һәр сак Ер-әсә рухы һаҡлар. Алда һеҙҙе ҙур эштәр көтә!

Линара менән Рафиҡ бер юлы уянып киттеләр ҙә, бер-береһенә һыйынып, әле генә күргән төштәрен һөйләп, уларҙың оҡшаш булыуына сикһеҙ ғәжәпһенделәр. Ысынлап та, был ерҙәр хикмәтле икән. Башҡаса уларҙың күҙенә йоҡо инмәне. Күргән төштәрен изгегә юрап, бер килке таң алдынан һайраған ҡоштарҙың моңон тыңлап яттылар. Ҡояш ҡалҡыр алдынан палатканан сығып, ысыҡлы

үләндәрҙе кисеп йөрөнөләр. Шишмәнән таң һыуы алып килделәр ҙә, усаҡ яғып, сәй ҡайнатырға ҡуйҙылар. Икеһе лә был ерҙә, гүйә, үҙҙәрен хазина тапҡандай хис итте. Уларҙың бергә булыуҙарына Әүештау әүлиәһе үҙе фатихаһын биргәндәй.

Шулай тау-урман гиҙеп, Ирәмәл башына күтәрелеп йөрөй торғас, отпускылары үтеп киткәнен дә һиҙмәнеләр. Сәйәхәт уларҙы бер-береһенә ныҡ яҡынайтты. Был инде йәш саҡтағы ғишыҡ тотоу йә иһә ир менән ҡатындың енси яҡынлығы ғына түгел – уларҙа бер-береһенә ҡарата өр-яңы хис, рухташлыҡ, фекерҙәшлек хисе уянды. Мөғиновтар хәҙер глобализация проблемалары буйынса бергәләшеп эшләйәсәк. Ҡайтҡас та Линара иренең китаптарын инглиз теленә тәржемә итә башлаясаҡ.

Бергә йәшәүҙәренә өс ай тигәндә, Рафиҡ Камалетдиновичҡа Рио-де-Жанейрола үтәсәк халыҡ-ара форумға саҡырыу килде. Линараны ул тәржемәсе итеп алды.

Форумға АҠШ, Франция, Төркиә, Австрия, Бөйөк Британия, Германия, Польша илдәренән глобализация менән шөғөлләнеүсе ғалимдар саҡырылғайны. Бындай донъя күләмендәге мәртәбәле сарала Рафиҡтың тәүләп ҡатнашыуы. Ул ҡаушаны, сығышы өсөн борсолдо. Әммә тәржемәсе булараҡ байтаҡ тәжрибә туплаған Линара ирен тынысландырырға тырышты:

– Борсолма, – тине, – һәр бер илдең ғалимдарын күрҙем, сығыштарын тыңланым. Беҙҙең һымаҡ уҡ кешеләр. Ғалим халҡы ҡайҙа ла бер: үҙ туҡһаны туҡһан.

Әммә Рафиҡ Камалетдинович, форумдың үҙе өсөн ҙур һынау икәнлеген аңлап, етди әҙерләнде. Тырышлығы бушҡа китмәне. Урта һәм Көнъяҡ Урал, Көнсығыш Себер проблемаларын донъя кимәленә күтәреп, үҙенең фәнни эшмәкәрлегенә юл асты, фекерҙәш дуҫтар тапты. Уға БМО артабан бергә хеҙмәттәшлек итергә тәҡдим яһаны. Үтәсәк яңы конференцияларҙа сығыш яһарға саҡырасаҡтары тураһында әйттеләр.

Германияла үтәсәк конференцияға саҡырыу килгәндә Линараның бәпәйләр көнө еткәйне. Әсәй булырға әҙерләнгән ҡатын УЗИ аша тыуасаҡ баланың малаймы, ҡыҙмы икәнен белешергә теләне. Ҡарынындағы балаға УЗИ-ҙың нисек тәьҫир итеүен үҙ ваҡытында өйрәнгән Рафиҡ рөхсәт итмәне.

– Тере йән УЗИ нурҙарынан ҡурҡа, баланың йөрәге сирле булып тыуыуы ихтимал,– тине. – Малаймы, ҡыҙмы – барыбер беҙҙеке, тик ул һау-сәләмәт булһын. Ҡара уны, ашыҡма, мин әйләнеп ҡайтҡанды көт, нисек тә түҙ, йәме. Ҡайтҡас бала тыуҙырыу йортона үҙем күтәреп алып барырмын. – Шунан етди итеп өҫтәп ҡуйҙы. – Ошондай саҡта бер ҡайҙа ла йөрөмәй, эргәңдә генә булыр инем дә һуң. Тик беҙ Әүештау әүлиәһе ҡушҡандарҙы үтәргә һүҙ бирештек шул, ҡәҙерлем.

Линара иренә килеп һыйынды, иркәләп, башын яурынына һалды:

– Барма һуң, – тине еңмешләнеп. – Интернет аша конференциялағыларға иғлан итербеҙ:“Рафиҡтың ҡатыны бәпәйләй, шуға ла бында килә алманы”.

Икеһе лә рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе.

– Шаянбикәм минең! Үҙ кендеген үҙе ҡырҡҡан сая кәләшем!

Улар икеһе лә был форумға барыуҙың нисек мөһим икәнен яҡшы аңлай. Рафиҡ Камалетдинович ошо сараға тырыштырҙы бит инде яңы “Урал ынйылары” китабын.

Германияла Рәсәй делегацияһын йылы ҡаршы алдылар. Эрнест Фейхтвангер ҡунаҡтар менән осрашты һәм шул көндө үк Рейн йылғаһы тирәләй экскурсия

ойошторҙо. Был йылға дәүләт ҡурсаулығы ҡарамағында икән. Яңы типтағы таҙартыу ҡорамалдары заводтарҙан сыҡҡан бысраҡ һыуҙы ныҡлы таҙартып ҡына йылғаға кире ағыҙа. Рейнды бысраныуҙан һаҡлар өсөн хатта караптар йөрөтөү тыйылған. Эргә-тирәһендә йәшеллек, таҙалыҡ. Шулай уҡ урамдар йәшеллеккә күмелгән. Кешеләр машинаға ҡарағанда велосипедта йөрөүҙе өҫтөн күрә. Һүҙ юҡ, экологик мәҙәниәт илдә көслө.

– Ошо эштәрҙең башында беҙҙең хөрмәтле профессорыбыҙ Эрнест Фейхтвангер тора,– тине ҡала мэры.

Рафиҡ, уңайлы мәлде тура килтереп, Эрнест Фейхтвангерға Линараның сәләмен тапшырҙы. Унының бында килә алмау сәбәбен аңлатты. Йөҙө томһайып китһә лә, немец кәйефен һиҙҙермәне:

– Зер гут, фрау Линара хаҡында мин яҡшы фекерҙә. Булдыҡлы, тырыш, эшкә пунктуаль хеҙмәткәр.

Форумда немец ғалимы, нәҡ Рафиҡ уйлағанса, үҙенең Екатеринбургтағы докладын үҫтереп, глобализация теорияһын үҙ иленең файҙаһына бороп, яңы идеялар менән һуғарып, сығыш яһаны.

– Ер шарындағы бөтә хазина, ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары – барлыҡ кешелек донъяһына тәғәйенләнгән. Уны нисек ҡулланыуҙы бергәләп хәл итергә тейешбеҙ. Шулай уҡ беҙ теләгән бер илдең проблемалы мәсьәләләрен күтәреп сыға алабыҙ. Глобализация һәм тупланған тәжрибә быға хоҡуҡ бирә, – тине ғалим, алдан уҡ үҙен “кәртәләп” алды.

Урал, Себер экологияһы, урмандарының әрһеҙләнеүе тураһында яҙған яңы ғилми хеҙмәте менән таныштырып үтте. Брошюралар конференцзалдың өҫтәлдәренә таратып һалынғайны. Алып танышып сыҡҡас, Рафиҡтың йөҙө үҙгәрҙе. “Башта Урал йәшмәһе тураһында ғилми хеҙмәт яҙғайны, хәҙер Урал, Себер урмандары ҡыҙыҡһындыра башлаған. Шашындырмаҫҡа кәрәк был әфәндене”,– тип уйланы.

– Ниңә ул беҙҙең илдең экологик торошо проблемалары менән шөғөлләнә? Ә ниңә Американың проблемаларын тикшермәй? Статистик мәғлүмәттәргә ҡарағанда, унда ла хәл бик ҡырҡыу тора бит.

Тәнәфес ваҡытында осрашҡас, ғалимдың үҙенә лә шул турала әйтте. Унын яуабы әҙер ине.

– Американың хәл-торошон БМО-ла икенсе ғалимдар өйрәнә.

– Ә шулай ҙа, халыҡ-ара этикет буйынса, һеҙҙең китаптар тураһында беҙ, исмаһам, Урал университеты ғалимдары, белергә тейеш инек.

– Бында амбиция кәрәкмәй, дуҫ кеше,– немец күрәләтә үҙ һүҙен бирмәҫкә тырышты. – Рәсәй менән Германияның дуҫлығы үҙе беҙгә бындай хоҡуҡты бирә. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһы 2009 йылды “Башҡортостан – Германия дуҫлығы һәм хеҙмәттәшлек йылы” тип иғлан итте. Аңлы халыҡ бындай хеҙмәттәшлекте хуплай, ике яҡ өсөн дә берҙәй үк файҙалы тип таба.

“Оҫта яуап бирҙе”,– тип уйланы Рафиҡ. Үҙе лә бирешмәҫкә булды.

– Фейхтвангер әфәнде, яңыраҡ минең дә китабым донъя күрҙе. ”Урал йәшмәһе” өс телдә – рус, инглиз, немец телдәрендә, баҫылып сыҡты. Факттар үҙем тикшергән, күргән, белгән мәғлүмәттәрҙән алынды.

Рафиҡ папкаһынан сағыу тышлы, ҡалын ғына китап сығарып немец ғалимына һуҙҙы:

– Аңлашыла. Уҡырмын, фекеремде әйтермен. – Төҫө үҙгәреп киткән профессор ғәфү үтенде лә, эштәре күплеккә һылтанып, тиҙ генә китеп барҙы.

Башҡорт профессоры кәрәк саҡта китабының ҡул осонда булыуына шатланды. “Ниңә беҙҙең ил экологияһы менән немец ғалимы шөғөлләнергә тейеш?” – тип уйланы ул йәнә. Был бит күрше өйөн уның байлығына, уңышына ҡыҙыҡҡан икенсе күршеһе инеп тәртипкә килтереп йөрөгән һымағыраҡ була. Ярҙам иткән, йыйыштырған булыр, исеңде лә йыйып өлгөрмәҫһең, күҙе төшөп йөрөгән әйберен һыпыртып та китер. Шуға ла һәр кем үҙ өйөн үҙе йыйыштырһын. Шунда ғына донъяңда тәртип булыр. Кем ҡулыңдан эшеңде тартып алыр, шул ауыҙыңдан ризығыңды ла өҙөп ҡабыр. Баҫымсаҡҡа баҡа ла айғыр. Бөгөн фәнни ҡарашын көсләп тағыр, иртәгә илеңә хужа булып алыр. Ситтәр нәфсеһен аҙҙырырға ирек ҡуйырға ярамаҫ. Яҡшымы-яманмы, үҙ илебеҙ – үҙебеҙгә. Йәшәп ятабыҙ бит әле ипләп кенә. Ямғыры, ҡары ваҡытында яуа, үҙебеҙ етештергән ризыҡ үҙебеҙгә етә. Ғәрәсәт, афәттәр урап үтә. Бер уйлаһаң, әҙәм балаһына тағы ни кәрәк? Шулай ҙа сит-яттарҙы илеңә хужа иттермәҫлек булырға кәрәк. Ят бауыр һиңә аҡыл һатмаһын.

Ғалимдарға донъя кимәлендә өйрәнәһе, тикшерәһе нәмәләр бик күп. Ана, кешелек донъяһына ҙур зыян килтергән экологик катастрофаларҙың сәбәптәрен тикшерһендәр, уларҙы булдырмау юлдарын тапһындар – бына шул глобализация ғалимдары өйрәнә торған иң мөһим проблема.

Рафиҡ Камалетдиновичтың башына йыш ҡына, бәлки, дин әһелдәре хаҡлылыр, тигән уй килә. Кешеләр шашып ҡоторонған ергә афәт килеүен иҫбатлай бит улар. Ер йөҙө халҡын дөрөҫ юлға баҫтырыу, дин ҡушҡансы йәшәргә өйрәтеү – глобализацияға ошолар менән шөғөлләнеү насармы ни?

Кәйефе боҙолған немец ғалимы кафедраға инеп, профессор Мөғиновтың китабын әйләндереп-тулғандырып ҡараны, иғтибарын китаптың тышына йүнәлтте: ”Ҡара һин уны, ниндәй фон, йәшмәлә роза сәскәһе!” Йөкмәткеһенә күҙ һалды. Йәшмә эшкәртеү фабрикалары тураһындағы хеҙмәте китаптың яртыһын алған. Йәшмәнән сәнғәт әҫәрҙәре төҫлө итеп бирелгән. Һүҙ юҡ, матур. Баш һүҙҙе академик Кольцов яҙған. Абруйлы ғалим. БМО-ла уның фекеренә ҡолаҡ һалалар. Күләмле, ҙур тираж менән өс телдә сыҡҡан китапты тағы-тағы ҡараны. Йән асыуы менән тештәрен шығырҙатты: “Ах, азиат, аҫтыртын, миңә “сюрприз” эшләнең был юлы. Ҡара уны, аҙаҡ үкенмә, – тип хасланды ул. – Етмәһә, нәҡ конференция алдынан”.

Был китап уның барлыҡ пландарына ҡаршы төштө. Һуңғы йылдарҙағы күп көс һалған хеҙмәте – Урал тауы ҡуйынындағы йәшмәләрҙе үҙ иле мәнфәғәтендә файҙаланыу – былай булғас, барып сыҡмауы ихтимал. Ошо китап арҡаһында нисәмә йылдар һалған тырышлығы бушҡа сығыуы бар. Ул башҡорт профессорын өҙгөсләп ташларға әҙер ине.

Ниңә был бәндә гел юлыма арҡыры тора? Екатеринбургта ла саҡ эләгешеп китмәнеләр. Конфликтлы ситуация тыуҙырмаҫ өсөн уға докладының иң мөһим бер нисә урынын ҡыҫҡартып торорға тура килде. Нисәмә йылдар оҡшатып, өмөт бағлап йөрөгән, өйләнергә йыйынған Линараны ла тиҙ генә үҙенә ҡаратып алды. Бөгөн ул ныҡлап бер нәмәне аңланы: Рафиҡ Камалетдиновичтың идеялары һәр саҡ уның пландарына ҡаршы киләсәк. Профессор аңғармаҫтан стенала торған көҙгөгә күҙ һалды, нәфрәтле уйҙарҙан һары йөҙөнөң ҡобараһы осоп йәмһеҙләнеүен, ҡаш тирәләренең ҡыҙарып сығыуын, күҙҙәренең уҫал ялтырауын күрҙе. “Былай ярамай,– тине үҙ-үҙенә. – Конференция миңә ҡарап тора”. Түш кеҫәһенән тынысландыра торған дарыу төймәһен алып ҡапты. Насар кәйефен ул бөгөн һиҙҙермәҫкә тейеш.

Күренекле ғалимдың үҙенә ҡәһәтләнеүен һиҙмәгән Рафиҡ Камалетдинович

Германиянан ҡайтыр алдынан уның эргәһенә килде, хушлашырға теләне. Һүҙгә һүҙ бәйләнмәне. Араларында тәү ҡарашҡа күренмәгән көсөргәнешле эске көрәш башланыуы икеһенә лә мәғлүм булды. Хушлашҡанда ике ҙур ғалим, эсендәген тышҡа сығармай, дуҫтарса ҡул ҡыҫышты. Әммә икеһе лә белде: яңы көрәш башланды һәм ул аяуһыҙ буласаҡ, сөнки бизмәнгә ил сәнәғәте һалынасаҡ.

Конференцзалдан сыҡҡас, Рафиҡ Камалетдинович сарказмлы көлдө: алырым-бирмәм уйыны башландымы? Ул ни менән бөтөр? Фейхтвангерға бирешмәҫкә ине.

“Ах, бынау китаптың сыҡҡанын алданыраҡ белмәй ҡалғанмын. Башҡорт “дуҫ”ҡа сюрприздың үҙенекенән дә шәбен әҙерләп ҡуйған булыр инем, – тип үкенде немец.– Баһалап еткермәгәнмен азиаттың мәкерен. Хәйер, әле лә һуң түгел. Рәсәй хужалары Моғинов һымаҡ ғалимдар һүҙенә генә ҡарап тормаҫ әле. “Рәсәй менән Германия дуҫлығы” тигән килешеү бар, шуға таяныр”.

Рафиҡ Камалетдинович конференциянан иленә ҡәнәғәт булып ҡайтты. БМО ғалимдары араһында танылыу тапты. Ә яуланғанын тотороҡло итер өсөн алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт итеү кәрәк. Ул быға әҙер. Тик Линараһы ғына һау булһын.

Самолетҡа ултырыр алдынан Рафиҡ тағы өйөнә шылтыратты. Яуап юҡ. Рафиҡ борсола башланы. Ҡырҡ йәшкә етеп килгәндә бала табырға тәүәккәлләү ҡатын-ҡыҙ өсөн нисек хәүефле икәнен белә ине ул. Әсә булғыһы килеү теләге барыһын еңде. Был ир кешенең күңеленә хуш килде, ҡатынын тағы ныҡыраҡ яратты. Хәҙер Хоҙайҙан ҡәҙерлеһенең баланан имен-аман ҡотолоуын ғына теләй.

Силәбегә килеп төшкәс, күңеленә ҡатыны өйҙә юҡтыр һымаҡ тойолдо. Ысынлап та, өҫтәлдә яҙыу ғына ята ине. Фатирына инде лә, сисенеп тә тормай, тағы кеҫә телефонына йәбеште. Рафиҡ запискала күрһәтелгән бала тыуҙырыу йортона йүгерҙе. Бында хәл ул көткәндән дә ҡыуаныслыраҡ булып сыҡты. Ҡаршыһына сыҡҡан шәфҡәт туташы:

– Һөйөнсө, Рафиҡ ағай, һеҙҙең игеҙәк, – тине. – Улығыҙ һәм ҡыҙығыҙ бар! Ҡотлайбыҙ,– тине. – Тик әлегә ҡатынығыҙҙың хәле ауырыраҡ.

Рафиҡтың ҡояштай балҡыған йөҙө шул ыңғайы үҙгәрҙе.

– Ниндәй ярҙам кәрәк? – тине өтәләнеп. Ул Линараһын юғалтыуҙан ҡурҡа ине.

Бала тыуҙырыу йортоноң баш табибы менән осрашып һөйләшкәс кенә күңеле бер аҙ тынысланды. “Баштараҡ хәле ауыр ине, хәҙер хәүеф юҡ”,– тине дауалаусы табип. Мөмкин тиклем яҡшы шарттар булдырырға һүҙ бирҙе. Рафиҡ Линара ятҡан палатаға индереүҙәрен һораны. Ҡатынын күргәс, ҡәҙерлеһенең һурылып киткән йөҙөнә текләп, бер мәлгә туҡтап ҡалды. Карауаты эргәһенә килеп теҙләнде лә йөрәкһеп бышылданы:

– Линарам, ҡәҙерлем, хәлгенәйең нисек?

– Хәҙер бында бәпестәребеҙҙе алып килерҙәр.

Балалары әсәһе булыуға өлгәшкән ҡатынын фәрештәләй күреп, ире уға яратып та, һағынып та төбәлде.

– Ҡәҙерлем минең!

Ишек төбөндә биләүле сабыйҙар ҡосаҡлаған йәш кенә шәфҡәт туташы күренде. Йөрәге наҙға мөлдөрәмә тулған атай менән әсәй икеһе бер юлы сабыйҙарына ынтылды.

– Улым!!!

– Ҡыҙым!!!

Туташ биләүҙәрҙе бәхетле парҙың ҡулдарына тапшырҙы ла, уларҙың ҡыуанысынан кинәнес табып, бер аҙ йылмайып ҡарап торҙо, шунан һиҙҙермәй генә сығып китте.

Бәхетле ата менән әсә күреп туя алмаҫтай булып бәпестәренә төбәлде.

– Мөхәббәтебеҙ емештәре…

Үҙен бәхет диңгеҙендә йөҙгәндәй хис иткән ҡатындың йөрәген наҙлы әсәлек хисе солғап алды. Әйтерһең, уға талмаҫ ҡанаттар үҫеп сыҡты. Донъя Линараға йәйғор төҫтәренән, шатлыҡ-ҡыуаныстан ғына торалыр һымаҡ. Иренә ҡарап, йомшаҡ тауыш менән өндәште.

– Улыбыҙға, ҡыҙыбыҙға исем һайлайыҡ.

Ҡатынының ҡояштай балҡыған йөҙөнә ҡарап, Рафиҡтың да күңеле шатлыҡ менән тулды. Ул балаларына донъялағы иң матур исемде ҡушырға теләне. Урал тауҙарын гиҙеп, хеҙмәтенә илһам, йәненә шифа алырға яратҡан ғалим бер ни тиклем уйланып торҙо ла ҡысҡырып ебәрҙе:

– Урал һәм Уралиә… Йә, нисек? Ни тиһәң дә, Урал тауҙарында яралдылар бит.

– Оҡшай! Әйҙә, һинеңсә булһын!

Улар инде игеҙәктәренә исемдәре менән өндәште. Тағы әллә күпме үҙ-ара сөкөрләштеләр. Һүҙҙәре ғүмер буйы һөйләшһәләр ҙә бөтмәҫтәй ине. Хатта ишектән ингән шәфҡәт туташын да абайламанылар.

– Һеҙгә, йәш әсәгә, ял итергә кәрәк, – тине талапсан тауыш,– мин бәләкәстәрҙе палаталарына алып китәм.

– Ҡәҙерлем, минең донъяла оҙаҡ-оҙаҡ йәшәгем килә. Һинең менән, балаларыбыҙ менән! Әсә булыу миңә бөтөнләй донъяның икенсе яғын асты. – Күрәһең, Линараның да уны эргәһенән ебәргеһе килмәй ине.

– Иң мөһиме – бәхет беҙҙе урап үтмәне, ҡәҙерлем,– тип йөпләне ир ҡатынын. – Ял ит, көс йый. Иртәгә тағы осрашырбыҙ. – Улар һөйөү тулы ҡараштарын бербереһенән айыра алмай хушлаштылар. Оло ҡыуаныстан хыялыйға әйләнә яҙған Рафиҡ, бала тыуҙырыу йортонан сығып, тура Мейәс буйына төшөп китте. Бынан күп йылдар элек мәңгелек мөхәббәтен ошо йылға буйында осратҡайны бит.

Мәжнүнгә әйләнә яҙған Рафиҡ башта бәпестәренә, һөйгәненә арнап шиғыр сығарып ҡараны. Бер аҙҙан уйҙары фәлсәфәүи төҫ алды. Яратыу… Мөхәббәт… Ниндәй ҙә илаһи был тойғо! Изге хис башта күңелдәрҙә ярала. Күңелдәрҙән күңелдәргә күсеп, барлыҡ йыһанды һөйөү һәм наҙ менән һуғара. Бәхетлеләр йәшәгән ерҙе төрлө ғәрәсәттәр ҙә, ел-дауылдар ҙа урап үтә. Ҡояш та унда иртәрәк сығып, һуңыраҡ байый. Сәскәләр ҙә сағыуыраҡ, хуш еҫлерәк. Иң мөһиме: аҙаҡ мөхәббәт барлыҡ Ер шарына, йыһанға изгелек булып тарала һәм планетаны афәттәрҙән һаҡларлыҡ ҡеүәтле ҡөҙрәтле көскә әүерелә.

Бөгөн Рафиҡ үҙендә тәбиғәтте буйһондорорлоҡ, барлыҡ экологик проблемаларҙы хәл итерлек көс-ҡөҙрәт тойҙо. Тик кәләше генә һау булһын. Алда башланып ҡына торған тормош. Ғалимдың ғүмер юлы, моғайын, еңел булмаҫ. Хаҡлыҡ өсөн көрәш һәр саҡ үлемесле. Быны ул Германияла аңғарҙы. Немецтан ҡурҡып, Урал йәшмәһен бирҙереп ҡуймаҫ халыҡ. Улар тупланасаҡ, үҙҙәрендә кәңәшмәләр үткәрәсәк, ил байлығын тәләфләүгә юл ҡуймаҫ.

…Кем белә, киләсәктә экологик проблемаларҙы хәл итерлек катастрофаларҙы, ерҙәге барлыҡ афәттәрҙе, ғәрәсәттәрҙе еңерлек глобаль асыштар уйлап табырға яҙғандыр.

Мәхмүт
ХУЖИН

ЯҢҒЫҘ САҒЫЛ

ЭССЕ

Беренсе бүлек

I

...Күк йөҙө салт аяҙ. Йәйҙең иң оҙон көндәренең береһе. Ҡояштың Ерғә киң текә ҡараған мәле. Беленер-беленмәç иçкән йылы ел, ҡылған баштарын һыйпап, үҙ юлы менән артабан Яңғыҙ сағыл итәгенә төшөп китә. Сағыл битендә – Кеше. Ул донъяның ҡайһы ла булһа тарафына түгел, ә аяҡ аçтына баҡҡан. Уның күҙҙәре сағыл эсенән ниҙер эҙләй кеүек. Ни ҡарай унда Кеше: алыç быуаттар ҡалдырған эҙҙеме, әллә башҡа үҙенә генә билдәле нәмәнеме?

Ҡыҙыҡһыныу – кешегә хас сифат. Ул һәр саҡ эҙләнә. Таба, асыш яһай, шатлана. Рухи донъяһын байыта.

Һәр тупраҡ бөртөгө, тау-ташы, йылға-күлдәрендәге һәр тамсыһы бихисап хәтирәләрҙе йәшергән Ер! Миллион йылдармы, әллә миллиардтармы тереклек итә бында Әҙәм балаһы? Күпме? Теүәл генә итеп хатта фән дә әйтә алмай. Бик боронғо замандарҙа ла ошо Ерҙе Ҡояш йылытҡан, Ай яҡтыртҡан, бихисап йондоҙҙар уның өçтөнә нурҙарын һипкән. Әҙәм балаһы ошонда ныҒыныу, йәнен һаҡлау өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләгән. Һунар иткән, тәбиғәт биргән башҡа байлыҡтарҙы йыйған. Был да аҙ күренһә, үҙе кеүек кешене талаған. Әммә нәçелен үрсеткән, сөнки ул замандарҙа ауырлыҡтарҙы күмәкләп кенә еңә алғандар. Ишәйә барып, күберәк ҡоро ер, тау-таш араларын, йылға буйҙарын биләп йәшәй башлаған. Ләкин Ер шары сикһеҙ кеүек булһа ла, унда йәшәү өсөн уңайлы урындар самалы булып сыҡҡан. Ошо уңайлы урындарҙы үҙенеке генә итеү өсөн әҙәмдәр бер-береһенә ҡаршы яуға күтәрелгән.

Һуғыштар бихисап булған Ер шарында. Берәүҙәр ҡырылып юҡҡа сыҡҡан, икенселәр иһә үрсегән, ныҒынған. Берәүҙәр йәшәһен өсөн икенселәрҙең юҡҡа сығыуы кәрәк булған.

Шулай итеп меңәр йылдар үткән. Ҡасандыр кеше төйәк иткән урындарҙа артабан үлән, ағас үçкән, һыу ҙа баçып киткеләгән. Ул ерҙәр онотолған, кеше эҙе

Танылған журналист Мәхмүт Хужин (1953) “Ағиҙел" журналы редакцияһының публицистика бүлеген етәкләй. Был юлы ҡәләмдәшебеҙ укыусылар иғтибарына тормош ысынбарлығына нигеҙләнгән әҙәби-нәфис яҙмаларын тәҡдим итә.

юйылған. Ундай юйылған урындар Ер шарында бихисаптыр. Кеше хәтере лә, быуындан-быуынға күсә килеп, күпмелер һыйҙырған. Ләкин ул да сикһеҙ түгел, нимәлер барыбер хәтерҙән сыға.

Ни ҡөҙрәт, ниндәй маҡсат менән барлыҡҡа килгән был Ер? Тереклек хаҡынамы, Әҙәм балаһы үҙ рәхәтен күрһен йә яфа сикһен өсөнмө? Был һорауға ла яуап юҡ. Бәлки, барҙыр ҙа, тик беҙгә генә билдәле түгелдер...

Ә бына Ерҙә тормоштоң нисек яратылыуы тураһында мәғлүмәт бар. Изге китап Тәүратта. Ни бары алты көн эсендә хасил булған был мөғжизә. Уның тарихы былай.

Иң элек Аллаһы Тәғәлә Күк менән Ерҙе яратты. Ер күренмәй һәм буш, төпһөҙлөк өҫтөндә ҡараңғылыҡ ине. Аллаһы Тәғәләнең йәне һыу өҫтөнән осоп йөрөнө. Аллаһы Тәғәлә былай тине: «Әйҙә, яҡтылыҡ булһын». Яҡтылыҡ булды. Аллаһы Тәғәлә яҡтылыҡтың яҡшы икәнен күреп, уны ҡараңғылыҡтан айырҙы. Аллаһы Тәғәлә яҡтыны – «көн», ҡараңғыны «төн» тип атаны.

Кис тә булды, иртә лә булды: был беренсе көн ине.

Аллаһы Тәғәлә әйтте: «Әйҙә, һыу уртаһында ҡатылыҡ булһын, һәм ул һыуҙы һыуҙан айырһын». Аллаһы Тәғәлә, ҡатылыҡ булдырып, ер аҫтындағы һыу ер өҫтөндәгеһенән айырылһын, тине. Шулай булды ла. Ҡатылыҡты Аллаһы Тәғәлә «күк» тип атаны.

Кис тә булды, иртә лә булды: был икенсе көн ине.

Аллаһы Тәғәлә: «Күк аҫтындағы һыу бергә йыйылһын да, ҡоро урын барлыҡҡа килһен», – тине. Шулай булды ла. Ҡоро урынды Аллаһы Тәғәлә – «ер», ә һыуҙы «диңгеҙ» тип атаны. Күрҙе Аллаһы Тәғәлә: был бик яҡшы. Аллаһы Тәғәлә әйтте: "Ер йәшел булһын, орлоҡ биреүсе үләндәр, емеш биреүсе төрлө ағастар үҫһен. Аллаһы Тәғәлә күрҙе: был бик яҡшы.

Кис тә булды, иртә лә булды: был өсөнсө көн ине.

Аллаһы Тәғәлә әйтте: «Әйҙә, төндө көндән, ваҡытты, йылдарҙы айырыу өсөн күктә яҡтылыҡ сығанаҡтары булып, улар Ерҙе яҡтыртһын». Шулай булды ла. Яҡтылыҡ сығанаҡтарының көн менән идара иткәне ҙур ине. Бәләкәйе һәм йондоҙҙар төн менән идара итте. Аллаһы Тәғәлә был есемдәрҙе Күк йөҙөнә ҡуйҙы. Күрҙе Аллаһы Тәғәлә: был бик яҡшы.

Кис тә, иртә лә тыуҙы: был дүртенсе көн ине.

Аллаһы Тәғәлә әйтте: «Әйҙә, һыу төрлө йән эйәләре тыуҙырһын, Ер өҫтөнән Күк йөҙө буйлап төрлө ҡоштар осоп йөрөһөн». Аллаһы Тәғәлә һыуҙа ҙур балыҡтар, төрлө һыу хайуандарын яратты. Күрҙе Аллаһы Тәғәлә: был бик яҡшы. Ул ошо йән эйәләренә фатихаһын бирҙе: «Үрсегеҙ, күбәйегеҙ, һыу һәм диңгеҙҙәрҙе тултырығыҙ. Ә ҡоштар Ер өҫтөндә ишәйһен».

Кис тә булды, иртә лә булды: был бишенсе көн ине.

Аллаһы Тәғәлә әйтте: «Әйҙә, Ер төрлө йән эйәләре: хайуандар, йыртҡыстар һәм бөжәктәр барлыҡҡа килтерһен». Шулай булды ла. Күрҙе Аллаһы Тәғәлә: был бик яҡшы. Аллаһы Тәғәлә былай тине: «Үҙебеҙгә ныҡ оҡшаған кеше барлыҡҡа килһен, һәм ул барлыҡ Ер һәм Һыу хайуандары өҫтөнән идара итһен». Аллаһы Тәғәлә үҙе күрергә теләгәнсә ир менән ҡатынды яратып, уларға фатихаһын бирҙе: «Үрсегеҙ, барлыҡ йән эйәләре өҫтөнән хакимлыҡ итегеҙ».

Күрҙе Аллаһы Тәғәлә: ул яратҡан нәмәләр барыһы ла яҡшы.

Кис тә булды, иртә лә булды: был алтынсы көн ине.

Тәүрат кешелек донъяһы яратылыуын шулай аңлата. Шул китаптан беҙ әлеге кешелек донъяһының Ер йөҙөндә тәүгеһе түгеллеген дә беләбеҙ, сөнки тәүге цивилизация, Тәүрат буйынса, ҡырҡ тәүлек яуған ямғыр арҡаһында Туфан ҡалҡыуҙан һәләк булған.

Икенсе цивилизацияны, Йыһандан осоп килгән ғәйәт ҙур уттың юҡ итеү ихтималлығы тураһында төрлө риүәйәттәр бар. Әлеге Латин Америкаһының төньяғында йәшәгән боронғо Майя ҡәбиләләре мәғлүмәттәре буйынса, әлеге цивилизация – бишенсеһе. Әле алтынсы цивилизация тупһаһында баҫып тора кешелек. Өсөнсөһө менән дүртенсеһе нисек юҡҡа сыҡҡандыр – тағы билдәһеҙ. Шуныһы билдәле: башҡорттар Урал тауҙары буйында меңәр йылдар әүәл йәшәй башлаған. Был ҡәүемдең артабан Юрматы тип исемләнәсәк бер ырыуы Ашҡаҙар, Һәләүек, Күндерәк буйҙарын һыулаған. Сал Яңғыҙ сағыл шаһит: ҡасандыр мәңгелек урман менән ҡапланып, һыуҙары көмөштәй, яландары тулып мал, йыртҡыс хайуандар йөрөгәндә килеп баҫҡан был тарафтарға Әҙәм балаһы.

* * *

Яңғыҙ сағыл. Табылды ауылынан саҡрым самаһы көнсығышта урынлашҡан был япа-яңғыҙ ҡалҡыулыҡтың барлыҡҡа килеүе тураһында ауылда бер легенда йөрөй. Имеш, бик күп быуаттар элек ошо яҡтарға килеп сыҡҡан бер ғилемле кеше, был тау тиктәҫкә генә ошо урында ҡалҡмаған; ул Хоҙай Тәғәләнең күҙе булырға тейеш, һәм ул, көн-төн тимәй, ошо тирә халҡының ҡайҙа баҫҡанын, ни ҡылғанын күҙәтеп тора булыр; ана, күрәһегеҙме, уның түбәһенән аҫтараҡ ике күҙе бар, ә уларҙан өҫтәрәк – ҡаштары, тигән. Был – изге урын. Кешеләр ни ышанған, бик күп йылдар ошо тауға табынып йәшәгәндәр. Ошонда ҡорбандар килтерелгән, төрлө йолалар уҙғарылған. Был яҡтарға мосолман дине үтеп ингәнгә тиклем шулай дауам иткән. Бар халыҡ ғаләмдә бер генә Аллаһы Тәғәлә барлығына ышана башлағас, тауҙы онотҡандар.

Яңғыҙ сағыл иһә онотмаған. Был Ер шарының күҙгә күренгән һәм салынып та бармаған һәр нәмәһе – үҙе бер мөғжизә. Тау быуаттар буйы кешеләр донъяһына күҙ һалып йәшәгән. Шулай итмәй, яңғыҙына күңелһеҙ бит. Ҡышҡы оҙон төндәрҙә итәген ҡалын ҡар ҡаплағас, күрер күҙҙәре ябылғас, ул, тәрән итеп тын алып, көрһөнөр булған. Ҡалын ҡар бындай хәрәкәттән аҫҡа ишелеп төшөп, тауҙың итәген яланғасландырған.

Күпте һөйләй алыр ине Яңғыҙ сағыл тыңлаусыға. Уның итәге буйынан ниндәй халыҡтар ағылғанын. Ошонда ултырып ял иткәндәрен. Хатта яғалашып алғандарын. Һөйләй алыр ине. Хәйер, бының өсөн үҙеңдең маңлай күҙең генә түгел, күңел күҙең булыу ҙа мотлаҡтыр. Тау бит хәтирәләрҙе, ай-һай, күп һаҡлай.

Яңғыҙ сағыл. Ул яңғыҙ. Уның кеүек яңғыҙҙарҙы донъяла бик күп, хатта кешеләр араһында ла табырға мөмкин. Эйе, улар ғаилә солғанышында көн күрә. Тыштан ҡарағанда, йәмғиәттә йәшәй кеүек. Әммә эстән яңғыҙ. Ни өсөн? Бәлки, эске азатлыҡ хаҡыналыр. Бәлки, кешелек урынлаштырған тәртиптәр менән ризалашмау арҡаһындалыр.

Ысынлап та, исеме бер аҙ сәйерерәк яңғырай: Яңғыҙ сағыл… Табылды халҡы бар булған төбәк, йырын, һыу атҡылыҡтарына исем атап бөткән. Мәҫәлән, «Өй тауы», «Ҡыҙҙар тауы», «Йылан тауы», «Мөхәррәм күле», «Ҡайынүҙәк», «Ҡара тал соҡоро», «Сусаҡ түбәһе» кеүек атамалар бар. Ә бына Яңғыҙ сағылға, бейеклеге һәм мөһабәтлеге менән башҡа ҡалҡыулыҡтарҙан әллә ни ҡалышмаһа ла, “тау” тигән исем эләкмәгән. Сәбәбе нимәлә? Бәлки, тауҙар теҙмәһенән ситтәрәк булғаны өсөндөр. Уны, моғайын, боронғолар белгәндер ҙә, ләкин был һорауға яуап бирергә батырсылыҡ иткән кешене ауылда табырмын тимә. Яңғыҙ сағылдан бер аҙ көнбайышҡараҡ атланыңмы, юлыңды урындағы халыҡ “Ерекле йылға” тип йөрөткән тауыҡ аша атлап сығырҙай кескәй генә һыу таҫмаһы бүлә. Был исем, әлбиттә, тиктәҫкә бирелмәгән. Ҡасандыр был инеш буйлап, тирәяҡҡа йәм биреп, ерек ағастары үҫкәндер. Әҙәм ҡулы, мал тора-бара уларҙың да тамырын ҡороҡҡан.

Ерекле йылғанан һуң Табылдының бирге урамы башлана. Тәүге йорт-ҡура Гәрәй ҡарттыҡы. Ҡасандыр ауылда иң ишле ғаиләләрҙең береһе йәшәгән был өй хәҙер буп-буш. Гәрәй ҡарттың иң оло һәм берҙән-бер ир балаһы булған Зиннур, бер нисә йыл элек унда яңғыҙы йәшәп, алтмышҡа аяҡ баҫҡас, донъя ҡуйҙы. Артабан Бәхтейәр ҡарт йорто, Хәсән, Әхмәҙи, Әхәт... Уларҙың барыһы ла күптән был донъя кешеләре түгел.

Табылды оҙаҡ йылдар өс урамдан торҙо. Бирьяҡ, Аръяҡ, Төбәк. Илдә тормош ҡырҡа үҙгәрә башлаған йылдарҙа йәшерәктәр, ата-бабаларына ҡарағанда ҙурыраҡ йорт һалырға була, ауылдың көньяғы буйлап һуҙылған, халыҡ телендә “Һырт” тип йөрөтөлгән ҡалҡыулыҡ аҫтына өйҙәр күтәрә башлап, унда тиҙҙән тотош бер урам хасил булды. Бында бала-саға ла күрер күҙгә күберәк салына. Ә 60 – 80-се йылдарҙа ғына балалар күплектән мыжғып торған ҡалған өс урам бөгөн хатта йәйге көндәрҙә лә һип-һил. Эт-бесәйен дә күрмәҫһең. Табылды ла хәҙер ҡарттар йортона оҡшап бара. Бер йәки ике генә кеше йәшәгән өйҙәр өҫтөнлөк итеп, йылдар үткән һайын күбәйә. Балалы ғаиләләрҙә лә, уҙа барһа, ике йәки өс бала. Унаң ҡарауы, ауылда балалар ҙа, йәштәр ҙә күп саҡта төшкә лә инмәгән кирбестән һалынған урта мәктәп, балалар баҡсаһы, мәҙәниәт йорто бар. Рәсәйҙә капиталистик йәмғиәткә кире ҡайтыуҙы хәтерләткән үҙгәрештәр был ауылға ла ҡағылмай ҡалманы. Доллар миллиардерҙары ишәйә барған бер мәлдә, бында ла мал ишәйтеп йәки башҡа юл менән мул донъя көтөргә ынтылыусылар күбәйә. Теге йәки был ихаталарҙа яңы машиналар күренә. Ләкин илдең күпселек төбәктәрендә колхоздар таралып, халыҡ эшһеҙлектән йонсоған бер мәлдә Табылдыла ферма ла, мастерской ҙа, башҡаһы ла элеккесә эшләп ята. Берәүҙәр мал ҡарай, икенселәре ер һөрөп иген сәсә, урып һуға, тигәндәй.

Табылдыға тәүге кешеләр ҡасан килеп төпләнгән? Кемдәр булған улар? Уның тарихы нисә быуат менән иҫәпләнә? Был һорауҙарға ла беҙ яуап таба алмайбыҙ, сөнки ҡасандыр ғәрәп хәрефтәре менән яҙылып, ҡайҙалыр һаҡланған яҙмалар буталсыҡ замандарҙа юғалған. Бәлки, ҡасандыр тирә-йүндә берҙән-бер булып, һуғыштан һуңғы йылдарҙа билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында янып юҡҡа сыҡҡан ете йыллыҡ мәктәптә көлгә әйләнгәндер...

Ер шарының өҫтөндә бер туҡтауһыҙ ваҡыт ҡамсыһы уйнай. Ул һәр һелтәгән һайын көн, ай, йылдар тарих төпкөлөнә китеп олаға. Уларҙан быуаттар, меңәр йылдар хасил була. Ваҡыт игелекле, сөнки ул ошо ҡабатланмаҫ гүзәл донъяны туҡтауһыҙ яңырта: йән эйәләренә ғүмер бирә, ҡайһы саҡтарҙа шатлыҡ-ҡыуаныстары менән һөйөндөрә; ваҡыт шәфҡәтле: инде үлем түшәгенә ятҡандарға сихәт килтереп, яҡты донъя менән бәйләнешен оҙайтып ҡуя. Ваҡыт мәрхәмәтһеҙ: күҙ етһә, донъяға йәм биргән йәм-йәшеллекте юҡҡа сығарып, донъяны шыҡһыҙ яһай, әҙәм балаһын да теләһә ҡайһы минутта ҡара ер ҡуйынына илтеп һала. Донъяның икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә ваҡыт менән алышыр көс юҡ. Ул теләһә ниндәй күренешкә үҙ ихтыярын көсләп таға, буйһондора. Ваҡыт мөһөрө һуғылып, эше бөткән бер генә нәмә лә яңынан терелмәй, кире ҡайтмай.

Ваҡыт мәңгелек, ул булған һәм буласаҡ.

Бына ул үҙе тыуҙырған тағы бер бала – XIX быуатты ла тарих төпкөлөнә һөйрәй. Әҙәм тарихында иң ҡанлы, иң аяуһыҙ биттәрҙе теркәгән быуаттың иңләп бөткөһөҙ шәүләһе аҡрынлап Ер шары өҫтөнән юйыла, ул, тамам алйып, әсәһе Ваҡыт менән хушлашыр көндәрен көтә. XIX быуат та, оло туғандары ише, Әҙәми затҡа үҫеш алып килде. Ул үҫеш ҡан, бихисап ғүмерҙәр хаҡына бүләк итеп бирелде. XIX быуат донъяның һәр тарафын аҙ бутаманы, үҙен кешелек цивилизацияһының “кендеге” һанап йөрөгән Европала ғына ул күпме ут дауылы

ҡуптарҙы. Йөҙҙәрсә мең кешенең Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән ғүмере тап ошо арҡала алдан осланды. Уларҙың кәүҙәләре бомбаларҙан өҙгөләнеп, гранаталарҙан тетелеп, пуляларҙан тишкеләнеп, ҡайҙалыр ят тарафтарҙа ятып ҡалды.

Ваҡыт, телгә килә алһа: «Эй, Әҙәм балаһы! Һине бит Хоҙай Тәғәлә тиңдәшһеҙ зат итеп яратты. Һинең зиһен ҡеүәтең ошо Ер шарын тамуҡҡа әйләндереү өсөн яратылмағайны бит. Етмәнеме ни Аллаһтың бер тапҡыр Ожмах баҡсаһынан ҡыуыуы? Һаман нәфсеңде тыя алмайһың. Һин бит ошо Ерҙе үҙ зиһенең, көсөң менән дә ожмах баҡсаһына әйләндерә алаһың.

Ҡылған гонаһтарыңдың язаһын күр инде», – тиер ине.

...Ауыл зыяраты. 1886 йылдың август ҡояшы байыуға күп тә ҡалмаған. Зыярат ғәҙәттә был ваҡытта һил була, сөнки ислам ҡанундары буйынса мәйетте көн яҡтылығында уҡ йыйыштырып ҡуйыу мотлаҡ. Әммә бөгөн зыяратта кеше бар. Яңы күтәрелгән тупраҡ өйөмө янында берәү һарғая башлаған ҡылғанға ултырып алған да ҡараштарын әллә ҡайҙа офоҡтар аръяғына төбәгән. Уның ғәйрәт ташып торған йөҙөндәге яҫы ҡаштары аҫтындағы йәшкелт күҙҙәрендә һағыш күләгәһе. Ул күҙҙәр тәғәйен бер ни ҙә күҙәтмәй, дөрөҫөрәге, күрмәй. Тиреҫ-тупраҡта соҡсоноп, һәнәк-көрәк төшмәгәнлектән ярғыланып бөткән ҡулдарын тубығына һалған ир кешегә әле илле лә юҡ, әммә ҡояшта янған битен йыйырсыҡтар бураҙналап бөтөргән. Йәй булыуға ҡарамаҫтан, башына кейеҙ ҡалпаҡ, өҫтөнә сәкмән, аяғына күн итек кейгән.

Ул – Мөхәмәтҡужа. Бөгөн генә уның бер туған ағаһы Мөхәмәтшаны һуңғы юлға оҙаттылар. Ҡасандыр өҙә баҫып йөрөгән ирҙе бына ошо ҡәбер, мәңгелек йорт үҙ ҡуйынына алды. Хәҙер ағаһы бер ҡасан да туғандары араһында күренмәҫ, балаларын һөймәҫ. Алты бөртөк балаһы, әсә ҡулына ҡарап, ярты етем ҡалды. Йәшәр ине әле Мөхәмәтша. Туктауһыҙ ҡубып торған урыҫ-төрөк һуғышында күкрәген үтәнән-үтә тишкән пуля үпкәһенә зыян килтермәһә. Шул яра арҡаһында бик оҙаҡ интегеп йөрөнө мәрхүм. Йөҙөнә ҡыҙыл таптар ятты, ерле юҡтан хәле бөтөп ғыжылданы. Ҡан төкөрөп бер аҙна түшәктә ятты ла яҡты донъянан китеп тә барҙы. Ошолай уҡ һалҡын гүрҙәрҙә ятырлыҡ ир инеме ни Мөхәмәтша? Дөбөрҙәтеп донъя көтөрлөк кенә йәштә ине бит әле ул! Ғөмүмән, уларҙың нәҫеле оҙон ғүмерле. Ана, аталары Ниғмәтулла ҡарт туҡһан тупһаһына етеп әхирәткә юлланды. Һәр башҡорттоң, айырыуса ирҙәренең, яҙмышы урыҫ батшалары сәйәсәтенә бәйле. Уларҙы айырып ҡарап булмай. Мөхәмәтшаның үлеме менән бәйле ваҡиға – үҙе бер тарих, һәм әлеге лә баяғы тетрәнеү, яуҙар һөҙөмтәһендә хасил булған Рәсәй башлыҡтарының тотанаҡһыҙ сәйәсәте арҡаһында булды.

Тарихтан мәғлүм булыуынса, Сыңғыҙ хан тоҡомдары биләп йәшәгән киңлектәргә эйә булырға ынтылған урыҫ батшалары үҙ күршеләренең еренә ҡыҙығып, улар менән һәр ваҡыт һуғышып тора. Иң ҙур хыял – Византия империяһының пайтәхете булған Константинополь ҡалаһын ҡулға төшөрөп, үҙ йоғонтоһон бар Европаға таратыу ине. Әммә теләк ғәмәлгә ашмай, сөнки Босфорҙа Османлы Төркиә нығынып, Константинополде Истамбулға әйләндереп ҡуя. XVI быуатта Мәскәү батшалығына Иван IV идара иткән дәүерҙә үк башланған «ерҙәр йыйыу», ә сәйәси телдә «колониалистик сәйәсәт» Рәсәй империяһының барлыҡҡа килеү генә түгел, йәшәү рәүеше ине. Батшалар шуны белде: тетрәнеүҙәрһеҙ империяны тотоп тороп булмаясаҡ. 1853 – 1855 йылғы Ҡырым һуғышының осо алыҫ Фәләстанда православие менән католик руханиҙары араһында милек бүлешеү ерлегендә сыҡҡан бәхәскә ялғанды. Фәләстан ул мәлдә ғосманлы төрөктәр

ҡулында булып, Франция короле алдында яҡшатланырға теләгән төрөк солтаны бәхәсте католиктар файҙаһына хәл итте. Быны ишеткәс, Николай I-нең йөҙө һөрөмләнеп, ул Төркиәгә ҡаршы һуғыш асыу өсөн сәбәп эҙләргә тотондо. Тап ошо осорҙа Төрөк империяһының православныйҙар күпләп йәшәгән Балҡан ярымутрауы боларып тора ине. Урыҫ батшалары үҙ ҡан туғаны һанаған болгарҙар, унан сербтар төрөктәргә ҡаршы баш күтәргәс, уларҙы яҡлау һылтауынан батша ғәскәрҙәре Днестр йылғаһын кисте һәм Бессарабияға килеп инде.

Әммә Николай I үҙен уңышһыҙлыҡ һағалағанын һиҙмәне. Англия менән Франция төрөк ғәскәрҙәренә ярҙамға килде, һәм союздаштар, Севастополь янында батша ғәскәренә емергес удар яһап, ҡаланы баҫып алды. Рәсәй батшаһы солох һорарға мәжбүр була. Артабан ул, байтаҡ ерҙәренән ҡолаҡ ҡағыу менән бергә, Ҡара диңгеҙҙә хәрби флот тотоуҙан да мәхрүм ителде. Урыҫ тәхетенә Николайҙан һуң ултырған Александр I лә Төркиәнән үс алыу өсөн уңайлы мәл эҙләне. Ундай көн 22 йыл үткәс кенә тыуҙы. Тағы ла шул Балҡан православныйҙары тырышлығы менән. Хурлыҡлы еңелеү ҡонон ҡайтарырға ынтылып, Рәсәй батшаһы Дунай йылғаһы буйында 185 меңлек ғәскәр туплаНы. Батша һалдаттары сафында бер яуҙан да ситтә ҡалдырылмаған башҡорттар араһында Табылды ауылы башҡорто Мөхәмәтша ла бар ине. Болгарияның Шипка ҡалаһы өсөн барған ҡышҡы һуғыштарҙа Рәсәй ғәскәренең байтаҡ һалдат һәм офицеры ҡаты һыуыҡ арҡаһында туңып үлде, бихисабы һалҡын тейҙерҙе. Мөхәмәтшаны лазаретта арлы-бирле дауалап, өйөнә ҡайтып етерлек кенә итеп аяҡҡа баҫтырҙылар. Тәүҙә йәш организм бирешмәне, әммә Шипка ҡышы касафаты көслөрәк булып сыҡты, ул Мөхәмәтшаны ҡәбер һалҡынына индермәй туҡтаманы.

Һуғыш... Бер ишетеүҙән күҙенә йәш, тамағына төйөр, башына ҡайғы килтерә торған төшөнсәнән тетрәнеп, тәне эҫеле-һыуыҡлы булып ҡабул итә Әҙәм балаһының. Һәр һуғыш ауылдан бер нисә ирҙе аты-донъяһы менән юҡҡа сығара. Күптәре тыуған яҡҡа мәңге кире ҡайтмаҫҡа китә. Күпме башҡорт баш һалды яуҙарҙа! Ата-олатайҙарҙан ишетеп белә Мөхәмәтҡужа: яуҙарҙың иҫәбе-хисабы ла юҡ. Көн сығышында ла, байышында ла, көньяғында ла. Башҡорт яугиры һөйәктәре ҡайһы тарафтарҙа ғына ятмай! Ә ғәрипләнеп ҡайтҡандары?! Рәсәй ҙур. Имеш, уны йәйәүләп иңләп сығыу өсөн бер кеше ғүмере лә етерлек түгел. Ошо ер аҙмы икән ни батша хәҙрәттәренә? Тағы нимә даулай ул? Шулай уйлай Мөхәмәтҡужа. Әммә һорауҙарына яуап таба алмай. Уйлай-уйлай ҙа ҡул һелтәп ҡуя.

«Батша хәҙрәттәре, Ватан азатлығы юлында», – тине лә бит мулла, тип әсенде Мөхәмәтҡужа. Унан ғына донъя бөтәйеп, күңел тынысланмай шул.

Байтаҡ ултырҙы ир кеше, уйҙар ауырлығына баҫылып. Ҡояш тау артына йәшенеп, эңер төшә башлағас ҡына, ҡапыл тертләп, урынынан ҡуҙғалды. Уның мөһабәт кәүҙәһенән хасил булған күләгә зыяраттан аша сығып, оҙон Һырт буйына саҡлы китеп юғалды.

Мөхәмәтҡужаның ихатаһы ауылды уртаға бүлеп аҡҡан Ҡоро Күндрәк йылғаһының һул ярындағы урамда. Уҫаҡ бүрәнәләрҙән бер нисә йыл элек кенә һалынғанлыҡтан, ергә һеңеп тигәндәй ултырған һалам башлы, ситән соланлы күршеләре йорттары янында ярайһы ғына күренә. Алты мөйөшлө был өйҙө, байтаҡ йылдар интеккәндән һуң, Ниғмәтулла ҡарт иҫән саҡта уҡ бөтөрөп ингәйнеләр. Өй эсе бай түгел. Алъяҡты иңләп ҙур һике йәйелгән, уның өҫтөн сепрәктән һуғылған балаҫ биҙәй. Был һике барлыҡ нужаны күндерә: шунда сепрәк ашъяулыҡ йәйеп ултырып ашайҙар, шунда барыһы ла теҙелешеп ятып йоҡлай. Бер яҡ ситтә ятыу ҡаралтыһы өйөлгән. Ингән ыңғайға уң яҡта оло һандыҡ. Тышы ҡалай менән биҙәлгән был мөлкәт Мөхәмәтҡужа белгәндән бирле бар.

Ҡасандыр Бохара яғынан килгән кешенән һатып алынған шикелле. Стена тирәләп ике эскәмйә ҡуйылған. Башҡа нәмә күҙгә салынмай. Ер иҙән уртаһында бала-саға уйнай. Стеналарға имәндән ҡаҙауҙар ҡағылып, уларға кейем-һалым эленгән.

Ихатаһы иркен Мөхәмәтҡужаның. Бер яҡта – ситәндән үрелеп, эсе йылы булһын өсөн мал тиҙәге менән ҡалын итеп һыланған аҙбар. Унда ике һыйыр, лапаҫта ике ат. Һарыҡ-кәзәләре инде бер тиҫтәнән күберәк. Ҡаҙ-тауыҡ та байтаҡ. Һәр ун йыл һайын хужа ҡаҙ ояларын яңыртып тора. Үҙ ауылынан түгел, Раевка ауылы муҡшыларынан күп бала сығарғандарын ғына ала.

Ғаилә Табылдыла урта хәллеләрҙән йөрөй. Ҡатыны Миңлебикә һигеҙ бала тапҡайны ла, өсөһө бик ҡыҫҡа ғүмерле булды шул. Миңлебикә тыумышы менән был тирәнеке түгел, Минзәлә яҡтарынан. Шунда бер йылы атаһы менән йәрминкәгә барғанда күҙләп алып ҡайтты уны Мөхәмәтҡужа. Һығылмалы, матур кәүҙәле был ҡыҙыҡайға егет бер күреүҙә сат йәбеште. Ҡыҙ ҙа уға нисектер мөләйем итеп ҡарағас, һүҙ ҡушҡайны, һөйләшеп киттеләр. Атаһының ай-вайына ҡуймай, иртәгеһенә үк мулланан ижап уҡытып, Табылдыға алып та ҡайттылар.

Миңлебикә донъя көтөү өсөн генә яратылған ҡатын булып сыҡты. Өйҙө ҡурсаҡтай матур итеп йыйыштырыу, тегеү, һуғыу тиһеңме – барыһына ла ҡулы килешә. Ә аш-һыуға оҫталығы! Ауылда бер кем дә белмәгән ризыҡтар әҙерләү, ауыҙ һыуын ҡоротоп ашауҙар... Ә яғымлылығы! Күҙҙәрен тултырып “Хужам, жаныкайым!” тиһә, Мөхәмәтҡужаның йәне майҙай ирей ҙә китә.

Бәхетле ғаилә ине был. Ауылда күптәрҙе көнләштерелек. Тәүге балалары Мөхәмәтгәрәй тыуғас, Миңлебикә ҡатын-ҡыҙ төҫө инеп, тағы ла матурланып китте. Унан Әхмәтҡужа тыуҙы, Инсебикә, Хәйервара...

Мөхәмәтша

Киләһе йылдың яҙы бик иртәләне. Март баштарында уҡ ҡояш офоҡтан дилбегә буйы күтәрелеү менән үк йылыта башланы. Өй ҡыйыҡтарына, аҙбар баштарына ҡунған ҡар йәһәт иреп, аяҡ аҫтына һыу булып тамды, төнгө һалҡында туңып, боҙға әүерелде. Март урталарына Өй тауы, Ҡыҙҙар тауы итәктәре ҡарҙан әрселеп, тиҙ арала унда йәм- йәшел үлән тиртте һәм, яҙғы ҡояш нурҙарына наҙлана-кирелә, юғарыға үрләй башланы. Шуны ғына көтөп торғандай, унда ауылдың оҙон ҡыштан арып-талсыҡҡан малай-шалайы килеп тулды. Бер-береһен этешә-төртөшә, тирә-йүндә шат тауыштарға күмеп, төрлө уйындар уйнанылар. Кисен балаларҙы ауыл йәштәре алмаштырҙы. Йыр, бейеү, таҡмаҡ әйтеүҙәрҙе ололар ҙа сығып тамаша ҡылды.

Әле төньяҡ битләүҙәрҙә ҡар ҡалын ғына ятһа ла, ҡыштың көндәре һанаулы ҡалғайны. Тиҙҙән йырғанаҡтарҙан дәррәү ағып төшкән ҡар һыуҙары Ҡоро Күндерәктәге боҙҙо ла аҡрынлап иретә, йылға һыуы күҙгә күренеп күтәрелә башланы. Яҙғы ташҡын мәле яҡынлашты. Был тамашаны Табылды халҡы элек-электән күңелле итеп үткәрә торған. Ярҙарға һыймай аҡҡан ташҡынды күрергә хатта таяҡҡа таянған ҡарт-ҡоро ла сыға. Йәштәр, үргәрәк барып, һыу ситенә күп итеп һалам өйә лә, ут төртөп, йылға буйлап ағыҙып ебәрә. Төнгө ҡараңғыла йылға эсенән ағып барған ут кешеләрҙә ниндәйҙер дәрт уята, ҡайһылары, түҙмәй, йырлап ебәрә.

Ҡар мул булған йылдарҙы арғы урамды ташҡын һыу баҫа. Ирҙәр, оҙон ҡуныслы итек кейеп, урамына килеп ингән һыуҙы нисек тә йырып ебәрергә маташып аҙаплана. Әммә Ҡоро Күндерәктең ташыуы оҙаҡҡа бармай, ике-өс көн үтеүгә ул элекке ярҙарына ҡайтып, тынысланып ҡала. Бына күрҙегеҙме, кешеләр, яҙҙы көтөп мин дә хисләнәм, тулҡынланам, ярһыйым, тигән кеүек ул.

Һыу китеү менән туғай буйҙары ла, яҙғы һоро юрғанын һирпеп ебәреп, йәшел еләнен кейеп ала. Тал-өйәнкеләр япраҡ ебәрә, туғай үләне, балтырған, кесерткән, ҡаҡы, дегәнәк ҡояшҡа үрелә. Туғайға ҡайҙандыр ҡоштар килеп тула һәм көн үҙәгендә лә, кисен ҡояш байығансы моңло итеп һайрай. Сорлай-сорлай, күккә һабантурғай оса.

Ә ауыл халҡы был мәлдә йәйләүгә сығырға әҙерләнә. Ҡышҡы кейем-һалымын йыйып ҡуя, малдарын барлай, кәрәк-ярағын төйнәй. Сығып китә торған көндө алдан һөйләшеп ҡуялар. Ауылды ҡарап, күҙ-ҡолаҡ булырға староста кешеләр тәғәйенләй.

Был юлы ла ирҙәр арғы урам уртаһындағы мәсет майҙанына йыйылды. Староста Ғәлләм, мулла менән быш-быш нимәлер тураһында әңгәмәләшкәс, тамағын ҡырҙы ла:

– Йәмәғәт! Күреп тораһығыҙ, быйыл яҙ иртәләңкерәне. Малларҙы йәйләүгә сығарыу өсөн уңайлы мәл етте. Бөгөн-иртәгә ҡуҙғалырға кәрәк, – тине.

– Һин, Ғәлләм туған, алай тиһең дә ул. Яҙҙың былай иртә килеүе алдатҡыс түгелме икән, – тип алғараҡ сыға бирҙе һәр саҡ һалҡын баштан аҡыл йөрөтөүе менән танылған Тимерҡаҙыҡ ҡарт. – Әле иҫкесә май ҙа тыуമаған. Һалҡыннар булыр әле, тим. Ҡыш һалҡынының үтеп киткәнен көтә биреү ҡамасауламаҫ. Бер аҙ уйланып торғандан һуң тағы ла: – Әле ҡар яуып ҡуймаһа тағын, – тип өҫтәне лә һораулы ҡарашын старостаға йүнәлтте.

– Мулла, кем, Тимеркадык, син гел генә сүзне тискәрегә борырга торасың, – тип һүҙгә ҡушылды мулла. – Нинди кар яусын апрель ахырында. Юкны сөйләп торма инде олы башың белән.

Тимерҡаҙыҡ ҡарт бирешергә теләмәне.

– Аллаһы Тәғәлә насип итһә, беҙҙән һорап тормай инде ул, – тине, йоҡа ирендәрен ҡымтып. Мулланың ошолай тупаҫ итеп ҡыланыуына ҡарттың күңеле кителгәйне.

– Юҡ, яумаҫ, мулла дөрөҫ әйтә. – Был көр тауыш үрге ос ҡуштаны Мортазаныҡы ине. Түрә-ҡара, мулла-монтағайҙарға ярамһаҡланып ғүмер үткәргән был оло йәштәге ир, ярлы көн итеүенә ҡарамаҫтан, ауылдаштары алдында бай булып ҡыланып, гел көлкөгә ҡалыуға ҡарамаҫтан, ул ошо ғәҙәтен ташламай ине.

– Ашыҡкан – ашҡа бешкән, тиҙәр бит. Әллә бер аҙ сабыр итәйекме? – Был һүҙ Тимерҡаҙыҡтың күршеһе Аралбай ҡарттыҡы ине. Күрәһең, улар алдан фекер төйнәп ҡуйған.

– Ҡуҙғалайыҡ, йәмәғәт, малларҙы йәшел үләнгә сығарайыҡ!

– Эйе лә баһа, нимәнән ҡурҡып-өркөп торорға!

– Тимерҡаҙыҡ ауыл ҡарауылларға ҡалһын. Ғәлләм!

Өс көндән, йәғни 28 апрелдә, йәйләүгә дәррәү ҡуҙғалырға һүҙ ҡуйышып таралыштылар. Йыйында Мөхәмәтҡужа ла ҡатнашҡайны, әммә ул һүҙ ҡатманы, башҡаларҙы тыңланы. Башында Тимерҡаҙыҡ ҡарт әйткән менән бәйле төрлө уйҙар ҡайнаны. Быйыл йәйләүгә сығыу йылдағы кеүек булмаҫ, сөнки Миңлебикәһе ауырлы бит. Бөгөн-иртәгә бәпесләргә тора. Бәлки, бер аҙ көтөргә лә тура килер. Тик Миңлебикәһе был хаҡта ишетергә лә теләмәне.

– Юк! Бу турыда уйлама да. Мир кузгала икән, бер без калмабыз инде. Аерылганны аю ашар, дисең бит үзең, – тип ҡырҡа ҡаршы төштө ҡатын.

Ауырлыҡ менән ҡуҙғалғанын белдермәҫкә тырышып, Миңлебикә кәрәкле әйберҙәрҙе йыйҙы, малайҙарына ла эш тапты. Иртәгә ҡуҙғалабыҙ тигәндә, Мөхәмәтҡужа ғаиләһе тулыһынса әҙер ине.

Ҡояш Яңғыҙ сағыл итәгенән бер аҙ күтәрелеү менән, көнсығышҡа ҡарай,

ауылдан сығып та киттеләр. Алдан мал-тыуар ҡыуылды, улар артынса арбалар теҙелде, бала-сағa атланы. Тирә-йүнде саң болото күмеп, һарыҡтар баҡырҙы, кәзәләр мәәлдәне. Билдәләнгән урынға – Түрешле йылғаһы буйына ҡояш байыр алдынан ғына килеп еттеләр. Тирмәләрҙе ҡороп, усаҡ яғып, тамаҡ ялғап алғансы эңер ҙә төштө. Офоҡтан һап-һары еҙ батмустай ҡалҡҡан ай менән бергә тиерлек тиреҫтән ел иҫә башлап, ул һалҡын һауа алып килде. Малдар бербереһенә һыйынышты. Тирмәләрҙәгеләр өҫтәренә ҡалыныраҡ юрған ябынды. Төн уртаһы етеүгә һалҡын ел көсәйеп, төньяҡ-көнсығыштан ҡара болоттар ҡыуалай башланы. Улар айҙы ҡаплап китеп, әле генә китап уҡырлыҡ төндө ҡапҡараға әүерелдерҙе. Бына бер саҡ күктән аҙ-аҙлап ҡар бөртөктәре төшкәне күренде, унан был аҡ бөртөктәр йышая башлап, ҡар яуып ебәрҙе. Таң беленеүгә тирә-яҡты ап-аҡ ҡар юрғаны ҡаплағайны.

Миңлебикә төндө йоҡламай уҙғарҙы. Тулғаҡ тота башларға итә ине. Күрәһең, арбала көнө буйы һелкенеп килеү үҙенекен иткән. Нисек тә түҙеп таң аттырырға уйлағайны ла, ҡарынындағы йән эйәһе тышҡа сығырға була ныҡ итеп тулай башлағас, Мөхәмәтҡужаны уятты.

– Син, бар әле Нәфыйга әбине дәш, – тине ул өҙөк-өҙөк итеп. – Хәлем бик начар, килсен.

Мөхәмәтҡужа тышҡа сыҡһа, ҡар яуғанын күреп иҫе китте. «Тимерҡаҙыҡ ҡарт тиктәҫкә һиҙенмәгән икән. Тыңнамаҡыҡ, иҫәр булдыҡ, – тигән уй йүгереп үтте башынан. – Ғәлләмдең бер ҡатлылығына ышанып сығып киттек». Ҡатынын борсомаҫ өсөн, уға ҡар яуыуы тураһында бер ни ҙә әйтмәҫкә булды.

Нәфиға ҡарсыҡ менән Дәүләтҡол ҡарт тирмәһе байтаҡ йыраҡта булып сыҡты. Унда ҡар йырып барып еткәнсе, Мөхәмәтҡужа манма тиргә төштө. Тыштан ғына:

– Нәфиға апай, Минебикә бәпесләргә итә бит әле. Һине саҡырырға ҡушты, – тине. Ҡарсыҡ, күрәһең, уяу булған:

– Хәҙер барып етәм. Һин атлай тор. Усағыңды яғып ебәр, – тип ҡалды.

Нәфиға ҡарсыҡ ауылда берҙән-бер кендек әбейе булмаһа ла, бирге урам ҡатындарына башлыса уны саҡыралар. Тәбәнәк кенә буйлы, ябыҡ кәүҙәле ҡарсыҡ телгә бик яғымлы, ҡулы ла еңел. Ул кендеген киҫкән балаларға ла изге теләктәр теләп, йыш ҡына теләге ҡабул да була торған. Хәйер, Нәфиғаның әсәһе Рәфиға ла кендек әбейе булғанын Мөхәмәтҡужа хәтерләй. Күрәһең, кешегә һәләт ата-әсәһе аша бирелә торғандыр.

Ҡояш сыҡмағайны әле, Мөхәмәтҡужалар тирмәһен көслө итеп бала тауышы ярҙы. Ул шул тиклем ғәйрәтле ине, хатта тулҡыны Түрешле йылғаһының теге ярындағы тал-өйәңкеләр араһына инеп ирегән кеүек тойолдо. Ни булырын көтөп тышта торған атаға тирмә эсенән кендек әбейенең шат тауышы ишетелде:

– Улың бар, Мөхәмәтҡужа! Йә, бала, бәхет-тәүфиғың белән! – Ҡарсыҡ, күрәһең, сабыйға теләк теләп, арт һанына бер-ике сәпәп алды, тауышы тышҡа ла сыҡты.

Атай кеше тирмәгә ингәндә, Нәфиға ҡарсыҡ яңы тыуған сабыйҙы сепрәк-сапраҡҡа урап маташа ине. Миңлебикәнең ағарынып киткән матур хәлһеҙ йөҙөндә һүрән генә йылмайыу ғәләмәте сағылды.

– Улыңдың тауышы бик көр, Аллаһы Тәғәлә бойорһа, сәләмәт, көслө булып үҫер. Ата-әсәһенә игелекле булыр. Дошманына аяу күрһәтмәҫ, – тип Нәфиға ҡарсыҡ сабыйҙы әсәһе янына рәтләп һала-һала һөйләнде лә, бер аҙҙан Мөхәмәтҡужаға әйләнеп:

– Туғаным, һыуың ҡайнағандыр. Ҡана, йыуынайыҡ та тәмләп сәй эсеп алырбыҙ, – тине. – Улыңа исем таптыңмы? Уйлап йөрөгәнһеңдер бит.

– Уйлағанмын, – тине Мөхәмәтҡужа ышаныслы итеп. – Мөхәмәтша булыр. Абызыйым иҫтәлегенә. – Һуңғы һүҙ шымыраҡ әйтелде.

– Эйе шул. Бик матур исем. Пәйғәмбәребеҙ исеме, – тип ихлас күтәреп алды кендек әбейе.

Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәтлелер инде: ҡояш сығып, бер аҙ үтеүгә, ел көньяҡтан иҫеп, төш уртаһы етеүгә йылыта ла башланы. Яуған ҡар тиҙ арала иреп тә бөттө. Йәйләүгә сыҡкан халыҡтың күңеле үҫеп китте, йырлашҡан, хатта тыпырҙашып бейешкән тауыштар ҙа ҡолаҡҡа салынып ҡалды.

Йылдар үтте. Мөхәмәтша ҡалҡыу ғына кәүҙәле, ҡап-ҡара бөҙрә сәсле, аҡ йөҙлө малай булып үҫеп килә. Теле былай иртә асылһа ла, малай һөйләшеүгә һаран булып сыҡты. Бер ҡасан да башлап һүҙ ҡушмай. Йомошо булғанда ла шым ғына килә лә ҡарап тик тора.

– Берәй нәмә кәрәкме әллә? – тиһәләр генә, йомошон әйтә.

Кинйә улын Миңлебикә башҡаларға ҡарағанда күберәк иркәләне. Эшкә уңған, изге күңелле, оло йөрәкле итеп күрергә теләне уны әсә. Тик донъя кеше теләге-ихтыярынан ғына туҡылмай икән шул.

Мөхәмәтшаға ете йәш тулған көҙ инде ҡышҡа ялғана башлаған мәл ине. Ҡырпаҡ ҡар яуғас, бирге ихата артындағы түмәләскә атаһы яһап биргән йыла табанлы санаһын һөйрәп, Мөхәмәтша ла күтәрелде. Бала-саға күп кенә, ҡысҡырышып сана шыуалар. Санаһын уңайлап ҡуйып, йөҙтүбән ятҡайны ғына, үрге ос Закирҙың асыулы тауышын ишетте:

– Мәтша! Тор әле! Тәүҙә абызыйың шыуып ҡараһын!

Ул малайҙың аяғынан һөйрәй ҙә башланы. Һуғыш суҡмары булыуы менән бәләкәйҙән даны сыҡкан ун йәштәр тирәһендәге усал малай ул Закир. Шуның өсөн уны мәҙрәсәгә лә индермәнеләр. Үҙенән олораҡ малайҙар менән һуғышып, йыш ҡына туҡмалғаны ла бар, әммә аҡылға бер ҙә ултырмай.

Мөхәмәтша торҙо, тик сана бауын ҡулынан ысҡындырманы.

– Бирмәйем, – тине ул, ҡырыҫ итеп. – Үҙеңдең санаңды алып кил дә шыу.

Закир түмәләскә санаһын алмай, ҡарар өсөн генә менгәйне. Мөхәмәтша уға ҡаршы төшөр тип башына ла килтермәгәйне. Малайҙың яуабы ҡыҙматан үҫмерҙең асыуын ҡабартып ебәрҙе.

– Нимә тинең, маңҡа?! – Закир Мөхәмәтша ҡулындағы сана бауын һелкетә тартты, тик ҡулына эләктерә алманы. Мөхәмәтша бауҙы урап тотҡайны. Закир, бер һүҙ ҙә әйтмәй, ҡапыл киҙәнеп, Мөхәмәтшаның танау аҫтына һуғып ебәрҙе. Малай йығылды, унда ла сана бауын ҡулынан ысҡындырманы. Танауынан урғылып сыҡкан ҡанды күргәс, Мөхәмәтша, үкереп илап, дошманына ташланды. Тегеһе малайҙы тағы ла һуғып йыҡты. Мөхәмәтша тағы ла ергә ауҙы, тағы ташланды. Ҡан күреү уны тамам йыртҡысҡа әйләндереп, аңын томалағайны. Шулай күпмелер дауам итте. Малай бирешергә теләмәне, ҡанға туҙып, дошманына ташлана бирҙе. Бер саҡ Мөхәмәтша ерҙә аунап ятҡан йыуан таяҡты күреп ҡалды ла, тиҙ генә ҡулына эләктереп, бар көсө менән Закирҙың башына тондорҙо. Теге, яман аҡырып, күҙен аҡайтты ла өйө яғына һыпыртты. Мөхәмәтша, таяғын һелтәй-һелтәй, дошманы артынан төштө.

Тамаша ҡарап торған малайҙарҙың ҡайһы берәүҙәре уның артынан эйәрҙе. Закир артына ла ҡарамай йүгереүен белде. Мөхәмәтша уның артынан ишек алдына тиклем килде лә, таяғын шунда ташлап, кире боролдо. Ул әйләнеп килгәндә, санаһы янында әсәһе баҫып тора ине. Мөхәмәтшаның ҡанға туҙған йөҙөн күреп, әсә илап ебәрҙе, һуңынан ҡулына ҡар алып, ҡанды һөртөргә тотондо.

Кис волость үҙәгенән ҡайтҡан Мөхәмәтҡужа кесе улының шешенгән йөҙөн күрҙе лә, борсолоп:

– Улым, әллә берәйһе туҡманымы? – тип һораны.

– Үҙем туҡманым, – тип яуап бирҙе малай ғорур тауыш менән. – Закирҙы. Атаһы көлдө лә етди итеп:

– Туҡмалмауың яҡшы, тик һуғышып йөрөргә ярамай, – тине.

– Мин түгел, үҙе башланы бит, – тип ныҡышты Мөхәмәтша.

Был ваҡиғанан һуң Закир дошманынан үс алыу өсөн уңайлы мәл эҙләй башланы. Бурыслы булып ҡалғыһы килмәй, бер маңҡа малайҙан туҡмал әле. Ғәрлеге ни тора! Закир күрһәтер әле, унан бит олораҡ малайҙар ҙа шөрләй. Яйы оҙон ҡыш үтеп, йәмле йәй килгәс кенә сыҡты. Мөхәмәтшаның яңғыҙы ғына йылға буйына төшөп барғанын күреп, Закир ҡыуанысынан хатта һикереп ҡуйҙы. «Батырып үлтерәм мин ул маңҡаны», – тип ярһыны. Мөхәмәтшаның сисенеп һыуға төшкәнен йәшенеп кенә күҙәтте лә үҙе лә төштө. Дошманы янына ул яр ситендәге талдарға ышыҡлана-ышыҡлана яҡынайҙы. Бына малай ҡул һуҙымы ғына ерҙә быстырҙай. «Эх, сумып китһен ине,– тип теләне Закир,– ботонан тотоп батырыр ҙа ҡуйыр инем».

Мөхәмәтша ысынлап та сумды. Закир ҙа уның артынан сумып, малайҙың тарамыш аяҡтарынан эләктерҙе лә аҫҡа һөйрәй башланы. Закир йәй оҙоно Күндерәк буйынан ҡайтмай, һыу аҫтында оҙаҡ торорға өйрәнеп бөткән. Мөхәмәтша ныҡ ҡына тыпырсынһа ла, аяғын ысҡындыра алманы. Ни ҡөҙрәт менәндер яйын килтереп, йән көсөнә икенсе аяғы менән дошманының битенә типкәс кенә ысҡына алды ул Закир ҡулынан. Хәле бөтөп һыу өҫтөнә ҡалҡҡас, малай көс-хәл менән ярға үрмәләне. Үҙен батырырға маташҡан кешенең Закир икәнлеген һыуҙа саҡта уҡ аңлап алды ул. Ярға Закир ҙа сыҡҡас, Мөхәмәтша, бар көсөн йыйып, илай-илай, уға ташланды. Яман үс менән янған ике малай бер-береһен ысынлап та үлтерергә әҙер ине. Береһе типһә, икенсеһе һуҡты, ах та ух килеп бер-береһен дөмбәҫләнеләр. Береһе лә бирешергә, туҡмалыусы булып ҡалырға теләмәне. Ауыҙҙар йоҙроҡ төшөүҙән шешенеп ҡананы, күҙ төптәре күгәреп сыҡты, бит-ҡул тырналды.

Мөхәмәтшаның ағаһы Әхмәтҡужа килеп айырмаһа, был алыш ни менән бөтөр ине икән? Йүгереп килешләй үк Әхмәтҡужа Закирҙы елкәһенән тотоп алып, һыуға быраҡтырҙы. Ғәйрәтле шул Мөхәмәтшаның ағаһы! Йылғаға бер сумыу менән Закирҙың кәре ҡайтты. Күшеккән тауыҡҡа оҡшап ҡалды үҙе.

– Тағы ла бер тапҡыр Мәтшәгә тейгәнеңде күрһәм, ботоңдо һуғып һындырырмын! – тине лә Әхмәтҡужа, Мөхәмәтшаны етәкләп ҡайтып китте.

Закир бынан һуң бер ҡасан да Мөхәмәтшаға ҡағылманы. Көсө етмәҫен дә самалағандыр, әммә аҡыл ултырманы үҙенә. Бер нисә йылдан һуң ат ҡараҡтары менән бергә тотолоп, төрмәгә эләкте. Табылды тарафтарында ул ошонан һуң күренмәне. Байтаҡ йылдарҙан һуң Закирҙың төрмәлә үлеп ҡалыуы ишетелде.

Ә тормош Мөхәмәтшалар ихатаһы, ғөмүмән, Табылды ауылы тарафы менән генә сикләнмәй. Донъя киңерәк, уның һәр тарафында ғүмер итәләр. Ул яҡтарҙа ла тормош йылғаһы үҙ яйына аға бирҙе. Шулай итеп, XX быуат та сиратын еткерҙе. Башҡортостандың Мәскәү батшалығына ҡушылыуын юллап барған ата-бабалары инде күптән гүр эйәһе булып, хатта вариҫтары уларҙың мәңгелек йорттары ҡайҙа икәнлеген дә онотоп бөтөргәйне. Башҡорт крәҫтиәне үҙ кәртәһендә бикләнеп, йыраҡ ҡалған йылдарҙа ата-бабаларыныҡы булған иркен ерҙәренең байтаҡ өлөшөнән яҙып көн иткән бер дәүерҙә өҙлөкһөҙ ташҡындай ағылған күскенсе кафырҙар яңы урыҫ донъяһына нигеҙ һалды, үҙ ғөрөф-ғәҙәттәрен урынлаштырҙы, сиркәүҙәр төҙөнө, башҡа илдәр менән бөткөһөҙ һуғыштар алып барып, йоғонтоһон киңәйтергә һәм көсәйтергә тырышты.

Ул дәүерҙәрҙә Рәсәй империяһы ҡасандыр күп быуаттар элек Сыңғыҙ хан тоҡомдары аймап ятҡан биләмәләрҙән бер аҙ ҡалыша ине. Әйтеүе генә анһат: 22,2 миллион квадрат километр, йәғни Ер шарындағы ҡоро ерҙең алтынан бер өлөшө! Иҡһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙе, йөҙҙәрсә телдә аралашҡан ҡәүемдәрҙе ҡулда тотоу өсөн батша миллион ярымға яҡын ғәскәр аҫрарға мәжбүр булды. Феодализм ҡалдыҡтарынан арынып бөтмәгән Рәсәй империяһы быуат башын ауылдар иле булып ҡаршылаӈы. Алты кешенең береһе генә үҙен ҡала кешеһе тип иҫәпләй ала ине. Һәр ун баланың өсөһө генә мәктәпкә йөрөп, халыҡ араһында уҡый-яҙа белеүселәр һәр бишенсе генә булды. Крепостной хоҡуҡты бынан утыҙ йыл элек кенә иңенән һелкеп ташлаған Рәсәйҙә капиталистик мөнәсәбәттәр ныҡлап урынлаша, сит ил капиталы – башлыса Германия, Франция, Бөйөк Британиянныҡы – күпләп инә башлай, һәм бөтә капитал һалыуҙарҙың 40 процентына етә.

Илдә 20 миллион крәҫтиән һәм 130 мең алпауыт хужалығы иҫәпләнә. Донъя баҙарына арыштың дөйөм йыйымының яртыһы, бойҙайҙың бишенсе өлөшө урыҫ империяһынан килә. Империяла ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа тыуым юғары булһын өсөн күп көс түгә, ил халҡы йыл һайын 2,5 миллионға арта.

Урыҫ сәнәғәтселәренең ныҡышмалылығы менән Башҡортостанда Архангельск, Воскресенск, Благовещенск суйын етештереү, Верхотор баҡыр заводтары төҙөлә. Унда кисәге урыҫ крәҫтиәндәре менән бергә байтаҡ башҡорт эшләй. Ырымбур тау округында 44 алтын табыу предприятиеһы, Миәстә алтын сәнәғәте ширҡәте ойошторола. Воскресенск, Преображенск баҡыр заводтары инглиз компаниялары ҡулына күсә, Силәбе өйәҙенең күп кенә алтын приискылары Франция, Бельгия йәмғиәттәре тарафынан һатып алына. Ағас әҙерләү ҙур темпта алып барылып, сеймал Ағиҙел, Һаҡмар йылғалары буйлап Әстерхан, Гурьев ҡалаларына саҡлы ағыҙыла. Өфө губернаһында он етештереү, ярма ярыу предприятиелары күбәйә. Кирбес һуғыу, итек тегеү, ағас мискәләр өсөн тимер ҡулсалар яһау үҙләштерелә. Ағиҙел буйлап пароход йөрөй башлай, тимер юлдар селтәре барлыҡҡа килә, йәрминкәләр гөрләп уҙа, банктар асыла, мәҙрәсәләр күбәйә, дауалау учреждениелары ишектәрен аса. Рәсәйҙә капитализм ныҒына.

Эске Рәсәй империяһының бер өлөшө – Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Ҡарағош волосының үҙәге Табылды ауылында барлығы 100-ҙән ашыу хужалыҡ иҫәпләнә. Ауылда мәҙрәсә, ике бакалея лавкаһы ла эшләй. Крәҫтиәндәр ата-бабалары традицияларын дауам итеп, мал баға, аҙ-маҙ иген үҫтерә, империя ихтыяждарына көс түгә.

Башҡорттоң иркен, урман-тауға, йылға-күлгә, болондарға бай ерҙәренә кемдәр генә ымһынмаған! Көнсығыштан килгән исемле һәм исемһеҙ ҙә яуҙар был ерҙәрҙән ҡойон булып уҙған, әммә башҡорт ғүмерен меңәрләп ҡыйһа ла, уның ер-һыуы, урман-тауы, болондарына хужа була алмаған. Тарихта күрелмәгән бихисап сиреү туплаған Сыңғыҙ хан алайына башҡорт ырыуҙары ун дүрт йыл ҡаршы торған. Тимәк, йылғалай ҡан ҡойолған, тауҙай мәйет өйөлгән.

Сыңғыҙ империяһы таралыу менән уның биләмәләренә Мәскәү батшалығы дәғүә итә башлап, Ҡазан ханлығын ҡыйратҡас, башҡорт бейҙәре урыҫ батшаһы Иван IV-гә барып баш һалды. Юрматы ырыуының башлығы Тәтегәс бей әйткәнсә, «ҡол булды». Дөрөҫ, Аҡ батша, башҡорт үҙ ерендә үҙе хужа булып, үҙ ғөрөф-ғәҙәттәре, дине буйынса йәшәр, тип вәғәҙә итеүгә ҡарамаҫтан, бер быуат та үтмәй, башҡорттоң мәғдәнгә бай ерҙәренә урыҫ сәнәғәтселәре ҡул һона һәм, ас беттәй йәбешеп, ҡырағайҙарса талай. Билдәле, башҡорттар ҡаршы сыҡты, һөҙөмтәлә яуҙар ҡупты, ҡан ҡойолдо, ауыл-йорттар яндырылды, бихисап ғүмерҙәр ҡыйылды. Иҫән ҡалған аҫабаларҙың нәҫел-нәсәбен ҡоллоҡҡа дусар итеп, ерҙәренән ҡыуҙылар.

Иҫләй Мөхәмәтша, олатаһы Ниғмәтулла, ата-бабаларыбыҙ борон ҡояш байышындараҡ, Зәй, Эстәрле йылғалары буйҙарында йәшәгән. Әлеге шул ер арҡаһында батша һанаттары менән оло низағ сыҡҡас, тыуған ерҙәрен ташлап, ошо яҡтарға күсергә мәжбүр булғандар, тип һөйләй торғайны.

Ирекле тормош был яҡтарҙа ла булмай сыҡты. Батша хөкүмәте урынлаштырған ғәҙәт буйынса, XIX быуаттың урталарында һәм аҙағында башҡорт ерҙәре ике тапҡыр ҡайтанан бүленә. Был “межалау”, батша чиновниктары фекеренсә,“артыҡ” күренгән башҡорт ерҙәрен ҡаҙна ҡарамағына алыу, урыҫ алпауытзаводчиктарына өләшеп биреү өсөн үткәрелеп, күскенселәргә лә байтаҡ өлөш сығарыла ине.

Ошондай межалауҙарҙа аҫаба башҡорттарҙың өс миллион самаһы дисәтинә ере тартып алына, сөнки илле йылда күскенселәр иҫәбенә халҡы биш тапҡырға артҡан Ырымбур губернаһында ергә ҡытлыҡ башлана. Ер шулай уҡ славян, фин-уғыр халыҡтары күпләп үрсегән Һамар, Сембер, Тамбов губерналарында ла наҡыҫ булып сыға. Күскенселәр Стәрле, Ашҡаҙар, Күндерәк буйҙарына ла тулҡын-тулҡын булып ағыла. Урыҫтар, украиндар, муҡшылар төркөмләп тә, берәм-һәрәм дә, ат егеп тә, үгеҙ егелгән арбаларға ултырып та килә. Шулай итеп, бер нисә йыл эсендә Табылды, Әлимғужа, Ҡабыҡҡыуыш, Мостафа, Аллағыуат кеүек аҫаба башҡорт ауылдары тирәләп Нордовка, Гавриловка, Раевка, Дмитриевка, Васильевка, Потаповка, Корнеевка, Чегодаевка, Үрге һәм Түбәнге Ҡарамалы, Протасовка, Яңы Николаевка, Үрге һәм Түбәнге Борисовка кеүек эреле-ваҡлы тиҫтәнән ашыу күскенсе христиан ауылдары хасил була. Килмешәктәрҙе башҡорттар бығаса билдәһеҙ яңы донъя асылған кеүек ҡабул итә. Көрәктәй ерән һаҡаллы, оҙон сәсле һәм бер ҡасан да битен йыумаған кеүек күренгән был кешеләрҙең кейемдәре лә, ғөрөф-ғәҙәттәре лә бөтөнләй икенсе. Байҙар аяҡтарына йылтыр күн итек, өҫтөнә оҙон салғыйлы ҡара кейем, ярлылары йүкә сабата, ылбырап бөткән сәкмән менән йөрөр ине. Улар үҙҙәре менән алып килгән мырҡылдап-сыйылдап йөрөгән сусҡалар, башҡорттар өсөн ниндәйҙер имәнес, шаҡшы хайуан кеүек тойола. Был хайуандарҙың бер өҙлөкһөҙ шыйыҡ, тын алғыһыҙ һаҫыҡ тиҙәктә аунарға яратыуына олораҡтар: «Шуны ла мал итеп аҫрар икән кеше», – тип хайран ҡала, сөнки Ҡөрьән мосолманға сусҡа ите ашауҙы тыя.

Урыҫтың йорт-ҡураһы ла икенсе ине. Байҙар йортон ҙур бейек ҡойма һәм унан да бейегерәк ҙур ҡапҡа артына йәшерһә, ярлылар иһә урамын кәртәләп тә тормай. Ҡайһы берҙәре хатта землянка ғына ҡаҙып йәшәй. Килмешәктәр ауылдарын да башҡорт ғәҙәтенсә ике рәт итеп түгел, ә ерҙе күберәк эләктереү өсөн бер рәт итеп теҙә. Хатта ҡайһы бер ауылдарында рәт тигәне лә юҡ. Күскенселәр ер эшенә оҫта булып сыға. Уларҙың бар аҙығы: кәбеҫтә, ҡыяр, һуған, кишер һ. б. түтәлдәрҙә үҫә. Көҙөн уларҙы йыйып алып тоҙлап, ҡыш буйы ашайҙар. Урыҫ кухняларында әсе еҫ сығарып щи бешерәләр, ә тоҙло ҡыяры – араҡы эскәндә бына тигән закуска. Башҡорт кеүек, ашты туҡмас менән бешереү ғәҙәте урыҫта булманы.

Яңы күршеләр менән йәшәү тәүҙә бик тынғыһыҙ була. Иректә йөрөп өйрәнгән башҡорт малы яңылыш урыҫ еренә барып инһә, тегеләр уларҙы ҡыуып алып ҡайта ла үҙ кәртәһенә бикләй. Кире ҡайтарып алыу мөмкин түгел, шул арҡала йыш ҡына һуғыш сыҡҡылап, кем өсөндөр үлем менән дә осланғылай. Ә инде теге йәки был йомош менән урыҫ ауылы аша үтергә мәжбүр булған кешене күсәктәр менән үлтергәнсе туҡмайҙар. Урыҫ килеү менән башҡорт ауылдарында тыныс тормош бөтөнләй бөтә. Кафырҙар сиркәү һалып, аллаларына табыныу көндө ҡыңғырау һуға башлаһа, тауышы әллә ҡайҙарға таралып, ҡарт-ҡоро, айырыуса ҡарсыҡтар, уҡына-уҡына өйөнә инеп бикләнер була.

Әммә күрше – күрше инде, уның менән аралашмай хәлең юҡ. Яйлап арала үҙ-ара аңлашыу, тыныслыҡ урынлаша. Теге йәки был йомош менән бер-берећенә йөрөшә башлайҙар. Айырыуса урыҫтар тимер эшенә оҫта булып, Табылды баҙарына үҙ әйберҙәрен һатырға илтергә ғәҙәтләнә.

Күскенселәр ағымы бер нисә йылға һуҙылып, урыҫ ауылдары ҙурая, яңылары ла өҫтәлә тора. Ауылдар үҫеп кенә ҡалмай, ныгына, байҙары ла күбәйә. Түбәнге Ҡарамалыла алпауыт Фрол Головин бер нисә йыл эсендә биләгән ерҙәрен меңдәрсә дисәтинәгә еткереп, быгаса был тирәлә күрелмәгән ҙурлыҡта йорт-ҡура һалып ебәрә, тирә-яғына әллә ниндәй ят ағастар ултыртып, ял итеп ултырыу өсөн һырлап эшләгән беседкалар ҡуйҙыра. Ул ғына ла етмәгән, Ҡарамалы йылғаһынан бер ҡултыҡ яһап, шунда бер нисә аҡҡош ебәрә. Йәмле йәй кистәрендә бында тир-яҡ ауылдар алпауыттары, сиркәү әһелдәре, заводчиктар, тағы әллә кемдәр матур повозкаларҙа затлы кейемле бисәләре, ул-ҡыҙҙары менән килеп, ят көйҙәр ағылған патефон тыңлап күңел асыр булып китә. Улар өсөн алпауыт хатта әллә ниндәй әкәмәтле уйындар ҙа ойоштора.

Фрол – Иҙел баштарында көн иткән урыҫ алпауытының крепостной крәҫтиәндәренең береһе Гавриланың ейәне. Гаврила йәш саҡтарында ҡупҡан балалар мәлендә алпауытынан ҡасып китә һәм Иҙелдә төрлө сауҙа каруандарын талаған юлбаҫарҙар төркөмөнә барып юлыға. Ошонда күпмелер йөрөп алтын-көмөш, аҡсаны байтаҡ туплағас, крепостнойлыҡтан аҡса биреп ҡотола, Һамар ҡалаһы янында үҙенә бер усадьба һатып ала. Әммә талап алған малдың файҙаһы килеп бөтмәйме – Головиндарҙың хужалығы әллә ни йәлсей алмай. Гавриланы хужалыҡ итеү һәләте лә самалы булғандыр инде. Яллаған кешеләре лә урлаша. Иҙел буйында йөрөп йыйған байлыҡ та артмай, киреһенсә, бөҫкәрә башлай. Ошолай йәшәп ятҡанда ҡарт Гаврила, башҡорт яҡтарында арзанға ер алыу мөмкинлеге хаҡында ишетеп ҡалып, хужалыҡ эшенә һәләтлерәк булған ейәне Фролды байтаҡ аҡса менән шул тарафтарға оҙата.

– Внучок, һин бында беҙҙең ыңғайға ялҡаулыҡҡа өйрәнерһең. Былай ҡулыңдан килерлек егетһең. Бар шул яҡҡа, күп итеп ер алырһың да ирәүәнләп йәшәрһең. Башҡорттар алама халыҡ түгел. Көйләп-сөйләһәң. Тик бер кәңәшем бар: улар менән яғалашыуға барма. Ул юл менән башҡортто еңә алмаҫһың.

Иптәшкә Афанасий тигән үтеп сыҡҡан йылғыр әҙәмде эйәртеп, Фрол башҡорт яҡтарына сығып китә. Күп йөрөй ул ер гиҙеп. Ҡарағош волосына килеп еткәс кенә эҙләгәнен тапҡанына төшөнә. Әлимғужа ауылына килгәс, ауыл старостаһы, ҡарттар менән итәғәтле һөйләшә, мул итеп күстәнәс тарата. Иртәгеһен ауылдан төньяҡҡа күтәрелеп, ерҙе бүлеп бирәләр. Урын күңеленә хуш килә Фролдың. Ҡап-ҡара ер хатта ҡороған ағас ҡаҡһаң да, тамыр ебәрерлек. Үҙенә күрә йылғаһы ла бар. Бәләкәй, ләкин барыбер һыу бит. Тирә-яғында ҡарама үҫә. Ошо йылға буйына килеп төйәкләнә Головин. Ауылға исем дә табыла: Ҡарамалы.

Бер-ике йылдан Ҡарамалы йылғаһының үрге ағымындағы тағы ла бер ауылға ошо уҡ өйәҙҙең Кузьминовка ауылынан күсеп килгән мужшылар нигеҙ һала. Уға Үрге Ҡарамалы тип исем ҡушалар. Бында тиҙҙән Пятаевтар хужалығы сәскә ата башлай. Сауҙа юлында йөрөгән Иван Митрофанович Бүздәк, Минзәлә һәм ер аяғы – ер башындағы Мәкәрйә йәрминкәләре менән бәйләнеш тота. Пятаевтың өйө ике ҡатлы булып, беренсеһендә лавка асыла. Араҡыны байрам көндәрендә күрше-күлән урыҫтар биҙрәләп эсә. Пятаевтарҙың береһе күрше Әлимғужа ауылында һыу тирмәне лә тотоп, улар волость хакимиәтен тиҙ арала үҙ ҡулына эйәләтеп, үҙ көйөнә бейетә лә башлай. Башҡорт старшиналары үҙ-ара һөйләшкәндә урыҫты эттән алып – эткә һалһа ла, үҙҙәре алдында ҡойолоп төшөр, эс-бауырына инеп:

– Иван Митрафанис, баш өҫтө, – тип торор була.

Һуңғы межалауҙа Түрешле буйындағы ерҙәр ҡаҙнаға тартып алынғас, Мөхәмәтҡужаның хәле хөртәйҙе, шуға күрә ул балаларын төрлө ялланма эштәргә йөрөтөргә мәжбүр булды. Үҫмер саҡтарында, егет ҡорона ингәс тә Мөхәмәтшаға урыҫ ауылында аҙ көс түгергә тура килмәне һәм ошоноң менән бәйле һөйөнөслө лә, көйөнөслө лә хәтирәләре аҙ булманы уның.

... Биш-алты кеше алпауыт Головиндың бер осо офоҡҡа барып терәлгән арыш баҫыуында ураҡ ура. Улар араһында Мөхәмәтҡужаның ун ете йәшлек улы Мөхәмәтша ла бар. Ашарға-эсергә үҙҙәре алып киләләр, сөнки урыҫ ризығы менән хушланырға дин ҡушмай. Был юлы эште бер аҙнала тамамлап, баярҙан иҫәп-хисап алырға була, өйөнә барҙылар. Бындай эштәрҙә инде нисәмә-нисә йыл йөрөп йышылып бөткән Хөбөтдин ҡарт баяр управляющийы менән һөйләшергә китте. Август башы ҡояшының аяуһыҙ ҡыҙҙырыуы аҫтында тамам тиргә батҡан тәнен йыуырға була, Мөхәмәтша баяр ихатаһы артынан ғына ағып ятҡан Ҡарамалы буйлап уңайлы ятыу эҙләп китте. Ҡоро Күндерәк ише мул һыулы түгел был йылға, ә шулай ҙа тәрән генә ятыуҙары барлығын егет бер аҙ самалап белә ине.

Уңайлы урын табып, кейемдәрен һала ғына башлағайны, яҡында ғына ҡатын-ҡыҙҙың сыңғырлатып көлөүе ҡолағына салынды. Талдарҙы һаҡ ҡына айырып ҡараһа, теге ярҙа тәндәре арлы-бирле генә ҡапланған ике ҡатын-ҡыҙға күҙе төштө. Бындайҙы үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа күрмәгән Мөхәмәтшаның башына ҡапыл эҫе ҡан бәрҙе. Ул тәненең әллә нишләп китеүен, элегерәк тә ҡатын-ҡыҙға ҡарата уяна торған ҡырағай хистең ҡапыл тоҡаныуын тойҙо. Уның үҙен күрмәһәләр ҙә, кипкән тал ботаҡтарының аяҡ аҫтында сатыр-сотор һыныуы ишетелде, ахырыһы. Ниҙер һөйләнделәр:

– Ой, мамочки, кемдер йөрөй шикелле, – тине оҙонораҡ буйлыһы, тиҙ генә кейемдәренә йәбешеп.

– Берәйһенең малылыр, – тине икенсеһе, урынынан ҡуҙғалмай ғына.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһенең, ҡалҡыу күкрәктәрен ҡояш яғына ҡаратып баҫҡанының, һарғылт сәстәре арҡаһына төшөп һылашып тора. Тәне ҡояш яҡтыһында һөттәй ағарып күренә. Ҡыҙ бик тә һылыу, тәне тулышып торһа ла, ҡорһағы юҡ, осаһынан өҫтә биле эскә инеп, кәүҙәһен ирҙәр шашып теләрлек дәрәжәлә матурлай. Ергә бергә ҡушып баҫҡан аяҡтары төҙ һәм балтырҙары тулышып тора. Ҡыҙ, күрәһең, ҡояшта ҡыҙынырға килгән.

Икенсеһе ултырып тора, шуға күрә уның билдән түбән кейеме бармы-юҡмы икәнлеген айырыу мөмкин түгел. Ҡыҙҙың ҡараһыу төҫтәге сәстәре ҡоро, күрәһең, ул әле һыуға төшмәгән йәки кибенгән.

Мөхәмәтша таныны. Был ҡыҙҙарҙың беренсе башлап телгә килгәне, килешле буйлы, һарғылт сәслеһе – баярҙыҡы, ә икенсеһе уға таныш түгел ине. Үҙен бик иркен тотҡас, моғайын, ситтән килгәндер. Ҡыҙҙарҙың йыш ҡына күл буйында урынлашҡан эскәмйәлә моңайышып, шым ғына ултырғанын күргәне бар Мөхәмәтшаның. Бер аҙ иҫәңгерәп торғандан һуң, егет, иҫ йыйып, аяҡтарын ҡуҙғатырлыҡ хәлгә килде. Ләззәтләнеп һыу инеү ҡайғыһы онотолдо. Бер аҙ ситкәрәк китеп, бит-ҡулын сайҡаны ла ҡайтыу яғына һыпыртты. Йылға буйындағы кисерештәр, күрәһең, төҫөнә сыҡҡан, баяр урамында осраған күршеһе Арыҫланғәле:

– Бүре баҫтырҙы мәллә? – тип хәйләкәр йылмайҙы – Ҡотоңдо алған бит? Ул көндө баяр таң менән Стәрлегә киткән, шуға күрә управляющийы, уға һылтанып, иҫәп-хисапты иртәгә генә яһарға вәғәҙә иткән. Тимәк, баярҙың мал өйөндә тағы ла бер кис үткәрергә тура киләсәк. Мунса яғып инергә уйлағайнылар ҙа, диндар Әбҡәҙир ҡарт:

– Кафыр мунсаһында йыуынып, гонаһлы булғығыҙ киләме? – тигәс, был уйҙан кире ҡайттылар.

Ҡояш байыуға тройка егелгән ҡыңғыраулы повозкаға ҡырын ятҡан баяр Головин ҡайтып төштө. Аты ҡапҡа төбөнә туҡтау менән, йоҡомһорап килгән баяр ярайһы ныҡ күрмәлгән ҡалын тауыш менән:

– Силантий, дармоед, ҡайҙа һөйрәлеп йөрөйһөң? Ас ҡапҡаны! – тип ҡысҡырып та ебәрҙе.

Баярҙың Стәрленән айыҡ ҡайтҡанын бер кем дә хәтерләмәй. Был юлы ла ул лыҡа иҫерек ине. Бындай саҡтарҙа уның йомартланыуы яҡшы билдәле, шуға күрә хәйләкәр Хөбөтдин тиҙ генә баяр янына ашыҡты:

– Фрул Питрауис, – тине ул, түбәнселек менән башын эйеп. – Беҙ арышты урып бөттөк. Хисаплаш әйҙә.

Ләкин был юлы Головиндың кәйефе ҡырылғаны күренеп тора. Ул, танауын йыйырып, урынынан ҡалҡынырға иткәйне лә, ҡулы тотмай, кире ауҙы. Хөбөтдингә иғтибар ҙа итмәй ине ул. Арҡаһы ике кешенекеләй киң, ҡулдары көрәктәй, ҡырҡ нисәнсе размерлы итек кейеп йөрөгән Силантий ярҙамында баяр, көс-хәл менән повозкаһынан төшөп, аяғына баҫты һәм бейек күтәрмәле ишек алдында ирен тамаша ҡылып торған ҡатыны янына тәнтерәкләне.

– Фрул Питрауис! – тип Хөбөтдин уның артынан эйәрә биреп, баярҙы туҡтатырға уйлағайны ла, Силантий уны тупаҫ ҡына ситкә этте:

– Пошел вон, басурман! Күҙең сыҡҡанмы ни, барин иҫерек бит.

Йәйен дә зәңгәр ситле фуражкаһын башынан һалмаған Силантий Яйыҡ буйы казактарынан. Дағаны ике ҡулы менән еңел генә турайта, тип һөйләйҙәр уның тураһында. Имеш, бер нисә йыл элек Головин йомош менән Ырымбурға барған һәм шунда казактарҙың ат сабышында егетлек күрһәтеп, ҡараҫҡыны ҡылыстан үткәреү тамашаһын ҡараған. Сабып барған аттың ҡорһағы аша сыҡҡан Силантийҙың оҫталығына хайран ҡалып, барин үҙ хужалығына өгөтләгән. Эскән баш менән Головин үҙ ауылында йылҡы заводы асып, төрлө тамашалар ойошторорға уйлаған. Силантийға бик күп вәғәҙәләр биреп алып ҡайтҡан. Әммә ҡорған пландар ғәмәлгә ашырҙай булмай. Баяр унан төңөлә, ә Силантийҙы үҙ хужалығының ҡарауылсыһы итеп ҡалдыра.

Ураҡсылар, тағы ла бер төндө мал өйөнөң һаҫыҡ һауаһында үткәрергә тура килә инде, тип һөйләнеп таралышты. Мөхәмәтша ла улар артынан эйәргәйне, нишләптер күҙе аҡҡоштар йөҙөп йөрөгән күл буйындағы эскәмйәлә ултырған ике ҡыҙға төштө. Тәтәй ҡурсаҡтай кейенеп-яһанған был икәү, ураҡсылар яғына ҡарап, йылмая-көлә ниҙер һөйләшә.

Йоҡларға Мөхәмәтша мал өйөнә инмәне. Зәңгәр күк йөҙөнә ҡарап, бөгөн ямғыр яуырға оҡшамаған, тип уйланы. Бесәнлеккә инеп ятһа, моғайын, баярҙыҡылар ҡаршы булмаҫ. Был ниәтен әйткәс, Силантий ике ҡулын йәйҙе: «Ради Бога». Баҫҡыстан күтәрелде лә Мөхәмәтша кипкән хуш еҫле бесәнгә ауҙы. Арыған йәш организмды шунда уҡ йоҡо баҫты.

Төндә ул, эргәһендә кемдер барлығына һиҫкәнеп, тертләп уянды. Өҫтәге ярыҡтан төшкән ай яҡтыһында ул арыш һаламылай сәстәрен яурынына таратып төшөргән бер ҡыҙҙың, сүкәйеп ултырып, үҙенә теклән ҡарауын күрҙе. Көтөлмәгән хәлдән ҡаушап, егет ситкә тайшанды.

– Ҡурҡма, милый. – Ҡыҙыҡай егеттең бер ҡулынан тотоп уҡ алды. – Бында башҡа бер кем дә юҡ.

Бына ҡыҙ Мөхәмәтшаны, тамам аптыратып, ҡосаҡлап үбергә тотондо. Йоҡоһонан уянып та етмәгән егеттең ҡаршылашырға уйы ла юҡ ине. Ул ни ҡылырға белмәне, шуға күрә тәүҙә бүрәнә кеүек ята бирҙе. Ә эсендә ниндәйҙер

тыйып торғоһоҙ енси тойғо ҡабарҙы. Ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡыҙыҡайҙы ҡыҫып ҡосаҡлап алды. Ҡыҙ, әллә ниндәй ауаздар сығарып ыңғыраша-ыңғыраша, ҡапыл ҡалҡынды ла күлдәген башы аша һалып та ырғытты. Ай яҡтыһында уның эре тир бөртөктәре уратып алған ҙур ғына түштәре күренеп китте. Бына ҡыҙ, аһылдап, Мөхәмәтшаның өҫтөнә ауҙы...

Бер нисә минут бесәнлектә һайғауҙар шығырҙаны, һуҙып-һуҙып ыңғырашҡан, аһылдашҡан тауыштар эленеп торҙо. Ҡатын-ҡыҙ менән енси мөнәсәбәткә инеү Мөхәмәтша өсөн беренсе тапҡыр ине, шуға күрә ул сикһеҙ рәхәтлек тойғоһон бер нисә тапҡыр кисерҙе. Ике кәүҙә хәлдән тайғансы хуш еҫле бесәндә иҙҙе... Бер аҙ өндәшмәй ятҡас, ҡыҙ телгә килде:

– Танышманыҡ та... – тине ул, көлөмһөрәп. – Исемеңде беләйем, егет? – тине.

– Мөхәмәтша. – Егет үҙе лә ҡыҙҙың исемен һорарға ҡысынып тора ине. Яйы сыҡҡанға шатланды. – Ә һин?

– Лизавета мин. Бына таныштыҡ та. – Ҡыҙ киренән урынына ятты. – Минең хаҡта насар уйламайһыңдыр инде. Ғәфү ит, башҡаса булдыра алманым. Һине оҡшатыуымды ике йыл әйтә алмай йөрөнөм. – Бер аҙ тын торғандан һуң, уфтанып, өҫтәне: – Хәйер, ни уйлаһаң да һинең ихтыярҙа.

Мөхәмәтша өндәшмәне. Ни тиһен, кисерештәрен аңлап та өлгөрмәгәйне әле ул. Ҡапыл булды бит. Иң мөһиме, ул урыҫ телен йүнләп белмәй ҙә. Икмәк-тоҙлоҡ ҡына. Баяр ҡыҙы менән мөхәббәт утында иҫереү уны тамам албырғатты, ни ҙә булһа уйлау, әйтеү һәләтен юҡҡа сығарҙы. Мөхәмәтша, үҙен бөтөнләй икенсе донъяға килеп эләккәндәй хис итә ине. Бәлки, был төш кенәлер. Улай тиһәң, ул бит бөтәһен дә кисереп-белеп ята. Бына ҡулдары ҡыбырлай, күҙе һарай түбәһендәге ярыҡ аша ҡараңғы төн йөҙөндә йымылдашҡан йондоҙҙарҙы күрә. Бына ул ҡыҙ ҙа, әкиәттәге хур ҡыҙы түгел, ә ысын тере йән булып эргәһендә һөйләшеп ята.

Эйе, был өндә. Тик тиҙ генә ышана һалырлыҡ, башҡа һыйҙырырлыҡ өн түгел. Барыбер ышандыра алмай.

Елизаветаның башында иһә икенсе төрлө уйҙар ҡайнаны: «Может, ул минән сирҡаналыр. Бәлки, минең турала насар уйлайҙыр. Ниңә бер ни ҙә өндәшмәй ул? Тупаҫ, бүрәнә кеүек ята». Һуңғы уй ҡыҙҙы урынынан һөйрәп тигәндәй торғоҙғайны ла, ниндәйҙер көс тотҡарланы, ул бер аҙ мөйөшкә ҡарап ултырып, егет берәй һүҙ әйтмәҫме икән, тип көттө. Ләкин егет яғынан өн-тын булманы. – Ярай, мин киттем! – Ҡыҙ тәүәккәл хәрәкәт менән тороп баҫты ла, һайғауҙарҙы шығырҙата-шығырҙата, баҫҡыс яғына атланы. «Ниндәй ғорур! Хуш, тип тә әйтә белмәне. Ниңә килдем икән? Оят бит!» Әммә шунда уҡ икенсе бер уй был күңелһеҙлекте ҡаплап китте: «Ә минең һөйөүем? Уны ҡайҙа ҡуяһың?» Аңына килгән сикһеҙ ләззәттән ҡыҙ хатта күҙҙәрен йомдо.

Мөхәмәтшаға рәхәт тә, оят та ине. Бынан һуң Ҡарамалыға аяҡ баҫыуҙан һаҡланды егет. Ул ваҡиғаны нисек тә онотторға тырышты. Бындай мөхәббәттең дауамы булмаясағы уға көн кеүек асыҡ. Булһа ла, бик яман бөтәсәген дә аңлай. Икенсе йәйгә баяр урағына Ҡушкүл ауылы хохолдарына барҙы. Шулай ҙа Елизаветаны хәтеренән бөтөнләйгә сығарып ташлай алманы Мөхәмәтша. Ҡыҙҙың асыулы ла, мөләйем дә йөҙөн һирәкләп булһа ла төштәрендә күрҙе. Ҡайһы саҡ өнөндә лә иҫенә төштө Лизавета. Эстән бик ҡаты һыҙҙырып, ауыр уйҙарға батырып килеп инде. Ниндәйҙер еңеп сыҡҡыһыҙ һағыш күңелде биләп ала ла оҙаҡ итеп ебәрмәй тора.

Лиза – баярҙың дүрт улынан һуң тыуған ҡаҡсараҡ оҙонса йөҙлө, ҡасандыр Висла йылғаһы аръяғынан килгән йыраҡ ата-бабаларына оҡшап йәшкелт-зәңгәр күҙле, арыш һаламылай һары сәсле, бик теремек һәм иркә ҡыҙ. Сәңгелдәктә

саҡта уҡ баяр уны үҙе ныҡ иркәләтте, ауылдан ситтәрәк китеп бер нисә көн йөрөп ҡайтһа, ҡулынан да төшөрмәҫ булды. Үҫә килә, ҡыҙына бер кемдән дә ауыр һүҙ әйттермәне, һораған нәмәһен алып бирҙе, теләгән еренә алып барҙы. Белем алыр ваҡыты еткәс, Стәрлетамаҡҡа алып килеп, бай ҡыҙҙары уҡыған гимназияға бирҙе, ҡаланың иң бай сауҙагәрҙәренең береһе Тихон Тетюшевҡа фатирға индереп, бер үҙенә бай мебель ҡуйылған бер бүлмә хәстәрләне. Хатта бер хеҙмәтсе ҡыҙ ҙа табып бирҙе. Уныһы ла теләһә кемдеке түгел, ә бай уҡ булмаһа ла, ҡалала урыҫ-башҡорт мәктәбендә уҡытҡан уҡытыусыныҡы!

Үҙ һүҙле һәм бер аҙ ҡырҡыу холоҡло булыуға ҡарамаҫтан, Хоҙай Тәғәлә Лизаға донъяуи мәсьәләләрҙе аңлау, уларға ғәҙел баһа биреү һәләте лә насип иткәйне. Үҙенә әхирәттәрҙе лә ул ни өсөндөр бай тиҫтерҙәре араһынан түгел, ә ябай ҡыҙҙарҙан тапты. Стәрлелә уҡығанда ул күберәк атаһы нянка итеп саҡырған Дуняша менән аралашты. Уҡытыусы ҡыҙының үҙенә ҡарағанда белемлерәк, донъяны төплөрәк аңлауын һиҙепме, Лизала уға ҡарата ихтирам тиҙ уянды. Фатир хужаларының бер аҙ көләмһөрәүенә иғтибар итмәй, уға “Евдокия Ильинична” тип өндәшеүгә күнегеп алды. Атаһы ла ҡыҙының был сәйер ҡылығына тәүҙә бер аҙ ғәжәпләнеберәк ҡарап, төҙәтергә маташҡайны ла, Лиза йомшаҡ ҡына итеп:

– Папочка, ул миңә уҡытыусы кеүек. Һин минең уны Дуняша тип атауымды теләйһеңме ни? – тигәс, Головин аңланы. Ҡыҙының йәшенә күрә ғәҙеллеге сәйерәк тойолһа ла, икенсе яҡтан, һоҡланып та ҡуйҙы. Ундай сифаттың кешелә булыуы мотлаҡ, сөнки тормошта бит төрлө хәлдәр булғылай. Ҡыҙының ошо холҡо тураһында уйлана торғас, Фрол Петрович уның тамырҙары ҡайҙан икәнлеген дә аңланы: әсәһе яғынан йыраҡ өләсәһе холҡон хәтерләтә ине был. Эйе, бына йөҙ илле йылдар самаһы элегерәк Һамар губернаһында Кәмәлек йылғаһы буйында йәшәгән башҡорттар араһында ер өсөн бола ҡубып, уны батша ярандары аяуһыҙ баҫтырғас, балаларын урыҫҡа ҡоллоҡҡа тараҡҡайнылар. Головиндар ул саҡта Кәмәлектән йыраҡ түгел ер биләп, иген игеп йәшәй ине. Тәрбиәгә ҡол бала алыуҙан ғаилә башы Никита Фролович ҡырҡа баш тартты. Ғөмүмән, ул үҙе лә ҡасандыр крепостной крәҫтиәндәрҙән булып, ҡоллоҡ тигән төшөнсәне ишеткеһе лә килмәй ине. Ә бына Головиндарҙың күршеһе Матюшкиндар аҫрауға бер малай менән бер ҡыҙ алды. Малайға христиан тәрбиәһе биреп, һуңынан юнкерҙар мәктәбендә уҡыттылар. Ул тамам урыҫҡа әйләнеп, һуңынан бер мәрйә менән ғаилә ҡорҙо. Фрол Петрович белеүенсә, әле элекке башҡорт малайы Матюшкин тоҡомо Һарытау ҡалаһында йәшәй. Ҡайһы бер осрашҡандарында иғтибар иткәне бар Головиндың: башҡорт ҡаны барыбер юйылып бөтмәгән, балаларының киң яңаҡтарында, ҡыҫығыраҡ күҙҙәрендә, ҡайһы саҡ сөм-ҡара сәстәрендә сағылып ҡуя.

Ә бына Матюшкиндарға килгәндә өс-дүрт йәшлек кенә булған, һәр нәмәгә ҡурҡып баҡҡан ҡыҙ бала һомғол буйлы, ҡыйғас ҡашлы, күркәм холоҡло булып үҫә. Алпауыттың кесе улы Василий уға мөкиббән ғашиҡ булып, өйләнергә лә самалай, әммә атаһы ҡырҡа ҡаршы төшә. Теләгенә ирешә алмағас, Василий, ғәрлек-асыуынан Мәскәү тарафтарына китеп юғала. Артабан уның батша ғәскәренә хеҙмәткә инеүе, Төньяҡ Кавказда хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыуы һәм шунда тау халыҡтары тарафынан үлтерелеүе билдәле була. Тик китер алдынан Фросяны (ҡыҙға шундай исем ҡушылғайны) ауырға ҡалдырып өлгөргән. Ҡарт алпауыт нисектер күтәрелеп-бәрелмәне, Фросяның ҡыҙын үҙ балаһылай тәрбиәләргә ҡушты. Лизаның әсәһе Прасковья Ильинична тап ошо ҡыҙҙан тыуғайны. Быны, әлбиттә, бер кем дә иҫкә алырға тырышманы, киреһенсә, йәшереп һаҡлауҙы ҡулай күрҙеләр.

...Лиза Мөхәмәтша менән бесәнлектә мөхәббәт тойғоларына иҫергәндә, Прасковья Ильинична, ниҙер һиҙенеп, ҡыҙының йоҡо бүлмәһенә күҙ һалды. Лиза карауатына тунын урап һалып, уға кеше йоҡлағанға оҡшатып юрғанын япҡайны, шуға күрә барыняла ары-бире шик тыуманы, йоҡлай икән, тип кенә ҡуйҙы. Кире урынына ятҡайны, күҙҙәренә йоҡо инмәне. Хәтһеҙ борғоланып ятҡандан һуң шикләнеү тойғолары уны тағы ла ҡыҙы бүлмәһенә ҡыуҙы. Урын шул килеш, әллә ҡыҙы йән белмәй йоҡлаймы?

Барыня аҡрын ғына, әммә кеше ишетерлек итеп бышылданы: «Лиза, ҡыҙым, йоҡлайһыңмы?» Тик урын һелкенмәне лә. Килеп юрғанды тартып ҡараһа, үҙенең «төп башына» ултырғанын аңланы. Ҡатындың йөрәге әллә нишләп китте. Башына ҡан йүгерҙе, тамағы кибеп, унда ниндәйҙер төйөр килеп тығылды. Барыһынан бигерәк ире уяна ҡалһа, оло тауыш ҡубасағынан шөрләне. Тиҙ генә өҫтөнә халатын ташлай һалып, ишек алдына сыҡты. Унда ла һил ине. Ни эшләргә? Бында ултырһаң, Фрол һиҙеп ҡалыр. Ятып та тәҡәт табып булмаҫ. Шул саҡ мал аҙбары яғынан кемдеңдер шәп-шәп атлап килеүен күреп, барыняның йөрәге тулап ҡуйҙы. Кем йөрөр шулай төн йөҙөндә? Бәй, был Лизаһы ла баһа! Ни эшләп йөрөй ул был ваҡытта? Әсә кеше берсә сикһеҙ ҡыуанып, берсә асыуҙан ҡара көйөп, ҡыҙына ҡаршы атланы.

– Ҡайҙа йөрөйһөң һин төн йөҙөндә? – Барыняның күҙенән йәштәр атылып сыҡты. Ҡыҙын ҡосаҡлап алғайны, унан танауына ниндәйҙер ят еҫ – ирҙәр еҫе килеп бәрелде. Барыһын да аңланы ҡарт мәрйә. Бигерәк тә ҡыҙының арыған, әммә сикһеҙ шат йөҙөнә ҡарап.

– Потаскуха, бына ни ҡылып йөрөйһөң икән һин! – тип йәмһеҙ бышылдап, әсә ҡыҙының сикәһенә сабып ебәрҙе. Был тауыш төн тынлығын йыртып ебәреп, алпауыт урамынан ситкә китеп ирене.

Ҡыҙ ялтанманы.

– Һуҡ, матушка, һуҡ, – тине ул ниндәйҙер ҡәнәғәт битарафлыҡ менән. – Һуң инде хәҙер. Миңә барыбер.

Прасковья Ильиничнаның ҡурҡыуы тиктәҫкә булманы. Ул, төрлө юлдарын табып, был мажаралы төн ваҡиғаһын иренән йәшерергә тырышһа ла, килеп сыҡманы. Головин, бәлки, белмәҫ тә ине, ҡыҙы ғәҙәттәгесә атаһына йомошон еткергән саҡта киптерелгән тоҙло балыҡ һораны. Баярҙы ҡыҙының был сәйер теләге бик ныҡ аптыратты:

– Лизанька, элек һин балыҡтан ерәнә торғайның?

–Тоҙлоно ашағы килә. – Ҡыҙы һүҙҙе шаярыуға борҙо. Әммә һуң ине инде. Головин, ҡаштарын йыйырып, бер аҙ аяҡ аҫтына ҡарап торҙо ла, ниҙер иҫенә төшөргәндәй, ҡапыл боролоп өй яғына ҡарай атланы. Бүлмәләрҙең береһендә ҡатынын табып, емерек ҡарашын уға төбәне:

– Ильинична, әйт әле миңә, ҡасан ҡатын-ҡыҙ тоҙло ашарға теләй? – Үҙе ишек яңағына һөйәлде.

Барыня кәйефле ине, шуға күрә, уны-быны уйламай:

– Ауырға ҡалғанда, Фролушка, – тип яуапланы.

– Тимәк, ҡайһылыр дөмөккәне беҙҙең Лизканы йөклә яһаған? Кем? – Баяр һуңғы һүҙҙәрҙе ҡысҡырып әйтте, уның күҙҙәре эсенә һыймаған асыуҙан атылып сығырҙай булып аҡайғайны. – Әйт, кем ул паскудник?!

Барыня, хәле бөтөп, кәнәфигә ауҙы. Нимә тиһен? Уның үҙенә лә бер ни билдәле түгел. Күпме тырышһа ла, ҡыҙынан бер һүҙ ҙә әйттерә алманы.

– Ә һин үҙең нимә ҡараның?! – тине ул иренә унан да яман ҡысҡырып. – Әллә атаһы һин түгелме?

Ир менән ҡатын оҙаҡ ҡына ҡысҡырышты. Тауышҡа Лиза ла килеп инде. Ата-

әсәһенең һүҙгә килеүе үҙе арҡаһында булыуын аңлағас, әсәһен эргәһенә саҡырып:

–Тетюшевтың улы Колька мәсхәрәләне мине, – тип бышылданы.

Ҡыҙ алдаманы. Сауҙагәрҙең Өфөлә дини семинарияла уҡып йөрөгән оло улы Николай Лизаны күргәндән бирле уға май ялаған бесәйҙәй ҡарап йөрөй башлағайны. Быны ҡыҙ ҙа һиҙҙе һәм был егеттән ситтәрәк йөрөргә мәжбүр булды. Әммә Николай, яйы табылһа, ҡыҙҙы ҡармап ала ла оятһыҙ рәүештә түштәрен һыйпай, оят еренә ҡул һуҙа башлай. Атайыңа әйтәм, тип ҡараһа ла, сауҙагәр улы ыжламаны ла. Тәүҙәрәк, бәлки, Лизаның йәшлеген аңлаптыр, егет енси яҡынлыҡҡа батырсылыҡ итмәне. Ә бына ҡыҙҙың ун етеһе тулғас, һөжүмде көсәйтте.

Яйы ла сыҡты. Ҡышҡы кистәрҙең береһендә Тетюшевтар күп итеп ҡунаҡ йыйҙы, өҫтәлдәрҙе һығып ултырған бихисап араҡы менән шарап эсеп, оҙаҡ күңел астылар. Ҡунаҡтар иҫерешеп таралғас, Николай ҡыҙҙың бүлмәһенә килеп инде. Ни көҫәп йөрөүе майланған күҙҙәренән һиҙелеп тора.

– Хәҙер үк сыҡ! Һөрән һалам, – тине Лиза, ике ҡулы менән түштәрен ҡаплап.

– Һал, тик һине кем ишетер икән? – Николай тәүәккәл аҙымдар менән ҡыҙ янына килде лә, тупаҫ рәүештә ҡосаҡлап, араҡы еҫе аңҡып торған ирендәрен һуҙып, ҡыҙҙы үбергә маташты. Көрмәкләшеп киттеләр. Бик оҙаҡ айҡашты улар. Лизаның ҡаршылашырға бер тамсы ла хәле ҡалмағас, яҙмышына буйһондо. Иртәме-һуңмы, барыбер ҡатын булырға тура киләсәк.

Эшен бөтөргәс тә, Николай сығып китергә ашыҡманы. Түшәмгә ҡарап бер аҙ ятҡандан һуң былай тине:

– Атайыңа әйтерһеңме? Мин унан ҡурҡмайым. – Бер ни тиклем тын торғандан һуң өҫтәне: – Теләйһеңме, өйләнәм?

Ҡыҙ өндәшмәне. Был һөйкөмһөҙ кешенең ҡатыны булыуын ул бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмай ине. Был хаҡта бер кем дә белмәҫ, тип уйлағайны ла һаҡһыҙлыҡ күрһәтеп ташланы шул.

Стәрлегә килеү менән Фрол Петрович туп-тура Тетюшевтарға барып инде. Тихон Павлович яңы ғына төшкө аш өҫтәле артынан тороп, ҡәнәғәт төҫ менән ҡунаҡ бүлмәһендә төрөпкәһен тартып ултыра ине. Төҫө ҡасҡан алпауытты күреп:

– Фрол Петрович, төҫөң ҡасҡан! Сырхап тораһыңмы әллә? – тип урынынан ҡуҙғалды. – Ҡайҙа настоечка һалып бирәйем, шәбәйеп китерһең.

– Һинең настоечкаң ҡайғыһы юҡ миндә! – Головин этеп-төртөп хәлде һөйләп бирҙе лә: – Ни ҡылабыҙ? – тип ҡарашын иҙәнгә төбәлеп ултырған сауҙагәргә йүнәлтте.

– Өйләндерәбеҙ. – Был һүҙҙәрҙе Тетюшев ышаныслы итеп әйтте. – Мин был Алла хеҙмәтсеһен күптән башлы-күҙле итергә йыйына инем. Әйҙә үҙ гонаһы үҙенә булһын.

Оҙон-оҙаҡа һуҙмай, шаулатып туй үткәрҙеләр. Ҡунаҡтар алдында йөҙөнә шатлыҡ осҡондары сығарырға тырышһа ла, йәш киләштең эсе тулы һағыш ине. Ул Ҡарамалылағы теге сихри төндө, унан бигерәк «телһеҙ» башҡорт егете Мөхәмәтшаны һағынды. Бөтәһен дә ташлап, йүгереп, хатта имгәкләп булһа ла тыуған ауылына ҡайтҡыһы килде. Тик ниндәйҙер эске ҡөҙрәт менән генә тыйылып ҡалды. Николайға ҡарап та уның эсе бәхет менән тулы тип әйтеп булмай ине. Туйҙар үтеп, икәүҙән-икәү генә ҡалғас, йәш ир былай тине:

– Йәшәргә тура килер. – Николайҙың тауышы моңһоу булып сыҡты. – Нимә тиҙәр әле, нести свой крест до конца. Изге китапта шулай тиелгән бит…

Лиза ҡайтарып һүҙ әйтмәне. Уның күҙәһе бында булһа ла, уйҙары менән һаман йәйге сихри төн сәхифәләрендә йөҙә ине.

Был төндә уяу кешеләрҙән тағы ла берәү бар ине – Силантий. Ғәҙәтенсә, төн уртаһы ауышҡас, ул баярҙың ихатаһына күҙ һалып сыға торғайны. Оҙон соландың ишеккә яҡын бүлмәләренең береһендә йәшәгәнлектән, инеп-сығыу тауыштары уға ишетелеп тора. Тороп кейенә башлағайны, тышҡы ишектең шым ғына асылып-ябылыуын ишетте. «Бариндыр, моғайын, – тип уйланы казак. – Бәҙрәфкә киткәндер?»

Ишек алдына сыҡҡас, ул был кешенең баяр түгеллеген абайланы. Аҡһыл кейемдәге берәү, төн пәрҙәһен йыртып ашыға-ашыға, мал ихатаһы яғына китеп бара. Кейеменә ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙ булырға тейеш... Кем булыр? Шул саҡ келт итеп иҫенә бесәнлектә ураҡсы егеттең йоҡларға йыйыныуы килеп төштө. «Вот те на» Ҡыҙыҡһынып, Силантий аҙымдарын шәбәйтте. Бына ул бесәнлеккә килеп етте лә ҡолаҡ һалып тыңлай башланы. Сатыр-сотор итеп кипкән бесән һынған, һайғауҙар шығырлаған тауыштар менән бергә ҡолағына ҡатын-ҡыҙ бышылдағаны ишетелде». «Лизавета бит был – тине ул үҙ-үҙенә. – Теге басурман янына килгән. Бына һиңә кәрәкһә...»

Ни ҡылырға белмәй, байтаҡ ҡына тегеләр тауышын тыңлап, уйланып торҙо казак. «Лизанька минең быңдалыҡты белеп ҡалһа, баштан һыйпамаҫтар», – тигән һығымтаға килде ул. «Атаһына ысҡындырһа, барин миңә түгел, ҡыҙына ышанасаҡ. Ҡыҙының зина ҡылып йөрөүен белгәнемде һиҙһә, барин мине, белмәйем, ни эшләтер. Шылырға кәрәк бынан, яҡшы саҡта». Икенсе бер уй ҡаршы төштө. «Ниңә, ҡыҙыҡайҙы мин етәкләп алып килмәгән дә. Үҙе килгән бит. Минең бында ни ҡыҫылышым бар? Ай да, басурман, молодец! Бариндың яратҡан ҡыҙының башын әйләндергән бит ә!»

Силантий ситкәрәк китеп ултырҙы ла ҡыҙҙың төшкәнен оло түҙемһеҙлек менән көтә башланы. Ҡарышҡандай, теге тоҡҡарланды бит. Йәш тән, күрәһең, туя белмәй. Ултыра торғас, казактың күҙенә йоҡо төйөлә башланы. Инеп ятырға уйлағайны ла был уйын кире ҡыуҙы. «Барин уянып, һиҙеп ҡалһа. Юҡ инде, Силантийҙың танауына сиртерлек әҙәм тыумаған әле!»

Ныҡлы түҙемлек бәрәбәренә ул Лизаның бесәнлектән төшкәнен көтөп ала алды һәм уның артынса тиерлек юғарыға үрмәләне. Мөхәмәтша ҡаты йоҡоға китеп өлгөргәйне инде, кемдеңдер яғаһынан бороп, көслө итеп һелкеүенән күҙҙәре үҙенән-үҙе асылды.

– Нимә эшләнең һин, сволочь!? – Уның алдында, сүкәйеп, Силантий ултыра ине. Ныҡ тулҡынланыуҙан үҙенең һаҡал-мыйығы дерелдәгәненә саҡлы һиҙелә. – Барин һиҙеп ҡалһа, аҫып ҡуясаҡ бит һине!

Мөхәмәтша башын һелкте. Оят та, шул уҡ ваҡытта ҡурҡыныс та ине уға. «Силантийҙың ошолай еҫкәнеп йөрөрөн кем белгән», – тип уйлап алды ул. Яҡында ғына һөйөп ҡуйылған һәнәккә күҙ ташланы. Йәнәһе, бер-бер хәл була ҡалһа, бирешмәйәсәк. Быны казак та һиҙҙе.

– Теләһәм, мин һине шунда уҡ үтә сығарғансы сәнсә инем, – тине ул, бер аҙ тынысланып. – Һине минһеҙ ҙә үлтерерҙәр. Тик миңә тауыш кәрәкмәй. Тор, әйҙә, хәҙер һине бында яҫҡырып булмай инде. Мал өйөндә йоҡларһың.

Ул Мөхәмәтшаны мал өйө янына алып килде лә, стенаның ҡайһы еренәлер ҡулын тығып, ишекте асып ебәрҙе.

– Бар, ят, – тип ул Мөхәмәтшаны еңелсә арҡаһынан этәрҙе. – Был хаҡта бер кем дә белергә тейеш түгел, аңланыңмы? – Һуңғы һүҙҙәрҙе Силантий усал бышылданы. – Берәйһенә ысҡындырһаң, бәреп үлтерермен!

Мөхәмәтшаны шунда уҡ йоҡо баҫты. Әммә туйғансы серем итергә бирмәнеләр, аяғынан һөйрәп йөрөтөп уяттылар.

– Баяр иҫәп-хисапты ашлыҡлата бирергә итә, – тине Хөбөтдин, елкәһен тырнай-тырнай. – Сабыр итһәк, аҡсаһы булыр ҙа ул. Ни эшләйбеҙ, ағай-эне?

Кәңәшләшкәндән һуң бер өләшөн ашлыҡ менән, ҡалғанын аҡсалата алырға хәл ҡылдылар. Ишек алдында Силантий осрап, Мөхәмәтшаға йылмайып күҙ ҡыҫты. Күрәһең, борсолма, барыһы ла тәртиптә, тигән һыны булғандыр инде. Барин ғаиләһенән бер кем күренмәне.

Ауылды сығып бер аҙ барғас, арттараҡ ҡалып, үҙ уйҙарына сумып килгән Мөхәмәтшаны Арыҫланғәле көтөп алды.

– Һин төннә ҡайҙа йөрөнөң ул? – тине ул, ғәҙәттәгесә төпсөшөп. – Силандың ишектән индереп ебәргәнен күреп яттым.

– Ә беҙ аның белән Патапуфкаға ашлыҡ апарҙыҡ. Күтәрешергә кеше кәрәк булды ла, тыңнаштым инде, – тине Мөхәмәтша, күршеһенә тура ҡарамай ғына.

– Патапуфкала марйалар өйөрөп йөрөнөгөҙме ней? – Арыҫланғәле ауыҙ йырҙы. – Һинән яман итеп бисәләр есе сыға. Марйа есе.

Мөхәмәтшаның өҫтөнә боҙло һыу ҡойҙолармы ни. Бына һиңә сос танау! Арыҫландың өйләнгәненә лә ике-өс йыллап була шул. Тимәк, есте еҫтән айыра белә.

– Тәүлә танауыңды йыу! – тине Мөхәмәтша, асыуы килеп. – Сусҡа буғы буялғандыр.

Был ваҡиғанан һуң аҙна-ун көн үттеме-юҡмы, ҡараңғы август кистәренең береһендә Мөхәмәтша аҙбар артына сыҡҡайны, кемдеңдер үҙенә бышылдап ҡына өндәшеүен ишетеп ҡалды.

– Метша, подь сюды!

Абайлабыраҡ ҡараһа, бейек булып үҫкән һуҡыр есерткән араһынан килә был тауыш. Яҡыныраҡ килһә, Силантий сүкәйеп ултыра. Егеттең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ни эшләп йөрөй был урыҫ? Әллә берәй этлек ҡылырғамы иҫәбе? Улай тиһәң, йәшенеп-маҙар итеп тормаҫ ине, ҡылысы менән һелтәр ҙә – эше лә бөттө.

– Барышня һинең арттан ебәрҙе, – тине казак, ихлас йылмайып. – Тиҙ генә йыйын. – Мөхәмәтшаны баштан-аяҡ кисереп сыҡҡандан һуң: – Күлдәгеңде алмаштыр, – тип өҫтәне.

Мөхәмәтшаға ҡанат ҡуйҙылармы ни! Ул, ҡайҙа баҫҡанын белмәй йыйына башланы. Атаһының, төн йөҙөндә ҡайҙа ашҡынаһың, тигән һорауын да яуапһыҙ ҡалдырҙы. Тиҙерәк, тиҙерәк! Унда көтәләр бит! Йөрәге шул тиклем ашҡына, бесәнлектәге теге төндө ҡабатлап кисергеһе килә.

Улар Ерекле йылғаһы буйындағы ағаслыҡҡа атланы. Унда, төптәрәк, эйәрле ике ат тора ине. Береһе Силантий маһайып менеп йөрөгән Орлов юртағы, икенсеһе – баярҙың элек яратып егеп йөрөгән бейәләренең береһе алмасыуар Машка. Һуңғы осорҙа бейә артҡы уң аяғына бер аҙ һылтыҡлай башлағас, баяр уны икенсе атҡа алмаштырырға мәжбүр булғайны.

– Барышняның ихтыярын үтәһәң, – тип һөйләнде казак, – ул ошо бейәне һиңә бүләк итәсәк. – Казак, ни өсөндөр шатланып, көслө ҡулы менән Мөхәмәтшаның елкәһенә һуғып алды. Егет саҡ ергә ҡолап төшмәне. – Аңлайһыңмы, басурман, ул һиңә ат бүләк итә? Бәхетле кеше һин. Барин ҡыҙының мөхәббәте тағы ла кемгә тәтеһен?

Ике аттың һигеҙ тояғы төн ҡараңғылығын боҙоп туҡылданы. Елеп кенә барып еттеләр.

– Бошонма, – тине Силантий тыныс ҡына. – Барин менән барыня ҡалаға киттеләр. Иртәгә генә ҡайтмай әле улар.

Головин йәшәгән өйҙөң эсен күргәне юҡ ине Мөхәмәтшаның. Бына ҡайҙа икән байлыҡ! Ни генә юҡ бында?! Табылдыларҙың төшөнә лә кермәгән мебель, келәм, затлы карауат, тағы әллә нәмәләр! Тик уларҙан күңелгә рәхәтлек тойғоһо

һирпелмәй. Киреһенсә, шомланыу тойғоһо быуа, үҙеңде ситлектәге кеүек тояһың. Бүлмәләрҙең береһенән Мөхәмәтша бер ҡасан да күрмәгән кейемдә ҡояштай балҡып Лиза килеп сыҡты ла егеттең ҡосағына ташланды:

– Милый! Нисек оҙаҡ көттөм мин һине!

Был кисте Мөхәмәтша ап-аҡ карауатта түшәнә лә инмәгән түшәктә барышня ҡосағында үткәрҙе. Август аҙағы төндәре оҙонораҡ булыуға ҡарамаҫтан, керпек тә ҡаҡманылар. Теге саҡтағы кеүек, Лиза ғына һөйләнде. Мөхәмәтша күберәк тыңланы. Урыҫ телендә бик һөйләшә алмаһа ла, хәҙер ярайһы аңлай башлағайны инде. Ике арала һүҙҙән бигерәк тойғолар өҫтөнлөк алды. Һөйөшөп, бер-береһен ҡосаҡлап туя алманылар.

Таң менән Мөхәмәтша теге бейәне менеп алды.

– Прощай, милый. – Ишек алдына оҙатырға сыҡҡан Лизаның ике күҙе тулы йәш ине. – Мин һине бер ҡасан да онота алмам инде. – Ул һөттәй аҡ ҡулдарын алға һуҙып тороп ҡалды.

Ҡыҙ, илай-илай, карауатына ауҙы. Әле генә шатлыҡ тулы күңелен еңеп сыҡҡыһыҙ һағыш биләне. Шул һағыш уны уйҙар тулҡынына ташланы. Мөхәмәтшаны Лиза тәү тапҡыр ике йыл элек күргәйне. Ул саҡта ун биш йәш кенә ине уға. Малайҙар менән уйнау юҡ, сөнки үҙенең дүрт ағаһы бар. Алпауыт ғаиләһендә ҡыҙҙы, дворян тәрбиәһе биреп үҫтерергә теләп, тәртипһеҙлеккә өйрәнмәһен өсөн, ярлы-ябаға араһына сығармаҫҡа тырыштылар.

...Арыш урағы етеп килә. Ғәҙәттәгесә, Головиндарға ураҡҡа ялланырға тирә-яҡ ауылдарҙан килә башланылар: урыҫтар, муҡшылар, башҡорттар. Фрол Петрович бындай осраҡта башҡорттарға өҫтөнлөк биреү яғында булып, Табылдынан бер нисә кеше килгәс, хаҡын һөйләшеп, эш башлар көнөн тәғәйенләп таралыштылар. Башҡорттар менән эш итеү анһатыраҡ, сөнки уларға ашарға әҙерләү мәшәҡәте юҡ, улар кафырҙыҡын ашамай. Тағы ла бер яғы бар: урыҫ-муҡшы эсергә ратһа, былар ауыҙҙарына алыу түгел, әйләнеп тә ҡарамай. Кисен ҡояш байыуға ихаталарына сит-ят кейемдәрҙә бер төркөм кеше килеп ингәнен күреп, Лиза уларҙың көнләксә башҡорттар икәнлеген белде. Араларында килешле мыҡты кәүҙәле, таҡыр башына мосолмандар таҡыяһы кейгән һөйкөмлө егетте күргәс, күңеле тулап китте. Бик ғәжәп нәмә күргәндәй, ул теге егеткә текләне лә ҡатты. Егет тә, уның ҡарашын һиҙеп, ҡыҙ яғына ҡарап мөләйем йылмайҙы. Ҡыҙ күңелен был йылмайыу тағы ла албырғата төштө. Уның көнләксөләргә иҫе китеп ҡарап тороуын әсәһе оҡшатманы:

– Доченька, кил әле былай, – тине ул ҡырыҫ ҡына. Ҡыҙының һаман тегеләр яғына ҡарауын күреп: – Был кешеләр беҙгә арыш урағына килде, – тип өҫтәне. Иртәгеһен ҡыҙ теге егетте тағы ла күрҙе. Был юлы уға текләп ҡарарға баҙнат итмәне, бер генә һирпелеп күҙ һалды ла өйгә инеп, тәҙрәнән күҙәтә башланы: «Ниндәй һылыу малай! Ҡояшта янғанмы, ҡап-ҡара! Карамалка буйындағы тупраҡмы ни. Тик бына танауы ғына йәмһеҙерәк, ҙур. Һуңғы уйын шунда уҡ ҡыуҙы. – Юҡ, ҙур түгел дә, ирҙәр затының танауы шулай була инде ул».

Мөләйем егетте ҡабат күрергә тиҙ генә насип булманы. Атаһы Лизаны Стәрлегә алып китте. Уҡыуҙар башланыр алдынан ратҡан ҡыҙына өр-яңы кейем алырға ине иҫәбе. Стәрлелә ҡунырға ҡалдылар, сөнки атаһы, дуҫтары менән осрашҡас, арыу ғына араҡы һемереп иҫергәйне. Иртәгеһен дә улар Ҡарамалыға кисләтеп кенә ҡайтып инде. Көнләксөләр башҡаса ихатала күренмәгәс, был турала әсәһенән ҡыялатып ҡына һорағайны:

– Ушли они, – тине әсәһе. – Быйыл ураҡты ямғырҙар башланғансы бөтөрөп ҡуйҙыҡ. Аллаһы Тәғәлә ишетте беҙҙең теләктәрҙе.

Лиза моңһоуланды, күҙ төптәренә һағыш ятты. Күңелен әйтеп аңлатҡыһыҙ

борсоулы уйҙар солғап алды. Башҡорт егетен тағы ла бер күргеһе килә ине уның. Булманы, ҡайтып киткән. Силантий-казактан һорарға уйлап та ҡуйғайны, кире ҡайтты, әллә нигә юрауы бар.

Уҡырға китеп, ҡала тормошо менән йәшәй башлағас, был өнһөҙ осрашыу тамам онотолдо кеүек. Әммә бүтән егеттәр яғына Лиза әйләнеп тә ҡараманы. Фатир хужаһы улы Николайҙың үҙенә төбәлеп ҡарауы, яйы сыҡҡан һайын ҡулдарына иркенлек биреүе лә артыҡ борсоманы уны.

Шулай ике йыл уҙып та китте. Көтмәгәндә, күктән төштөмө ни, теге егет тағы пәйҙә булды. Ҡыҙ үҙен тағы ла утлы ялҡынға ырғытылғандай тоя башланы. Торһа ла, ятһа ла күңелендә теге егет булды. Ата-әсәһе был хаҡта белеп ҡалһа, башынан һыйпамаҫын ҡыҙ яҡшы белә. Тик нишләһен ул, тойғолар шул тиклем көслө, бер нисек тә тыйып тотормон тимә. Ни эшләргә? Мөхәббәттең шулай ғазаплап килгәнен Лиза белмәй ине шул. Аңҡы-тиңке булып йөрөгәндә ҡыҙыҡай егеттең бесәнлектә йоҡларға самалауын һиҙҙе лә тәүәккәлләргә ҡарар итте:

– Ни булһа ла булыр. Исмаһам, туйғансы яратып ҡалырмын.

Мөхәмәтшаның ят бейә менеп ҡайтҡанын күргәс, атаһы ныҡ ғәжәпләнде. Етмәһә, ҡараҡ кеүек, таң алдынан ҡайтып төшә бит әле ул. Үтә лә ҡәнәғәт йөҙө май урлап ашаған бесәйҙеке кеүек йылтырай.

– Әллә ат ҡараҡтары юлында йөрөйһөңмө? – тип атай кеше шелтәле ҡарашын улына йүнәлтте. – Башыңды баструкта сереткең киләме әллә? – Һуңғы һүҙҙәр шул тиклем ҡырыҫ сыҡты, уларҙы әйтеүенә үҙе бер аҙ үкенеп тә ҡуйҙы.

Атаһына нисек яуапларын Мөхәмәтша алдан уҡ хәстәрләп ҡуйғайны.

– Мин сегәнме* ни, атай? – тине ул, йылмая биреп. – Ҡарамалы баярының үҙе генә егеп йөрөгән атларын кемнәрҙер ҡыуып киткән. Силан шуларҙы табып алып ҡайтышырға саҡырғайны.

– Һин, малай, нишләптер урыҫҡа йышланың әле? Хәйерлегә генә буһа ярар ине,– тине Мөхәмәтҡужа. – Таптығыҙмы һуң?

– Эйе, Стәрле яғында, Ҡунаҡбай ауылына барып таптыҡ. Башҡортларға һатып киткәннәр. Силан ныҡ асыуланды. Мин бумаһам, үтерешәләр ине.

– Был бейәне шуның өсөн бирҙеләрме?

– Эйе.

Мөхәмәтҡужа барыбер шикләнде.

– Биреп ҡуйыр һиңә атты урыҫ, – тип ҡуйҙы ул. – Килеп кире алып китмәһәләр ярай ҙа.

Мөхәмәтшаның Ҡарамалылағы ҡылыҡтары оҙон ҡолаҡтар аша Табылдыға ла килеп етте. Мөхәмәтҡужа ла ишетте: «Улың мәрйә менән бутала икән. Оло гонаһ бит был». Егетте башлы-күҙле итмәй тороп, был юлдан төңөлдөрөп булмаҫын яҡшы аңлай ине Мөхәмәтҡужа. «Шулай инде, – тине ул, ҡатыны менән ошо хаҡта кәңәш ҡуҙғатып, – һәр нәмәнең үҙ уаҡыты. Бисәле булһа, марйалар менән сыуалып, беҙҙе рисуай итеп йөрөр яйы ҡалмаҫ. Тик мына ҡайҙан һәм кемде ала һалып бирәһең? Ауылда күҙгә салынғаны юҡ. Теләһә кемгә өйләндереп булмай, бисә алыу ул мал алыу түгел».

Ә яйы уйламаған ерҙән килеп сыҡты. Октябрҙә, көҙгө бысраҡ кисеп, Мөхәмәтҡужа йомош менән Стәрлебаш ауылына барғайны, шунда Урман ауылында йәшәгән бик яҡшы бер танышы Нурулла тап булды. Сәйханаға инеп бер аҙ һөйләшеп ултырҙылар. Шунда Мөхәмәтҡужа улына кәләш әйттерергә йыйыныуы тураһында ла һүҙ ысҡындырғайны, Нурулла йәнләнде лә китте.

**Диалект һүҙе – сиған.*

– Бәй, – тине ул, эсә башлаған сәйен өҫтәлгә ҡуйып, – минең еткән ҡыҙым бар бит – Өммөгөлсөм. Бер ҙә ҡайтыш ере юҡ. Улыңа бына тигән кәләш булыр . Мин һине, һин мине беләм, тигәндәй, ҡоҙалашырбыҙ ҙа ҡуйырбыҙ. Ә ҡыҙым бик тә итәғәтле, инсафлы. Өй эшенә, аш-һыуға ҡулы оҫта былай.

Өммөгөлсөм ҡалҡыу ғына кәүҙәле, ҡыйғас ҡара ҡашлы, тулы балтырлы, бейеп барғандай матур хәрәкәттәр яһап атлаған 17 йәшлек оялсан, әммә урыны менән үҙһүҙле лә ҡыҙ булып сыҡты. Әсәһе Миңлебикә кеүек йорт эштәренә әүәҫлеге лә Мөхәмәтҡужаның күңеленә хуш килде. Ҡатын – усаҡ йылыһын тотоусы, өйҙә үҙ эшен белеп башҡарһа, шул еткән инде, тип фекер йөрөттө ул. Ҡалымға бер тай бирҙеләр. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, ҡышҡы һуғым ваҡытында туй кеүек нәмәһен дә әтмәләнеләр. Мөхәмәтша ла ҡәнәғәт ине кеүек кәләшенән. Гөлсөм тыйнаҡ ҡына тыңлай, иренә ҡаршы һүҙ әйтмәй, кәңәш бирә белә.

Шулай йәшәп ятҡанда, бер көн баҫыуҙан ҡайтҡан Мөхәмәтша, соланда ҡатын-ҡыҙ тауышын ишетеп, ирекһеҙҙән туҡтап ҡалды.

– Һин абышҡаңдың уйнашсы икәнлеген белмәгәйнеңме ни? –Үрге ос Фәхернисаның тауышы ине. Урам ғәйбәтсеһе булып танылған ҡатын бында ни эшләп килеп сыҡҡандыр? Бер саҡ үҙен Мөхәмәтшаның әсәһе геүләтеп ҡыуып сығарғандан һуң аяҡ баҫмай ине бит әле. – Аның Ҡарамалыла урыҫ марйалары менән буталғанын бөтә ауыл һөйләй, – тип дауам итте Фәхерниса.

– Үҙең күрҙеңме? – Тулҡынланыуҙан ҡарлығыбыраҡ сыҡҡан был тауыш Өммөгөлсөмдөкө. – Һин үҙең күрҙеңме ни?

– Күрергә! Мин урыҫларға йөрөйөмдөр шул. – Фәхерниса усаллашты. – Кеше һөйләй бит. Кеше булмағанды һөйләмәҫ инде.

– Сығып кит бынан! – Өммөгөлсөм ҡысҡырып ебәрҙе. – Мында ҡабат аяҡ баҫаһы бума.

Ишектән ҡайҙа баҫҡанын белмәй атылып килеп сыҡҡан Фәхерниса Мөхәмәтшаны бәреп йыға яҙҙы. Ҡатындың күҙҙәре шарҙай булған, ауыҙын асып ниҙер әйтергә иткәйне лә, өндәшмәне, тиҙ генә урамға сығып шылды. Өммөгөлсөм үкһеп-үкһеп илай башланы. Мөхәмәтша, ни эшләргә лә белмәй, бер аҙ иҫәңгерәп торҙо ла өйгә инеп китте. Ҡатынына ни әйтергә лә белмәй ине ул был минуттарҙа. Фәхерниса менән әрепләшһенме ни, был ирҙәр өсөн хурлыҡ бит. Әллә янъял ҡуптарып һуғышһынмы? Ул саҡта бит уны хаҡлы тип таныу була.

Өйгә инде лә Мөхәмәтша һикегә ауҙы. Әлдә ата-әсәһе юҡ ине. Оҙаҡ ҡына уйланып ятты ул. Өммөгөлсөм дә күренмәне, ишек алдында мәш килеп йөрөй торғандыр. Төшкө сәйҙе улар өнһөҙ генә эсте. Кисен бер-береһенә арҡа ҡуйып яттылар. Йәл ине ҡатыны Мөхәмәтшаға. Был низағта уның ни ғәйебе бар инде. Оҙаҡҡа һуҙылды йәш ир менән йәш ҡатын араһындағы был һалҡынлыҡ. Шул килеш үтеп китер ҙә кеүек ине, әммә Өммөгөлсөм хәтер һаҡлай торған ҡатын булып сыҡты. Бер кис йоҡларға ятҡас, һорай ҡуйҙы:

– Шул марйаңды һаман да онота алмайһыңмы? – Ҡайҙандыр бик төптән һағыш һәм асыу менән сыҡты был һүҙҙәр.

Мөхәмәтша тертләп китте, күңелендә яман асыу ҡабарҙы.

– Нахаҡ! Һин һаман да ғәйбәтсе бисәләр һүҙен һөйләйһең! – Мөхәмәтша тойғоларын йәшерә белмәй ине. – Кемгә ышанаһың һин: хәләл иреңәме, әллә ғәйбәтсегәме?

– Ана бит асыуланаһың. Ғәйбәт булһа, алай итмәҫ инең. – Өммөгөлсөм үҙенсә һығымта яһаны.

Был борсоулы уйҙар ҡатынға тынғы бирмәй, уны эстән генә ашап, бар күңелен биләп алғайны. Эскерһеҙ йәш ҡатын былай хәлде бөтөнләй көтмәгәйне.

Уның өсөн Фәхернисаның хәбәре аяҙ көндө йәшен атҡандай булды. Ике аҙналай ошолай интеккәндән һуң, ул бер көн ире менән был хаҡта тамам аңлашып ҡуйырға үҙенә һүҙ биргәйне.

– Буш һүҙгә нисек асыуланмайһың?! – Мөхәмәтша бер аҙ ипкә килерлек көс таба алды үҙендә. Ике аҙнаға яҡын арлы-бирле һөйләшеп йөрөү ҙә уны үҙ ғәйебен бер аҙ ғына булһа ла танырға мәжбүр итте. Кеше ысынлап та юҡты һөйләмәй бит. Ҡайҙан белеп ҡалғандар бит әле. – Мына мин һиңә берәй Эстәрле татарын ҡушайым әле. Рәхмәт әйтерһең микән ә?

Өммөгөлсөм өндәшмәне. Ысынлап та, ирен битәрләргә үҙенең хаҡы самалы икәнен йәш ҡатын аңлай ине. Булһа булғандыр ҙа, тик барыһы ла уға тиклем булған бит. Хәҙер быны өсөн Мөхәмәтшаны ғәйепләү – аҡылһыҙлыҡ. Ире, был һөйләшеү ошоноң менән бөткәндер, тип иҫәпләһә лә, Өммөгөлсөм хатта йылдар үткәс тә уны гел генә иҫенә төшөрөп торҙо. Берәй низағ килеп тыуа ҡалһа, шул “марйа” һүҙен мотлаҡ килтереп ҡыҫтырыр булды.

***

Ә “марйа”, Елизавета Тетюшева, был ваҡытта Францияның көньяҡ ҡалаларының береһендә аҡ эмигранттар араһында, ваҡыты-ваҡыты менән Мөхәмәтшаны иҫкә алып, йәшәп ята ине. 1919 йылдың йәйендә Стәрлетамаҡты ҡыҙылдар алғас, Головиндар, ашығыс рәүештә тейәнеп, Ҡарамалыны ташлап китте. Шулай ҙа, бөтөнләйгә китәбеҙ, тип уйламай ине улар. Китеү шул тиклем ашығыс булды, хатта алпауыттың уртансы улының берҙән-бер балаһы өс йәшлек Васяның күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғыла повозканан төшөп ҡалыуын да һиҙмәнеләр. Белгәндә, һуң ине инде, шуға күрә кире боролоп торманылар. Уның ҡарауы, барыня был юғалтыуҙан аҡылдан яҙыр сиккә етте. Нишләйһең, яҙмыштан уҙмыш юҡ.

Артабан улар Өфөгә килде. Бында Головиндарҙың бабаһы ҡала управаһы башлығы булып эшләй ине. Уның ярҙамында ғаилә Көньяҡ Рәсәйгә юл алды, унан карапҡа ултырып Төркиә аша Францияға килеп төштөләр.

Елизавета менән ун йәшлек улы Никита ла бар ине. Атаһы Мөхәмәтшаға оҡшап киң яңаҡлы, ҡап-ҡара бөҙрә сәсле, мыҡты кәүҙәле малайҙың үҙ ҡаны түгеллеген һиҙә ине Николай Тетюшев. Шуға күрә малайға ата наҙы тәтемәне. Дин әһеле өсөн Никита донъяла бар ни, юҡ ни. Әммә Тетюшев Францияға килеп етә алманы, Төркиәлә саҡта иҫерек килеш пистолеттан атышыу ойошторop, кемдеңдер пуляһынан үлеп ҡалды.

Францияла Никитаны кадеттар мәктәбенә бирҙеләр. Ул унда яҡшы итеп француз телен өйрәнде, ә инде идара итеү мәктәбен тамамлағас, бер департаментта эшкә урынлашты. Бәләкәйҙән дворяндарса тәрбиә алыуға ҡарамаҫтан, Никита иптәштәре араһында үҙ һүҙле, хатта бер аҙ тупаҫ холоҡло булыуы менән айырылып торҙо. Иптәштәре ошо холҡо өсөн унан бер ни тиклем ситләшһә лә, Никита үҙенең башҡа яғы – эште яҡшы белеүе, теүәл башҡарыуы менән алдыра ине.

1939 йылда Германия Францияға һөжүм итеп, Икенсе донъя һуғышы башланғас,– ата-бабалары башҡорттар ҡаны ғәләмәтелер инде – Никита Ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтенә ҡушылып китте. Артабан ул Төньяҡ Африкала һуғышыусы инглиз экспедицион корпусына барып юлыҡты. Тарихҡа «Эль-Аламейн янындағы һуғыш» исеме менән ингән ҡаты алышта ул да ҡатнашты. Күкрәгенән яраланып, түҙеп торғоһоҙ әҫәлә ҡанһырап, ана үләм, бына үләм, тип ятҡан сағында, уның өҫтөндә фәрештә ҡанаттарын йәйҙе. Янына санитар машинаһы килеп туҡтаны. Госпиталдә һауығып, Францияға ҡайтҡас, уны бик яҡшы ҡабул

иттеләр, шунда уҡ эше табылды, яҡшы пенсия түләнеләр. Был аҡсаға Тетюшев ҡала ситендәрәк яҡшы особняк һатып алды, бер аҡ эмигрант ҡыҙына өйләнеп ебәрҙе, бер нисә йылдан өс бала атаһы ине ул.

Елизавета Фроловнаны ла йылдар сал сәсле ҡарсыҡ яһаны. Үлем түшәгенә ауғас, ҡатын янына улы Никитаны саҡырып алды ла:

– Улым, яҡты донъя менән бәхилләшер алдынан һиңә әйтер һүҙем бар, – тине. – Тәүге мөхәббәтем тарихы тураһында.

Ҡарсыҡ төҫһөҙләнә башлаған күҙҙәрен ситкә алды ла аҡрын ғына бынан ярты быуат элек булған ваҡиғаларҙы бәйән итте. Никита уны, әкиәт тыңлаған бала кеүек, таң ҡалып тыңланы. Күҙ алдынан быҒаса кисерелмәгән ваҡиғалар уҙғандай булды.

– Николай һинең атайың түгел. Һин быны үҙең дә аңлағанһыңдыр. Ул, ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең, һинең үҙ ҡаны түгеллеген һиҙенә ине. Әммә бер ҡасан да өндәшмәне. Ғәфү ит һин уны.

Ҡарсыҡ тағы ла бер аҙ һүҙһеҙ ятты.

– Теләгем шул: нисек тә Рәсәйҙе барып күрергә тырыш. Мин булдыра алманым инде, ә һинең ҡулдан килер ул. Унда Өфө тип аталған губерна бар, шунда Стәрлетамаҡ өйәҙендә Ҡарамалы ауылын табырһың. Беҙҙең тыуған ер ул. Тыуған тупраҡҡа барып баш эйеп ҡайтырһың. – Ҡарсыҡтың күҙенән эре күҙ йәше килеп сыҡты ла күҙ ҡабағында туҡталып ҡалды. – Мин әйткән исемдәрҙе онотма, улым.

Никита ҡуҙғала башлағас, әсәһе уны ым менән туҡтатты:

– Туҡта, улым, мин барыһын да әйтеп бөтөрмәнем әле. Ҡарамалынан һигеҙ саҡрым көньяҡта Табылды ауылы булыр. Исеме шулай булырға тейеш, хәтерем яңылышмаһа. Шул ауылда һинең ҡандаш туғандарың йәшәй. Башҡорттар. Һин уларға бик ныҡ оҡшағанһың. Бәлки, атайың, Мөхәмәтша ла иҫәндер. Был исемдәрҙе лә хәтереңә бикләп ҡуй.

Иртәгеһен Елизавета Фроловнаны ҡала зыяратына эмигранттар араһына ерләнеләр. Әкиәттәй тыуған яғы Ҡарамалыны ғына уйлап йөрөр булып китте Никита. Тик унда нисек барып әйләнергә? Советтар Союзына инеү өсөн бик күп ҡағыҙҙар, иң мөһиме һине саҡырыусы кәрәк икән. Ә Никита унда бер кемде лә белмәй.

II

Ихтыяж, нәфсе, дан һәм шөһрәт… Был матди донъяла Әҙәм балаһын башҡа йән эйәләренән айырып торған ошо сифаттар беҙгә билдәле дәүерҙәрҙә кешелек донъяһының этәргес көсө булып торған. Дөрөҫ, ихтыяж бөтә тереклек эйәләренә лә хас, әммә ул башҡаларҙа йәшәүгә булған ихтыяждан, йәғни инстинкт кимәленән уҙмай. Кеше ихтыяжының тәбиғәте икенсе: ул социаль ҡоролошҡа, эске мәҙәниәткә, генетик тамырҙарға бәйле үҫә, көсәйә, хатта камиллаша бара. Ихтыяж үҫеүҙең икенсе баҫҡысы — нәфсе. Байлығы артҡан һайын, уны тағы ла арттырғыһы килгән әҙәмдә нәфсе тыйып торғоһоҙ тойғоға әүерелә. Кеше нәфсеһен тыйып тоторҙай һәләтенән мәхрүм була, нәфсе ҡолона әүерелә. Артабан — дан. Нәфсене ҡәнәғәтләндереү юлында кеше үҙе менән бергә йәшәүселәр араһында ҡомһоҙлоғо менән айырылып тора, уларҙы үҙенә буйһондора, байлыҡтарын төрлө юлдар менән үҙләштерә, тартып ала. Дан байлыҡ менән килә, сөнки хәҙерге кешелек донъяһы башҡаны танымай. Дөрөҫ, дан аҡыл менән дә яулана, әммә был дандың тәбиғәте икенсе. Бай менән аҡыл эйәһе бер ҡасан да бер үлсәүгә һалып баһаланмаған.

Дан артынан – шөһрәт. Шөһрәт – ҡөҙрәтле халәт, һәр саҡ яңыртып тороуға мохтаж. Был ауырыраҡ, сөнки ул күберәк көс, тырышлыҡ, хәйлә, мәкер, ҡанһыҙлыҡ талап итә. Әммә кеше быға тиҙ күнегә, был уның йәшәү мәғәнәһенә әүерелә. Тик шөһрәтте бар хакимдар ҙа күтәрә алмай. Кеше рухи яҡтан тарҡала, унда кешелек сифаттары – игелек, мәрхәмәтлек юғалғандан-юғала барып, ундай бәндәләр тарих сүплегенә китеү менән онотола. Телгә алынһа ла, рәнйешҡарғыш менән генә.

Ихтыяж, нәфсе, дан, шөһрәт оҙон үҫеш юлы үтә. Ул, быуындан-быуынға күсеп, хатта быуаттарҙы үҙ эсенә ала. Атаһы ҡылған эштәрҙе улы дауам итә, улыныҡын – уның улы һәм артабан. Сифаттар ҙа үҙгәрә, заман һиммәттәренә ҡарап, бөрәүҙәре сағыуыраҡ төҫ ала, икенселәре юҡҡа сыға.

Феодализмдан капитализмға күскәндә хөкөм йөрөтөүсе ҡатламдарҙың төп йөкмәткеһен ихтыяж менән нәфсе араһындағы урталыҡ билдәләһә, нәфсе капитализмдың шәхси һыҙаты – төп сифатына әүерелә. Феодал ҡоролошто тарихҡа оҙатып, үҫеш юлына сыҡҡан яңы синыф – капиталистар нәфсе ҡәнәғәтләндереү юлына баҫып, үҙ дәүләтендәге кешеләрҙе талау менән генә сикләнмәйенсә, анһат сеймал, арзан эшсе көс көҫәгән ҡараштарын сит тарафтарға төбәй. Был йәһәттән Европала иң иртә буржуаз инҡилаптар булып үткән Голландия менән Англия айырыуса өлгөр булып сыға. Инглиздәр үҙ колонияларын башлыса донъяның бар ҡитғаларында ла ҡороп, уларҙың һутын имеп ятҡанда, Европа уртаһында Герман капитализмы көс-ғәйрәт туплай башлағайны. Немецтар, төрлө юлдар менән иҡтисадта ҙур уңыштарға ирешеп, башҡа тарафтарҙа ла баҙар эҙләргә кереште.

Әммә донъя бүлгеләнеп бөткәйне. Берҙән-бер юл – бүленгәнде ҡайтанан, йәғни "ғәҙелерәк" бүлеү. Кешелек йылъяҙмаһында тиңдәше булмаған Беренсе донъя һуғышының хәрәкәт итеүсе көсө лә шул нәфсе ине.

Быға тиклем кешелек донъяһы ике йәки өс дәүләттең ҡан яғалашыуын ғына белһә, XX быуат уның иңенә ике Донъя һуғышын һалып ҡуйҙы. 1914 йылдың авгусында башланғанында 34 дәүләт, 74 миллион һалдат һәм офицер ҡатнашты. Ер шарының төрлө ҡитғаларында барған яу яландарында 10 миллионы шәһит китте, ике тапҡыр күберәге яраланды.

Германия империалистары был алышҡа немецтарға хас тырышлыҡ һәм теүәллек менән айырыуса ныҡ әҙерләнде. Улар Польша менән Балтик буйы ерҙәренә хужа булырға, Францияның Африкалағы ҡайһы бер биләмәләрен тартып алырға Төркиәлә, Яҡын һәм Урта Көнсығышта ныҡлап урынлашырға иҫәп тотто. Германия хәрби даирәләре эшләгән план буйынса Рәсәй империяһы ҡораллы көстәрен 8 – 10 аҙнала тар-мар итеү күҙ уңында тотолдо. Австро-Венгрия императорының иҫәбе иһә Балҡан ярымутрауында нығыныу ине. Һуғыш хәрәкәттәрен башлау өсөн уңайлы һылтау ғына кәрәк булды, һәм ул көттөрмәне. 1914 йылдың 28 июнендә Һарай ҡалаһында серб милләтселәре һарайынан Австро-Венгрия императоры вариҫы Франц Фердинанд үлтерелде. Австро-Венгрия монархы Сербияға һуғыш иғлан итте, ә Рәсәй батшаһы Николай II – хәрби мобилизация.

Өфө губернаһында һуғышты төрлөсә ҡабул итәләр. Байҙар, әлбиттә, Ватанды яҡлау идеяһын күтәрә, ә бына эшсе-крәҫтиән кеүек ҡулға ҡорал тотоп фронтҡа барырға, йәғни ул идеяны ғәмәлләштерергә бурыслы булғандар, көслө ризаһыҙлыҡ күрһәтә. Ошо айҡанлы июлдә үк Бөрө, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Ырымбур губернаһының Силәбе өйәҙҙәрендә сыуалыштар булып үтә. Һуғышҡа саҡырылыусылар, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙе яйға һалырға, аҡсалата бирергә, тигән талаптар ҡуя. Һуғыш крәҫтиән хужалығына ҙур зыян килтерә. Өфө губернаһында ғына

1914 – 1916 йылдарҙа һуғышҡа 25 мең ат алына, иген етештереү 35 процентҡа кәмей.

1914 йылда Рәсәй армияһында 6,5 миллион һалдат һәм офицер һуғыша. Урыҫ хәрби командованиеһының планы буйынса тәүҙә, Австро-Венгрияны тар-мар итеү маҡсатында, Германияға ҡаршы бер армия ғына ҡуйыла, бөтә көс Көньяҡ-Көнбайыш фронтҡа ташлана. Был осорҙа кайзер генералдары Көнбайыш фронтта уңышлы һөжүм йәйелдереп, Парижға етеп килә. Әммә 17 августа генерал Ренненкампф етәкселегендәге 1-се урыҫ армияһының Ковно-Сувалки ҡалаһы янында өс көн алыштан һуң немецтарҙың оборонаһын өҙөүе һәм, бер нисә дивизияһын ҡыйратып, Көнсығыш Пруссияға бәреп инеүе Германия генераль штабының пландарын селпәрәмә килтерә. Өҫтәүенә, генерал Самсоновтың 2-се урыҫ армияһының, сигенеүсе немецтарҙы ҡамауға алып, тар-мар итергә ынтылыуы ла етди ҡаршылыҡтарға осрамай. Германия алдында бөтә Көнсығыш Пруссияны юғалтыу ҡурҡынысы килеп баҫа. Немецтар Көнбайыш фронттан ике корпус һәм бер атлы дивизия күсереп, бар көсөн 2-се армияға ҡаршы ташлай һәм урыҫтарҙың 20 мең һалдат һәм офицерын юҡ итә, 80 меңен әсир ала. Генерал Самсонов хурлыҡтан атылып үлә. Тиҙҙән урыҫ армиялары Көнсығыш Пруссиянан бәреп сығарыла.

Октябрҙә Рәсәйгә ҡаршы һуғышҡа Төркиә лә ҡушылып, Көнсығыш фронтта хәл бер аҙ ҡатмарлаша. Әммә төрөктәр Һарыҡамыш ҡалаһы янындағы һуғышта 90 меңлек армияһынан 78 меңен юғалтып, етди ҡаршылыҡ күрһәтергә һәләтен юғалта.

1915 йыл батша армияһы өсөн юғалтыуҙар ғына килтерә. Германия Көнсығыш фронтта 137 йәйәүле, 84 атлы дивизия туплай. Батша союздаштарының оборонаға күсеп, урыҫ ғәскәрен ауыр хәлгә ҡуйыуы арҡаһында, немецтар оборонаны еңел өҙөп, батша ғәскәрҙәрен Балтик буйы, өлөшсә Белоруссия, Украинанан ҡыуып сығара.

1916 йылда һуғыш оҙайлы төҫ ала. Верден ҡалаһы (Франция) янында немецтар уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң хәрби өҫтөнлөк союздаштар яғына күсә. Генерал А. Брусиловтың уңышлы операцияһы Галицияла Австро-Венгрия ғәскәрҙәрен тулыһынса ҡыйралыу алдына ҡуйһа ла, был хәрби уңыш нығытылмай. Төркиәнең Эрзурум, Трапезунд ҡалаларына урыҫ ғәскәрҙәре индерелә. 1917 йылғы Февраль инҡилабынан һуң Германия һәм уның союздаштары хәрби хәрәкәттәрҙе көсәйтергә маташып ҡарай, әммә хәл самалы була. 1918 йылдың мартында В.И. Ленин хөкүмәте тәҡдиме буйынса Брест килешеүенә ҡул ҡуйылғандан һуң ғына Германия ғәскәрҙәре Көнбайыш фронтта һөжүмгә күсә, ләкин Антанта, контрһөжүм яһап, уларҙы ҡыйрата.

...Һуғыш афәте аһ-зар, ҡайғы-хәсрәт, илау-һыҡтауы менән Табылдыға ла килеп етте. Бер юлы унлап кеше һуғышҡа ебәреү өсөн Стәрлетамаҡҡа саҡырылды. Улар араһында утыҙға етеп килгән Мөхәмәтша ла бар. Был хәбәрҙе йәш ир артыҡ ҡаушамай, хатта бер аҙ битарафлыҡ менән ҡабул итте. Яу йөрөү — башҡорттар өсөн ят түгел, ата-бабаларҙан ҡалған эш. Аҙ һуғыштымы ни ауылдың ир азаматтары! Әле төрөк, әле япон һуғыштарында ҡатнашҡан ир заттары Табылдыла ла, башҡа башҡорт ауылдарында ла һәр саҡ булды. Ана, Япон һуғышында йөрөп ҡайтҡан сатан Фәррәх күргән михнәт-аҙаптарын осраған һайын һөйләп тора. Эйе, япондарға ҡаршы ауылдан һигеҙ йән киткәйне, бер Фәррәх кенә иҫән ҡалып, тыуған яғын яңынан күреү бәхетенә иреште. Ул да уң аяғын Мукден ҡалаһы янында ҡалдырып ҡайтҡайны.

"Иҫән булһам, ҡайтырмын әле",– тип уйланы Мөхәмәтша. Үҙен оҙата сыҡҡан

ҡатыны, дүрт малайы менән ипле генә хушлашты ла арбаға менеп ултырҙы. Моңһоулыҡ бар ине, әлбиттә, тыуған илдән кем туйһын! Арбалар икәү, берәһендә – аръяҡтан Заһретдин менән Ғилман, икенсеһендә – бирьяҡтан Мотаһар, Ишбулат та Мөхәмәтша. Аръяҡтыҡылар айырым арбаға тейәлде. Заһретдин – оҫта гармунсы, ҡайғылы йыр һуҙҙы:

Беҙ китәбеҙ иртәгә,
Ҡапсыҡ аҫып елкәгә.
Китмәҫ инек беҙ иртәгә,
Герман тейә теңкәгә…

Ауылды сыҡҡас, Заһретдин гармунын эргәһендә ултырып килгән улына биреп ҡалдырҙы:

– Мә, улым, мин ҡайтҡас, уйнап шатландырырһың. – Үҙе, күҙ йәшен күрһәтмәҫ өсөн, ситкә боролдо.

Стәрлегә килгәс, саҡырылғандарҙы взвод, роталарға бүлделәр. Ишбулат Мөхәмәтша менән бергә эләкте. Һамар ҡалаһы янында арлы-бирле һуғыш һөнәренә өйрәткәндән һуң һалдаттарҙы фронтҡа ҡыуҙылар. Варшава арьяғында бик ҡаты һуғыштар бара икән, немец беҙҙекеләрҙе ит урынына турай, һалдат еткереп өлгөрмәйҙәр, беҙҙе лә шунда ҡыуалар икән, тигән хәбәр таралды. Һалдаттарҙың береһе лә һуғышырға теләмәй. Фронттан килгән күңелһеҙ хәбәрҙәр был теләкте тағы ла көсәйтә. Офицерҙарҙың телендә "Тыуған ил, батша хәҙрәттәре хаҡына" тигән һүҙҙәр кисәге крәҫтиәндәр өсөн бер ни ҙә аңлатмай. Улар был төшөнсәләрҙең мәғәнәһен аңламай, аңларға ла һәләтһеҙ. Әммә уларҙың теләге менән бер кемдә иҫәпләшмәй. Һарыҡ көтөүе урынына ҡыуалар. Ҡаршы һүҙ әйтергә ярамай. Шунда уҡ яңағыңа фельдфебель йәки унтерҙың йоҙроғо килеп төшөүен көт тә тор. Быны Мөхәмәтшаға үҙ елкәһендә татырға тура килде.

Һамар поезына ултырғас, ул бер уңайлы мөйөш табып, тиҙҙән йоҡоға талды. Төш күрҙе. Имеш, улдары менән оҙон арбаларға тейәп, Өй тауынан таш ташыйҙар. Таштар шул тиклем ауыр, бер кеше күтәрерлек тә түгел. Бына бер олоташты Нәҙелша улы менән күтәргәйнеләр, улының ҡулы тайып китте лә, таш Мөхәмәтшаның аяғына килеп төштө. Ул ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрҙе. Күҙҙәрен асһа, һүрән генә янған фонарь яҡтыһында бер һаҡалтай урыҫ уның аяғына тибеп, һүгенә-һүгенә һөйләнә, имеш.

– Ты гляди, нисек итеп һуйлайған? Бәй, аулаҡ урын бит. Тор, таҡыр баш, күҙемдән юғал!

Һаҡалтай, ғәйрәтләнеп, һуғырға һелтәнгәйне лә, Мөхәмәтша ялтанғас, йоҙроғо яҙа китте. Бынан ғәрләнеп китеп, тағы ла һуғырға киҙәнгән һаҡалтайҙың йоҙроғо вагон стенаһына килеп тейҙе. Ауыртыныуҙан теге ыңғырашып ҡуйҙы, әммә һуғышыу ниәтенән төңөлмәне. Мөхәмәтша күп йылдар элек Силантий күрһәткән һуғыш алымын иҫенә төшөрҙө. "Дошманыңды аяҡтан йығырлыҡ итеп һуғыр өсөн, тәүҙә бер аяғыңды артҡа ташла, унан һуң бар көсөңдө йоҙроғоңа тупла ла бөтә кәүҙәң менән һуҡ",– тигәйне казак.

Мөхәмәтша шулай эшләне лә. Уның һул ҡулы менән һуғыуына теге һаҡалтай, ике ҡулын ике яҡҡа йәйеп, артына осто. Йығылып барышлай, башы менән шаҡ итеп вагон стенаһына бәрелде лә тиҙ генә аҫҡа шылып төштө. Рельстар тыҡылдауына ҡарамаҫтан, Мөхәмәтша дошманының күкрәк ситлегендә һөйәге сатнағанын да ишетте.

Һаҡалтайға ныҡ эләккән икән. Ул төнө буйы ыңғырашып сыҡты. Иртән ниндәйҙер станцияла санитарҙар килеп алып китте. Хәлһеҙ булһа ла, теге, ҡулы менән иҙәп, Мөхәмәтшаны янына саҡырҙы:

– Я твой должник, – тине ул көс-хәл менән. – Кольканы быға тиклем берәүҙең дә былай мыҫҡыл иткәне юҡ ине әле. Бурыслы булып ҡалмам.

Вагон ишеге ябылыу менән Мөхәмәтша янына ике урыҫ һалдаты килде.

– Уға шул кәрәк, – тине береһе, Мөхәмәтшаға туп-тура ҡарап. – Ҡоторҙо бит, ҡәбәхәт, үҙ башына булған икән.

Был мажара эҙһеҙ ҡалманы. Һаҡалтайҙы алып китеп күп тә үтмәне, Мөхәмәтша янына унтер-офицер килде.

– Фельдфебель Матвеевты һин "матурланыңмы"? Бер тәүлек карцер! – тине ул, һары тештәрен ыржайтып. – Аҙыраҡ һыуынырһың, аллаяр!

Мөхәмәтшаны һалҡын вагонға бикләп ҡуйҙылар. Шулай итеп, ул фронтҡа етмәҫ элек сирҡаныс алырға өлгөрҙө.

...Декабрь баштары. Мөхәмәтшалар батальоны быҫҡаҡлап яуған ямғыр ҡатыш ҡар аҫтында Варшаванан бер нисә тиҫтә саҡрым көнбайыштағы позицияға табан атлай. Иртәнгә табан ер өҫтө бер аҙ туңаҙығандай булһа ла, төш тә етмәй иретә, унан епшек ҡар йәки ваҡ ҡына ямғыр һибәләй башлай. Тирә-йүндә күңелде күтәрерлек нәмә күҙгә ташланмай. Япраҡтарын ҡойған яланғас ағастар, снарядтар емергән юлдар... Өҫтәге алаптай шинель, аяҡтарҙағы обмоткалы ботинкалар еүешләнеп, былай ҙа оҙон юл килеп талсыҡҡан тәнде тамам иҙә. Улар менән бергә арҡалағы төрлө кәрәк-яраҡ һәм ашамлыҡ тултырылған тоҡсай, бил ҡайышына нығытылған патронташ, подсумка, ҡыҫҡа һаплы көрәк, фляга, котелок та кәүҙәне аяҡ аҫтындағы батҡаҡҡа батыра төшә. Һалдаттар һөйләшмәй тиерлек, ара-тирә һүҙ ҡатып ҡуялар ҙа тынлыҡ урынлаша. Мөхәмәтша менән йәнәшә Ишбулат атлай. Ауылдың урта хәлле крәҫтиәне Рәжәп ҡарт улы ул. Йылғыр әҙәм, теге йәки был уйындарҙа иң элек хәйләкәрлек менән алдыра, алдашырға ла күп һорамай. Йәштәш булып, хатта бер урамда йәшәһәләр ҙә, Мөхәмәтша Ишбулат менән аралашып барманы. Буйға ауылдашы Мөхәмәтшанан ҡалҡыуыраҡ, төҫкә-башҡа күркәмерәк булып, ошоноң менән маһайғандай, үҙен өҫтөн тоторға, байыраҡтар менән мөғәмәләлә булырға тырышты Ишбулат. Һуғыш икеһен бер сафҡа ҡуйғас, нишләһендәр, үҙ-ара мөнәсәбәт үҙгәрҙе. Ҡиәфәте менән ҡайтыш булһа ла, эске күркәмлеге менән алдырған Мөхәмәтша хәҙер Ишбулат өсөн алмаштырғыһыҙ иптәш ине. Шуға күрә Стәрлегә килгәс тә хәл йыйып ултырғанда әйткән тәүге һүҙе шул булды:

– Мөхәмәтша, беҙгә Хоҙай Тәғәлә бергә булырға ҡушҡан. Бер-беребеҙгә таяныс булайыҡ инде.

Мөхәмәтша эйәген генә ҡағып ҡуйҙы. Көнбайышта тәүҙә һаңғырау ғына ишетелгән туптар гөрһөлдәүе торған һайын көслөрәк ишетелә. Бер ҡасан да дары еҫкәмәгән йәш егеттәрҙе ул тауыштар дер ҡалтыратып йәндәрен табан аҫтына ебәрә. Ауыр уйҙарға сумған Мөхәмәтша, ғаиләһен уйлай ул. Кесе улы Фәруҡша бер йәше лә тулмай ҡалды. Олораҡтары – Нәҙелша, Әхмәтша, Сафа өсөн артыҡ бошонмай, ҡул араһына инерлек булдылар. Быйыл Сафаһы һабаҡҡа төшә. Гөлсөм өҫтөндә бер түгел, дүрт бала. Уларҙы нисек кенә итеп ҡарар ул? Үҙе бына һуғыш эсенә әжәл эҙләп китеп бара, әллә иҫән ҡала, әллә юҡ. Һис кенә лә күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яҡтарҙа гүр эйәһе булып ятҡы килмәй бит әле. Беҙҙең яҡта хәҙер сатлама һалҡындыр инде. Ә бында ҡар һаман да ятмай. Ул үлән өҫтөндә, ҡойолоп бөтмәгән япраҡтарҙа ғына күренә. Өҙлөкһөҙ яуған еүеш ҡар менән ямғырҙан ҡом ҡатыш балсыҡ күпереп, атларға ҡамасаулай, урыны-урыны менән күләүектәр хасил булған. Сафтарҙағы ауыр шомло тынлыҡ күңелдәге һағышты шул тиклем көсәйтә, әйтерһең, юл буйлап кеше түгел, күшеккән һарыҡ көтөүе әйҙәп баралар.

Эңер төшә башлауға бомба иҙгән соҡорҙар, тегендә-бында ҡыйралып ятҡан обоз кисәктәре, ат һөлдәләре йышыраҡ осрай башланы. Күрәһең, уларҙы йыйырға өлгөрмәйҙәр йә йыйып та тормайҙарҙыр.

Шулай уйға батып килә торғас, Мөхәмәтша позицияға килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды. Бына ул ерҙе арҡыс-торҡос соҡоп эшләнгән һуғыш урыны – окоптар. Унда берәм-һәрәм һоро ҡарасҡылар – һалдаттар күренә. Оҙон юл килеп арыған һәм алйыған һалдат көтөүе шунда уҡ ергә ауып, берәү тәмәке төрә, икенсеһе, ашарға берәй нәмә тапмаммы тип, тоҡсайында соҡсона, өсөнсөләре өҫ-баштарын тәртипкә килтерә. Мөхәмәтша ла, уңайлап ултырып, талсыҡҡан аяғын һуҙып ебәрҙе лә окоп аша дошман булырға тейешле яҡҡа күҙ ташланы. Унда эңер ҡараңғылығында тимер сыбыҡ заграждениелар ҙа күҙгә ташлана. Был сымдар аша немец электр уты ебәрә, тинеләр. Был яҡҡа иҫкән ел алып килгән берсә тамаҡ төбө, берсә танау буйынан ят телдә һөйләшкән тауыштарҙы ишетеп ул, нимес шулай яҡынмы икән ни, тип уйлап та алды.

Артабан һалдаттарға ни эшләргә? Команда биреүсе кеше юҡ. Күрәһең, офицерҙар үҙ мәшәҡәте менән булып киткән. Мөхәмәтшанан йыраҡ түгел бер һалдаттың:

– Эх, билғау аҫты бушаны, – тигәне ишетелде. – Бөгөн семтем аҙыҡ булманы ауыҙҙа. – Мөхәмәтша тауыш килгән яҡҡа ҡараны. Ерән мыйыҡлы, оло сырайлы бер һалдат винтовкаһының прикладын ергә терәгән дә затворы менән булаша.

– Асыҡтым, тиһең инде – тип элеп алды берәү. – Хәҙер немец алдыңдан ҡалғансы һыйлар. Снаряд теләйһеңме, шрапнелме. – Тауыш хужаһы мыҫҡыллы көлөп ҡуйҙы.

Окоп төбөнә ҡырын төшөп ятҡан урта йәштәрҙәге һаҡалтай, тәмәкеһен һауаға өрә-өрә, һөйләнә. Уның ҡаҡса йөҙөнә юлаҡ-юлаҡ бысраҡ йәбешкән. Тартып бөтөргән тәмәкеһен ситкә ырғытып, теш араһынан төкөрҙө лә:

– Братцы! Юҡ менән хыялланмағыҙ! Беҙҙе бында үлергә алып килделәр. Оҙаҡ көтөргә ҡалманы инде.

Ул әйтеп тә өлгөрмәне, окоптар өҫтөнән, ауыр ухылдап, немец снарядтары оса башланы. Улар ҡайҙалыр йыраҡҡа барып ярыла, юғарыға ҙур-ҙур тупраҡ өйөмдәре күтәрә. Тора-бара был снарядтар яҡыныраҡ төшә башланы. Бер аҙҙан уларға винтовка, пулемет тауыштары ла ҡушылды. Бына бер снаряд яҡында ғына ярылды ла уға кемдеңдер үҙәк өҙгөс тауышы ялғанды:

– Мать родная, ни тип мине таптың икән!?

Күп тә үтмәне, тирә-яҡ ҡысҡырышҡан, ыңғырашҡан тауыштар менән тулды. Носилкалар тотоп, санитарҙар йүгереште. Шулай итеп, винтовкаһынан бер тапҡыр ҙа атып ҡарамаған бер нисә һалдат окоп төбөндә яҡты донъя менән бәхилләште, ә бер нисәһе яра бәйләү пунктына оҙатылды.

Аллаһы Тәғәләнең ҡушыуылыр инде, Мөхәмәтшаға ла, Ишбулатҡа ла снаряд ярсыҡтары ҡағылманы. Шуны белде Мөхәмәтша: дошман көндөҙ әллә ни атып маташмай, әммә күҙ бәйләнеү менән прожекторҙарын эшкә ҡуша, бер туҡтауһыҙ тиерлек ракеталар сөйә, шрапнель ямғыры яуҙыра. Һиҙә немец: тап ошо ҡараңғылыҡта урыҫтарға тылдан өҫтәмә көс килә, шуға күрә ул һалдаттарҙы һуғышҡа инмәҫ элек үк ҡырып бөтөрөргә самалай.

Киске аш килтереүсе булманы, поход кухняһы килеп етмәгән әле, тинеләр. Һалдаттарға тоҡсайҙарында булған ризыҡ менән генә хушланырға тура килде. Төндө һалҡын һәм еүеш блиндажда уҙғарҙылар. Уның түшәме тәпәш кенә, иҙәненә күп тапауҙан ваҡланып бөткән арыш һаламы түшәлгән. Әсе махорка еҫе Мөхәмәтшаның танауын ярып инеп, тамаҡ төбөнә ултырҙы. Фронтҡа алынғаны бирле йәненә тейгән ошо, әсе тәмәке еҫе уның өсөн түҙеп торғоһоҙо ине.

Ишбулат менән арҡаға-арҡа терәшеп яттылар. Оҙон юл килеп арығас, Мөхәмәтша ятыу менән тиерлек йоҡоға талды. Әммә серем итеүе тыныс булманы: төрлө төштәр күреп һаташты. Берсә ул Табылдыға ҡайтҡан да үҙ ихатаһында йөрөп ята, ҡатыны менән бала-сағаһы ла шунда. Тик нимәгәлер барыһының да йөҙө борсоулы. Берсә Мөхәмәтша үлектәр араһында ята, торорға итә, ләкин ниндәйҙер көс уға ҡамасаулай. Мөхәмәтша ҡаты итеп ыңғырашты ла күҙен асып ебәрҙе. Танауына әлеге лә баяғы әсе махорка еҫе килеп бәрелеп, уҡшытты. Башы зәңкене. Үҙенең ҡайҙа ятҡанын бер аҙ аңламай торҙо. Йоҡо килмәй ине инде. Башын түшәмгә бәрмәҫ өсөн эйеләбиреберәк сығыу яғына атланы. Кемдер ҡаты итеп йүткерҙе лә:

– Поспал бы ты, браток, – тине.

Мөхәмәтша өндәшмәне. Саф һауаға ашыға ине ул. Ысынлап та, иртәнге дымлы һауа үпкәләрҙе рәхәтләндереп ярып үтте. Ел юҡ ине. Күк йөҙө лә аяҙ. Унда берәм-һәрәм генә йондоҙҙар емелдәшә. Күрәһең, таң яҡынлашалыр. Мөхәмәтша тағы ла дошман позициялары яғына күҙ һалды. Унда тып-тын, хатта шылт иткән дә тауыш юҡ. Йоҡлай нимес, тип уйлап алды Мөхәмәтша. Үтә тәртипле, тиҙәр уның хаҡта, барыһы ла билдәле ваҡытта ғына эшләнә.

Тирә-йүнгә ҡараш ташланы. Кескәй генә ҡалҡыулыҡтар, ағастар. Табылдылағы кеүек ерҙәр. Айырма шунда ғына: ул бында снарядтарҙан соҡолған, окоптар менән телгеләнгән. Оҙаҡ торҙо Мөхәмәтша. Бына офоҡ та аллана башланы. Тик ниңә ҡояш ул яҡтан сыға әле? Көнбайыш түгелме ни был? Табылдыла ул шул яҡта байый ҙа баһа. Аптыраны Мөхәмәтша.

Ул арала яҡтырҙы. Үҙе торған окоп стенаһына иғтибарлабыраҡ ҡарап, Мөхәмәтша саҡ һуштан яҙманы. Окоп стенаһы тотош һалдат мәйеттәренән өйөлгән. Береһе окопҡа арҡаһы менән һалынған, икенсеһе – ҡабырғаһы, өсөнсөһө иһә йөҙө менән. Мәйеттәрҙең батҡаҡҡа буялып туңған йөҙҙәрен ысынлап та кешенеке икәнен ҡараңғыла күреп тә булмай.

Мөхәмәтша, төҫө ағарып, уҡшый, тәне әллә өшәнеүҙән, әллә ҡурҡыуҙан ҡалтырай башланы.

– Күнегергә кәрәк, браток, – тине унан бер яҡ ситтәрәк тәмәке тартып торған оло сырайлы һалдат. – Һуғыш бит был, һуғышта үлемһеҙ булмай. – Һалдат ситкә ҡарап серт итеп төкөрөп ҡуйҙы.

Мөхәмәтша ҡайтарып һүҙ ҡушманы. Әле генә үлтереп ашағы килеү тойғоһо юҡҡа сыҡты. Ауыҙынан ниндәйҙер әсе тәм килде, сикәһе ҡыҫып, башы ауыртты. Уға таңғы һалҡындан ҡалтырау ҙа өҫтәлеп, түҙеп торғоһоҙ ҡыйын булып китте. Теге оло сырайлы һалдат, уны йәлләптер инде, эргәһенә килеп сүгәләп ултырҙы ла ҡайҙан килеүен, кем булыуын һораша башланы. Башҡорт икәнлеген белгәс, йөҙөнә һүрән генә йылмайыу ятты:

– Бәй, землякһың бит. Мин Һамар губернаһынан. Беҙҙең Кәмәлек буйы тулы башҡорт йәшәй. Яҡшы халыҡ башҡорттар, игелекле. – Бер аҙ тын торғас, өҫтәне: – Хатта бер ҡатлыраҡ та.

Мөхәмәтша Николайҙың (һалдаттың исеме шулай ине) эшселәрҙән сығыуы, фронтҡа һуғыш башланыу менән алыныуы тураһында белде. Уның тауышы таныш кеүек тойолдо, тик ҡайҙа ишеткәнен иҫенә төшөрә алмай аҙаплана торғас, кисә немец снаряд яуҙырыр алдынан һөйләнгән һалдат икәнен иҫләне.

– Ти смилий шилавик, – тигән булды ул, урыҫ һүҙҙәрен вата-емерә. – Афисира ни баишса.

Николай уның нимә әйтергә теләгәнен аңланы. Һурынҡы йөҙөн көслөк менән йылмайтып:

– Ни тип ҡурҡырға уларҙан? Үҙҙәре беҙҙән ҡурҡһын, – тине ул, уҫал итеп. – Барыбер үлергә бит.

Тәүҙә Николай Көнсығыш Пруссияла һуғышҡан, ҡамауҙан сыҡҡас, бында ебәрелгән.

– Дурак булдым мин, – тип тәрән үкенес белдерҙе ул, яҡ-яғына ҡаранып. Йәнәһе, тыңлап тормайҙармы. – Әсир төшөргә баш етмәне. Һуғыштан ҡотолған булыр инем. Эшләр инем берәй бюргерға. Ашау – байҙан, үлем – хоҙайҙан...

Кисә генә ете ят урыҫ Николай Кондрашов әлеге мәлдә Мөхәмәтша өсөн донъяла иң яҡын кешеләрҙең береһенә әүерелде. Кеше ҡәҙере ауыр саҡтарҙа ғына беленеүен аңланы ул. Кисә генә барлығын да белмәгән урыҫты хатта ҡосаҡлап алырҙай булып тулҡынланды. Кондрашов та быны һиҙеп, йылы итеп ҡарап ҡуйҙы.

– Обидно, браток, – тине ул, көйөнөп. – Беҙ бында, белмәйем, ни өсөн баш һалабыҙ, ә байҙар, нисек ҡорһаҡ үҫтерһәләр, әле лә шулай йәшәп яталар.

Николай бер аҙға ғына тын ҡалды. Күрәһең, Мөхәмәтшаның ни әйтерен көткәндер. Мөхәмәтша ни тиһен, ул был мәсьәләләрҙә һай йөҙә. Артабан Николай тағы ла ҡыҙа төшә:

– Ваше благородиелар беҙҙе батша һәм Ватан өсөн үлемгә саҡыра. Ни эшләп мин улар өсөн баш һалырға тейеш? Әйҙә, улдары һуғышһын.

Артабан Николай Мөхәмәтшанан һорай:

– Һин үҙеңдең ни өсөн һуғышҡаныңды беләһеңме?

Был һорауға Мөхәмәтша аптырап ҡалды. Ни өсөн? Уның бындай һорауҙы үҙенә лә биреп ҡарағаны юҡ, имеш. Хәйер, уның теләген бер кем дә һорап торманы бит, алдылар ҙа киттеләр.

– За царя и Отечество, – тип яуап бирҙе ул, башҡаһын таба алмағас. Кондрашов көлдө:

– Ана бит, беҙҙе нисек бер ҡатлы яһап бөтөргәндәр. – Бер аҙ тын торғас, тағы ла бер һорауын бирҙе: – Ерең, малың күпме?

Мөхәмәтша әйтте.

– Башҡорттар иркен йәшәй, тигәнде ишетеп белә инем. Хаҡ икән. Ауылығыҙҙа байҙар бармы? Күпме иген сәсәләр, мал аҫрайҙар, ялсы тоталар?

– Бай тип ни. Андайлар икәү генә. Маллары беҙҙекенә ҡарағанда күберәк инде. Беҙҙең башҡортта серегән байлар юҡ. Ә мына урыҫта! – Мөхәмәтша уйлағанын әйтте.

Николай уға нисектер сәйерерәк итеп ҡараны.

– Урыҫ байҙарын да беләһеңме ни?

– Белмәй, шуларға йәй һайын ураҡҡа йөрөйбөҙ бит. Тамаҡ байына. Мына аларҙы бай тиһәң дә була.

– Эйе, байҙар кеше һутын эсеп байый. Ҡан эсеп, тиһәң дә була.

– Юҡ, урыҫ байы беҙҙең башҡорт ерен тартып алып байый. Беҙҙең күпме ергә хужа булды алар, белһәң...

Кондрашов бер аҙ тын ҡалып торҙо. Мөхәмәтшаның һуңғы һүҙҙәре уны һиҫкәндерҙе. Мейеһен, милли ерлеккә һуҡтыра был, тигән уй телеп үтте.

– Миша, һин яңылышаһың. Урыҫтың фәҡире лә бар бит уның. Бына минең кеүектәре. Алар хатта һин әйткән серегән байҙарҙан күберәк. Һиндә синфи аң түгел, ә милли аң көслөрәк икән. Дөрөҫ уйламайһың.

Мөхәмәтша барыбер үҙ уйынан ҡайтырға теләмәне. Ата-олатайҙарҙан ишетеп, элек табылдыларҙың оло ерҙәрҙә күп мал аҫрап, иркен йәшәгәнен, урыҫтар килеп ул ерҙәрҙе йә алдап, йә һатып алып, ҡыҫынҡыға ҡалдырыуын белә ине. Был уның бәләкәйҙән аңына һеңгән. Ә ҡанға һеңгәнде кире сығарып булмай.

– Шул кафырҙар булмаһа, был көнгә төшмәй инек. – Был фекерҙе лә Мөхәмәтшаға бала саҡтан бик күп ишетергә тура килде. – Ҡарале, Николай, – тине ул, ошо һорауына яуап алырҙан, – урыҫтың үҙ илендә ер етмәйме ни? Нишәп беҙҙең ерләргә ҡул һуҙалар?

Кондрашов ҡапыл ғына өндәшмәне. Тәүҙә көрһөндө, унан махоркаһын төрөп тоҡандырҙы.

– Ер етер ине лә. Тик уға алпауыттар хужа бит. Уларҙың тиҫтәләрсә мең дисәтинә ер биләгәндәре бар. Ә урыҫ крәҫтиәндәренең күбеһе ерһеҙ. Ана шуға ул иркен ер эҙләп китә лә инде. Башҡорттарҙың ере, ишетеүемсә, бик күп. Ниңә, һиңә ер йәлме ни? Әйт әле, һалдат дуҫ!?

– Ер йәл түгел дә, тик аның артығы ла юҡ бит. – Мөхәмәтша уйлағанын әйтте. – Ул ерләр беҙгә ата-бабанан ҡалған. Беҙҙең ер ул. Аңа башҡалар ҡул һуҙырға тейеш түгел.

Кондрашов һүҙҙе икенсегә, һуғыш темаһына бороп ебәрҙе. Уның әңгәмәһен тыңларға башҡа һалдаттар ҙа йыйыла. Берәүҙәр ауыҙын асып тыңлай, икенселәр үҙе лә һүҙгә ҡушыла. Артабан күмәкләп һуғышты, уға ҡушып офицерҙарҙы һүгә башлайҙар. Ғәҙәттә былдай фекер алышыу берәй унтер йәки взводныйҙың килеп таралырға ҡушыуы менән тамамлана. Әммә окоптарҙа, әңгәмә ҡуйыртып оҙаҡ ятырға тура килмәне, бер көн взвод командиры Андреев:

– Иртәнән һуңға наступление. Ҡарап ҡарарбыҙ, нисек ҡыйыу икән һеҙ, – тине. Ысынлап та, билдәләнгән көндө орудиелар немец позицияларына снаряд ямғыры яуҙыра башланы. Дошман да яуап уты менән көттөрмәне. Тиҫтәләрсә туп тауышынан ер дер һелкенә, тирә-йүнде төтөн һәм саң ҡаплап алды. Ул тамаҡ төбөнә ултырып, тын юлдарын быуҙы. Баш ҡалҡытыр әмәл юҡ. Снаряд ярсығынанмы, әллә пулянанмы яраланған һалдаттар үҙәк өҙгөс ҡысҡырыша, ыңғыраша, ярҙам һорай.

Бына бер саҡ туптар тауышы тынды. Ара-тирә пулемет тыҡылдауы, винтовканан атҡан тауыштар ғына ишетелә. Мөхәмәтша бер аҙ иҫен йыя алмай торҙо.

– Атакаға әҙерләнергә! – тигән бойороҡ килде. Һалдаттар, винтовкаһын ҡыҫып тотоп, окоптан сығырға әҙерләнде.

– Братцы, алға! За царя и Отечество! Ура! – Андреев әсе тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе лә, наганын болғай-болғай, дошман яғына табан йүгерҙе. Уның артынан һалдаттар ҙа эркелеште.

Һөжүм итеүселәрҙе пулеметтар ямғыры ҡаршы алды, винтовкалар ҙа телгә килде. Тәүге ҡорбандар берәм-берәм ергә ҡоланы. Тиҙҙән яу яланы ярҙам һорап ҡысҡырған, ыңғырашҡан тауыштар менән тулды. Йәнәшәлә генә бер снаряд ярылды, һәм уның тулҡыны Мөхәмәтшаны бер яҡ ситкә алып ырғытты. Иҫе китеп бер аҙ ятҡандан һуң һалдат үҙенең именлегенә ышанып, урынынан ырғып торорға иткәйне, эргәһендә генә тупраҡ өйөмө ҡыбырлағанын күреп туҡтап ҡалды. Бәй, был ни булыр, тупраҡ аҫтында кеше бармы әллә? Мөхәмәтша, бармаҡтарының ауыртыуын да һиҙмәй, тупраҡты аҡтарырға тотондо. Бер аҙҙан уның ҡулы йомшаҡ йылы нәмәгә тейҙе. Был үлемесле яраланып ауған һалдаттың йөҙө булып сыҡты.

Уның ярты яңағын снаряд ярсығы умырып алып киткән, йөҙө тотош тиерлек ҡан ҡатыш тупраҡ менән ҡапланған, күҙҙәре лә йомоҡ. Яралы ауыҙын ҡыбырҙатып, ниҙер әйтергә итеп көсәнһә, ауыҙынан ҡан китә. Снаряд ярсығы, күрәһең, күкрәгенә лә тейгән. Тирә-яғына ҡарағайны Мөхәмәтша, санитарҙарҙы күрмәне. Яралы һалдат һуңғы секундтарын кисерә ине. Бына ул ҡаты итеп хырылданы ла, тәне тартышып, тынып ҡалды...

Мөхәмәтша ниндәйҙер көскә буйһоноп, ырғып торҙо ла дошман окоптарына табан йүгерҙе. Бына алда арҡыс-торҡос ауған тимер сыбыҡ заграждениелар. Ни өсөндөр окоптарҙа дошман һалдаттары бик аҙ күренде. Булғандары ла, ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә, винтовкаларын ташлап ҡулдарын күтәрҙе. Уларҙы бер урынға йыя башланылар. Урыҫ һалдаттары тере һәм үлек дошмандың кеҫәләрен аҡтарырға, трофей эҙләргә тотондо.

Бына Мөхәмәтша янына "ах" та "ух" килеп Ишбулат килеп тәгәрәне. Ул һул ҡулын уңы менән ҡыҫып тотҡан. Йөҙө ағарынған, ә күҙҙәрендә сикһеҙ ҡурҡыу ғәләмәте.

– Күҫәк белән китереп һуҡтылармы ни! – тине ауылдашы, нисек яраланыуы хаҡында һөйләп. Күренеп тора, яңы ғына үлем менән күҙгә-күҙ ҡарашҡан. Мөхмәтшаның артыҡ иҫе китмәне, яраны аҡ бинт менән ҡыҫып бәйләне лә:

– Мир булғансы төҙәлер. Пуле һөйәгеңә теймәгән, тейһә, сыҙаша алмаҫ инең, – тине.

Күп тә үтмәне, немец ике яҡлап ут өйөрмәһе ҡуптарҙы. Күрәһең, контрһөжүмгә күсергә маташа. Дошман һалдаттарының окопта ни өсөн шулай аҙ булыуын Мөхәмәтша шунда ғына аңланы. Тимәк, хәйлә менән беҙҙе алға үткәргән дә, ҡамап алып, дөмөктөрөргә ниәтләй. Тиҙҙән һул флангынан ҡуйы сылбыр булып теҙелгән дошман үҙе лә күренде. Винтовкаларҙан ата-ата киләләр.

– Минең команданы тыңла! – тип ҡысҡырып ебәрҙе бер унтер. – Оборона торорға әҙерләнегеҙ! Винтовкаларығыҙҙы атырға әҙерләгеҙ!

– Һин, нимә, бында приказ биреп тораһың? – Оҙон буйлы бер һалдат, тиҙ генә винтовкаһын төҙәп, унтерҙы атып та йыҡты. – Эткә – эт үлеме! – тигән булды еңеүсе ҡиәфәтендә.

Уға ҡаршы әйтеүсе булманы. Кемдер ҡурҡты, кемдер һуғыш тамамланыуҙан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерҙе.

– Нам нечего воевать! – Теге һалдат бөтәһе өсөн дә ҡарар итте. – Бөттө һуғыш – тине ул, винтовкаһын атып бәреп.

Шул саҡ уң яҡтан бер төркөмдөң дошман асыҡ ҡалдырған аранан үҙ окоптары яғына ынтылыуын күреп, Мөхәмәтша, үҙе лә аңламай, шунда ташланды. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй йүгерҙе ул. Хатта үҙен тирәләп осҡан пуляларға ла иғтибар итмәне. Эләгеп йығылһа, тағы торҙо, тағы йүгерҙе. Шулай итеп, үҙ окоптарына сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Әсирлеккә эләкмәҫ өсөн кире һыпыртыусыларҙың бер нисәһе үлеп йәки яраланып, йығылып ҡалды. Ә бына Ишбулат күренмәне, әллә әсир төштө, әллә дошман пуляһына дусар булды.

Ротанан ни бары егермеләп кеше ҡалғайны. Егермеләп тере ҡарасҡы. Күҙ күреме ер һалдат мәйеттәре менән сыбарланған. Кемдәрҙеңдер ғәзиз балаларын, аталарын оҙаҡламай һалҡын ер ҡуйынына һаласаҡтар. Ҡәберҙәрен бер кем белмәйәсәк, өҫтөндә күҙ йәше түкмәйәсәк. Бында ундай ғөрөф-ғәҙәт юҡ, сөнки һуғыш һәр ҡайһыһының күңелен таштан да яман ҡатырған. Хәйер, иҫән ҡалған һалдаттар ҙа тереләренән ҡуҙғалып йөрөүе менән генә айырыла. Уларҙың күҙҙәрендә бөтмәҫ һағыш билдәләренән башҡа бер ни ҙә сағылмай. Бысраҡ, күптән һабын төҫө күрмәгән биттәре йонсоу, ҡасандыр йомро яңаҡтар убылған ер кеүек эскә батҡан. Бер яғы менән дә һуғышсыны хәтерләтмәй улар, киреһенсә, йәлләү тойғоһо ғына уята. Айҙар буйы окоптарҙа бет һимертергә мәжбүр булған крәҫтиәндәр башын бер генә уй ҡайната: ҡасан бөтөр был һуғыш, ҡасан өйҙәргә ҡайтырбыҙ? Шул өмөт кенә йәшәтә был һоро шинелле йәндәрҙе.

Бәхеткә күрә, һуғыш гел генә окоптарҙа ятыуҙан, һөрән һалып һөжүмгә барыуҙарҙан ғына тормай. Болотло йәмһеҙ көндәрҙе аралаштырып аяҙҙары ла килгән кеүек, фронтта ял итеү ғәмәле лә бар, имеш. Мөхәмәтшалар ротаһын өс

айҙан тылға, ял иттереп, тулыландырырға сығарҙылар. Март аҙағы. Йылы. Ағастар йәшеллеккә төрөнә. Ара-тирә ҡоштар һайрауы шомло көҡнәлдәрҙе бер аҙ күтәреп ебәрә. Поляктар йәшәгән местечкола уларҙы элек туҡыу фабрикаһы булған бер оҙон йортҡа индереп тултырҙылар. Һалдаттар мунса инеп, айҙар буйы йыйылған керҙән арынды, ҡорһаҡтарына йылы аш та ингәс, бөтөнләй йәнләнеп китеп, шаяра-көлөшә лә башланылар.

– Эх, туйғансы бер араҡы эсергә ине! – тип күҙҙәрен уйнаҡлатты ерән сәсле, көлгәндә бит алмалары ҡыҙҙарҙыҡылай соҡорайып киткән ҡалын тауышлы бәләкәй буйлы һалдат. – Аяҡтан йығылғансы, онотолғансы!

– Бәлки, һиңә әле генә мунсала сабынып сыҡҡан бисә лә кәрәктер? – тип ирештерҙе уны бер нәҙек тауышлы икенсе берәү. Мөхәмәтша арты менән ята ине, кем әйткәнен күрмәне.

– Ҡайһы ереңә ҡойорға итәһең ул араҡыны? Буйың бит өҫтәлдән саҡ ҡына ҡалҡыу. – Оҙон буйлы ҡарап тороуға бик ғәйрәтле һалдат теге бәләкәйҙе шаяртты. – Эсеп үлеп ҡуймағайың. Беҙгә ерләргәме?

– Хикмәт буйҙа түгел, – тине теге бәләкәй, ғәрләнеп. Күрәһең, был уның иң ауыртҡан ере ине. – Ә минең ҡорһаҡ араҡыны һинекенән артығыраҡ һыйҙыра. Бәхәс тоторға әҙермен.

Артабанғы фәлсәфәне Мөхәмәтша тыңлап торманы. Тимер карауаттар ике ҡатлы итеп теҙелгән казармала иҙерәткес йылы ине, ул, ыңғайлап ятты ла йоҡоға китергә әҙерләнде. Әммә күҙгә йоҡо төшмәне, уйҙар диңгеҙенә алып инде.

Ни өсөндөр бала сағы иҫкә төштө. Мөхәмәтшаға ла, ағалары кеүек, йүнле белем тәтемәне. Муллаға ике ҡыш һабаҡҡа йөрөп, әлепте таяҡтан айырырға өйрәнгәс, атаһы былай тине: "Етер, улым, беҙгә, крәҫтиәнгә, шунан да артығы кәрәкмәй". Хәйер, уҡыуҙа һабаҡташтары алдында үҙен өлгө итеп ҡуйһалар ҙа, малайҙың бер ҙә мәҙрәсә тупһаһын тапау теләге юҡ ине. Әммә мулла икенсе фекерҙәрәк булған икән. Бер саҡ Мөхәмәтшаның атаһын урамда осратты ла, мулла:

– Кем, Мөхәмәткужа! Угланың, Мөхәмәтшаны әйтәм, укуга бик хәтерле. Ни дип аны мәдрәсәгә йөрүдән тыйдың? Артаба укыса, Стәрлебаш тарафдарында гыйлем эстәрлек бала бит ул, – тине.

– Хәҙрәт, ҡайҙа инде ул беҙгә ғилем эстәү! Эстәрле мәҙрәсәһе хаҡында хыялланыу! – тип ҡаршы төштө Мөхәмәткужа әҙәп һаҡлауҙы уйлап тормайына. Ҡараҡош ауылынан килеп, бында төпләнгән был мишәр муллаһын әрһеҙлеге, аҡыл өйрәтергә ятраҡаны өсөн өнәп еткермәй ине. – Укып – мулла, суҡып ҡарға булмаҫһың тигәндәй, еткән шуныһы ла. Малайҙы Эстәрлегә ебәреп, мында миңә кем ярҙам ҡылыр? Юҡ-юҡ, булыр нәмә түгел, – тине Мөхәмәтхужа.

Мулла ла ныҡышманы.

– Ярый инде, алайса. Бала синеке, үҙең кара. Мин инде, малаең укыса, кеше арасына кереп китер, дип дәшкән идем, – тип һүҙҙе бөтөрҙө. Мөхәмәткужаның оло улы Мөхәмәтгәрәй Стәрлетамаҡҡа китеп, пристангә йөк бушатыусы булып эшкә ингәс, уның артынан икенсеһе Әхмәтҡужа әсәһенең туғандары йәшәгән Минзәлә яҡтарындағы туғандарына хәл белергә киткән еренән төпләнеп ҡалды. Өсөнсө малай – Хәйерваранды ана-бына хәрби хеҙмәткә алырға торалар. Инсебикә инде, кейәүгә сығып китһә, кешенеке була. Тимәк, өйҙә күҙ терәп торорға бер Мөхәмәтша ғына ҡалып бара. Уны ла ҡайҙалыр уҡырға ебәреп, атаһы тере ҡулһыҙ ҡалһын, бар йомошона ла үҙе йүгерһенме ни? Ошоларҙы тағы ла бер баштан кисереп ятҡанда Мөхәмәтшаның иҫенә ҡапыл Ишбулат килеп төштө. Ҡайҙа булыр икән ул? Тегендә тороп ҡалдымы, әллә былай сыҡҡанда үлеп ҡалдымы?

Ә Ишбулат юғалманы. Һуңғы осорҙа ул һалдаттарҙың һөйләнеүенә ҡолаҡ һала йөрөй, һуғыштан башкөлләй ҡотолоу яйын эҙләй башлағайны. Ней тип,

кем хаҡына тиктәҫкә баш һалырға тейеш әле мин, тип уйланды ул. Әле йәшмен, донъя күрергә лә өлгөрмәгәнмен. Йәшәп ҡалырға, ғүмерҙе нисек тә һаҡларға кәрәк. Әсир төшөү тураһында ла уйланғаны бар. Оят-ғәрлек кеүек, ауылда ишетһәләр, күҙеңде лә астырмаҫтар. Уныһы шулай, тик ул үҙ ихтыяры менән әсир төшмәй. Ул яраланған, иҫен юғалтып ятып ҡалған. Иптәштәре уны үлгән тип уйлаған. Аңына килһә, немец һалдаты винтовкаһын тоҫҡап тора. Миндә ҡорал юҡ, дошманда бар, нисек итеп ҡаршылашаһың.

Ошо уй башына килгәс, Ишбулаттың өҫтөнән тау төшкәндәй булды. Мөхәмәтшаның үҙебеҙҙекеләргә табан йән-фарман йүгереүен күрҙе ул. Әсирлекте хуп күрмәй һыпыртыусылар байтаҡ ҡына ине. Ә бына тороп ҡалыусылар ҙа юҡ түгел. Күрәһең, улар ҙа Ишбулат кеүек хәл ҡылған. Ни булһа ла булыр, тине лә Ишбулат, аңын юғалтҡанға һалышып, еүеш тупраҡҡа бөгөлөп төшкән булды. Таҙа кәүҙәле бер немец уны терһәгенән тотоп торғоҙҙо ла алға атларға ҡушты. Әсир һалдаттарҙы бер урынға йыйып, көнбайышҡа, немец тылына, ҡыуаланылар. Былай, ҡаршылашмаһаң, немец ҡаты ҡыланмай, тик буйһон ғына. Бер бәләкәй генә ҡалаға килтергәс, вагондарға тейәнеләр. Вагон тигәндәре арыуыраҡ икән, һәр хәлдә Рәсәйҙәге ише иҙәненә һалам түшәлгән тауар вагоны түгел. Кеше йөрөтөү өсөн яһалған. Быға Ишбулат һоҡланып та ҡуйҙы. Бер тәүлектән поезд Көнсығыш Пруссияға барып инде. Бер станцияла әсирҙәрҙе вагондарҙан төшөрөп, ҡала буйлап алып киттеләр. Юлдар таш, өйҙәр ғәләмәт ҡыҙыҡ. Ишбулат уларға ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай. Ике ҡатлы йорт алдына килеп туҡтағас, ят кейемле, йыуан кәүҙәле кешеләр уларҙы мал һайлаған кеүек таратып ала башланы. Шулай итеп, Ишбулат Савва исемле бер урыҫ менән немец алпауытына ялсы булып китте. Йәш организм көслө булып сыҡты, яраһы тиҙ бөтәште, һыҙлауы ла баҫылды. Алпауыт Макс Геринг уларҙы мал өйө кеүек бәләкәй генә бинаға урынлаштырҙы. Немецтың ғаиләһе өс бала – ике ул һәм бер ҡыҙҙан тороп, баш балаһы Герман егет ҡорона инеп бара. Уның тағы ла ун биш йылдан немец хәрби авиацияһы башлығы булып китәсәген ишетһә, Ишбулат, моғайын, ул саҡта көлөп кенә ҡуйыр ине.

Немец донъяһы үҙенең бөхтәлеге, төҙөклөгө менән Ишбулатты һоҡландырҙы. Бына кешеләр нисек йәшәй! Беҙҙең тормош былар янында һис кенә лә кеше донъяһы тип әйтерлек түгел бит, тип уйланды. Тәүҙәрәк бер аҙ түбәнһенһә лә, ул яйлап яҙмышына буйһондо. Ни тиһәң дә, үлем ҡурҡынысы янамай, йылыла йоҡлайҙар. Тамаҡ бик туҡ булмаһа ла, ас та түгелдәр. Бер нәмә генә күңелен өйкәп торҙо: сусҡа майы. Уны ашауға Ишбулат бер ҙә күнегә алманы. Уның ҡарауы, бер-ике ай үтеүгә немецса ап-арыу һупаларға өйрәнеп алды. Ишбулаттың әҙәпле һәм күндәм булыуы алпауытҡа ла оҡшап, уның менән яҡшы мөғәмәлә итте. Ҡатын-ҡыҙ иғтибарынан да ситтә ҡалманы Ишбулат. Тәбәнәк кенә буйлы, йомро кәүҙәле, зәңгәр күҙле полька Марысяның үҙенә һиҙҙермәҫкә тырышып күҙ һалып йөрөүен күрә йөрөй ине егет, әммә һүҙ ҡушырға баҙнат итә алмай ғына. Бер саҡ уныһы ла табылды. Марыся егеттең ҡомһоҙланып йәбешеүенә ҡаршы торманы, сөнки үҙе лә ир-егет наҙына һыуһағайны.

Шулай айҙар үтеп, йылға ялғанды. Германия еренә ҡыш та, яҙ ҙа, йәй ҙә килеп китте. Ғүмер – аҡҡан һыу бит ул, бер ҙә туҡтап тормай. Марыся буйға уҙып, бик матур ҡыҙ бала тапты. Хужа рөхсәте менән туй кеүек нәмә лә уҙғарып ташланылар. Немец, поляк телендә йырланылар, бейенеләр. Ишбулаттың йырлауын һорағайнылар, ул "Ашҡаҙар"ҙы башҡарҙы. Бик моңло йырлай белмәһә лә, ҡунаҡтарға был ят йыр оҡшаны, ахырыһы,– сәбәкәй иткән булдылар. Бер нисә йыл үтеп тә китте. Ишбулат тыуған ауылын һирәгерәк иҫкә төшөрҙө. 1918 йылдың йәй аҙаҡтарында алпауыт ҡаланан төҫө боҙолоп ҡайтты. Тәүҙә ишек алдында ҡатыны менән һөйләштеләр. Яҙа-йоҙа булһа ла, Ишбулат һуғыштың тамамланыуы тураһында белде. Был хаҡта ялсыларға ла белдерҙеләр.

4*

– Криег ист су енде. Дойчланд каптиулиерен иере зинд нах су гефарен*, – тине бюргер, бер аҙ кәйефһеҙләнеп. Әлбиттә, уның арзан эш көсө менән хушлашҡыһы килеп тормай ине. Ни хәл итмәк кәрәк, немец тәртипле, шулай ҡушылған икән, тимәк, буйһонорға тейешһең.

Ишбулатты уйға ҡалдырҙы был хәбәр. Дөрөҫ, ул бер заман барыбер тормош үҙгәрер, гел былай ғына йәшәлмәҫ, тигән кеүегерәк уйлана ине лә уйланыуын, әммә ошо рәүешле булыр тип күҙалламағайны. Бында йәшәү еңелерәк, хатта күңеллерәк тә тойола, тик ҡайтырға ҡушылғас, ни хәл итмәк кәрәк. Тыуғанүҫкән ере бар, унда олоғайып килгән ата-әсәһе өмөтләнеп дүрт күҙ менән көтә торғандыр. Тик бына Марыся менән ҡыҙы Янаны ни эшләтергә? Марыся һис кенә лә Рәсәйгә барырға риза түгел. Ул үҙенең Польшаһына ҡайтырға ниәтләнгән. Көйләп тә, сөйләп тә күндерә алмағас, Ишбулат Марыся менән ҡатыраҡ һөйләшергә итеп тә ҡарағайны, әммә ҡатын ҡырт киҫте.

Бер үҙе юлланды иленә Ишбулат. Геринг уны, әлбиттә, буш ҡул менән сығарып ебәрмәне. Өҫтөнә, кейелгән булһа ла, матур тегелешле ҡара костюм, буйлы яңы күлдәк, аяғына штиблет бирҙеләр, сумаҙанына ла ҡайһы бер сепрәк-сапраҡ инеп ятты. Башына матур тироль эшләпәһе менеп тә ултырғас, Ишбулат урта хәлле бюргерға оҡшаны ла ҡуйҙы. Алпауыт та уға бер ҡарап алғас, һоҡланыуын йәшермәй:

– Гут, зер гут**, – тип ҡуйҙы. Юллыҡ аҡса ла бирҙе немец. Быныһы инде Ишбулаттың дүрт йыл бил бөгөүе өсөн үҙенә күрә бер хаҡ ине.

Төрлө михнәт, мең аҙаптар күрә-күрә, Ишбулат тыуған яҡтарына ла яҡынлашты. Уны ауылына яҡынайған һайын бер уй нығыраҡ борсоно: иҫәнме икән Мөхәмәтша? Ҡайтһа, беҙҙекеләргә ниҙәр еткерҙе икән?

Стәрленән ҡайтып төшкән Ишбулатты тәүҙәрәк танымай торҙолар. Урам буйлап атлағанда, ҡарт-ҡоро, әбей-һәбей, ул баш ҡағып үтһә лә:

– Был ниндәй әҙәм булыр? Урыҫ тиһәң, кейеме бер ҙә урыҫтыҡына оҡшамаған, – тип һөйләнде. Ишбулат икәнлеген төшөндөргәс, "бынағайыш, был бит сәпсим нимес булған" тип аптыраштылар. Ә бына зимагорлыҡта йөрөп, донъяны күп гиҙгән Ишғәле Ишбулатҡа икенсе ҡушамат йәбештерҙе: "Йәбрәй". Торабара был ҡушамат Ишбулаттың мулла ҡушҡан исемен дә онотторҙо, Йәбрәй тип алдында ла, артында ла әйттеләр.

Мөхәмәтшаның Герман һуғышынан иҫән-һау ҡайтыуын, әле башҡорт ғәскәрендә йөрөүен ишеткәс, Ишбулат бер аҙ тынысланды. Ауылға ҡайтҡас, Мөхәмәтша уны-быны һөйләп йөрөмәгән. Ишбулатты немец окобына барып сыҡҡас күргәйнем, шунан юғалттым. Бәлки, иҫәндер ҙә, уныһын Алла ғына белә, тигән. Күпме генә төпсөшһә лә, Рәжәп ҡарт шунан артығын әйттерә алмаған.

– Иҫәндер. Мин аның үлгәнен күрмәнем бит, – тип ҡырт киҫкән Мөхәмәтша, хатта яраланғанын да әйтеп тормаған. Бәлки, әсир төшкәндер, тип тә әйтмәгән. Маладис, Мәтшә.

* * *

Ял ике аҙнаға ла етмәне, Мөхәмәтшаларҙы тағы ла окоптарға ҡыуҙылар. Полк оборонаға күскән, йылы блиндаждар ҙа һалынғайны. Уның эсе ҡоро, йәйелеп китеп булмаһа ла, ял итергә мөмкин.

Бер аҙна ла үтмәне, яҡында ғына снаряд шартлап, Мөхәмәтша аңын юғалтты. Күҙен асып ебәрһә, баш әйләнә, ике ҡолаҡ эсе, тупраҡ тулғанмы ни, түҙеп

*Немецса — һуғыш тамам. Германия капитуляция яһаны, һеҙ тыуған яғығыҙға ҡайта алаһығыҙ.

**Яҡшы, бик яҡшы (нем).

торғоһоҙ ауырта. Байтаҡ шулай һыҙланып ятҡандан һуң, яралыларҙы ылауға тейәп, ҡайҙалыр оҙаттылар. Берсә аңына килеп, берсә иҫен юғалтып килә торғас, Мөхәмәтша ап-аҡ стеналы бүлмәлә күҙҙәрен асып ебәрҙе. Уға ниндәйҙер дарыуҙар биреп, ҡолаҡтарына ниндәйҙер һаҫыҡ шыйыҡсаға манылған мамыҡ тығып ҡуйҙылар.

Йөрөрлөк хәлгә килгәс, стеналарға тотона-тотона, Мөхәмәтша коридорға сыҡты. Түшәмдән иҙәнгә тиклем араны биләп торған көҙгө эргәһенә барғайны, унда үҙенең ҡырынмаған, яңаҡтары эскә батҡан йонсоу ҡиәфәтен, нуры ҡайтҡан күҙҙәрен күреп, оялышынан палатаһына инеп ятты: "Ауылда күрһәләр, ниндәй ҡараҫҡы был, тип көлөрләр инеме икән?"

Яраң юҡ бит тип, өс-дүрт көндән Мөхәмәтшаны сығарып ебәрҙеләр ҙә һалдаттарға путевка бирә торған пунктҡа барырға ҡуштылар. Ҡалын кәүҙәле күңелсәк кенә күренгән бер штабс-капитан, ҡағыҙ тоттороп:

– Галицияла бик ҙур һөжүм әҙерләнә. Атлы дивизияларға һалдат еткерә алмайҙар. Һин башҡорт бит. Ат өҫтөндә һыуҙағы балыҡтай тояһыңдыр үҙеңде. – Офицер көлдө лә, ҡағыҙ биреп, ҡайҙа барырға өйрәтте.

Карпат яҡтарына поход күңелдә ауыр уйҙар ҡалдырҙы. Ҡала-ауылдар ташландыҡ һәм емерек, дошман снарядтары был яҡтарҙа ла үҙ эшен башҡарған икән. Ҡасандыр һөрөнтө майҙандар сәселмәгән, унда ҡый үләндәре, күкрәк кереп, хужа булып ултыра. Ҡайҙа ҡарама, күҙең етем-еһер, хәйер һорашып йөрөгән ғәриптәргә төртөлә. Кешеләрҙә йылмайыу төҫө күрмәҫһең. Бар ғәләм бер уй менән йәшәй: ҡасан һуғыш бөтә?

Табылдынан да ҡыуаныслы хәбәр килмәй. Ҡырҡ йәшкә тиклемгеләрҙе фронтҡа алып бөтөргәндәр. Әллә күпме кешенең "ҡара ҡағыҙы" килгән, ғәрипләнеп ҡайтыусылар ҙа аҙ түгел. Ишбулаттың хәбәр-хәтере һаман да юҡ икән. Халыҡтың байтағы ашлыҡ сәсмәй, сөнки һабан тотор ирҙәр юҡ. Кеме һуғышта, кеме ауырып, тотош ғаиләләре менән ҡырылған өйҙәрҙең тәҙрәләренә таҡталар ҡаҙаҡланып, былай ҙа йәме булмаған урамдарҙы тағы ла йәмһеҙләй төшә. Байҙар ғына ҡаза күрмәй был һуғыштан, уларҙың хужалығы, киреһенсә, нығый. Хәҙер ялсы эҙләп яфаланырға түгел, ас-ялан ғас кешеләр тамаҡ хаҡына көнө буйы бил бөгөргә әҙер.

Ысынлап та, бер аҙна самаһы ваҡыт уҙғас, һөжүмгә күсеү тураһында хәбәр еткерҙеләр. Күптәр ризаһыҙлыҡ белдерергә ашыҡты:

– Алйот беҙ! Солох көткән булабыҙ. Ваше благородиелар һаман һуғышып туймаған, имеш. Беҙҙең братты һалҡын ергә аҙ һалғандар.

...Меңдәрсә атлы бер һөҙәк тауҙың ағастар менән ҡапланған итәгендә һөжүмгә бойороҡ көтә. Башлыса Дон казактарынан торған сотняла Мөхәмәтша ла бар. Орудиелар дошман окоптарын ҡурғаш ямғырына ҡойондорғандан һуң, улар һөрән һалып атакаға китте. Мөхәмәтша менгән оҙон тороҡло туры ат, ҡолаҡтарын ятҡырып, һуҙылып саба. Яҡын-тирәлә снарядтар ярылғанда, пулялар ямғыры осҡанда, ни ҡөҙрәт менәндер, улар Мөхәмәтшаны ла, менгән атын да урап үтә. Уның йөрәгендә ҡурҡыу хисе бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан. Киреһенсә, ниндәйҙер сая ҡыйыулыҡ хисе бар булмышын солғап алған. Күрәһең, һуғышта ундай мәлдәр ҙә була. Бына дошман окоптары, унан ҡото осҡан һалдаттар һикереп сыға ла ҡаса башлай. Дошман ҡаса, ҡайһы берҙәрен атлылар тапап китә, кемдәрҙер ҡылысын һелтәй. Кемдер ҡул күтәреп дошманынан мәрхәмәт һорай. Бына бер саҡ туҡтарға команда булды. Казактарҙың күңеле күтәренке, уны Мөхәмәтша ла уртаҡлаша. Еңеү туйланылар. Бер аҙнанан наградалар тапшырыу тантанаһында Мөхәмәтшаның да исеме аталды. Йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан бер генерал үҙе Мөхәмәтшаның күкрәгенә Георгий тәреһе ҡаҙаны.

– Молодец, герой!

– Рад стараться, Ваше благородие!

Был батша армияһының Көньяҡ-Көнбайыш фронттағы иң уңышлы һәм һуңғы һөжүме булды. Урыҫ ғәскәрҙәре Австро-Венгрия биләмәләренә байтаҡ эскә үтеп ингәйне. Окоп ҡаҙып урынлаштылар. Ни өсөндөр батша генералдары ла атакаға барырға әллә батырсылыҡ итмәне, әллә теләге булманы. Дошмандың иһә ҡабат һөжүмгә күсерлек рәте ҡалмағайны.

Эс бошорғос бер төрлө көндәр бер-береһен алмаштырҙы. Һуғыштың бөтәсәге тураһында хәбәр барыбер ишетелмәне. Һалдаттар араһында дезертирҙар күбәйҙе. Шулай бер көн дозорҙа торғанда Мөхәмәтша ике һалдаттың татарса әңгәмәләшеүен ишетеп, ирекһеҙҙән ҡолаҡ һалды.

– Бу сугыш хәҙер озакка бармас инде, – тине береһе. Мөхәмәтшаға ҡабырғаһы менән торған был йоҡа кәүҙәле кешенең погондарында унтер-офицер билдәләре күренеп ҡалды.

– Әйттең сүз, – тип ҡушылды уға бәләкәй генә буйлы һалдат, – бетми торган сугыш булмый инде.

– Мин аны әйтмим. Солдатлар сугышырга теләми. Ишеткәнең бардыр, большевиклар сугышны бетерергә чакыра.

– Дөрес әйтәләр. Мин булсам... – Бәләкәй һалдат бер аҙ тынып торҙо. – Күптән мир ясап, солдатларны кайтарып жибәрер идем.

– Большевиклар, – унтер тирә-яғына ҡаранып алды һәм шымыраҡ тауыш менән, – Россиянең жиңелүен тели.

– Кит аннан! Булмас.

– Үз колагым белән ишеттем. Алар немец белән дуслашып, коралларны байларга, заводчикларга каршы борырга котырта.

– Белмим инде, була торган хәлме соң бу? – Мөхәмәтшаның тыңлап тороуын теге унтер һиҙеп ҡалды, ахыры. – Эй, солдат! Син нәрсә анда тыңлап торасың! Бире кил әле! – Мөхәмәтша килде.

– Әллә татармы? – Оҙонса битле, бәләкәй генә танаулы, көрәнһыу мыйыктары нәҙек кенә булып һыҙылып киткән төҙ кәүҙәле унтер уға ҡыҙыҡһынып та, шөбһәләнеп тә ҡараны. – Кайсы якныкы?

– Уфа губирнаһынан, – тине Мөхәмәтша, окопҡа һөйәлеп. – Татар түгел, башҡорт мин. Һөйләшкәнегеҙҙе ишетеп, мосолманнар икән, тип тыңлап торам шул.

– Башкырт, дисең инде? – Унтер Мөхәмәтшаны баштан-аяҡ күҙе менән ҡапшап сыҡты. – Бармы ни андый халык?

– Бар, мына мин башҡорт, – тип ныҡышты Мөхәмәтша. – Ата-бабам да башҡорт булған. Татарларҙы беләм мин, алар икенсе халыҡ.

– Син, абый, ялгышасың. Төркиләр без, татар кавеменнән. Минем Уфада булғаным бар. Татарлар яши анда.

Мөхәмәтшаның һүҙ көрәштергеһе килмәне. Ишеткәне лә, күргәне лә бар ине былдай әҙәмдәрҙе. Шулай ҙа һорай ҡуйҙы:

– Үҙегеҙ ҡайһы яҡтыҡы һуң?

– Казан артыннан без.

Унтер хәлле генә крәҫтиән балаһы булып, мәҙрәсә тамамлаған. Артабан уҡырға ла иҫәбе булған да, һуғыш сығып, армияға алынған. Уҡыуы, күпте белеүе менән маҡтанырға яратҡан был бәндә Мөхәмәтшаға оҡшаманы, һәм ул тиҙерәк бынан китергә ашыҡты.

– Карале, якташ, – тип туҡтатты уны унтер. – Син үзең сугышка ничек карыйсың? – Ул хәйләкәр йылмайған күҙҙәрен Мөхәмәтшаға шундай итеп төбәне, әйтерһең, эсендә ни ятҡанын күрергә теләй ине.

– Мин һуғышты тиҙерәк бөтөрөү яғында. – Мөхәмәтша уратып-суратып торманы. – Аныһын һиңә теләһә ҡайһы һалдат әйтер.

– Ә большевикларның Россиянең жиңелүен теләүенә нәрсә дияр идең?

– Еңелеүен теләмәйем, – тине Мөхәмәтша ҡәтғи итеп. – Үҙ илемә еңелеү теләп утырырға мине кем тип беләһең. Беҙ еңдек бит инде. Мына бит дошман ерендә утырабыҙ.

Унтер көлдө. Йәнәһе, һин күп нәмәне аңламайһың икән әле…

Арлы-бирле атыш менән позиция тотоп тороу тағы ла бер нисә ай барҙы. Фронтта тәртип торған һайын ныҡыраҡ ҡаҡшаны. Хатта офицерҙар араһында ла һуғышты, батша генералдарын һүгеүселәр күренә башланы. Күп һалдаттар, фронтты ташлап, ҡайтыу яғына юлланды. Уларға Мөхәмәтша ла эйәрерҙе.

Рәсми рәүештә тамамланмағайны әле һуғыш.

Беренсе донъя һуғышы Рәсәйҙә батша режимының баштан-аяҡ серегәнлеген, илдең үҫешенә ҡамасаулаусы булыуын тағы ла бер раҫланы. Һуғышты еңгәнгә саҡлы дауам итергә саҡырған генералдар үҙҙәре үк еңеүгә ышанысын юғалта барҙы. Тылда ла хәл ҡатмарлашты.

1917 йыл баштарына һуғыштан тамам арыған, биҙгән халыҡтың асыуын аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың өҙлөкһөҙ артыуы, спекуляция, сираттар арҡаһында Мәскәү һәм Петроградта аҙыҡ-түлеккә өҙөклөктәр тағы ла арттырып ебәрә. 18 февралдә Путилов заводында эш ташлайҙар. "Долой царизм!", "Долой самодержавие!", "Долой войну!" тип халыҡ урамдарға сыға. Һалдаттар күмәкләп демонстранттар яғында булып, 28 февралдә улар 67 меңгә етә, ә 1 мартта Петроград гарнизоны баш күтәрә. 28 февралдә Царское Селоға китеп барған Николай II революцион матростар тарафынан тотоп алына һәм Псковҡа оҙатыла. Батша, ҡустыһы Михаил файҙаһына тәхеттән баш тарта, уныһы ла тәхеткә ултырырға теләмәй. 300 йылдан ашыу Рәсәйгә идара иткән Романовтар тоҡомо батшалыҡ итеүгә сик ҡуйыла.

Петроградта власҡа Ваҡытлы хөкүмәт килә һәм Учредительное собрание йыйылғанға тиклем илгә идара итеүҙе үҙ ҡулына алыуы тураһында белдерә. Яңы власть һүҙ, матбуғат, йыйылыштар азатлығы, дини, милли һәм ҡатлам айырмалыҡтарын бөтөрөү, үлем язаһын тыйыу кеүек демократик азатлыҡтар иғлан итә. Әммә Ваҡытлы хөкүмәт, бай ҡатламдар мәнфәғәтен күҙәтеп, һуғышты еңгәнгә тиклем дауам итеүҙе ҡайыра, Петроград советы, киреһенсә, "Бөтә донъя халыҡтарына" тип аталған манифесы менән һуғышты туҡтатыу, контрибуциянан баш тартыу тәҡдиме менән сығыш яһай.

3 мартта Швейцариянан Германия аша "пломбалы вагонда" большевиктар етәксеһе В. И. Ленин Петроградҡа ҡайта һәм вокзалда уҡ тарихта киң билдәле Апрель тезистарын уҡый: "Ваҡытлы хөкүмәткә ярҙам итмәҫкә!", "Бөтә власть – Советтарға!"... 4 июлдә Петроградта большевиктар 500 меңлек демонстрация ойоштора. Баш ҡалала большевиктар йоғонтоһо көсәйә. 12 октябрҙә улар Хәрби-Революцион Комитет (РВС) ойоштороп, уның рәйесе итеп Лев Троцкийҙы һайлай. 24 октябрҙә Ҡыҙыл гвардия отрядтары һәм ҡораллы революцион һалдаттар күпер, почта, телеграф, вокзалдарҙы үҙ ҡулына ала. Уларға ҡаршылыҡ күрһәтелмәй.

Съезд властьы үҙ ҡулына ала, тип белдерә II Бөтә Рәсәй съезы 25 октябрҙә ҡабул ителгән саҡырыуында. Совет власы кисекмәҫтән демократик тыныслыҡ тәҡдим итәсәк... Ул алпауыттар һәм монастырҙар биләгән ерҙәрҙе крәҫтиән комитеттарына бушлай биреүҙе тәьмин итәсәк... армияны тулыһынса демократлаштырып, һалдат хоҡуҡтарын яҡлаясаҡ, завод-фабрикаларҙа эшсе контроле

урынлаштырасаҡ, Учредительное собраниены ваҡытында саҡырыуҙы тәьмин итәсәк. Рәсәйҙә йәшәүсе милләттәргә үҙбилдәләнеш хоҡуғы биреләсәк. Яңы власть тыныслыҡ, ер һәм власть тураһында декрет сығара, 8 сәғәтлек эш көнө индерә. Халыҡтарҙың тиңлеге, суверенлығы, үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, милли аҙсылыҡтарҙың ирекле үҫеше, милли иҙеүҙе бөтөрөү раҫлана.

Совет Рәсәйендә төрки халыҡтар ҙа күплеген иҫәпкә алып, съезд Көнсығыш халыҡтарына мөрәжәғәт ҡабул итә. Дини инаныу, ғөрөф-ғәҙәттәр азатлығы, тейелмәҫлеге иғлан ителә. Советтар ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы итә, сиркәүҙе дәүләттән айыра. Учредительное собраниела меньшевиктар өҫтөнлөк алыу менән килешмәйенсә, большевиктар уны тарата.

Германия менән сепарат килешеүгә ҡул ҡуйыу бик ауыр шарттарҙа бара. Ниһайәт, 1918 йылдың мартында Брест-Литовск ҡалаһында тыныслыҡ тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыла. Советтар Рәсәйе 56 миллион кеше йәшәгән биләмәләрен юғалта. Польша, Литва, Латвия, Эстония, Финляндия, Белоруссияның бер өлөшө, Украина, Кавказ аръяғының ҡайһы бер райондары Рәсәйҙән айырыла.

Антанта был осорҙа стратегик өҫтөнлөктө үҙ ҡулына алып, Германияла һуғыш менән бәйле ризаһыҙлыҡтар көсәйгәндән-көсәйҙе. 1919 йылдың йәйендә кайзер Антанта алдында еңелеүен таныу мохтажлығы алдына килеп баҫа. Тарихта тиңдәшһеҙ һуғышҡа һуңғы нөктәне Францияның Версаль ҡалаһында ҡуйҙылар. Бына ошо ваҡиғаның туранан-тура шаһиты яҙып ҡалдырған юлдар:

...Версаль. 1919 йылдың 28 июне. Көндөҙгө сәғәт өс. Көҙгөлө залда 26 илдең башлыҡтары, президенттар, хөкүмәт башлыҡтары, министрҙар, маршалдар алтын ялатылған ултырғыстарҙан урын ала. Дүрт йылға һуҙылған Беренсе донъя һуғышы тамам. Еңелгән Германия тыныслыҡ тураһында килешеүгә ҡул ҡуйырға әҙерләнә. Бына залға йөҙө ағарынған, иҫке ҡара сюртук кейгән Германия сит ил эштәре министры Герман Мюллер килеп инә.

Шул саҡ ҡапыл ҡояш сыға. Уның нурҙары, көҙгөләрҙә сағылып, залдағыларҙың күҙҙәрен йоморға мәжбүр итә...

Версаль килешеүе Германия өсөн үтә лә хурлыҡлы була. Уға ярашлы немецтар бик күп биләмәләренән ваз кисергә, хәрби диңгеҙ флотынан баш тартып, караптарын еңеүселәргә бирергә, Антанта илдәренә килтергән зыянды ҡапларға, хәрби повинностән баш тартырға һ.б. мәжбүр була. Версаль килешеүе большевиктар ҡул ҡуйған Рәсәй өсөн хурлыҡлы Брест килешеүен дә юҡҡа сығара һәм Германия ғәскәрҙәрен Рәсәйҙән ҡайтарырға мәжбүр итә.

… Йәй уртаһы. Мөхәмәтша һуңғы дүрт йылда кисергән михнәттәрен ауыр йөк итеп йөкмәп, ҡайтанан башынан кисерә-кисерә, тыуған ауылы юлынан атлай. Стәрле яҡлап юл Яңғыҙ сағыл аша үтә. Ошо тирәлә иң бейеге һаналған ҡалҡыулыҡ битләүе, башҡа йылдарҙағы кеүек, һарғылт-йәшел ҡылғанға күмелгән. Һул яҡлап, аҫта, өйәңке һәм тал ҡаплаған Ҡоро Күндрәк туғайы. Дүшәмбе булғанғалыр инде, юл ыңғай ылауҙар ҙа осрамай. Бына һалдат ҡалҡыулыҡ башына менеп етте. Унан Табылдының бирге урамы ус төбөндәгеләй күренә. Уға тиклем бер саҡрым самаһы булыуға ҡарамаҫтан, Мөхәмәтшаның үткер күҙҙәре, урамдың көньяҡҡа, йөҙ биргән һөҙәк ҡалҡыулығына үрмәләгән урамды яҡшы күрҙе. Шул уҡ һалам башлы бәләкәй генә өйҙәр, йәйге селләлә лә, көҙгө һалҡын ямғырға күшекккән тауыҡтай, бөршәйешеп ултыра. Һалдат, күҙҙәрен секерәйтеп, ауыл осонан дүртенсеме, әллә бишенсеме булған үҙ өйөн эҙләне.

Эйе, бөтөрөп ингәнгә ун йыллап ҡына булыуға ҡарамаҫтан, ул да ергә һеңә төшкән, ахырыһы, күршеләренән әллә ни айырылмай.

Тулҡынлана һалдат. Йөрәге дөп-дөп тибә. Шәп-шәп атлау ҙа баҫа алмай ашҡыныуҙарҙы. Аҙымдары ла бер ҙә ырамаған кеүек. Йүгерергә итә лә, килештермәй. Бала-саға түгел бит инде. Бына ул зыярат янына ла килеп етте. Ауылға инерҙән һул яҡта ҡала ул ата-олатайҙарҙың мәңгелек төйәге. Бында тупраҡ өйөмдәре ныҡ ҡына арта төшкән, үлән үҫеп өлгөрмәгән яңылары ла байтаҡ. Ҡәберлеккә инеп, ата-әсәһенең мәңгелек йортона күҙ һалырға булғайны ла Мөхәмәтша, мосолмандарҙа әруахтар янына бер маҡсатһыҙ йөрөү ғәҙәте булмағанлыҡтан, уйынан кире ҡайтты: ваҡыт булыр әле.

Бына ул арҡыры-буй, йөҙ-мең тапҡырҙар үткән урам! Исмаһам, бер генә әҙәм заты күренһәсе! Тыуған йортҡа ла тиңләште. Араталы ҡапҡаны асып, эскә үтте. Көпә-көндөҙ булһа ла, ихата ла һил ине. Йорт-ҡура иҫкергән, ирҙәр ҡулы теймәгәнлеге күренеп тора. Бына ул тупһа аша атланы. Өй эсендә барыһы ла элеккесә, әйтерһең дә, Мөхәмәтша ихатаға ғына сығып ингән. Өммөгөлсөм, күрәһең, самауыр ҡуйырға йыйынғандыр, ҡулына һыулы биҙрә алып маташа ине, ирен ҡапыл күреүҙән биҙрәһен төшөрөп ебәрҙе: "Ай Алла!" Ҡатын лап итеп шундағы эскәмйәгә ултырҙы ла тиҙ генә тора һалды. Ҡаушап ҡалғайны ул, шуға күрә ни эшләргә лә белмәне. Мөхәмәтшаһын дүрт йыл күргәне юҡ бит. Иҫе буталды, әммә үҙен ҡулға ала алды. Тиҙ-тиҙ атлап ире янына килде. Мәрйәләр кеүек ҡысҡырып иламаны, шым ғына үкһеп, башын иренең күкрәгенә һалды. Бөтә тәне ҡалтырана. Мөхәмәтша ла тулҡынланыуҙан тыңламаҫ булған ҡулдары менән ҡатынының башынан, арҡаһынан һыйпаны. Күтәрелеп ҡарағанда, Өммөгөлсөмдөң ике күҙенән дә сөбөрләп йәш аға ине. Быны күргәс, һалдаттың да тамағына төйөр тығылып, ике бөртөк күҙ йәше күкрәгенә тамды. Ул арала ихатала балалар шаулашҡаны ишетелде. Дүрт малай тубырлашып килеп тә инде: "Арыҫлан бабай, атайың ҡайтты бит, ҡайҙа йөрөйһөгөҙ, тей",– тип Нәҙелша атаһына килеп һыйынды. Оло малайы нисектер буйға һонторланып, кәүҙәһе йоҡарып ҡалғандай күренде. Уға етәгеләре Әхмәтша менән Сафа ла, этешә-төртөшә, аталарының ҡулы аҫтына эләгергә тырышты. Тик береһе генә, иң бәләкәйе, ситтәрәк танауын тартып, күрәһең, ят итеп ҡарап торҙо. Атаһы Герман һуғышына киткәндә бер генә йәштә булып ҡалған Фәруҡша ине был.

– Фәруҡша, атайың ҡайтты бит. Бар янына, улым, – тине Өммөгөлсөм яғымлы тауыш менән, кесе улын арҡаһынан еңелсә этәреп.

Сөм-ҡара бөҙрә сәсле, оҙонса яңаҡлы, ҡаҡса кәүҙәле малай, ситкә ҡарап, тартынып ҡына атаһына яҡынланы. Мөхәмәтша улын күтәреп алды ла күкрәгенә ҡыҫты. Тәне үҙ ҡанын иркәләүҙән әллә нишләп китте, тағы ла күңеле тулышты:

– Улым!

Бер нисә минуттан ғаилә, күҙҙәрендә шатлыҡ нурҙары балҡытып, һикегә сәй эсергә ултырҙы. Был көндө уларҙың өйөндә ишек яғы ятманы. Беренсе булып Мөхәмәтшалар тупһаһын, ағас аяғын туҡылдатып, Зәһретдин аша атлап уҙҙы:

– Нихәл, фронтовик! Ҡайтып еттем, тиһең инде? – тип ул, ихлас йылмайыу менән ағас аяғын һөйрәй-һөйрәй, һикенән тороп ҡаршы килгән Мөхәмәтшаға табан туҡылданы. – Әле генә малай лапаҫ башына менгәйне. Сусаҡ түбәһе яғынан һалдат кейемле кеше килә, моғайын, Мәтшә абзыйҙыр, тигәс, килдем әле. Ҡара, олоғайып киткәнһең бит.

Улар ҡосаҡлашты. Бер-береһенең арҡаһынан тупылдатҡан булдылар. Зәһретдин да элеккегеләй түгел, хатта бәләкәйләнеп киткән кеүек. Ябыҡ яңағы буйлап ике яҡтан да оло йыйырсыҡ ярып төшкән, һаҡал-мыйығы ла мул ғына салланған.

– Бәй, ғүмер уҙа бит, – тигән булды өй хужаһы. – Әйҙә, утыр, Заһретдин, маҡтап ҡына йөрөйһөң икән. Мөгөлсөм, ҡунаҡҡа сәй яҫа.

Заһретдин һике ситенән урын алды ла, ағас аяғын сисә һалып, ишек төбөнә олаҡтырҙы.

– Мына, – тине ул, ҡулы менән ағас аяғы яғына күрһәтеп, – фронттан алып ҡайтҡан берҙән-бер награҙа!

Өммөгөлсөм ағас аяҡты ишек төбөнән барып алды ла һике ситенә һөйәп ҡуйҙы:

– Алай тимә, Заһретдин абзый. Ошо ағас аяҡ йөрөтә бит әле һине. Ул бумаһа, нишләр инең?

– Эйе шул, килен. – Заһретдин килеште. – Асыу килгәндән әйтәм инде. Ҡайһы саҡ ике аяғы ла һау кешеләрҙән көнләшеп тә ҡуямдыр. Ана, Мәтшәнен ике аяғы ла иҫән бит, минеке – юҡ.

Мөхәмәтша өндәшмәне, йылмайып ҡына ҡуйҙы. Заһретдиндың кешенән көнләшә торған ғәҙәте бар икәнен бөтә ауыл белә, хатта үҙенән көлөп тә ҡуялар, әммә, сир китә, ғәҙәт китмәй, тигәндәй, теге насар холҡон ташламай. Заһретдин, үрелеп сынаяғын алды, бер-ике уртланы ла кире ашъяулыҡҡа ҡуйҙы. Иренен ҡул һырты менән һөртөп, ялтыр башын бер-ике һыпырғандай итте.

– Эйе шул, мына Ауыстрыя фронтында аяҡ ҡалдырып ҡайтылды бит.

Ҡунаҡтың үҙе менән булған хәл тураһында һөйләргә теле ҡысынып торғанын һиҙҙе Мөхәмәтша. Заһретдин, унығ һорау биргәнен дә көтмәй, һөйләй башланы.

– Аяғыңдан нисек яҙҙың, тип һорарға итәһеңдер. Беләм. Бер заман атакаға барырға әмер булды. Китте сотня саптырып. Минең туры ат кирелеп тороп саба. Уратып бумбы, снәрәт шарлағанын бар тип тә белмәй. Ә дошман яуҙырыпмы-яуҙыра. Мына, бер мәл, эргәлә генә снәрәт шартланы. Мине атым-нием менән әллә ҡайҙа алып осорҙо. Шунда уҡ иҫте юғалтҡанмын. Иҫемә килгәндә лазаритта ята инем. Һул аяҡ түҙеп торғоһоҙ һыҙлай, утҡа бешкәнме ни. Тотош снәрәт серпәкләгән икән. Ауыҙға спирт һалдылар ҙа тотондолар тегене бысырға. Иҫерек булһам да, бик ныҡ ауыртты.

Заһретдиндың күҙенән йәш бәреп сыҡты. Ул йәшен сәкмәненең еңе менән ышҡыны ла бер аҙ тын торҙо, шунан һүҙ ялғаны:

– Донъяны күп күргәнһеңдер инде, Мәтшә туған. Ҡайһы яҡларҙа йөрөттө үҙеңде Нужа бабай?

Мөхәмәтша сәй эсеп туйып, ҡунағын күҙәтә ине. Тиҙ генә яуап ҡайтара һалманы ул. Хәтирәһен ҡайҙан башларға тигәндәй, фекер тупланы.

– Тәүлә Пүлшәлә һуғыштыҡ. Анда еңеү буманы, гел генә туҡмалдыҡ. Варшауҙы күрҙем. Бик матур, бөхтә ҡала. Паляклярҙың донъяһын ҡараным. Беҙҙән яҡшыраҡ йәшәйләр. Беҙҙе, анан да бигерәк урыҫларҙы яратмайлар. Беҙ күргәнде эт тә күрмәҫ.

Йә, хәҙер ни әйтерһең, тигәндәй, Мөхәтмәтша Заһретдинға ҡараны. Тегеһе башын ҡағып ҡуйыу менән сикләнгәс, дауам итте:

– Күргәнһеңдер, Аурупала беҙҙең кеүек бысраҡ кисеп йөрөмәйләр. Таш юлдан йөрөйләр. Йортлары бик матур, бөхтә аларҙың. Беҙҙеке ише арбаҙҙа йәшәмәйләр.

– Нимесләрҙең нисек йәшәгәнен күрергә туры кимәне, – тине Заһретдин. – Беҙ бит Мотаһар белән, ауыр тупрағы еңел булһын, Ауыстрыя фронтына ебәрелдек. Һинеке хаҡ, ул яҡларҙа тормош арыуыраҡ булған да, беҙ боҙоп бөттөк.

Мөхәмәтша һуғыштан кемдәрҙең иҫән ҡайтыуы, кемдәрҙең үлеп ҡалыуы тураһында белеште. Заһретдин, бармаҡтарын бөгә-бөгә, ауылдаштарының

исемдәрен атай-атай, ентекле яуап ҡайтарҙы ла сәйер генә йылмайып ҡуйҙы:

– Ә мына, Ғилман бальшәүниклəр һүҙен һөйләргә өйрәнеп ҡайтты. Килер әле ул мында. Тыңнарһың.

– Шулаймы? Ярар.

Һуғыш тураһында артабан берәһенең дә һөйләгеһе килмәне. Ҡунаҡ һүҙҙе икенсегә борҙо:

– Һуғыш бөттө, тибеҙ ҙә ул. Мында донъя яңынан боларырға тора бит әле. Илдә бер ҙә тыныс түгел. Ана шул Ғилман кеүекләрҙе эйәрткән балшәүниклəр донъя болартырға йыйына, тиләр.

– Күрҙем мин бальшивикларҙы, – тине Мөхәмәтша. – Бальшивиклар бумаһа, һуғыш та баҫылмаҫ ине. Тик мына аларҙың батшаға ҡаршы барыуы ғына яҡшыға бумаҫ, тим. Донъяны болартыуы еңел ул, ә тәртипкә һалыуы – ай-һай.

– Эй, донъя былай ҙа боларып бөткән инде ул. – Заһретдин сынаяғын түңкәрҙе. – Рәхмәт үҙегеҙгә, сәйегеҙ тәмне булды. Донъяның рәте ҡалманы инде, туған. Ауылда эшләрлек кеше лә юҡ хәҙер, мына нимәгә китереп еткерҙе һуғыш. Ҡаҡ таҡтаға таяндырҙы. Кешенең күбеһе ашлыҡ сәсә алмай, ирләр юҡ һабан тоторға. Мал, элек иҫәбе булмаған мал, бармаҡ белән һанарлыҡ. Кешеләр ерләрен Райыфка муҡшыларына бирә ҡортомға йылдың-йылы.

Заһретдин ашъяулыҡ янынан ситкәрәк шылып ултырҙы. Уларҙың әңгәмәһе ошо ерҙә өҙөлдө, өйгә берәм-һәрәм ағай-эне, күрше-күлән, ҡарт-ҡоро хәл белергә инә башланы. Һәр береһе донъя хәлдәрен һорашҡан булды, үҙенекен һөйләне. Өммөгөлсөм килгән береһенә самауыр ҡуя-ҡуя арып бөттө. Уларҙы бер генә минутҡа ла тын ҡалдырманылар. Кисен аяҡ аҫты һил булып, шәмгә ут алырғамы икән тип йөрөгәндә, кемдер ишек туҡылдатты. Башҡортта ундай ғәҙәт булмағанға, Мөхәмәтша, ят кеше йөрөй, ахырыһы, тип ишек төбөнә үҙе барҙы:

– Кем анда?

– Ғилман. Керергә рөхсәттер бит?

Ғилмандың атаһы Ғирфан ауылда ерһеҙ кешеләрҙең береһе булды. Уның ҡатыны йыл һайын бала табып, ғаиләлә ун тамаҡ һәр саҡ ашарға интегеп үҫте. Ғирфан тәүҙәрәк үҙ ерендә тегеләй итһә лә, былай итһә лә ғаиләһен туйҙырырлыҡ ниғмәт таба алманы. Түлле ҡатын ире тапҡанды тотона белһә лә ярай ине лә бит, әммә ул тик әләф-тәләф итергә генә һәләтле булып яралған, имеш. Ғирфан оҙон ҡыштарҙы Стәрле яҡтарына барып кеше ташып, йөк бушатып йөрөп ҡараны, барыбер йәлсемәнеләр. Аптырағас, ул үҙенең Ҡоро Күндерәктең үрге ағымындағы ерен Борисовка муҡшыларына ҡуртымға биреп ҡараны. Әммә ҡуртым аҡсаһы ла ғаиләне туйҙырырлыҡ түгел ине. Шулай яфалана-интегә балалары үҫеп етте. Ғилман ситәндән кескәй генә өй һалып инде, үҙе кеүек фәҡир кешенең ҡыҙына өйләнде. Атаһы юлынан китеп, ул да ҡыш айҙарында Стәрлегә зимагорлыҡҡа йөрөр булды.

Оҙон ҡолаҡтар аша Ғилмандың унда урыҫ һөйәркәһе барлығын да ишеттерҙеләр. Был хаҡта белеп ҡалғас, бисәһе өйҙә буран уйнатты. Ире күҙен күгәрткәнсе туҡмаһа ла, ҡатыны тынманы. Ғилманды зимагорлыҡтан да тыя алманы. Дөрөҫ, был юлы Ғилман Стәрлегә түгел, ә Ырымбурға һыпыртты. Нисек итеп тапҡандыр, ауылдаштарына уныһы йомаҡ булып ҡалды, ләкин бер сәфәренән Ғилман яҡшы Орлов тоҡомло юртаҡ менеп ҡайтты. Ҡайтты ла ҡабат ҡырға сығып маташманы, Ғарифулла байға, Баймөхәмәт муллаға эшкә йөрөнө.

Оҙаҡламай Герман һуғышы сығып, Ғилманға ла шинель кейеп, винтовка тотоп окопта ятыу, һөрәнләп һөжүмгә барыу кеүек әсе яҙмыш тәтене. Ул-был мәшхәрҙә ҡайһы берәүҙәр кеүек юғалып ҡалманы, башы ла буталманы. Донъяны

үҙгәртеү кәрәклеге уның өсөн йомаҡ түгел ине. Ғилман большевиктар һүҙен йотлоғоп тыңланы. Үҙе лә большевик булып китте.

Ғилман бер үҙе түгел ине. Уға Мөхәмәтшаларға сыбыҡ осо туған Шәңгәрәй ҙә эйәргән. Ул бәләкәйҙән етем ҡалып, һуғышҡа алынғансы Әфтәх байҙа малайлыҡта йөрөгәйне.

– Ныу, Мәтшә! – Ғилман өй хужаһының ҡулын һыңар ҡулы менән урыҫтарса ҡаты итеп ҡыҫҡан булды. Бирешкәйне Ғилман да, хатта сүгә башлағандай тойолдо. Кәүҙәһе лә йоҡара төшкән. Үҙенән тәмәке ҡатыш тағы ла әллә ниндәй ят еҫ тә килә. – Бөтөрҙөк бит тәки һуғышты. Ни хәлдәһең?

Шәңгәрәйҙең ҡулы йомшағыраҡ ине.

– Аллаға шөкөр. – Мөхәмәтша ҡунаҡтарҙы түргә уҙырға саҡырҙы. – Әсәһе, әллә самауырҙы яңыртаһыңмы?

– Юҡ, беҙ самауыр төбөндә утырырға килмәнек. – Ғилмандың тауышы ҡәтғи ине. – Бөгөн килгән-киткән кешенән ғарҡ буғанһыңдыр инде. Беҙ оҙаҡҡа түгел. – Ғилман сәйер генә итеп Шәңгәрәйгә ҡараны. – Сығар әле теге "тел асҡысы"н. Шәңгәрәй ҡуйынынан килтереп сығарған оҙон әйбер шәм яҡтыһында ялтырап китте. Шешә ине ул. Мөхәмәтша уңайһыҙланды:

– Ней бит әле, мин эсмәйем.

– Бынағайыш, фронтта йөрөп… Өйрәнмәнең дәме? – Ғилман әллә аптыраны, әллә эсергә тура килмәҫен белеп үкенде.

Һүҙгә Өммөгөлсөм дә ҡушылды:

– Кит, юҡты. Гонаһлы булып. Алла бабай башығыҙға һуғыр.

– Ғилман абзый, әйттем бит шулай булыр тип. – Шәңгәрәй, хәҙер нишләйбеҙ тигәндәй, Ғилманға ҡараны.

– Ярар, әтеү алып ҡуй.

Өйҙә уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты.

– Мәтшә, әйҙә, урамға сығып утырайыҡ, – тине Ғилман. – Әҙерәк һөйләшәһе һүҙ бар.

Ихатаға сығып, мунса янында ятҡан бүрәнәгә менеп ҡунаҡланылар. Шәңгәрәй кеҫәһенән китек сынаяҡ, бер киҫәк арыш икмәге килтереп сығарҙы ла бүрәнә өҫтөнә ҡуйҙы. Ә шешәне Ғилманға һондо:

– Мә, абзый, үҙең ас. Минең ҡулдан килмәй.

Ғилман етеҙ хәрәкәттәр менән шешәне асты ла араҡыны сынаяҡҡа ҡойҙо:

– Мәтшә туған, һинең иҫән-һау ҡайтыуың хөрмәтенә! – тип эсеп тә ебәрҙе. Икенсе сынаяҡты Ғилман Шәңгәрәйгә тотторҙо. Тегеһе лә араҡыны оҫта ғына түңкәреп ҡуйҙы. Тимәк, былар фронтта тамам урыҫ фиғеленә инеп ҡайтҡан икән, тип һығымта яһаны Мөхәмәтша.

– Тартмайһың дамы? – Ғилман махорка менән ҡағыҙ киҫәге сығарҙы.

– Аллаға шөкөр, өйрәнмәнем.

– Мә, Шәңгәрәй, беҙ янғансы, махра янһын. – Ғилман ҡағыҙ киҫәген йыртып, Шәңгәрәйгә һондо, махорка ҡойҙо. Һаҫыҡ тәмәке еҫе бар урамды тултырҙы.

– Ниндәй уй-ниәтләр белән ҡайттың, Мәтшә? – Ғилман, ҡуйы тәмәке төтөнөн һауаға өрөп, Мөхәмәтшаға ҡараны.

– Уй-ниәт тип инде, әлегә андай уй башҡа кереп сыҡҡаны юҡ. Мына донъяны бөтәйтергә иҫәп бар. Малға курмы әҙерләргә. Эш күп, Ғилман.

– Мин ул хаҡта түгел. – Ғилмандың тауышында сәйер ҡыҙыҡһыныу сағылып ҡалды. – Фронтта саҡта төрлө хәбәрләрҙе әҙ тыңнамағанһыңдыр. Большевикларҙы ишеткәнең булдымы?

– Булды. Тыңнарға ла туры килде.

– Тәк, ну нисек ҡарайһың аларға?

Мөхәмәтша көттөрөбөрәк яуапланы:

– Һөйләгәннәре хаҡ инде.

– Ә нимәһе хаҡ түгел? – Ғилмандың ҡәнәғәтһеҙлеге тауышына сыҡты.

– Кеше малын талап алырға итеүләре хаҡ түгел.

– Заводчиктың, фабриканттың, башҡорт байының кеше ҡанын эсеп йыйған малын алыуҙы хаҡ түгел тиһеңме? – Ғилмандың тауышы күтәрелеберәк китте.

Мөхәмәтша ла бирешергә теләмәне:

– Һәр кемдең үҙенеке — үҙенә.

Бәхәскә Шәңгәрәй ҙә ҡушылды:

– Мына мин Әфтәхкә дүрт йыл бил бөктөм. Тамаҡ байына. Аның байлығында минең дә өлөшөм бар бит. Бирмәһә, тартып ала алам.

– Шәңгәрәй, малайлыҡҡа һине Әфтәх үҙе саҡырып алдымы, әллә үҙең барҙыңмы? — Мөхәмәтша, был хаҡта белгәнгә, юрый һораны.

– Анының мында ни ҡыҫылышы бар? – тине Шәңгәрәй.

– Бар шул, нейә үҙеңдең көнөңдө үҙең хәстәрләмәнең? Шул-шул. Аның байлығына өмөтләнмә лә, бирмәҫ. Закон аның яғында. Мал бүлеш китһә, ҡайҙа барып етербеҙ? Мына, Ғилман, һинең атыңды алырға итә, ти, берәү. Биреп ебәрер инеңме? – Мөхәмәтша Ғилманға ҡараны.

– Ат минең үҙемдеке, мин бер ҡасан да кеше ҡушып эшләтмәнем.

– Әфтәх тә бит донъяһын малайлары, бисәһе белән алып барҙы. Аларҙы йоҡлатмай эшләтте. Анығын һин дә беләһең.

– Юҡ, ул Шәңгәрәй кеүекләрҙең елеген һурҙы. – Ғилман тәмәкеһен тартып бөтөрөп, ергә һалып иҙҙе. – Әле һин күп нәмәне белмәйһең икән. Донъя гел ошолай ғына бармаҫ. Беҙ уны дер һелкетәсәкбеҙ! Байғураларҙан саң да туҙан ғына тороп ҡалыр. Мына күрерһең.

Ғилман урынынан торҙо.

– Киттек, Шәңгәрәй. Мин, Мәтшә фронттан күҙе асылып ҡайтҡандыр, тип уйлаһам, ул томаланып ҡайтҡан, имеш. Уйлан, Мәтшә, уйлан. Кем яғында һин? Беҙҙең кеүек ярлы-ялпы яғындамы, әллә Әфтәх ишеләр яғындамы?

Ихатала араҡы, тәмәке еҫе ҡалдырып, төнгө ҡунаҡтар сығып китте. "Тамам кафырға әйләнгән былар, – тип уйланды Мөхәмәтша, – фиғелдәре генә түгел, уйлары ла тап шуларҙыҡы".

Бик һуң булһа ла мунса инеп сыҡҡандан һуң, Мөхәмәтша йән белмәй йоҡланы һәм төш күрҙе. Имеш, ул Яңғыҙ сағыл битләүендәге йорттоң ихатаһында ниҙер эшләп йөрөй. Ҡалҡыуыраҡ урында мал ҡураһы, бер нисә баш һыйыр малы, һарыҡтар ҙа күренә. Йылҡыһы ла бар. Ихатанан уң яҡлап ашлыҡ баҫыуы күҙгә салына. Ишек алдын тултырып ҡош-ҡорт йөрөй. Мөхәмәтшаның өйө Карпат яғындағылай төҙ ҡарағай бүрәнәләрҙән, хатта сайыр еҫе лә сығып бөтмәгән. Ә мунсаһы һөйәндән, имеш, ул да ихатаға йәм өҫтәп ултыра. Бына ни ғәжәп, ихатала үҙенән башҡа бер кем дә күренмәне.

Иртән кәйефләнеп уянды кисәге һалдат. Ихатаға сыҡҡайны, тағы ла шул төшө иҫенә төштө. Ә бит ул тәү тапҡыр инмәй. Беренсе мәртәбә был төштө Мөхәмәтша бер йыл элек Көньяҡ-Көнбайыш фронтта һуғышып йөрөгәндә ялға сыҡҡас күргәйне. Уларҙы Буковиналағы ҙур украин ауылына килтереп тултырҙылар. Бомба шартлау, пулялар сыйылдауын ишетмәүҙәренә бик ҡәнәғәт булып, һалдаттар мунса яҡҡайны. Йыуынып сыҡҡандан һуң Мөхәмәтша кәртә артындағы бесәнлеккә ауҙы ла йоҡоға талды. Тик ул төш бер аҙ томанлыраҡ ине шикелле. Ни булыр был? Төшкә уйлағандар йә күрәсәк инә, тиҙәр. Мөхәмәтшаның тәҡдире әллә ауылдан ситтә йорт-ҡура тергеҙеп йәшәүҙәме икән? Ҡулдан

килерлекме был эш? Иң мөһиме, кем рөхсәт бирер быға? 1906 – 1910 йылғы Столыпин реформаһы ваҡытында ҡайһы бер ауылдаштарының утарға сығып донъя көтөргә маташыуы иҫенә килеп төштө. Эйе, бер нисә ғаилә Сейәлек, Туғай ауылдарына нигеҙ һалып, яңы урында хәллерәк йәшәргә дәртләнгәйне. Сейәлеккә күскәндәр кинәнә алманы, сөнки унда йылға юҡ, ҡойо һыуы ла сығыр-сыҡмаҫ. Телдәрен арҡыры тешләп, кире ҡайтып килделәр. Туғайҙағылар әле лә йәшәп ятҡан була ла, тик бар нужаларын да Табылдыға килеп күндерергә мәжбүрҙәр. Туғайҙа бер ни ҙә юҡ бит.

Һуғыш йылдарында ауыл бик нык миктәгән. Мөхәмәтша тиҫтерҙәренең күбеһе фронтта баш һалған. Ишбулат һуғышҡа киткәне бирле ғәйеп, ҡара ҡағыҙы ла килмәгән. Иҫән ҡайтҡан ирҙәрҙең дә күбеһенең ағзалары теүәл түгел: береһе һыңар аяҡлы, икенсеһе һыңар ҡуллы тигәндәй. Кемдер күҙһеҙ ҡалып, яҡты донъяны күреүҙән мәхрүм булған, кемдер бөтөнләй ишетмәй. Уларға тыныс күңел менән ҡарау мөмкин түгел, ябыҡ йөҙҙәре, бер бөртөк тә нур ҡалмаған, күҙҙәре төпкә батҡан,эштән сығып иҫкергән сәкмәндәре тоҡ кеүек-һалынып тора. Мөхәмәтша уларға ҡарап шөкөр итте. Иншалла, үҙенең ике-ҡулы ла, ике аяғы ла иҫән. Өйҙә лә ирҙәр эше күбәйеп киткән. Дүрт йыл буйы ирҙәр ҡулы теймәһен әле. Эштән өркмәй Мөхәмәтша, киреһенсә, эштә ул йәм-тәм таба. Ихатаһының йығылып иптән сыҡҡан ситәндәрен йүнәтте, серегән бағаналарҙы яңыларына алмаштырҙы. Кәрәк еренә ҡаҙау ҡағып сыҡты. Малайҙары менән йылға буйына барып һуйҙан тал алып ҡайтты ла урам яҡлап яңы ситән үрергә керешеп китте. Йорт-ҡурала эш күп булыуға ҡарамаҫтан, күңеле ғәжәп тыныс ине уның. Йоҡоһо ла яҡшырҙы, тик ашау яғы ғына наҡыҫыраҡ ине шул. Ҡара икмәк, ҡатыҡ, тары бутҡаһы. Картуф яңыһына тиклем етмәгән, малайҙар үҫә бит, ашарға күп кәрәк. Ғаилә башлығы ҡайтыу шатлығынан бер тауыҡ һуйғайнылар ҙа, уны нисек шул тиклем йәнгә еткерәһең. Башҡорт урыҫ кеүек баҡса тотмай шул. Яҙ етһә, Ҡарамалы йәки Раевка урыҫтарынан орлоҡ алып баҡса ултыртырға ҡарар итте Мөхәмәтша. Мал аҙбарын да ҡыш алдынан һипләргә уйы бар.

Был ниәттәр селпәрәмә килеүен ул әле белмәй ине...

III

Большевиктар юлбашсыһы В. И. Лениндың "Совет власының еңеүле хәрәкәте" тигән һүҙҙәрендә тәрән мәғәнә йәшенгән. Бер төрлө лә сикләнмәгән батша хакимиәтен алмаштырған яңы ҡоролошто кисәге империя халыҡтары ыңғай ҡабул итә. Айырыуса крәҫтиәндәр, сөнки улар алпауыт ерҙәрен бүлешеп алыуға өмөтләнә. Яңы властың һуғышты туҡтатыуы, эшсе контроле, һигеҙ сәғәтлек эш көнө урынлаштырыуы хеҙмәтсәндәр араһында яҡшы баһа ала. Совет власын ярлы халыҡ ҡына түгел, ҡайһы бер офицерҙар, зыялылар ҙа яҡлай. Өфө губернаһында Февраль инҡилабынан һуң Ваҡытлы хөкүмәт комиссары итеп элекке дворян П. Коропачинский тәғәйенләнә. Өйәҙ комиссарҙары ла яңыра. Өфөлә шулай уҡ Эшсе һәм һалдат депутаттары советы ойошторолоп, уның рәйесе итеп эсер З. Гиневскийҙы һайлайҙар. Мосолмандар үҙҙәренең хәрби советын булдыра. 1917 йылдың майында Мәскәүҙә Беренсе Бөтә Рәсәй мосолмандар йыйыны асылыу менән башҡорт милли хәрәкәтенә нигеҙ һалына. Йыйындағы 58 башҡорт делегаты I Бөтә башҡорт ҡоролтайына әҙерлек башлай. Ҡоролтай 20 июлдә Ырымбурҙа асыла. Ул милли мөхтәриәт, ер, мәғариф тураһында резолюциялар ҡабул итә, етәксе орган — Башҡорт Үҙәк шураһын һайлай. Августа Өфөлә йыйылған II Бөтә башҡорт ҡоролтайы милли мөхтәриәт идеяһын хуплай һәм уны иғлан итергә әҙерлек башлай.

Тик тыныс тормош оҙаҡҡа бармай. Беренсе донъя һуғышынан иркен тын алырға ла өлгөрмәгән Рәсәй Граждандар һуғышы упҡынына этәрелә. Советтар иленә ҡаршы хәрби интервенция ойоштороу мәсьәләһен Антанта башлыҡтары 1917 йылдың декабрендә Парижда үткәрелгән кәңәшмәлә ҡарай. Бөйөк Британия казактар йәшәгән губерналар һәм Кавказды, Франция – Украина, Бессарабия, Ҡырымды, АҠШ менән Япония Себер һәм Алыҫ Көнсығышты баҫып алырға ниәтләнә. Улар Рәсәйҙән бурыстарын ҡайтарып алырға иҫәп тота, сөнки батша хөкүмәтенең бирәсәге 16 миллиард алтын һумға еткән була. Советтарға ҡаршы ҡораллы көрәшкә беренсе булып 1918 йылдың майында чехословактар күтәрелә. Аҡ чехтарға АҠШ, Франция, Англия хөкүмәттәре бик күп аҡса бирә. Әммә фетнә октябрь урталарына Ҡыҙыл армия тарафынан баҫтырыла.

Ә Көньяҡ Рәсәйҙә хәл, киреһенсә, ҡырҡыулаша. Дон казактары атаманы П. Краснов 45 мең ҡылыслы атлы армия йыйып, немецтар ярҙамында Царицынға һөжүм ойоштора. Көҙөн шул уҡ йүнәлештә А. Деникиндың Ирекле армияһы хәрәкәткә күсә, уға ярҙамға Дон, Әстерхан, Кубан казактары килә. Әммә ике һөжүм дә аҡтарҙың еңелеүе менән тамамлана. Генералдар Корнилов менән Марковтың офицерҙар полктарынан ни бары 200 – 500 кеше генә тороп ҡала. Себерҙә актив хәрби хәрәкәттәрҙе элекке батша адмиралы А. Колчак башлап ебәрә. Омскиҙа үҙен Рәсәйҙең "Юғары хакимы" тип иғлан итеп, ул бында интервенттар ярҙамында хәрби диктатура урынлаштыра. Колчак армияһын да АҠШ, Франция, Япония ҡорал, хәрби мөлкәт, кейем-һалым менән тәьмин итә. Колчактың 140 меңлек ғәскәре, Деникиндың Ирекле, төньяҡта генерал Н. Юденичтың аҡ армиялары 1919 йылдың яҙында һөжүмгә күсеп, Совет Рәсәйе утлы ҡулсала ҡала. "Социалистик Ватан ҡурҡыныс аҫтында",– тип һөрән һала В. Ленин. Ҡыҙыл Армияға апрель урталарында 877 мең кеше мобилизациялана. Аҡ армиялар ҡыйратыла. Өфөнө азат итеүҙә легендар комдив В. Чапаевтың 25-се дивизияһы ҙур роль уйнай.

Октябрь инҡилабынан һуң Өфөлә губревком ойошторолоп, уның рәйесе итеп А. Свидерский һайлана. Ревкомға биш большевик һәм ике һул эсер инә. Ырымбурҙа урынлашҡан Башҡорт Үҙәк шураһы 15 ноябрҙә губернаның бер нисә өйәҙен Башҡорт республикаһы тип иғлан итә. Ул Совет власын яҡламай, Ваҡытлы хөкүмәт ҡарарҙарын ғәйепләп сыға. Ырымбурҙы 1918 йылдың февралендә ҡыҙылдар баҫып алғас, Башҡорт хөкүмәте ҡулға алына. Уларҙы ҡалаға көтмәгәндә баҫып ингән Дутов казактары ҡотҡара.

… Мөхәмәтша ҡайтып, бер аҙна үткәйнеме-юҡмы, уртансы улы Әхмәтша урамдан хәле бөтөп йүгереп инде лә:

– Атай, Һырттан һалдаттар төшөп килә, – тип хәбәр һалды. – Күмәктәр! Мөхәмәтша тәҙрә аша шул яҡҡа күҙ һалды. Ысынлап та, унда туҙан болото күтәрелгәйне. Күрәһең, байтаҡ ғәскәр килә. Ул Стәрлетамаҡта Башҡорт хөкүмәтенең ҡарары буйынса ғәскәр тупланыуы тураһында ишетә биреп ҡалғайны-ҡалыуын. Моғайын, шулар йөрөйҙөр. Ул арала булмай, һалдаттар ауылға инеп, өйҙән өйгә йөрөй башланы. Мөхәмәтшалар ихатаһына килеп ингән хәрби кейемле берәү көр тауыш менән:

– Әссәләмәғәләйкүм, хужалар! – тине лә тирә-яғын байҡап алғандан һуң ишек алдына сыҡҡан Мөхәмәтшаға төбәлде. – Мөхәмәтша Ниғмәтуллин һиндер?

– Мин. – Мөхәмәтша һорау биреүсегә шул уҡ тонда яуапланы.

– Беҙ Башҡорт хөкүмәтенең фарманы буйынса ғәскәр ойоштороп йөрөйбөҙ. – Теге ир түш кеҫәһенән сығарып ҡағыҙ һуҙҙы. – Бына минең мандат. Һин мобилизацияға эләгәһең. Беҙҙең менән китергә кәрәк булыр. Йыйын!

Мөхәмәтша ҡайтарып һүҙ ҡушманы. Бындай ваҡытта һүҙ көрәштереүҙең урынһыҙ икәнлеген ул яҡшы белә. Теләмәһәң дә алып китәсәктәр. Һинең Герман һуғышында дүрт йыл окопта ятып тере ҡалыуың уларҙы ҡыҙыҡһындырмай. Табылдынан башҡорт ғәскәренә үҙҙәре теләп яҙылыусылар биш-алты кеше булып, күбеһе йәштәр ине.

Бына тағы яурынды винтовка, билде ҡылыс баҫты. Тағы ла эйәр өҫтөнә ултырылды. Мөхәмәтша, үҙ атыңды эйәрлә, тип әйтерҙәрме икән, тип уйлабыраҡ тора ине, хафаланыуы бушҡа булды. Үҙебеҙҙең башҡорт ғәскәренә бер ни ҙә йәл түгел, тип Ғарифулла бай бер өйөр йылҡыһын бүләк иткән, имеш. Шулар араһынан Мөхәмәтша бер тимер күкте һайлап эйәрләне. Иртәгеһен полк Стәрлетамаҡтың туҙанлы урамдарына килеп тулды. Хәрби кейеме булмағандарға ғәскәри кейем өләштеләр. Ғәскәрҙең аҡ-йәшел-зәңгәр төҫлө әләме лә бар икән. Ә гимнастерканың уң яҡ беләгенә ай һүрәте менән нашивка тегелде. Командир барлыҡ һалдаттарҙы теҙеп телмәр тотто:

– Егеттәр! Үҙегеҙгә мәғлүм, беҙ Петроградта булып үткән Үктәбер инҡилабынан һуң Башҡорт йөмһүриәтенең милли мөхтәриәтен иғлан иттек. Яңы властың декреттарына ҡаршы килмәй ул. Ләкин, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, беҙҙең автономияны танырға теләмәгән көстәр йоҡлап ятмай. Улар төрлөсә беҙгә аяҡ сала, хатта теләһә ниндәй сәбәптәр табып, башҡорт халҡына хаслыҡ ҡыла, талай, үлтерә. Беҙ быға сик ҡуйырға тейешбеҙ. Автономияны яҡлау – беҙҙең төп бурыс. Мин һеҙҙең барығыҙҙы ла ошо бурысты намыҫ менән үтәргә саҡырам.

Был ваҡытта Ырымбур янында аҡ казактар менән ҡыҙылгвардиясылар араһында һуғыштар бара ине. Мөхәмәтшалар полкын шунда ебәрҙеләр. Башҡорт ғәскәренең көсөн, ойошҡанлығын күрһәтеү өсөн ауылдарҙан үтергә тырыштылар. Башҡорт ауылдарында халыҡ урамға сығып, шатлыҡ-ҡыуаныстар менән ҡаршылап-оҙатып ҡалһа, урыҫ, айырыуса казак хутор-станицаларында мөнәсәбәттең тап киреһен күрһәттеләр. Улар башҡорт ғәскәренең яҡынлашыуын милли флаг елберҙәүенән үк күреп, тиҙерәк йорттарына инеп йәшеренергә ашыҡты. Иғтибарлабыраҡ ҡарағанда, уларҙың йөҙөндә тәрән борсолоу менән бергә дошманлыҡ хистәренең дә ярылып ятыуын күрергә мөмкин ине. Тап шуға күрә лә казактар башҡорт автономияһына ҡаршы сыҡты, улар үҙ дәүләтен тергеҙә ҡалһа, унда үҙҙәренә урын булмаясағын, әле биләп ятҡан ерҙәрҙең аҫаба башҡорт ерҙәре икәнлеген казактар яҡшы белә ине.

Бына алда Ырымбур ҙа күренде. Ҡасандыр башҡорт бар көсөн биреп һалдырмаҫҡа ҡаршы торған батша ҡәлғәһе. Мөхәмәтшаның уны беренсе тапҡыр күреүе ине. Ирекһеҙҙән ул Ырымбурҙы үҙе күреп үткән ҡалалар менән сағыштырҙы. Эйе, Эстәрле был ҡалаға ҡарағанда ҡайтыш, хатта күпкә ҡайтыш. Ә бына Варшау менән тиңләп ҡарағанда, Ырымбур хатта ҡала ла түгел. Ҡомло балсыҡ саңына ҡойоноп ятҡан урамдар, эшселәрҙең фәҡир кварталдарында урынлашҡан уймаҡтай тәҙрәле өйҙәр Варшауҙың таш урамдарындағы төҙ һәм таҙа, ыҡсым матур йорттары янында сүп кенә. Хатта унда-һанда ҡуҡырайып ултырған сауҙагәр, байҙарҙың таш йорттары ла, поляктарҙың баш ҡалаһы менән сағыштырғанда, төҫһөҙләнә.

Урамда халыҡ байтаҡ. Ярлы ғына кейенгән урыҫтар, әллә ҡайҙан мосолман икәнлеге күҙгә салынып торған башҡорт һәм ҡаҙаҡтар тегеләй-былай уҙып тора. Һирәкләп булһа ла, извозчик көймәһенә ултырған бай ҡатлам кешеләре лә күҙгә салына. Һуғыш бармы-юҡмы, донъя алға тәгәрәүен белә шул. Бына алда манараһы күккә олғашып, болоттарға тейерҙәй булып торған бина күренде. Ул тәпәш кенә өйҙәр уратылышында, нисектер, мөһабәт ҡиәфәт менән башҡа биналарға кәмһетеп ҡарағандай ултыра.

– Каруанһарай!– тип һоҡланды алғы сафта барғандарҙан кемдер. – Башҡорттоң

баш йорто. Башҡорт хөкүмәте шунда урынлашҡан, тиҙәр. Моғайын, беҙҙе лә шунда апараларҙыр.

Каруанһарай тураһында ишеткәне бар Мөхәмәтшаның. Был заман мөғжизәһе хаҡында йырҙар ижад ителеүен дә белә. Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, Каруанһарайҙы төҙөүгә башҡорттарҙан бихисап кеше йәлеп ителгән. Улар төҙөлөшкә үҙ аты, үҙ ризығы менән барырға тейеш булған. Бер нисә йыл дауам иткән был төҙөлөш. Күпме кеше унда арҡа һөйәген көмөрәйтеп, һаулығын ҡаҡшатҡан. Әле ҡуҡырайып ултыра ла бит был Каруанһарай. Ә үҙенең һәр еге, һәр ташында башҡорт зары, башҡорт ҡайғыһы түшәлеп ятҡанын беләме икән? Башҡорт йорто булырға тейешле, башҡорт аҡсаһына башҡорт елкәһе менән һалынған таш ҡоролмаға башҡорттоң үҙен индерҙеләрме икән?

– Ниндәй хозур, мөһабәт бит әй! – Кемдер, һоҡланыуын йәшермәй, әйтеп ҡуйҙы. – Төҙөй белгәннәр бит борон заманнарҙа!

– Кем төҙөгәнен беләһеңме? – Был һорауҙы кем ауыҙынан сыҡҡанын Мөхәмәтша аңғарманы, сөнки тауыштар артҡы сафтарҙан килә. Күрәһең, берәй уҡымышлыһы белеме менән кәпәренергә уңайлы мәл тапҡандыр.

– Нейә юкты һорайһың? Ҡайҙан беләйем мин, – тине тәүге тауыш үпкәләп. Мөхәмәтша әйләнеп ҡарамай булдыра алманы. Әрепләшеүселәрҙең береһе туры атҡа атланған, теҙгене ни өсөндөр сүстән булған һәм эйәре лә бик таушалған булып күренгән ҡыҫыҡ күҙле һәм киң битле, танауы ҡояшта еҙ батмустай ялтыраған йыуантыҡ кәүҙәле һалдат булып сыҡты. Күрәһең, белеме мәҙрәсәгә бер-ике ҡыш йөрөүҙән үтмәгән. Ә икенсеһе яҡшыраҡ атҡа атланған, йоҡа ғына тәнендә офицер мундиры. Текә ҡараш, килешле генә танау аҫтында нәҙек мыйыҡтар. Эйәге ҡыҫҡа, үҙһүҙлелеген күрһәтеп, алға сығып сәкәйгән. Ирен ситтәренә йылмайыу билдәһе йәшерелгән.

– Белмәүең бер ҙә ғәжәп түгел, – тине офицер, йылмайыуын йәшереп. – Быңдай архитектур ҡоролманы һыҙа белеү өсөн оло белем кәрәк. Брюллов тигән бик аҡыллы кешенең эше был. Сығышы менән Европанан. Фамилияһы уҡ әйтеп тора. Мәскәүҙә, Петроградта булһынмы, барлыҡ ошондай биналарҙың һыҙмаһы йә итальян, йә немецтың аҡыл хеҙмәте. Ә беҙҙең урыҫ ... – Офицерҙың теле ҡысығаны күренеп тора. Әйтергәме, юҡмы тигәндәй, бер аҙ тынып торҙо ла: – һуғышыуҙан башҡа сәнғәткә унда аҡыл да, оҫталыҡ та етеңкерәмәй, – тине.

– Сотник Карамышев! – Полк командиры Тереғоловтың көр тауышы сафтарҙағы бар тауышты күмеп китте. Күрәһең, ул һөйләшеүгә ҡолаҡ һалып килгән. – Ташла шул черегән философияңне. Синең нәрсә әйтерең безгә болай да билгеле.

– Слушаюсь, ваше благородие! – Был һүҙҙәрҙе сотник юрый ҡысҡырып әйтте. Тереғолов ниҙер әйтергә теләгәйне лә, ҡулын һелтәп, алғараҡ китеүҙе хуп күрҙе. Ғәскәриҙәр Каруанһарайға яҡынлай ине.

Туҡтарға команда булды. Полк командиры килешле генә атынан һикереп төшөп, ҡапҡа янындағы һаҡсы янына йүнәлде. Ниҙер һөйләшкәс, ҡапҡаны аса башланылар. Полк эскә үтеп инеп, теҙелде. Шул саҡ Каруанһарайҙың асыҡ тәҙрәһенән дәртле көй ағыла башланы.

– Зәки Вәлидов хәҙрәттәре сығып килә, – тигән тауышҡа Мөхәмәтша Каруанһарай ишеге яғына күҙ ташланы. Унан ысынлап та, быялалары ҡояшта ялтыраған күҙлек кейгән, френчлы тәбәнәк кенә буйлы кеше сығып килә ине. Мөхәмәтша был уҙамандың Башҡорт хөкүмәтендә хәрби бүлек мөдире вазифаһын алып барыуын ишетеп белә ине. Ҡайһы берәүҙәрҙең, Вәлидов армияла ла булмаған, "айт-два"ның ни икәнен дә белмәй, нисек итеп уны хәрби бүлек башына ҡуйҙылар икән, тип аптырашҡандарын да ишеткәйне.

Яҡыныраҡ килгәс, Вәлидиҙең сәстәре майлағандай ялтырауы, уңға таралыуы

ла күҙгә салынды. Артынан хәрби кейемдәге бер нисә кеше лә эйәргәйне. Ул киң һәм бейек болдорҙан төшмәй туҡтаны. Бер аҙ өндәшмәй торҙо.

– Әссәләмәғәләйкүм, туғандар! – тип башланы һүҙен башҡорт ғәскәренең башлығы. Сафтар яғынан яуап тарҡау булды, сөнки батша ғәскәрҙәрендә урыҫса яуап биреү ҡабул ителгәнлектән, бында нисек һаулыҡ алыу тәртибен һалдаттар белмәй ине. "Вәғәләйкүм", "Арыу әле, үҙең шәпме", "Аллаға шөкөр" кеүек тауыштар ишетелде. Вәлиди быға иғтибар итмәне. Тамағын ҡырып, бер аҙ уйланып торҙо. Телмәр тоторға әҙерләнә ине шикелле.

– Туғандар! Үҙегеҙгә мәғлүм, һуңғы йылдарҙа донъя бик боларҙы. Германия менән һуғыш бөтөүгә Рәсәй эсендә үҙ-ара һуғыш ҡубырға тора. Һәр кем үҙ йәнен, үҙ малын һаҡларға тырыша. Ҡасан ғына бер йәмәғәт булған халыҡ ҡыҙыл – аҡтарға бүленде. Ил һынау осорон кисерә. Беҙ, башҡорттар ҙа, шуның алдында торабыҙ. – Оратор бер аҙ тын ҡалып, ҡарашы менән сафтарҙы байҡап сыҡты. Әйтерһең дә, һәр кемдең эсендә ниндәй уйҙар йөрөткәнен белергә тырышты.

– Тик беҙ, башҡорттар, бәләкәй халыҡ. Беҙҙең арала бай ҙа, ярлы ла юҡ. Беҙ бары башҡорттар ғына.

– Эйе шул, Зәки хәҙрәт. Бик мәслихәт һөйләйһең, – тине кемдер алғы рәттәрҙән. – Кафырҙар менән юлыбыҙ бер түгел.

Артабан Зәки хәҙрәт башҡорт халҡының борон ошо киң сәхрәләрҙә вайран килеп ирәүәнләп йәшәүе, әммә урыҫ сәнәғәтселәренең аҡрынлап аҫаба ерҙәрҙе үҙ ҡулына эләктереүе, башҡорттарҙың ата-бабалары биләгән ерҙәрҙән көслөк менән мәхрүм ителеүе тураһында һөйләне. Был ғәҙел түгел, тине ул. Хәҙер беҙгә ана шул ерҙәрҙе ҡайтарып алыу мөмкинлеге тыуып тора. Беҙ башҡорт ғәскәрен башҡорт автономияһын яҡлау өсөн ойошторҙоҡ, шуға күрә башҡорт ерен һаҡлау – беҙҙең төп бурыс.

Тағы ла бер нисә кеше сығып һөйләгәс, таралырға рөхсәт бирелде. Зәки хәҙрәт, болдорҙан төшөп, һалдаттар янына яҡыныраҡ килде. Улар араһынан кемдәрҙелер танып, ике ҡуллап күреште. Һорауҙар бирҙе, үҙе лә яуапланы. Башҡорт ғәскәре сәрдарын күрергә була, Мөхәмәтша ла шунда яҡынланы, иғтибар менән тыңларға тырышты. Вәлидиҙән күҙен алмай тыңлап торғанда, хәҙрәт тә быны һиҙҙе һәм, Мөхәмәтша янына килеп:

– Туған, һин ҡайһы яҡтан булаһың? – тип һораны.

– Стәрлетамаҡ өйәҙе Ҡарағош волосынан, тәксир, – тип яуапланы Мөхәмәтша, тәртибен башҡаларҙыҡына оҡшатырға тырышып.

– Тыуған ауылыңдың исеме юҡмы ни? – тип йылмайҙы Зәки.

– Табылды.

– Бәй, беҙ һинең менән бер тирәнән икән. Мин Һәләүек буйынан бит. – Вәлидиҙең йөҙөндә ихласлыҡ билдәләре балҡып китте. – Күренеп тора, хәрби кейемде бөгөн генә кеймәгәнһең.

– Эйе, гирман фрунтында башынан аҙағына тиклем йөрөлдө шул, – тине Мөхәмәтша, бер аҙ күңеле күтәрелеп. Башҡалар ишетеп тора лаһа! Вәлиди Мөхәмәтшаның ҡайһы фронттарҙа һуғышыуын һораны ла, мәғәнәле итеп:

– Наградаларың да барҙыр әле, – тине.

– Эйе, Австрия фрунтында Георгиевский крест биргәйнеләр.

– Нишләп таҡманың? – Был һорауҙы Зәки хәҙрәт һынамаҡҡа бирҙе. Йәнәһе, ни тиер.

– Әлләсе, мында килешеп бөтмәйҙер, тинем. – Мөхәмәтша вайымһыҙ ғына яуапланы. – Һандыҡ төбөнә һалып ҡуйғайным. Аның белән маҡтаныр уаҡыт түгел бит.

– Хаталанаһың, һалдат, – тине Вәлиди етди итеп. – Награда ул батырлыҡ өсөн бирелә. Ул кешенең сифатын билдәләй. Тағырға кәрәк ине.

Артабан хәҙрәт һүҙҙе ҡапыл ғына икенсе темаға күсерҙе.

– Ғаиләң барҙыр. Улар нисек йәшәй? Ата-әсәң иҫәннәрме?

– Аллаға шөкөр. Дүрт улым, ике йөҙ дисәтинә еребеҙ бар. Ике ат, ике һыйыр, ваҡ мал тотабыҙ. – Мөхәмәтша бер аҙ шыттырҙы. Кеше араһында кәм-хур булғыһы килмәне.

Вәлиди Мөхәмәтшаның яурынына еңелсә һуғып хушлашты. Башҡорт ғәскәренең башлығы Мөхәмәтшала ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы. Ябай һөйләшеүе менән генә түгел, әлбиттә. Ә башҡорт күңеленең иң төбөндә ятҡан, иң нескә хистәрҙе ҡуҙғатыуы менәндер. Азатлыҡ, башҡорт азатлығы тураһында бара бит һүҙ. Мөхәмәтша ҡәнәғәт ине был осрашыуҙан. Сикһеҙ ҡәнәғәт. Бындай тойғоно өҫтөнә хәрби кейем кейгәндән бирле бер ваҡытта ла кисермәүен уйлап, йылмайып ҡуйҙы.

Полк бер нисә көндән тимер юл разъезында ҡыҙылдар менән бәрелеште. Унан-бынан ғына ҡоршалған отряд булған, күрәһең,– тегеләр шунда уҡ ҡоралдарын ташлап ҡасырға тотондолар.Ҡасмаҫлыҡмы ни, йөҙҙәренә арыҫландай ғәйрәт сығарған башҡорт яугирҙарынан. Улар бит ниндәйҙер күктәге идея өсөн түгел, ә тыуған иле өсөн алышҡа күтәрелгән. Тыуған ер өсөн көрәш ул әллә ҡайҙа сит ерҙәрҙә яуҙа йөрөгән ише түгел. Бында үҙ өйөңдө яҡлайһың, үҙ ғаиләңде, туғандарыңды. Башҡорт ерен. Бында икеләнеү йәки ҡурҡаҡлыҡҡа урын юҡ. Бында һәр ҡыуаҡ, һәр үр, соҡор – һинеке, һине яҡлай.

Әле ҡыҙылгвардеецтар, әле Ырымбур казактары менән эләгешеп йөрөгәндән һуң, 1919 йылдың башында, полк ҡыҙыл ғәскәрҙәр яғына сығырға әҙерләнде. Быны, Колчак хөкүмәте башҡорттарға автономия биреүгә ҡаршы, ә Советтар автономияны вәғәҙә итә, тип аңлаттылар.

… Февралдең сасҡау һалҡынында ҡалын ҡар кисеп килгән башҡорт полкы Урал аръяғы ауылдарының береһендә ҡыҙылдарҙың алдынғы отряды менән осрашты. Баштан-аяҡ күндән кейенгән, ҙур кәүҙәле һәм оло башлы, ерән сәстәре папахаһынан бүҫелеп сығып торған, биленә ҙур маузер аҫҡан берәү полк командиры:

– По приказу Башревкома первый башкирский полк переходит в распоряжение защитников революции, – тигәс:

– А-а, мятежники, контры, – тип мәғәнәле генә итеп һуҙҙы. Үҙе ҡулы менән маузер кобураһына үрелде. – Хәҙер мине тыңлағыҙ, ҡоралдарығыҙҙы һалығыҙ!

Полкта бындай хәлде көтмәгәйнеләр. Сафтар буйлап борсоулы һүҙҙәр ишетелде:

– Ҡоралды тапшырырға ҡушамы шул?

– Ниңә беҙҙе дошман тип беләме икән?

– Биреп ҡуйған ҡоралың барҙыр...

– Тот күкәйеңде!

– Ни мығырлайһығыҙ унда, таҡыр баштар?! – Ерән әҙәм тиҙ генә маузерын тартып сығарҙы ла һауаға атып ебәрҙе. – Ҡоралдарығыҙҙы тиҙ генә тапшырығыҙ! Кем буйһонмай, хәҙер үк атып йығам. Ну, живо! – Уның ҡан һауған күҙҙәре атылып сығырҙай булып аҡайҙы.

Шунан башланды мәшхәр. Ҡыҙыл һалдаттар, килеп, ҡоралдарҙы тартҡылай башланы. Кемдер, яман һүгенеп, атып ебәрҙе. Китте көрмәкләшеү. Мылтығын һаман да яурынынан төшөрмәгән Мөхәмәтша янына бер бәләкәй генә буйлы һалдат әтәсләнеп килде лә сыйылдаҡ тауыш менән:

– Бир әле бында винтовкаңды, – тине.

– Бирмәйем! – тине Мөхәмәтша ҡаты итеп һәм тегене этеп ебәрҙе. Ҡыҙыл һалдат винтовка прикладары менән һелтәнә башлағайны, Мөхәмәтша тегене ауҙара һуҡты ла ҡуйҙы. Шул саҡ атыу тауышы яңғыраны. Мөхәмәтша абайлап ҡараһа, атыусы теге көн кейемле кеше булып сыҡты. Мөхәмәтшаға төбәп атһа ла, тейҙерә алмаған икән. Мөхәмәтша ла яурынынан винтовкаһын ала башлағайны, берәү:

– А ну, отставить! Самосудҡа юл ҡуймам! – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Был ҡыҙылдарҙың комиссары икән.

Мөхәмәтшаны, тағы ла бер нисә башҡортто кемдеңдер мунсаһына бикләп, һаҡ ҡуйҙылар. Төнгө һалҡындан ҡалтырап, йоҡлай алмай интеккән һалдаттарҙы ҡапыл ҡупҡан атыу тауыштары һиҫкәндереп ебәрҙе. Тышта ҡысҡырыштылар, һүгенделәр:

– Басурманы наступают! Давай быстрее отходить!

– Ах, ты контр!

– Инәһен! Емерә һуҡ моронон!

Бер аҙҙан атыу тауыштары йырағайҙы. Мунса эсендәгеләр, тышта башҡортса һөйләшкәндәрен ишетеп, тәҙрәне дөбөрҙәтте. Ҡарҙы шығырҙатып, кемдер килде лә бик ҡаты итеп ишеккә типкәйне, уныһы тотошлай эске яҡҡа ауып төштө.

– Ә-ә краснозадые, выходи. Сыҡ әйҙә, – тип көлдө кемдер.

Ауылды ҡыҙылдар яғына сығыуҙан баш тартҡан өсөнсө башҡорт полкы килеп баҫҡан икән.

– Нимә эштәп йөрөйһөгөҙ шул аламағолоштар янында? – тине мунсанан сығарған һалдат. – Әҙәм талаусы бит улар. – Мөхәмәтша өндәшмәне. Башы тамам буталғайны уның. Аҡтар яғында йөрөгән бер нисә ай өсөн шундай үс алырҙар, тип бер кем дә башына килтермәгәйне. Эйе, бер ҡатлылыҡҡа барып, аҡтар яғында булһалар, аҫабалыҡ һаҡлап ҡалыныр, тигән уй менән йөрөгән башҡорттарҙы ҡыҙыл командование һуғыштың иң ауыр урындарына ташланы. Украинала петлюрасылар менән яғалашыу, унан Совнарком рәйесе В. Ленин саҡырыуы буйынса Петроградты аҡ генерал Н. Юденич һөжүменән һаҡлау... Сая, ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәгән башҡорт егеттәре был алыштарҙа бихисап шәһит китте. Артабан Польша фронтында ла ҡатнашырға тура килде башҡорттарға. Ас-яланғас килеш, баштан-аяҡ Антанта ҡоралын тотҡан поляктар менән алыштылар.

Бында ғына бөтмәне михнәттәр. Ахыр сиктә Совет Рәсәйенең һуңғы дошманы Врангелде Ҡара диңгеҙгә ырғытыуға ла башҡорттарҙы саҡырҙылар. Граждандар һуғышы, шулай итеп, Ҡырымда тамамланды. Иҫән ҡалды был мәшхәрҙә Мөхәмәтша – тыуған ауылын ҡайтып күреү бәхетенә иреште.

Ҡайғы-михнәт Мөхәмәтшаны күрер күҙгә салынып бармаған фронтта, Граждандар һуғышында ғына һағаламаған икән, ә өйөндә лә көтөп торған. Ҡайтып төшөү менән оло улы Нәҙелшаның ун ете йәшендә генә гүр эйәһе булыуы хаҡындағы хәбәр Мөхәмәтшаның һушын алды. Ата-әсә өсөн бала үлеменән дә ҡатыраҡ ҡайғы бармы донъя йөҙөндә? Тәбиғәт был фани донъяны шулай яратҡан: һәр нәмәнең үҙ ваҡыты. Шул мәл етмәҫ, билдәле бер миҙгел уҙмаҫ элек, япраҡ та ағасынан өҙөлөп төшмәй. Ағас тере икән, япраҡ та йәм-йәшел. Ағасы ҡороу менән япраҡтар ҙа юҡҡа сыға. Әҙәм балаһы, имеш, улай түгел. Һәр хәлдә баланың, үҙен тыуҙырған ата-әсәнән иртәрәк яҡты донъя менән хушлашырға мәжбүр ителеүе бер ҡанунға ла һыймай. Өйҙәгеләр һөйләгәндәрҙән Мөхәмәтша шуны белде.

...Башҡорт ғәскәренә алыныусылар сығып китеүҙең иртәгеһенә ауылға

Раевка яғынан ҡораллы отряд ябырыла. Күп булмай улар: ун бишләп башкиҫәр. Фуражкаларына арҡыры бәйләнгән таҫмаларына ҡарап, ҡыҙылдар икәнен белгәндәр. Араларында Ғилман менән Шәңгәрәй ҙә булған.

Отряд башлығы емерек ҡарашлы, урттары эскә батҡан, өҫтөндәге күн курткаһы аша ла һөйәктәре беленеп торған, янтауына оло маузер аҫҡан Косолапов тигән бәндә халыҡты йыйырға бойорған. Кемдер үҙ ихтыяры менән килә, икенселәрен майҙанға ҡыуалап килтерәләр. Косолапов үҙен бик тәкәббер тота. Атынан төшмәй генә, йыйылған халыҡ өҫтөнән һөҙөп ҡарап сыға ла:

– Һеҙгә Совет власы исеменән 20 мең һум контрибуция һалам. Бөгөн үк йыйып бирегеҙ. Әгәр ҙә ошо талап үтәлмәһә, ғәйеплеләрҙе революция закондары буйынса язалаясаҡбыҙ, – тип белдерә.

Халыҡ араһында шау-шыу китә.

– Егерме мең һум, тиме? Беҙгә андай аҡса ҡайҙан килһен?!

– Кантрибусия һалырға ни хаҡың бар, мәлғүн?

– Ниндәй эрвәлүтсә закуны ул!? Ниндәй ғәйеп?

Халыҡтың умарта күселәй ҡуҙғып китеүен күреп, Косолапов маузерына үреләә. Атыу тауышы яңғырай.

– Молчать! – тип аҡыра отряд башлығы. – Приказ бөгөн үк үтәлергә тейеш. Уны мин бирмәйем, ул – революция бойороғо. Һеҙ, башҡорттар, быуаттар буйы урыҫ крәҫтиәне йөҙөндә, пролетариат елкәһендә паразитлыҡ иттегеҙ. Йәнәһе, ер хужалары! Совет власы һеҙҙең хужа булып йөрөүегеҙҙе бөтөрҙө. Ишеттегеҙме, бөтөрҙө! Хәҙер ер крәҫтиәндеке. Урыҫ крәҫтиәненеке, ә һеҙҙеке түгел. Ә һеҙҙе беҙ ҡырып бөтөрәсәкбеҙ!

– Нисек, ер беҙҙеке түгел? Ул ғүмер буйы башҡорттоҡо булған. –Төркөм уртаһынан тороп ҡысҡырған Рамазан алға сыға бирҙе. – Һинән былайыраҡтар тартып алалмаған башҡорт ерен! Шулаймы, йәмәғәт?

Косолапов уға һөйләп бөтөргә ирек бирмәне. Асыуҙан йөҙө салышайып, ул маузерын һөйрәп сығарҙы ла Рамазанға тоҫҡап атып ебәрҙе. Рамазан шунда уҡ ергә йығылды, пуля уның маңлайына инеп ултырғайны. Халыҡ ҡысҡыра-ҡысҡыра төрлө яҡҡа һибелде. Бандиттар, өйҙән өйгә йөрөп, кеше таларға тотондо.

Ғилман отряд башлығы һөйләгәндәрҙе уртын сәйнәп тыңланы.

– Бына һиңә кәрәкһә Совет власы! Уны бит, ярлылар өсөн, тинеләр. Ә ул, тотош башҡорт халҡына дошман, имеш. Косолапов шулай ти бит. Ниндәй кешене, Рамазанды юҡ итте. Табылды ауылының иң уҡымышлы, тимәк, иң аҡыллы кешеһен! Ниндәй бай булһын ул?! Урта хәлле крәҫтиән тип тә әйтеп булмай бит уны. Контрибуцияны ла Косолапов байларға түгел, ә бөтә ауыл халҡына һалды. Барыһы ла түләргә тейеш килеп сыға. Был – талау!

Ғилмандың ошо минутта уҡ кеҫәһенән наганын сығарып, Косолаповты атып йыҡҡыһы килде. Әммә нимәлер тыйҙы. Бер кешене үлтереү менән генә был бандиттар өйөрөн тыйып булмаҫ. Үҙеңде ошонда уҡ атып йығырҙар. Яйы сығыр әле. Түҙергә кәрәк, түҙергә...

Уның иҫе буталды. Ғәрләнде лә, үкенде лә. Шулай ҙа, әмергә буйһоноп, тегеләр артынан эйәрҙе. Ауылдаштарының нәфрәтле ҡарашын күрмәҫкә тырышты. Шәңгәрәй Косолапов менән бер нисә кешене эйәртеп, туп-тура Әфтәх бай йортона алып килгән. Күрәһең, бай менән ниндәйҙер дәрәжәлә иҫәп-хисап яһарға булған уйы. Бәхетһеҙлеккә күрә, байҙың өйҙә сағын тап иткәндәр. Ят кешеләрҙе болдорға сығып ҡаршы алған Әфтәхкә төртөп, Шәңгәрәй:

– Ҡан эскес Әфтәх бай ошо була инде. Мин, ана, дүрт йыл бил бөктөм, – тигән. Раевкала ғына түгел, тирә-йүндә башкиҫәрлеге менән дан ҡаҙанған Косолапов, атынан төшмәй генә:

– Кысплататыр, яҡынраҡ кил! Һуңғы сәғәтең һуҡты. Дөрөҫ әйтәмме? – тип Косолапов һары тештәрен ыржайтып, иптәштәренә ҡарап көлгән. – Теләһәм, ошонда дөмөктөрәм, теләһәм… – Байҙың күҙендә ҡурҡыу сатҡылары сағылып китеүен күреп: – Ярай, бөгөн мин яман уйҙа түгел. Йәшә. Тик, беҙҙең Совет власына ҡул күтәрһәң, мин һине бет урынына һытасаҡмын,– ти ҙә Әфтәхкә байлығын үҙ ихтыяры менән бирергә ҡуша.

Шәңгәрәйҙең, күрәһең, үҙ хәстәре. Ул Косолапов янына килеп, тегенең салғыйынан тарта:

– Герасим, һора әле, малайлары ҡайҙа икән?

Әфтәх байҙың оло улы Фәтих был ваҡытта Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте тирәһендә эшләп йөрөһә, кесеһе Фәттәх башҡорт полкына үҙ ирке менән яҙылып, Мөхәмәтшалар менән киткәйне. Билдәле, бай тураһын әйтергә теләмәне.

– У них своя донья. Ни знай,– тине.

Шәңгәрәйҙең тағы ла ниҙер әйтергә уҡталғанын күреп, эстән генә ауылдаштарын урыҫтарҙың кәмһетеп торғанына асыуы ҡабарған Ғилман һиҙҙермәй генә уның ҡабырғаһына төрттө: «Артығын һөйләнмә!»

Байҙың өйөндә ашап-эсеп, мунса инеп, кискә табан тамам иҫерешкән бандиттар өй хужаһының ике йәш киленен мунсаға индереп мәсхәрә итә. Иртәгеһен килендәрҙең үле кәүҙәләрен аҙбар артынан табалар. Бер аҙна ла үтмәй, был яман хәлде ишетеп, Ырымбурҙан унлап башҡорт һалдаты оҙатыуында Фәтих ҡайтып төшә лә ҡыҙған баштан Раевканы барып туҙҙыра. Теге бандиттарҙың икеһен– Игнат менән Федотты тоталар ҙа Табылдыға алып килеп, бар халыҡ алдында кейемдәрен систереп, бағанаға бәйләп ҡуялар. Теләгән кеше килеп биттәренә төкөрөп китһен, йәнәһе. Әммә был мәхлүҡтәрҙе бер-ике кешенән башҡа мәсхәрә итергә теләүсе табылмай. Һуңынан икеһенең дә йән ерҙәрен киҫеп, ауыҙҙарына тығалар ҙа баштарын сабып өҙәләр.

Был ҡот осҡос хәбәр тиҙ арала тирә-яҡты урап сыға. Урыҫ-муҡшынан бер нисә кеше, ҡоралланып, Табылдыға үс алырға килергә лә йыйына. Әммә аранан береһенең башына уй килә: башлап кем ҡул күтәргән? Көсләүсе-талаусылар бит. Башҡорттар артығын ҡыланған да, хәҙер ни хәл итмәк кәрәк.

Ғарифулла байҙың ихатаһына ла унлап ҡыҙыл бандит эркелешеп килеп инә. Намаҙлыҡ өҫтөндә ултырған байҙың үҙен ишек алдына сығарып, тубыҡландыралар.

– Ты, собачий сын! Нишләп башҡорттарға бөтә йылҡы көтөүеңде бирҙең? – тип ҡысҡыра күҙҙәре аларған берәү. Ғарифулла бай былай ҙа ҡыйыу кеше, бер ҙә аптырап ҡалмай.

– Минең атларҙа һинең ни эшең бар, кафыр, – ти икән. – Бирҙем шул. Мына, һеҙҙең ише кафырлар беҙҙең арала йөрөмәһен өсөн бирҙем.

Теге муҡшы асыуынан күҙе аларып, наганын һөйрәп сығарған да, байҙың маңлайына терәп:

– Улың ҡайҙа? Беҙгә ҡаршы һуғышамы? – тип аҡырған.

– Минең улым башҡорт автономияһы өсөн һеҙҙең кеүек кафырлар менән һуғыша, – тип ғорур яуап ҡайтарған Ғарифулла. – Муйыныңды бороорлар әле, күп ҡотора алмаҫһың.

– Ах, ты, басурман. Таҡыр баш! Бына һиңә автономия! – тип теге бандит тәтегә баҫҡан. Пуля байҙың маңлайынан инеп, елкәһенән килеп сыҡҡан да үләнгә тәгәрәгән.

Ауылда халыҡтың төрлөһө була бит. Башҡорт ғәскәренә кемдәрҙең китеүен берәйһе әйтеп һалған, ахырыһы. Урыҫтарҙың ҡото осҡан, башҡорттар милли автономия яулап алһа, әле Советтар биргән ерҙән ҡолаҡ ҡағырға тура киләсәк.

Ошо уй уларҙы бергә туплай, хатта ярлыларын да. Башҡорт ғәскәренә китеүселәр араһынан Мөхәмәтшаны ла атағандар. Уларҙың ихатаһына шаулашып килеп ингән ике бандиттың береһе ишеккә, икенсеһе туп-тура аҙбар яғына атлай. Унда бәйле торған саптарҙы күреп, етәкләп алып сыға башлағас, өйҙән Нәҙелша атылып килеп сыға ла:

– Теймәгеҙ атҡа! – тип теҙгенгә сат йәбешә. Ҡаҡса оҙон буйлы, йөҙөндә миһырбанлыҡтың әҫәре лә күренмәгән Борисовка муҡшыһы, Кондрашов, малайға ҡамсы менән һелтәнә:

– Кит бынан, молокосос! Йәшәүҙән туйҙыңмы әллә?

Урамдан үтеп барған Ғилман, был хәлде күреп, ихатаға килеп инә лә бәхәскә ҡыҫыла.

– Подожди, Никандр, – ти ул, Кондрашовтың терһәгенән эләктереп алып. – Атка теймә, мында байлар юҡ.

Кондрашов бер аҙ албырғап ҡала. Нәҙелша тиҙ генә теҙгенде ҡулына эләктерә лә атты аҙбар яғына алып китә башлай.

– Не позволю! – Бер ни тиклем албырғап ҡалған Кондрашов ҡысҡырып ебәрә. – Атты беҙ Совет власы исеменән тартып алабыҙ.

Нәҙелша менән көрмәкләшергә тотонған Кондрашовты Ғилман һыңар ҡулы менән айырып ала ла:

– Ебәр атты, ул фронтовиктыҡы,– тип ныҡыша.

Быларҙың әрепләшкәнен күҙәтеп ни эшләргә белмәй торған икенсеһе – Раевка хохолы Устенко, Ғилмандың үҙҙәренә ҡаршы барыуын һиҙеп, винтовкаһын ала ла уға тоҫҡай.

– Ғилман бабай! Ана, урыҫ һиңә атырға итә, – тип Нәҙелша ҡысҡырмаһа, бәлки, Ғилман шунда уҡ теге донъяға китеп тә барыр ине. Ғилманға тигән патрон Нәҙелшаға табан оса. Ғилман да йылғыр булып сыға, тиҙ генә ҡылысын һурып сығара ла Устенконың муйынын ҡыялата саба. Икенсеһененең эшен ҡайҙандыр килеп еткән Шәңгәрәй "бөтөрә".

– Эх, һин, Шәңгәрәй. Һиңә ышанып, Райыфкаға бармаһам, мин был хурлыҡҡа төшмәҫ инем, – тип рәнйей Ғилман. – Күрәләтә үҙебеҙҙекеләрҙе үтереүҙә ҡатнаштым.

Ауылда былай ҙа тыныс булмағас, Мөхәмәтшалар ихатаһындағы мылтыҡ тауышы, күрәһең, ҡыҙылдарға ишетелмәй. Өйҙән сыр-сыу килеп сыҡҡан Өммөгөлсөм, өс малайы менән, ҡанһырап ятҡан Нәҙелша янына килгән. Пуля үпкәһен тишеп үткәнлектән, малай тын алған һайын ауыҙынан ҡан килгән. Ярты сәғәт йәшәү менән үлем араһында ятҡан Нәҙелша, унан хәлһеҙләнеп, күҙҙәрен йомған.

– Ғилман абзый! Нишләнең һин?! – Шәңгәрәй әллә ҡурҡышынан, әллә аптырауҙан ҙур булып асылған күҙҙәрен уға төбәй. – Хәҙер икебеҙҙең дә йәнде йәһәннәмгә ебәрәләр ҙә баһа.

– Ебәрмәй торһоннар. Ҡуллары ҡыҫҡа. – Ғилмандың һәр һүҙе ҡыҫҡа, өҙөкөҙөк яңғырай. – Яман шашты был килмешәктәр. Хәҙер үҙ ауылыбыҙға килеп үтерә башланылар. Иҫән саҡта мин быңа юл ҡуймам!

Ғилман винтовкаһын Әхмәтшаға тотторҙо ла:

– Әйҙә, лутсы был имгәкләрҙе берәй яры урыннаштырып ҡуяйыҡ. Кешефәлән күрмәҫ борон, – тине.

Теге әҙәм талаусыларҙы аҙбар артындағы соҡорға илтеп ташлап, өҫтәренә сүп өйәләр ҙә, Ғилман менән Шәңгәрәй:

– Төннә килеп, берәй ергә алып барып ташларбыҙ, – тип арт яҡтан Ерекле йылға яғына сабып сығып китәләр. Теге ике башкиҫәрҙең дә аттарын да үҙҙәре менән етәкләп алалар.

Байтаҡ мөлкәт талап, уны ауылдан алынған ылауҙарға тейәгәс, бандиттар Табылды осона сыҡты. Косолапов дүрт кешенең юҡлығын күреп ҡалды.

– Где они? Идите, ищите! – тип ул бер нисә кешеһен юғалғандарҙы эҙләргә ебәрә. Ләкин береһен дә таба алмайҙар. Әйләнеп килгәндәрҙең береһе:

– Бер ҡарсыҡ дүрт һыбайлының арт яҡлап Ҡарамалы яғына сабып киткәнен күргән, – ти.

– Ниндәй ҡарсыҡ? Килтерегеҙ әле үҙен бында! – тип әмер бирә Косолапов. Эткеләй-төркөләй, кейеме саңға буялған Фәхернисаны килтерәләр. Арҡаһына ҡамсы менән һуҡҡан өсөн ене ҡабарған был ҡатын бер ни аңламай:

– Мында һин иң башымы? Әйт кафырларыңа, миңә теймәһеннәр, – тип ҡысҡыра.

– Һиңә берәү ҙә теймәй, – ти Косолапов. – Һин ысынлап та дүрт һыбайлының Ҡарамалы яғына сапҡанын күрҙеңме?

– Ней ти был урыҫ? Бер ни ҙә аңнамайым. – Фәхерниса урыҫса бер ауыҙ һүҙ белмәй. Кемдер тәржемә иткәс, ҡатындың йөҙө яҡтырып китә:

– Шул ғынамы ни? Эйе, күрҙем шул. Бер-ике сәғәт элек Мөхәмәтшалар тапҡы-рынан дүрт һыбайлы түмәләс үренә менеп китте.

– Кемдәр ине улар? Таныныңмы? – Косолапов түҙемһеҙләнә.

– Урыҫты ҡайҙан танийым. Юҡ, йыраҡ та ине.

Косолапов Мөхәмәтшалар өйөнә үҙе бара. Ишек алдына Өммөгөсөмдө төрт-көләп килтереп сығаралар. Бәхеткә күрә, малайҙары өйҙә булмай.

– Ҡайҙа беҙҙең кешеләр? Әйт!

– Ә? – Өммөгөлсөм дә урыҫса аңламай. Төшөндөргәс:

– Эйе, урамға ике һалдат кергәйне. Атыбыҙҙы алдылар ҙа артҡы яҡтан сығып киттеләр, – тип ҡатын Ғилман өйрәтеп ҡуйған һүҙҙәрҙе ҡабатлай.

– Алдайһың! – тип ҡысҡыра бандит. – Бер-икене һуҡһаҡ тегеләй. – Өммөгөлсөм ҡурҡһа ла:

– Ҡамсы һуғыу түгел, аҫып ҡуйһаң да, шулай булғас, ни тием һуң? – тип яуап-лай. Косолапов бер аҙ елкәһен тырнап тора ла ҡуҙғалырға әмер бирә.

Ғилман менән Шәңгәрәй көндө Ерекле йылға шырлығында йәшенеп уҙғара ла төнөн теге ике башкиҫәрҙе ат ҡойроғона тағып алып китә. Күрше Әлимғужа ауылынан биш-алты ышаныслы ирҙе эйәртеп, Ғилман шул уҡ төндө Косолапов отряды туҡтаған Ҡараяр ауылына килә. Командирҙың ҡайһы өйҙә туҡталғанын асыҡлағас, шым ғына килеп һаҡсыны бөтөрәләр ҙә өй эсенә атылалар. Косолапов тәрән йоҡоға талған була, шуға күрә ҡораллы ҡаршылыҡ күрһәтергә өлгөрмәй. Уның аяҡ-ҡулын бәйләп, ауыҙына сепрәк тығалар ҙа ауылдан ситкә алып сығалар. Үҙенә һөжүм итеүсенең Ғилман икәнен күреп, Косолапов тәүҙә аптырай төшә:

– Переметнулся? – ти ул, күҙҙәрен зәһәр йылтыратып. – Вы, башкиры, все одним миром мазаны. Жаль, что я тебе доверился. Расстрелять надо было.

Косолаповты шундағы өйәңкегә аҫып китәләр. Был ваҡиғанан һуң Ғилман туп-тура Ырымбурға китеп, башҡорт ғәскәренә ҡушыла. Артабан ҡыҙылдар яғына сығалар. Башҡаса ауылда уны күреүсе булмай. Бер нисә йыл үткәс кенә оҙон ҡолаҡтар аша Ғилмандың ҡыҙылдар яғында һуғышып йөрөп, Польша фронтында үлеп ҡалыуы билдәле була. Ә Шәңгәрәйҙең башына Фәтих етә. Атаһын мыҫҡыл иткәндән һуң Фәтих Шәңгәрәйҙән үс алырға ант итә һәм уны бойомға ашыра.

Кешенең холоҡ-фиғелдәре, кемдәр менән аралашыуына бәйле икәнлеген һәр кем белә. Тик икенсе, күҙгә күренеп-бәрелеп тормаған яҡтары ла бар икән.

Крәҫтиән, бәләкәйҙән төпкә егелеп эшләгән кеше, яҙмыш уны ниндәй сүрәттәргә индереп ҡарамаһын, барыбер крәҫтиәнлеген итә. Нисәмә йылдар ат өҫтөндә ҡорал аҫып йөрөп, бураҙнаның, мал-ҡураның ни икәнлеген оноторға тейеш булһа ла, крәҫтиән булмышы Мөхәмәтшаны бер ҡасан да үҙенән азат итмәне. Күңеле менән ул һәр саҡ тыуған йортонда, Ҡоро Күндерәк, Тажит, Ҡара тал соҡоро буйҙарында булды. Төштәренә арыш урағы, өйөндә балалар менән бергә сәй эсеп ултырыу инде. Һуғыштың ваҡытлысалығын һәр кем белә. Түҙемһеҙлек менән уның тамамланыуын көтә.

Ә ул һуҙылды ла һуҙылды. Әле ҡырҡты тултырмаһа ла, сәстәргә сал ҡунды. Ике яңаҡ буйлап түбәнгә табан йыйырсыҡтар ятты. Электән йомшаҡ күңелле, кешеләргә игелек кенә ҡылып өйрәнгән Мөхәмәтшаның ныҡ үҙгәреш кисергән булмышы күңеле ине. Ул йәлләү тигән тойғонан азат була барҙы. Кеше үлтереү һуғыштың төп маҡсаты шул. Дөрөҫөрәге, дошманыңды юҡ итеү. Ә дошмандың төрлөһө була бит. Яңылышлыҡ менән шул юлға баҫҡандары.

Беҙ байҙар властын ҡыйраттыҡ, хәҙер барыһына ла үҙебеҙ хужа, тип әйтә ала кеүек ине Мөхәмәтша. Ә уйлап ҡараһаң, байҙың ни ғәйебе? Мәҫәлән, Ғарифулланың донъяһы Мөхәмәтша белә-белгәне бирле ишле булды. Уны бер нисек тә ҡан эскес тип әйтергә тел бармай, һәм әйтмәнеләр ҙә. Эйе, байға эшләнеләр, кемдер тамаҡ байына ла эшләне. Тик бай бер кемде лә бушҡа эшләтмәне бит. Уны ҡан эскес, эксплуататорға һанап, өйөнән ҡыуҙылар. Һуңынан беленде: Ғарифулла ҡарт Урал аръяғына һөрөлөп, шунда аслы-туҡлы урман ҡырҡыуҙа йөрөп үлеп ҡалған. Бына бит донъя нисек!

Эйе, донъя үҙебеҙҙеке, тимәк, Мөхәмәтшаға ла күптәнге хыялын ғәмәлгә ашырыу форсаты сыға ла баһа. Нисек ул был хаҡта элегерәк уйламаған! Дәртләнеп китте Мөхәмәтша, ошо хаҡта кәңәшләшеү өсөн ауыл Советына барып әйләнергә ҡарар итте. Ниңә тотонмаҫҡа, өс улы үҫеп килә. Әхмәтша быйыл ун алтыһын тултырҙы. Сафа – ун дүртен, Фәруҡшаға – туғыҙ йәш. Был малайҙар менән тау күсереп була. Ауыл Советы Ғарифулла байҙың өйөн төйәк иткән. Бейек күтәрмәле, ҡалай башлы, өс тәҙрәһе ҡояш яғына ҡараған матур Әүжән яҡтарынан ҡайтарылған ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған был йортта булғаны бар Мөхәмәтшаның. Йомартлығы менән айырылып тормаһа ла, кешегә мәрхәмәтле ине бай. Ҡорбан, Ураҙа байрамдарында мал һуйып, ауылдаштарын итле ашҡа саҡырыр булды. Өй эсендә элекке затлы келәм, ҡорғандар, ҡиммәтле мебель, йомшаҡ ҡәнәфиҙәрҙең береһе лә ҡалмаған. Тик ҡола яландай киң өйҙөң уртаһында ултырған һырлап эшләнгән тояҡлы ҙур өҫтәл менән шуның кеүек ултырғыстар ғына уларҙың бай мөлкәтенән икәнлеген күрһәтеп тора. Өҫтәл артында ҡағыҙға текәлеп ябыҡ йөҙлө берәү ултыра. Башындағы иҫкереп бөткән малахайын да һалмаған. Өҫтөндә Мөхәмәтшаныҡы кеүек күпте күргән гимнастерка. Һул яҡта сөйҙә кемдәр генә яурынын йылытмаған шинель эленгән. Йыуылмаған иҙәндә бысраҡ аяҡ эҙҙәре ярылып ята.

– Әссәләмәғәләйкүм, – тине Мөхәмәтша, сәләм биреп, – инергә ярай торғандыр?

Әҙәп һаҡлап, ул ишек төбөндә туҡталып ҡалды. Икенсе яҡтан урындағы властың үҙен нисек ҡаршы алыуын да белергә теләү көслө ине.

Ауыл Советы рәйесе булып Ҡорбанғәле Мәжитов эшләгәнен Мөхәмәтша ҡатынынан ишеткәйне. Ҡорбанды Мөхәмәтша, бигүк яҡшы булмаһа ла, белә. Атаһы Ишғәле ғүмер буйы Стәрле яҡтарында зимагорлыҡта йөрөнө. Яр буйында ергә соҡоп эшләнгән землянкала йәшәнеләр. Был өйҙә балалар тыуа торҙо, үлә торҙо. Өҫтәре кейемгә, тамаҡтары ашҡа туйманы.

Ишетеүенсә, Ҡорбан Герман һуғышына алынманы. Ә бына ҡыҙылдар яғында

бер аҙ йөрөгән, тинеләр. Стәрлетамаҡ тирәһендә һуғыштарҙа ҡатнашҡан шикелле. Ҡайтҡас, уны, ауылдың иң пролетар кешеһенә һанап, рәйес итеп ҡуйғандар. Мөхәмәтшаның һаулыҡ һорашыуына Ҡорбан башын теләр-теләмәҫ кенә күтәреп яуапланы:

– Арыу ғына. – Уҙ ҙа, ултыр ҙа тимәне.

Мөхәмәтша эре аҙымдар менән өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа килеп урынлашты. Ул да ошо власть өсөн көс түкте бит.

– Ни йомош, Мөхәмәтша абзый? – Мәжитов башын ҡалҡытып, уға төбәлде. Ҡараштарына, үҙенсә, суйын ауырлығы һалырға тырышҡандыр инде, тишә ҡараны. – Берәй нәмә һорарға килгәнһеңдер инде. Ауылда шул теләнергә генә беләләр. Алдан әйтәм, миндә бер нәмә лә юҡ.

Ҡорбандың иртә менән кәйефе баш түбән килеп тороуын күргәс, Мөхәмәтша боролоп сығып китергә уйлағайны ла, был ҡыйыуһыҙлыҡты дыуамалыраҡ икенсе уй ҡыуып ебәрҙе: "Ҡорбан тиҫкәре булғанға ғына йомошто йомошламай китеп булмай инде”.

– Мин һоранырға килмәнем, Ҡорбан, – тине ул бер аҙҙан. — Һин влас бит, һораһам да, – Мөхәмәтша ауыр ҡарашын Мәжитовтың йөҙөнә төшөрҙө һәм бер аҙ ҡарап торҙо, – хаҡым бар.

"Башҡорт түрә булһа, сабатаһын түргә элә", тиеүҙәре ошолор инде, тигән уй йүгереп үтте башынан. Ә үҙе ике күҙе менән рәйестең ҡиәфәтен барлай ине. Киң гимнастерка, башҡа кешенең иңенән алынған кеүек, Мәжитовтың нәҙек муйынлы тәнендә тоҡтай һалынып тора, үтмәҫ бәке менән ҡырылған һаҡалмыйығынан унда-һанда төктәр ҡалған. Ябыҡ йөҙөндә яңаҡ һөйәктәре тағы ла нығыраҡ ҡалҡҡан, ә ҡырлы танау тиреһе йыртылырҙай булып тартылған. Күҙҙәре төптән һалҡын ҡарай. Йоҡа ирендәр, хужаһының усаллығына ишара яһап, ныҡ итеп ҡыҫылған.

– Кәңәшләшергә ине, Ҡорбан туған, – тип дауам итте Мөхәмәтша, тауышын мөмкин тиклем мөләйемерәк сығарырға тырышып. – Үҙең беләһең, гирман һуғышына киткәне бирле ҡулдың мылтыҡ-ҡылыстан башҡа нәмә тотҡаны ла юҡ. Беҙ бит крәҫтиәннәр. Нисек ти әле сәүит? Беҙ донъяны туйындырырға тейеш, тиме? Әлхәмделиллә, донъялар тынысланды кеүек. Ҙур эшкә тотонорға уйлап торола әле...

Мөхәмәтша бер аҙ тынып торҙо. Үҙенең күҙҙәре һаман да Мәжитовта. Теге лә йомшара төштө, ҡарашына йылылыҡ ҡайтып, эскә батҡан күҙҙәре бер аҙ күтәрелә төшкән кеүек.

– Күп уйланым да Яңғыҙ сағыл битләүенә өй һалырға булдым, – тине Мөхәмәтша. – Бер кемдән дә ярҙам һорамайым. Улларым үҫеп етте. Рөхсәт булырмы икән, тим.

Һуңғы һүҙҙәр ауыл Советы рәйесенә үгеҙгә ҡыҙыл сепрәк күрһәткән ише тәьҫир итте. Тәүҙә уның ҡаштары дуғаланды, унан күҙҙәре ҙурая башланы, ә ҡырлас танауы тағы ла алғараҡ сыҡҡандай булды. Ирендәре, бөгөлөп, йәмһеҙ итеп ҡыйшайҙы.

– Ә-ә, бына һин ни тураһында! Кулак булғың килде инде? – Мәжитовтың тауышы ҡапыл күтәрелеп китте. – Һин кемгә килдең? Рөхсәт кәрәкме? Юҡ! Совет власы частный собственносты бөтөрөү яғында. Ә һин ер һорап йөрөйһөң! Юҡ!

Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә рәйес тороп уҡ китте. Ишекле-түрле йөрөп алды.

– Туҡта әле, Ҡорбан. – Мөхәмәтша уны тынысландырырға тырышты. – Мин һиңә ниндәй яманлыҡ ҡылған – әйтеп һөйләш. Яңғыҙ сағыл буйы ҡылған үҫтереп, буш ята лабаһа. Аны эшкәртеп ашлыҡ сәсеү, мал көтөү яҙыҡ эшме ни?

Мәжитов шәп итеп атлап Мөхәмәтша алдына төртөп йығырҙай булып килеп баҫты.

– Ярамай! – тип ҡысҡырҙы. Был ғына уның асыуын баҫа алманы, ахырыһы.

Ике ҡулы менән дә Мөхәмәтшаның гимнастеркаһына йәбеште. – Ярамай, Совет власы ҡушмай. Беҙ бында камуна, артил ойошторорға йөрөйбөҙ, ә һиңә утар кәрәк булған. Кулак булғың килә инде? Контр!

Ошоноң менән һөйләшеү тамам тигәндәй, рәйес өҫтәле артына барып ултырҙы.

– Рөхсәт итмәйһең икән, мин һинән һорап тормайым. Иртәгә үк тотонам. – Шулай тине лә Мөхәмәтша сығыу яғына атланы. Мәжитов ике һикереүҙә ишек төбөнә килеп етте.

– Юҡ, тинем бит мин һиңә! – Мәжитов яғаһына үрелгәйне, Мөхәмәтша уны этеп ебәрҙе. Рәйестең күҙҙәре сығырҙай булып аҡайған. Күҙ алмалары ла ситкә ауышҡан, ә ауыҙы ҡот осҡос салышайған. – Контр! Мин һиңә управа табырмын.

– Кем контр? – Мөхәмәтша ла ҡыҙа башланы. – Һин мейес башында аунағанда, мин Ҡырымда боҙло һыу кисеп, эрвәлүтсәне яҡлап йөрөнөм. Ауыҙыңды үлсәп ас!

– Вәлиди әрмейәһендә йөрөгәнеңде онотҡаннар тип беләһеңме? – Мәжитов бер аҙ баҫылды. – Волисполкомда әйтһәм, башыңды баструкта серетерләр. – Ул теш араһынан сертләтеп иҙәнгә төкөрҙө лә аяғы менән һылап ҡуйҙы.

– Мине анда мобилизавать иттеләр. Ауылдан бер мин генә китмәнем. Һинең кеүек мөгәрәпкә йәшенеп ҡалманым инде. Ҡурҡаҡ!

Мөхәмәтша, асыуы эсенә һыймай, урамға сығып уҡ китте, шуға күрә Мәжитовтың ни әйткәнен дә ишетмәне.

Иртән ишек алдына таныш булмаған ике ҡораллы милиционер килеп ингәнен күргәс тә аңланы: Мәжитов ебәргән.

Волисполком Раевка ауылында ине. Мөхәмәтшаның бәхетенә, уның рәйесе булып муҡшы Прошка ултыра икән.

– Ой, Миша, что тебя к нам занесло, – тип ҡаршы алды ул, Мөхәмәтшаны ҡосаҡлап уҡ алып. Ултырғыс тәҡдим итте.

Был төптән йыуан сыҡҡан, тәпәшәк буйлы, һөйләгәндә ике күҙен дә йылмайтып, бите урталарын соҡорлатҡан ир менән Мөхәмәтша Варшава аҫтында бер ротала булғайны. Ата-әсәнән иртә етем ҡалып, Прошка Стәрлелә пристанендә йөк ташыусы булып эшләгән. Егет ҡорона еткәс, үҙен Раевкала үҙе кеүек ярлы ҡыҙына өйләндергәндәр.

– Мазитов аристауал,– тине лә Мөхәмәтша хәлде һөйләп бирҙе. Тыңлап бөткәс, туйғансы көлдө лә йөҙөнә етдилек сығарып, Землянов былай тине:

– Һин крәҫтиәнлегеңде итәһең. Тик беҙ, большевиктар, хосуси милекселеккә ҡаршы бит. Ҡыҙылармеец булып, шуны ла аңламайһыңмы?

– Балшивик һин, мин түгел, – тине Мөхәмәтша. – Мин башҡорт. Ә башҡорттоң ере күп булырға тейеш.

Землянов был һүҙҙәрҙән һуң күңелһеҙ итеп йылмайып ҡуйҙы. Аңламаҫһың, әллә хупланы, әллә кире ҡағырға теләне.

– Власть менән бәхәсләшмә – был минең кәңәшем, – тип ҡалды ул, Мөхәмәтшаға ике ҡулын һуҙып. – Ну, будь здоров!

Мөхәмәтшаның кәйефе тамам боҙолдо. Бында ла яҡлау тапмағас, нишләһен, күнде. Землянов менән ҡоро ғына һаубуллашты ла йәйәүләп юлға сыҡты.

Уйға сумып атлай торғас, Мөхәмәтша ирекһеҙҙән башҡорт ғәскәрендә үҙенең эскадрон командиры Баҡый Ишбулатовты иҫенә төшөрҙө. Ҡаҙаҡтарға оҡшап киң яңаҡлы, ҡыҫыҡ күҙле, урта буйлы был Түңгәүер башҡорто хәлле крәҫтиән балаһы булып, Троицкиҙа "Рәсүлиә" мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң Томскиҙа университетта ла уҡып ҡараған, әммә тамамларға өлгөрмәгән, үҙе теләп һуғышҡа киткән. Герман һуғышының бөтә ҡыйынлыҡтарын татыған яугир.

– Большевиктар беҙгә юлдаш түгел, – ти торғайны ул. – Алла кешене төрлө

сифатлы итеп яратҡан. Берәү аҡыллы, икенсеһе — иҫәр, берәү егәрле, икенсеһе – ялҡау. Берәү ихлас, асыҡ күңелле, икенсеһе – йомоҡ, эскерле, шуға күрә улар араһында тиңлек бер ҡасан да булмаясаҡ. Донъя теҙгене аҡыллылар ҡулында булғанда ғына, тормош алға бара.

Баҡыйҙың фәлсәфәһе шулай. Тормошта тигеҙлектең булыуы мөмкин түгел. Тигеҙһеҙлекте егетең теләһә ҡайһы ерҙә таба, миҫалдар менән раҫларға һәләтле.

Бармаҡтар, тәбиғәт, кешеләр... Бай фәҡиргә ҡарағанда егәрлерәк, аҡыллыраҡ, шуға күрә бай. Донъяны байҙар алып бара, ярлыларҙы улар ҡарай. Ҡыҙылдар фәлсәфәһе буйынса донъяға ярлы халыҡ хужа булһа, бар ғәләм фәҡирлеккә төшәсәк.

Әлбиттә, Мөхәмәтша Ишбулатовса аңлата алмай, хатта ул һөйләгәндәрҙең барыһын да аңлап та етмәй. Командир айырыуса большевиктарҙың Ер тураһында декретына ҡаршы ине.

– Ата-бабаларыбыҙ ғүмер буйы ошо ергә хужа булып йәшәгән, – ти ине ул. – Хатта бар донъяны тиерлек аяғы аҫтына һалған мәшһүр Сыңғыҙ хан да уларҙы ергә хоҡуҡтарынан мәхрүм итә алмаған. Урыҫ батшаһы ла үҙ батшалығына саҡырғанда, ерегеҙ, динегеҙ, идарағыҙ үҙегеҙсә булыр, тип вәғәҙә иткән. Бына беҙ башҡорт дәүләтен төҙәрбеҙ ҙә килмешәктәрҙе ҡыуып ебәрербеҙ.

Шулай ти ҙә, киң йылмайып, әңгәмәләштәренә күҙ ҡыҫып ҡуя.

– Син куабыз, дисең лә ул, – тип һүҙгә ҡушыла бер татар. – Ә без китәргә теләмәсәк?

– Китмәй ҡайҙа бараһың һин? – тип көлә Ишбулатов. – Ҡалһаң, башҡорт ерен ҡортомға алып, хаҡын түләп йәшәрһең. Башҡорт ере киң бит ул, татарға ғына урын табылыр. Булмаһа, ҡырҡтартмасы булып йөрөрһөң.

Командир шул тиклем ихлас йылмая, теге татар ҙа уға ҡушылмай булдыра алмай. Әммә Ишбулатов һөйләгәндәр раҫ сыҡманы. Урыҫ сәнәғәтселәре, сауҙагәр, юғары ҡатлам офицерҙар башҡорт автономияһы тураһында ишетергә лә теләмәне.

– Россия едина и неделима, – тине улар. – Был ерҙәр ғүмергә беҙҙеке булып ҡаласаҡ.

Ҡыҙылдар яғына сығыуҙы һалдаттар төрлөсә ҡабул итте. Ярлылар – ризалыҡ, бай-офицер балалары екһенеү менән. Баҡый ҙа һуңғылар фекерен уртаҡлашты.

– Туғандар, беҙҙең юлдар айырыла, – тине ул, һалдаттарға мөрәжәғәт итеп. – Беләһегеҙ, мин большевиктарға хеҙмәт итә алмайым. Кем минең юлды һайлай, әйҙәгеҙ, минең арттан.

Ишбулатов менән төн ҡараңғылығына ни бары биш-алты кеше генә инеп юғалды. Иртәгеһен Мөхәмәтша улар менән күрше Әлимғужа ауылынан мулла улы Таһирҙың да китеүен белде. Таһирҙы бәләкәйҙән белә Мөхәмәтша. Әле Стәрлелә урыҫ мәктәбендә уҡып йөрөгән саҡта уҡ атаһы Вәлиша менән яҡшы аттарҙа Табылды муллаһы Баймөхәмәткә килә торғайны. Ҡаласа кейенгән был малай бер ҙә эреләнеп торманы, килеп төшөү менән үҙ тиҫтерҙәре араһына уйнарға йүгерә ине. Иң элек ул кеҫәһенән төрлө тәм-томдар килтереп сығарып, малайҙарҙы һыйлай, уларҙың ауыҙҙарын сәпелдәтеп ашағанын ихлас ҡарап тора. Ауыл малайҙарын ҡалала күргән уйындарға өйрәтә. Бер саҡ Мөхәмәтшаның күршеһе Арыҫланғәле Таһирға:

– Һине Стәрлелә пуп булырға уҡый, имеш, тип һөйләйләр, – тине. Таһир тәүҙә иркенләп көлдө. Малайҙарҙың аптырап ҡалыуына:

– Юҡ, үс итеп әйтәләр аны. Поптың кем икәнен беләһегеҙме? – Таһир бер күҙен ҡыҫып, малайҙарға күҙ йүгертеп сыҡты. – Ул урыҫларҙың сиркәүендә

эшләй торған урыҫ муллаһы була. Мин поп булырға уҡымайым. Мин… – Таһир бер аҙ туҡтап торҙо. – Ҙур кеше булырға уҡыйым. Атайым шулай тине.

Ысынлап та, байтаҡ йылдар үткәс, Таһирҙың Ҡазан университетында уҡып йөрөүен ишетте Мөхәмәтша. Уны тамамлағас, Ырымбурҙа губерна кәнсәләрендә эшләгән. Ә Герман һуғышы башланғас армияға алынып, Көньяҡ-Көнбайыш фронтта һуғышҡан. Перемышль ҡалаһын алғанда яраланған, дошман пуляһы уң яҡ ботона ҡаҙалған.

Мөхәмәтша башҡорт полкына алынғас, Таһир уны үҙе эҙләп тапты. Тәүҙә танымайыраҡ торһа ла, Мөхәмәтша элекке һыҙаттарын төҫмөрләп, танышын сырамытты. Таһир ҡалынайған, буйы ла ярайһы ҡалҡыу. Нескә генә мыйығы ла бар. Штабта эшләй икән.

– Беренсе полк исемлеген ҡарап утыра инем, Табылды ауылы күренеп ҡалды, – тине ул, яҡташын осратҡанға ихлас ҡыуанып. – Фамилияңды белмәйем бит. Исемең генә хәтерҙә. Үҙең теләпме, мобилизацияға эләктеңме, тигәндәй…

Мөхәмәтша тәүҙә, нисегерәк яуап бирергә икән, тип уйлап торғайны ла, дөрөҫөн әйтте лә ҡуйҙы:

– Нишләп теләп булһын инде! – Һүҙ эҙләгән арала күлдәк яғаһын рәтләгән булды. – Гирман фрунтында ла ғарҡ булынды ине.

– Шулай инде. – Таһир һүҙҙе оҙайтманы. Артабан әңгәмә ауыл хәлдәренә төшөп китте.

Таһирҙың бер ҡасан да Мөхәмәтша менән сәйәсәт тураһында һөйләшкәне булманы. Кәрәк тип тапманымы, әллә бәхәс сығып, аралары боҙолор типме, белмәҫһең. Әммә өс-дүрт йыл уҙғандан һуң Таһир Әлимғужаға ҡайтып төштө. Табылдыға ла килде. Күрәһең, сит тарафтарҙа нужаны күп күргән, ике яҡ сикәһе салланған, кәүҙәһе бер аҙ көмөрәйә төшкән. Йыш ҡына һул яҡ сикә мускулдары һикереп-һикереп ҡуя.

Үҙенең һөйләүенә ҡарағанда, уларҙың төркөмө Донға китеп, Ирекле армияға ҡушылған. Деникин ҡыйратылғас, Врангель ғәскәренә Ҡырымға киткәндәр. Ә Перекопта уны ла тар-мар иткәс, тыңҡыслап тултырылған карапҡа ултырып сит тарафтарға юл алғандар. Таһир әңгәмәһенең ошо урынына еткәс, Мөхәмәтша, тимәк, Ҡырымда бер-беребеҙҙе винтовка күҙәүе аша күҙләп, теге донъяға оҙатыу форсаты булған икән, тип уйлап алды. Төркиәлә ары бәрелеп, бире һуғылып йөрөй торғас, Таһир бер урыҫ офицеры менән фәхешханала һаҡсы булып торған. Унан Францияға юлланғандар, унда ла йүнле тормош булмаған. Бер көн Совет илселегенән эмигранттар менән осрашырға берәү килеп, ҡайтырға өндәгәс, тәүәккәлләгән.

– Тыуған яҡтан айырмаһын Хоҙай, – тип тамамланы һүҙен Таһир. – Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тип юҡҡа әйтмәгәндәр инде.

Таһирҙы район үҙәгенә эшкә ебәрҙеләр. Бер аҙ мәғариф бүлегендә эшләгәндән һуң, ул Өфөгә күсерелде. Күрәһең, уҡыған кешеләрҙең баһаһы ҙур булғандыр.

Дәүләт – мәжбүр итеү машинаһы, тигән бер аҡыл эйәһе. Ниндәй генә татлы вәғәҙәләр бирмәһендәр, большевиктар ҙа ошо хаҡта иҫкә төшөрөргә мәжбүр булды. Илдә кәйеф төрлө, яңы сәйәсәтте ҡабул итмәүселәр ҙә күп ине шул. Иң мөһиме, аслыҡ-яланғаслыҡ уларҙы арттыра торҙо. Яңы власть быңдайҙарға ҡарата көс ҡулланыу юлын һайланы.

Тарихта йән өшөтөрлөк ваҡиғалары менән яҙылып ҡалған уҙған быуаттың 30-сы йылдары Советтар Рәсәйендә эске тәртипте нығытыу, тоталитар режим урынлаштыра башлау менән билдәле. Идара итеүсе ВКП(б) ҙур ғына үҙгәрештәр кисереп, сәйәси процесстар, фекер алышыу, бәхәстәр бөтөрөлә, сағыштырмаса

берҙәмлек урынлаша. Бөтә мәсьәләләр тар даирәлә Политбюро һәм партия аппаратында хәл ителә. Ошо йылдарҙа большевиктарҙың элеке оппоненттары – меньшевиктар һәм эсерҙар өҫтөнән һуңғы сәйәси хөкөмдәр булып уҙа. 20-се йылдар аҙағындағы "Шахта эше" халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарындағы фәнни-техник зыялылар араһындағы "короткостар" менән көрәш башлауға сигнал була. 30-сы йылдар башынан кулак һәм урта хәллеләргә ҡаршы золом киң йәйелдерелә.

Золом айырыуса хәрбиҙәр араһында киң тарала. Ҡыҙыл Армияла 40 меңләп офицер репрессияға эләгә. НКВД-ла (эске эштәр халыҡ комиссариаты) сит илгә сыҡҡан сәйәси дошмандарҙы юҡ итеү менән шөғөлләнгән йәшерен бүлек ойошторола. 1940 йылдың августында Аҡтар хәрәкәтенең, монархия эмиграцияһының күп эшмәкәрҙәре, сит илдә хеҙмәт итеп, ҡайтмай ҡалыусыларҙың күбеһе золом ҡорбандары була.

Был тулҡындан Башҡортостан да ситтә ҡалмай. "Халыҡ дошманы" тамғаһы менән 274 кеше ҡулға алына. Улар араһында ВКП (б) өлкә комитеты секретарҙары Я. Быкин, Ә. Иҫәнсурин, ВЦИК рәйесе А. Таһиров һәм башҡалар була. Башҡортостанда бөтәһе 50 293 кеше золом ҡорбанына әүерелә.

…Таһир Өфөлә Ағиҙелдең бейек ярындағы урыҫ күскенселәре тоҡомдары нигеҙ һалған, урындағы халыҡ телендә "Архирейка" тигән урында бер ҡарсыҡта фатирға урынлашты. Ике бүлмәле, нигеҙе күптән ергә һеңгән һәм ҡасан һалынғаны ла билдәһеҙ йортта һигеҙенсе тиҫтәне ваҡлаған Марфа ҡарсыҡ яңғыҙы көн итеп ята ине. Әбейҙең ике улынан береһе йәш кенә көйөнә – Герман, икенсеһе Граждандар һуғышында үлеп, ҡарты ла яңыраҡ гүр эйәһе булған.

Таһирҙың үҙенә лә фатир бирергә тейеш инеләр. Ошо шатлыҡлы ваҡиғаны көтөп йөрөгән август кисәләренең береһе ине. Эштән һуң ғына ҡайтып, Таһир мөйөштәге карауат ролен үтәгән ағас һәндерәгә ятты, йоҡоға ғына китә башлағайны, тәҙрәгә көслө ут яҡтыһы килеп бәрелде. Унан машина тауышы ла ишетелде. Уның Марфа ҡарсыҡ ҡапҡаһы янында туҡталғанын да сырамытырға мөмкин ине.

Хужабикәнең уфтана-уфтана урынынан торғаны ишетелде. Һуңғы айҙарҙа партия, совет органдарында эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙе төндәрен берәм-һәрәм ҡулға алғандарын белеп йөрөп, үҙенә лә бер көн сират етәсәген һиҙемләһә лә, Таһир артынан шулай уҡ тиҙ килерҙәр тип уйламай ине әле.

– Сынок, – хужабикә ишекте туҡылдатты. – Был машина һинең артан килгәнгә оҡшай.

Марфа ҡарсыҡ гәзит уҡып, сәйәсәт менән ҡыҙыҡһынмаһа ла, илдә ниҙәр булып ятҡанын, түрә-ҡара араһында золом таралғанын ишетеп белә ине. Таһир уға яуап бирмәне, тиҙ генә тороп кейенә башланы. Уғаса булмай, машина ишеге асылып ябылғаны ишетелде, һәм, урам ҡапҡаһы шығырҙап асылып, кемдәрҙер ауыр аҙымдар менән ихатаға үтте. Уларҙың йорт тупһаһы аша үтеүен көтөп тормай, Таһир ҡаршы сыҡты.

– Чем могу..? – Уға әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәнеләр.

– Гражданин Акимбетов? Машинаға ултырығыҙ! – Алда торған ҡалын кәүҙәле ир хәрбиҙәрсә хәрәкәт менән бер яҡҡа сигенде лә ҡулы менән урам яғына иҙәне. Таһир сығыр яҡҡа атланы.

– Улым, һин бик ныҡ ҡайғырма. Бәлки, хаталыр ғына был! – Хужабикә уны тынысландырырға тырышҡандыр.

– Бабка, бар әле, өйөңә кер, – теге ир әбейҙе ҡоро ғына бүлдерҙе. – Телеңде тый. Большевиктар хаталанмай ул.

Таһирҙы, милицияла арлы-бирле һорау алғандан һуң, төрмәгә алып килделәр.

Шалтыр-шолтор итеп һаҡсы камера ишеген асты. Унан танауға бик яман, бәҙрәфтә генә була торған еҫ бәрелде. Өс ҡатлы һәндерәгә һыймай иҙәндә ятҡан тотҡондар ҡуҙғалышты.

– Проходи, располагайся! – Төрмә һаҡсыһы Таһирҙы арҡаһынан этәрҙе. Һәндерәлә урын юҡ ине, шуға күрә тәүҙә бер аҙ баҫып торорға, унан сирҡана-сирҡана булһа ла һалҡын иҙәнгә бөршәйеп ятырға тура килде. Йоҡо алманы, бер уң, бер һул ҡабырғаға әйләнә торғас, таң да беленде.

Ҡояш был камераға ҡарамай. Әммә һүрән генә яҡтылыҡ төшә башлағас, Таһир камерала ике тиҫтәгә яҡын кеше барлығын шәйләне. Уға иғтибар иткән кеше булманы, күрәһең, һәр кемдә үҙ ҡайғыһы.

Иртәгеһен ярты төн ауышҡас, һорау алырға саҡырҙылар. Шуны белде Таһир: махсус рәүештә кешенең ҡаты итеп йоҡоһо килгән мәлде һайлайҙар икән. Ихтыярҙы тиҙерәк һындырыу өсөн. Тар, әммә оҙон өҫтәл артында йәшкелт френч кейгән оҙон сәсле, ябыҡ сырайлы тәфтишсе ултыра. Уның хәрәкәттәре һалмаҡ, күрәһең, арыған.

– Представтесь, гражданин! – тине ул ишетелер-ишетелмәҫ тауыш менән, алдындағы ҡағыҙҙарҙы шылдырып.

Таһир әйтте. Тәфтишсе бер аҙ өндәшмәй ултырҙы. Күрәһең, һорауҙы нисегерәк бирергә уйлағандыр. Ултырған урынында бер аҙ ҡайҡайҙы ла, һәр һүҙҙән һуң тиерлек пауза яһап:

– Яуаптарығыҙ теүәл һәм аңлайышлы булһын. Дөрөҫөн әйтеп һөйләү үҙегеҙҙең мәнфәғәттә! – тине.

Тәфтишсе урынында элек спекуляция өсөн бер нисә тапҡыр хөкөм ителеп, батша төрмәләрендә ултырып сыҡҡан Өфө ҡалаһы сауҙагәре Әхмәтғәле Суфияновтың приказчигы Солтан Шәмиғолов ултыра ине. Аҡса, байлыҡ өсөн йәнен бирергә лә әҙер был йылғыр әҙәм, ҡала аҡтарҙан азат ителеү менән ҡыҙылдар дружинаһына яҙылып, байҙар милкен тартып алыуҙа ҡатнашып, байтаҡ алтынкөмөштө үҙ ҡулына күсереп өлгөргәйне. Яңы вазифаға уны иҙеүселәр синыфынан ҡаза күргән, төрмә тәртиптәре менән таныш булғаны өсөн ултырттылар. Ҡыҙылдар идеологияһы менән бер уртаҡлығы булмаһа ла, буталсыҡ заманда файҙаланып ҡалырға ашыға ине мөртәт. Аҡтар ни, ҡыҙылдар ни, Шәмиғоловҡа барыбер, тик уға үҙе теләгәнсә йәшәргә генә ҡамасауламаһындар. Алдында уҡымышлы кеше ултырыуын күрә тороп, тәфтишсе үҙенең власть кешеһе икәнлеген күрһәтеп алыу мөмкинлегенән тантана итте. "Башкорт милләтчесе, ярый, карап карыйк әле, ничек сайрарсың икән",– тине ул үҙ-үҙенә.

– Абзый, – Шәмиғолов, һорау алыныусының үҙенән йәш булыуын белә тороп, шулай өндәште, – официальный протоколға кул куяр алдыннан үзебезчә генә сөйләшеп алыйк әле. Вәлиди армиясенә по убеждению бардыгызмы? Или башка сәбәпләре булдымы?..

– Мин башҡорт полкына хәрби мобилизация буйынса алындым. –Таһирҙың, үҙем теләп барҙым, тип әйткеһе килмәне.

– Син, абзый, мобилизациягә сылтанма. Мулла баласы бит син, башкорт армиясендә үз теләгең белән хезмәт итүең безгә билгеле. Нинди максат белән?

– Беҙ Башҡортостан автономияһын яҡланыҡ. Большевиктар, яңылышмаһам, быға ҡаршы түгел. Автономияны ул саҡта ҡоралһыҙ яҡлап булмай ине.

– Сугышсыз, дип әйтергә телисең, шулаймы? – Тәфтишсе ҡарашына ниндәйҙер ҡурҡаш ауырлығы һалырға тырышып ҡараны. Үҙенең ҡыҙыҡһынғаны ла һиҙелә ине.

– Беҙ бер кемгә лә һөжүм итмәнек. Тәртип кенә һаҡларға тырыштыҡ.

– Сез Вәлидинең "Башкортстан – башкортлар өчен" дигән идеясын яклыйсызмы?

Был һорауға яуап үҙенең яҙмышын хәл итеүҙә иң мөһим роль уйнаясағын белә ине Таһир, шуға күрә:

– Ундай идея тураһында ишеткәнем булманы, – тине.

– Конкретырак? Автономиянең мәксаты шул ич? Иначе аның нигә кирәге бар? – Тәфтишсе өҫтәл өҫтөндә бармаҡтарын бейетеп алды.

– Башҡорт хөкүмәтенең фекере буйынса, республикаға төрки булмаған халыҡтарҙың күсеп ултырыуын сикләү кәрәк ине. Был славян халыҡтарына ғына ҡағылды.

– Аларны, сезнеңчә, куып чыгарырга кирәк идеме?

– Был һорауға яуап бирә алмайым. Мин хәрби кеше, сәйәсәт менән шөғөлләнмәнем. – Һуңғы һүҙҙәргә Таһир баҫым яһап әйтте.

– "Башкортстан – башкортлар өчен" дигән лозунгы лично ничек карыйсыз? – тип һаман үҙенекен тылҡыны тәфтишсе. Ошо һорауға ыңғай яуап алыу уның өсөн иң мөһиме ине.

– Бер нисек тә ҡарамайым. – Таһир ныҡ һыуһағайны, шуға күрә уға фекер туплап әйтеү бик ауыр булды.

– Алдыйсың, сволочь! – Тәфтишсе ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе. – Отвечай! Без синең, мулла баласы буларак, Совет власе дошманы булуыңны яхшы беләбез. Нәрсә заигрывать итәсең?!

– Ниндәй дошман булайым мин? – Таһир хәлһеҙ генә яуапланы. Ауыҙында хатта йоторлоҡ төкөрөк тә юҡ, исмаһам. – Атайым мулла булғанға мин ғәйепләме ни? Сын за отца не отвечает, тиҙәр бит.

– Син – классовый враг! Ә классовый врагны без уничтожать итәбез! – Тәфтишсе, әйтерһең, кемдеңдер ишетеүен теләп, ҡысҡырыуын дауам итте. – Синең Врангель армиясендә сугышуың, аннан Турциягә чыгуың безгә яхшы билгеле.

– Билдәле булғас, ниңә һорайһығыҙ? – Таһир, алғараҡ эйелеп, өҫтәл ситенә таянды.

– Монда вопросларны мин бирәм. Чит илдә кемнәр белән связдә торасыз? Фамилияләрен, кайсы илдә яшәүләрен әйтегез!

– Франциянан ҡайтҡандан һуң мин бер кем менән дә бәйләнеш тотмайым.

– Врешь, сволочь! – Тәфтишсе өҫтәл өҫтөндә ятҡан бер нисә конвертты алып һелкте. – Бу хатлар сиңа язылган. Россиядә подполье оештырып, Совет власен бетерергә план коргансыз.

– Ҡайҙа, береһен булһа ла күрһәтегеҙ әле, кемнәр яҙа икән. – Таһир тәфтишсе өҫтәленә тартылып ҡуйҙы.

– Хәзер күрсәтәм. – Тәфтишсе урынынан торҙо ла, өҫтәл аша үрелеп, бөтә көсө менән Таһирҙың маңлайына һуҡты.

Бетон иҙәнгә елкәһе менән ауған Таһир шунда уҡ аңын юғалтты. Камерала ғына иҫенә килде. Елкә һөйәге сатнаған, ахырыһы, үлтереп һыҙлай. Күҙ алдында томан пәрҙәһе тора.

Икенсе допроста тәфтишсе шул уҡ һорауҙарҙы ҡабатланы. Тыуған илгә хыянат, немец шпионы булыуы тураһында ғәйеп тағып маташты. Был юлы Таһир үҙе өҫтөнән кемдәрҙеңдер донос яҙыуын белде. Тәфтишсе уны үҙе ҡысҡырып уҡыны. Имеш, Таһир яйы тура килгән һайын Совет власын һүгә, батша замандарын маҡтай, Совет власының ҡолаясағы ҡотолғоһоҙ икәнлеген тылҡый. Сираттағы туҡмалыуҙан һуң Таһир тағы ла камераға килтереп ташланды.

Өсөнсө допроста өҫтәл артында таныш булмаған, мөләйемерәк йөҙлө урыҫ ултыра ине. Ул хатта ултырғыс та тәкдим итте.

– Отказаться бесполезно, – ерән сәсле тәфтишсе бармаҡтары менән сәсен артҡа ебәреп, ике терһәген дә өҫтәлгә ҡуйҙы. – Беҙ һеҙҙең эш буйынса бик күп

мәғлүмәт тупланыҡ. Һеҙ – Совет власына дошман элемент. Ғәйебегеҙҙе таныуҙан башҡа сара юҡ. Бына ошонда ҡултамғағыҙҙы ҡуйығыҙ.

Тәфтишсе уның алдына бер бит ҡағыҙ шылдырҙы. Күҙҙәре сыбарланып, насар күрһә лә, унда яҙылғандарҙы уҡып, Таһирҙың сәстәре үрә торҙо. Имеш, ул Советтарҙы күрә алмай, немец даирәләренә хеҙмәт итә һ. б.

– Үҙемдең турала бындай ялғанға мин ҡул ҡуя алмайым, – ул ҡағыҙҙы тәфтишсегә ҡарай этәрҙе.

Шул саҡ камераға бер ир килеп инде лә Таһирҙы туҡмай башланы. Йығылғас, типкеләргә тотондо. Тәфтишсе ҡарап торманы, сығып китте. Күрәһең, нервыларын һаҡлай торғандыр.

Өҫтөнә һалҡын һыу ҡойоп, Таһирҙы иҫенә килтерҙеләр ҙә тағы ла шул ҡағыҙҙы һуҙҙылар.

– Подпишешь? – Тәфтишсенең тауышы хатта ҡалтыранып ҡуйҙы.

«Ҡул ҡуйһам, үҙемә хөкөм ҡарарына риза булам. Ни эшләргә? Исмаһам, был тамуҡтан ҡотолормон. Әҙәмсә йәшәргә барыбер бирмәйәсәктәр, эш шуға барғаны күренеп тора. Бер генә иҫән ағза ла ҡалманы». Ул, бәлтерәгән ҡулдарын көскә буйһондороп, ғәрәп хәрефтәре менән "Әкембәтов" тип сыймаҡланы.

Таң алдынан Таһирҙы һөйрәкләп тигәндәй оҙон коридор буйлап алып киттеләр. Был юлдан һуңғы тапҡыр атлауын һиҙенде Таһир, хатта был тамуҡ менән хушлашасағына шатлана биреп тә ҡуйҙы. Бер мәл, эх, шунда Францияла ҡалырға кәрәк булған да бит, тигән уй ҙа килеп ҡуйҙы. Тик, ни хәл итмәк кәрәк, һуң шул. Бына уны тимер баҫҡыс буйлап түбәнгә төшөрә башланылар. Күрәһең, теге донъяға ебәрә торған урындары подвалда. Шылтырап, ҡалынлығы күҙгә салынып торған тимер ишек тә асылды.

– Шагай вон туда! – Уны алып килеүселәрҙең береһе алға төртөп күрһәтте. Унда, ҡараңғылыҡ ҡуйыра башлаған ерҙә, ниндәйҙер ҡара тап беленә ине.

Әммә Таһир атларлыҡ хәлдә түгел ине, шыйыҡ аяҡтар, таяныр нәмә юҡҡа сығыу менән, хәлһеҙләнеп бөгөлдө. Уны бер аҙ ҡултыҡлап алып барҙылар ҙа стенаға һөйәнеләр.

Атыу тауышын Таһир ишетмәне. Тик тәнендә әйтеп бөтөргөһөҙ еңеллек һәм ҡап-ҡара ерҙән осоуын ғына шәйләне.

Тыуған яҡҡа ҡайтыу, ғәмәлдә, Таһир өсөн бер ниндәй ҙә ҡыуаныс килтермәне. Был фекерене алдыҡ түгеллегенә ышаныу Мәскәүҙә дәрәжәне төшөрөрлөк реабилитация кеүек нәмә үткәндә үк моронлай башлағайны. Төрлө кешеләр менән һөйләшергә тура килде: берәүҙәре ватандаштарының әсе яҙмышын эскерһеҙ күңеле менән аңлап, ярҙам итергә тырышһа, араларында сит элемент күреүселәр ҙә юҡ түгел ине. Әммә барыһын да бер теләк берләштерә. Советтар 1922 йылда барлыҡ уҡымышлы кешеләрҙе лә тиерлек сит тарафтарға оҙатҡандан һуң илдә аҡыл һайыҡҡанын, әҙәп-инсафлыҡ кәмегәнен һиҙә ине. Таһир кеүектәрҙе ҡайтарырға тырышыу нигеҙендә лә ошо наҙанлыҡтан ҡотолоу уйы ятты.

– Тыуған ил һеҙгә белем бирҙе. Хәҙер һеҙ уны йәш быуынға ҡайтарырға бурыслы, – тинеләр кисәге эмигранттарға.

Икенсе оло үкенес Әлимғужаға ҡайтҡас булды. Бында, әйтерһең, ауылдың аҫты өҫкә килгән. Таһирҙарҙың өйөн мәктәп иткәндәр, мәзин йортонда иһә — клуб, ә Вахит байҙың төйәге кәнсәләргә әйләнгән. Элекке матур ҡоймалар, ағастар, буяулы тәҙрә ҡапҡастары – береһе лә юҡ. Ауылды йәмләп ултырған өйҙәр, үҙҙәрен уратып алғандар рәтенә төшә бара. Үҙҙәренә туған тейешле бер кешелә туҡтап сәй генә эсте лә Таһир волость үҙәгенә йүнәлде.

Һиҙә-тоя йөрөнө ул: ысынлап та, донъя ныҡ ҡына үҙгәргән. Элекке ярлыларҙың үткерерәктәре хәҙер ҡайҙандыр табып алған күн куртка йәки френч кейеп,

түрәлек хоҡкон үҙләштерергә ашҡына. Оҡшамаған берәй һүҙ ысҡындырһаң, "белогвардеец", "контр", "националист"тан һалдырырға тотоналар. Ә башҡорттары "мулла балаһы", "кысплататыр" тип теш ҡайрай. Ә бит бындай мөнәсәбәт күрелер тип ҡайтылмағайны. Ғөмүмән, атаһы, Вәлиша мулла, алама кеше инеме ни? Әлимғужа балаларын хәреф танырға, уҡырға-яҙырға шул өйрәтте бит? Уҡыған кеше – ҡанатлы ҡош. Уға ҡайҙа ла киңлек. Ә кем уҡымаған, унда Вәлишаның ни ғәйебе? Уҡытыу ғынамы ни, балаларға исем ҡушыу, никах уҡытеркәү, үлгәндәрҙе теге донъяға бәхилләп оҙатыу ҙа мулла өҫтөндә булды. Халыҡты әхлаҡҡа саҡырыу, бер-береңде ихтирам итергә өндәү – барыһы ла. Эйе, мулла-мәзиндәр ауылда мосолмандарҙы инсафлыҡҡа, ата-әсәһен ихтирам итергә, урлашмаҫҡа, кеше рәнйетмәҫкә өндәүсе бер көс-терәк булды. Бөгөн Советтар шуны бөтөрә. Ә кемгә таяна? Кисәге наҙан ярлы-ялпыға. Тик уның өҫтөнән етәкселек итеүҙе үҙ өҫтөнә ала. Совет рәйесе – бөгөн ауылда элекке старостанан киңерәк хоҡуҡлы, теләһә кемде хөкөм ҡулына тапшыра ала.

Ауыр уйҙар иҙә Таһирҙың мейеһен. Бик ауыр. Донъя ныҡ боларҙы. Оҙаҡ йылдар кешеләрҙең насар ҡылыҡтарын тыя килделәр. Хәҙер шул яҙғы ташҡын һыуҙай тыйып тотҡоһоҙ булып тышҡа сыға. Уны ауыҙлыҡлармын тимә. Ни өйләнеп булманы. Был бәхетте һуғыш урланы. Рәзилә! Уның тураһында күп уйлағаны бар Таһирҙың. Беренсе тапҡыр был ҡыҙҙы атаһы менән Ҡарағош ауылына барғанда күргәйне. Староста атаһын төшкө ашҡа үҙ өйөнә алып ҡайтҡайны. Рәзилә уның аҫрауы икән. Быға тиклем дә сибәр ҡыҙҙарҙы күргәне булыуға ҡарамаҫтан, Рәзилә 16 йәшлек Таһирҙың зиһенен әллә ни эшләтте лә ҡуйҙы. Күрәһең, оҙағыраҡ текләгәндер, теге ҡыйыу ҡыҙ:

– Абый, ашың суына бит. Онытылып китмә, – тип оялтты.

Улында булған үҙгәреште Вәлиша ла һиҙҙе. Юлда ҡайтҡанда улының уйсанланып киткән йөҙөнә ҡарап килде лә:

– Старостаның аҫрауы һылыу күренә. Эшкә лә егәрле икән, – тип ҡуйҙы. Таһирға атаһының был баһаһы оҡшаһа ла, уға ҡушылырға баҙнат итмәне. Ситкә ҡарап барыуын белде. Атаһы һүҙҙе дауам итер өсөн:

– Улым, һин уҡымышлы кеше балаһы. Һәр кемде Аллаһы Тәғәлә үҙ тиңе менән көн итһен тип яратҡан. Үҙ тиңең табылыр әле.

Таһир атаһының үҙенә төрттөрөүен белеп, ҡолаҡтарына саҡлы ҡыҙарҙы, әммә был юлы ла тын ҡалды. Атаһы ла һүҙҙе оҙайтманы. Яңылыш ысҡындырғанын, бәлки, һиҙгәндер ҙә.

Икенсегә ул Рәзилә менән Стәрлетамаҡта бер-ике йыл үткәс кенә осрашты. Староста ғаиләһе менән баҙарға килгәйне. Аҫрауын да ҡалдырмаған. Рәзилә ярайһы үҙгәргән, тулыланып, йәш ҡатындар төҫө инеп киткән, уның менән һүҙ алышырға форсат сыҡманы. Ҡабат күрергә насип булманы. Унан һуғыш ҡубып китте. Таһир, яурындарына офицер погондары тағып, Көньяҡ-Көнбайыш фронтҡа оҙатылды. Атаһына яҙып ҡарағайны ла, Рәзиләне кейәүгә биргәндәр, үҙ ауылына, тигән яуап килде. Фронтта, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙһыҙ булманы. Башҡорт ҡыҙҙары кеүек янып торған украинкалар аҙ һарылманы Таһирҙың ҡосағына. Әммә был мөхәббәт түгел, ә енси теләкте ҡандырырға теләү тойғоһо ғына ине. Рәзиләне хатта һуғыш та оноттора алманы. Йүгәнләп алғыһыҙ күрергә теләү тойғоһо көсәйә генә барҙы. Атаһына тағы ла хат яҙып һалды. Был юлы мулла яуабын тулыраҡ яҙғайны, ике бала үҫтереүен дә әйткән. Һин инде, улым, өлкәнәйеп бараһың, һуҡыр ғишыҡ тотоп күпме йөрөргә мөмкин? Онот ул ҡатынды, ҡайтҡас, үҙеңә иш булырҙайҙы табырһың, тигән.

Аңламаған атай! Тойғолар кешенең күңелендә яралһа ла, кеше уларҙың барыһына ла идара итә алмай. Әҙәм балаһы мөхәббәт тойғоһо алдында бөтөнләй көсһөҙ. Икенсе енескә ҡарата ғына тыуа торған тыйып торғоһоҙ көслө был

тойғо ҡайһы саҡ кешенең башына ла етеп ҡуя. Был башҡа донъя, аҡыл менән үлсәп, икенсе хәстәрҙәр менән мәшғүл булып йөрөгәндәр иңләй-аңлай алмай торған тойғо. Уны аңлау өсөн үҙеңә шул донъя эсендә бер генә сәғәт булһа ла йәшәп ҡарау кәрәк. Дөрөҫ, бер тойғо ла мәңгелек түгел. Мөхәббәт тә үтеп китә. Йылдар уҙыу менән барыһы ла үткән кеүек. Әммә кеше өсөн иртәгеһе ҡиммәт булған кеүек, бөгөнгөһө лә бөтөнләй кәрәкһеҙ түгел.

Эйе, үтә торған хистәр була. Тиҙерәк онотолһон ине лә был Ҡарағош һылыуы. Юҡ бит! Рәзиләнең йөҙ-һыны Таһир күңелендә бик оҙаҡ һаҡланды. Был ҡатын образын бер кем дә ҡыҫтап сығара алманы. Күрәһең, Аллаһы Тәғәлә ихтыяры шулай булғандыр.

Өйләнергә тәки насип булманы Таһирға. Яҡты донъяла уның нәҫелен дауам итеүсе бер зат та ҡалманы. Аяуһыҙ тормош уны үҙенең тирмәнендә әйләндереп иҙҙе-иҙҙе лә шунда йотоп уҡ ҡуйҙы.

Өфөгә килеп эшләй башлаған көндәрҙең береһендә Таһир, эш бүлмәһенән сығып китеп бер аҙ торғандан һуң ишеккә яҡыная башлағас, эстә үҙе тураһында һөйләшкәндәрен ишетеп һағайҙы:

– Бу белогвардеецны, башкырт милләтчесен, ни дип монда эшкә алдылар икән!? – Таһир менән йәнәшә өҫтәл артында ултырған Рәсимә тигән ҡатындың тауышы ине был. Ябыҡ оҙонса йөҙлө, оло ғына танаулы, ә күҙҙәре сысҡандыҡылай секрәйеп торған йәмһеҙ ҡатын тәү күргәндә үк Таһирға ниндәйҙер һалҡынлыҡ менән күҙ ташлап алғайны.

Таһирҙың күңеле әллә ни эшләп китте. Ишек тотҡаһына тотоноуҙан уны ниҙер тыйҙы. Күрәһең, тыңлап бөтөргә теләү тойғоһо көслөрәк булғандыр.

– Белем генәсе бармы икән! Булса да шул мәдрәсәдән ары китмәгәндер. Андый мәчет профессорлары буа буырлык инде ул.

– Нигә алай дисең? – тип ҡырыҫ ҡына бүлдерҙе ҡаршы өҫтәлдәге икенсе ҡатын. Ҡуштан ғына, яғымлы булырға тырышып, һәр саҡ йөҙөнә кершән яғып, иренен мәрйәләр кеүек буяп йөрөгән Нажиә исемле был ҡатын, Таһирҙың буйҙаҡ икәнлеген белеп ҡалып, күҙ-башын уйнаҡлатыбыраҡ йөрөй ине. – Ул, беләсең килсә, Ленинның үзе белем алган Казан университетында укыган.

– Укыса, – Рәсимә бирешергә теләмәне. Әхирәтенең былай ҡаршы сығыуы уның асыуын ҡабартыбыраҡ ебәрҙе. – Башкыртны күпме укытсаң да, скотовод икәнлеге күренеп тора инде аның. – Ҡатын, уңышлы һүҙ таба алғанына ҡыуанып, ирен ситенән йылмайып та ҡуйҙы.

Таһир тәүәккәл рәүештә ишек тотҡаһын тартты. Юҡ, был әшәке ғәйбәтсене тыйырға кәрәк. Артабан тыңлап тороу ҡурҡаҡлыҡ булыр, сөнки кеше һүҙенә йәшерен ҡолаҡ һалып йөрөү уның тәбиғәтенә тап килмәй. Рәсимә, ручкаһын алып, бер ни булмағанға һалышып, яҙышып маташҡан булды.

– Скотовод тиһегеҙ инде? – Таһир теге яһил ҡатындың күҙҙәренә тура ҡараны. Яуап көтөлмәгәнсә һалҡын һәм битараф яңғыраны:

– Вы это о чем? Я не понимаю, – ҡатын башын күтәреп тә ҡараманы. Таһир ҙа һүҙҙе оҙайтманы. Бындай кешеләрҙең тормошта, артист кеүек, төрлө һүрәткә инә белеүен ул аҙ күрмәне. Әммә кәйефе ҡырылғайны инде.

«Ни арала беҙ, башҡорттар, 1917 йылғы Февраль инҡилабынан һуң Рәсәйҙә тәүгеләр рәтендә милли автономия иғлан итеү генә түгел, хатта ғәмәлгә ашыра алған халыҡ, ошондай түбәнселеккә бирелдек? Ҡайҙа беҙҙең ауыҙы менән ҡош тоторға һәләтле ул-ҡыҙҙарыбыҙ? Ни эшләп әле БАССР мәғәрифында улар биләй торған вазифаларҙа башҡа халыҡ вәкилдәре ултыра? Етмәһә, телдәре сағу! Ниндәй әсе сағу бит әле улар! "Скотовод", имеш. Тапҡан бит әле һүҙен дә! Эйе, башҡорт ғүмер баҡый мал ҡараған, шул арҡала өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булған.

5*

Мал туйындыра кешене, сөнки малһыҙ бер халыҡ та йәшәй алмай. Дөрөҫ, ҡайһы берәүҙәр ише, башҡорт ҡырҡтартмасы булып, илдән илгә йөрөп тамаҡ аҫрамаған, тел сарламаған. Эйе, беҙҙең телебеҙ әсе лә, шыма ла түгел. Тәбиғәт балаһы башҡорт кем алдында яҡшатланып йәки бәхәсләшеп йөрөһөн инде?»

Уйлана торғас, сәбәбен тапты кеүек Таһир. Күп ҡорбандар биреп автономия яуланы башҡорт. Әммә Мәскәү алдында, ғүмер баҡый империя масштабтары менән фекерләүгә мөкиббән киткән Рәсәй пайтәхете алдында уны яҡларлыҡ көс-һәләте, үкенескә ҡаршы, юҡ булып сыҡты. Барыһы ла 1920 йылда Әхмәтзәки Вәлиди хөкүмәте бер төн эсендә юҡҡа сыҡҡас башланды. Мәскәү тарафынан золомға әләгеүҙән ҡасып, төрләһө төрлө яҡҡа китеп олаҡҡан хөкүмәт ағзалары, шулай итеп, башҡорт халҡы күпме ҡорбан биреп, ҡан түгеп яулаған автономияны яҙмыш ҡосағына ташланы. Ошоно ғына көтөп торған бәндәләр буш урындарға инеп ояларға һәм баш бирмәҫ башҡортто тәүбәгә килтерергә ашыҡты. Бер нисә ай эсендә Башҡортостанда башҡорттар биләгән вазифалар бармаҡ менән генә һанарлыҡ булып ҡалды.

Эйе, яулау – бер, яуланғанды ҡулда тотоу – бөтөнләй икенсе хәл шул. Һуңғыһы хатта ауырыраҡ, сөнки ул оҫталыҡ, хәйлә талап итә.

Золом машинаһы теләһә кемде түгел, ә һайлап юҡ итә. Башлыраҡтар, ҡыйыуыраҡтар тиҙерәк эләгә уның үлемесле ҡосағына. Ә бына ярамһаҡ-ҡуштандар ҡотолоп ҡала. Хәйер, ниңә уларҙы юҡ итәһең, кәрәктәре тейеп ҡуйыуы бар бит. Ғөмүмән, ундайҙар бер режим өсөн дә ят бауыр булмаған. Башҡалар эшләргә түбәнһенгән эштәрҙе башҡарырға маһир бәндәләр. Уларҙың ғына ҡулынан килгән, башҡаларҙы ерәндергән "эш"тәр ҙә була бит. Айырыуса ошондай болғансыҡ мәлдәрҙә.

Башҡортостанда золом машинаһы иң ҙур шәхестәр өҫтөнән ауыр йөк булып үтте. Республика коммунистары башында торған Яков Быкин менән Әхмәт Иҫәнсурин – тәүгеләрҙән. Икенсеһенең был ҡыйралышҡа эләгеүенә Таһир нисек тә баһа бирә, аңлай ала, сөнки ул маҡсатына өлгәшеү юлында йәнен аямай торған заттан. Ундайҙар яраҡлаша белмәй, тимәк, яңы түрәләргә, сабатаһын түргә элгәндәргә, кәрәкмәй. Ә Быкин? Ни эшләп ул йәһүдте был төркөмгә индерҙеләр икән? Ғөмүмән, 1917 йылғы ике инҡилапта ла хәл иткес роль уйнаған йәһүдтәр вәкилен ни "гонаһ"тары өсөн был тирмәнгә килтереп тығалар? Башҡорттар өсөн ҡайһы бер файҙа күрһәткәне өсөнмө? Башҡаларға иптәш булһын типме, әллә башҡаларҙың ҡотон алыр өсөнмө?

Был бихисап һорауҙарға яуап таба алмай Таһир. Уның өсөн ошо золом машинаһының кәм тигәндә бер шөрөбө тулыу мотлаҡ.

Уны камераға килтереп ташлағас, тәүге һүҙ ҡушыусыларҙың береһе башҡорт һәм татар һүҙҙәрен ҡушып һөйләүсе урта буйлы, киң генә йөҙлө, күҙ ҡабаҡтары аҙ ғына шешенеберәк торған мөләйем ағай булды. Битендә арлы-бирле яра эҙҙәре күренмәй, күрәһең, йөҙроҡ аҫтына эләкмәгәндер, тип уйлап ҡуйҙы Таһир.

– Йә, нинди уйларға баттың, егет? Кем буласың? – тип һораны ағай.

– Халыҡ дошманы. Бывший белогвардеец. Башкирский националист, – тип яуапланы Таһир, асыуы килеп. Әйтерһең, уның бында килеп эләгеүенә ағай ғәйепле.

– Ул хәтлемен беләбеҙ. Мин исемеңде, ҡайда эшләүеңде һорайым бит. – Таһир, ағайҙың етди кеше икәнлеген күреп, үҙе тураһында һөйләп бирҙе. Торараҡ белде, әңгәмәләшсеһе БашЦИК рәйесе Афзал Таһиров үҙе икән.

Афзал ағай:

– Мине лә халыҡ дошманы ясанылар. Күрәһең, тегендә, – тотҡон ишек яғына иҙәп күрһәтте, – власть өсөн ҡаты көрәш бара. Шуңа тирә-яҡларын ышаныслы ҡуштаннар белән ныҒытып ҡуярға тырышалар.

– Һеҙ ҙур кеше бит. Башҡарма власть башы. Нисек улай китереп тыға алдылар? – Таһировтың ябай ғына килтереп бикләнеүенә Таһир ышана алмай ине. БашЦИК рәйесе тәүҙә күңелһеҙ йылмайҙы. Нисегерәк яуап бирһәм, аңлайышлыраҡ булыр икән, тип уйлана ине шикелле ул.

– Бөгөн, энекәш, зур кешеләр мында түгел, алар Москвада. Күрәһең, анда чистка үткәреп, беҙнең кеүек чуждый элементтарны ҡырып бетерергә итәләрдер. Эй, туған! Һинең, пажалый, ишеткәнең юҡтыр. Ҡарап торам да, бигерәк наивный күренәһең. Алай булғас, тыңла. Мин һиңә революцияларҙың анатомияһын аңлатайым әле.

Таһиров уны ҡултыҡлап, тәҙрә янына алып килде лә тышҡа ҡарап аҡрын ғына һөйләй башланы.

– Мондый революция беренсе булып ун етенсе ғасыр аҙағында Бөйөк Британияла, бер ғасыр самаһы үткәс Францияла булып уза. Билдәле, революциялар ниндидер айырым качестволары булған личностлар тарафынан ойоштоpола. Беҙнеңсә әйткәндә, тәүәккәл, ҡыйыу кешеләр ҡулыннан ғына килә мындый эштәр. Шундый фикер дә бар: революцию совершают романтики, а ее плодами пользуются проходимцы. Мына ошондай аксиоманы ишеткәнең бардыр: революция ғәмәлгә ашып, яңы власть нығынып алғас, ул үҙенең элекке лидерларын "ашай" башлай. Сөнки мындай лидерлар артабан кирәкми, сөнки андый кешеләрнең шәхси качестволары власта нығынырға түләүселәрнең мәксәтенә тап килмәй. Алар бер нәмә лә үҙгәртергә теләмәй. Тимәк, выход берәү – лидерларны юҡ итергә. Без әле бына шундай сор кисерәбеҙ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был ҡотолғосоз, безгә хәтле дә шулай булған. Шунысы үкендерә: азыраҡ уяуыраҡ булырға кәрәк иде, – тип тамамланы һүҙен Таһиров.

– Абзый, мин һеҙҙе аңланым. Революция утын үҙегеҙ тоҡандырҙығыҙ бит. Шуның уты хәҙер үҙегеҙҙе яндыра, юҡ итә.

– Мин, энекәш, андый ҡәтғи һығымта яһамас инем. Октябрь революцияcы ҡотолғосоз иде. Әгәр дә һин хәлде күҙәтеп барған булһаң, 1917 йылдың йәйендә Ваҡытлы хөкүмәт власть булыуҙан туҡтаны. Уның распоряжениеларын, бойроҡларын бер кем дә исполнять итмәй ине.

– Сөнки Ленин «Никакой поддержки Временному правительству!" тип ҡотортто бит, – тип бүлдерҙе Таһир.

– Хикмәт Ленииндың ҡотортоуында түгел. Хикмәт Ваҡытлы хөкүмәттең батша самодержавиесының серегән политикаһын давам итергә маташыуында. Халыҡ күптән туйған, алйыған суғышты дауам итеүҙә. Әйткәндәй, һине, энекәш, Вәлиди армиясында булған, тиләр.

– Булдым. Мин офицер бит. Һеҙҙеңсә әйтһәк, мулла балаһы. Минең урыным шунда ине. Башҡорт автономияһы өсөн көрәш барғанда мин нисек ситтә ҡалам?

– Автономияға ысынлап та ирешербеҙ, тинегеҙме ни?

– Нисек инде, ирешербеҙ? Башҡортостанда автономия урынлашты бит инде.

– Юҡ, туған, автономия алай булмай. Ғәмәлдә Башҡортостанда бер ниндәй ҙә автономия юҡ. Москвада беҙгә ышанмайлар. Мин уйлайым, Москва идара итү рычагларын барыбер үҙендә ҡалдырырға тырышыр. Хәйер, бу турала беҙ һинең белән бер утырып һөйләшербеҙ әле.

Шул төндө Таһировты сираттағы һорау алыуға саҡырҙылар. Камераға ул ҡабат әйләнеп ҡайтманы.

(Аҙағы киләһе һанда.)

Марис
НӘЗИРОВ

ЙӘНЕМ АСЫҠ ЯҢЫ ЙЫРҒА

Саҡырғас та ҡайттым, тыуған яғым

Саҡырҙың да — ҡайттым, тыуған яғым,
Ҡорған нигеҙемде ҡалдырып,
Донъя ҡотон күргәс,
Маңлай тирем тамған ерҙә
Игелектәр утын яндырып.

Саҡырғанға ҡайттым, тыуған яғым,
Кәрәк булғаныма һөйөнөп.
Ир ҡорона кергәс,
Кендек ҡаның тамған ерҙә
Йәшәү — бәхет, һөйөп-һөйөлөп.

Саҡырғас та ҡайттым, тыуған яғым,
Бөтөнләйгә, башҡа китмәҫкә.
Ғүмер тажын үргәс,
Ҡеүәт өргән тере һыуҙың
Тамсыһын да бушҡа түкмәҫкә.

***

Гонаһтарың самаһыҙҙыр, әҙәми зат,
Шул тиклем дә шашмаҫ ине был тәбиғәт.

Сабыйҙар күҙ йәшенәндер донъя тулған,
Ауылдарҙы, ҡалаларҙы баҫа туфан.
Ут аттыра тауҙан ап-аҡ ҡарлы тынлыҡ,
Ялҡын бағанаһын ҡаплай ҡараңғылыҡ.

Марис Нәзиров (1949) Саҡмағош районының Үрнәк ауылында тыуған. “Саҡмағош мәғлүмәт үҙәге" редакция-нәшриәт комплексы дәүләт унитар предприятиеһы директоры булып эшләне. Бер үк ваҡытта “Игенче" һәм “Саҡмағош саҡкылары" гәзиттәренең баш мөхәррире лә булды. Тиҫтәнән ашыу шиғыр китаптары авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.Саҡмағошта йәшәй.

Әсәләр әрнешенәндер бындай мәхшәр,
Илдәр йөрәгенә ирҙәр ҡаҙай хәнйәр.
Туғандары менән туған яғалаша,
Ата — улды, ул атаны дарға аҫа.

Нисек тыныс ҡала алһын был тәбиғәт,
Вайымһыҙлыҡ уға яҙыҡ, сит-ят сифат.
Күпме ҡаза йәшен йәшнәп, күк күкрәүҙән,
Күпме ғазап-юғалтыуҙар ер тетрәүҙән.
Ҡарғыштармы лава булып ергә тулған,
Ҡабатланғас ҡына Помпей, тына вулкан.

Был тәбиғәт тыныс ҡына нисек булһын:
Диңгеҙ кибә, сүл күсенә, үрсей упҡын.
Хатта ҡояш, һис аямай, ут осора,
Ай тотола, магнит дауылы ҡотора...

Ҡазаларҙан яҡлар, тиһәң, был тәбиғәт,
Гонаһтарҙан арын, паклан, әҙәми зат.
Күҙ йәштәрен киптер, сафлан, әҙәми зат,
Выждан ғазабынан һаҡлан, әҙәми зат!

* * *

Тағы ҡышты имен сыҡтыҡ.
Сәпсек тиклем генә йөрәк
Түҙҙе зәһәр һыуыҡтарға.
Тәҙрәм тулы яҙғы ҡояш,
Боҙ һөңгөләр ҡыйыҡтарҙа.

Был һөңгөләр иреп тамыр,
Диңгеҙ көҫәп ағыр йыраҡ —
Гөрләүектәр ҡуйынында.
Күкрәк тулы яҙғы ҡояш,
Тәнем нурға туйынырға.

Ҡойондорғас наҙлы нурға,
Тауҙай боҙон ҡағыр йөрәк,
Мөхәббәткә һыйыныр ҙа.
Имен сыҡтыҡ тағы ҡышты,
Йәнем асыҡ яңы йырға.

Яман күҙҙән һаҡла, Хоҙай!

Яман һүҙҙән һаҡла мине,
Һаҡла, Хоҙай, яман күҙҙән!
Һыуҙар кискәс, боҙҙар киҫтем,
Һалҡындарға түҙҙем, түҙәм...
Үҙем һалған һуҡмаҡ йөҙөн
Айыр, Хоҙай, башҡа эҙҙән!
Ҡырыҫ йәй ҙә ҡыҫыр түгел,
Татлы емеш өҙҙөм, өҙәм...

Яҡты күҙҙә юлым өҙмә,
Нур һүндермә, Хоҙай, күҙҙән!
Бурандарға ҡаршы барып,
Көрттәр йырҙым, йырам теҙҙән...

Ғүмер көҙөм — ҡуҙлы күмер,
Яңы усаҡ дөрләр тиҙҙән.
Осҡон услап, ялҡын сөйҙөм,
Шиғыр итеп теҙҙем, теҙәм.

Яҙҙар ҡат-ҡат килһен наҙлап,
Имен кергәс ҡышҡа көҙҙән.
Яман күҙҙән һаҡла берүк,
Һаҡла, Хоҙай, яман һүҙҙән!

* * *

Их, ауылым бөтә микән инде,
Китә микән инде ҡот ерҙән?
Бер урамда йөҙләп һыйыр ине,
Үләндәрҙән болот ҡубыр ине...
Хәҙер юлда туҙан күтәрелмәй,
Хәҙер һөйөнсө тип эттәр өрмәй,—
Ун биш һыйыр ҡайта көтөүҙән.

Күрше урамдарҙың көтөүе лә
Ишле маллы түгел, көтөк кенә.
Наҡыҫ мал аҙығын юллап арып,
Кибеттәрҙән импорт майҙар алып,
Биҙгән халыҡ һыйыр тотоуҙан.
...Их, ауылдар бөтә микән инде,
Китә микән инде ҡот ерҙән?

* * *

Ситлектәге ҡоштай бәргеләнде
Күкрәгемдә һиңә моңдарым.
Йәш сағыңда һөйөп ҡалырға тип
Һин ашыҡтың, ә мин һуңланым.

Иң бәхетле төндәремә әйҙәп,
Көндәремдә ҡалды мең аҙым.
Һин килеүгә эҙем һалырға тип
Мин ашыҡтым, ә һин һуңланың.

Йөрәк тибештәре тибрәндерә
Ғүмер ҡылдарының сыңлауын.
Яҙмыш һуҡмаҡтарын бер итергә
Мин һуңланым, һин дә һуңланың.

* * *

Ауыл урамынан уҙғанда ла
Тыныс түгел хәҙер, ҡурҡыта.
Ғүмер ишек бикләмәгән халыҡ
Йорт аралаш уҫал эт тота.

Ҡурҡҡанға ғына ҡуш күренмәй,
Ҡөсөгө лә бурһыҡ ҙурлығы.
Йән ереңә ырғып теш батырһа,
Зәғифләнһәң — әҙәм хурлығы!

Ауыртыуға әллә сыҙарһың да...
Һығылырһың уйҙар ауырға:
Яңғыҙ әбекәйҙәр магазинға
Сәй алырға ҡурҡа барырға.

Аттан бейек таш ҡоймалар буйлап
Бабайҙарға ҡыйын атлауы...
Шулар өсөнмө ни окоптарҙа
Башты иҙҙе туптар шартлауы?!

Уйлап баҡһаң, бер ҙә ҡурҡаһы юҡ
Ажғырыптар эттәр өргәндән.
Ғәмәлдә бит улар шәфҡәтлерәк,
Аҡыллыраҡ аҙғын ирҙәрҙән.

Иҫәр ҡатындар ҙа бер туҙынһа,
Ҡоторған эт кеүек яуыздар.
Йәбешәләр кеше өлөшөнә,
Тартып алған кеүек ауыҙҙан.

Ихатанан һыуға сыкканда ла
Тура килә таяҡ алырға.
Ауыртҡаны тәндең йығалмаһа,
Һығылаһың уйҙар ауырға.

Ғүмер ишек бикләмәгән ауыл
Йорт аралаш хәҙер эт тота.
Этте тыйып була.
Иман юйған
Эт бәндәләр нығыраҡ ҡурҡыта.

* * *

Аҙбарында һыйыры ас,
Улағында юҡ һалам да...

Сана төбөнә һалған да
Һатып йөрөй өй беренсә
Ферма силосын.

Һүҙ ҙә әйтмәй алалар,
Йөҙ грамды һалалар,—
Иң хәтәре шуныһы...

Ә өйҙә
Йәш балаһы
Һөткә тилмерә,
Илап ята бишектә.

Айнытырға ине
Был ирҙе,
Аңлатырға ине
Атайлыкты нисек тә...

Уятырға ине илде!

Тимәк...

Әле иҫәнмен икән,
Тимәк, мин кәрәкмен.
Кемдер мохтаж тыңларға
Тибешен йөрәктең.

Тимәк, әле файҙам бар,
Түгелмен һис артыҡ.
Утым тейеш янырға
Төндәрҙе яҡтыртып.

Тимәк, бар бит тояһы
Таңда ел иҫкәнен.
Яҙҙа бөрө асылғанын,
Тирәктәр үҫкәнен.

Тимәк, кемдер көтәлер
Йыуатыу һүҙемде.
Хуплау өмөт итәлер
Һынауға түҙемле.

Тимәк, тейеш төшмәҫкә
Ҡулымдан ҡәләмем.
Ҡояшына көндәрҙең
Кәрәкмен әле мин.

Йәшәйбеҙ әле

Ана, үлән ташҡа сирәм үргән,
Көсө иҫтәр китмәле.
Салғы сыңлар саҡҡа ла етербеҙ,
Әле йәшәйбеҙ әле.

Ана, сейә аҡ күлдәген кейә,
Бәхетле кәләш мәле.
Емеш бешкән сағын да күрербеҙ,
Әле йәшәйбеҙ әле.

Ана, көсөк сабып уйнай нисек,
Бер ҙә бөтмәҫтәй хәле.
Эт етәкләп болонда йөрөрбөҙ,
Әле йәшәйбеҙ әле.

Бына, күҙ һирпеп йәш, нур йота йөҙ,
Ә йөрәк түгел бәйле.
Битте яҙғы ҡояшҡа ҡуябыҙ,
Әле йәшәйбеҙ әле!

Рамай
ҠАҺИР

Аҙашҡан ел

Киң ҡанатлы дауылдарҙың
Аҙашҡан ҡарт бер тыны.
Эҙләп тишек-тошоҡтарҙы
Төн буйына ярһыны.
Ул төнлөктән өйгә инде
Этләшеп, бер сәбәпһеҙ.
Янған шәмде һүндерҙе лә –
Хәлһеҙ ауҙы, әҙәпһеҙ.
Ел-дауылдар сығарырлыҡ
Юҡ уның, беләм, көсө.
Шундай аҙашҡан елдәргә
Юлдаш булма һин, кеше!
Бейек үрҙәргә менерлек
Эҙлә, тап үҙ юлыңды.
...Ҡояш һүндерерҙәй булып –
Аҙашҡан ел туҙынды.

Күктәргә менеп һайрайым!

Ҡайҙа баҫып һайрайым һуң,
Әйтегеҙ, ҡайҙанырaҡ?
Ни тиһәң дә, күңел йырлай,
Йөрәгем ҡайнарырaҡ?!
Ниндәй эштәр башҡарайым
Халҡыма файҙалырaҡ?
Яҡты хыялдар ҡорғанда

Рамай Ҡаһир (1962) Учалы районының Өргөн ауылында йәшәй. Яҙыусылар союзы ағзаһы.

Йөрәгем — ҡайнарыраҡ!
Һабантурғай төҫлө күңел,
Моңло ҡош кеүегерәк.
...Күктәргә менеп һайрайым —
Күктәрҙә бейегерәк!

Ижад күгем

Уҡ атһалар, бөркөт ситкә шыҡый,
Бейек күккә китә һауалап.
Йылғыр һунарсылар аҫта ҡала,
Эттәр ҡала өрөп, абалап.
Миңә төбәп зәһәр һүҙ атһалар,
Күктәремә китәм һауалап.
Бында рәхәт, бында шундай иркен,
Ергә төшәм йәнде дауалап.
Күңелемдә тыуған хистәремде
Аҡ ҡағыҙға ҡоям самалап.
...Ижад тигән төпһөҙ күктәремде —
Фәрештәләр һаҡлай, ҡамалап.

Мәңгелек

Янам, янам туҡтамайса,
Мин бер шәм филтәһендәй.
Тотош ғүмерем, әйтерһең,
Яҡты нур көлтәһендәй.
Илһам килә, илһам бөтмәй,
Шәмдәге кәрәсиндәй.
Һандуғастай һайрай күңел
Йә гөрләй күгәрсендәй.
Бер көн килеп шәмем һүнер,
Ғүмер — шәм филтәһендәй.
...Рухым ҡалыр киләсәккә
Яҡты нур көлтәһендәй!

Тере Салауатыбыҙ!

Бөтөп бара, имеш, тиҙәр,
Һеҙҙең башҡорт затығыҙ.
Бары таш һын ғына, тиҙәр,
Һеҙҙең Салауатығыҙ.
Алдай улар, ышанмағыҙ:
Тере Салауатыбыҙ!
Имән ағасындай ныҡлы
Беҙҙең башҡорт затыбыҙ!
Теләһәгеҙ, йөрәгемә
Мылтыҡ терәп атығыҙ!
Үҙ һүҙемде кире алмам:
Тере Салауатыбыҙ!

Беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәй
Уның рухы, булмышы,
Ул бит тыуған еркәйемдең
Тынмаҫ һайрар бер ҡошо.
Гөрләп сәскә ата бөгөн,
Башҡортостан — йортобоҙ.
Беҙҙең йөрәк түрҙәрендә
Йәшәй Салауатыбыҙ!
Теләһәгеҙ йөрәгемә
Мылтыҡ терәп атығыҙ,
...Үлгәндә лә ҡабатлармын:
Тере Салауатыбыҙ!

Булайыҡ Салауаттай!

Йырҙар яҙып күпме кеше
Беҙҙең күңелде сафлай.
Бәлки, улар шағир булыр
Берәй саҡ Салауаттай.
Күпме кеше күңелендә
Әҙәп һәм намыҫ һаҡлай.
Ышанам мин: улар булыр
Иманлы, Салауаттай.
Ана, донъяға һоҡланып
Гонаһһыҙ сабый атлай.
Ул да халҡым тиеп яныр
Берәй саҡ Салауаттай.
Минең хыял-өмөттәрҙе
Ошо кешеләр аҡлай.
...Эй, заманым кешеләре —
Булайыҡ Салауаттай!

Ҡояшлы бер ғүмеркәйем

Шиғриәт — минең ҡояшым,
Ул — күңелем яҡтыһы.
Һеҙҙең йөрәктәргә төшһөн
Уның мең-мең саткыһы!
Яҡтырып китһен күңелдәр,
Бөгөн бит шундай байрам!
Шиғриәт ишеген асып,
Мин һәр саҡ ҡалам хайран.
Тылсымлы бер донъя бит ул,
Ҡарап туймаҫ хозурлыҡ.
Шунда ныҕына ҡанаттар
Йыһандарға осорлоҡ.
Унда барып инеүҙәре —
Үҙе бәхет, ғорурлыҡ.
...Ҡояшлы бер ғүмеркәйем
Йөҙ ғүмергә торорлоҡ!

Ҡалала йәшәүсе ауыл ҡыҙына

Һине мин күреп-белмәйем,
Һүҙҙәрең генә таныш!
Уларҙа юҡ ығы-зығы,
Юҡ уларҙа буталыш.
Һине мин күреп-белмәйем,
Күҙҙәрең генә таныш!
Нурлы күҙҙәреңә тулған
Мөлдөрәмә наҙ-һағыш.
Һин — бер ябай ауыл ҡыҙы,
Аңлайым хәлдәреңде.
Таш һарайҙар араһында
Юғалтма йәмдәреңде!
Беҙҙең юлдар — ике яҡта,
Уртаҡтыр — бары һағыш,
Һин — зәңгәр баҫыу сәскәһе,
Мин — шунда үҫкән арыш!

Юлдаш

Аҡ донъяға һөрән һалып,
Ҡот-нур өҫтәп сабый тыуғас,
Һәр баланы ҡаршы алһын
Һәм һаҡлаһын Хызыр Ильяс.
Изге уйлы һәр кешегә
Алыҫ юлда булһын юлдаш
Бәлә-ҡазанан һаҡлаусы,
Ҡурсалаусы Хызыр Ильяс.
Яҡты донъяға һоҡланып
Бер саҡта ла күңел туймаҫ,
Һәр кешегә шул тойғоно
Бүләк итсе, Хызыр Ильяс!

Әүлиә итеп күрәмен...

Инҡар итеп булмағандай
Гөл тулы баҡсаларҙы,
Әүлиә итеп күрәмен
Үҙемдән башҡаларҙы.
Һәйбәт кеше — минең өсөн
Әүлиәләр затынан.
Йәштәренән дәрт аламын,
Үрнәк алам ҡартынан.
Урыҫмы ул, чеченмы ул —
Барыһы миңә туған.
...Уларһыҙ мин Ер йөҙөндә
Ни бары бер саң-туҙан.

Алма

Байрас улыма

Улым, һиңә алма бирәм,
Бешкән генә, көҙгө алма.
Алма ҡортло булһа, улым,
Йөрәгеңә яҡын алма.
Тыштан мин, беләм, һәйбәттер,
Тик насарҙыр, бәлки, холҡом.
Ошо холҡом арҡаһында —
Әллә күпме уттар йоттом.

Тыштан һәйбәт күренһәм дә,
Ҡортлағандыр, бәлки, күңел.
Тормош асылдары, улым, —
Тышҡы матурлыҡта түгел!
Тормош ауыр, бер саҡта ла
Башҡаларға ҡайғы һалма!
Астан үлеп барһаң да һин,
Кеше малын, зинһар, алма!
Алмағастың тамырынан
Йөҙ төп алма үҫә ала.
...Мин улыма алма бирҙем,
Ҡыуанғандай булды бала.

Зәңгәр сәскә

Вәсилә ҡыҙыма

Көҙҙөң ҡояшлы көнөндә
Тыуҙың донъяға.
Шуның өсөн күҙҙәреңдән
Сихри нур аға.
Һин шатлыҡ, өмөт өҫтәйһең
Күңел хисемә.
Тәүфиҡлы һәм матур булып
Үҫ һин, Вәсилә.

Һине оҙаҡ күрмәй торһам,
Күҙҙәр йәшкәҙәй.
Ҡыҙым, ергә матурлыҡ сәс,
Зәңгәр сәскәләй.
Баҡсаларҙа гөл орлоғо —
Гөлдән сәселә.
...Бар донъяң булһын Ҡөрьәнле, —
Ҡыҙым Вәсилә!

Көнсел

Минең күңел — мәмерйә,
Кем ингән дә кем сыҡҡан?
Ҡемдер унда аҙашҡандыр,
Кемдер унда тонсоҡҡан.
Берәү унда ышыҡ тапҡан
Ғәйрәтле ел-дауылдан.
Бәлки, кемдер өшөгәндер —
Алмағыҙсы ауырҙан.
Берәү уның түрҙәренә
Матур һүрәт төшөргән.
Берәү унда сүп-сар өйөп,
Рәхәтләнеп төкөргән.
Ыңғай шарттар ҙа юҡ унда:
Ҡырыҫ, тар һәм ҡараңғы.
Ана, берәү шәм ҡабыҙғас —
Яҡты нурҙар таралды.

Һинең күңел — алсаҡ ҡояш,
Миңә төшһөн бер нуры.
...Мәмерйәләрҙә беленә
Яҡтылыҡтың ҡәҙере!

Һин булғанға...

Бал һаҡлаған бал ҡортондай,
Йәлләмәйсә саҡ мине.
Йәшен тубына әйлән һәм
Һә тигәнсе тап мине.
Әйҙә, шартлайыҡ икәүләп,
Рәхәт — бергә шартлауы.
Мөмкин түгел ғашиҡтарҙың
Берен бере тапмауы!

Һунарсының ҡулындағы
Мылтыҡ булып ат мине.
Йә сит яҡҡа, башҡиҫәргә
Һин ҡол итеп һат мине.
Ҡол булһам да, ирек, тиеп
Ашҡыныр күңелкәйем.
...Һин булғанға — мөхәббәтле,
Бәхетле ғүмеркәйем!

Ҡояш һәм муйыл емеше

Люциәгә

Иһ, ҡояшым! Күңелемә
Мөхәббәт булып уйыл.
Тәү күреүҙән ғашиҡ булдым
Һиңә, мин — моңһоу муйыл.
Иһ, ҡайнар ине ҡосағың —
Йә рәхәт, йәки ҡыйын.
Ғашиҡтарҙы тилертә шул
Мөхәббәт тигән уйын.
Мин — тик тәбиғәт емеше,
Тыуҙым һәм үләм быйыл.
Ә һин мәңге йәш ҡалаһың,
Етәр, наҙлауҙан тыйыл!
Иһ, һылыуым! Хәтеремә
Тик ҡояш булып уйыл.
...Мәңгелек һине үҫләрмен:
Мин — кипкән күҙгө муйыл.

Яурындарым төшкән...

Яурындарың төшкән һинең,
Һаулығың бөткән.
Әйтте бераү: "Үпкәләмә —
Әжәлең еткән".
Иһ, был донъя үҫ китмәле:
Ергә ҡар төшкән.
Иһ, йәшәйһе килә, ләкин —
Яурындар төшкән.
Йәйҙәр етте. Туғайҙарҙа
Еләктәр бешкән.
Кинән тормоштан, тип ҡояш
Иркәләй күктән.
Бар өмөтөм балаларҙа,
Улым   ҙур үҫкән!
Минең холоҡ-фиғелдәрем
Шуларға күскән.
Йылдар үтә. Шатлыҡ көтәм,
Сабыр ул, көткән.
Миңә үлем юрағандар
Юғалып бөткән.
Бераү ҙә түгел мәңгелек —
Йәшәнем, шөкөр.
Яурындарҙан фәрештәләр
Барыбер төшөр.
Минең тормошом ҡояшы
Байыуға табан;
...Яурындарымды турайтып
Йәшәйем һаман!

Риф
ДАУЫТ

«ЙӨРӘКТӘН ҮТӘ ҺЫМАҠ...»

Ашъяулык

Башҡортостан — ашъяулыҡ,
Ашъяулыкта ашамлыҡ.
Ҡунаҡ килгән: үҙ иленән
Типкеләнгән — ташландыҡ.

Ниндәйе юҡ ҡунаҡтың,
Ас бүреләр һымаҡтың;
«Буш»ты ейеп, үҙе туйып,
Күҙе туймаҫ ҡорһаҡтың.

Хужа йөрөй йүгереп,
Ҡунағын яҡын күреп;
Тере болон, бар мәғәнен,
Ерен дә бүлеп биреп.

Ил байлығы — уртала,
Ҡунаҡ йөҙә туртала.
Ә үҙ халҡы, тамшанышып,
Сүкәйешкән түпһала.

Риф Дауыт (1941) Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Миртирәк ауылында тыуған. ББУ-ны тамамлай, оҙаҡ йылдар Хәйбулла районында, Ырымбур өлкәһендә балалар уҡыта. Хәҙер хаҡлы ялда, Медногорск ҡалаһында йәшәй. Яңы ғына “Китап" нәшриәтендә"Әле генә яҙ яҙ ине..." тигән шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡты.

Хужаларға бир һаулыҡ —
Супләп бөтмәҫлек тауыҡ.
Халҡын ҡыҫып, ситте һыйлап,
Илен иткәс ашъяулыҡ.

Ҡире алдың

И, Хоҙайым! Билдәһеҙ бер
Бөйөк көсө оло Ерҙең!
Һин мине лә бар ҡылдың да
«Йәшә» тиеп ғүмер бирҙең.

Ғүмер бирҙең... Унан инде
Был донъяла йәшәр көндә,
Кешеләргә ни кәрәкһә,
Бирҙең миңә бөтәһен дә.

Ҡулға бирә алмағанға
Һин үҙемде илтеп һалдың.
Тик, ни бирһәң үҙ мәлендә,
Барыһын да ҡире алдың.

Алдың бала саҡтарымды,
Йәшлекте лә ҡире алдың;
Биреп тороп, энә осондай
Бәхетте лә тиреп алдың.

Бөгөн тағы олпатлығым
Алып киткәс, ҡартлас итеп,
Алырһың шул үҙең биргән
Һулышты ла, бер мәл етеп.

Алырһың... Тик ни мәғәнә
Бар биргәнең елгә туҙғас?
И, Хоҙайым! Ниңә мине
Бар ҡылдың һин шулай булғас...

Ғүмер юлы

Сәңгелдәктән ҡолап төшкәс
Ҡанатһыҙ себеш һымаҡ,
Әсәй әйткән: «Тупһаһаса
Юл, улым, әле йыраҡ».

Булғанмы ул йыраҡ, ләкин
Торолмаған һис уйлап:

Шыуа торғас, тупһанан да
Төшкәнмен тышҡа ҡолап.

Шул саҡта ла әйткән әсәй:
«Ҡапҡа бит, улым, алыҫ».
Башлаған миндә тағы ла
Ҡапҡаға тиклем алыш.

Алышҡас, ашҡан моратым —
Йөрөлгән урам буйлап.
Һыу юлын да тапағанмын,
Һары бәпкәләй уйнап...

Бер саҡ урам аша уҙып,
Баҫыуға юл алғанмын.
Унан, моҡсайҙы артмаҡлап,
Ил юлын юллағанмын.

Ил юлынан барам һаман.
Ил юлы йыраҡ, йыраҡ...
Ил юлҡайы — ғүмер юлы
Йөрәктән үтә һымаҡ.

Һин ҡайҙа?

— Бәхет, һин ҡайҙа? — тинем мин
Бала сағымда.
Ул өндәште мине әйҙәп:
— Әйҙә! Алдыңда!

«Алдамын» тигәс бәхетем,
Ашыҡтым алға:
Йәй — гөлдәргә, ә ҡыштарын
Күмелеп ҡарға.

Хыялымды ҡанат итеп,
Тауҙарға аштым;
Уйҙарымды дауыл итеп,
Дарьялай таштым.

Ҡайҙа ғына ынтылһам да,
Бәхеткә тинем.
Ошо өмөт менән өс ҡат
Әжәлде еңдем.

Бына бер саҡ ҡанат талды,
Ҡамил арыным.

Ҡабатлап: «Бәхет, ҡайҙаһың?» —
Тиеп һораным.

Ә ул шарҡылдап көлдө лә:
— Мин артта! — тине.
Эй, яҙмышым! Ниңә үкһеҙ
Шаярттың мине?!

Бер ҡарауың етте

Шул тиклем дә өйөрмәле
Һуҡыр буран ине.
Йылға шымған. Бөтә ерҙәр
Сатнап туңған ине.

Хыялдағы бәхетем дә
Шундай йыраҡ ине,
Яҙ ҡабаттан төйәгемә
Ҡайтмаҫ һымаҡ ине.

Бары һинең бер йылмайып
Ҡарауҙарың етте:
Ҡар ирене, йылғаларҙан
Шаулап боҙҙар китте.

Туңып барған йөрәк түрен
Сорнар моңо килеп сиртте.
Гөл-сәскәгә сорнап-төрөп,
Һөйөү ҡабат әсир итте.

Үкенмәйем

Иртәләгән — ҡалъяһынан өлөш алған,
Һуң килгәс ни, миңә бары һурпа ҡалған.
Һуңлап һөйҙөм — һылыуҙары өләшенгән.
Тик булғаны ғына йәрҙең миңә яҙған.

Ҡайҙа ла мин һуңға ҡалам, һуң ҡайтҡанға,
Һуңлап торам, әллә инде һуң ятҡанға;
Әллә инде Ҡояш ҡынам, йоҡом йәлләп,
Үҙ шәүләһе бөткәс мине уятҡанға?

Ҡалайтайым, башҡортҡа аң һуң килә шул,
Һуң килһә лә, түй һыйылай, мул килә шул.
Үкенмә һис, байғош йәнем, һуңлаһаҡ та,
Һуң килгәндең бөтәһе лә уң килә ул.

Белә микән?

Аҫыл балаҫ аҫыллыҡтан көнгә уңмаҫ,
Аҫыл булған өсөн уға саң да ҡунмаҫ.
Батырҙы ла, бахырҙы ла тилертер бер
Һылыу булыр, әммә һиндәй һылыу булмаҫ.

Килмәгән бер ер генәң юҡ — ирән бит һин,
Минең кеүек байғоштарға ирәм бит һин:
Оло йыһан сатырының күк йондоҙо —
Ер тормошон биҙәүсе бер эйәм бит һин.

Һине күреү менән балҡый Ҡояш йөҙө,
Көнләшеүҙән тоноҡлана Айҙың күҙе.
Ер йөҙөндә ошондай ҙа илаһи бер
Һын барлығын белә микән Илаһ үҙе?

Әбәк әйтеп

Әбәк әйтеп алып китте
Һөйөүем мине.
Алып китте лә: “Мин ҡайҙа,
Шунда бар” , — тине.

Ә мин, иҫәр, уны тыңлап,
Ҡайҙа барманым.
Юл уңманы, ә кирегә
Ҡайта алманым...

Аманат

Йүнсел, тапһа йөҙ һумлыҡ,
Һалып ҡуйыр кеҫәгә.
Йүнһеҙ, тапһа мең һумлыҡ,
Әйләндерер шешәгә.

Ах, был шешә тигәнең:
Арыҫландай ирҙәрҙең
Аңын ашап, ваҡытһыҙ
Бөгә икән билдәрен.

Мин дә бер саҡ ир инем,
Кирә баҫҡан кир инем;
Ерем көйрәп ятһа ла,
Гөл үҫтерәм, тир инем.

Миңә донъя киң ине,
Оло маҡсат бар ине;

Хыял — алтын ҡанатлы,
Өмөт ҡошом һар ине.

Донъя көткәс — әҙәп бар,
Әҙәп арты — ғәжәп бар;
Ни нитһәң дә, шул “ни” ҙе
Йыуа торған ғәҙәт бар.

Бер тыуарға — бер “ярты”,
Һәнәк бесән — бер “ярты”...
Донъя көткәс, нишләйһең,
Һәр нәмәнең үҙ шарты.

Әммә бер мәл аңланым
Батҡаҡлыҡҡа батҡаным.
“Йәшел йылан” өңөнә
Әсирлеккә ҡапҡаным.

Әҙ булманы тилереп
Айтайларға ҡалҡҡаным.
Ҡалҡҡан һайын шешәнән
Сығыр әмәл тапманым.

Уң яҡтан семтей намыҫ,
Һулымдан төртә “бахмур”.
Ҡайһыһына булалмай,
Башты эйәм мин, бахыр.

Тар шул шешә ишеге,
Ишегендә бөкөһө;
Сусҡа булып мырҡылдай
Тирәмдәге көллөһө.

“Көллөләр“гә ҡараһам,
Һығыла миндә һыҙланыс.
Ә үҙем һуң! Башҡаға
Түгелменме ҡыҙғаныс?

Шулай уйлап, ихтыяр
Көсөн туплап, шешәгә
Бер тондорҙом елләнеп,
Ҡабырғаһын тишмәгә.

Тиштем. Сыҡтым ситлектән,
Тик сығыуҙан ни файҙа?

Йәшнәр йәшлек, кир сағым,
Дәртем, кәрем һуң ҡайҙа?

Алтын ҡанат — хыял юҡ,
Өмөт, маҡсат — ул да юҡ;
Киң донъям да тарайған,
Ал-артымда юл да юҡ.

Күккә баҡһам — ҡанат юҡ,
Ергә баҫһам — аяҡ юҡ;
Дуҫ-туған юҡ тирәмдә,
Таянырға таяҡ юҡ.

Шуға һеҙгә, башҡорттар,
Яҙмаҡ булдым аманат.
Миндәй, һеҙҙең арттан да
Эйәрмәһен яманат.

Аңыңа ал, башҡортом:
Хәмер эсеп булма туҡ!
Эсһәң, унан һауа юҡ,
Табиптарҙа дауа юҡ.

Булһа ла, йән ғазабын
Баҫа торған дарыу ул.
Уныһы ла химикат:
Нефть — шул уҡ ағыу ул.

Эскең килһә, бөткәнме
Ҡымыҙ, һуты емештең...
Эсмә хәмер! Эсһә, кем
Етештергән — шул эсһен!

Хәмер башҡорт халҡына
Ярай торған нан түгел!
Башҡорт ҡаны хәмерҙе
Үҙләштерер ҡан түгел!

Һүҙем шәйләп, башҡортом,
Аңлы аңла, башҡортом!
Һай, башҡортом, башҡортом,
Бауыр итем, баш ҡортом!

“Ағиҙел"дә ҡунаҡта — Яңауыл яҙыусылар ойошмаһы

ИЖАД ДӘРТЕ МЕНӘН

“Башҡортостандың төньяҡ ҡапҡаһы“ иҫәпләнгән Яңауылда ҡырҡ йылға яҡын “Замандаш“ әҙәби берләшмәһе эшләп килә. Бында төрлө райондарҙан йәш һәм башлап яҙыусылар йыйылған. Улар – төрлө жанрҙа яҙышҡан, төрлө профессия, төрлө йәштәге кешеләр.

Ижад эшен тағы ла йәнләндереү маҡсатынан сығып, 1992 йылдың октябрь айында Яңауыл ҡалаһында төбәк яҙыусылар ойошмаһы төҙөлдө. Төп маҡсаты – йәш һәм башлап яҙыусыларҙы берләштереү, улар ижадына йүнәлеш биреү, үҙ ваҡытында ярҙам күрһәтеү, талантлы йәштәрҙе тәрбиәләп, әҙәбиәт майҙанына сығарыу. Ошо ваҡыт эсендә 40-лап ҡулъяҙма тикшерелде. Күбеһе китап нәшриәтенә тапшырылды, ҡайһы берҙәре баҫылып сыҡты. Хәҙерге көндә ете яҙыусы Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы. Ойошмала даими рәүештә әҙәби-музыкаль, юбилей, хәтер кисәләре, күренекле яҙыусылар менән осрашыуҙар үткәрелә. Әүҙем ижад итеүселәрҙән Нәфисә Хәбибдиәрова, Рәис Раянов, Рәфиға Усманова, Эдуард Әғзәми, Кәүсәриә Шафиҡова, Фатима Ғилметдинова, Ҡаһим Әухәтов, Рәзиф Зөбәйеров, Әсҡәт Ғәлиев, Аида Хәйретдиноваларҙы айырып күрһәтергә мөмкин.

Урындарҙа әҙәби түңәрәктәр уңышлы эшләй: Нефтекамала – “Инеш”, Борайҙа – “Йәш бөрөләр”, Тәтешлелә – “Аҡ шишмә”, Яңауылда – “Замандаш”, Балтаста – “Танып тулҡындары”. Яңауыл яҙыусылар ойошмаһы үҙенең эшен мәктәптәр менән тығыҙ бәйләнештә тота, уҡыусылар ижадына ҙур иғтибар бүлә. Һуңғы ваҡытта Башҡортостан Яҙыусылар союзы менән берлектә Ҡариҙел, Асҡын, Балтас, Мишкә, Борай, Краснокама, Ҡалтасы, Тәтешле, Яңауыл райондарында күсмә семинарҙар үткәрелде. Хәҙерге көндә төрлө райондарҙа йәш авторҙар менән эш алып барыу, мәктәптәр менән бәйләнешкә кереү, халыҡтың ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу кампанияһында актив ҡатнашыу, урындарҙа китап һатыуҙы йәнләндереү, әҙәбиәтте пропагандалауҙы юлға һалыу кеүек эштәр менән мәшғүлбеҙ. Яңауыл район һәм ҡала хакимиәте башлығы Нәзир Заһит улы Зыязов хәстәрлеге менән, йәш яҙыусыларҙы ижад эшенә ҡыҙыҡһындырыу, тәрбиәләү ниәтенән сығып, 1997 йылда Ғәли Соҡорой исемендәге премия ла булдырылды.

Ойошма ағзаларының ҡайһы бер ижад емештәрен тәҡдим итәбеҙ.

Фәрит СУФИЯРОВ,
Яңауыл төбәк яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе.

Әхнәф МАЗҺАРОВ

Еңеү

Еңеүҙе мин тәүҙә төштә күрҙем,
Атыш тынғас ҡыҫҡа ваҡытҡа.
Винтовкамды ҡуйып баш аҫтына,
Йоҡомһорап киткәс окопта.

Күктә елберҙәгән ал байраҡҡа
“Еңеү“ һүҙе ҡайып яҙылған.
Байраҡ шундай иңле: Иҙелдән киң –
Берлин урамына һуҙылған.

Хур ҡоллоҡтан азат ителгәндәр,
Рәхмәт әйтеп еңгән һалдатҡа,
Йылмаялар ҡарап бейек күктә
Елберҙәгән нурлы байраҡҡа.

Күҙем асһам, тирә-яғым утта,
Ерҙең йөҙөн тырнай снаряд.
Бар кәүҙәһе менән һыҡрап ауа
Тамырын бомба өҙгән ҡуш нарат.

Ә батальон утлы өйөрмәнән
Күтәрелә яңы һөжүмгә.
Ауыр барыу, ләкин ил яҙмышы –
Яулап алған һәр бер еңеүҙә.

Төштә генә, бары төштә генә
Еңеп сығыу еңел тойола.
Хаҡ еңеүҙең ауыр юлдарына
Күпме һалдат ҡаны ҡойола.

Еңеүҙе мин һуңыраҡ өндә күрҙем,
Үтеп Иҙел – Берлин араһын,
Һәр тамсыһы өсөн ҡойған ҡандың
Фашист алғас тулы яҙаһын.

Еңеүҙе мин йөрәгендә күрҙем
Мең хәсрәтле илем халҡының,
Сабыйҙарға икмәк өләшкәндә,
Ситкә атып нәфрәт ялҡынын.

Күтәрелгән саҡта беҙҙең байраҡ
Утлы Рейхстагтың башына,
Йөрәктәрҙән аҡҡан ләғнәт һүҙен
Штык яҙҙы нигеҙ ташына.

Фәрит СУФИЯРОВ

Ер күрһәтмәй яраһын

Уйҙарымда – диңгеҙ тәрәнлеге,
Күңелемдә – баҫыу киңлеге.
Йөрәгемдән ташҡан хистәр ергә
Ләйсән ямғыр булып түгелде.

Күҙҙәремдә йәшлек ялҡыны бар,
Яҡты йондоҙ булып ҡабына.
Һулыштарым, йомшаҡ елдәр кеүек,
Үлән биттәренә ҡағыла.

Күктәреңдә күкрәүҙәрең булам,
Офоҡтарҙа мин дә йәшнәйем.
Ҡара ҡайғыларға ҡайғырамын,
Шатлыҡтарға һөйөнөп йәшәйем.

Тынғыһыҙлыҡ йәнде биләп алды,
Борсоуҙарым инә ҡаныма.
Ойоп торған тыныс уйҙарыма,
Заман еле килеп ҡағыла.

Сикһеҙлектәр биләй күңелемде,
Биләһә лә, беләм самаһын.
Ер шикелле сабыр булһаң икән –
Ул күрһәтмәй бер ҙә яраһын.

Ҡаһим ӘҮХӘТОВ

Мин – кеше

Маҡтаның һин яҡшы эшем өсөн,
Шундай рәхәт булды күңелгә.
Теләрһең дә бит һин ғүмер буйы
Мине шулай матур күрергә.

Тик шулай ҙа эшем, холоҡтарым
Ғүмер буйы булмаç бер ише.
Тиргәлермен: дуçтан дошман күберәк,
Мин фәрештә түгел, мин – кеше.

Бар тормошта йырлап уҙған юлдар,
Атлаған бар ҡарҙар йырып та.
Онотолоп йәшәр иркенлек бар,
Ярған саҡ бар ҡылды ҡырҡҡа.

Абынырмын, тағы юлланырмын,
Тик булмаһын ғәйеп итеүсе.
Елдәр ыңғайына тирбәлергә
Мин фәрештә түгел, мин – кеше.

Ер һәм ҡояш

Ҡалҡа ҡояш... Уҡ-нурҙарын ергә
Ҡоя ғына! Ҡоя ҡыҙғанмай.
Йөҙә ҡояш, көн оҙоно ерен
Һөйөп, наҙлап йөҙә – туялмай.

Бата ҡояш! Ерҙән китмәç өсөн
Моңһоу атлай, атлай иренеп.
Тау артында күптән, ә нурҙары
Оҙаҡ ҡала ерҙә эленеп.

Әй, ергенәм! Күпме тереклектең
Һөйгәне һин – ғүмер иткәне.
Бармы икән ерҙә берәй йәндең
Һинән туйып, биҙеп киткәне?!

Фәүәзит ӘХМӘТШИН

Хушлашыу

Керпегеңә көмөш ысыҡ ҡунған,
Йөҙҙәреңдә – һүрән яҡтылыҡ.
Өмөт кенә, бары изге өмөт
Күңелеңдә ҡалған аҡ булып.

Үткәндәрҙе, киләсәкте тейәп
Поезд китер тиҙҙән йыраҡҡа.
Өҙөлгән йыр кеүек, әйтелмәйсә
Һуңғы һүҙем ҡала йөрәктә.

Һуңғы тапҡыр күрешеүҙәр ҡыйын,
Ҡыйын икән тәүге йәр менән.
...Йәшлегемдән һине оҙатырға
Вокзалдарға килдем таң менән.

Венера ҠАҺИРОВА

Һаҡла уны

Донъя гүзәл, донъя матур
Күрә белгәндә генә.
Һин дәртле лә, һин көслө лә
Яна белгәндә генә.

Урман, һыуҙар дауа була
Һөйә белгәндә генә.
Тәбиғәт зарҙарын аңлап,
Көйә белгәндә генә.

Тәбиғәтте серҙәш итеп,
Яндарына бар әле.
Уның яраларына ла
Дауа булып там әле.

Беҙ йәшәгән ер-һыуыбыҙ
Үҙе Алла инде ул.
Һин уның бер балаһы бит,
Һаҡла уны – изге ул.

ШАҒИРҘЫҢ ИЖАД АРТЫЛЫШТАРЫ

Шағир Ирек Кинйәбулатов – бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙә иң емешле эшләгән әҙиптәрҙең береһе. Әле бер, әле икенсе тарафтарҙа әҙәбиәт көндәре үткәрелеп, шунда ҡатнашһынмы йә иһә әҙәби кисәләрҙә яныпярһып шиғырҙарын уҡыһынмы – барыһына ла өлгөрә, ваҡыт таба. Үҙе барған-күргән яҡтарҙан бына тигән кешеләр хаҡында очерктар яҙып, гәзит-журналдарҙа баҫтырып та сығара, ҡәләмдәштәренең ижадын күҙәтеп барып баһаларға ла, кәңәштәрен бирергә лә өлгөрә ул. Тыуған районының һәм яҡташтарының уңыштары менән ҡыҙыҡһынып тора. Ҡырмыҫҡалы районы йылъяҙмаһының бер өлөшө уның шиғырҙарында, очерктарында, юлъяҙмаларында тупланған. Һәр саҡ юлда, һәр саҡ халыҡ араһында И. Кинйәбулатов. Салауаттар, Аҡмуллалар, Ғафуриҙар традицияларын уңышлы дауам итә шағир, һәр быуын әҙиптәре ижадҡа илһамды халҡынан алған кеүек, ул да туған халҡынан көсҡеүәт ала. Халҡы менән бергә ҡайнап йәшәгәндә генә шағир ул. Ошо хаҡта бер шиғырында бик тапҡыр әйтеп бирә:

Бар шатлығым һеҙҙең менән бергә,
Бергә булһам, ҡайғым тарала.
Һәр саҡ сарсап осрашыуҙар көтәм,
Ҡалғым килә һеҙҙең арала,
Ҡалғым килә һеҙҙең арала.

Шағирҙар, яҙыусылар шуның менән бәхетле: уларҙы халыҡ күреп белә, танып тора, әҙәбиәт дәрестәрендә ижадтары өйрәнелә, китаптары кәштәләрҙә урын ала. Һүҙ тылсымы, ҡәләм ҡөҙрәте, тыумыштан бирелгән ижад һәләте ана шулай күтәрә әҙиптәрҙе.

Шағирҙың ижады хаҡындағы бер кәлимә һүҙемде уның 1970 йылда донъя күргән «Баҫыу юлы» китабынан башлағым килә. Исеменән күренеүенсә, шиғырҙар ауыл кешеһенең ауыр хеҙмәтен данлауға арналған. Бәләкәйҙән ҡара эшкә күнегеп, ергә ерегеп үҫкән шағир күңеленә ауыл тормошо яҡын. Нәҡ шунда ул тәүге сынығыу алып, ҙур тормош юлына аяҡ баҫа. Шағирлыҡ һәләте лә шунда бөрөләнә. Илһам шишмәләренең мул һыулы булыуы ғүмере буйы тыуған ауылы менән бәйләнеште өҙмәүенән килә. Шуға күрә ауылын «алтын бишек», «тел асҡысы», «йырға сығыр ишек» тип атауы тиктомалға түгел.

Ижадында иртә таңдан ҡара кискәсә баҫыуҙарҙа тир түгеп, иген үҫтереүсе уңған ауыл хеҙмәтсәндәренә дан йырлаусы шиғырҙар айырым урын алған. Был һыҙат уның бөтә ижадына хас. Игенсенең ҡул йылыһы менән һуғарылған өсөн икмәк йылы, тиелә бер шиғырҙа («Игенсе ҡулдары»), «ҡап-ҡара бураҙнанан күңелдәргә аҡ нур бөркөлә» тигән бик матур, образлы фекер әйтелә («Бураҙна»). «Ҡара бураҙна» һәм «аҡ йән» – ҡапма-ҡаршылыҡ, әммә нигеҙҙә ысынбарлыҡ ята: «аҡ йән», «аҡ нур»; йәшәү, тормош, муллыҡ, мәңгелек, ә «ҡара бураҙна» – ер. Унһыҙ тормош юҡ. Һәр ике төшөнсә бербереһенән айырылғыһыҙ.

Ауыл кешеһенең ауыр һәм маҡтаулы хеҙмәтен данлаған «Баҫыу юлы», «Һағынып ҡайтам еремде», «Ирәндектә иртә», «Бәхет игеүсе» шиғырҙары – шағир күңеленән сыҡҡан изге тойғолар гөлләмәһе ул. Игенсе һөнәре – төп һөнәр. Сөнки ул илде туйындыра. Илдә муллыҡ икән, кешеләр ҙә туҡ, бәхетле. Шуға күрә шағирҙың:

Игенсе һин,
Бәхет игеүсе һин,
Йәшәү йәшәй һинең иңеңдә,–
тигәнендә хаҡлыҡ бар.

(«Бәхет игеүсе»)

И. Кинйәбулатов ғүмеренең бер осоро диңгеҙҙә хәрби хеҙмәттә үтә. Әлеге йыйынтыкта был хаҡта ла шиғырҙар урын алған. Уларҙың йөкмәткеһе шундай: диңгеҙҙең ҡеүәтле сал тулҡындары ниндәй генә көтөлмәгән хәлдәргә ҡуймаһын, матрос һис тә баҙап ҡалмай. Тик көслө рухлылар, ҡыйыуҙар ғына диңгеҙҙә хеҙмәт итә, ил алдындағы бурысын намыҫ менән үтәй. Йәш кешене диңгеҙ сыныҡтыра, ауырлыҡтар алдында баш эймәҫкә өйрәтә. Үҙенсәлекле тормош мәктәбе ул диңгеҙ хеҙмәте:

Матрос сыҡты шыбыр тиргә батып –
Рәхимһеҙ ул диңгеҙ ҡуйыны.

Ғәҙәти тормошта ла шулай күнеккән шағир. Шуғалыр ҙа әҫәрҙәрендәге лирик герой – яуаплылыҡ тойоп, хәҡиҡәтте эҙләп, һүҙҙең тураһын әйтеп, намыҫлы хеҙмәттә ҡайнап йәшәүсе шәхес. Ул шулай тәрбиәләнгән, бүтәнсә йәшәй алмай, башҡаларҙан да шуны талап итә. Бөгөнгө менән генә түгел, киләсәк тип йәшәй, шуның өсөн көрәшә, яна, эҙләнә И. Кинйәбулатов геройҙары. Ҡул ҡаушырып ҡына көтөргә түгел, киләсәкте уны бөгөн төҙөргә кәрәк, тигән фекер беҙҙең заман өсөн дә актуаль:

Беҙ эшләйһе иртәгәгә ҡалһа,
Иртәгәләр ғәфү итмәҫтәр.
Киләсәкте беҙ бит килтерәбеҙ,
Киләсәк ул – бөгөн, иптәштәр…

1973 йылда нәшер ителгән «Сыйырсыҡтар бала осора» китабы шағир ижадында яңы бер бейеклекте билдәләй. Шул исемдәге поэма лирик геройҙың тормош, йәшәү мәғәнәһе хаҡында фәлсәфәүи уйланыуҙары аша тыуған. Кеше лә, ваҡыты еткәс, ҡоштар шикелле, тыуған өйөнән айырылып китә. Әммә әҙәм балаһы үҙенән һуң яҡты эҙҙәр, матур эштәр ҡалдырыу кеүек билдәле бер маҡсаттан сығып шулай эшләй. Ҡош балаһы кеүек, әҙерҙе генә көтөп ята алмай кеше. Ул үҙе – төҙөүсе, ижад итеүсе. Поэманың лирик геройы – тормош ауырлыҡтарын үҙ иңендә татып ҡанат нығытҡан быуындың бер вәкиле. Затлы ризыҡ, ҡупшы кейем күрмәһә лә, эшсән, намыҫлы булып үҫә улар. Шулай итеп тәрбиәләй әсәләре. Поэмала, балаларын ҡурсыған ҡош шикелле, аслыҡ, яланғаслыҡтан һаҡлап ҡалған, шуның хаҡына барлыҡ ауырлыҡтарға сыҙаған әсә образы үҙәк урынды биләй. Лирик геройҙың әсәһенә ихтирамы барлыҡ балаларҙың әсәләренә ҡарата ихтирамы булып ҡабул ителә. Әсәләрҙең түҙемлеге, сабырлығы, ҡыйыулығы хайран ҡалырлыҡ. Күпме көс-дарман һыйған уларҙың йөрәгенә. Һәр ваҡыт һәр кемебеҙ әсә кәңәшенә мохтаж, олоғайған көндәрҙә лә әсәләргә мөрәжәғәт итәбеҙ. Уларҙың фатихаһы юлыбыҙҙы уң итә, эшебеҙгә ҡеүәт бирә. Тик әсәләр генә һәр саҡ беҙҙе көн-төн тимәй өҙөлөп көтә. Тик улар ғына кисерә белә. Поэмалағы көслө рухлы, донъя йөгөн үҙ иңенә һалған әсә – шундай әсәләрҙең береһе:

Ул саҡ әллә
Колхозы ла, беҙ ҙә
Тик көн күрҙек
Һинең иңеңдә,
Торҙо донъя һинең иңеңдә.

Кеше тормошо шулай ҡоролған: әле бер эш, әле бер мәшәҡәт, тегеһе етмәй, быныһы кәрәк, бөгөн былай, иртәгә тегеләй. Шулай ғүмерҙең уҙғанын да

һиҙмәй ҡалабыҙ. Күп осраҡта, ваҡыт етмәй, тип зарланабыҙ. Нисек тә шул ваҡытты табып, бер-беребеҙҙең хәлен белешергә, хәстәрлек күрергә, бергәләп ҡыуанырға кәрәк, тип бик дөрөҫ билдәләй шағир «Ваҡыт етмәй» шиғырында. Ваҡыт хаҡында икенсе бер шиғыры ла хикмәтле: ваҡыт берсә атылған йондоҙ, берсә шиңеп барған ҡар, берсә етеҙ ел менән сағыштырыла. Ниһайәт, күҙ асып йомған арала үтә лә китә – һуң була, бар, тиҙ генә ҡыуып етеп ҡара:

Ул ел һымаҡ үтеп китә,
Бәхәсләшеп тормай ваҡыт.
Үтендерә, үкендерә,
Үҙенекен итә ваҡыт.

Әммә, лирик герой ваҡыт етмәүгә һылтанып, тормош ағышына буйһоноп, баҫылып, быҫҡып ҡына йәшәп ята, тип уйларға ярамай. Ул – көслө рухлы, киләсәккә өмөт менән бағыусы. «Көтәм», «Юл сатында», «Алыҫ ара», «Йәтәс айырышабыҙ», «Үҙ нурҙарын ҡайтар» шиғырҙарында нәҡ шундай кеше образы менән осрашабыҙ. Бына ниндәй уй-теләктәр менән тулы лирик герой күңеле, ул башҡаларҙы ла шуға өндәй:

... Йәшәйек тик йәшәртергә,
Туҙғандарҙы яңыртырға,
Йәшәртергә, яңыртырға!

1988 йылда донъя күргән «Һөйөү иртәһе» йыйынтығында ошондай юлдар бар:

Донъя матур. Хатта ун йәшәп тә,
Һаман килер, һаман йәшәгең,
Бөтә нәмә йәшәү менән мәшғүл,
Тауҙар йәшел меңәр йәштәге.
Мин донъяла бер йәшәргә тыуҙым,
Күңелемә йыям көн йәмен.
Йыйғанымды тотош ҡайтара алһам,
Ерҙә бер йәшәүгә көймәмен.

Был юлы ла тормошта үҙ урыны булған, киләсәккә маҡсаттар ҡуйып йәшәгән лирик герой үҙәккә ҡуйыла. Ул һәр яңы тыныс иртәгә ҡыуана, килер көндәргә өмөт бағлай.

Йылдар имен килһә – донъя имен,
Ҡыуаныслы булыр йылдары,–

тип әйтә икән, тимәк, барлыҡ кешеләрҙең уйҙарын дөйөмләштерә. Шағирҙың лирик геройын тәбиғәттәге тереклек тә, тыуған илдең ҡеүәтләнеүе лә, еребеҙҙең уңдырышлылығы ла сикһеҙ шатландыра («Ҡыуанам»), Башҡортостандағы төрлө милләт вәкилдәренең дуҫлығы ғорурлыҡ тойғоһо уята. Татыулыҡ, уртаҡ маҡсаттар, бер үк хәстәрлек билән һәр кем күңелен. Шуға күрә күптәргә төйәк булған Башҡортостан ерендә бәхет, ҡот хөкөм һөрә. Ниндәй телдә генә һөйләшмәһен, кешеләр араһында үҙ-ара аңлашыу мөнәсәбәттәре ярылып ята. Шуға күрә шағир:

Бәхет, шатлыҡ, хаҡлыҡ төйәгендәй,
Балҡый минең Башҡортостаным!–

тип ғорурлана икән, юҡҡа ғына түгел («Дуҫлыҡ төйәге»).

...Ҡарҙар яуа. Һәр кемгә таныш күренеш. Әммә И. Кинйәбулатов күңелендә ул әллә күпме уйҙар тыуҙыра. Ҡарҙар яуа, тимәк, бәхет, сафлыҡ, уңыш, байлыҡ, аҡһаҡалдар рәхмәте ергә шулай һибелә. Ҡарҙар яуыуында кешенең матур хыялдары ла, ерҙең бәрәкәте лә, хәйерле киләсәк тә төҫмөрләнә. Әҙиптең һүҙ оҫтаһы булыуы ошо «Ҡарҙар булып...» шиғырында асыҡ күренә. Был юлы ла игенсегә дан йырлау дауам итә:

Һинһеҙ бер кем бер көн тормай:
Бейеүсе лә, йырҙар яҙған да,
Сиктә поста тороп, ГЭС-тар ҡороп,
Һыуҙар әҙләп, ҡоҙоҡ ҡаҙған да,–

тигән юлдар ғына ла игенсе хаҡында тотош бер мәҡәләгә торорлоҡ мәғлүмәтте һыйҙыра. Шағир икмәк менән ҡояшты йәнәш ҡуя. Был тәбиғи: ҡояш та, икмәк тә – тереклек сығанағы. Уларҙан башҡа йәшәү юҡ.

Шиғырҙарҙа аҡ ҡарҙар, аҡ он, аҡ

ҡалас, аҡ ямғыр, аҡ толпар, ап-аҡ күлдәк, аҡ юлдар кеүек һүҙбәйләнештәр йыш осрай. Аҡ – таҙалыҡ, сафлыҡ, паклыҡ билдәһе. Тормоштоң матур, донъяның имен, кешеләр күңеленең саф булыуын теләй шағир, шуға өлгәшергә саҡыра.

Шағирҙың быға тиклем ҡалыплашҡан төшөнсәләргә үҙенсә һыҙат биреүе ҡыҙыҡлы ла, хәҡиҡәткә яҡын да. Мәҫәлән, Уралды Европа менән Азияны айырып торған тау тип атайбыҙ. Ә Кинйәбулатовса, Урал ҡитғаларҙы бүлеп түгел, тоташтырып тора («Йөрәктәрҙә ҡалыр һүҙ»). Үтес йәки бурыс төшөнсәһенә лә авторҙың үҙ мөнәсәбәте бар. Донъяға яратылғанбыҙ икән, ти шағир, беҙгә бөтә нәмә үтескә бирелгән. Тимәк, һәр кемебеҙ бурыслы. Тотош ғүмер үтескә бирелгән. Шулай булғас, ғүмеребеҙ буйы бурыслыбыҙ.

Бөтәһе лә миңә ерҙән, күктән
Тик үтескә генә түләнгән.
Ҡайтарырға кәрәк алғандарҙы
Шул тупраҡҡа, шул уҡ үләнгә,–

тигән теләктә «Үтескә» шиғырындағы лирик герой. Н.Островскийҙың: «Маҡсатһыҙ үткән көндәр өсөн үкенерлек булмаһын»,– тигән йәшәү девизы иҫкә төшә. Идея йүнәлештәре үҙгәреп, замандар икенсе йүнәлеш алғанда йәштәргә фәһем булырлыҡ фекерҙәр тулып ята И. Кинйәбулатов шиғырҙарында. Ни файҙалы эшкә күңел бирмәгән, ни ғаилә ҡормаған, эскелек ҡолона әүерелеп барған бихисап йәш кешеләр күңеленә түбәндәге юлдар һеңһә, ҡайһылай йәтеш булыр ине:

Үтескә алған ғүмерҙәр
Булмаһын үкенескә!

1993 йылда Ирек Кинйәбулатов «Мин – башҡорт» тигән йыйынтығын ҡулына алып ҡыуана һәм шиғриәт һөйөүселәрҙе шатландыра. Был юлы ла шағирҙың лирик геройы үҙ позицияһына тоғро: уның иңендә – ил хәстәре, уйында – халыҡ яҙмышы. Берсә күңелен шатлыҡ биләй, берсә шомлана, борсола ул.

Был осорҙа (90-сы йылдарҙа) һөйөнөслө ваҡиғалар байтаҡ: Башҡортостан үҙаллылыҡ ала, милли мәҙәниәт, сәнғәт үҫешенә юлдар асыла, туған телгә иғтибар арта, халҡыбыҙ йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам көсәйә. Әммә күптәрҙең йәшәү рәүеше өҙөп-тартыпҡа ҡоролғанда, сит илдәрҙең әхлаҡһыҙ күренештәре, йәмғиәтебеҙҙе ялмап алғанда, шағирға тыныс ҡалыу мөмкинме?! Әлбиттә, ул үҙен оран һалырға, саң ҡағырға, бәндәләрҙе уйланырға мәжбүр итергә бурыслы тип һанай.

Егерменсе быуат,
Түгелме ни оят?
Түңкәрелмәҫ элек
Намыҫыңды уят!–

тип яр һала икән лирик герой, бынан һәр аңлы кеше ыңғай һығымта яһап, һабаҡ алырға тейешле («Егерменсе быуат»).

Шағирҙы тәбиғәт ҡырыҫлыҡтары ла, йылдан-йыл хәүефкә һалыусы күренештәр ҙә борсой. Шуға күрә уның ижадында экология проблемаһы мөһим урынды биләй.

Бары һыуға сарсағанда
Йылға кәмей, күлдәр ҡорой.
Ниңә һаман оран һалмай
Бөтә донъя үрә тороп?–

тигән саҡырыу юҡҡа ғына түгел. Бөгөн дә көн ҡаҙағындағы проблема ул. Урмандар һирәгәйә, ҡоштар кәмей, һулар һауа бысрана. Киләсәк быуындарға ни ҡалыр? Мин – башҡорт, тип күкрәк һуғыу ғына түгел, ә үткәндәрҙе иҫләп, унан һабаҡ алып, өлгәшелгәндәрҙе һаҡлап, тағы ла өҫтәп, киләсәкте хәстәрләү фарыз һәр кемгә. Нисек быға ирешергә? Әлбиттә, иманлы булып. Иман булһа, әҙәп булыр, әҙәп булһа, тәртип булыр. Ысын башҡорт – иманлы башҡорт ул. «Мин – башҡорт»

шиғырында шундай фекер ярылып ята:

Мин – күптәнге,
Киләсәкке башҡорт –
Меңәр йыллыҡ юлым артымда,
Үткәндәре барҙың киләһе бар.
Шуны белһен йәшем, ҡартым да.

Шағирҙың киләсәккә уйҙары яҡты, өмөтө ҙур. Башҡортостаныбыҙҙың тағы ла юғарыраҡ үрләйәсәгенә, халыҡ-ара абруйы артасағына ышанысы ныҡлы.

Киләсәгең – үҙ ҡулыңда:
Дуҫлыҡта һәм туғанлыҡта,–

тип ғорурлана шағир («Башҡортостан»). Шиғыр яҙылғандан һуң тиҫтәләгән йыл уҙҙы, шағирҙың юрағандары юш килде: Башҡортостаныбыҙҙа һәр милләт тиң, бер туған булып йәшәй; төҙөлөштәр гөрләп бара, милли мәҙәниәттәр үҫешә, сит илдәр менән эшлекле мөнәсәбәттәр ойошторола. И. Кинйәбулатов – үткер телле сатирик булараҡ танылған шағир. Тормоштағы кире күренештәр уның иғтибарынан ситтә ҡалмай. Шыма һөйләп, тауҙай вәғәҙә биреп, шунда уҡ онотоусы, ярҙам урынына ситкә тибеүсе «ағайҙар («Үҙебеҙҙең ағайҙар»), һәр нәмә алыш-бирешкә ҡоролған донъя («Баҙар»), эше гөрләп алға барған берәүҙән көнләшеп, төрлө юлдар менән ҡәбергәсә түбән төшөрөү («Бер төркөм иптәштәр»), бер урында ла эшләмәгән, ғаилә ҡороп төпләнмәгән елғыуар («Кәкүк кеүек, кәкүк кеүек») – тормошобоҙҙа әленән-әле осрап торған күренештәр. Шағирҙың шуларға асыуы, нәфрәте ташып урғыла, үткер һүҙе менән йәмғиәтебеҙҙе алдаҡтан, бәғерһеҙлектән, ғәҙелһеҙлектән таҙартырға ынтыла. Әйләнә тирәләге битарафлыҡҡа, әхлаҡһыҙлыҡҡа тыныс ҡарау мөмкинме?! 1998 йыл Ирек Кинйәбулатов өсөн «Арғымаҡта» исемле китабы менән иҫтәлекле булды. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға арналған «Йөрәктәге һәйкәлдәр» һәм күренекле прозаик, дәүләт эшмәкәре Динис Бүләков иҫтәлегенә бағышланған «Ир яҡшыһы илгә ярай» поэмалары иғтибарҙы айырыуса йәлеп итә. Һәр ике шәхес тә һис кем алдында ярамһаҡланып тәтәй һүҙҙәр һөйләмәгән, кемдең кемлегенә ҡарамайынса, тура ярып дөрөҫлөктө яҡлаусылар булып күҙ алдына баҫа. Әлбиттә, ана шундайҙарға ҡарата мәкер ҡороп, уңайы тура килгәндә аяҡ салырға ынтылыусы, алдында йылмайып торған дуҫ булып, артыңдан бысаҡ ҡаҙарға әҙер тороусы әҙәмдәр бихисап арабыҙҙа. Шағир ундайҙарҙы «бохайырҙар» тип кенә дөйөмләштерә. Әммә тыумыштарынан, булмыштарынан ысын талант эйәләренең урғылып сыҡҡан илһам шишмәләрен томалау мөмкин түгел, инаныуҙарынан дүндерергә лә бер кемдең көсөнән килмәй. Үҙҙәре был донъянан киткәс тә исемдәре халыҡ йөрәгендә һәйкәл булып йәшәй, әҫәрҙәре яҡты иҫтәлек булып ҡала.

Әҫәрҙәрең ҙур ғүмерле,
Геройҙарың – мәңге тере.
Улар йәшәй үҙ халҡының
Йөрәгенә үтеп кереп,–

тиһә шағир З. Биишева әҫәрҙәре хаҡында, Д. Бүләков китаптарын аҡ ҡанатлы ҡоштарға тиңләй:

Китаптарың – аҡ ҡанатлы ҡоштар,
Осҡан юлы гелән уңа торҙо.
Китап кәштәһенән бигерәк тә
Күңел кәштәһенә ҡуна торҙо.

Былар – һүҙ уйнатыу түгел, ә хәҡиҡәт. Тормошобоҙ быны бөгөн дә раҫлай.

Уңыштарға, матур күренештәргә, яңы башланғыстарға шатлана шағир. Әммә шул уҡ ваҡытта башҡа төбәктәрҙәге талаш-тартыш, нимәнелер бүлешә алмау, шул арҡала бер ғәйепһеҙ ябай кешеләрҙең ыҙа сигеүенә, үлем-ҡыйралышҡа дусар булыуына

йәне көйә. Ил башында тороусы башлы ғына булырға тейешле әҙәмдәрҙең шулай кешеләр яҙмышы менән уйнауын шағир аҡылы һис ҡабул итә алмай. «Йәшлегемдең һүнмәҫ эҙе» шиғырында был бик асыҡ һиҙемләнә:

Бөгөн ныҡлы флот та юҡ,
Бөгөн оло илем дә юҡ.
Шул флотты тотоп торор
Ил булмаһас – килем дә юҡ.

Бер И. Кинйәбулатов ҡына шундай хистәр кисерәме икән?

Ҡеүәтле Советтар Союзында үҫеп, шул шарттарҙа тәрбиәләнгән бик күптәрҙең фекерен дөйөмләштерә шағир. Үҙен патриот тип һанаған, ил яҙмышына битараф булмаған һәр кемдең ваҡиғаларға баһаһы шундай:

Кәрәк бөгөн, кәрәк бөгөн
Кремлдән ҡай берәүҙе
Сунжа һыуын кистерергә;
Гундерместа һуҙып һалып
Бисмиллаһыҙ бестерергә.

(«Йөрәк ҡаны»)

Бик ҡыйыу, бик ҡаты әйтелгән. Хәтәр һүҙҙәр, хаҡ һүҙҙәр. Йөрәк әрнеүе аша ташып сыға улар. Улдарын юғалтҡан әсәләр, һөйгәндәренән мәхрүм ҡалған ҡыҙҙар, мәхшәр эсендә үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашып имен ҡайтҡан, әммә һаулығы ҡаҡшаған ир-егеттәр ауазы яңғырай төҫлө шиғыр юлдарында. Ошо рәүешле, шағирға заманының кире күренештәренә тәнҡит күҙлегенән дә баһа бирергә тура килә. Шағир – үҙ заманының орансыһы. И. Кинйәбулатов бик уңышлы атҡара был вазифаны. Дан артынан, мал артынан ҡыумай ул. Шағирлыҡтан да юғарыраҡ бейеклек, унан да ҙурыраҡ бәхет уның өсөн юҡ донъяла. Ошо хаҡта бик тапҡыр итеп әйтеп бирә:

Биш һумымды урланылар –
Шуның менән хурланылар.
Шиғырымды урланылар –
Вәт, исмаһам, ҙурланылар.

«Замана тауышы» китабында И. Кинйәбулатов шағирлыҡ, шиғриәт хаҡында күп яҙа. «Переделкино хәтирәһе» шиғырында Рәми Ғарипов шиғриәтенең көс-ҡеүәтен ерҙе тишеп сыҡҡан шишмә менән сағыштыра. Шишмәләр мәңгелек булған кеүек, шағирҙың һүҙҙәре лә, исеме лә мәңгелек. Шишмә һыуы саф булған кеүек, шағир һүҙе лә хаҡ.

Халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа бағышланған шиғыр «Ҡуш йөрәкле ҡоштоң осҡаны» тип атала. Шағирҙың һәр бер уңышы – халҡының күҙ алдында. Халҡы өсөн хеҙмәт итә һәм уның менән булғанда ғына уңышлы ижад итергә һәләтле. Әлеге шиғырҙа шундай фекер үткәрелә. Ҡасандыр М. Ғафури:

Бер аҙым алға баҫам да
Әйләнәмен артыма,
Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,
Күҙ һаламын халҡыма,–

тип халҡы менән берҙәмлекте белдерһә, И. Кинйәбулатов та илһам сығанағының халыҡта икәнлеген раҫлай:

Ләкин һин һис тә яңғыҙ түгел,
Һиңә ҡарап торған халҡың бар,
Һин – халыҡтың улы, халҡыңа ла
Таянырға тулы хаҡың бар.

Р. Бикбаевҡа тағы ла «Балҡытаһың бөгөн башҡорт күген» шиғырын арнай. Унда шағир образы алпамыша кеүек бөтә донъя йөгөн иңенә һалған батыр, аҡыллы һүҙе менән халыҡҡа мөрәжәғәт иткән олпат ил ағаһы булып һынлана. Киҫкен мәлдәрҙә оран һалып, халҡын күтәреүсе, хаҡ юлды күрһәтеүсе аҡһаҡал да ул. Әгәр ҙә И. Кинйәбулатов:

Балҡытаһың бөгөн башҡорт күген,
Иң көтөлгән һүҙҙе һин әйтеп,
Көмбәҙҙәрҙе тағы бейегәйтеп,
Офоҡтарҙы тағы киңәйтеп,–

ти икән, килешмәү мөмкин түгел. Авторҙың ни тиклем хаҡ булыуын тормош үҙе раҫлап тора. Башҡортостандың

Дәүләт Думаһы – Ҡоролтай депутаты сифатында Р. Бикбаевтың халҡыбыҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, арымай-талмай хеҙмәт итеүе генә лә бының асыҡ дәлиле.

XVIII быуатта башҡорт халҡының ғорурлығы Салауат Юлаев менән бәйле булһа, XX быуатта халҡыбыҙ даны алыҫ-алыҫтарға Мостай Кәрим исеме менән таралды. Шуға күрә «Беҙ Мостайлы халыҡ» тип күкрәк һуғырға хаҡыбыҙ бар. Был шиғырҙа М. Кәримдең тулы бер образы һынлана. Ул – «илгә нур таратыусы», «иң хаҡ һүҙҙе әйтеүсе». Салауаттың даны быуаттар аша яңғыраһа, М. Кәримдең исеме лә, быуындан-быуынға күсә барып, халыҡ юлын күрһәтеп тороусы маяҡ булыр:

Салауатлы һәм Мостайлы халыҡ
Елә мәңгелектең юлында.
Быуындарға күсер яҡты хыял
Ғорур илдең һәр бер улында.

Шағирҙың әҙәбиәт эшмәкәрҙәренә арналған шиғырҙары бик күп. Т. Сәғитов, А. Баһуманов, Тойғон, Х. Юлдашев һәм башҡа әҙәби ижад вәкилдәре образдарының үҙенсәлекле һыҙаттары шул шиғырҙарҙа сағыла.

Яҡшатланыу, ярамһаҡланыу йә иһә көндәлеккә теркәй торған иҫтәлек яҙмалары түгел, уларҙың һәр береһе – һүҙ сәнғәте әҫәре, юғары кимәлдәге ижад емеше. Шағирҙың тел байлығына тағы бер тапҡыр һоҡланмау мөмкин түгел. Айырыуса тапҡыр сағыштырыуҙар менән оҫта эш итә Ирек Кинйәбулатов. Шуларҙан бер нисә миҫал килтереп үтәйек:

Кеше араһында бер кешеһең,
Кешеләрсә булһаң кешегә.

(«Кешеләрсә булһаң»)

Һинең иҫәрлекте күреп,
Аҡыллы тик аҡыл туплар.

(Исемһеҙ шиғырҙан)

Ләкин һыймағанға һыйынманың,
Йыйынманың күңел һүрергә.

(«Етмәгәндә ерҙә тура һүҙ»)

Шағир булыу еңел түгел. Ул энә менән ҡойо ҡаҙыуға тиң.

Әммә шиғыр яҙып маташып, үҙҙәрен шағир тип танытырға теләүселәр юҡ түгел. И. Кинйәбулатов ундайҙарҙы «әрһеҙҙәр» тип кенә атай. Шуныһы үкенесле, ти шағир, ысын талант менән аҡыл ваҡытында хаҡлы баһа ала алмай. Сөнки таланттар үҙ ғәме менән генә бикләнеп түгел, ә тотош ғәләмде борсоған проблемалар менән янып йәшәй:

Шағир һүҙе – ерҙең һүҙе:
Шатлығы ла, яраһы ла.
Унда көндөң яҡты нуры,
Унда төндөң ҡараһы ла

(«Ҡапыл йондоҙ атылғанда»)

И. Кинйәбулатов ижадында Башҡортостан, уның күп милләтле халҡы хаҡында шиғырҙар бик күп. Халыҡтар дуҫлығы, берҙәмлеге, республикабыҙҙың көндән-көн алға китеше, халыҡ-ара кимәлдә танылыу яулай барыуы шағирҙы шатландыра, Башҡортостанды ҙур умарта менән сағыштырыу ҙа тикмәгә түгел («Дуҫлыҡ йорто»). Бал ҡортондай тырышлыҡ, эшсәнлек, берҙәмлек хас республикабыҙҙа йәшәгән һәр милләт кешеһенә. Барлыҡ уңыштар шуға бәйле.

Башҡортостаныбыҙҙың Рәсәй менән тарихи берҙәмлеге быуаттар аша һыналған. Ата-бабаларыбыҙ башлап ебәргән шул дуҫлыҡтың бөгөн тағы ла нығыраҡ булыуына ғорурланмау мөмкин түгел:

Яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа булды
Рәсәй менән беҙҙең бергәлек.
Беҙ атлайбыҙ ҡулдар тотоношоп,
Иңдәребеҙ иңгә терәлеп

(«Мәскәүҙә Башҡортостан көндәре»)

Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында меңәр йыллыҡ бәйләнештәр хаҡындағы шиғыр ҙа ике туғандаш халыҡтың дуҫлығына дан йырлай. Әүәлерәк замандарҙа башҡорт менән

ҡаҙаҡ бер-береһе менән ҡан-ҡәрҙәшлек ептәре аша бәйләнеп, аралашып ғүмер иткән. М. Аҡмулла, М. Ғафури, С.Ҡудаш кеүек шәхестәрҙең яҙмышы ҡаҙаҡ далаларына бәйле. Шундай дуҫлыҡтың бөгөн дә нығый барыуын шағир тик яҡшыға юрай:

Бөгөн дуҫлыҡ донъяларҙы тота,
Ысҡындырмай ныҡлы ҡулында.
Илдәр аралары бына шуға –
Бер туҡтауһыҙ дуҫлыҡ юлында.

(«Назарбаев әкә, түрҙән уҙ!»)

Шағирҙың һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарының байтағы ил, халыҡ яҙмышы өсөн борсолоу хистәре менән тулы. «Ғинуар ҡары» шиғыры быға асыҡ дәлил. Әҫәрҙәге лирик герой ямғырҙарҙың аҙлығына борсолһа, ҡыш көнө ап-аҡ ҡарҙарҙың күплегенә ихлас ҡыуана. Тағы ла күберәк булыуын теләй ул:

Уйлап торам, ниндәй доға уҡып,
Ҡар яуыуын дауам итергә;
Ап-аҡ ҡағыҙ һымаҡ ошо ҡарҙы
Ҡыймай торам тапап китергә.

Шағир күңелен донъяның төрлө тарафтарында әленән-әле булып торған ел-дауылдар, һыу баҫыуҙар, ер тетрәүҙәр кеүек фәрәсәттәр әрнетә, шомландыра. «Бер гонаһһыҙ кешеләргә ниңә шундай язалар?» – тип ғазаплана шағир күңеле. Ошо тәңгәлдә тағы бер фекер иғтибарға лайыҡ: тәбиғәт яманы ваҡыты еткәс китер, ә бына әҙәм яманы бигерәк яман бит. Шағирҙың кемдәрҙе күҙ уңында тотоуы асыҡ: террорсылар, милләт-ара, диндәр-ара ыҙғыш тыуҙырырға ынтылыусылар, һуғыш көҫәүселәр. Иҫке йыл ундайҙарҙы үҙе менән бергә алып китһә икән, тип Яңы йыл кисендә теләгәндәр юш килһен ине лә бит («Йылҡы йылын оҙатҡанда»).

Тормош ҡатмарлы, уны аңлап бөтөү мөмкин түгел. Кешене лә төрлө ҡиәфәткә индерә, төрлө хәл-ваҡиғаларға юлыҡтыра, әленән-әле яңы һынауҙарға дусар итә. Кемдер сауаплы эштәр ҡыла, кемдер гонаһҡа бата… Шағирҙың лирик геройы ла, ҡатмарлы тормош даръяһында батып ҡалмаҫ өсөн, ошо шарттарға яраҡлашырға мәжбүр:

Мин төрлөсә, мин мең төрлө,
Мин ҡай саҡта – көслө дауыл.
Гүйә, үҙем – шаулы ҡала,
Ә ҡай саҡта – һүнгән ауыл.

Тормош күҙ асып йомғансы үҙгәреп тора, шуға күрә лирик геройға көслө ялҡын да, әсе төтөн дә, хәйерсе лә, донъяһы бөтөн кеше лә булырға тура килә. Тормош әҙәмде йомшаҡ йүкә лә итә, баҙыҡ имән дә яһай, боҙло һыуға ла төшөрә, утҡа ла индерә. Шулай тормош. Шағир ҡайһылай уны образлы итеп һүрәтләй ҙә һуң. Тел хазинаһы иҫең китерлек.

Шағир бөгөнгө замандың ҡайһы бер мәлдәре менән һис тә килешә алмай. Кемдер бай, кемдер фәҡир, кемдер намыҫлы эшләп көн итә, кемдер харам мал менән типтерә, хаҡлыҡты аҡса, байлыҡ баҫып бара. Шиғырҙарҙа ана шуға әрнеү хистәре ташып урғыла.

Этләшкәндәр бар мөлкәтте тешләй,
Эшләгәндәр ниңә тешләмәй?
Ниңә бөтәһе лә киреһенсә,
Әллә минең башым эшләмәй…–

тип саҡырыу ташлай шағир замандаштарына («Яңы йыл теләге»).

И. Кинйәбулатов – Башҡортостандың төрлө төбәктәрен күреп белгән кеше. Ошо уңайҙан байтаҡ шиғырҙар циклы ижад иткән. «Замана тауышы» китабында тыуған Ҡырмыҫҡалы районына арналған циклы ла, Хәйбулла, Бөрйән тарафтарын сағылдырғандары ла күңелгә ятышлы. Уларҙа төрлө өлкәлә хеҙмәт итеүсе танылған кешеләр, төбәктең иҫтәлекле урындары, тәбиғәт үҙенсәлектәре сағылыш таба. «Ҡырмыҫҡалы дәфтәренән» тигән дөйөм баш менән аталған циклда райондаштарының сәмле хеҙмәте менән ғорурланыу һиҙемләнә. Шағир тыуған

ере менән бәйләнеште бер ваҡытта ла өҙмәй. Райондың уңыштары, яҡташтарының тын алышы менән һәр саҡ хәбәрҙар. Төрлө милләт кешеләрен бергә туплаған Ҡырмыҫҡалы еренең исеменә есеме лайыҡ булыуына шағирҙың ҡыуанысы ҙур:

Ҡырмыҫҡалы мәңге һыр бирмәҫ,
Ҡышын – малда, йәйен – ҡырҙа ла.
Эшең – яйҙа, көнөң – балда, майҙа,
Күңелең көр бейеү, йырҙа ла,–

тиһә бер шиғырында, икенсеһендә былай ти:

Тыуған ерем – батыр сәңгелдәге,
Тыуған ерем – батыр төйәге.
Ҡайҙа ғына, ҡай тупраҡта ятмай
Аҫыл яҡташтарҙың һөйәге.

Шағир хаҡлы. Сөнки 1812 йылғы Ватан һуғышы батыры Абдрахман Аҡйегетов, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы Миңлеғәле Шайморатов, данлыҡлы сөгөлдөрсө Банат Батырова, бөтә илгә танылған селекционер Сабирйән Ҡунаҡбаев һәм башҡа шәхестәр – ғорурлығыбыҙ. XIX быуаттың мәшһүр шағиры, ғалим, дәүләт эшмәкәре Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙе генә ни тора! И. Кинйәбулатов мәғрифәтсе яҡташын шулай ололай:

Өмөтбаев иһә милләтемдең
Ломоносов һымаҡ кешеһе.

Шағирҙың тыуған яҡтарына һөйөү хистәре төрлө ваҡиғалар аша сағылыш таба. Бына шундай ябай ғына күренеш: лирик герой – өлкән генә кеше – ҡала урамы буйлап икмәк ашап килә. Сәйер һымаҡ. Әммә был икмәк ябай түгел икән. Ул тыуған яҡ баҫыуҙарында үҫтерелгән игендән бешерелгән икән. Лирик герой бала саҡ, йәшлек осорон иҫкә төшөрә, баҫыуҙарҙа ең һыҙғанып тир түккән мәлдәрен күҙ алдына баҫтыра. Игенсе хеҙмәтенә, ауыл кешеһенә шағир ихтирамын ана шулай һүҙ сәнғәте аша белдерә. Бәрәкәтле ерҙә тиргә һуғарылып үҫкән икмәктең баһалап бөткөһөҙ байлыҡ икәнен тағы бер ҡат иҫкә төшөрә әҙип:

Ҡулда – ерҙең иң ҙур хазинаһы,
Тыуған ерҙең затлы икмәге.

(«Икмәк ашап киләм»)

И. Кинйәбулатовтың күҙгә бәрелеп торған бер һәләтен әйтмәһәк, хилафлыҡ булыр. Шағир ҡарап тороуға әллә ни әһәмиәтле тойолмаған ваҡиғалар аша фәһемле фекерҙәр әйтергә маһир. Мәҫәлән, үҙ-ара таныш, туған кешеләр бер-береһенә «һин» тип әйтергә күнеккән, ә етәкселәргә, өлкәнерәктәргә «һеҙ» тип мөрәжәғәт итеү ҡалыплашҡан. Хатта ҡайһы бер «абзыйҙар»ҙың «һин» тиеүҙе кәмһетеүгә тиңләүе лә мөмкин. Ә бына тура һүҙле И. Кинйәбулатов «һин» тиеүҙе хуп күрә. Бигерәк тә мин-минлекте яратҡан түрәләрҙе хушһынмай:

Үҙен бик ҙур күргән бәләкәйгә
Нисек кенә һеҙ тип барайым?..–

ти ул «Һин тип өндәшәм» шиғырында. Ҡайһылай тапҡыр әйтелгән. Шағирҙың тел маһирлығына тағы бер һоҡланмау мөмкин түгел. «Үҙен бик ҙур күргән бәләкәй» – үҙе бер афоризм да баһа. Шағирҙың уңышлы табышы. Әгәр ҙә махсус рәүештә тикшеренеү эшләгәндә, И. Кинйәбулатов афоризмдарынан айырым бер һүҙлек төҙөргә мөмкин булыр ине.

Шағир – үҙе йәшәгән замандың йылъяҙмасыһы. Республикабыҙ тормошондағы, ил, донъя күләмендәге мөһим хәл-ваҡиғаларҙы сағылдырған шиғырҙары шулай әйтергә мөмкинлек бирә.

Рим ИСХАҠОВ.
Ҡырмыҫҡалы районы,
Бишауыл-Уңғар ауылы.

БАШҠОРТ МӘҪӘЛДӘРЕ

Фольклорсылар яҙыуы буйынса, башҡорт әкиәттәренең утыҙға яҡын сюжеты Боронғо Һинд сығанаҡтарына барып тоташа[1]. Мәҫәлән, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең ҡайһы бер сюжеттары Эзоп мәҫәлдәре, мәшһүр “Панчатантра”, “Кәлилә һәм Димнә” мәҫәлдәренең сюжеттары менән уртаҡ[2]. Боронғо Һинд сюжеттары төрлө тәржемәләрҙә тарала: иң тәүҙә улар – ғәрәп, аҙаҡ фарсы, төрөк һәм башҡа төрки телдәренә тәржемә ителә. Тәржемә аша килеп ингән әҫәрҙәр башҡорт ауыҙ-тел ижадына ла, яҙма әҙәбиәткә лә ҙур йоғонто яһай.

Ғ.Б. Хөсәйенов билдәләүенсә, сит әҙәбиәттән ингән сюжеттар, мотивтар һәм жанрҙар урындағы халыҡтың әҙәбиәте, фольклоры менән тығыҙ бәйләнешкә инә, милли колорит менән байый һәм ижади үҙләштерелә. Шул уҡ ваҡытта сит әҙәбиәттән ингән сюжет, мотивтарҙы ҡабул итерлек шарттар булыуы зарур.

XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорт яҙыусыларының ижадында новеллистик характерҙағы ҡыҫҡа, әҙәп-әхлаҡҡа өйрәтеүсе әҫәрҙәр күбәйә. Шул иҫәптән мәҫәл жанры ла үҙенсәлекле үҫеш ала. Мәҫәлдәрҙә, төп башҡорт сюжеттары менән бер рәттән, күсмә сюжеттар ҙа киң таралыу таба. Күсмә сюжеттар башҡорт яҙыусылары тарафынан йә туранан-тура тәржемә ителгән, йә ижади үҙгәртелгән, адаптацияланған, башҡорт халҡының зауҡына тап килгән мотивтар менән байытылған.

Ғ.С. Ҡунафин билдәләүенсә, быуат башы башҡорт әҙәбиәтенә мәҫәл жанрының күсмә сюжеттары “Мәғрифәтнамә”, “Мөхәммәдиә”, “Панднамә”, “Морад әл-ғарифин”, “Киссаи әл-әнбиә” һ.б. кеүек китаптар аша килеп инә. Был китаптарҙа, дин һәм шәриғәт мәсьәләләре менән бер рәттән, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрен сағылдырған, әҙәп-әхлаҡҡа өйрәткән моменттар ҙа була. Фантастик элементтар менән бер рәттән, кешеләр тормошонан алынған сюжеттар, ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә, мәғрифәтселек, мәҙәниәт мәсьәләләре ҡушылып килә. Үрҙә һанап кителгән әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе, геройҙары башҡорт халҡының ысынбарлығына тап килеп етмәһә лә, улар мәҙәни үҫеш процесында һиҙелерлек роль уйнай[3].

XIX быуатта Рәсәй менән Башҡортостандың иҡтисади һәм тарихи-мәҙәни бәйләнештәренең нығыныуы башҡорт әҙәбиәтенә рус әҙәбиәте һәм уның аша грек, француз һ.б. көнбайыш әҙәбиәттәренән мәҫәлдәрҙең күпләп инеүенә булышлыҡ итә.

Башҡорт әҙәбиәтендә мәҫәл сюжеттары бер нисә йүнәлештә үҙләштерелә: башҡорт шағирҙары йә икенсе әҙәбиәттән алынған сюжеттарҙы әйтергә теләгән

---

[1] *Башкирское народное творчество: Сказки. Кн. 1—4. — Уфа: Башкирское книжное издательство, 1976—1981.*

[2] *Башкирское народное творчество. Том IV. Волшебные сказки и сказки о животных. — Уфа: Башкирское книжное издательство, 1989. — 16 с.*

[3] *Кунафин Г.С. Поэтическое эхо прошлого. Развитие жанровой системы башкирской манифестационно-публицистической и нарративной поэзии. — Уфа: Китап, 2004. — 261 с.*

фекерен, төп идеяһын һаҡлап тәржемә итә, башҡорт ерлегенә яраҡлаштырып, халҡыбыҙ зауҡына тап килтереп, милли үҙенсәлектәр менән байытып ижади үҙгәртә, йә билдәле сюжетҡа икенсе мәғәнә һала. Тәүге осраҡта шағирҙар ҡайһы автор ижадына мөрәжәғәт итеүҙәрен мәсәлдең исеменән һуң билдәләп китһәләр, ҡалғандарында уҡыусылар билдәле образдарҙы текстың йөкмәткеһенән "таный". Шағирҙың ниндәй автор ижадына мөрәжәғәт итеүе шулай уҡ текст барышында күрһәтелергә мөмкин. Башҡорт шағирҙары билдәле сюжеттарға мөрәжәғәт иткәндә авторҙың исемен күрһәтһә, икенсе мәғәнә һалғанда, ғәҙәттә, "Эзоптан", "Крыловтан", "руссанан" йә булмаһа киреһенсә "Эзопса түгел", "Крыловса түгел", "Иҫке мәсәлдең яңы варианты" һ.б. кеүек һүҙҙәр менән билдәләйҙәр. Башҡорт шағирҙарының билдәле сюжет аша әйтергә теләгән шәхси фекере йә мәсәлдең моралендә формалаша, йә әҫәрҙең исеменә сығарыла.

Туранан-тура тәржемә ителгән сюжеттарға С. Иманғоловтоң "Төлкө менән Ишәк", "Көҙгө менән Маймыл", "Донъя – ҡуласа", "Эскән ҡоҙоғона төкөрөүсе", "Сикһеҙ мөхәббәт" кеүек мәсәлдәрен атарға мөмкин. Автор И. А. Крылов, С. Смирнов ижадында осраған был сюжеттарҙың асылын халҡына үҙ телендә еткерә.

Ҡайһы саҡта сюжеттың төп идеяһы һаҡланып та, мәсәлдең тексы башҡорт халҡының тормошона "яҡынайтыла", айырым деталдәр өҫтәлә йә, киреһенсә, башҡорт йәмғиәтенә хас булмағандары төшөрөп ҡалдырыла.

"Маймыл һәм күҙлек" сюжеты башҡорт әҙәбиәтендә лә осрай. Был сюжетҡа тәүгеләрҙән булып С. Яҡшығолов ("Маймыл һәм күҙлек") менән М. Ғафури ("Маймыл һәм күҙлектәр") мөрәжәғәт итә. Ике шағир ҙа был сюжетты бик үҙенсәлекле тәржемә итә: С. Яҡшығолов, төп идеяны һаҡлап ҡалыу маҡсатынандыр, төп текстан ситләшмәйенсә, мәсәлде һүҙмә-һүҙ тәржемә итһә, М. Ғафури тәржемәһендә ғәрәп һүҙе осрай, күҙлектәрҙең файҙаһын таба алмаған Маймыл "Файҙа юҡтыр был күҙлектән, мәжнүндер быяланан файҙа көткән" тигән һығымта яһай (мәжнүн (**ғәр**.) – булдыҡһыҙ, йүнһеҙ кеше тигәнде аңлата). Һәм, киреһенсә, М. Ғафури "Ҡарт менән Әжәл (Үлем)" (1911) мәсәлендә И.А. Крыловтың Эзоп ("Старик и Смерть"), Лафонтен ("Смерть и Дровосек") мәсәлдәренә барып тоташҡан "Крестьянин и Смерть" сюжетын тәржемә иткәндә урыҫ халҡына бәйле "подушное", "боярщина", "оброк" тигән төшөнсәләрҙе төшөрөп ҡалдыра.

М. Ғафури "Януарҙарға килгән үләт" исемле мәсәлендә Лафонтен заманынан билдәле сюжетҡа мөрәжәғәт итә. Бер ваҡытта ла көсһөҙгә һан булмауын һәм был эштең һис бер заман булмаясағын шағир билдәле сюжетты башҡорт ерлегенә "яҡынайтып" иҫбатлай. Шулай бер ваҡыт хайуандар араһына үләт керә, күп хайуандар ятып үлә. Үләттән ҡоттары осҡан хайуандар быны, үҙҙәренең ҡылған гонаһтары өсөн Хоҙайҙан ебәрелгән яза, тип аңлай. Барса хайуан, уҫаллығын ташлап, Хоҙайҙан тыныслыҡ һорай: бүреләр һарыҡтарға теймәй, көн һайын ураҙа тота башлай; төлкөләр тауыҡтарҙы быумай, тәүбә ҡыла; аҙаҡ Хоҙайҙың ризалығын алыу өсөн араларынан иң гонаһлыһын ҡорбан салырға ҡарар итәләр. Һөҙөмтәлә үҙ ғүмерендә күп хайуандың ҡанын эскән, "һис бер намаҙ уҡымаған, ураҙа тотмаған" Арыҫланды хәҙрәт тип ҙурлайҙар, бар ҡылғандарын изге эшкә тиңләйҙәр, һәр йыртҡыстың ҡылғандарын аҡлайҙар, хатта маҡтайҙар, ә аслыҡ йылы ашарына бөтөп, бер кешенең бер устай ғына бесәнен рөхсәтһеҙ ашаған Үгеҙ "Хоҙай орған, гонаһ шомлоғо, яуыз" тип танала һәм утта яндырыла. Билдәле сюжетҡа М. Ғафури дини төшөнсәләр индерә: тәүбә ҡылыу, ҡорбан салыу, ураҙа (мосолмандарҙың рамаҙан айында ай буйына иртә таңдан ҡояш байығанса ашап-эсеүҙән тыйылып тороуы), намаҙ (мосолмандар тарафынан көнөнә биш тапҡыр башҡарылырға тейешле ғибәҙәт), хәҙрәт (махсус дини белеме булған дәрәжәле мулла). Боронғо сюжеттың И.А. Крылов мәсәлендә "Кто посмирней, так тот и виноват" тигән мәҡәлгә тартым һөйләмгә ойошҡан морале шул рәүешле башҡорт ерлегендә хәл ителә.

М. Ғафури үҙ заманында Федр (“Себеш Ынйы бөртөгөнә”), француз мәҫәлсеһе Лафонтен (“Әтәс һәм Ынйы”), аҙаҡ рус мәҫәлселәре Тредиаковский (“Әтәс һәм Ынйы”), Сумароков (“Әтәс һәм Ынйы бөртөгө”), Д. Хвостов (“Әтәс һәм Ынйы бөртөгө”), А. Бенитцкий (“Әтәс һәм алмас”) тәржемә иткән боронғо сюжеттарҙың береһенә мөрәжәғәт итеп, “Алмас ташы”, “Йүләр һәм Ынйы” кеүек мәҫәлдәрендә наҙанлыҡҡа ҡаршы сыҡһа, С. Иманғолов ошо уҡ сюжетҡа нигеҙләнеп яҙылған мәҫәлдәрендә кешеләрҙең аңһыҙлыҡ, ҡара аҡыл менән эш итеү кеүек сифаттарын фашлай. Уның бер үк “Баһаланы” исемле ике мәҫәленең геройҙары һуҡыр Сысҡан менән һуҡыр Әтәс, ал-ял белмәй ерҙә ҡаҙына торғас, алтын таба. Икеһе лә, һуҡыр килеш шундай уңышҡа тап булыуҙарына үҙҙәре ышанмайынса, тиҙерәк ҡатындарына һөйөнсөләргә ашығалар. Тик ҡатындары, маҡтап, һөйөнөр урынға, һимеҙ ҡуңыҙ тапһаң, файҙаһы күберәк булыр ине, тип әрләп ташлай. С. Иманғоловтоң ошо уҡ сюжетҡа ҡоролған “Тапһаң икән” мәҫәлендә Әтәс металл сүплегенән “мең тәңкәлек ҡыйбатлы ынйы таба”. Быны күргән утилсе Әтәсте юҡ-бар нәмә табыуында шелтәләй: “Ынйы, имеш, тапһаң икән әҙер деталь, сүплек тулы шул ынйылай юҡ-бар металл!” Ҡиммәтле таштың, ынйының тейешенсә баһаланмауы аша автор ҡайһы бер кешеләрҙең фани донъя мәшәҡәттәренә бирелеп, рухи ҡиммәттәр тураһында онотоуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Хәҙерге заман кешеһе һәр нәмәнән мөмкин тиклем файҙа күреп ҡалырға тырыша. Нәфсеһен тыя алмағандар ысын ҡиммәткә эйә булған нәмәне һанлау түгел, күрмәй ҙә. С. Иманғоловтың мәҫәлдәрендә алтын, ынйы матди байлыҡ булып түгел, ә юғары торған кешелеклек сифаттарының ҡиммәтлеген сағылдырыусы символдар булып һүрәтләнә.

Теге йәки был тарихи осорға бәйле заманаларҙың үҙгәреүен, йәмғиәттәге мөнәсәбәттәрҙең икенсе йүнәлеш алыуын сағылдырыу өсөн башҡорт шағирҙары киң билдәле, уҡыусыларға таныш сюжеттарҙы яңы мәғәнә менән байыта. Уҡыусыға билдәле булған мәҫәлдең морале көтөлмәгәнсә хәл ителә. Был ижади үҙләштерелгән бер нисә сюжетта айырым-асыҡ сағыла.

Эзоп, Лафонтен (“Кузнечик и Муравей”) ижадында осраған, аҙаҡтан И.А. Крылов (“Стрекоза и Муравей”) мөрәжәғәт иткән сюжеттарҙың береһе – “Сиңерткә менән Ҡырмыҫҡа” башҡорт шағирҙарының ижадында ла осрай. М. Ғафури 1910 йылда яҙылған шул уҡ исемле мәҫәлендә йәй буйы “көндәрен шатлыҡ менән үткәргән”, әҙерҙе ашап, әҙерҙе эсеп, бар ваҡытын уйын-көлкөгә бүлгән Сиңерткәгә “Аҡыллылар эшен ваҡытында эшләй” тигән мораль сығара. Йәй дауамында ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән егәрле Ҡырмыҫҡаның һүҙҙәре мәҡәлгә тартым:

“Бөгөн ашарыма бар” тип хафаһыҙ бушҡа йөрөмәйҙәр.
Йылы көн, ҡулда форсат бар ваҡыт ҡышлыҡ әҙерләйҙәр.

М. Ғафури үҙенән алда ижад иткән авторҙарға теләктәшлек белдерә: “иртәгеһен ишәк ҡайғыртһын” тигән фәлсәфә менән йәшәгән, бошмаҫ кешеләрҙе тәнҡитләй. Хеҙмәт кешеһен юғары баһалай.

С. Иманғоловтың “Бригадир булғас ирем” исемле мәҫәле лә ошо уҡ сюжетҡа нигеҙләнеп яҙылған. Ҡыштың һалҡын ғинуар айында Ҡырмыҫҡа Сиңерткә әхирәтен осрата һәм иҫке мәҫәлдең морален “иҫләп”, ялҡаулыҡтың бер ваҡытта ла яҡшыға алып бармауы тураһында иҫкәртә. Тик ул заманалар үҙгәргән икән, хәҙер боронғо мәҫәл сюжеты ғына түгел, уның морале иҫкергән булып сыға, сөнки йәмғиәттә яңы мөнәсәбәттәр урынлашҡан. Бөтәһенең йәшәүе “кемдең ҡулында – шуның ауыҙында” принцибына ҡоролған. Хөрмәт, именлек тигән төшөнсәләр хәҙер хеҙмәткә ҡарап билдәләнмәй, социаль статусҡа барып тоташа:

Ә Сиңерткә бар тип белмәй:
“Төкөрҙөм ҡышыңа, – ти, –
Үҙеңде генә ҡайғырт, – ти, –
Мин тиеп бошонма, – ти, –
Түкмәмен әсе тирем,
Бригадир булғас ирем.”

“Ҡарға менән Төлкө” – шулай уҡ боронғо сюжеттарҙың береһе. Уны Эзоп, Федр, Лафонтен ижады менән бәйләйҙәр, аҙаҡ рус әҙәбиәтендә был сюжетҡа В. К. Тредиаковский, А. П. Сумароков, М. М. Херасков һәм И. А. Крыловтар мөрәжәғәт итә.

Боронғо сюжет буйынса, Ҡарға бейек ағас башына ҡунып табышын ашарға булғанда эргәһенә Төлкө килә. Хәйләкәр Төлкө Ҡарғаны маҡтай башлай, күҙҙәренең, суҡышының, төҫ-ҡиәфәтенең матурлығына һоҡлана. Шундай матур ҡоштоң тауышы ла матур булырға тейештер, тип әйтеп һала. Маҡтауҙарға ысын күңеленән ышанған бер ҡатлы Ҡарға ауыҙын ҙур асып ҡарҡылдап ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Табыш хәйләкәргә эләгә.

Был киң билдәле сюжет һәр әҙәбиәттә тиерлек осрай һәм үҙенсәлекле үҫтерелә. Мәҫәлән, немец әҙәбиәтендә был сюжетҡа Г. Лессинг мөрәжәғәт итә. Уның мәҫәлендә Ҡарға ит киҫәге табып ала, тик ул ағыулы була: бер баҡсасы күршеһенең бесәйҙәрен ағыуларға әҙерләп ҡуйған. Ҡарға табышын яйлап тамаҡларға булғанда ғына Төлкө килеп сығып, уны Юпитер аллаһының ҡошона – сая бөркөткә тиңләй, матурлығына “һоҡлана” башлай. Маҡтауҙарға ирәмһеп киткән Ҡарға Төлкөгә ит киҫәген ташлай һәм ғорур ҡиәфәттә, “бөркөттәрсә” осоп китә. Төлкөнөң итте ашауы була, ағыуланып та үлә. Автор мәҫәлен һәр кемгә, айырыуса түрәләргә ярамһаҡланыусы, уларҙы ерле-юҡҡа маҡтап, үҙҙәренә өлөш алыусы, башҡаларҙың күңеленә алдыҡ маҡтау, ярамһаҡланыу һүҙҙәре аша үтеп инеп, ышаныс яулаусыларҙы “һеҙгә лә килер бер заман шул көн” тип киҫәтә. Башҡорт әҙәбиәтендә иһә был сюжет Й. Гәрәй, С. Иманғолов ижадтарында осрай.

Й. Гәрәй “Ҡарға менән Төлкө” (1979) исемле мәҫәлендә “аҫыл ҡош” Ҡарға хәйләкәр Төлкөнөң маҡтауҙарына ҡаршы “калъяны томшоғонан тырнағына алып”, аңһыҙ ваҡыттарҙың бөтөүен, заманалар үҙгәреүен әйтә. Был күренешкә аптырап ҡалған Төлкө билдәле сюжетты “төҙәтергә” маташа: йәнәһе, “һин бит төшөрөргә тейеш итте”. Ҡарғаның яуабы ул заман эшсеһенең хәлен сағылдыра, совет заманы идеологияһының саҡҡылары төҫмөрләнеп ҡала:

Крыловсамы? Ул замана үтеп китте.
Ауыҙҙағы емде
Беҙ ейә беләбеҙ инде.

С. Иманғоловтоң егерменсе быуат аҙаҡтарында ижад ителгән “Төлкөнөң оятҡа ҡалыуы” исемле мәҫәлендә был сюжетҡа бөтөнләй яңы мәғәнә һалына. Шағир сюжетты заман проблемаларын фашлауҙа бик уңышлы ҡуллана. С. Иманғолов сюжеты буйынса, бейек талға ҡунған Ҡарға донъяһын онотоп, “кертләп торған ҡалъяны суҡый”. Уның тамағы туҡ, бер ҡайғыһы ла юҡ. Шунда уҡ килеп еткән мут Төлкөнөң маҡтауҙарына ла ул билдәле сюжетты “боҙоп” яуап бирә:

Юхалама, ҡоҙаса.
Ярты тотоп ҡына, боҫоп ҡына
Үҙемә кил, булмаһа.

Икәүләшеп, бер геүләшеп һәләк
Теттерербеҙ донъяны.
Ҡоҙаң – мөдир, нужаң бөтөр, әйҙә,
Һайла майлы ҡалъяны.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп ҡаушап ҡалған Төлкө, ҡалъяны хәйләләп ала алмағас, “тайыу яғын ҡарай”. Шағир хәҙерге заман проблемаларының береһе – эскелекте, унан да былайыраҡ, хәҙерге тормоштоң “кемдең ҡулында – шуның ауыҙында” принцибына ҡоролоуын, һәр эштең араҡы, аҡса, яҡшы танышлыҡтар аша хәл ителеүен әсе фашлай:

Мут Төлкө лә ҡалды бит көлкөгә,
Эштәре бешмәй инде.
Сөнки ул бит, мөдир Ҡарға һымаҡ,
Араҡы эсмәй ине.

Лафонтен (“Лисица и Виноград”), Федр (“Лисица и Виноградная кисть”) ижадтарында осраған “Лисица и виноград” сюжеты И.А. Крыловта “Глаз видит, да зуб неймет” мәҡәле менән бәйле. Төлкө бер баҡсаға барып сыға, унда өлгөрөп еткән йөҙөм емештәрен күреп, хәйләкәр, ас Төлкөнөң күҙҙәре уттай яна. Йөҙөмдәрҙе ашарға үрелә, һикергеләп тә ҡарай, тик буйы етмәй. Арып, тамам хәлдән тайған Төлкө, емештәрҙе ала алмау хурлығын күтәрә алмайынса, үҙен: “Йөҙөмдәр сей әле, бешмәгәндәр, уларҙы ашап ашҡаҙаныңды ғына боҙорһоң, килешмәй эскә улар,” – тип тынысландырып китеп бара.

С. Иманғоловтоң “Бөгөн беҙҙә ураҙа” исемле мәҫәле лә асылда ошо сюжетҡа ҡорола. Тик автор төп геройҙы алмаштыра һәм әҫәрҙе тотошлай башҡорт ерлегенә “бәйләй”: хужалары өйҙә булмағанда мут Бесәй келәткә инеп, сөйҙә торған ҡаҙылыҡты күреп ҡала һәм “бүреләй һыйланырға була”. Бейектә торған ҡаҙылыҡты һикереп тә, үрмәләп тә ала алмаған Бесәй үҙен:

Ит булмаһа… юҡ ҡаза.
Йә, Хоҙайым, тый нәфсеңде,
Бөгөн беҙҙә ураҙа, – тип тынысландыра.

Й. Гәрәйҙең “Төлкө менән йөҙөм” (1979) исемле мәҫәлендә йөҙөм емештәренә буйы етмәгән һары ҡараҡ аҡыллы булып сыға: ул бысҡы, баҫҡыс тотоп, үҙе кеүек асарбаҡ ишен-ҡушын йыйып алып килә, һәм моратына ла ирешә: йөҙөмдөң бер бөртөгө лә ҡалмай. Быны күҙәтеп ултырған ала Ҡарғаның (автор яңы образ индерә) сюжетты “төҙәтергә” теләүенә (“Һин Крыловса китергә бит тейеш, бешмәгән әле, – тип, – емеш.”) лә яуабы бар:

Ҡанатланып үҫеп,
Лығырлауың көлкө.
Мин бит – яңы Төлкө.

Был мәҫәл төлкө халҡының дуҫлығы тураһында түгел, киреһенсә, уларҙың шулай күмәкләп емешкә ябырылыуы уҡыусы күңелендә кире тойғолар тыуҙыра (тәбиғи, сөнки беҙ Төлкөнө үҙенең амплуаһында күреп өйрәнгәнбеҙ), бында күберәк замананалар үҙгәреү менән кешенең маҡсатына ирешеү юлында башҡаларҙың мәнфәғәте менән дә иҫәпләшмәүе, нәфсеһенә баш була алмай, ҡайһы саҡ ҡырағайҙарса ҡыланыуы һыҙыҡ өҫтөнә алыналыр.

Хәҙерге заман проблемаларын сағыу яҡтыртыуҙа, фашлауҙа “Фил һәм Мүскә” сюжетының да роле бик ҙур. И. А. Крылов ижады аша билдәле был сюжетҡа башҡорт әҙәбиәтендә С. Иманғолов һәм Р. Ниғмәтуллин кеүек шағирҙар мөрәжәғәт итә.

С. Иманғолов ошо сюжетҡа ҡоролған “Батыр Сәүек” мәҫәлендә йәмғиәттәге хәҙерге заманға хас мөнәсәбәттәргә туҡтала. Мәҫәлдә хәл-ваҡиға башҡорт халҡының йыл миҙгелдәренә бәйле байрамдарының береһе һабантуйҙа бара. Көрәш майҙанында Фил бәһлеүән йәнлектәрҙең барын йыға: “Көслө тигән Юлбарысты ҡыра һуға, бер алыуҙа Арыҫландың билен бөгә, быны күргәс, ҡарт Айыу, ҡурҡып, ағаслыҡҡа инеп китә”… Шул саҡ майҙанға “йөнтәҫ Сәүек” килеп сыға. Быны күргән майҙан шаулай-көлә, һәр кем: “Ну, эләгә был меҫкенгә!” – тип уйлай.

Әммә Фил ҡапыл тәкмәсте биш-алтыға.
“Еңелдем!” – тип башын эйҙе батырға.
Ах-вах килде, һушһыҙ булды бөтә майҙан:
“Был Сәүеккә шул тиклем көс килгән ҡайҙан?”

Ә бәһлеүән Филдең еңелеүенең сере бик ябай була: Сәүектең атаһының ҙур түрә икәнлеге асыҡлана. Шағир был мәҫәле аша физик көстөң генә түгел, ә аҡыл, талант, тәбиғи һәләт кеүек төшөнсәләрҙең кешенең йәмғиәттәге социаль урыны, статусы алдында “еңелеү”ен әсе фашлай. Кешегә ҡарата хөрмәт хәҙерге заманда уның байлығы, аҡсаһы, түрәлеге менән билдәләнә.

С. Иманғолов ошо сюжетҡа ҡоролған икенсе “Фил менән Мүскә” мәҫәлендә лә Мүскә, кескәй генә булһа ла, ҙур ҡеүәт-көскә эйә, тик хәҙер ул ҙур түрә Филдең ҡуштаны, уның кабинетын ныҡлы һаҡлай, “уның алда меҫкен булып тора Арыҫлан үҙе, Ҡаплан һәм Аҡбай”. Үҙенең көсө, аҡылы менән түгел, кеше шөһрәте менән генә йәшәгән Мүскә образы аша шағир ҡуштандарҙы, түрәлегенә ҡарап ярамһаҡланырға, хатта үҙенең ҡәрҙәштәрен дә талап сығарырға әҙер кешеләрҙе фашлай.

Ошо уҡ тема Р. Ниғмәтуллиндың “Үҙгәреш” исемле мәҫәлендә лә дауам ителә. И.А. Крылов сюжетындағы һымаҡ, хәҙер Сәүек Филгә ҡарап өрә алмай, сөнки тегеһе ҙур дәрәжәле түрә. Сәүек көнөн “юхаланып, Фил табанын ялап үткәрә”. Филде маҡтай, үҙен дә маҡтата, шул рәүешле түрә менән дә анһат ҡына идара итә:

Сәүеклек тә, кире яҡҡа үҙгәрһә,
Хатта Филде үҙ йүненә эшләтә.

Боронғо сюжеттарҙың береһе – “Бүре менән Бәрәс” (“Волк и Ягненок”). Был сюжет Эзоп, Федр, Лафонтен кеүек мәҫәлселәр ижады аша билдәле. Урыҫ әҙәбиәтендә Тредиаковский, Сумароков, Державин, Крылов мәҫәлдәрендә осраһа, башҡорт әҙәбиәтендә был сюжетҡа С. Иманғолов мөрәжәғәт итә. Боронғо сюжет “У сильного всегда бессильный виноват” тигән хәҡиҡәтте асыуға ҡоролған. Йәйҙең эҫе бер көнөндә Бәрәс инешкә һыу эсергә төшә. Быны күргән Бүре уны һыуҙы бысратып йөрөүҙә нахаҡҡа ғәйепләй: Бәрәс Бүренән күпкә аҫта һыу эсә. Был яҡлап ғәйепләй алмағас, Бүре бахыр Бәрәстең башҡа “гонаһ”тарын иҫкә төшөрә башлай. Баҡтиһәң, “тәрбиәһеҙ” Бәрәс былтыр ҙа Бүрегә тупаҫ өндәшкән – Бәрәскә бер йәш тә тулмаған була. Тимәк, уның яҡын туғаны,– йә ағаһы, йә ҡустыһы булған һәм хәҙер быға улар өсөн яуап тоторға – Бәрәстең бер туғаны ла булмай. Былай ҙа килеп сыҡмағас, Бүре үҙен баҫтырған эттәрҙең, көтөүселәрҙең үсен был Бәрәстән алырға була. Бәрәс был осраҡта нисек ғәйепле булыуын аңлатып биреүҙе һорағас, Бүре ас булыуы, шуның өсөн генә булһа ла Бәрәстең ғәйепле булыуы тураһында әйтә һәм ашап та ҡуя. Бүре ас булғанда ниндәйҙер сәбәп йә нимәләлер ғәйепле булыу кәрәкмәй.

С. Иманғолов “Инеш ярында” исемле мәҫәлендә киң билдәле сюжетты хәҙерге

замандың актуаль проблемаларының береһе булған экология мәсьәләләренең ҡырҡыу тороуын һүрәтләү өсөн ҡуллана. С. Иманғоловтоң мәҫәле буйынса, инеш ярында рәхәтләнеп һыу эсеп торған Бәрәскә Бүре, һыуҙы эсмәҫкә ҡушып, ярҙан һөрән һала. Билдәле сюжетҡа тоғро Бәрәс: "Һинекеме, ағай, был инеш?" – тип һорай, әгәр улай була ҡалһа, ғәйебен таныуын һәм Бүренең үҙен ашауын һорай. Шул ваҡыт Бүре, ҡото осоп, былдай бысраҡ, нефтле һыуҙың уға кәрәге булмауын, хәҙер инде ағыуланған Бәрәсте ашарға тиле түгеллеген әйтә. Хәҙерге заманда экологик проблемаларҙың ни тиклем ҡырҡыу тороуын билдәләү өсөн автор хатта йыртҡыс Бүрене мәҫәлдәрҙә ҡабул ителгән яуыз амплуаһынан "сығара":

Нефтле һыу эсеп ауҙы Бәрәс,
Аяҡ һуҙҙы, күҙен аҡайтты…
Бик ҡыҙғанды Бүре Бәрәсте:
– Тыңламаның минең кәңәште.

Башҡорт шағирҙары ҡайһы бер үҙләштерелгән сюжеттарҙа көлөү, фашлау объектын үҙгәртеп ебәрә. Шул уҡ сюжетҡа ҡоролған мәҫәлдәрҙә икенсе образдың характеры тәнҡитләнә. Рус мәҫәлсеһе И.А. Крылов ижадында "Щука" исемле сюжет бар. Был сюжет буйынса, быуала Суртан башҡа балыҡтарға бөтөнләй көн күрһәтмәй башлағас, уны хөкөм итергә булалар. Хөкөмсөләр составында ике ишәк, ике ҡарт алаша һәм ике-өс кәзә була, прокурор вазифаһында – Төлкө. Тик Суртан элек-электән Төлкөгә балыҡ ташыған булып сыға. Төлкө шулай ҙа дуҫын айырып ҡарамай, киреһенсә иң ҡаты, ғәҙел хөкөмгә тарттырырға тәҡдим итә – "Суртанды һыуға батырайыҡ", тип ҡарар сығара! Был ҡарарҙы ишеткән башҡа хөкөм итеүселәр, "ғәҙел" холоҡло Төлкөнө маҡтай-маҡтай, Суртанды кире һыуға ташлай.

С. Иманғоловтоң "Иң ҡаты яза" исемле мәҫәле лә ошо сюжетҡа ҡоролған. Мәҫәлдә күл эсендә барған "ҡаты хөкөм" һүрәтләнә: "яман мутланған" Суртанды язаға тарттырырға булалар. "Ауыр холоҡло һимеҙ Табан" Суртандың ҡара эштәрен фашлай, бәпкә, селбәрә йотҡанын һөйләй, "мыйыҡ Йәйен" яуыз Суртанды бөтә ҡылғандары өсөн ҡороға ташларға тәҡдим итә. Тик шунда йылғыр Ташбаш һүҙ алып, Суртанға "иң ҡаты яза" тәҡдим итә:

– Юҡ, мин риза түгел тәҡдимгә.
Йыртҡыслығы өсөн ҡаты яза
Яҙған Хоҙай уның тәҡдиргә.
Мөмкин түгел артыҡ түҙергә
Ҡыуаларға күлдән… Иҙелгә.

Был мәҫәлендә шағир халыҡтың аңһыҙлығы, алдан күрә белмәгәнлеге арҡаһында үҙен үҙе язаға тарттырыуы тураһында әсенеп яҙа. С. Иманғолов мәҫәлендә балыҡ яҙмышын хәл итеүселәр ситтәр түгел, шул уҡ күл халҡы үҙе хөкөм сығара, тик ул асылда хөкөмгә Суртанды түгел, ә үҙен тарттыра.

Шулай итеп, сит әҙәбиәттән үҙләштерелгән сюжеттар башҡорт шағирҙары тарафынан йә һүҙмә-һүҙ, йә башҡорт мөхитенә "яҡынайтып" тәржемә ителгән һәм башҡорт халҡының зауҡына тап килерлек итеп ижади эшкәртелгән.

Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.

ШАҒИРҘЫҢ ҠУЛЪЯҘМА ӘҘӘБИ МИРАҪЫНА ҠАРАТА

(Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 130 йыл)



Башҡортостан Республикаһының тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың әҙәби мираҫы әле тейешенсә өйрәнелә башлаған, тип әйтеп тә булмай.

Мәжит Ғафуриҙың бай рухи-әҙәби мираҫы ҡулъяҙмаларын улы Әнүәр Ғафури тотошлай Ҡазанға ебәреүе арҡаһында беҙ, башҡорттар, уның әҙәби мираҫын тыуған республикаһында, хәҙерге Мәжит Ғафури музейына, һаҡлап ҡала алманыҡ. Хәҙер беҙ, уның төп вариҫтары, был мираҫты копиялар, фотокүсермәләр ярҙамында ғына алдыра аласаҡбыҙ.

Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәгенә ҡараған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Мәжит Ғафури ҡулъяҙмаларының копияларын булһа ла алдырыу хәстәрлеген күрергә тейеш. Бының өсөн ике күрше республиканың мәғлүм бер уртаҡ фекергә килеүенә ирешергә, мөһим ҡулъяҙмалары, документтары копияларын алдырыу мөмкинлеген юлларға ғына кәрәк.

Мәжит Ғафуриҙың яҙған хаттары, айырым төп әҫәрҙәренең автор яҙмалары айырыуса мөһим.

Әле Мәжит Ғафуриҙың беҙҙең ҡулға килеп эләккән бер хатын һәм “Күңел”, ике исемһеҙ автографлы шиғырын журнал уҡыусыларына тәҡдим итәм.

Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.

Мәжит ҒАФУРИ

КҮҢЕЛ

Башҡалар дәм ҡылһалар, һин сикмә хәсрәт, әй, күңел!
Китмәһен кәйефең, уңарьа шат булып, был эшкә күмел!
Башҡалар һинән нисек мәмнүн булыр дәм ҡылмаһын,
Иң элек һин үҙ-үҙеңдән шат түгел, мәмнүн түгел.

Был халыҡ ҡылъан эшем тәҡдир ҡылмаһалар, тимә.
Афарин, тәҡъсин, тимәһәләр, телгә алһалар, тимә.

Бәдбәхет, тип әйтһәләр, әйтһен улар, һин бул сыҙам.
Ҡәҙеремде белмәһәләр улар, күҙ ҙә һалмаһалар, тимә.

Хеҙмәт ит малың, ҡулың илә, үҙең илә.
Ә хасыл ҡыҙғанма милләттән ҡулыңдан ни килә.
Ғалибәйәт шөбһәһеҙ һинең тарафыңда торор,
Һин фәҡәт хаҡлыҡта бул да тоғро һүҙҙәрҙе һөйлә.

Залимды телһеҙ, һине ғалип итәр, туғры килмә.
Әллә йөҙ меңдәрсә ғәскәрҙе еңәр үткен ҡәләм.
Хаҡ һуғышым айҙанына, тиҙ бул ике ҡорал менән.
Һин ышан, ҡеүәт шуларҙа: “Еңелмәмен!” – тип сикмә ғәм.

Йоҡлаған милләттәрҙе үткен ҡәләмдәр уятыр.
Тоғро һүҙ, балҡып сығып, ятҡан ҡәлбәне ҡуҙғатыр.
Һәр бер эштә алғы сафта һүҙ менән ҡәләм йөрөр!
Тәлхасил булыр икәүһе сын ҡаһарман, сын батыр!..

***

Ике көн була инде, сыҡмай өйҙән,
Тилмереп ҡунаҡ көтәм Омскиҙан.
Күп йылдар айырылышып күрмәй торған
Дуҫым ул, йәндәй яҡын күреп һөйгән.

Үпкә ҙур, вәғәҙә ҡылып, килмәй ҡалһа,
Күңелгә тиҙ төҙәлмәҫлек рәнйеү һалһа.
Бынан һуң саҡырмам һәм көтмәмен дә,
Урамға ҡарай-ҡарай күҙҙәр талһа.

Ир кешегә вәғәҙәһендә тороу лазым,
Юлынан кире сикмәй ярты аҙым.
Эс бошоп, йөрәк янған бер минутта
Был һүҙҙәрҙе саф йөрәктән алып яҙҙым.

19.31.XII, 25 төштән элек сәғәт 11.

Был бит ҡағыҙҙың артында тағы шундай шиғри юлдар бар:

Нисек туры юлдан барыр инем,
Йәнем янған уттай булмаһа.
Ҡарт көнөмдә нисек яҙыр инем,
Күкрәгемдә дәрттәр булмаһа.

1926, 3 ғинуар.

Тағы һаман күрә алмайым тынғанын,
Һаман күрә алмайым тынын диңгеҙҙең,
Күрәм аҙ-маҙ йондоҙҙарҙы мин,
Шулай ҙа яҡтыһы юҡ көндәремдең.

Янам мин тик йөрәктән, һис түҙмәйем,
Өйҙәге ҙур өмөттө һис тә өҙмәйем.
Йәберләгән кешеләрҙе күрәм дә
Янам. Һаман шуларҙың бер ситен эҙләйем.

Ғәйшә туған!

Һиңә хөрмәт менән һағыныулы сәләм. Һинең хөрмәтсән көләс йөҙөң һәр ваҡыт минең күҙ алдында тора. Мин һеҙҙең хөрмәтегеҙ һәм һеҙҙең Ғәлиәнән алған тәҡәс ерем турында бик оҙон хат яҙмаҡсы инем дә, үҙем артыҡ көтмәгән күңелһеҙ әхүәл уға форсат та итмәне.

Миңә хәҙер духтырҙар ятҡандан торорға һәм яҙыу-һыҙыу нәмәләрен дә тоторға ҡушмайҙар.

Унан һуң минең һиңә дуҫтарса һәм иптәштәрсә үтенесем шул: мин, һеҙҙең көтөпханала минең "Фәҡирлек менән үткән тереклек" тигән нәмәм бар, тип ишеткән инем (үҙең дә әйттең, буғай). Шуны Фатимаға бирһәң, ул миңә ебәрһә, бик яҡшы булыр ине.

Мин, күсереп алғандан һуң, кире ебәрер инем.

Ғибаш, Ҡаһым, Үзбәккә сәләм. Ғибаш менән йәнәшә ултырып, Үзбәк фотографияларында рәсемгә төшә алмай ҡалыуыма бик үкендем.

Был теләктәрҙең үтәлере, ғүмер булһа, алдағы көндәргә ҡалды инде.

Мин Өфөгә ҡайтһам да, Өфөнө күрә алғаным юҡ. Ҡазанға барғанда эләктергән ауырыу менән мөбтәлә булып өйҙә генә ятам.

Ғүмәр Ғәлигә һәм уның жәүҙәһенә ихтирам менән сәләм.

"Тормош баҫҡыстары" тигән бер әҫәрем сыҡҡан ине. Шуны һеҙгә лә, Ғүмәр иптәшкә лә ебәрермен.

Хәҙергә хуш булып торoғоҙ.

Мәжит ҒАФУРИ.

Еҙем-Ҡаранда Мәжит Ғафури исемендәге парк

Халыҡ шағирының тыуыуына 100 йыл тулыу уңайынан тыуған ауылы Еҙем-Ҡаранда парк булдырылды. Был эштә айырыуса Хәтмулла Зиннәт улы Рәхимов ҙур егәрлелек күрһәтә: урмандан үҫентеләр ташып, Ҡаран шишмәһе ярҙарын нығыта. Ҡоро йылдарҙа ағастарға һыу һибеүҙе ойоштора.

Ике меңгә яҡын ағас шаулаған парк хәҙер – ауыл кешеләренең яратҡан ял итеү урыны. Ауылға, районға рәсми ҡунаҡтар килгәндә паркта ағас ултыртыу матур йолаға әйләнгән. 200-ләп үҫентене Башҡортостан яҙыусылары ултыртыуы ла символик мәғәнәгә эйә: башҡорт әҙәбиәте үҫешендә мөһим роль уйнаған өлкән ҡәләмдәштең ижады ла, урманы ла шаулап торһон! Башҡорт әҙәбиәте тигән урманда һәр әҙиптең ағасына (ижадына!) урын етерлек.

Халыҡ шағирҙары. Уртаҡ сәхифәләр

(Сәйфи Ҡудаштың ҡыҙы Сөйөмбикә Ҡудашеваның хәтер һандығынан)

Сәйфи Ҡудаш Мәжит Ғафуриҙы тәүләп 1914 йылда, Шәйехзада Бабич менән бергәләп атаҡлы шағирҙы «Ғалиә» мәҙрәсәһендә үтәсәк әҙәби-музыкаль кисәгә саҡырырға барғанда, күрә.

Ниһайәт, кисә уҙасаҡ мәл етә. Зал шығырым тулы. Беренсе рәттә «Ғалиә»нең алмашсыһыҙ ректоры Зыя Камали, мәҙрәсәнең башҡа уҡытыусылары, ҡунаҡтар.

Башта Фәтих Сәйфи-Ҡазанлының бер актлы комедияһы ҡуйыла. Артабан сәхнәгә шағирҙар сыға. Сәғит Рәмиев үҙенең киң билдәле, тыңлаусылар һәр

ваҡыт ихлас ҡабул иткән әҫәрҙәрен уҡый. Мәжит Ғафури уҡыясаҡ шиғырының исемен әйтеү менән, зал геү итеп ҡала: «Юҡтырһың да, Алла!» Әле бер ҡайҙа ла баҫылып өлгөрмәгән шиғыр тыңлаусыларға ныҡ тәьҫир итә. Шағирҙы ҡабат-ҡабат һөйләтәләр.

Аҙаҡ Сәйфи Ҡудашҡа Мәжит Ғафури менән «Яңы ауыл» гәзите редакцияһында бергә эшләү насип була. Гоголь урамындағы йорттарҙа күрше булып та йәшәп алалар (Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейы)…

1920 йылдың йәйе булһа кәрәк. Зыя Камалиға сит илгә илсе итеп тәғәйенләнгән Кәрим Хәкимов килә. Ниәте: шәкерте буларак, арҙаҡлы остазынан ғәрәп илдәре хаҡында белешеү, ни әйтһәң дә, ул унда оҙаҡ йылдар белем алған, халҡы менән аралашҡан, телдәрен, мәҙәниәтен, тарихын өйрәнгән… Әңгәмә оҙаҡҡа һуҙыла. Урамға сыҡҡас та айырылыша алмай бер булалар. Уларҙы тәҙрәһенән күреп ҡалып, Сәйфи Ҡудаш эргәләренә сыға. Мәжит Ғафури һуғыла. Уҡытыусыны уралтып баҫҡан өс шәкерт.

– Мәжит әфәнде, берәй нәмә булды мәллә? Борсоулы күренәһегеҙ,– Зыя Камали һәр ваҡыттағыса ихтирамлы, иғтибарлы.

– Сәйфигә килә инем. Күрәм: ауыр йөйәлгән атлы арба үргә менә алмай аҙаплана. Малҡай тапана, ал аяҡтарына тубыҡлана. Ә хужаһы сыбыҡлауын белә. Сыҙаманым, эргәһенә барҙым да ҡул таяғым менән арҡаһына төртөп ебәрҙем. Күҙҙәрен аҡайтып әйләнеп ҡараны. Ауыҙын асырға ла бирмәй, тегене әрләргә тотондом: «Һин, ахырыһы, бик һаранһың – хәлһеҙ атҡа самаһыҙ күп тейәгәнһең… Әйҙә, уға ярҙам итеп ҡарайыҡ!..» Икәүләшеп этеп, саҡ үргә еткерҙек… Рәхмәт әйтеп китте.

Унан айырылып, ҡуҙғалырға ла өлгөрмәнем – «сылтыр» иткән тауыш ишетәм. Урам сатында хәйерсе ҡарсыҡтың ҡалай һауытына кемдер аҡса һала икән. Эргәһенәрәк барҙым. Әбей һуҡыр булып сыҡты. Бүлә-бүлә бер нисә тапҡыр аҡса һалдым. Тауыш сыҡҡан һайын әбейҙең йөҙө яҡтырып китә. Доға уҡып, изге теләктәр теләп ҡалды. Ә мин уның донъяла шәфҡәтле кешеләр булыуына ышанысы өҙөлмәүен теләнем…

1925 йылдың йылы август кисе. Өфө урамы буйлап Мәжит Ғафури, Сәйфи Ҡудаш, Х. Искәндәров атлай. Халыҡ шағиры, көләмһерәп, юлдаштарынан һорап ҡуя:

– Беҙ ниндәй урамдан атлайбыҙ әле?

– Никольский, Никольский, Мәжит аға!

Ысынында иһә урам инде бер йыл Мәжит Ғафури исемен йөрөтә. Халыҡ шағиры исемен алғас үҙгәрткәйнеләр…

Мәжит Ғафури менән тығыҙ аралашыуҙың яҡты биттәре Сәйфи Ҡудаштың мемуар характерҙағы «Яҙҙы ҡаршылағанда», «Онотолмаҫ минуттар», «Йәшлек эҙҙәре буйлап» әҫәрҙәрендә сағылыш тапҡан.

Сәйфи Ҡудаш Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге йорт-музейын асыуға, уны экспонаттар менән байытыуға һиҙелерлек өлөш индерә.

Баҫырға Фәнил КҮЗБӘКОВ әҙерләне.

ИҪТӘЛЕКТӘРЕНДӘ – КӘРӘКЛЕ МӘҒЛҮМӘТ

(Сәләх Кулибайҙың тыуыуына 100 йыл)

Сәләх Кулибай (Сәләхетдин Ғәбит улы Кулибаев) 1910 йылдың 15 июлендә Әбйәлил районының Таһир ауылында (хәҙер Баймаҡ районы ҡарамағында) ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Бик йәшләй ата-әсәһеҙ ҡалғас, ун бер йәшенә тиклем батраклыҡта йөрөй, артабан өс йыл Түбә балалар йортонда тәрбиәләнә. Етемлекте иртә кисереүенә ҡарамаҫтан, тырыш егет ауыр тормош һынауҙарына бирешмәй. Түбә руднигының ФЗУ-һында уҡый, приискыһында эшләй. Баймаҡ тау-техник мәктәбен дә тамамлай.

Һүҙгә оҫта, телгә маһир Сәләх матбуғат менән әүҙем хеҙмәттәшлек итә. Исеме йыш күренгеләгән егет гәзит-журналдарҙа тәжрибә туплай, ҡанаттарын нығыта. Ул Баймаҡта Мирхәйҙәр Фәйзи ойошторған әҙәбиәт һәм драма түңәрәктәрендә ҡатнаша, өлкә гәзиттәренең әүҙем хәбәрсеһе була. Уның тәүге шиғыры 1927 йылда “Сәсән“ журналында баҫылып сыға.

Шиғыр, поэмаларҙан тыш, ул хикәйә, повестар ижад итә, пьесалар яҙа. Ғөмүмән алғанда, әҙәбиәтебеҙҙең төрлө жанрҙарында әүҙем яҙышҡан әҙип була. Шулай уҡ тәржемә эше менән дә шөғөлләнә. Ул яҙыусылар тормошон һәм эшмәкәрлеген яҡтыртҡан байтаҡ иҫтәлектәр ҡалдыра.

Шуларҙың бер нисәһенә күҙ һалайыҡ: “Миңә килгәндә, 1930 һәм унан һуңғы йылдар араһында яҙыусылар менән осрашыуға, үткәрелгән йыйылыштарға бәйле көндәлек кеүегерәк яҙмалар алып бара инем. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, ул яҙма ла, оло быуын яҙыусыларынан алынған тиҫтәләгән хаттар ҙа һаҡланмаған. Бына хәҙер ул яҙмалар ниндәй кәрәк булыр ине лә бит, йәл, улар юҡ. Шулай булғас, бары хәтергә генә таянырға тура килә. Иҫтәлек ул булмағанды баштан уйлап сығара торған нәмә түгел. Иҫтәлек өсөн ысын, булған хәл нигеҙ ташы булып ҡала. Мин ана шул нигеҙ ташына таянып, иҫемдә ҡалғандарҙы яҙып үтмәксе булдым“. Шулай ул М. Фәйзи, М. Ғафури, И. Насыри, Ғ. Дәүләтшин, Т. Йәнәби, Ш.Бабич, А. Фадеев, А. Таһиров, А. Карнай, Б. Ишемғол, Д. Юлтый, С. Мифтахов, М. Хәй, Ғ. Амантай һ.б. тураһында иҫтәлектәр туплай. Улар менән булған осрашыуҙар, әңгәмәләр хаҡында яҙа. Мәҫәлән: “1927–1928 йылдарға тиклем үҙ күҙем менән күргән яҙыусы, шағирҙарҙан мин бары Мирхәйҙәр Фәйзи һәм ул осорҙа шаҡтай популярлыҡ ҡаҙанып өлгөргән йәш шағир Батыр Вәлид менән генә таныш инем“,– тип хәтерләй. Үҙ хәтирәләрендә Мирхәйҙәр Фәйзи менән булған осрашыу-

һөйләшеүҙәргә күп урын бирә ул. М. Фәйзи ауырып киткәс, һәр саҡ хәлен белешергә килеп йөрөй. “Ауырыһа ла, ул шаяртып маташа: “Таһир ауылы һаман үҙ урынында торамы? Ҡарағошло яңғыҙ ҡарағайы япраҡ ярамы? Берәй Бибизөһрәгә ғашиҡ булманыңмы?” тигән кинәйле мәҙәктәрен теҙеп алып китте. Мин ҡарағайҙың ҡыш көнө япраҡ ярмауын белһәм дә, Мирхәйҙәр ағайҙың беҙҙең ауыл янындағы Ҡарағошло яңғыҙ ҡарағайы тураһында ҡайҙан белеүен күҙ алдына килтерә алмай инем. Баҡһаң, ул ҡасандыр Темәстә эшләгән сағында беҙҙең ауылда ла, Билал ауыл Советында ла булып, ҡарттарҙан төрлө әйтемдәр, өләң, таҡмаҡтар ҙа яҙып алып үткән икән“. С. Кулибайҙың иҫтәлектәренән күренеүенсә, ул тыуған ауылы, тыуған ере, кешеләре тураһында байтаҡ хәтирәләр яҙып ҡалдыра.

Уның “Тау йыры“ повесы ла хәтирәләргә нигеҙләнгән. Автор уны Бөйөк Октябрҙең 50 йыллығына бағышлай һәм шиғыр юлдары менән башлап ебәрә:

Хыялдарға сумып ултырҙым мин
Ирәндектең ҡая ташында;
Гәүһәр итеп теҙҙем уйҙарымды
Йырҙар, йылдар, ғүмер хаҡында.

Тыуған төйәгенең сихри тәбиғәтенә һоҡланып, Сәләх Кулибай Саҡабайҙа бесән сапҡанын (Ирәндектең туғайлы биләне), Һаҡмарҙың сылтырап аҡҡанын, Йәнгүҙәй, Күсем ташы, Ҡуңыр буға юлын һағынып иҫкә ала, ошо күренештәр йырсы булмаһаң да һине йырларға мәжбүр итә, тип яҙа.

Ирәндеккәй өҫтө ҡуш ҡарағас,
Ботаҡтары суҡ-суҡ тубырсыҡ;
Сит ерҙәрҙә йөрөп, бик һағындым,
Һин һағынһаң, бәғерем, йүгереп сыҡ.

“Бында... Мирхәйҙәр Фәйзи менән Ғ. Ушановты, унан ҡала таныш уҡытыусыларыбыҙҙы, тау тресы хеҙмәткәрҙәрен, әле генә ауылдан килгән эшсе йәштәрҙе лә күрә инек... 1926 йылда тау тресы идаралығы Баймаҡҡа күсерелде... 1927 йылдың башынан башҡорт телендә әҙәби журнал “Сәсән“ сыға башланы. ...Шиғырым “Сәсән“ журналында баҫылып сыҡҡас, Мирхәйҙәр Фәйзи, шаярып: “Сәләх Лукибай иптәш!” тип йөрөтә башланы. Сөнки журналда минең фамилия Лукибай булып баҫылғайны“.

Етемлекте иртә татып, балалар йортонда тәрбиәләнеп, яҙмышын художестволы ижад менән бәйләне әҙип. Бихисап иҫтәлектәр баҫтырып, мемуар жанрын үҫтереүгә күп көс һалған С. Кулибайҙың башҡорт әҙәбиәтендә үҙ урыны бар.

Земфира ТАҺИРОВА.

ДАН-АБРУЙЫ – ХАЛҠЫ КҮҢЕЛЕНДӘ

«Зәки Вәлиди – бөйөк ғалим һәм был шикһеҙ,
ләкин ул кеше булараҡ та бөйөк»

Герберт ЯНСКИ,
Австрияның Көнсығыш тарихын
өйрәнеүсе күренекле фән эшмәкәре.

«Росбалт» мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, Рәсәй Дәүләт Думаһының 2009 йылдың 25 декабрендә үткән пленар ултырышында сығыш яһап, «Берҙәм Рәсәй» фирҡәһе депутаты Андрей Назаров парламенттың именлек комитетына, Федераль именлек хеҙмәтенә Ә. Вәлидиҙең фашистик Германия менән хеҙмәттәшлек итеүе тураһында мәғлүмәт һорап мөрәжәғәт итергә тәҡдим яһаны. Депутаттың һүҙҙәренә ҡарағанда, «Рәсәйҙә үткәне бик шикле тарихи шәхестәрҙе бөйөкләү күренештәре осрай. Мәҫәлән, – ти ул, – Өфөнөң үҙәк урамдарының береһе Зәки Вәлиди исеме менән йөрөтөлә башланы. Был кешенең шәхесе, – А. Назаров раҫлауынса, – уның «Ваффен-СС»-тың мосолман хәрби берләшмәләрен ойоштороуҙа ҡатнашыуы тураһында күп һанлы мәҡәләләрҙә әйтеп бирелгән. Шулай уҡ Әхмәтзәки Вәлидиҙең һуғыш йылдарында Германия разведкаһы менән әүҙем хеҙмәттәшлек иткән Польша разведкаһы менән бәйләнеш тотоуы тураһында ла ышандырырлыҡ мәғлүмәттәр бар»,– тип белдерә А. Назаров.

Илебеҙҙә яҙмышы билдәле маҡсат менән боҙоп күрһәтелгән һәм ялған ғәйептәр өйөлгән кешеләр бик күп. Күренекле сәйәсмәндәр, хәрби эшмәкәрҙәр, революционерҙар, ғалимдар һәм хатта Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарын да урап үтмәне был яҙмыш. Уларҙың күпселеге тураһында хәҡиҡәт халыҡҡа асыла, һәм был йәмғиәттең тарихи хәтерендә лайыҡлы урынын ала бара. Башҡорт халҡының күренекле улы, бик ҡатмарлы яҙмышлы шәхес, йәшлек йылдарында әүҙем сәйәсмән, сит илгә сығып киткәндән һуң донъяла танылған Көнсығыш тарихы ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди ҙә шундайҙарҙың береһе.

«Вәлидовсылыҡ…» Иосиф Сталин хакимлыҡ иткән йылдарҙа XIX быуат аҙағында – XX быуат башында ойоша башлаған бик аҙ һанлы башҡорт зыялыларын туҡмау, юҡҡа сығарыу һәм «тәрбиәләү» өсөн үҙенсәлекле ҡусаҡ рәүешендә файҙаланылған төшөнсә был. XX быуаттың 20-се йылдарында уҡ партия күрһәтмәләре «вәлидовсылыҡ»ка ҡаршы тәүәккәл көрәшергә саҡыра. 1921 йылдың 26 сентябрендә РКП (б) Үҙәк Комитеты бюроһы республика етәкселәренә «Вәлидовтың контрреволюцион төркөмөнә ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә» саҡырып Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәренә мөрәжәғәт әҙерләргә ҡуша. «Вәлидовсылыҡ» фаш ителгән бындай саҡырыуҙы Башҡортостандың партия ойошмаһы 1922 йылдың 24 ғинуарында әҙерләп, халыҡҡа еткерә. РКП(б) йоғонтоһо һәм баҫымы нигеҙендә шул йылдарҙа уҡ һәм артабан да

Әхмәтзәки Вәлидиҙе «принципһыҙ авантюрист һәм шөһрәт яратҡан» һөрһөгән милләтсе, контрреволюционер һәм хатта «башҡорт халҡының дошманы» итеп һүрәтләгән «хеҙмәттәр» күренә башлай. «Аҡ гвардиясы, башҡорт халҡының һәм хеҙмәтсәндәрҙең дошманы, милләтсе, сит ил разведкалары шымсыһы» тураһында Советтар Союзында (Мәскәүҙә, Ленинградта, Ҡазанда, Өфөлә һәм Урта Азия республикаларында) баҫылып сыҡҡан материалдарҙы бергә туплаһаң, ҡалын ғына бер том хасил булыр ине. Баҫылған мәғлүмәттәрҙең тупланма сағылышы «Ҙур совет энциклопедияһы»ның «Вәлидовщина» тип исемләнгән мәҡәләһендә бирелгән. Уларҙан ҡот осорлоҡ шәхес образы күҙ алдына баҫа. Әхмәтзәки Вәлидиҙең эшмәкәрлегенә ҡаршы сығыусылар – Рәсәйҙә Иҙел-Урал милли мәҙәни автономия ҡороу идеяһы яҡлылар (һуңынан улар ҙа эмиграцияға китеп, Япония һәм Ҡытайҙан башлап Европа илдәренең байтаҡ гәзит һәм журналдарында мәҡәләләр баҫтырып сығарҙы) ижадын бер китапҡа туплаһаң, «берҙәм төрки-татар халҡы»н бүлгеләгән, инҡилап йылдарында «берҙәм төрки-татар хәрәкәте»н тарҡатҡан «авантюрист», «интриган», «КГБ шымсыһы», төркиҙәрҙең яуыз дошманы килеп сығыр ине. Йәмғиәтебеҙҙе демократлаштырыу шарттарында ғына һәм Башҡортостанда ғына түгел, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Ҡазанда Әхмәтзәки Вәлидиҙең тормошон, эшмәкәрлеген һәм ғилми мираҫын объектив нигеҙҙә – яңы ҡараштар күҙлегенән һәм ниндәйҙер идеологик битлектәр киймәй өйрәнеү буйынса байтаҡ эш башҡарылды. Мәҫәлән, «Наше Отечество. Опыт политической истории» китабы авторҙары ижтимағи-сәйәси эшмәкәр булараҡ яҡташыбыҙға юғары баһа бирә: «Милләтселәр күп мәсьәләләрҙә РКП(б)-ның етәксе хеҙмәткәрҙәренә ҡарағанда нескәрәк һәм белемлерәк эш итә. Ә. Вәлиди етәкселегендәге Башревком менән партияның үҙәк ойошмаһынан ебәрелгән Ф. А. Сергеев (Артем) һәм Ф. П. Самойлов араһында 1920 йылдың ғинуарында килеп сыҡҡан низағ тап ошо хаҡта һөйләй. Башревкомдың «милләтсе эшмәкәре» һәм «партия вәкилдәре»нең ошоноң менән бәйле республикалағы эшмәкәрлегенең йөкмәткеһе тураһында тарихи документтар беҙҙең көндәргә лә килеп етте»,– тип яҙа китап авторҙары Башҡортостанда Башревком менән РКП (б) өлкә комитеты араһында мөнәсәбәттәрҙең ҡырҡыулашып китеүе тураһында. Уларҙың фекеренсә, Артем (Сергеев) менән Ф. Самойловтың «интернационалистик шашыныуҙары» янында «милләтсе Ә. Вәлидов»тың үҙен айыҡ аҡыл сиктәрендә тотоуы, дәүләт эшмәкәре булараҡ эш итеүе асыҡ күренә. «Әхмәтзәки Вәлиди Туған: тормошо һәм ижады» тигән хеҙмәтендә милли мәсьәләләр буйынса ҙур белгестәрҙән һаналған Т. Ф. Бурмистрова Ә. Вәлиди шәхесенә ыңғай баһа биргән. Көнсығыш тарихын өйрәнеүсе ғалимдар – немецтар, инглиздәр, төрөктәр һ.б. ҙа уның тураһында оло ғалим булараҡ яҙған. Мәҫәлән, үзбәк тарихсыһы Махамаджан Абдрахманов былай тип яҙа: «Әхмәтзәки Вәлиди Туған – XX быуаттың күренекле ориенталисы, донъя төрки ғилеменең юлбашсыһы. Урта Азия һәм Волга буйы төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы һәм мәҙәниәте буйынса күп хеҙмәттәр авторы. 1917–1923 йылдарҙа Төркөстан халыҡтарының бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәш уртаһында ҡайнаған, аҙаҡ, урындағы хакимдар тарафынан эҙәрлекләнеү арҡаһында, тыуған илен ташлап китергә мәжбүр булған күренекле йәмәғәт эшмәкәре». Ташкент ҡалаһының үҙәк урамдарының береһенә Ә. Вәлиди исеме бирелеү осраҡлы хәл түгел. Петербург университетының Көнсығыш факультетында ла мәшһүр яҡташыбыҙҙың ғилми абруйына баһа биреү йөҙөнән уның һынын эшләтеп ҡуйыу ҙа юғара баһаға лайыҡ. Донъяла, шул иҫәптән Рәсәйҙә, Көнсығыш ғилемен үҫтереүгә бик ҙур өлөш индергән яҡташыбыҙҙы ошолай ололап һәм хөрмәтләп, университет ғалимдары аҡһаҡалдарса эш итте.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы ваҡытта тарих фәненән үтә лә йыраҡ торған, сәйәси күҙлектән Әхмәтзәки Вәлидиҙең шәхесен кәмһеткән кешеләр ҙә күренгеләй башланы. Улар тарихи шәхесте немец фашистары менән хеҙмәттәшлектә, ниндәйҙер эс-эс частары ойоштороуҙа ҡатнашыуҙа ғәйепләргә маташа. Әммә уларҙың хеҙмәте документтар менән нығытылмай, ваҡиғаларҙы боҙоп күрһәтеү генә булып ҡала. Мәҫәлән, КПРФ органы «Правда» гәзитендә 2009 йылдың 20 – 23 мартында баҫылып сыҡҡан мәҡәлә элек «Уфагуб» сайтында донъя күреп өлгөргәйне. Ошо уҡ сайтта Виктор Стечкиндың «Башкирские власти отмывают пособника фашистов от коричневых пятен» яҙмаһы һ.б. хеҙмәттәр ҙә урын тапты. Гәзит һәм журналдар биттәрендә, шул иҫәптән «Российская газета»ның 2009 йылдың 9 декабрь сығарылышында бындай «сәйәсмәндәр»гә нигеҙле һәм тос яуап ҡайтарылды. Әхмәтзәки Вәлиди шәхесе тирәләй ошондай уйҙырмалар барлыҡҡа килеүе Өфө ҡалаһында уның исеме бер урамға бирелеү менән дә бәйле булды. Күренекле яҡташыбыҙға тағы ла бер ғәйепләүҙең тағылыуы, беҙҙеңсә, сәйәси маҡсат менән эшләнә. Сөнки Рәсәй федерализмының барлыҡҡа килеүенә туранан-тура ҡатнашы булған Әхмәтзәки Вәлиди шәхесенә һөжүм итеү Башҡортостан Республикаһына һәм уның етәкселегенә ҡаршы йүнәлтелгән.

Дәүләт Думаһы депутаты Андрей Назаров һүҙ йөрөткән мәҡәләләр авторҙарының ысынбарлыҡтан үтә лә йыраҡ уйҙырмаларына яуап яҙырға, әлбиттә, бер ниндәй ҙә зарурлыҡ юҡ. Шул уҡ ваҡытта ошондай йөкмәткеле мәҡәләләрҙе Рәсәй Федерацияһының әҙәпле граждандарының да уҡыуы ихтимал бит. Улар, исеме шулай бөйөкләштерелгән шәхес ысынлап та бындай мөнәсәбәткә лайыҡмы, тигән һорау ҡуйыуы бик мөмкин.

Факттарға мөрәжәғәт итәйек. Әхмәтзәки Вәлиди яҙмышының төп үҙенсәлеге шунда: уның ғилми мираҫы һәм 1912 йылдан алып ошо көнгәсә (бер быуат тиерлек) ҡатмарлы тормош юлы идея-сәйәси көрәш уртаһында булды һәм әле лә шулай. Бындай хәл хатта бөйөк шәхестәр менән дә һәр саҡ күҙәтелмәй. Хикмәт нимәлә һуң?

Яҡташыбыҙҙың Рәсәйҙәге төрки зыялылары һәм Көнсығыш тарихын өйрәнеүселәр араһында билдәлелек алыуы 1912 йылда «Төрк-татар тарихы» исемле китабы сыҡҡас, 22 йәштә үк башлана. Был хеҙмәтендә йәш ғалим төрки халыҡтар тарихын бер бөтөн итеп ҡарарға тырыша. Ә. Вәлидиҙең шулай иртә фән менән шөғөлләнә башлауының бер-береһе менән бәйле ике төп сәбәбе бар: үҫмер саҡта уҡ ул ғәрәп, фарсы телдәре менән мауыға, Көнсығыш әҙәбиәте һәм тарихы менән етди ҡыҙыҡһына. Ул шулай уҡ урыҫ телен дә өйрәнә, рус классик әҙәбиәтен уҡый, һуңыраҡ рус ғалимдарының Көнсығыш тураһындағы тарихи хеҙмәттәре менән таныша. Тап шул арҡала яҡташыбыҙ В. Бартольд, И. Крачковский, А. Самойлович, Н. Катанов һ.б. бөйөк рус шәрҡиәтселәре менән шәхси нигеҙҙә танышып китә лә инде. Әгәр ҙә XIX быуат аҙағы – XX быуат башы рус зыялылары башкөллөй Көнбайыш мәҙәниәтенә ҡарап торһа, Рәсәй Ғилми йәмғиәте вәкилдәренең иғтибарын Көнсығыш мәсьәләләре күберәк йәлеп итә. Уларҙың ғилми-тарихи ҡарашы күп яҡлы һәм киңерәк, һәлмәгерәк булыуы менән айырыла. Рус фәне һәм мәҙәниәте ерлегендә ғалим булып үҫешкән Ә. Вәлиди үҙ тормошоноң барлыҡ баҫҡыстарында ла ошо традицияларҙы тайпылышһыҙ дауам итә. Рус шәрҡиәтенең талантлы вәкилдәре йәш тарихсының һәләтен нигеҙле баһалай, һәм В. Бартольдтың тәҡдиме менән, Рәсәй Фәндәр академияһы яҡташыбыҙҙы 1913–1914 йылдарҙа тарих өйрәнеү, мөмкин булһа, тарихи ҡулъяҙмалар алып ҡайтыу өсөн, Урта Азияға ебәрә. Буласаҡ ғалим был йөкмәтелгән эште шул тиклем уңышлы үтәй: ул Урта Азиянан Петербург ҡалаһына оло һәм бәләкәй ҡалаларҙа, хатта ҡышлаҡтарҙа йәшәгән китап яратыусы муллаларҙан

алып ҡайтҡан ҡулъяҙмалар Көнсығыш тарихын өйрәнеүселәргә әле лә «Вәлидов йыйынтығы» булараҡ билдәле.

Күренекле яҡташыбыҙ яҙмышында 1917 йылғы Октябрь инҡилабы һәм Граждандар һуғышы менән бәйле ваҡиғалар айырыуса әһәмиәтле. Улар Ә. Вәлидиҙең фән менән дан өсөн һәм фән булғаны өсөн түгел, ә фән нигеҙендә халҡына хеҙмәт итеү өсөн шөғөлләнгәнен дәлилләй. Ләкин уның өсөн «халҡым» төшөнсәһе башҡорттар менән генә сикләнмәй, ә эске Рәсәйҙең төрки донъяһын үҙ эсенә ала. Башҡорт халҡы иһә ата-әсәһе, туғандары булып әүерелә. 1917 йыл ваҡиғалары ғөмүмән яҡташыбыҙҙың яҙмышын ҡырҡа үҙгәртә. Рәсәйҙә федералистик ҡараштарҙың барлыҡҡа килеүендә данлы яҡташыбыҙҙың да өлөшө ярайһы, сөнки илебеҙ тарихындағы тәүге автономиялы дәүләтселек башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре тарафынан 1917 йылдың 15 ноябрендә З. Вәлиди йоғонтоһонда иғлан ителә. 1919 йылдың мартында Совет хөкүмәте Башҡортостан хөкүмәте менән автономияны таныуы тураһында килешеүгә ҡул ҡуя, сөнки башҡорттарҙың милли хөкүмәт яҡлы һәм көрәшкә һәләтле ғәскәре барлығын яҡшы белә. Автономияны башҡорт лидерҙары европаса мәғәнәһендә аңлай: эске сәйәси, иҡтисади һәм мәҙәни мәсьәләләрҙә тулы үҙаллылыҡ. «Совет автономияһы» тип аталасаҡ «ҡыҫҡартылған», күҙ буяу өсөн ҡулланыласаҡ автономия төшөнсәһе әле В. И. Ленин башында ла булмай. Был процесс 1920 йылдың майында үҙәк Совет хөкүмәте бер яҡлы рәүештә Башҡортостан автономияһын, Ә. Вәлиди баһалауынса, «милли-мәҙәни автономия»ға әүерелдерергә маташыу айҡанлы барлыҡҡа килә.

Әгәр ҙә башҡорт зыялылары һәм офицерҙары өсөн 1919 йылғы автономия өлгөһө көрәштең һуңғы баҫҡысы булһа, Ә. Вәлиди өсөн ул барлыҡ Урта Азия халыҡтарының үҙ дәүләтселеген ҡороу йәһәтенән эш башы, ниндәйҙер кимәлдә өлгө генә. Башҡорт автономияһына ҡарата яһалған ҡот осҡос һөжүм уны, эшкә урынлаштырыу өсөн Мәскәүгә саҡырылған кешене, Урта Азияға төрки халыҡтар автономияһы өсөн көрәшкә сығырға мәжбүр итә. Әлбиттә, большевиктар менән көрәшеү өсөн генә түгел. Был үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙҙар көсө менән бөтәһен дә яңынан башлауҙы аңлата. Тулы мәғәнәһендәге автономияны күп һанлы башҡорттар менән яулап булыуына инанған Ә. Вәлиди хәҙер ошо идеяны тотош Урта Азия халыҡтарын берләштереп ғәмәлгә ашырырға ниәтләй. Был юлы ул бер нисә тапҡыр осрашырға тура килгән большевистик юлбашсылар – В. Ленин, Л. Троцкий һәм И. Сталиндарҙың идеологияһын, холҡон һәм мәкерҙәрен яҡшы белә.

Әммә Рәсәйҙә сәйәси һәм хәрби хәл үҙгәрә. Араларында урта быуаттарҙағыса фекер йөрөткән фанатик муллалар йоғонтоһо аҫтында төрлө ҡәбиләләр мәнфәғәтен алға һөргән, зыялылары бик аҙ булған баҫмасылар хәрәкәте Рәсәйҙәге һәм донъялағы хәлдәрҙе аңлай, тимәк, уңышҡа өлгәшә алмай ине. Аҡ поляктар менән иҫәп-хисапты өҙгәндән һуң иркенлек алған Ҡыҙыл Армияның байтаҡ өлөшө Урта Азияға баҫмасылар хәрәкәтен баҫтырырға ебәрелә. Әхмәтзәки Вәлиди менән уның фекерҙәштәренә сит илгә сығып китеүҙән башҡа юл ҡалмай. 1923 йылда ул төркмән крәҫтиәне кейемендә Ашхабадтан йәйәүләп Иранға сыға ла ятраҡан эше – Урта быуат ҡулъяҙмаларын эҙләү һәм өйрәнеүгә тотона.

Ошо осорҙа, айырыуса 1917–1920 йылдарҙа, ул ғүмеренең һуңғы көндәренәсә баш ватасаҡ тағы бер проблема – милли-мәҙәни автономия мәсьәләһе менән осраша. Ғаяз Исхаҡи, Саҙрый Маҡсуди кеүек төрки-татарҙарҙың Иҙел-Урал милли-мәҙәни автономияһын ҡороу өсөн сығыш яһаған һәм башҡорттар менән ҡаҙаҡтарҙың һ.б. мөхтәриәтле автономияһына ҡаршы сыҡҡан татар эшмәкәрҙәренән айырмалы, Ә. Вәлиди 1917 йылда уҡ һәм ғүмеренең ахырынаса был идеяға ҡаршы сығып, үҙ

фекерҙәрен төрлө мәҡәләләрендә, китаптарында, сығыштарында, хатта төрлө архивтарҙа һаҡланған хаттарында ла нигеҙләргә тырышҡан. Дин, мәҙәниәт һәм мәктәп мәсьәләләрен хәл итеү менән генә сикләнгән бындай автономия, тип иҫәпләгән ул, Рәсәй шарттарында урыҫ булмаған халыҡтарҙың үҫеше өсөн етерлек шарттар тыуҙырмаясаҡ «Иҙел – Урал» төшөнсәһен дә ул яһалма һәм ғүмерһеҙ тип баһалаған. Ошондай ҡарашы өсөн уны Рәсәйҙә генә түгел, сит илгә сығып киткәс тә эҙәрлекләгәндәр. Иранда Ә. Вәлиди һис көтөлмәгән байлыҡҡа килеп юлыға. Мешхед ҡалаһында ул баһалап бөтөргөһөҙ ҡиммәтле тарихи сығанаҡтарға, шул иҫәптән «Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары»на тап була. Рәсәй өсөн был сығанаҡтың баһаһы үтә лә ҡиммәт. 922–923 йылдарҙа Урта Азиянан Башҡортостанға һәм Волга буйы болғарҙары еренә сәйәхәт ҡылып, Фаҙлан күргән-белгәндәрен теркәп барған. Боронғо ҡомартҡыны күсереп алғас, буласаҡ ғалим Европаға юл тота һәм унда Көнсығыш тарихын өйрәнеүсе ғалимдарҙың хеҙмәттәре менән таныша башлай. Үҙенең табыштары тураһында Петербург, Париж ҡалаларындағы фәндәр академияларына ла хәбәр итә.

Европаға килеүҙән элек Ә. Вәлиди Төркиәлә туҡтала. 1926 йылда ул Истамбул ҡалаһына килә һәм мәғариф министрлығының бер комитеты менән һөйләшеп, Истамбул университетында уҡытырға рөхсәт ала. Ҡаланың ғәжәйеп бай китап һаҡлағыстарында һәм архивтарында үҙе өсөн бик ҡиммәтле, төрлө дәүерҙәр йөкмәткеһен һаҡлаған сығанаҡтар менән танышырға йыйына.

Билдәле булыуынса, Мостафа Кемаль-Ататөрөк, Ғосманлылар империяһы емереклектәрендә яңы төрөк дәүләте ҡора башлап, илдән интервенттарҙы ҡыуып сығара һәм телдән башлап дәүләткә идара итеүгә тиклем Европаса эш алымдарын индерергә тотона. К. Ататөрөк эшмәкәрлегенә Ә. Вәлиди ғүмере буйы тәрән ихтирам менән ҡараған. Европалаштырыу Баязит дәрелфөнүнен (университетын) дә урап үтмәй, һәм ул Европа классик университеттары дәрәжәһенә күтәрелергә тейеш була. 1926 йылда Истамбул дәрелфөнүнендә уҡыта башлап, яҡташыбыҙ Төркиәнең төп юғары уҡыу йортонда төрки халыҡтар тарихы юғары кимәлдә өйрәнелһен өсөн бар көсөн бирә. Ул саҡта Греция тарафынан Төркиәнең тарихи үткәненә тәнҡит көслө була. Төрөктәр беҙҙең ерҙәрҙе баҫып алды, тип иҫәпләй гректар.

Ошондай сәйәси һәм тарихи географик шарттарҙа, һәләтле генерал булараҡ, М. Ататөрөк тәрән идеологик ынтылыш яһарға ниәтләй. Беренсенән, шундай һорау ҡуйыла: гректарға тиклем Кесе Азияла йәшәгән халыҡтар: хеттар һәм башҡалар төрөктәрҙең ата-бабалары булмағанмы? Моғайын, улар прототөрөк булып, улар артынан ҡәбиләләштәре лә ошонда күсеп килгәндер? Икенсенән, ни өсөн төркиҙәр Урта Азиянан донъяның төрлө тарафтарына, шул иҫәптән Кесе Азияға ла, үтеп ингән? Был һорауға яуапты тиҙ тапҡандар: Урта Азияла ҡоролоҡ арҡаһында ҡомлоҡтар ҙурая, йәшәргә урын етмәй.

Был ике тарихи «хәҡиҡәт»те иҫбатлау өсөн Төркиәнең барлыҡ ғалимдары йәлеп ителә, һәм 1932 йылда Анкара ҡалаһында I Тарихи конгресс үткәрелеп, ошо хәҡиҡәт ғалимдар ҡаҙанышынан бөтә төрөк халҡы тарихына әүерелергә тейеш була. Теләһә ҡайһы авторитар дәүләттәге кеүек, милли лидерҙың идеяһы көслө яҡлау таба. Рәсәй эмигранттары Ғаяз Исхаҡи менән Саҙрый Маҡсуди айырыуса ҙур тырышлыҡ күрһәтә. Әммә конгресҡа йыйылған ғалимдар араһында тиҫкәрерәк холҡло бер кеше табыла. Ул Ә. Вәлиди булып, К. Ататөрөк хуплаған идеяға ҡаршы сыға. «Хеттарҙың төрөктәрҙең ата-бабалары икәнлеге тарихҡа билдәле түгел, – ти ул. – Әгәр ҙә был теорияның хәҡиҡәткә ҡаршы килеүе раҫланһа, дәүләт унан оло зыян ғына күрәсәк». Артабан ысынлап та Кесе Азияла гректарға тиклем фарсы телле халыҡтар йәшәгәне

асыҡлана. Урта Азияға ҡарата ғалим шундай фекер белдерә: төбәккә ҡот осҡос сүллек янамай. Төркиҙәрҙең бөтә донъя буйлап таралыуы иһә – демографик күренеш. Конгресс барышын балкондан күҙәтеп ултырған М. Ататөрөккә был фекер, әлбиттә, оҡшамай. Уның сос ҡолаҡлы ярандары Ә. Вәлидиҙе тәнҡит утына алып, уҙған ғүмерен иҫенә төшөрөргә мәжбүр итә: «Һин ҡасандыр бер булған төрки халыҡты татар, башҡорт һәм ҡаҙаҡтарға бүлдең. Төркиәлә лә шулай эшләргә йыйынаһыңмы?», «һин большевиктар менән хеҙмәттәшлек иттең, бында уларҙың заданиеһын үтәргә килмәнеңме?», «Университет дипломың булмай тороп, беҙҙең балаларҙы үҙеңдең зыянлы теорияларыңа өйрәтәһең»… Ошонан һуң Ә. Вәлиди, билдәле, Көнбайыш Европаға китергә мәжбүр була. Уның тап ошо осорҙағы тормошо тарихты бысраҡ буяуҙарға буяп бирергә яратҡан кешеләр өсөн фантастик уйҙырмалар сығанағына әүерелә. Андрей Назаровтың Дәүләт Думаһындағы белдереүе Икенсе донъя һуғышы алдынан һәм һуғыш осорондағы яҡташыбыҙға бәйле уйҙырмаларға нигеҙләнеүе күренеп тора. Бындай «ғәйепләү»ҙең күренекле ваҡиға – фашистик Германияны еңеүҙең 65 йыллығы алдынан яңғырауы һағайта. Тимәк, белдереү авторы быны үҙенең шәхси мәнфәғәттәрендә файҙаланырға ынтыла.

Ә. Вәлидиҙең фашистарҙың махсус хеҙмәттәре менән бәйләнештә тороуы, хатта дуҫлашыуы – әҙәм ышанмаҫлыҡ, «бармаҡтан һурып алған» әкиәт. Төрөк Республикаһы президенты Мостафа Кемаль (Ататөрөк) менән килеп сыҡҡан аңлашылмаусанлыҡ арҡаһында яҡташыбыҙ, ысынлап та, Төркиәнән сығып киткәндән һуң, Австрияның баш ҡалаһы Венаға килә. Тәүҙә ул университеттың беренсе курсына, аҙағыраҡ ошонда уҡ аспирант итеп эшкә алына. 1935 йылда ул Мешхедта табылған ҡулъяҙмалар нигеҙендә Бағдад хәлифе илсеһе әл-Мөҡтәдир ибн Фаҙландың Иҙел Болғарияһына сәйәхәте тураһында докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. Көнсығыш тарихы буйынса ғалим Пауль Кале уны Бонн университетына эшкә саҡыра. 1938–1939 йылдарҙа Ә. Вәлиди Геттинген университетында эшләй. Фән менән ныҡышмалы шөғөлләнеп, 1939 йылда ул Дрезденда «Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары» исемле китап сығара.

Ә. Вәлиди «нацистар фирҡәһенең ағзаһы булған, Адольф Гитлерға тоғро хеҙмәт итергә ант биргән», «Һәр лекция алдынан ҡулын фашистар кеүек алға һуҙып, «Һайль Гитлер!» тип ҡысҡырған» тигән уйҙырмалар ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Автор хатта уны дәлилдәр менән нығытырға ынтылмаған да, сөнки улар булмаған. Ватанын ташлап китергә мәжбүр ителгән сит ил кешеһе, арийҙар расаһына ҡарамай тороп, фашист идеологтарының фирҡәһендә, билдәле, ағза булып тора алмаған.

Яҡташыбыҙға шулай уҡ, Геттинген университетында эшләгәндә «мосолман» мәсьәләләре буйынса Гитлерҙың шәхси кәңәшсеһе вазифаһын да башҡарып» өҫтәмә рәүештә гонорарҙар алған, тигән ғәйеп тә ташлана. Ошондай үтә лә етди ғәйепләү өсөн нигеҙ бармы? Факттарға мөрәжәғәт итәйек. Бына Геттинген университетының филология факультеты деканының Ә. Вәлидиҙең хеҙмәт хаҡын арттырыу тураһындағы юлламаһы: «1938 йылдың 25 мартындағы күрһәтмәгә ярашлы ошо хат менән мин профессор, доктор Зәки Вәлидиҙе 1938–1939 йылғы ҡышҡы семестр осорона Бонндан Геттинген университетына ебәрергә тәҡдим итәм. Министр әфәнде тарафынан үрҙә телгә алынған күрһәтмә иғтибарға алынды инде. Миңә билдәле булыуынса, Бонн профессоры Кале профессор Зәки Вәлиди әфәнденең айлыҡ эш хаҡын 200 марканан 300-гә еткереү тураһындағы үтенесен министрлыҡҡа ебәргән. Ошо үтенескә тәүәккәл ҡушылып, мин профессор Зәки Вәлиди үҙенең ғәҙәттән тыш ғилми һәләте менән хеҙмәт хаҡын арттырыуға лайыҡлы, тип белдерәм.

Хинц. Геттинген. 1938 йылдың 30 июне. Университет ректоры раҫланы һәм был юлламаны тәғәйенләнешенә еткереүҙе раҫланы. Фр. Нойман». Күренеүенсә, ғалимдың эш хаҡы Гитлер алдындағы хеҙмәттәре өсөн түгел, ә ғилми һәләте өсөн арттырылған.

1938 йылдың сентябрендә уға Бонн университетының гонорар-профессоры (штаттан тыш профессор) дәрәжәһе бирелә. Был төп эш урыны Геттинген университеты булған Ә. Вәлидигә Бонн университетында ла лекциялар уҡырға рөхсәт ителә, тигәнде аңлатҡан. Ҡайһы бер оятһыҙ әҙәмдәр, имеш, Ә. Вәлидиҙең 1939 йылдың авгусында Истамбул университетына әйләнеп ҡайтыуы Төркиәлә Германия хәрби көстәренең абвер резиденцияһы вәкиле ролен үтәй башлауы менән бәйле, тип аңлатмаҡсы. Ә. Вәлидиҙең Истамбулға ҡайтыуы менән бәйле ғилми эшмәкәрлеге тураһында күренекле төрөк тарихсыһы, профессор Салих Тут былай тип яҙҙы: «Ихтирамлы уҡытыусыбыҙ Туған 1939 йылдың көҙөнә тиклем Геттинген университетында гонорар-профессор вазифаһын башҡарып, үҙенең юғары дәрәжәһен һәм квалификацияһын иҫбатларға өлгөрҙө. Төрөк Республикаһы мәғариф министрлығының 1939 йылдың 22 авгусындағы ҡарары менән 1 сентябрҙән Истамбул университетының әҙәбиәт факультеты профессоры итеп тәғәйенләнде һәм ғүмеренең ахырғы көндәренә тиклем уның ғорурлығы һәм даны булып хеҙмәт итте. Тыуған иленән саҡырыу алыу менән ул һис бер шикләнеүһеҙ китап тулы йәшниктәре менән Европанан Истамбулға килде һәм башкөлләй эшкә сумып, бөтөнләйгә Төркиәлә тороп ҡалды. Икенсе донъя һуғышы йылдарында, фән тауышы сығыр-сыҡмаҫ саҡта, ул үҙенең төрки тарихы тураһындағы ҙур-ҙур һәм ҡыҙыҡлы хеҙмәттәрен сығарҙы». Тимәк, Икенсе донъя һуғышы йылдарында һәм ғүмеренең һуңғы сәғәттәренә тиклем Ә. Вәлиди агентура, фашистик эшмәкәрлек менән түгел, ә ғилми-тикшеренеү, педагогик хеҙмәт менән мәшғүл булған.

Дәүләт именлеге комитеты генералы Лев Соцков «Неизвестный сепаратизм на службе СД и Абвера. Из секретных досье разведки» тигән китабында түбәндәгеләрҙе яҙа: «1932 йылда Вәлидов Германияға сығып китә. Бонн университетында ғилми эш менән шөғөлләнә, профессор дәрәжәһе ала. 1935 йылда Женева ҡалаһында үткән «Ислам мәҙәниәте йәмғиәте» ағзаһы булып I Мосолман конгресында ҡатнаша. Шулай итеп, Ә. Вәлидиҙең Икенсе донъя һуғышы алдынан Германияла ғилми-педагогик эшмәкәрлек алып барыуы, 30-сы йылдарҙа бөйөк рус философы И. А. Ильиндың ошонда уҡ лекциялар уҡыуы кеүек, ниндәйҙер шиктәр тыуыуға нигеҙ бирмәй».

Шул уҡ ваҡытта беҙ Ә. Вәлидиҙең Советтарға ҡаршы сит илдәрҙә билдәле шәхес икәнлеген дә кире ҡағырға йыйынмайбыҙ. Әммә уның большевиктарҙы тәнҡитләүе фашистик режимға хеҙмәт итеүен аңлатмай. Депутат А. Назаровтың яҡташыбыҙҙы нацистар менән хеҙмәттәшлек итеүгә ғәйепләргә маташыуы – күҙгә күренеп торған ялған. Ул арала Бөйөк Ватан һуғышы ла тоҡана. Гитлер Германияһы менән Советтар Союзының үлемесле алышын күҙәткән Ә. Вәлидиҙең, был һуғыш аҡтар менән ҡыҙылдар араһындағы бәрелеш кеүек, төрки халыҡтарҙың, шул иҫәптән Урта Азия төркиҙәренең дә, үҙаллылыҡ алыуына шарттар тыуҙырмаҫмы, тигән ауыр уйланыуҙарға килтерә. Ниндәйҙер өмөттәр уята. Уйланып ҡына ҡалмай, ҡайһы бер фекерҙәштәре, айырыуса яҡын уҡыусылары һәм яҡташтары менән уртаҡлаша ла. Германияла Башҡортостандан һәм Урта Азиянан әсирҙәр күп булып, араларында Граждандар һуғышында Башҡорт ғәскәрендә йөрөгәндәр ҙә барлығын ишетеп, Ә. Вәлиди Германияға барырға теләй. Ләкин Төркиә хөкүмәте, Ҡыҙыл Армияның уңыштарға өлгәшә башлауын күреп, рөхсәт бирмәй.

И. Сталинды яҡшы белгән һәм Советтарҙың махсус хеҙмәттәренең иғтибар үҙәгендә торған Ә. Вәлиди Германия яғына ауған Төркиә хөкүмәте өсөн мәшәҡәтле шәхескә әүерелә. Бигерәк тә Ҡыҙыл Армияның үҙен күрһәтә башлағанынан һуң. Башҡалар ыңғайына йөрөп өйрәнмәгән Ә. Вәлиди, тыйыуҙарға ҡарамай, ҡатынының Румынияла йәшәгән туғандарын күреү һылтауы менән 1942 йылда Төркиәнән сығып китә. Үҙенең һүҙҙәренә ҡарағанда, Ә. Вәлиди Башҡортостандан яҡташтарын һәм Урта Азия кешеләрен күрә, әммә уны Германиянан сығарып ебәрәләр. Күрәһең, яҡташыбыҙҙы яҡшы белгән ғалимдар немец властарына, был кешене файҙаланыу мөмкин түгел, киреһенсә, ул үҙе теләһә кемде үҙенсә файҙаланырға маташа, тигән фекерҙе еткергәндәрҙер, тип уйларға ғына ҡала.

Ғалимдың ҡатыны Нәзмиә Туғандың һүҙе буйынса, Германиянан әйләнеп ҡайтҡас, Вәлиди яҡындарына: «Мин большевиктарҙың этлеген күп күрҙем, әммә улар нацистар кеүек ҡыланманы», – тигән. Советтарҙың тәүге еңелеүҙәренән һуң дәртләнеп китеп, Ҡазанға ҡайтырға йыйыныусыларҙы ла ул былай тип туҡтатҡан: «Ашығып, кеше көлдөрмәгеҙ. Ҡыҙыл Армияны мин яҡшы беләм, ул тиҙ генә еңелеп бармай». Был сәйәхәт Ә. Вәлидигә үтә ҡиммәткә төшә: уны нацистар менән хеҙмәттәшлектә, хатта Мосолман легионы ойоштороуҙа, Гитлерҙың уң ҡулы булып китә яҙыуҙа ғәйепләйҙәр. Әҙәпһеҙлеге һәм тупаҫлығы, үтәнән-үтә уйҙырма булыуы менән таң ҡалдырған А. Назаровтың «мәғлүмәттәре» лә тап шул сығанаҡтарҙан «туҡлана». Милләт-ара дошманлыҡ хистәре тыуҙырырға маташҡандары өсөн енәйәт яуаплылығына тарттырылған журналистарға эйәреп, депутат мәшһүр ғалимды татар һәм башҡорт хәрби әсирҙәренән «Ваффен-СС Хандшар» һәм «Кама» хәрби частарын ойоштороуҙа ҡатнашыуҙа ғәйепләмәксе. Ғәмәлдә 13-сө тау-уҡсы СС дивизияһы (1-се хорват) һәм Босния мосолмандарынан, хорват фашистарынан торған элиталы берләшмә иҫәпләнгән. Был частың башҡорт һәм татар хәрби әсирҙәренә, шулай уҡ Ә. Вәлидигә ҡарата бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булыуы мөмкин түгел. Яҡташыбыҙҙы «фашлау» өсөн уйлап сығарылған «Кама» (йылға исеменә оҡшашлығы йәһәтенән) дивизияһы тарихынан да ғауға еҫе аңҡып тора. Ялғансылар хатта дивизия һуғышсыларын «вәлидовсылар» тип атап, «белорус партизандары тарафынан тулыһынса юҡ ителделәр» тигән «асыш» та яһай, Босния менән Герцеговина мосолмандарынан торған был дивизияның да башҡорттарға, татарҙарға һәм Ә. Вәлидигә бер ниндәй мөнәсәбәте юҡ.

Ғәмәлдә фашистик Германияла эмиграцияла булған татарҙарҙың ҡайһы берәүҙәре «Иҙел-Урал» легионы ойоштороуҙа ҡатнаша. 1942 йылда уҡ Ғәлимйән Иҙриси, Шәфи Алмаз, Ғариф Солтан, Германия вермахтының ҡушыуы буйынса, татар, башҡорт, сыуаш, мари, удмурт һәм мордва хәрби әсирҙәренән ирекле легион туплау менән шөғөлләнергә тотона. Ошо уҡ эмигранттар 1944 йылда Грейсвольд ҡалаһында Иҙел-татар легионының йыйынын уҙғара. Унда Иҙел-татар комитетында немец хәрби етәкселегенең вәкиле булған фон Унгляубе менән доктор фон Менде лә ҡатнаша.

Ғүмеренең ахырынаса Иҙел-Урал идеяһын тәнҡитләгән Ә. Вәлидиҙе әҙәпһеҙ бәндәләр, имеш, ул үҙе лә иҙел-уралсы булып киткән, тип ышандырмаҡсы. Шул уҡ ваҡытта архивтарҙа ярты быуаттан ашыу соҡсоноу был фекерҙе ҡеүәтләгән бер генә ҡағыҙ киҫәге лә таба алманы. Ә бит уны Дәүләт именлеге комитетының генералдарына тиклем тәжрибәле хеҙмәткәрҙәр эҙләп ҡараған. А. Назаровтың яҡташыбыҙҙы «Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Польша разведкаһы менән бәйләнештә тороу»ҙа ғәйепләргә маташыуы ла – шулай уҡ мәғәнәһеҙлек. Күрәһең, депутат Икенсе донъя һуғышында Польшаның фашистар тарафынан баҫып алыныуын белмәй.

Ышаныслыраҡ яңғыраһын өсөн А. Назаров менән фекерҙәштәренә Ә. Вәлидиҙе фашистик Германияның сателлиттары Румыния, Венгрия, Болгария һәм, ахыр сиктә, милитаристик Японияның йәшерен хеҙмәттәре менән бәйләргә кәрәк ине.

Үрҙә телгә алынған генерал Лев Соцковтың китабынан бик ҡыҙыҡлы бер миҫалға туҡталайыҡ. Ул ғалимдың фашистар менән хеҙмәттәшлек итеүен тулыһынса юҡҡа сығара: «Уның тормошонда хәтерҙә ҡалырлыҡ ваҡиға һуңыраҡ булды,– тип яҙа генерал. – 1951 йылда Вәлидов Көнсығышты өйрәнеүсе ғалимдарҙың Халыҡ-ара конгресында ҡатнашып, уның материалдарын баҫтырып сығарыу буйынса комиссияға индерелде. Уның Истамбул университетындағы эш бүлмәһенә Советтар Союзы яғынан материалдарҙы ҡарап биреү өсөн Мәскәүҙән ебәрелгән ғилми хеҙмәткәр килеп инә. Вәлидов ҡунаҡты яҡшы ҡабул итә, улар төрлө профессиональ темаларға оҙаҡ һөйләшеп ултыра. Вәлидов Мәскәү ҡунағынан үҙе өсөн Н. Я. Бичуриндың «Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена» тигән хеҙмәтенең өс томын һатып алыуҙа ярҙам һорай.

Күп милләтле дәүләттә йәмғиәтте тупларға тырышыу властарҙан һәр ваҡыт иғтибар талап итә. Совет власы был йәһәттән иҫкәрмә түгел. Киреһенсә, милли мәсьәлә һәр ваҡыт илдең эске һәм тышҡы сәйәсәтендә өҫтөнлөк менән файҙаланды. Тотош халыҡтарҙы төрлө яҡтарға быраҡтырған ҡанлы һуғыштан һуң башҡалар сафында торған кешеләрҙе йәлеп итеү иң йоғонтоло эш алымдарының береһе ине. Аҙашып йөрөгән кешеләрҙең кире ҡайтыуы Совет етәкселеге өсөн ниндәйҙер дәрәжәлә файҙалы булды. Мәҫәлән, младоросстарҙың башлығы Казем-бек үҙ ихтыяры менән Советтар Союзына ҡайтты. Уға радио аша, үҙәк матбуғатта сығыш яһарға мөмкинлек, Мәскәүҙең иң уңайлы районында фатир бирҙеләр. Вәлидовты ла ҡайтарырға мөмкин, тип иҫәпләнеләр. Бында тәҡдимде, әлбиттә, рәсми булмаған тәртиптә Истамбулда уның менән осрашҡан ғалим яһарға тейеш ине. Улар араһында беҙҙең ҡарамаҡҡа бик ҡыҙыҡлы һөйләшеү булды.

– Хөрмәтле профессор, беҙҙә һеҙҙең хеҙмәтегеҙҙе яҡшы беләләр һәм Көнсығыш буйынса белгес булараҡ һеҙгә ихтирам менән ҡарайҙар. Властарҙың ҡайһы бер әйберҙәргә яңыса ҡарарға ҡамасаулаған дәғүәһе юҡ. Бер һүҙ менән әйткәндә, минең коллегаларым һеҙҙең тыуған илгә ҡайтыу мөмкинлегенә нисек ҡарауығыҙҙы асыҡларға ҡушты. Тормош һәм ғилми тәжрибәгеҙҙе иҫәпкә алғанда, һеҙ унда ла ҡиммәтле хеҙмәттәр тыуҙыра алыр инегеҙ, тип уйлайҙар.

– Шулай уҡмы ни? Ҡыҙыҡ. Ә был, тураһын әйткәндә, аҫып ҡуйыу өсөн алдаштырып саҡырыуҙы аңлатмаймы?

– Һеҙ оҙаҡ йылдар инде сит илдә йәшәйһегеҙ. Быға тиклем һеҙгә бер кем дә ҡағылманы. Әгәр ҙә һеҙҙе юҡ итеү бурысы ҡуйылһа, быны кәрәкле кешеләр ошо урында ла башҡарып сыға алыр ине. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, бындай хәлдәрҙең булғылап тороуы һеҙгә сер түгелдер. Үҙегеҙгә ҡарата был йәһәттән һеҙ яңылышаһығыҙ. Әлбиттә, һеҙҙең Совет власына ниндәйҙер дәрәжәлә зыян килтереүегеҙ ысынбарлыҡ булып ҡала. Һеҙҙең баҫмасылар хәрәкәтендә ҡатнашыуығыҙҙы, сит илдәр вәкилдәре менән бәйләнеш тотоуығыҙҙы ла беләләр. Ләкин хәҙер һеҙ армияһыҙ генерал һәм үҙ тәртибегеҙ өсөн генә яуап бирәһегеҙ. Бәлки, һеҙгә халыҡҡа сит илдән тороп түгел, ә ул йәшәгән ерҙә хеҙмәт итеү тураһында уйларға ваҡыт еткәндер? Ҡайтыуығыҙҙың ҡәнәғәтләнеү менән ҡабул ителәсәге тураһында һөйләп тороу кәрәкмәй.

– Үткәндәрҙә соҡсонмай, уларға ниндәйҙер баһа бирергә маташмай ғына шуны әйтә алам: миңә, 66 йәшлек кешегә, ҡайҙалыр күсеп китеү – мөмкин булмаған эш. Ошонда ғына ҡалам. Әйткәндәй, былтыр американдар миңә ГФР-ҙа ылыҡтырғыс эш

тәҡдим итеп ҡарағайны, баш тарттым. Ниндәйҙер дәрәжәлә сәйәсәт менән шөғөлләнергә теләгем юҡ.

– Яҡшы. Хәҙер һөйләшеүҙе профессиональ йүнәлешкә яҡыныраҡ темаға күсерәйек. Һеҙ иҫтәлектәр кеүек нәмәләр яҙыуға нисек ҡарайһығыҙ? Матди яҡтан ҡыҫынҡылыҡ кисереүегеҙҙе иҫәпкә алғанда, һеҙ был тәңгәлдә яҡшы ғына гонорар эшләй алыр инегеҙ.

– Айына 900 лир* алам. Ҡатыным, ҡыҙым һәм улым бар. Әлбиттә, аҡса етмәй. Шуға күрә ҡатыным уҡытырға мәжбүр. Отставкаға сыҡһам, ә ул бына-бына етеп килә, 450 лир ғына аласаҡмын. Хәтирәләр яҙыу тураһында тәҡдимегеҙҙе ҡабул итә алмайым, сөнки ваҡытым юҡ. Университетта бик күп эшләргә тура килә.

– Ҡәтғи рәүештә баш тартыу кәрәкмәҫ. Яҙғандарығыҙҙы матбуғатҡа сығармай, тар даирә кешеләренең генә уҡыуы кеүек вариант бар. Әйткәндәй, башҡа илдәрҙә лә ундай ғәмәл барлығы һеҙгә билдәле.

– Әлегә был тәҡдимдән баш тартырға мәжбүрмен. Ҡасандыр американдар ҙа миңә ошондайыраҡ йомош менән мөрәжәғәт иткәйне. Кире ҡағырға тура килде.

Вәлидовты тыуған иленә ҡайтарыу теләгенә ауҙарып булманы. Ул үҙе инде күнегеп бөткән ғалим-ориенталист тормошона өҫтөнлөк бирҙе…»

Әгәр ҙә яҡташыбыҙ Германияла нацистар менән бәйләнеш тотҡан булһа, 1951 йылда, И. В. Сталин иҫән саҡта, уны Советтар Союзына, тыуған Башҡортостанына ҡайтарыу тураһында тәҡдимдең булыуы ла мөмкин түгел ине. Германия Сталинград янында еңелеүгә тарығас, уға яҡын мөнәсәбәттә торған Төркиә хөкүмәтенә лә вермахттың тиҙ арала юҡҡа сығасағы аңлашыла башлай. Рәсәй властары быуаттар буйы ғәмәлгә ашырырға хыялланған Босфор һәм Дарданелл боғаҙҙарын И. Сталиндың Икенсе донъя һуғышынан һуң баҫып алырға тырышасағы ысынбарлыҡҡа әүерелә башлай. Төрөк хөкүмәте һәм президент И. Иненю «һул»ға ауыша һәм ҡеүәтле Сталиндың асыуын ҡабартыу ихтималлығы булған ҡайһы берәүҙәрҙең ауыҙын ҡаплап ҡуя. Ә. Вәлиди Туған да Төркиәлә хәүефле һәм кәрәге булмаған кешеләрҙең береһенә әүерелә. Сит илдәрҙә йәшәгәндә, Германия, Төркиә йәки башҡа берәй ил булһынмы, Ә. Вәлиди ул илдең эске йәки тышҡы сәйәсәтенә ҡыҫылмаҫҡа, тигән ҡағиҙәне тайпылышһыҙ үтәгән. Әммә эске Рәсәй төркиҙәренең тарихы тураһында һөйләү, яҙыу һәм улар мәнфәғәтен яҡларға тырышыуҙы бер кем дә тыя алмаған. Төркиә дәүләте башлыҡтары фекеренсә, тап ошо тема Советтар Союзының эске эштәренә ҡыҫылыу тип ҡабул ителеп, ике ил араһында мөнәсәбәттәрҙе ҡырҡыулаштырыу ихтималлығы арҡаһында тыйылған эшмәкәрлек һанала. Сталинға ярарға тырышып, Төркиә башлыҡтары хөкүмәттә «һул» ҡарашлы кешеләрҙең йоғонтоһон көсәйтергә тотона. Был, билдәле, коммунистарға ҡаршы мөнәсәбәтен йәшермәгән, нигеҙҙә, йәштәрҙән торған «уң» көстәрҙең ризаһыҙлығын тыуҙыра. Был төркөмдә I төрөк тарихи конгресына тиклем Истамбул университетында Ә. Вәлидиҙең ассистенты булған һәм артабан абруйлы йәмәғәт эшмәкәре, публицистҡа әйләнгән Нихал Атсыз да була. 1944 йылдың майында «уң»дар Анкарала Төркиә хөкүмәтенең коммунистар менән «уйнау»ына ҡаршы протест белдергән демонстрация ойоштора. Ил өсөн был хөкүмәт йортонда йәки Совет илселегендә бомба шартлаған кеүек була. Демонстрацияны ойоштороуҙа ҡатнашыу ихтималлығы булған кешеләр, шул иҫәптән «ваҡиғаларҙың идея юлбашсыһы» Ә. Вәлиди, шунда уҡ ҡулға алына. Уны Төркиә хөкүмәтен бәреп төшөрөргә маташыу кеүек уйҙырмаларҙа ғәйепләйҙәр. Бер һүҙ менән әйткәндә, И. Сталин алдында комедия ойошторалар. Демонстрацияла

*Лир — төрөк аҡсаһы.

ҡатнашыусыларҙың күбеһен бер нисә көндән һуң сығарып ебәрәләр. Ләкин протест белдереүҙә ҡатнашмаған, был ваҡиғаға бер ниндәй ҡағылышы булмаған, ул көндәрҙә Истамбулда үҙ эше менән шөғөлләнгән Ә. Вәлиди менән бер нисә кешене сығарырға йыйынмайҙар. Төрмәлә йыл ярым самаһы тотҡандан һуң ул ун йылға иркенән мәхрүм ителә, әммә, «һалҡын һуғыш» башланыу һәм Төркиәнең АҠШ, Бөйөк Британия, башҡа илдәр «ҡыйыҕы аҫтында» ҡалыуы менән бәйле, ғалимды иреккә сығарып һәм барлыҡ ғәйепләүҙәрҙән дә азат итеп, бер аҙҙан Истамбул университетында эшен дауам итергә рөхсәт бирәләр. Төрмәлә яҡташыбыҙ «Төркиҙәрҙең дөйөм тарихы» һәм бөгөн тарих профессорҙары һәм Төркиә университеттарының тарих факультеттары студенттары өсөн үтә лә ҡиммәтле «Тарих методологияһы» тип аталған китаптарын яҙып бөтөрә.

1948 йылдан 1970 йылда вафат булғанға тиклем Ә. Вәлиди шәхсән фән менән шөғөлләнә, китапханаларҙа һәм китап һаҡлағыстарҙа Көнсығыш халыҡтары тарихы тураһында иҫке сығанаҡтарҙы, ҡулъяҙмаларҙы өйрәнә. Көнсығыш ғилеменә бәйле конференцияларҙа, ғилми симпозиумдарҙа ҡатнаша, йыш ҡына уларҙа рәйеслек итә, Европа һәм АҠШ университеттарында лекциялар уҡый, Көнсығыш тарихын өйрәнеүсе ғалимдар менән хат алыша, уларҙың яуаптарын һәм үҙенең хаттарының ҡараламаларын архивҡа туплай бара. Тере энциклопедик сығанаҡ булараҡ, уға күптәр мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, Европаның йәки Америка һәм Японияның берәй ғалимына китап яҙғанда ҡайһылыр мосолман дәүләтенең китапханаһында ҡулъяҙма рәүешендә генә һаҡланған сығанаҡтан ниндәйҙер мәғлүмәт кәрәк икән (ә уға, мосолман булмаған һәм телде белмәгән кешегә был эште үҙ аллы башҡарыу мөмкин түгел), ғәҙәттә Ә. Вәлидигә мөрәжәғәт итер булғандар. Ҡулынан килгән ярҙамдан бер ҡасан да баш тартмаған ғалим ғәҙәттә ентекле яуап бирә торған булған. Мәшһүр ғалимдың ғүмеренең һуңғы йылдарында төп маҡсаты бер булған: Көнбайыш фәнен донъя тарихында төрки халыҡтар ролен түбән баһалау кеүек етешһеҙлектән арындырыуға булышлыҡ итергә. Быының өсөн төрөк йәштәре араһынан Көнбайыш Европа фәнен һәм мәҙәниәтен, фарсы, ғәрәп, ҡытай, япон телдәрен яҡшы белгән һәләтле ғалимдар әҙерләргә кәрәк. Әлбиттә, бындай киң тармаҡлы һәм ауыр эште ул яңғыҙы атҡарып сыға алмай. Шуға күрә ғалим уҡыусылары араһында берәүҙәр төрки, ғәрәп телдәренән тыш, немец йәки инглиз, француз телдәрен, икенселәре төрки һәм Европа теле менән бергә фарсыны, өсөнсөләре ҡытай, дүртенселәре – япон, бишенселәре рус телен белгәндәрҙе әҙерләй башлай. Был уҡыусылар бергә, бер-береһенә ярҙам итеп эшләргә тейеш була.

Әммә уны университетта бергә эшләгән коллегалары ла аңлап еткермәй. Тура һүҙле Ә. Вәлидиҙең дошмандары ла аҙ булмай, етмәһә, көнләшәләр. Төрөк теленән башҡаны белмәгән коллегаларына ҡарап был сал сәсле ғалим бер генә һүҙ әйтә алған: «Һеҙ белергә теләмәйһегеҙ». Төрөктәрҙең вазифа алдында бил бөгөү, ярамһаҡланыу кеүек сифаттарына ла күнегә алмай яҡташыбыҙ. Мәҫәлән, уның өсөн декан бер ҡасан да Аллаһы Тәғәлә кеүек ҡабул ителмәгән. Декандың эш бүлмәһенә үтә лә ябай ҡиәфәттә килеп инеп: «Кафедра өсөн ошо китаптарҙы һатып алырға кәрәк», – тип әйтә һәм боролоп сығып китә алған. Әлбиттә, профессорҙың был тәртибе декандың ен асыуын сығара торған булған.

Ә. Вәлидиҙе ғүмерендә бер генә тапҡыр күргән кеше лә уны йә китап уҡыусы, йә яҙышып ултырыусы итеп хәтерендә ҡалдырған. Тирә-йүндәге эшһеҙлектән интегеп йөрөгән йәки Көнсығыш халыҡтарына хас оҙон буш һүҙле әңгәмәләр уны сығырынан сығара торған булған. Башҡа төрөктәрҙән ҡырҡа айырылған Ә. Вәлиди тураһында көләмәстәр сығарғандар. Ләкин ғалим булараҡ бөйөклөгө менән бер кем

дә бәхәсләшмәгән. Яҡташыбыҙҙың «Хәтирәләр»ен иғтибар менән уҡыған кеше уның тәрән тойғоларға бирелеүсән, нескә хистәргә лә һәләтле кеше икәнен тоя. Был китап автор үҙе йәшәгән Көнсығышҡа хас, мәҫәлән, «Бабурнамә», классик рус әҙәбиәтенән И. Тургенев, А. Толстой кеүек яҙыусыларға эйәреп, классик һүрәтләү нигеҙенә ҡоролған. Атап үтелгән сығанаҡтарҙың барыһы менән дә Ә. Вәлиди йәштән таныш булған.

Ә. Вәлидиҙең үлеменә күренекле Көнсығыш белгесе Карл Ян былай баһа биргән: «Рустарҙың бөйөк Көнсығыш ғилеме йәшәүҙән туҡтаны. В. В.Бартольдтан һуң яҡты донъянан Ә. Вәлиди Туған да китеп барҙы». Рус Көнсығыш ғилеменең юҡҡа сығыуын раҫлауы менән К. Ян, әлбиттә, хаҡлы түгел. Ә бына уның Ә. Вәлидиҙе, Көнсығыш ғилемендә рустарҙан һәм Рәсәй тарихынан айырып булмаған кешене, рус Көнсығыш тарихы менән тығыҙ бәйләүендә иһә тулыһынса хаҡлы.

Ғалимдың хеҙмәттәре башҡорт халҡында ла мәңгелек һәм абруйлы урынын алды. Ә. Вәлидиҙең «Төркиҙәрҙең дөйөм тарихы», «Төркөстан тарихы», «Тарих методологияһы», «Ибн Фаҙлан юлъяҙмалары» һ.б. китаптары һәм бик күп мәҡәләләре үҙенең Ватанында ла башҡорт һәм рус телдәрендә нәшер ителһә, бынан быуат йәки быуат элек булып үткән ваҡиғалар тураһында төрлө бысраҡ уйҙырмалар яҙыусылар өсөн дә ерлек ҡалмаясаҡ.

Ә. Вәлидигә ялған ғәйеп ташлаусы дошмандар ошоноң менән бергә Башҡортостан Республикаһына, уның Президентына яуыздарса ҡарашын да йәшермәй. Йәнәһе, Башҡортостан Республикаһының 90-сы йылдарҙа иғлан ителгән Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация – ул Вәлидовтың буржуаз милләтселек идеяһының сағылышы булып, республикала сепаратистик кәйефтәр тыуҙырҙы.

«Ҙур энциклопедия» буйынса сепаратизм (латинса «айырым» тигән һүҙ) – икенсе ҙур дәүләт составындағы теге йәки был милләттең (халыҡтың) айырылып сығып, үҙ дәүләтен ҡороуға ынтылышын аңлата. Ләкин 1917–1921 йылғы башҡорт хәрәкәтендә Башҡортостандың Рәсәйҙән айырылыуы хаҡында һүҙ бармаған. Киреһенсә, башҡорттарҙың барлыҡ ҡоролтайҙарында ла һүҙ Рәсәй составында ерле мөхтәриәт ойоштороу һәм уны үҙәктең танырға тейешлеге хаҡында бара. Ысынлап та 1919 йылдың 23 мартында Совет власы Башҡорт автономияһын таный һәм килешеүгә ҡул ҡуя. Тимәк, Ә. Вәлидиҙең сеператизмда ғәйепләү өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙ юҡ.

М. Ғ. Рәхимовҡа килгәндә, ул бер ҡасан да Башҡортостандың Рәсәйҙән айырымланыуы тураһында сығыш яһаманы. Дәүләт сувернитеты тураһындағы декларация, Башҡортостан Республикаһының 1993 йылғы Конституцияһы быны асыҡ күрһәтә. Башҡорт халҡына 70 йыл буйына Ә. Вәлидиҙе дошман итеп күрһәтергә тырыштылар. Әммә халыҡ үҙ улын онотманы, уға ҡарата йылы тойғоларын йөрәк түрендә һаҡланы. Күренекле, донъя күләмендә танылған яҡташыбыҙҙы хурлауға башҡорттар бөгөн дә юл ҡуймаҫ.

Марат ҠОЛШӘРИПОВ,
тарих фәндәре докторы, профессор;
Әмир ЮЛДАШБАЕВ,
философия фәндәре кандидаты.

Әҙәби-мәҙәни мөхит

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев етәкселегендә бер төркөм әҙиптәр: Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттары Хәсән Назар, Таңсулпан Ғарипова, «Шоңҡар» журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев, «Йәшлек» гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары Мөнир Ҡунафин, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡова Илеш районы клубтарында, мәктәптәрҙә, лицейҙа, китапханаларҙа – йәмғеһе 13 нөктәлә Башҡорт әҙәбиәте көндәренә арналған осрашыуҙар уҙғарҙы. Улар менән бергә кисәләрҙе илештәрҙең һүҙ һәм сәнғәт оҫталары ла йәмләне. Мәртәбәле делегацияны район хакимиәте башлығы Илдар Мостафин ҡабул итте.

***

Туймазы ҡалаһы һәм районында үткән Башҡорт әҙәбиәте көндәрендә Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, шағир Ҡәҙим Аралбай, шағирҙар: Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Ирек Кинйәбулатов, Таңһылыу Ҡарамышева, Рәмил Йәнбәк, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Әхмәҙин Әфтәх ҡатнашты. 4-се һәм 7-се урта мәктәптәрҙә, 4-се ҡала китапханаһында, Собханғол ҡасабаһында әҙәби кисәләр уҙғарылды. Улар-ҙа урындағы шағир Фәтих Сафран да сығыш яһаны.

Иртәгеһенә әҙиптәрҙе Туймазы район хакимиәте башлығы Р.Х. Хәйруллин ҡабул итте. Артабан осрашыуҙар педагогия, юридик колледждарҙа, гимназияларҙа, Туҡтағол, Түбәнге Троицк ауылдарында булды.

***

Матбуғатҡа яҙылыу мәсьәләләренә бәйле, прозаик Сабир Шәрипов менән шағир, әҙәби тәнҡитсе Фәнил Күзбәков Балтас, Бөрө райондарында уҡытыусылар, китапхана хеҙмәткәрҙәре, әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыуҙар үткәрҙе. Бөрөлә райондың милли мәғариф бүлеге мөдире В.Х. Әфтәхова, Балтаста мәғариф методисы Р.Р. Камаева ойошторған йыйында көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүҙә матбуғаттың ролен уҡытыусылар, яҡшы аңлауҙарын белдереп, «Ағиҙел» журналына әүҙем яҙыласаҡтарына ышандырҙы. Һөйләшеүҙә һорауҙар бирелде, баҫманы уҡымлыраҡ итеү йәһәтенән кәңәштәр әйтелде.

***

ЮНЕСКО эштәре буйынса БР комитеты һәм «Скиф» нәшриәте рус һәм инглиз телдәрендә Башҡортостан Республикаһы буйынса белешмә сығарҙы.

Республика, уның кешеләре, тәбиғәте һәм йолалары менән яҡынданыраҡ танышырға теләүсе туристарға, эшлекле кешеләргә тәғәйенләнгән беренсе белешмә был. График материалдар, фотоэштәр, карталар һәм схемалар менән байытылған 260 битлек баҫмала республика райондары, ҡалалары, иң йәмле урындарҙың координаталары һәм һүрәтләмәләре, район-ҡала тарихтарынан иң ҡыҙыҡлы фактар, ҡунаҡханалар, туристик базалар адрестары, телефондары һәм башҡа мәғлүмәттәр бар.

***

Хөкүмәт йортонда әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә 2009 йыл өсөн Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаттары тәбрикләнде. Тантанала БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев, уның урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министры Александр Никерин, министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре, премия буйынса комиссия ағзалары ҡатнашты.

Премия А. Приставкиндың «Ночевала тучка золотая» спектаклендә төп ролде башҡарған М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Андрей Ганичевҡа,

заманса башҡорт скульптураһы традицияларын сағылдырған «Көҙ», «Елгә ҡаршы», «Кәрим» һәм башҡа эштәре өсөн скульптор Руслан Ниғмәтуллинға, Ҡ. Дәүләтҡилдеев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназияһы проекты өсөн «Башкиргражданпроект» институтының йәш архитекторҙары Рөстәм Ямалетдинов, Павел Мазинға тапшырылды.

***

Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле бинаһында музей асылды. Унда Фәйзи Ғәскәровтың тормошон һәм ижад юлын, ойошторолғандан алып ансамблдең шанлы эшмәкәрлеген күҙалларға мөмкин. Шул уҡ тантанала Алла Докучаеваның ансамбль тураһындағы артистарҙың иҫтәлектәре, архив материалдары нигеҙендә яҙылған «Созвездие талантов» исемле китабының исем туйы ла үтте. БР мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры урынбаҫары Зинфира Әбделмәнова артистарға министрлыҡтың Маҡтау грамоталарын тапшырҙы. Сара аҙағында матур концерт күрһәтелде.

***

З. Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың “История башкир” исемле хеҙмәте донъя күрҙе. Башҡорт телендә ул тәүләп “Ағиҙел” журналында баҫылғайны, ә 1994, 2005 йылдарҙа китап булып сыҡты. Быныһын да төрөксәнән руссаға тәржемә итеүҙә йәмәғәт эшмәкәре һәм ғалим Әмир Юлдашбаев күп көс һалған. Нәширҙәр әйтеүенсә, яңы китап – мәшһүр тәнҡитсе һәм Башҡорт автономиялы республикаһын ойоштороусы Ә. Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға бик бәҫле бүләк ул.

***

Өфөлә төрки йәштәренең «Урал моңо -2010» XV халыҡ-ара музыка ижады конкурс-фестивале үтте. Республика йылына һәм III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған сараны «Төрксой» халыҡ-ара төрки мәҙәниәт ойошмаһы, РФ Мәҙәниәт министрлығы, БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, «Башҡортостан» дәүләт телерадиокомпанияһы, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы, Өфө ҡалаһы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы һәм Башҡорт йәштәре иттифағы ойошторҙо. Конкурста Ҡаҙағстан, Тыва, Татарстан, Хакасия, Ҡырым, Чечен, Алтай, Дағстан, Саха (Яҡут), Ҡарасәй-Черкес, Ставрополь тарафтарынан 21 башҡарыусы һәм ижади коллектив ҡатнашты. Бәйге Гран-прийын Ҡырым автономиялы республикаһының (Украина) «Бельбек» ансамбле алһа, I урынды Ҡаҙағстандан Бекзат Оспанов менән Саха (Яҡут) республикаһынан Юлиана Кривошапкина, II урынды Тыванан Айдемир Сингл һәм Ҡаҙағстандан Жадыра Арыстанова, III урынды Хакасиянан Наталья Албычакова менән Башҡортостандан Гөлнур Ҡарабулатова бүлеште.

***

Истамбулдан һөйөнсө килде: Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшевҡа «Әхмәтзәки Вәлиди Туған» спектаклендә Ататөрк роле өсөн Исмәт Көнтәй исемендәге милли премия бирелде.

Өфөгә ебәргән хатында театр белгесе Хаяти Асылазыджи былай тигән: «Билдәле төрөк яҙыусыһы һәм драматургы Исмәт Көнтәй исемендәге премияны бына инде 35 йыл дауамында төрөк театр донъяһының иң яҡшы вәкилдәренә тапшырабыҙ. Быйыл премия 13 номинацияла тәҡдим ителде һәм тәүге тапҡыр сит ил вәкиленә бирелде. Мин Хөрмәтулла Үтәшевтың ижадын күптән күҙәтеп барам һәм уны бөгөн иң күренекле артистарҙың береһе тип иҫәпләйем».

***

Учалы яҙыусылар ойошмаһының отчет-һайлау йыйылышында ойошма сәркәтибе вазифаһына шағир Эдгар Вилданов һайланды.